Рамазан
ӨМӨТБАЕВ

# Һыуыҡтан эйелә күлгән





Рамазан
ӨМӨТБАЕВ

# Ысыктан эйелә кылган

Роман

ӨФӨ
«КИТАП»
1993

ББК 84 Баш
Ө 56

**Өмөтбаев Рамазан**

Ө 56 Ысыҡтан эйелә ҡылған: Роман. — Өфө: «Ҡитап», 1993. — 384 бит.
ISBN 5-295-01060-0

Ҡитапты ҡулына тәүге алған уҡыусының башында: «Ошондай ҡатмарлы заманда, бәғзеләр йәмғиәтебеҙҙең үткәнен тыҡрыҡ һайын һүккән ваҡытта, нишләп әле автор «ҡәһәрле» дәүерҙе хикәйәләмәк булған?» тигән һорау тыуыуы мөмкин. Уҙған йылдарға нисек кенә ҡарамайыҡ — ул беҙҙең тарих, оло ҡыйынлыҡтар, ҙур ҡорбандар аша беҙ артылған үрҙәр. Уны һис тә оло йылъяҙманан юйып ташлай алмайбыҙ. Мәгәр был әҫәрҙә лә бармаҡ осонан һурып сығарылған хәл-ваҡиғалар юҡ — барыһын да беҙҙең ата-бабаларыбыҙ кисергән, үҙ баштарынан үткәргән.

Ө $\frac{4702110100-16}{М\ 121(03)-93}$ 39—93 ББК 84 Баш

ISBN 5-295-01060-0 © Өмөтбаев Рамазан, 1993

## *Беренсе бүлек*

### 1

Меҙ туғыҙ йөҙ егерме икенсе йыл баштары. Үтә сасҡау көн. Аслыҡҡа интеккән Ялан ауылын яртылаш көрт баҫҡан. Урамда, гүйә, гүр тынлығы: йөҙ йортло ауылдың дүрт-биш өйө генә төтөн сығара.

Коро аҡ ҡарҙы шығырлатып иҙә-иҙә, үргә, сельсовет ығына, оҙон шинель кейгән бер мыҡты егет атлай. Граждандар һуғышынан кисә генә тыуған ауылына ҡайтҡан Абдрахман Игебаев ул.

Сельсовет бөтә ғаиләһе астан ҡырылған бер байғоштоң кәртә-ҡураһы һүтеп яғылған лапаҡ өйөндә урынлашҡан. Ғәҙәттә, ауылда сит кеше күренһә, һырт йөнөн ҡабартып абалап сыҡҡан үрге яҡтың эттәре лә шымып ҡалған. Хәйер, күп эт-бесәй ноябрь—декабрь айҙарында үҙ хужаларынан байтаҡҡа элегерәк, 1921 йылғы аслыҡтың ҡорбандары булды.

Игебаев соланһыҙ ишеге тыштан кейеҙ менән көпләнгән өйгә ингәс, һалҡын ишек тотҡаһына йәбешеп, байтаҡ ситырап торҙо. Буй стеналарға һөйәп ултыртылған ике эскәмйә, ҡаҡ өҫтәл, уның артында председатель бүкәне, «Вся власть Советам!» тип ҡыҙыл әләмгә аҡ хәрефтәр менән яҙылған берҙән-бер лозунг. Тыштан ике тәҙрәһен яртылаш көрт баҫып киткән һыуыҡ йорт эсендә ярым ҡараңгы. Өҫтәл артында тышһыҙ бүрек, өҫтөнә тун кейгән тире бейәләйҙәрен һалмай ултырған әҙәм урынында ҡуҙғалып ҡуйҙы. Игебаев уға сәләм бирҙе.

— Йә, Абдрахман ҡустым, килдеңме? — тине рәйес, көслөк менән һыңар күҙен асып. Был ул замандарҙа ауылда берҙән-бер тигәндәй урыҫса таныған Аласов Ғәлиәкбәр ине.

— Саҡырғас ни, килдем. Ни хәл итәһең.

— Бына шулай, мырҙам, саҡырырға тура килде. Йомош-юлға йөрөрлөк, мейес яғырға ла кеше табып булмай, — тип күптән ағартылмаған, ингән берәү арҡаһы менән ышҡып ала-сола итеп бөткән мейескә ҡараны. — Бик ауыр йәшәйбеҙ, мырҙа. Халыҡ астан ҡырыла, ләкин үлектәрҙе йыйырға, тәрбиәләп күмергә лә ҡарыулы әҙәм юҡ.— Ғәлиәкбәр ағай турайып ултырҙы.

— Бына, Абдрахман мырҙа, кисә ошо пырказды волостан алып килделәр. Уҡып ҡара әле шуны. Бер ҙә осона сыға алманым, — тип өҫтәл аҫтынан сығарып бер конверт һуҙҙы. Абдрахман ҡарап сыҡты ла:

— Бында, Ғәлиәкбәр ағай, волостарҙа халыҡ араһында ваба, ҡыҙылса һәм сәсәк ауырыуҙары киң таралыу сәбәпле, шуға ҡаршы көрәшеү маҡсатында уҡый-яҙа белгән берәй кешене 5-се Бөрйән волосына айлыҡ курсҡа ебәрергә ҡушҡандар, — тине.

— Мырҙа! Шул кеше бына һин үҙең!

— Нисек инде — мин? Мин өс йыл һуғышта йөрөп, кисә генә ҡайтып төштөм. Атай менән әсәй ҙә өйҙә ҡаҙы-ял ашап ятмай, улар ҙа ас. Ҡәртәләрендә берҙән-бер быуаҙ һыйырҙары йығылырға тора.

— Ҡыш өҫтөнән әллә бесән сапмаҡсыһыңмы?

— Сабыуын сапмам, ләкин хәҙер ҡайтам да һарай башын ҡутарам. Бер һыйырҙы ҡара ергә баҫтырырлыҡ ҡына корма алырмын әле.

— Улай булғас, нишләп ҡарайбыҙ?

— Уныһы инде, ағай, минең эшем түгел. — Абдрахман урынынан торҙо.

— Туҡта, туҡта әле, мырҙа. Сабыт ит. Һин дә, атайың һымаҡ, бик ҡыҙыу, үҙ һүҙле булмаҡсы икәнһең! Совет власы миңә генә хәжәттер... — Сельсоветтың бер кемгә төбәмәй әйткән был һүҙҙәре Абдрахмандың йөрәгенә энә булып ҡаҙалды.

— Әләйһә, китмәй булмаҫ, үҙебеҙ янъялға килеп һуғышып алған власть бит. Ләкин, ағай, мин бөгөн үк юл сыға алмайым. Мин ҡайтыуға бында ҡайғы-хәсрәт тауҙай өйөлөп торған бит. Йорт емерек, кәртә-ҡураны яғып бөткәндәр, туҡал һыйыр соланда ас тора.

— Уныһы икебеҙҙә лә шул бер фурмы инде. Ярай әле атаң яңғыҙ һыйырын ошо көнгә тиклем аҫрап еткергән. Башҡа әҙәмдә мал-тыуар ҡалманы. Бөтәһен дә йот ялманы. Атаң-әсәң хаҡында бик ҡайғырма. Волостан ҡағыҙ алдыҡ: ас халыҡҡа ун биш көндән столовой асылырға тейеш. Әмерек ярҙам итә тиҙәр. Бына шуға ҡәҙәр өҙөлөп-ялғанып йәшәй алһалар, аръяғында бирешмәҫтәр.

Белемдәре төплөрәк йәштәрҙе — бер төркөмгә, бер-ике ҡышлыҡ ысул йәдит кенә уҡыған кешеләрҙе икенсе төркөмгә айырҙылар ҙа курсты башлап ебәрҙеләр. Беренсе төркөмдә — вабаға, ә икенсеһендә сәсәк, ҡыҙылса айырыуҙарына ҡаршы көрәш өйрәтелергә тейеш. Абдрахман икенсе төркөмгә эләкте.

Өҫтөнә аҡ ҡар һымаҡ халат, башына түңкәрелгән һалдат котелогы кеүек ҡалпаҡ кейгән мыҡты кәүҙәле, мыйыҡтары тырпайған, шырт һаҡалы түңәрәкләп ҡырҡылған земство врачы тәүге һабаҡта:

— Бына башҡа мәмләкәттәрҙә ҡыҙылса, сәсәк ауырыуҙарына ҡаршы уйлап табылған вакцина менән ваҡытында энә ҡаҙау кешеләрҙе ошо ғазаплы ауырыуҙарҙан ҡотҡара. Ул ғына ла түгел, йөҙө быжырланмай, тыуғанда нисек булһа, шул көйөнсә ҡартайғансы, ғүмере буйы матур һаҡлана, — тигәйне.

Был һүҙҙәрҙе ишеткән Абдрахман усы менән битендә, маңлайында бала саҡтан ҡалған шаҙраһын һыйпап ҡуйҙы.

— Бына мин ҡарап торам, һеҙҙең арағыҙҙа ла шаҙралар байтаҡ. Бына был ваҡытында шул вакцина менән энә ҡаҙамау нәтижәһе.

— Белгәндән ни хәйер? Кемдән ҡаҙатаһың уны?

— Беҙҙә ни шул мулланың өшкөрөм-төкөрмәнән башҡа ни сара?!

— Ярай, егеттәр. Шауламайынса ғына тыңлайыҡ әле!

Курсты яртылағас, энә менән ҡаҙау практикаһы башланды. Земствоның баш врачы үҙе артынан волость балалар йортоноң ике етем балаһын, сестраны эйәртеп, курс барған бүлмәгә килеп инде. Ул халаты өҫтөнә кейгән тунын сисеп, сәңкеп өшөгән ҡулдарына өрөп, ҡобаралары осҡан ябыҡ ике малайға өҫ кейемдәрен һалырға ҡушты. Малайҙарға ялан күлдәксән иҙән уртаһында оҙон парта артында тамаша ҡылып ултырған йәш кешеләргә әйләнеп торорға ҡушылды. Ҡурҡыуҙарынан, күрәһең, түп-түңәрәк күҙҙәре менән бүрәнәләре ярылып-һарғайып бөткән стенаға төбәлгән ике малай танауҙарын мырш-мырш тартып, уларға ҡараше. Береһе, төшөп барған ыштанын тотоп торорға ҡушылды. Ҡурҡыуҙарынан, күрәһең, түп-түңәрәк тәр тынлыҡ баҫты. «Был энәһен нисек ҡаҙайҙар икән? Әллә ат янбашына һуҡҡан тамға кеүек энәне лә, ҡыҙҙырып, кеше тәненә баҫалармы икән?» Ыштанын күтәреп торған малай бөтә тәнен ҡалтыратып һыҡтай башлағас, баштарын аҫҡа баҫып, күҙ йәштәрен йәшереп ултырған бер нисә курсант ҡыҙ ҙа иларға кереште. Ҡапыл аптырашта ҡалған врач, йөнтәҫ ҡаштарын өҫкә сөйөп:

— Һе! Нимә? Бөтәгеҙ ҙә олой башланығыҙ!? Мин бит

бында һеҙҙе яза өсөн йыймаған! Бына, ҡарап тороғоҙ, — тип һөйләнә-һөйләнә үҙе сисенә башланы. Уның буй-буй төшкән пинжәгенең ялтырап торған ҡара шыма эслеген күреп: «Былай ҙа тышы буҫтау кәзәкейгә ниндәй эс тегеп ҡуйғандар!» — тип уйлап алды сей һарыҡ тиреһенән тегелгән салбар кейеп ултырған егет.

Докторҙың ҡапыл сисенеүенең сәбәбен аңламай ҡатып ҡалған шәфҡәт туташы:

— Һеҙ нимә эшләйһегеҙ, Аполлинарий Христофорович? — тип һораны.

Ә теге уға яуап урынына арҡаһын ғына ҡуйҙы ла латинса әмер бирҙе. Туташ өҫтәлдәге ҡапҡасына ҡыҙыл тәре төшкән ҡумтаһын асты ла ҡулын еүеш мамыҡ менән ышҡый башланы. Бүлмә эсендә ҡырҡыу еҫ аңҡыны. Уколдың да, спирттың да ни икәнен Екатеринбургта лазаретта ятып сыҡҡан Абдрахман белә-белеүгә.

Шәфҡәт туташы класҡа арҡаһы менән торған докторҙың ҡалаҡ һөйәге аҫтына шприц ҡаҙаны.

Аҙаҡ, энәне һурғас, сәнскән урынын мамыҡ менән һөрттө лә:

— Укол бына ошо була! Күрҙегеҙ бит, доктор үлмәне, — тине күңелле генә.

Сестра һүҙенә ҡолаҡ та һалмай кейенеп өлгөргән доктор:

— Миңә Маргарита холераға ҡаршы, то есть, по-башкирски ваба, что ли зовется, укол ҡаҙаны. Һеҙҙең барығыҙға ла ул ауырыу йоҡҡан саҡта, миңә бер ни ҙә булмаясаҡ. Сөнки ул ауырыуға ҡаршы минең организмда иммунитет барлыҡҡа килә. Ябай тел менән әйткәндә, ана шул холераны үҙеңә тейҙермәй һәм халыҡҡа таратмай торған көс хасил була. Йәгеҙ, үҙе теләп укол һалдырыусылар бармы? — тип класҡа ҡараны. Шымып ҡалған класта укол теләүсе табылмағас, түшенә өс ҡыҙыл юлаҡ тегелгән шинелен парта өҫтөнә сисеп ырғытты ла Абдрахман:

— Һин бында нимә илап тораһың? Үҙең кәләш алып бирерлек егетһең?! — тине илаҡ малайға. Теге малай ҡурҡышынан упайған күҙҙәре менән бер докторға, бер Абдрахманға ҡарап ашыҡмай ғына кейенә башланы. Доктор ишеккә ымлағас, малайҙар артына ҡарай-ҡарай бүлмәнән сығып тайҙы.

Арҡаһы менән егет сестра алдына баҫты. Бөтә кеше хайран ҡалып Абдрахманға һораулы ҡараштарын төбәне. Ҡайһы берәүҙәре энә ҡаҙағанда Абдрахмандың: «Әлеүкәй, ауырттыраһың!» тип ҡысҡырыуын көттө. Ләкин ул күҙен сырт та йомманы, шинелен кейҙе лә, билен ҡайыш менән быуып, урынына барып ултырҙы Класс:

— Вәт әй! Сытайманы ла!

— Бигерәк үгеҙ тиреле икән! Тәне беше, «ыһ» та итмәне!

— Эй! Уға ҡаҙаманылар ул, энәнең осон тигеҙеп кенә алдылар, — тип курсанттар бер ғауғалашып алды. Абдрахман артына әйләнеп:

— Энәнең осон ғына тигеҙһәләр, сисенегеҙ ҙә, ана теге һылыу ҡыҙ алдына арҡағыҙҙы ҡуйығыҙ. Ул нишләргә белер, — тип, тигеҙ аҡ тештәрен күрһәтеп көләп ҡуйҙы. Тап шул мәлдә энәһенә шыйыҡса тултырып маташҡан сестраның осҡонло күҙҙәре Абдрахмандың ҡарашы менән осрашты. Абдрахманға эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Үҙенең оҫәрләнеүен, эске тулҡынланыуын бар хәленсә ауыҙлыҡларға тырышты. Сестра ла энәһенә шыйыҡса һурҙырып ала алмай бармаҡтары ҡалтыранды. Был хәлде ситтән генә хайран ҡалып күҙәтеп торған доктор:

— Һеҙ нимә, Рита? Әллә һеҙгә берәр ғилләә ҡағылдымы? Һеҙҙең бөтә тәнегеҙ ҡалтырай, әллә ваба менән көрәшә торғас, үҙегеҙ шунын менән сирләп киттегеҙме? — тине лә үҙенең киң йомшаҡ устары менән ҡыҙҙың маңлайын баҫып ҡараны.

— Ысынлап та, һеҙҙең температурағыҙ күтәрелгән. Марш больницаға! Дарыу эсегеҙ ҙә бер аҙ ятып тороғоҙ! Бына һиңә, берҙән-бер сестрамдан яҙһам, нишләргә тейеш? — тип ауыҙ эсенән генә мығырлап, сестраның тунын кейҙерешә лә уны ишеккә тиклем оҙатып ҡуйҙы.

Инде еңдәрен төргән доктор исемлек буйынса уҡыусыларын берәм-берәм уколға үҙе саҡыра башланы.

— Арағыҙҙа ҡурҡаҡтар бар икән, иң аҙаҡҡа ҡалғандарға энәнең иң оҙонон, иң йыуанын ҡаҙайым, — тип ҡул сумкаһынан бер ялтыр тимер бырау сығарып күрһәтте.

Кемдер: «Давай, егеттәр, духтыр ул бырауы менән тишкеләй башлағансы, нәҙегерәк энәһен ҡаҙатып ҡалайыҡ», тип ҡысҡырҙы. Егеттәр үҙ сәкмәндәрен, тиртундарын партаға сисеп һалып, доктор алдына баҫа торҙо. Ҡайһы берәүҙәре, эш үткәс, маҡтанышҡан булды:

— Бушҡа ғына шөрләгәнбеҙ, уның энәһенә ҡарағанда һыҫкеш нығыраҡ саға.

Укол ҡаҙауҙы тамамлағас, доктор:

— Вәт, ниндәй молодец егеттәр булып сыҡтығыҙ. Инде ваба һеҙҙе бер саҡрымдан урап үтәсәк. Тиҙҙән үҙегеҙ ҙә кешеләрҙе дауалай башлаясаҡһығыҙ.

— Беҙгә ҡаҙанығыҙ бит инде!

— Ҡаҙаһа һуң, волоста кеше бөтмәгән. Йөрөй алған кешегә иртәнсәк волость идараһына йыйылырға ҡушылған. Бына шунда һеҙ үҙегеҙ бөтә кешегә укол һалып сы-

ғырға тейешһегеҙ. Беренсе уколды Абдрахман Игебаев иптәш һалырға тейеш.

Үҙенең исем-фамилияһын ишеткәс, Абдрахман тертләп ҡуйҙы. Унын бөтә донъяһын, уй-хисен Маргаританың матур тышҡы ҡиәфәте, алһыуланып янған соҡорло ике бите, зәп-зәңгәр ҙур күҙҙәренең серле ҡарашы солғап алғайны. Хыялый ҡарашын ҡайҙалыр алысҡа төбәгән Абдрахманға доктор:

— Голубчик Игебаев! Һеҙ минең ни һөйләгәнде әллә төшөнмәнегеҙ инде? Эште иртәгә һеҙҙән башлайбыҙ бит! — тип ҡабатланы.

— Так точно! Доктор, мин аңлай алмай ҡалдым, — тип, Абдрахман аяҡ үрә баҫты.

— Һеҙҙе иртәгә Маргарита ассистировать итер, йәғни, башта һеҙгә ярҙам итер, өйрәтеп торор.

Быны ишеткәс, Абдрахман бөтөнләй ҡойолоп төштө, ҡылыс ҡыйғанда башын йәшергән һалдат кеүек түңәрәк башын йәшерҙе лә сүгеп ҡалғандай булды.

## 2

Билдәле, егерменән үтеп, граждандар һуғышының ҡанлы даръяһын гиҙеп, яраланып лазареттарҙа аунаған һалдаттың ҡатын-ҡыҙҙар менән электән дә осрашҡаны бар ине. Ләкин ул икенсе хәлдә, йә һөжүм иткәндә, йә дошмандан ҡасып килгәндә фатир ҡуныл, тол ҡалған, иргә сарсаған ҡатын-ҡыҙҙар ҡосағынан ары китә алғаны юҡ ине. Төндә килеп төшәһең, таң һарыһынан тағы китәһең, төндә ҡылған гонаһтарың өсөн битеңдең ҡыҙарғанын бер кем дә күрмәй. Һинең выжданың үҙ-үҙеңде ҡарғап, яфаланғанын берәү ҙә белмәй. Ундай хәлдәр бик йыш булмаһа ла, юҡ-юҡта осрап торғас, уға бер кемдең дә иҫе китмәй. Бөгөн тереһең — иртәгә үләһең, кем белә?! Тик ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа ялға туҡтағанда, ҡайһы бер шардыуан, дуңғырлаҡ һалдаттар үткән төндә үҙҙәренә тән ләззәте бүләк итеп дәртен ҡанатландырған бисәләрҙе маҡтай:

— Ну, малай, осраным бит кисә бер ханымға. Ҡосағында һығып үлтерә тип торам! Бөтә ғәйрәтемде һурып алып ҡалды. Бына бөгөн винтовка йөрөтөрлөк тә ҡарыу ҡалмаған.

— Минең төшкән фатирҙа бер ҡыҙ осраны. Һөйгән егете Колчакта хеҙмәт итеп ғәйеп булған. Ошо ҡәһәрле һуғыш бөткәс тә икенсе көнөнә килеп, ауылыма алып ҡайтып китәм. Шулай вәғәҙә ҡуйыштыҡ.

Ошондайыраҡ хәлдәр ҡыҙылармеецтар араһында булып ала. Ләкин Абдрахман өндәшмәй, ундай ваҡыттарҙа мылтығының штыгы менән ер соҡой башлай, уны төндә ҡара дегеткә буялған выжданы язалай торғайны. Ә Маргарита менән бөтөнләй икенсе эш! Ул уға ундай вәхшилек эшләү түгел, уның күҙенә тура ҡарарға ла баҙнат итә алмай.

— Егеттәр, марш! Һеҙҙең эшегеҙ бөттө. Хәҙер класта тик ҡыҙҙар ғына тороп ҡала.

Ҡайһы бер шуғыраҡ егеттәр:

— Нимә, сәүит власы ҡатын-ҡыҙҙарҙы ирҙәр менән тигеҙләне лә инде, һеҙ нишләп уларҙы айырып ҡарайһығыҙ? — тип мәрәкәләп класта ҡалырға ла уйлағайны, ләкин доктор уларҙы бик ҡоро тотто. Коридорға сыҡҡан егеттәр:

— Әй, уларҙың ҡайһы еренә ҡаҙайҙар икән?

— Шул арҡаһыналыр инде! Башҡа тағы ҡайһы ере булаһын!

— Уларҙы ла сисендерәләр микән?

...Класта ултырып ҡалған ҡыҙҙарҙың иң башта олораҡын, урыҫса әҙ-мәҙ һуҡалаған Бәҙернисаны саҡырҙылар. Бишмәтен һалды ла ул бер нисә ялпылдаҡлы, әберсәле күлдәге менән доктор алдына килеп баҫты. Уның сигелгән түшелдерегенә ҡарап, доктор:

— Был ни өсөн эшләнгән? — тип һораны.

— Это женский карман. Туда всякий шурум-бурум кладем.

Доктор «аңланым» тип башын һелкте.

— Йә, хәҙер инде арҡағыҙ менән баҫығыҙ. Күрҙегеҙ бит егеттәр нисек эшләгәнен, һеҙ ҙә шулай эшләгеҙ.

Ни тиклем йөрәкле булһа ла, Бәҙерниса итәген күтәреүҙән ҡырҡа баш тартты.

— Это большой грех! И мулла, и алла бьют за это, — тип сеңкөлдәне.

— Көпә-көндөҙ оялмай ят ир кеше алдында итәк күтәреп тормаға бында әллә алйот бармы? Мәрйәләренең итәген күтәртеп өйрәнгән дә... Аҡылың алтын икән! — Ҡатынҡыҙ шул рәүешле шау-гөр килеп алды. Бәҙерниса, ирендәрен ҡымтып, киң итәктәре менән, бала биләгән һымаҡ, үҙенең кәүҙәһен уратып, ҡулы менән матҡып тотто ла бөтөн ыҫҡындырманы. Шулай врач алдында бер аҙ баҫып торғандан һуң итәктәрен тағатып, дағалы итеге менән иҙәнгә шаҡ-шоҡ баҫып, үҙ урынына ынғайланы.

Врач ултырғысына «лап» итеп барып ултырҙы ла уйға сумды. «Ысынлап та, электән ҡалған ҡырағайлыҡҡа, ҡараңғылыҡҡа ҡаршы күпме көрәшәһе, күпме көс түгәһе бар

әле». Хәҙер инде ул бер кемде лә өгөтләп маташманы. Көтөп ултырырға ҡушты ла йәһәт кенә кейенеп сығып китте. Бер аҙҙан, үҙе кеүек аҡ халат кейгән икенсе бер ҡатынды эйәртеп кире килеп инде.

— Бына хәҙер мин сығып китәм. Бына ошо докторҙан укол һалдырыуығыҙҙы һорайым, — тине.

Доктор тиклем докторҙан өҫкә сығып, класта тороп ҡалған ҡыҙҙар сыр-сыу килеп укол яһатты.

Кластағы был ваҡиға земство докторының башында икенсе яңы фекер тыуҙырҙы. «Тимәк, волость үҙәгендә ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәр алдында тәнен күрһәтергә баҙнат итмәгәс, башҡорт ауылдарында был турала һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел, уларҙы ауыл Советтары бинаһына айырым-айырым йыйырға тура киләсәк». Врач бынан тыш икенсе һығымтаға килде. «Ауылдарға китә торған был санотряд кешеләрен, элек уйлағанса, берәмләп түгел, ә икешәрләп — бер ир, бер ҡатын-ҡыҙ составында ебәрергә кәрәк буласаҡ».

Егерме кешелек ирҙәр ятағына әкрен генә яңғыҙы атлаған Абдрахман булып үткән бөгөнгө бөтә ваҡиғаларҙы күҙ алдынан үткәрҙе. Ләкин, нимә генә уйламаһын, ҡулына энә тотоп, үҙенең килешле буй-һыны, түңәрәк күлдәй зәңгәр күҙе менән Маргарита алдына килеп баҫты. Уның йылмайғанда күренеп ҡалған ваҡ ҡына ынйы шикелле тигеҙ тештәре, соҡорланған ике бите, матур балтырҙарын ҡыҫып торған аҡ быймаһы — барыһы, барыһы ла, хатта башына кейгән ҡыҙыл береткаһы ла, уның ситтәренән төрмәсләнеп ике сикәһенә төшкән һары сәс өйкөмө һуҡыр кеше кеүек ҡышҡы һуҡмаҡтан әләгә-йығыла барған Абдрахмандың күҙ алдынан китмәне.

Көндәге кеүек, шыйыҡ ҡына кәбеҫтә ашынан һуң түңәрәкләп ултырып әңгәмә ҡороуҙар ҙа ҡыҙыҡһындырманы уны бөгөн. Тиҙ генә ашаны ла һалам тултырылған түшәгенә сисенмәйенсә һуҙылып ятты. «Был ни хәл? Мин нишләнем? Нимәгә ебеп төштөм һуң әле мин был урыҫ ҡыҙы алдында? Бәлки, уның үҙенең һөйәркәһе барҙыр? Нисек белергә, кемдән һорашырға?»

Иртәнсәк таң һарыһынан тороп, урамға сыҡты. Волость идараһына барыр ваҡытты көттө. Маргарита менән буласаҡ осрашыу уны берҙәй ҡыуандырҙы, берҙәй ҡурҡытты.

Бына ул аҫҡы ҡатында таш магазин келәттәр ә өҫтөндә, икенсе ағас ҡатында, волость идаралығы урынлашҡан бинаға килеп етте. Өҫкә күтәрелеп, ишекте асыу менән жакетын сисеп, аҡ халат кейеп маташҡан, һыуыҡтан биттәре бешкән алма кеүек ҡыҙарған Маргаританы күрҙе. Үҙен күпме генә ҡулға алырға тырышһа ла, ҡапыл тағы

каушап төштө. Уның ҡарауы, Рита бигүк ҡурҡаҡ ҡыҙ булып сыҡманы. Йомшаҡ ҡулдарын Абдархманға һуҙып:

— Һаумы, Драхман? — тип үҙе килеп күреште лә киң йылмайып ҡуйҙы. Абдрахмандың бөтөнләй төлһеҙ ҡалыуын күреп:

— Әллә, Абдрахман, ауырып киттеңме? Нишләп сәләм бирмәйһең? Әллә нишләп ҡобараң да осҡан, — тип үҙтелендә һайраны.

Маргарита егеттең ҡулдарын яңынан үҙенең йомшаҡ усында оҙаҡ ҡына тотоп торҙо ла:

— Давай, температураңды үлсәп ҡарайыҡ, — тип, һаңлығына үрелде.

Бөтә көсөн йыйып:

— Кәрәкмәй, миндә температура юҡ, — тине Абдрахман. Ә ысынында үҙенең төнөнөң ҡыҙыу икәнен ул үҙе лә тоя ине. Маргаританың йомшаҡ наҙлы ҡулдарының эҫеһе уның бөтә булмышын ялмап алғайны. Маргарита уға ҡаш һикертеп, түңәрәк күҙҙәре менән серле ҡараны ла, һис бер аптырап тормайынса:

— Бәлки, һинә мөхәббәт шауҡымы тейгәндер? — тине, көләмһерәп.

— Әллә, бәлки...

Шулай итеп, тик торғанда ут-һыу гиҙгән батыр Абдрахман үҙ мөхәббәтенең әсиренә әйләнде.

— Ничево, бөтәһе лә үтеп китер. Мөхәббәттең, шарлап аҡҡан йылға һымаҡ, ғүмере бик ҡыҫҡа була ул. Бына бөгөн мин һине бер аҙым, бер ҡайҙа ла ебәрмәй ошонда көн буйы тотһам, ул мөхәббәтең әҙерәк һүрелә төшөр. — Маргарита хәйләле генә итеп тағы йылмайып ҡуйҙы.

«Был ахмаҡ! Ул мөхәббәт сиренең үҙенән йоҡҡанын аңламаймы икән ни? Быны нисек аңлатырға? Юҡ, һис кенә лә һыр бирмәҫкә кәрәк, бәлки, был башҡа тейгән еҫ, ысынлап та, үтеп тә китер әле».

Бына ҡулына исемлек тотҡан волость писары аҡ халат кейгән доктор менән икенсе ҡаттың балконына баҫып, ихатаға йыйылған халыҡҡа мөрәжәғәт итте:

— Ағай-эне! Туғандар! Үҙегеҙ ил хәлен ишетеп, төшөнөп тораһығыҙ. Илдә бөтә ерҙә лә йотлоҡ хакимлыҡ итә. Беҙ бына шулай илгә килгән ҡаза арҡаһында күп кенә үҙебеҙҙең яҡындарыбыҙҙы юғалттыҡ. Беҙҙең байтаҡ туғандарыбыҙ үҙ ваҡытынан алда донъя ҡуйҙы. Етмәһә, бөтә Волга буйында, беҙҙең йәш Башҡортостан йөмһүриәтендә ваба, ҡыҙылса һәм сәсәк сире таралды. Волость идараһының ҡарары менән бөгөндән башлап волость ауылдарында ошо ауырыуҙарға ҡаршы көрәш саралары иғлан ителде. Ул көрәштең мәғәнәһе, асылы шул: хәҙер исем-

лек менән мин һеҙҙе саҡырып торам, ә һеҙ берәм-берәм старшина кабинетына инеп, укол ҡаҙатып сығаһығыҙ.

Өҫтөнә баса тун, башына аҫ тиреһенән тегелгән бәрхәт тышлы кәпәс кейгән волостың мясниғы[1] Мырҙабулат кешеләрҙе этеп-төртөп алғы рәткә килеп баҫты. Тунының төймәләрен ысҡындырып, уң ҡулына тотҡан ҡамсыһы менән яры бейәләй кейгән һул ҡулының усына шапылдатып һуҡты ла:

— Ҡем, ҡусты, йәғни писарь Үлмәҫов мырҙа! Был ниткән эш? Ҡасандан башлап мөслимә, йәғни ҡатын-ҡыҙ, ирҙәрҙән алдын йөрөй башланы әле?

Уға бер нисә туҡ ҡорһаҡлы ирҙәр тауышы ҡушылды.

— Әйтһәнә! Ғүмер баҡый ир ҡоло булып йәшәгән бисә халҡын нимәгә өҫтөн сығараһығыҙ?

— Бынан кире улар әллә, ғөмүмән, өҫтә буламы? Ха-ха-ха!

— Был ниткән эш? Был ата-бабаларыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәтен боҙоу түгелме? — Быныһы инде Шырҙы осо мәхәлләһенең имам мөхтәсибы Заһретдин тауышы ине. Уны бер нисә ир ҡеүәтләп ҡуйҙы.

— Шулай булмай ни! Уныһы бөтә мосолман ғәләменә мәғлүм!

Волость писары Үлмәҫов ҡарлыҡҡан тамағы менән яңынан аңлатырға кереште:

— Ағай-эне! Соролдашмағыҙ әле! Һеҙ ниңә бушҡа дау күтәрәһегеҙ? Октябрь революцияһы ҡатын-ҡыҙҙарҙы ирҙәр менән тигеҙләне, уларға тиң хоҡуҡ бирҙе. Элекке тормоштоң ясины уҡылған, уны тергеҙергә маташыу ул Совет законына ҡаршы сығыу менән бәрәбәр, йәғни контрлыҡ менән бер рәттә хисаплана.

— Һин, ҡустым, беҙҙе ҡапаҡлама!

— Ҡонтр мөһөрөн бик һәләт кенә баҫып ҡуйырға һинең ни хаҡың бар?

— Үҙем красный партизан булһам да, мин, пример, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ирҙәр менән тиңләүгә бөтөнләй противмын! Шулай булғас, мин дә контрмы?

— Һин, писер ағай, беҙҙе ул таш ҡорһаҡтар менән тиңләмә! Уларҙың юлы башҡа!

Быларҙы тыңлап торған писарь:

— Һеҙ волость идараһының ҡарарына подчинять итмәһегеҙ, хәҙер волкомпартия вәкилен саҡыртам. Ул һеҙгә аңлатып бирер, әммә мин һеҙгә шуны яңынан ҡабатлап әйтәм: элеккегә кире ҡайтыу юҡ, ул мәнсүх! Ҡатын-ҡыҙ

---

[1] Ит менән сауҙа иткән кешене элгәре «мясник» тип атағандар.

ирҙәр менән тиң хоҡуҡта, ул хәҙер шулай, киләсәктә лә шулай буласаҡ. Беҙҙе ошолайтып ауырыуҙан ҡотҡарып алып ҡалыу маҡсатында яңы власыбыҙ үҙенең уҡыған кешеләрен ебәреп ярҙам итә икән, — ошо урында ул янында баҫып торған Абдрахманға ҡараш ташланы, — беҙ уға рәхмәт әйтергә тейеш.

— Знамо! Рәхмәт инде!

— Долой өшкөрөү-төкөрөү!

— Зәһретдин мулланың сынаяҡ аҫтына яҙып биргән доғаһын һыу сайҡап күп эстек! Етте!

Ошондай тауыштар күтәрелә башлағас, Зәһретдин тағы ҡысҡырҙы:

— Изге мосолмандар! Был Совет власының беҙҙе үлтереү өсөн уйлап сығарған бер мәкере. Ышанмағыҙ! Заман ахыры етһә, иблес төкөрөгөнә тығылған энә осо менән кеше сәнсеп, мосолман ғәләмен һәләк итерҙәр, тип яҙылған китапта.

Ҡулын күтәреп, волость докторы халыҡҡа «Граждане» тип мөрәжәғәт иткәйне, мулла тағы ла алға сығып:

— Күрҙегеҙме? Үлмәс писар үҙе эргәһенә, ана, кафыр кешеһен ҡуйған. Шул бәндә мосолманға изгелек эшләй буламы? Мосолмандың йәне уға әллә ғәзиз тип уйлайһығыҙмы? — тине лә, писарға, докторға уҫал ҡараш ташлап, асыҡ ҡапҡаға йүнәлде. Үҙе күҙ ҡойроғо менән генә артҡа ҡараны, ләкин уның артынан һимеҙ өйрәк һымаҡ тайтаңлап килгән абыстай, ҡатындары менән бер нисә ауыл баһы ғына эйәрҙе. Күпселек Совет власының был сараһын хуплап, ихатала тороп ҡалды.

— Атаҡ, атаҡ! Бында ир кеше бар икән дә баһа! — тип ҡысҡырҙы башлап тупһанан атлаған бер ҡатын

— Әйҙә, еңгәй, түрҙән уҙ! — тип, Абдрахман уны ҡаршы алды.

— Ҡайҙа ошонда, анауы хәйерһеҙ укыл тигән нәмәһе? Уны ҡайһы ергә эшләйҙәр? — тип һораны, биттәре аслыҡтан һурыҡҡан булыуға ҡарамаҫтан, күҙе уйнап торған, өҫтөнә һары бишмәт кейгән ҡатын, өҫтәлдәге асыҡ һандыҡҡа күҙ йүгертеп. Уның һүҙен аңламаған Маргарита Абдрахманға һорау ҡатыш ҡараш ташланы. Абдрахман ҡатындың һүҙен уға тәржемә итте.

— Еңгәй! Башта бишмәтеңде, ана, стена ҡырындағы эскәмйәгә сисеп һал. Унан итәгеңде күтәрәһең дә анау ҡыҙға матур ғына арҡаң менән әйләнеп тораһың. Ҡалғаны уның эше, — тине Абдрахман, шаяртыбыраҡ.

— Бынағайыш! Итәк күтәреп тормаға, улай тигәс тә, мине кем тип беләһең? Ағайың ишетеп ҡалһа, муйыныңды өҙә һуғыр.

— Мин ирҙәргә укол эшләйем. Бында, ана, Маргарита. Хәҙер сығам.

— Быныһы, исмаһам, бер айышлы хәбәр. Йә әләйһә, сыҡ. Бик ҡабаланам. Минең өйҙә ике йәш балам ҡарауһыҙ ултырып ҡалды.

Бәләкәй һандығын ҡултығы аҫтына ҡыҫтырып, Абдрахман йәнәш бүлмәгә сыҡты. Бүлмәгә исемлек буйынса ирҙәрҙе индерә башлағайнылар инде. Бында уның инеүен дә көтмәй ирҙәр бер-бер артлы сисенә лә башланы. Хатта бер ир үҙенең бөтә булған алам-һалам кейемен һалып, һыуыҡ иҙәндә ялан аяҡ тора.

— Һеҙгә сисенеүҙең хәжәте юҡ! Күлдәгегеҙҙе генә күтәреп, арҡағыҙға энә ҡаҙатаһығыҙ ҙа шуның менән — вәссәләм!

— Ә мин һалдатҡа алынғандағы кеүек, бөтөнләй сисенәләрме тиһәм, бында ни арҡа ғына кәрәк икән дә, — өҫтәл эргәһендәге яланғас кеше яңынан кейенә башланы.

— Давай, егеттәр, кем батырыраҡ? Иң алдан кем? — Абдрахман йыйылған кешегә мөрәжәғәт итте.

— Некрутҡа ҡаралған шикелле бында ла йәрәбә тартырға кәрәк.

— Бында барыбыҙға ла ул укель тигән нәмәһен ҡаҙатмай булмаҫ!

Баяғы егет арҡаһын асты ла бөгөлөп, ҡыҙарған күҙҙәрен сырт йомоп, өҫтәл янына килде.

— Кәкрәймә! Тура тор, тирең тартыла! — Абдрахман уның кәүҙәһен турайтты ла, һул ҡулы менән тиреһен тартып, уң ҡулы менән уның ябыҡ арҡаһына мыртылдатып энә осон кертеп тә ебәрҙе.

— Әләкәй!

— Ниңә шул тиклем яр һалаһың?

— Тере тәнеңә энә ҡаҙатып ҡара әле, ауырттырмаҫмы икән?

— Бигерәк йәнең өҫтә генә икән!

Ул кейенеп бөткәнсе ҡалғандары уның энә сәнскән урынын һыйпап-һыйпап ҡаранылар.

— Әй, бушҡа бәләнде һалаһың! Әллә ни күренмәй! Энәнең осо тейгән ере һағыҙаҡ саҡҡан шикелле генә күгәреп сыҡҡан.

Кеше инә торҙо, ингән береһенә Абдрахман укол яһап сығара торҙо. Бына ҡыҫҡа ғына көн кискә ауышты. Иртәгә лә саҫҡау булырын белдереп, тау артына йәшенергә дилбегәләй ҡалған ҡояшты ниндәйҙер томанға оҡшаған күкһел шаршау ҡапланы. Донъя һил булып ҡалған, унда-бында төтөн сығарып Яғалса тауы менән Урал араһында, Һаҡмар уйһыулығында урынлашҡан Нәмәс ауылының мә-

сет манараһынан мәзиндең кәзә тауышына оҡшаған аҙаны ишетелде, ул мәхәлләнең аяғында йөрөй алған барлыҡ халҡын аҡшам намаҙына әйҙәй ине.

Маргарита, ишек асып, Абдрахман бүлмәһенә башын тыҡты ла:

— Йә, Драхман, һинең эшең бөттөмө? Мин бөтә килгәндәргә ҡаҙап бөттөм. Әйҙә, больница ашханаһына барып, тамаҡ ялғап киләйек, — тип мөләйем генә йылмайҙы.

— Минең дә эшем бөттө!

Маргарита инеп, Абдрахман ҡаршыһындағы ултырғысҡа ултырҙы ла ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уның эшен күҙәтергә тотондо.

— Вот тебе раз! Беҙҙе укол ҡаҙарға ун биш көн уҡыттылар, ә һин бер күреүҙә үк настоящий врач кеүек ҡаҙап тораһың.

Уның маҡтауына Абдрахмандың ҡулдары, ҡулдарынан бигерәк йөрәге ҡалтыранды.

— Маргарита, сығып торһаң да ярар ине. Егет уңайһыҙлана... — тигән булды.

— Ничего! Ничего! Мин ни ашамам. Хәҙер үҙем ҡаҙайым, — тип Абдрахмандың ҡулынан шприцын тартып алды ла спиртҡа манылған мамыҡ менән иң аҙаҡҡы кешенең арҡаһын ыуа башланы.

Маргарита, эшен бөтөргәс, аптырабыраҡ торған Абдрахман янына килеп, уң аяғын ослап, матур кәүҙәһен уның яғына борҙо ла уң ҡулын бөйөрөнә таянды.

— Йә, Драхман, милый, мине ҡултыҡла ла ашарға киттек, — тип муйынын бороп зәңгәр күҙҙәрен йылтыратып уға ҡараны.

— Юҡ, юҡ, Маргарита! Буш менән булма! Беҙҙә улай көпә-көндөҙ урамда ҡултыҡлашып йөрөү ҙур гонаһҡа һанала, былай ғына, йәнәш кенә барайыҡ, — тине, оялсан күҙен, ҡыҙарған битен йәшереп. Исемемде бынан ары дөрөҫ ата: Абдрахман мин.

— Һин нимә? Шундай таҙа, мөһәбәт егет ҡыҙ менән урамдан ҡултыҡлашып барырға ҡурҡа, имеш. Был ни тигән ҡылыҡ? Элек гонаһ булған, хәҙер ул гонаһ юҡ. Хәҙер бөтә ерҙә свобода.

Башҡаса Абдрахман тартҡылашып тора алманы, ҡыҙҙы ҡултыҡланы ла больница яғына алып китте. Бәхетенә урам уртаһынан һалынған ҡышҡы сана юлында бер кем дә осраманы. Тик аҫты таш, өҫтө ағас земство больницаһының текә күтәрмәһенән менеп килгәндә генә уларға Аполлинарий Христофорович тап булды.

— Вот ниндәй яҡшы! Нисек матур итеп киләһегеҙ! Дуҫлашып та өлгөрҙөгөҙмө ни?

Абдрахмандың ҡулын ысҡындырырға тырышыуын һиҙеп, Маргарита уны ҡыҫып тотто ла:

— Нимә, оҡшамаймы ни? Бына тигән егет бит! Пар киләбеҙме, Аполлинарий Христофорович? — тип Абдрахмандың ҡуйынына һыйына биреп, уның бейек яурынына береткалы башын ҡырын һалды ла врачтың алдына килеп баҫты. Үҙенең битен шатлыҡ нуры солғаған, күҙҙәре уйнай, шаярыу тигән нәмәнең әҫәре лә юҡ. Доктор быларға уйынлы-ысынлы:

— Очень мило, Маргарита! Хәйерле сәғәттә булһын,— тип фатиха биргән кеше кеүек йылмайып, аҫҡа төшөп китте. Маргарита әллә оялыуынан, әллә өшөүенән бөтә тәне ҡалтыранған Абдрахманға һыйынып, уның ҡолағына йылы тын өрөп бышылданы:

— Күрҙеңме? Беҙҙең врач үҙенең фатихаһын бирҙе бит! Беҙ ниндәй бәхетле! — Маргарита һуңғы баҫҡыс иҙәнендә Абдрахманды ҡосаҡлап, өйөрөлөп алды. «Был ни хикмәт?! Ошоға тиклем күрмәгән-белмәгән, үҙ енесең булмаған бер ят ҡыҙ менән ошолайтып торсо! Нисек кенә ослаңыр һуң яңы пәйҙә булған был мөхәббәт! Маргаританың уйы бер ҙә уйынға оҡшамаған... Әллә был курсы менән хушлашып, күтәреп һуғып ҡайтып ҡына китергәме? Улай тиһәң, бешкән алма кеүек һуты тулған Маргаританы нисек ташлап китәһең? Нишләргә? Маргаританы алдағы тормош борсомайҙыр, ул үҙе йәш, әллә ни донъя күргән дә ҡыҙ түгел. Ә мин һуң?» Әйтерһең, Абдрахмандың ике күҙен ҡара сепрәк менән бәйләгәндәр ҙә уны ниндәйҙер текә ҡая башына килтергәндәр. Ул ҡаяның бейеклеге лә, тәрәнлеге лә, төбөндә ни булыуы ла мәғлүм түгел. Абдрахмандың башынан ошо һәм ошоға оҡшаш әллә ни төрлө буталсыҡ фекерҙәр үтте. Ә Маргарита тик шатлана ғына. Абдрахман уның эргәһендә булғас, уға бер ни ҙә кәрәкмәй һымаҡ.

Унан икенсе ғилләә бар бит әле. Ярай, ул Маргарита менән ҡауышты ла, ти. Уны нисек ауылға алып ҡайтмаҡ кәрәк? Быңдай хәлдең ауыл яратылғаны бирле булғаны юҡтыр. Һөйләүен һөйләйҙәр, имеш, бик борон заманда егерме биш йыл хеҙмәт итеп, төрөк һуғышында ҡатнашҡан бер ауылдашы мәрйә ҡатын алып ҡайтҡан. Ләкин атаһы-әсәһе, туғандарынан башлап бөтә ауыл халҡы был хәлгә ытырғанып ҡаршы төшкән. Уны дин боҙоуҙа, шәриғәт ҡанундарына ҡаршы килеүҙә ғәйепләгәндәр. Шулай бер көн ул һалдат үҙ ҡатыны менән мунса ингәндә, кәрәсин һибеп, мунсаға ут төрткәндәр. Икеһе лә шул мунса төтөнөндә тонсоғоп, утта янып үлгән. Уларҙың мәйетен онға әйләнгәнсе яңынан яндырып, ауылдың көллөгөнә алып ба-

рын түккәндәр. Олатаһында мунсаға бармай тороп ҡалған сабыйҙан үҙе үлеп киткәнсе «кафыр Михайла» тип йөрөтә башлағандар. Хәҙерге Ялан ауылындағы «урыҫтар араһы» быуыны шунан таралып киткән дә, тип һөйләйҙәр.

## 3

Бер стенанан икенсеһенә һуҙылған, йышылмаған таҡталарҙан ҡағылған өҫтәлдә сисенмәй генә шыйыҡ борсаҡ ашы эстеләр ҙә яңынан урамға сыҡтылар. Ашханала бер аҙ тәндәре имшегән Абдрахман менән Маргаританы ҡыштың эңер һалҡынлығы бер-береһенә һыйынырға мәжбүр итте. Яғалса тауы битенән башта Һаҡмар уйһыулығын, һуңынан һуңғараҡ Шырҙы уйпатын әкренләп ҡаплап килгән төн пәрҙәһе яҡты күҙҙә кешенән тартынған Абдрахман йөрәгенә батырлыҡ өҫтәгәндәй итте. Ул шиненең ҡаптырмаларын ысҡындырып, Маргаританы үҙ ҡосағына алды. Асыҡ шинель итәге эсенә инеп юғалған Маргаританың һаумал һөт йылыһы бөркөп торған тығыҙ тәне еңелсә генә дерелдәгән төҫлө тойолдо. Ҡапыл, үҙенең ас биленән һыға ҡосаҡлап алған ҡыҙҙың йомшаҡ бармаҡтарының йылыһы гимнастерка аша Абдрахмандың арҡаһын үтеп алғандай булды. Ул үҙе лә һиҙмәҫтән, шинель итәктәре менән ҡымтылған, тиреҫтән өргән әсе елдең һалҡынына ҡарамаҫтан, эҫе бөркөп торған ҡыҙ тәненә тартылды, тирләй башлаған ҡулдары менән ситлеккә эләккән ҡошсоҡтай дерелдәгән Маргаританы ҡыҫып ҡосаҡланы ла башын уның яурынына һалды. Абдрахмандың ҡапыл сикә тамырҙары ташты...

Тәненең һәр күҙәнәгенән мөхәббәт тойғоһо эркелгән Маргарита ла Абдрахмандың ҡолағына:

— Йәнем, бәғерем, мине үп, — тип бышылданы. Уның был иҫерткес һүҙе нисек кенә тылсымлы булмаһын, нисек кенә йүгәнһеҙлеккә әйҙәмәһен, Абдрахман:

— Беҙҙә үбешеү ғәҙәте юҡ, — тип әйтергә үҙендә көс тапты.

— Ул ваҡытта, бәғерем, һин башыңды түбән эйеп тор, мин һине үҙем үбәм, — тип уның көслө муйынына аҫылынды ла Абдрахмандың ирендәренән һурып-һурып үбергә кереште.

Ошо йәшенә етеп быңдай рәхәтлекте, ләззәтте бер ваҡытта ла татымаған егеттең башы әйләнде, үҙе лә һиҙмәҫтән көслө ҡулдары менән Маргаританың сихри көс, дыуамал ғәйрәт бирә торған ҡалҡыу күкрәген үҙенә тартты. Шлемын кеҫәһенә һалғас, үҙенең асыҡ башын ҡыҙҙың йыш-йыш типкән йөрәк тапҡырына терәне. Ошо рәүешле

күпме торғандарҙыр, уларҙы, ҡышҡы ҡарға шығырлата баҫып, бер кешенең йүткерә-йүткерә былар яғына килеүе һиҫкәндерҙе. Ул кешене үткәреп ебәрҙеләр ҙә ошо рәүешле ҡосаҡлашып тигәндәй, ихатаһы уратылып алынған Земство больницаһы ҡапҡаһы алдына килеп туҡтанылар.

«Ай-һай, был ҡыҙыҡай еңел-елпе холоҡло бер «йөн табан» булып сыҡмағайы. Әрһеҙ ҡылана... Йышылған, донъя күргән кеше булып, тоҙағына эләгеп тә ҡуйыуың бар», тигән хәтәр уй ҡапыл Абдрахмандың башына килде. «Бөтә күңелен ихлас шар асып үҙеңә мөкиббән бирелеп торған гонаһһыҙ ҡыҙ хаҡында бысраҡ уй йөрөтөргә һинең ни хаҡың бар, күңелең боҙоҡ һинең, егет», тигән айныҡ фекер уның икеләнеүен шундуҡ урынына ҡуйҙы.

— Бына ошонда йәшәйем, — тине Маргарита, үҙенең жакет салғыйҙарын аҫҡа тартҡылап.— Әйҙә, хуш күрһәң, рәхим ит, Абдрахман, — тине ул, тауышына ниндәйҙер ябайлыҡ, эске йылылыҡ һыҙаттары өҫтәп.

Улар боҙланып бөткән тайғаҡ баҫҡыстан шаҡ-шоҡ атлап өҫкө ҡатҡа күтәрелде.

— Һин бына болдорҙоң ҡанатына тотон, юғиһә тайып, аҫҡа төшөп китерһең, — тине Маргарита, алдан юл башлап. Бәләкәй генә майҙансыҡта аяғындағы ҡарҙы һеперҙе лә, Маргарита тыштан кейеҙ көпләнгән туң ишекте асыуы булды, ҡараңғылыҡ менән ҡуша әллә ниндәй дарыуҙар, еүешлек еҫе танауға бәрелде.

— Һин тик кенә тор, хәҙер шәм тоҡандырам. — Маргарита кәрнистә ултырған ҡыуыҡһыҙ шәм яндырғас, тәрилкә ҙурлығы балаҫ өҫтөндә баҙнатһыҙ ғына баҫып торған Абдрахманға:

— Әйҙә, сисен, ҡунаҡ булырһың, — тип йылмайҙы. Үҙе ҡапыл тел осонан ысҡынған һүҙенән ояլғандай: — Бына, минең бөтә байлыҡ ошо инде: бер ултырғыс, бер өҫтәл, ә быныһы инде минең йоҡо бүлмәһе, — тип, Маргарита тимер карауат өҫтөнә ябылған сәскәле шәл кеүек суҡтары иҙәнгә һәлберәп төшкән һоро одеялға эйәк атты. — Быныһы — аптека, — тип, тояҡтары быуын-быуын итеп эшләнгән иҫке шкафҡа төртөп күрһәтте.

Ҡулындағы шырпы ҡабын нишләптер шылтыратып алғас:

— Земство больницаһының бөтә мөлкәте минең ҡулда. Апполинарий Христофорович менән икебеҙгә бер ҡап шырпы, уны ла хисаплап ҡына тотонабыҙ, — тине. Уның һутлы ирендәрендә ҡуңалтаҡ тормоштан әсенеү билдәләре төҫмөрләнгәндәй булды.

Ишек төбөндә баҫып торған Абдрахман уның эске моңһоулығы менән уртаҡлашҡандай:

— Ничего, Маргарита, ҡайғырма, башың һау бул-һын — мәңге шулай фәҡир булмабыҙ, гөрләтеп донъя көтөр мәлдәр ҙә етер әле, — тине тыныс ҡына.

Ләкин тар бүлмәлә мыҡты кәүҙәле Абдрахмандың тыны ҡыҫылғандай тойолдо, ул сығырға йыйынған кеше кеүек урынында тапанып алды.

— Ултыр, әҙерәк үҙең хаҡында һөйләрһең, мин кеше тыңларға бик әүәҫ ул. — Маргарита өҫ кейемен карауат өҫтөнә һалды ла яңағына таянып, оҙон-оҙаҡ хәбәр тыңларға әҙерләнде.

Урамдағы Маргаританың ҡыйыулығына, үҙенең ҡосағына атылырға әҙер тороуына ныҡ ҡына ғәжәпләнеп, уның бүлмәһенә аҙғын ирҙәрҙәге һымаҡ әллә ниндәй боҙоҡ фекер менән тупһа аша атлаған Абдрахмандың күңелендә ҡаҡ карауатында моңайып ултырған ҡыҙға ҡарата йәлләү тойғоһо уянды. Тышта уның тураһында насар уйлауына үкенеп тә ҡуйҙы, Маргаританың һорауына яуап биреүҙе хуп күрҙе.

— Мин ни, ошо волос кешеһе. Бынан ҡырҡ саҡрым самаһы көнсығышта Оло Ҡыҙыл йылғаһын һыулай ауылым. Ялан тип атала. Ун һигеҙ йәшем тулғанда герман һуғышына алынып, һуңынан ҡыҙылдар яғында һуғыштым. Атай-әсәй янына ҡайтып төшкәнгә бына әле ай ҙа тулмай. Һин үҙ байлығың хаҡында әйткәс, мин дә әйтеп ҡуяйым: бөтә мөлкәтем минең үҙем менән, — тине лә күн итеген күрһәтергә теләгәндәй, аяҡтарын һуҙып күрһәтте. Ә иң ҙур байлығым — ошо, — шлемын йомарлап тотҡан ҙур ҡулдарын тубығына шапылдатып һуғып ҡуйҙы. Бының менән ул бөтә ышанысы ҡулдарында ғына икәнен дә һәм үҙе тураһындағы ҡиссаның да тамамланыуын белдермәксе ине. Инде сират Маргаритаға етте.

— Минең тормошом бигерәк тә ябай. Мин үҙем Сембер губернаһынан. Ауылыбыҙ аша үткән ҡыҙылдарҙың Пенза дивизияһына эйәреп, ошо Нәмәс ауылында ятып ҡалдым. Атайым да, әсәйем дә юҡ. Тифтан һәләк булдылар. Смоленск полкы ошо ауылды алғас, был ауырыу мине лә аяҡтан йыҡты. Апполинарий Христофорович булмаһа, мин дә теге донъяға китәһе кеше инем. Колчакты ҡыуып Себергә йүнәлгән полк мине ошо мәрхәмәтле кеше ҡулына ҡалдырған. Бына хәҙер ошо изге йәнле кеше ҡарамағында эшләп тә, йәшәп тә йөрөгән баш. Киләсәк алла ҡулында. — Ҡыҙҙың һүҙҙәре әкренәйә барҙы. — Ауырыуҙы тәрбиәләй беләм. Укол ҡаҙарға өйрәндем. Буш ваҡыттарҙа Аполлинарий Христофоровичтарға ярҙам итәм. Уның китапханаһында аҡтарынам. Оҙаҡ уҡып ултырырға ваҡытта, кәрәсин дә юҡ. Бына шулай, Абдрахман, — тип күрһөн-

дө лә ике тубығына һалған һары башын унан күҙен алмай текләп ултырған Абдрахманға ҡалҡытты. Уның ҙур зәңгәр күҙҙәренә, хәрәкәтһеҙ оҙон керпек остарына ҡайғыхәсрәт менән тулған болоҡһоу шәүләһе ятты.

Бер-береһен һынамаҡҡа килгән кешеләр кеүек байтаҡ ҡына өнһөҙ ултырғандан һуң, Маргарита үҙенең оҙон керпектәрен өҫкә һирпеп, зәңгәр тыныс диңгеҙ кеүек тәрән, наҙлы хискә батҡан моңһоу күҙҙәренән мөләйем ҡараш атты ла кинәт ниҙер иҫенә төшөп ҡалған кешеләй:

— Абдрахман, әйҙә, лото уйнайыҡ. Кем отолһа, ул отҡан кешенең теләген үтәргә тейеш. Һөйләштекме? — тине лә Маргарита етеҙ генә урынынан һикереп торҙо, дарыуҙар һалынған шкаф төбөнән киндер тоҡсайға һалынған бер төйөнсөк килтереп сығарҙы. Уйын Абдрахманға бер нисек тә тәьҫир итмәгәнен тойоп, Маргарита үҙенең бәләкәй генә өҫтәленә бөтә ҡабырғаларына һандар һуғылған шаҡмаҡтарҙы шылтыратып түкте. Билдәле, Абдрахмандың бындай уйын барлығын ишеткәне бар, ләкин Маргаританың тыштағы бәйһеҙлеккә тартым ҡылығы менән үҙ өйөнә ингәс тә тыйнаҡлы, хатта сиктән тыш оялсан бер ҡыҙға әйләнеүе уйынға ҡапылғара тотоноп китергә мөмкинлек бирмәне.

— Маргарита, мин был уйынды белмәйем. Бына илгә килгән аслыҡты еңеп, ауырыуҙарҙы терелтеп бөткәс, беҙ һинең менән ярыша-ярыша лото уйнарбыҙ, йәме, — тине Абдрахман. Ул үҙенең был һүҙен митингыларҙа ҡат-ҡат ишеткән большевиктар телмәренә оҡшатты, ләкин тыуғаны бирле фәҡирлек ыҙаларынан башҡа нәмә күрмәй үҫеп, ҡатып ҡалған күңелен бәләкәй өҫтәл өҫтөндә таралып ятҡан лото шаҡмаҡтары ғына иретә алманы. Уң ҡулына буш тоҡсай тотҡан Маргарита һуҡыр шәм яҡтыһында ҡуңыр булып күренгән тумалаҡ битенә ғәжәпләнеү һыҙаттары бөркөп:

— Атаҡ, атаҡ, улай булғас, Абдрахман, беҙ нишләйбеҙ? Мин башҡа бер уйын да белмәйем. Ауырыуымдан төҙәлә башлағас, был лотоны ла Апполинарий Христофорович, хәл белешергә килгән әхирәттәрең менән уйнарһың, тип биргәйне. Хәҙер иптәштәр ҡайғыһымы ни? Һәр кемдең үҙ хәстәре башынан ашҡан. Мин бында тора башлағаны бирле тупһа аша аяҡ атлаған беренсе ир кеше һин, Абдрахман. Юғиһә бында доктор ҙа ингәне юҡ, ишектән башын тығып ҡына һөйләшә, — тип Маргарита ҡабаланып-ҡабаланып тормош рәүешенең ни тиклем ябай, бер төрлө, күңелһеҙ генә түгел, шөкәтһеҙ үтеүен тасуирлап алды. Әле яңы ғына үҙ тирәһендә шәм яҡтыһында өйөрөлөп осҡан күбәләктәй әйләнгән, ҡарамаҡҡа ғәмһеҙ генә йәп-йәш ҡыҙ

баланың ауыҙынан сыҡҡан һағыш ҡатыш тәрән кисереш һүҙҙәре Абдрахмандың йәнен тетрәтте. Баштараҡ: «Үҙенең намыҫы сафлығын минең алда иҫбат итергә уйланы, ахыры», тигән еңел-елпе фекере селпәрәмә килде. «Был бит бөтөнләй икенсе кеше, был ҡыҙ әле йәшәргә лә өлгөрмәгән, ә күпме ыҙа сиккән, ҡайғы-хәсрәткә юлыҡҡан. Тәүге күреүҙә үк үҙенең бөтә эске серен миңә асып һалыуы уның күңел сафлығынан килә. Мин уның бөрөләнгән йәшлек мөхәббәтенең сәскәгә йомарланған сағына тура килгәнмендер. Ә бәлки, күңеленең буръяҡланмаған, сылтырап аҡҡан көмөш шишмәләй урғылыуы тик яңғыҙлыҡта үткән ғүмерен бер аҙ биҙәкләргә теләү касафатылыр», тигән һығымтаға килде Абдрахман.

— Ә улайға китһә, мин үҙем дә лотоны насар беләм, — тип һалҡын иҙәндәрендә төрлө ямау төшкән йөн ойоҡсан ғына торған Маргарита: «Кеше башын ҡаңғыртып, был лото тигән нәмәне нишләп һөйрәп сығарҙым әле мин», тип үкенгәндәй, киндер моҡсаһына өҫтәл өҫтөндәге лотоларҙы тултырҙы ла шкаф йәшнигенә тыҡты. Үҙе карауатына яныпан барып ултырҙы, битенә етем балаларға ғына хас ҡара болоҡһоу шәүлә йүгертеп, сәнсә ултырған тубыҡтарын ҡосаҡлап та алғас, Абдрахмандың йөрәге түҙмәне: ул, урынынан тороп, Маргаританың эргәһенә бер аҙым атланы ла көнбағыш ҡапланған кеүек һары сәсен өҫкә йыйып һалған Маргаританың башын шыраулы усы менән наҙлы ғына иркәләргә, һыйпарға тотондо. Маргаританың тамағына килеп тығылған әсе төйөн кинәт урынынан ҡуҙғалғандай булды һәм зәңгәр күҙҙәрендә мөлдөрәгән әсе йәш тамсыларына әйләнде. Абдрахман иһә Маргаританы киң дала уртаһында үҫеп ултырған яңғыҙ ҡайынға оҡшатты. Бына-бына ҡотороп дауыллы ғәрәсәт күтәрелер ҙә ялан биҙәп ултырған тәлгәш ҡайынды төбө-тамырынан йолҡоп әллә ҡайҙарға, йәһәннәмгә ырғытыр кеүек тойолдо Абдрахманға. Үҙенең усы ҡаплаған Маргаританың башы берсә ҡалтырап, берсә тынысланыуын бөтә йөрәге менән тойоп торған егет ошо бисараны яурынындағы шиненә төрөп, һаҡлыҡ менән генә ҡайҙалыр алыҫҡа, иркен бер донъяға күсереп алып киткеһе килде. Маргарита алдында баҫып торған көслө егеттең теләген тойғандай, йәшле күҙҙәрен тултырып уға ҡараш һирпте. Йылт-йылт итеп, ана һүнәм, бына һүнәм тип ултырған шәмдең зәғиф яҡтыһына был тылсымлы ҡараш нур өҫтәгәндәй булды. Ә күпме һағыш, күпме күңел сафлығы был ҡараштa, күпме ышаныс һыҙаттары балҡыны йөрәкте телгеләп үткән был сихри осҡонда! Егет йөрәгендә был осҡондан ут ҡабынды, дөрләп янған ут ялҡыны барлыҡ бөтмөшөн ялмап алды, хатта ишек тө-

бөндә биҙрәләге һыу туңып ултырған һалҡын бүлмә йылына башлағандай тойолдо. Ул нишләргә лә белмәне, аптырағас, ҡайышын сисеп, шинель ҡаптырғыстарын ысҡындырып ебәрҙе. Маргарита башын түбығына ҡырын һалып:

— Мин бала саҡта, беҙгә ҡунаҡтар килһә, әсәйем йүгерә-йүгерә самауыр ҡайнатыр ине... Үкенескә ҡаршы, мин һиңә уны ла тәҡдим итә алмайым, — тип Маргарита әрнеү ҡатыш йылмайҙы ла: «Бына, биҙрәләге һыу ҙа туңып ултыра бит», тигәндәй, ишек яғына ҡараш ташланы. Уның был ишараһын Абдрахман «һин ҡайтып китһәң дә ярар ине», тип ҡабул итте. Кинәт торайып, Абдрахмандың китергә йыйына башлағанын күреп, Маргарита, йоҡоһонан һиҫкәнеп уянған кешеләй өҙгөләнде:

— Абдрахман, шулайтып ҡайтырға йыйына башланыңмы ни? Үҙең күреп тораһың, йоҡлап ҡайт, тип тә әйтә алмайым шул.

— Юҡ, юҡ, Маргарита, ул ниткән һүҙ, ти. Киләһе осрашҡанға тиклем хуш. — Абдрахман үҙ алдында мөлдөрәп торған ҡыҙға ҡулын һуҙҙы. Ләкин Маргарита аяҡтарын ослап өҫкә тартылды ла:

— Тыныс йоҡо һиңә, Абдрахман, иртәгәгә тиклем иҫән бул, — тип уның битенән ике тапҡыр, өсөнсөһөнә, үҙ тойғоһон беркетеп ҡуйыу өсөн мөһөр баҫҡандай, иренәнән үбеп оҙатты. Абдрахман, әле яңы ғына башынан үткән эске әҫәрләнеүҙән айный алмайынса, үҙ ятағына йүнәлде, ирекһеҙҙән артына боролоп ҡарарға мәжбүр булды. Больница флигелендәге бүлмәнең яңғыҙ ғына тәҙрәһенән төнгө ҡараңғылыҡты йыртып, ялтлап күренеп ҡалған шәм яҡтыһы йөрәген йылы хистәргә сорнап оҙатты.

* * *

Волость идараһында ауылдарға таратылаһы кешеләрҙе санотряд исемлегенә теркәү башланғайны. Ул ярым асыҡ ишек аша кеше шығырым тулы бүлмәгә аҙым атланы. Бында барыһы ла тигәндәй таныш курсташтар. Бәләкәй бүлмәне шау-шыу солғап алған, һәр кемдең йөҙөндә ниндәйҙер тулҡынланыу һиҙелә. Таныштары менән күрешеп, бер нисә һүҙ әйтергә лә өлгөрмәне, Абдрахман алдында жакеты өҫтөнән санитар сумка аҫҡан Маргарита пәйҙә булды. Абдрахмандың йөрәге жыу итеп китте, ул ҡайҙалыр ашҡынған Маргаританы ситкәрәк әйҙәне лә шаҙра битенә сыҡҡан ғәжәпләнеү билдәләрен йәшерә алмай:

— Маргарита, ә һин ҡайҙа йыйынаһың? — тип һораны.

— Ә ниңә, мин дә санотрядҡа яҙылдым, — ҡыҙ тыныс булырға тырышып, вайымһыҙ ғына яуап бирҙе.

— Бәй, ә... Апполинарий Христофорович? — Абдрахман ауыҙын асырға ла өлгөрмәне, Маргарита шундуҡ:

— Әллә беҙҙең доктор земский булғас та, уны томана тип уйлайһыңмы?

— Сер булмаһа, ҡайһы төркөмдә юлға сығырға уйлайһың?

— Әгәр һин ҡаршы булмаһаң, һинең менән ер сигенә китергә лә ризамын. — Маргаританың тәүәккәл яуабы Абдрахмандың ҡолағын яра яҙҙы.

— Улай булғас ни, бергә атланыҡ. — Абдрахманға ризалыҡ биреүҙән башҡа сара ҡалманы. Курстар бөтөү менән үк егет үҙенең ауылдар буйлап китергә тейешлеген белә ине, ләкин уға яңы ғына бәлиғ булған ҡыҙҙы ҡушып ебәрерҙәр, тип уйламағайны. — Әйҙә, Маргарита, был сәйәхәт икебеҙ өсөн дә файҙалы булыр, һин донъя күрерһең, ә мин һинән эшкә өйрәнермен, — тип икеләнеберәк уның күҙенә текләп торған ҡыҙҙың күңеленә ышаныс бирҙе. Шәфҡәт туташы иһә Абдрахмандың ҡулын ҡысты ла «китәбеҙ, китәбеҙ», тип өйөрөлөргә тотондо.

Һәр парға дүртәр-бишәр ауыл тура килде. Абдрахман менән Маргаритаға Ирәндек тауының көнсығыш битләүендә шыр урман, тау-таш араһында ятҡан Атнағол, Мотай, Абзан, Бәләкәй Төрөмбәт, Ялан Әпеге тигән ауылдар тура килде. Волком вәкиле Абдрахманды үҙ янына саҡырып: «Ҡустым, һеҙ бараһы ауылдарҙа партячейкалар юҡ, тик власть сәйәсәтен яҡлаусылар, уның закондарын урындарҙа үткәреүсе бәләкәй төркөмдәр бар, ул-был сыҡҡан хәлдә, шуларға таянып эш итегеҙ», — тине.

«Ул-был»дарҙы Абдрахман менән Маргарита тәү тапҡыр Атнағол ауылына килеп һуғылғас та белде.

Таң һарыһынан тороп, ике шөкөрәгә ҡушып бер көрөшкә ҡайнаған ҡара һыу эсте лә Абдрахман Маргаританы алырға килде. Ул килеүгә аяғына табан һалынған быйма-сарафаны өҫтөнән нескә билле жакет кейгән, береты өҫтөнә башына дебет ябынған Маргарита, ҡулына тултырылған саквояжын тотоп, ишек төбөндә уны көтөп тора ине инде. Ҡәйефе күтәренке. Шулай ҙа:

— Йә, хәйерле сәғәттә! Беҙҙә сәфәр алдынан өндәшмәй бер нисә минут ултырып ала торған ғәҙәт бар, — тине лә Абдрахманға ултырғыс һуҙҙы, ә үҙе карауатында көйәҙ, бер аҙ уйланып алды.

— Бына, Абдрахман иптәш, ошо гонаһһыҙ күбәләкте мин һиңә ышандырып, ҡулыңа тапшырып ебәрәм. Ул бер ҡасан, бер ҡайҙа сығып йөрөгән бала түгел. Күҙ-ҡолаҡ

булып, ҡарап ҡына алып йөрө инде. Ул бик инсафлы ҡыҙ, уның сафлығы һинең выждаными ҙа, — оҙатырға килгән доктор Абдрахманға кинәйәле итеп әйтеп ҡуйҙы.

## 4

Маргарита сәбәләнһә лә, Абдрахман уның сумкаһын ҡулға тотоп, үҙ яурынына аҫып, улар юлға сыҡты. Ботаҡтарын бәҫ баҫҡан ағастар араһынан нурҙарын һибеп, тау ашаһынан яртылаш күренеп ҡояш сыҡҡанда, улар Һаҡмар уйһыулығында ятҡан волость үҙәге Нәмәс ауылын ҡалдырып киткәйнеләр инде. Ауылды сыҡҡас та Маргарита, хужаһына иркәләнеп уның ул яғында ла, был яғында ла сабыулап өйөрөлгән көсөк кеүек, Абдрахман менән шаярырға, уны үбергә маташып ҡарағайны, ләкин Абдрахмандың тәрән уйға батҡан ваҡ һипкелле моңһоу йөҙөнә ҡараны ла шаярыуҙан туҡтап, өндәшмәй генә шығыр-шығыр атлауын дауам итте. Ҡултыҡлашып барырға ҡышҡы сана юлы тар ҙа, ә унан бараһы ер бына ғына ятҡан ара түгел. Ирәндекте артылаһы бар. Тора-бара Абдрахмандың тыны асылып, киң аҙымдары йышайҙы, йәйәү йөрөп өйрәнмәгән Маргарита артынса эйәрә алманы. Егеткә уны көтөп алырға тура килә. Абдрахман артына әйләнеп ҡарамай ғына:

— Маргарита! Һин тереме унда? — тип ҡысҡыра ла алға атлауын белә.

Көн төшкә ауғас, Маргарита «һыуһаным», тип ҡар ашарға уйлағайны, Абдрахман уның ҡулынан йомарланған ҡарын тартып алды.

— Бынан кире һалҡын ҡарҙы ауыҙыңа ла алма! Тирләп килгән кешегә һалҡын тейеүе бар, — тип киҫәтте.

Салбар ҡайышына беркетелгән алюмин фляжканан көрөшкәһе төбөнә генә һалып һыу бирҙе.

— Эй, минең аҡыллыҡайым! Бөтә тәнемә рәхәт булып китте, — тип шатлығынан фляжкаһын беркетеп маташҡан Абдрахмандың битенән ул бер үбеп китергә өлгөрҙө.

Кисләтеп улар Ирәндек битендә шыр ҡайын, ҡарағай урманлығы араһында урынлашҡан бәләкәй генә Атнағол ауылына инде. Ауылда кеше күренмәй, әйтерһең, бөтә халҡы ҡырылып бөткән. Тик ҡалҡыуҙағы ҡапҡаһы ҡыйыҡлап эшләнгән, биш стеналы өйҙөң өс тәҙрәһендә генә ут күренә. Юлсылар шунда йүнәлде. Ләкин оло ҡапҡаһы ла, кеше инеп-сығып йөрөй торған бәләкәй ҡапҡаһы ла эстән бикле булып сыҡты. Бөтә ауыл өйҙәрен тәҙрә кимәленән көрт баҫҡан, тик бер кеше йөрөрлөк кенә аяҡ юлы

һалынған булһа, был өйҙөң ҡапҡаһынан урам уртаһынан үткән сана юлына тиклем ҡар ер ҡыртышына тиклем таҙартылған. Абдрахман ике яурынын баҫып килгән йөктәрен ҡуйҙы ла ҡапҡа ҡағырға тотондо. Сылбырҙарын зыңғырлатып урам эсендә ике яҡҡа бәйләнгән ике эт абалай башланы. Бына ишек асылды, кемдер тамағын ҡыра-ҡыра ҡапҡаға йүнәлде. Кем икәнен дә һорап тормай, күтәрмә яғалы кәзәкей тышынан ҡама тун, башына шәшке тиреһенән тегелгән ҡаҙандай бүрек кейгән бер мыҡты ир бәләкәй ҡапҡаны асты ла тап-таҙа урыҫ телендә:

— Кого это принесло в такую пору, что хотите? — тип һораны.

Абдрахман менән йәнәш торған Маргарита:

— Беҙ волостан ебәрелгән санотряд кешеләре. Халыҡҡа вабаға ҡаршы укол һалырға ауылдарға сыҡҡанбыҙ. Беҙгә сельский кәрәк ине, — тине.

— Я не сельский. Ежели он вам нужен, ищите, — тине лә ҡапҡаһын шарт ябып, бейек күтәрмәнән өйөнә инеп юғалды. «Нишләргә? Ҡайҙа барырға?» тип аптырап торғанда, яңынан ишек асылды. Өҫтөнә иҫке сәкмән, башына ҡорайыш кәпәс кейгән кәзә һаҡаллы бер ябыҡ ҡына кеше былар янына килде лә, яңынан өрә башлаған эттәрҙе:

— Сәбә! Сәбә! Атаңа нәғләттәр, — тип туҡтатҡас, — хужа һеҙҙе сельскийға алып барырға ҡушты, — тине. Бата-сума был кеше артынан эйәрҙеләр. Бер аҙ барғас, урамға ҡараған ике тәҙрәһен көрт баҫҡан, ҡапҡаһыҙ, ишеге лә бикһеҙ ҡараңғы өйгә килеп инделәр. Быларҙың танауына һыуыҡ менән ҡуша әскелтем-сөскөлтөм бөркөү ауыл өйө еҫе бәрелде. Ингән кеше, ҡараңғынан ҡурҡҡан шикелле, тауышына яһалма батырлыҡ өҫтәп:

— Әссәләмәғәләйкүм, Фәйзәхмәт ағай! Бына һиңә волостан ҡунаҡтар алып килдем, һине таптыралар. Мөхәммәтшәриф ағайым һиңә ебәрҙе, — тине.

— Мин уларҙы ете төн уртаһында ҡайҙа ҡуяйым, үҙендә генә алып ҡалһа, ни булған? Ҡарун Мөхәммәтшәриф питестенкәһенең мөйөшө емерелеп төшөр тип ҡурҡтымы ни?

— Ялан ауылынан кейәүе Ғәлимйән хажи өсөнсө көн ята шул...

— Эй, заман! Берәүҙәр бер һыныҡ икмәккә зар-интизар үлем түшәгендә интегә, ә Мөхәммәтшәриф ахун менән Ғәлимйән хажи, тахил шарабы эсеп, ҡаҙы-ялы ашап, типтерә!

— Шулай инде допъя, Фәйзәхмәт ағай! Боҙ ғына шы-

ма тиҙәр, ә тормош тигеҙ түгел, ҡутыр таш шикелле. Форсаты булғас, ҡулынан килгәс, шулай инде.

— Бар, сығып кит, эт ҡойҡаһы! Мөхәммәтшәриф ошаҡсыһы...

— Ярай! Ярай! Шул һүҙеңде онотма, ҡоçторорбоҙ! Сығам! Сыҡмай, мин һинең ҡола ялан өйөңдә нишләйем? — тине лә быларҙы алып килгән кеше ишекте шарт ябып сығып китте.

Мөйөштән тауыш биргән кеше торҙо ла ялан аяҡ сыуал эргәһенә килеп ҡулы менән һәрмәнде. Шунан саҡма таш менән ут сығарырға кереште. Ҡәрнистә ултырған сынаяҡ аçтына ниндәйҙер майға мансып һалынған сепрәкте тоҡандырып ебәрҙе.

— **Әйҙә, егеттәр, түрҙән үтегеҙ**, тип әйтер инем, минең өйҙөң түре лә, түр башы ла юҡ. Әйҙә, һике йөҙөнә ултырығыҙ. Ә, һеҙ икәү икән дә баһа, мин ни ҡараңғыла абайламай ҙа торам.

Абдрахман менән Маргарита, өç кейемдәрен сөйгә элеп, һикегә ултырҙылар. Һикелә ҡорама юрған аçтында бер оло кешенең һәм тиртун аçтында ятҡан бер нисә баланың ҡырылған башы күренде.

— Йә, туғандар, ни йомош? Һеҙ кем булаһығыҙ?

Абдрахман ашыҡмай ғына үҙҙәренең кем икәнлеген, ниндәй эш менән йөрөгәнлеген һөйләп биргәс, ауылдың сельскийы Фәйзәхмәт ҡаты уйға тарыны.

— Беҙҙең эшебеҙ иртәгә генә бөтмәç, беҙгә берәр фатир табырға тура килер.

— Был заманда бер кем дә теләһә кемде фатирға төшөрөп бармай. Төнө менән ҡуналҡа эҙләп йөрөргә хәлем дә юҡ. Хушһынһағыҙ, миндә генә ятып торорһоғоҙ инде, әммә, йәшерен-батырын түгел, тел өçтөнә һалып ҡабырлыҡ тәғәм юҡ. Бер өйҙә мынауы Әмерекә ярҙамы менән ашхана астыҡ. Хәле бар кеше шунда көнөнә бер тапҡыр барып тамаҡ ялғап ҡайта.

— Нисек, Маргарита, ошонда ҡалабыҙмы?

— Ҡалабыҙ инде, нишләмәк кәрәк?

Ялан күлдәк менән генә ултырған, иңбаштары ослайып, муйыны балта һабына оҡшап ҡалған сельский мөйөшкә ҡайырылып:

— Эй, һин! Нимә, үлеп ятаһыңмы әллә? Кеше килгән бит, сыуалыңа ут яҡ та һыу булһа ла ҡайнат! Юлдан өшөп килгән кешеләр, исмаһам, йылынып ятыр.

Һөлдә генә, ҡаҡ һөйәккә ҡалған ҡатын йүткерә-йүткерә торҙо ла, сыра яндырып, сыуалда һөйәлеп ҡуйған утынға, кәртәнән һүтелгән сытырға ут тоҡандырып ебәрҙе. Сыуал тәңгәлендә түшәмдәге тишеккә тығылған сепрәкте

алғас, тыш һыуығы бәреп инә башлағайны, ләкин ҡыҙып яңа башлаған уттың ялҡынлы тѳтѳнѳ һыуыҡты урамға кире этеп сығарҙы. Ѳй эсе яҡтырып киткәндәй булды. Ҡайһы бер нәмәләр күҙгә салына башланы. Түр баштағы кәштәлә ҡоршалған бер-ике сынаяҡ, һауыт-һаба йыуа торған таҡта ѳҫтѳндә ҡырҡ урындан ямалған тампаҡ самауыр, бер ике урындан тимер менән уратып алынған туҫтаҡтан башҡа йыһаз юҡ. Ҡѳндѳҙ кейеп йѳрѳгән алам-һалам кейем киҫәге барыһы ла балалары ѳҫтѳндә. Һике ѳҫтѳндә бер нисә урынынан ямалған буй-буй тѳшкән балаҫ, тѳпкѳ яҡта йѳнѳ ашалып бѳткән шыма кейеҙ — башҡа әйбер күренмәй. Биҙрәләге һыу ҡайнап сыҡҡансы, Абдрахман менән хужа үҙ-ара гәпләшеп ѳлгѳрҙѳләр.

— Ай-һай, һеҙҙең ул вазифағыҙҙы атҡарып сығыуығыҙ ике осло. Мѳхәммәтшәриф ахун ошо кѳндәрҙә волоста булып, үҙ кешеләре аша һеҙ бараһы бѳтә ауылдарҙа үҙ эшен үткәреп сыҡты. Бѳтә Ирәндек буйында уның һүҙе — һүҙ, законы — закон. Халыҡ уның һүҙенән сыҡмай, бѳтә урында ла уның тѳтѳнѳ йѳрѳй, — тип һѳйләп алды хужа.

Хужа ауыҙынан Мѳхәммәтшәрифтең элекке Орск ѳйәҙе ахуны икәнен, боронғоно ла, хәҙергене лә бик ныҡ күҙе таныһанын, ҡасандыр батша саҡырған думаның ағзаһы булып һайланыуын да белделәр. Хәҙер инде Абдрахман уйға ҡалды. Хужабикә боҫо сығып торған, кипкән еләк, ҡарағат япраҡтары һалынған, эҫе һыу һалып сыҡты. Аяҡтарын сисеп, аяҡ кейемдәрен сыуал ҡашында ултырған тәпәш ултырғысҡа киптерергә ҡуйҙылар ҙа ҡунаҡтар һике-ашъяулыҡ янына ултырышты. Абдрахман иң тѳпкә аяҡтарын салып ултырғайны, һуғыштан ике аяғын ѳҙҙѳрѳп ҡайтҡан зәғиф кешегә оҡшап ҡалды. Маргарита ҡырын ятып та, сүкәйеп тә ҡараны, ләкин аяҡтары ипкә килмәне.

— Вот шулай, башҡорт ауылдарын ҡыҙырып йѳрѳй башлаһаң, иң башта ултырырға ѳйрәнергә кәрәк. — Абдрахман ирәбе йылмайып ҡуйҙы. Маргарита серле генә итеп:

— Уға ғына ҡалһа, ѳйрәнербеҙ ҙә ул... — тине.

Маргарита тѳйѳнсѳгѳнән шѳкәрә, тоҙ, кәбеҫтә пирожкиҙары, ус аяһындай ҙурлыҡта сусҡа майы, тағы әллә ниҙәр сығарырға уйлағайны, Абдрахман Маргаританың ҡулын тотоп:

— Был тиклем аҙыҡ-әүҡәтте һиңә кем тейәп ебәрҙе? — тип һораны ла кѳлѳмһѳрәп ҡуйҙы.

— Кем булһын, әлеге лә баяғы изге йән Апполинарий Христофорович инде, — тине Маргарита.

— Уға ҙур рәхмәт инде хәстәрлеге ѳсѳн, ләкин, Рита,

сабыр ит! Бөтә нәмәләренде кире һал. Бынан һуң аҙыҡ-әүҡәткә тығылма, мин үҙем...

Был тиклем аҙыҡты күреп, хужаларҙың түңәрәкләнгән күҙҙәре, Абдрахман ул нәмәләрҙе кире тоҡҡа тығып ҡуйғас, моңһоуланып һүнде. Абдрахман үҙ сумкаһынан бөтә кешегә лә икешәр һыныҡ шөкәрә, башлы шәкәрҙе бысаҡ менән ярып, икешәр киҫәк таратып сыҡты. Һөрпөлдәтеп сәй эскән тауышҡа, табындағы һүҙгә тун аҫтында ятҡан ярым үлек тигәндәй балалар кәүҙәһе ҡыбырлап, тере икәнен белгертеп, ҡуҙғалып ҡуйҙы. Балаларының иң өлкәне, ҡырылған тумалаҡ башлыһы, күҙен ыуалап сәй эсеүселәргә ҡарап ултырҙы ла:

— Ҡалай былар! Беҙҙе йоҡлатып, үҙҙәре сәй эсеп ултыралар, — тип башҡаларын уята башланы.

Береһенән-береһе бәләкәй, күҙле дүрт һөлдә, һорапнитеп тормай, ашъяулыҡ тирәһен һырып алды. Уларҙың ҡыҙмы, малаймы икәнен айырыу мөмкин түгел, сөнки барыһы ла ҡырҡ ерҙән ямалып бөткән оҙон күлдәк кенә кейгәйне. Абдрахмандың ҡулынан тигәндәй тартып, үҙҙәренең ябыҡ, ҡоро һөйәк ҡулдарына шөкәрәне эләктергәс, улар уны ашарҙан алда бер-береһенең ҡулына ҡарап алды. Шунан умыртҡа һөйәктәре беленеп торған муйындарын бөгөп, кетерләтеп шөкәрә кимерергә керештеләр. Һуңынан икешәр киҫәк бармаҡ башындай шәкәр менән сәй ишараһын да эсеп алғас, балаларҙың күңелдәре күтәрелеп, был тиклем йомарт ағай кем икән тип, килгән кешеләргә өндәшмәй өңшәйеп ултырҙылар. Өлкән балалары бер киҫәк шәкәрен ашамай күлдәгенең итәгенә төйнәп ҡуйҙы. Шул арала уның ябыҡ аяҡтарының ут яҡтыһында күренеп ҡалған саты бер кемде лә ҡыҙыҡһындырманы.

## 5

Сәй эсеп бөткәс, хужалар ҡарайып, йылтырап бөткән ҡулдарының ябыҡ һыртын күрһәтеп, доға ҡылдылар. Еңгә кеше һауыт-һаба йыйыштырғанда, хужа:

— Ваҡыт та бик һуң, иптәштәргә урын һалып бирәйек, — тине.

Хужабикә үҙ аҫтарынан алып кейеҙ йәйерҙән алда, ойоған аяҡтарын һалындырып, һике йөҙлөгөндә ултырған Маргаританан:

— Әй, знакум, ити твоя мужикмы? — тип һораны, йәнәһе, урынды нисек йәйергә, тигәнде белергә теләне. Аяғын болғап ултырған Маргарита ике күҙенең береһен дә йоммай:

— Да, да, мой мужик, — тине.

Был һүҙҙе ишеткән Абдрахмандың бөтә тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте, ләкин «мин уның ире түгел», тип әйтергә баҙнат итә алманы. Шулай итеп, уларға өйҙөң аулаҡ осонда икеһенә бер түшәк йәйҙеләр. Толоп аҫтына ингәс тә Маргарита минең ҡосағына атылыр, тип стена ҡырында уны көтөп ятҡан Абдрахман бик ҡаты хataланды. Тик йөнлө жакетын ғына һалып, сисенмәй ҙә ятҡан Маргарита уға һыйыныу түгел, башын да теромәне. Ҡыҙҙың был аңлайышһыҙ ҡылығынан аптырашта ҡалған Абдрахман әҙерәк һүҙһеҙ генә ятты, күңеленән ниҙер көттө. Ләкин уға йөҙө менән әйләнеп, йылы, тылсымлы тынын бөркөп уның биленә ҡул һалыусы кеше булманы. Был ни хәл? Етмәһә, ҡыҙ биҙгәк тотҡан кеше һымаҡ бөтә тәне менән дер ҡалтырай. Эске дәрте тулып шашынған Абдрахман уның ут шикелле янған ҡолағына бәйләнешһеҙ, ләкин йөрәгенән сыҡҡан һүҙҙәр бышылдай: «Бәғерем, мин һине яратам! Аҡыллым минең, ошо донъяла бергенәм, был һинең нишләүең? Әллә минән ҡурҡаһыңмы?»

Егет ғишыҡ ғәйрәтенә ихтыяр ҡуйҙы. Ошо минутта уның йәшәгән эске донъяһы, уйы һәм бөтмөш хыялы ҡапыл күктән төшкән үҙ йондоҙо — Маргаритаға килеп текәлде...

Ҡыҙ һыҡтай-һыҡтай әкрен генә илай ине.

Абдрахмандың бөтә күңелен Маргаританы ысын йөрәктән йәлләү, әсе үкенеү тойғоһо солғап алды. «Нишләнем мин? Үҙ нәфсемә баш була алмай, нишләп һәләк иттем мин уны?» Ошо төндә ул «ошолор инде минең бәхетемә яҙғаны, уны мин бер ваҡытта ла ташламам, ул минең ғүмер юлдашым булыр», тип үҙенә ҡәһет бирҙе.

* * *

Ҡышҡы оҙон төн үтеп, ҡояш һауалағас ҡына, хужабикә яғып ебәргән сыуал утының шартлап-шартлап яныуы, түрбашта һауыт-һаба шалтырауы йәштәрҙе уятты.

Шинелен яурынына һалып, Абдрахман тышҡа сыҡты. Уны күҙҙең яуын алып торған, иртәнге ҡояш нурҙарын сағылдырып ятҡан ап-аҡ ҡар, ауыл өҫтөнә ҡоларҙай булып торған, кәртә артынан уҡ башланған тарбаҡ ботаҡтары өҫтөнә ҡар ятҡан имәндәр, шыршы-ҡарағайҙар ҡаршы алды. Бөгөн бөтә ер йөҙөндә унан дә бәхетле кеше юҡ ине. Уға яртылаш көрткә батып ултырған шөкәтһеҙ өйҙәр ҙә, манараһы бер яҡҡа ҡыйшайып барған, ҡоймалары һүтелгән мәсет тә, көсһөҙ ҡулына ағас көрәк тотоп унда-бында бер ҡар ташлап торған, аслыҡтан бите кибеп

ҡатҡан өй хужаһы ла матур булып күренде. Абдрахман тәнендә татлы арыу-талыу тойҙо, ләкин йонсоу ирҙең ҡулынан көрәген алып, ойоҡһотоп ҡар көрәргә кереште.

— Бына, кем, ҡустым, хәҙер ихатаға сығып ҡар көрәүҙән башҡа хәжәт ҡалманы. Малды елгәрҙек инде, кәртә-ҡураға сират ҡалды, уны ла яғып бөтөрөп киләбеҙ. Малтыуар ана шул кисәге әйткән Мөхәмәтшәриф ахунда, тағы ауылдың бер-ике байында ғына тороп ҡалды. Уларҙың аттары ла бар, үҙҙәре лә, малы ла туҡ. Кеше астан үлә, ә улар Орск, Хәлил, Юлыҡ йәрминкәләренә алып барып ит, май һата, сәрмәйә туплай. Билдәле, Совет власына һүҙ әйтеп булмай, ул үҙебеҙҙең власть, ләкин хәҙергә ныҡына алмайыраҡ ята әле. Донъяға әлеге кешеләр хужа, — Фәйзәхмәт, ағас көрәгенең һабына таянып, үҙ ҡайғыһын теҙҙе.

Абдрахман ян-яғына ҡаранды ла, йомош-юлға йөрөрлөк урын тапмағас, ҡатҡан ҡарҙан өйөп, бәҙрәф эшләй башланы. Бәлки, ас кешегә уныһы ла артыҡтыр, ләкин ул үҙенән бигерәк Маргаритаһын уйланы.

Бына Маргарита ла урамға сыҡты. «Хәҙер килеп минең муйынға аҫылыныр ҙа, сит кешенән ятһынып тормай, мине супылдатып үбә башлар». Мәгәр Абдрахман бушҡа ғына ҡурҡты. Төн сыҡҡансы алһыу яңаҡтары шиңеп, күҙ нурҙары һүнеп ҡалған Маргарита, эйәһенән шелтә алған көсөк һымаҡ, ситтә генә өндәшмәй бер аҙ торҙо ла моңһоуланып ҡояшҡа ҡараны. Ҡар көрәүҙән туҡтап, Абдрахман тағы ла һүҙһеҙ ниҙер күҙәткән никахһыҙ кәләшенә ҡараны. Уның элекке ғәмһеҙлек, балалыҡ саҡтары уйнап торған күңеле һүрелгәндәй, нур атып торған көләс етдилек һыҙаттары ҡуйыра төшкәндәй ине.

Иртәнге сәйҙе эстеләр ҙә өсәүләшеп сельсоветҡа йүнәлделәр.

— Бына инде, ҡустым, үҙең күр! Утыҙ домахужаинлы Атнағолда йәмғеһе дүрт-биш мөрйә төтөн сығара. Ҡалғанының төтөн сығарырлыҡ ҡарыуы юҡ, Әмеректең ысталаун көтөп яталар... Бына ошо була инде сельсоветыбыҙ, — тине Фәйзәхмәт, ишеккә арҡыры бәйләгән ағас типкене сисеп. Артынса йәштәр ҙә инде. Ишекте аша атлағас та, Абдрахман «Әллә Ялан ауылының совет йортон Атнағолға күсереп килтерҙеләрме икән?» тип көләмһөрәп ҡуйҙы, сөнки был йорт та үҙенең эске күренеше менән тегеһенән бер ни менән дә айырылмай — ике һайыҫҡан шикелле. Тик бында мейес урынында — сыуал, уныһы ла яғылмаған, тын боҫлана.

— Ну, туғандар, эште ниҙән башлайбыҙ? — тине Фәйзәхмәт, үҙ урынына ултырып.

— Бына ул эште ҡайҙа үткәреүҙе тәғәйенләйек тә, шунан өй беренсә әйтеп сығырға кәрәк, — тине Абдрахман, стенаға терәлгән эскәмйәгә яҡынлашып.

— Халыҡты бер урынға йыя алмабыҙ. Сөнки ул урынға тик ҡарыулы ир-ат ҡына килә алыр. Ҡалған кешеләрҙе өйҙәренә йөрөп ҡаҙарға тура килер.

— Шулай ҙа ярай.

Ҡәнсәгә Топорин яғынан килеп, яңы ғына ауыл балаларын уҡыта башлаған ҡыҙҙы, бер аҙна ғына элгәре Ҡыҙыл Армиянан ҡайтҡан ике йәш ҡыҙылармеецты саҡырҙылар. Үҙе кеүек егеттәрҙе күргәс, Абдрахмандың күңеле күтәрелеп китте. Шул ыңғайы танышып, һөйләшеп тә өлгөрҙөләр. Фәйзәхмәт уларҙы ултыртып, нотоҡҡа төшөргә уйлағайны, армеецтарҙың береһе:

— Ағай, һин сурытма! Мәсьәлә асыҡ, килә алғандарын Мөхәмәтшәриф ахундың алғы өйөнә саҡырабыҙ ҙа, килә алмағандарының өйөнә барабыҙ, — тине.

— Эй, ҡустым, ҡустым! Нимә ауыҙ күтәреп буш хәбәр һөйләп торорға — Мөхәмәтшәриф һине өйөнә индерәме һуң? Хәҙер эттәрен ысҡындырып, көпә-көндөҙ эттәренән талатыр.

— Тейеп кенә ҡараһын! Беҙ ғүмер буйы шуларҙың этенән дә, үҙенән дә таланып йәшәрбеҙме? Беҙ ни өсөн власть өсөн ҡан түктек?

— Һин, Хәйрулла, ҡыҙма әле! Өтөлөп йығылма! Эште һәүетемсә генә ҡылайыҡ!

— Һәүетемсәһе шул: хәҙер мин ҡайтып ҡылыс, мылтығымды тағып киләм дә, ахун моронон тығып ҡараһын,— Хәйрулла ишекте шарт ябып, сығып та юғалды. Бер аҙҙан ҡулына мылтыҡ тотоп, биленә ҡылыс тағып, ҡәҙимге һалдат булып, кәнсәгә яңынан килеп инмәһенме.

— Ана, тәҙрәгеҙҙән ҡарағыҙ! Минең мылтыҡ-ҡылыс тағып, кәнсәгә килә ятҡанды күреп, Мөхәмәтшәриф ҡама тунын кейгән дә бала-сағаларын, абыстайын эйәртеп, кәнсәгә үҙе килә ята. Һиҙә эштең ҡайҙа барырын, ҡарт төлкө.

Бөтә кеше тәҙрәгә һарылды. Ысынлап та, урам аша ҡаҙ артынан эйәргән бәпкәләр шикелле эйәртенешеп, Мөхәмәтшәрифтәр бөтә ғаиләһе менән кәнсәгә килеп тулды.

— Әссәләмәғәләйкүм, товарищтар!

— Вәғәләйкүмәссәләм, Мөхәмәтшәриф уҙаман!

— Бына холераға, сәсәк һәм дә ҡыҙылса ауырыуына ҡаршы укол ҡаҙайҙар икән, тип ишеттем. Уны урыҫса прививка тиҙәр. Бына шуға үҙем балаларҙы ла эйәртеп килеп еттем. Минең өсөн ул артыҡ яңылыҡ түгел. Государственный думаның заседаниеһы ваҡытында Санкт-Петербурҙа, йәғни хәҙерге Питероградта, Его Величествоның лазаре-

тына алып барып, беҙгә холераға ҡаршы прививка эшләгәйнеләр.

— Әйҙә, нимә ҡарап ултыраһығыҙ, тундарығыҙҙы һалығыҙ.

— Кем бында старший?

— Мин, — тип Абдрахман алға сыҡты.

— Ҡайһы ағзаға, йәғни, ҡайһы ергә яһайһығыҙ ул нәмәгеҙҙе, мырҙа?

— Һыртығыҙға.

— Беҙҙең һыртта ғүмер буйы үсегеҙ булды инде, — Мөхәмәтшәриф мыш-мыш килеп сисенеп, һимеҙ арҡаһын Абдрахманға ҡуйҙы.

— Әй, артыҡ ауыртмай икән дә, тик сәләмәтлеккә генә яҙһын инде, — тип, ҡартлас яңынан кейенә башланы.

— Минең ҡатын, ҡыҙҙарыма һин ҡаҙамай торғанһыңдыр бит? — ахун Маргарита яғына ҡаранды.

— Эйе, эйе, ҡатын-ҡыҙҙарға, ана, медсестра ҡаҙай.

Ирҙәр тышта тапанып торғансы, Маргарита ҡатын-ҡыҙға укол эшләне. Балалары тышҡа сыҡҡас, Мөхәмәтшәриф Абдрахманға ҡарап:

— Ырымбур губернаһы, Орск өйәҙенең ахуны элекке статский Советник чинына бәрәбәр чин йөрөткән «Ваше высокородие» Макенов Мөхәмәтшәриф, Совет власының был сараһын ике ҡул менән хуплап, вабаға ҡаршы уколды ауылда беренсе булып ҡаҙатты, тип ҡағыҙҙарығыҙға теркәп ҡуйығыҙ, — тине лә алдан китә башланы.

Совет рәйесе Фәйзәхмәт, әллә эргәһендә йәштәр барға батырланыпмы, тамаҡ ҡырып, һүҙ ҡатты:

— Мөхәмәтшәриф ағай, китмәйерәк тороғоҙ әле. Һөйләшәһе кәңәш бар.

— Ул ниткән кәңәш? Һеҙҙең юлығыҙ башҡа — минең юлым башҡа. Ана, иптәш Ленинығыҙ менән кәңәш итешегеҙ. Һеҙҙең кәңәшсегеҙ ҙә, остазығыҙ ҙа шул бит, — тип урынынан ҡуҙғалды. Ләкин ҡыҙылармеец уның юлына арҡыры торҙо.

— Марш сельсоветҡа!

Мөхәмәтшәриф теге ҡыҙылармеец ауылдашын баштан-аяҡ ҡарап торҙо ла:

— Бына ошолор инде заман ахырының етеүе: ул ғәрәсәт килеп етһә, ата — улын, инә ҡыҙын белмәҫ тигән китапта. Был да шуның аҙабылыр инде. Мин, улым, һинең атаңдың остазы булам. Һинең атаң миндә өс ҡыш мәҙрәсәлә шәкерт булды. Вәй, заман! Килде бит әҙәм башына бер афәт! — тип мығырлай-мығырлай, ахун, нисек кенә елкәһе ҡорошмаһын, сельсоветҡа кире инергә мәжбүр булды.

Фәйзәхмат турайып, ҡапыл үҙ урынынан торҙо ла, нин-

дәйҙер эске ғорурлыҡ, батырлыҡ менән тауышын көрәйтеп, ҡарар уҡыған мәхкәмә[1] хакимы[2] шикелле:

— Бына бында беҙ кәңәш ҡылдыҡ та, ошо хөкүмәт сараһын үтәү маҡсатында, һинең алғы, йәғни мал өйөңә, кеше йыйырға булдыҡ. Сөнки тигәндә, ауылда бүтән яғыла торған йылы урын юҡ, — тигәс, ян-яғына күҙен йүгертеп: «Нисек, шулай дөрөҫ әйттемме?» тигән ҡараш ташланы. Абдрахмандың һәм башҡа кешеләрҙең хуплағанын тойоп, тәкәббер генә урынына ултырҙы.

Мөхәмәтшәриф йәмшәйгән табалай битен, ҡалын ирендәрен йәмрәйтеп, ҡаштарын төйнәп, көрәктәй һаҡалын һимеҙ бармаҡтары менән тарап алды.

— Бәлки, бетлеғошто йыйыу өсөн минең күрнәсәмде алырһығыҙ: йыйыштырылған, йылы. Бәлки, улар килеүенә абыстайҙан ҡаҙан аҫтырып ҡуйырғалыр?

— Һин, Мөхәмәтшәриф ағай, улай кәкрегә һаплама, беҙгә һинең күрнәсәң хәҙергә хәжәт түгел, әгәр йәмғиәткә хәжәт булһа, кәкүк һымаҡ алдан саҡырма, уныһын да алырбыҙ.

— Әйҙә, таларға икән таларға! Һеҙҙең бөтә советығыҙ шуның өсөн яратылған, — ахун яй ғына ҡалҡынды ла ишеккә йүнәлде.

— Бына шул, ағай, ҡолағыңа киртеп ҡуй. Башҡаса һөйләшеү булмаҫ, ләкин урамыңдағы албаҫтылай этеңде теләһә ҡайҙа йәшер. Берәр кешене талатып мәсүлиәткә[1] тартылып торма!

* * *

Мөхәмәтшәриф ҡайтыу менән мал өйөнөң ишеге төбөндә ултырған ике биҙрә һыуҙы тибеп осорҙо, буш биҙрәләр дыңғырлап тәгәрәй-тәгәрәй һике аҫтына инеп ятты. Шунан ул иренең тауышын ишетеп килеп ингән абыстайына йәбеште.

— Ҡасан ошо һеҙҙең мал өйөндә тәртип булыр! Теләһә ни ҡасан ҡарама, аяҡ аҫтында ята. Ҡайҙа теге аҫрау ором тамағың? Өйҙө йыйыштырығыҙ! Хәҙер «ҡунаҡтар» килә, — тине лә күҙенә шылып төшкән һыуһар бүреген башынан йолҡоп мөйөшкә ырғытты, түш кеҫәһенән ебәк яулыҡ сығарып, яҫы битен һөртөп алды. Мейес артынан сығып, бер йөнтәҫ бохар бесәйе һуҙылған билен аҫҡа

[1] Мәхкәмә — суд.
[2] Хаким — судья.
[1] Мәсүлиәт — яуаплылыҡ.

бөгөп мырылдап кирелде лә хужаһының ҡуңысы нағышлап баҫылған быймаһына һыртын терәп ышҡынырға керешә. Башта, күрәһең, ниҙер уйланып бесәйҙең аяҡ аҫтында уралғанын һиҙмәй ултырған Мөхәмәтшәриф ҡапыл:

— П...ш...ол...л, мәлғүн! — тип мәхлүкте лә тибеп осорҙо.

Ҡойроғон өҫкә күтәргән бесәй әсе итеп мыяуланы ла сыҡҡан урынына кире инеп юғалды. Бер аҙ һүҙһеҙ ултырғас, абыстай әкрен генә:

— Атаһы, ул ҡунаҡтар ниндәй кешеләр? Ашты нисегерәк таярларға ҡушаһың? — тип һораны.

Бисәһенең ошо вайымһыҙ һорауына асыуы килеп, хужа:

— Улармы? Улар: беренсенән, һинең сыбыҡ осо туғаның сельский йораты Фәйзәхмәт бала-сағаһы менән, волостан эйәртенешеп килгән ике төртөңгөр, мылтыҡ, ҡылысын аҫҡан, ҡыпыштан ҡоро ҡалмаған Хәйрулла. Бер ҡаҙан етмәҫ — ауылдың бөтә фәҡир-фоҡороһ, осаһына ғүмерендә бер ҡат йүнле ыштан кейә алмаған, үҙҙәре әйтмәксе, ауылдың йәмғе ярлы-ялпыһы килә, — тине.

Башына: «Әллә бынауындай ауыр мәлдә, йот йылында, ас халыҡты йыйып, ахун хәҙрәттәре үҙенең ҡарт көнөндә фатиха алырға уйлаймы?» тигән фекер килгән абыстай:

— Улай булғас, ашты теге думанан ҡайтҡан йылы һине туйлайбыҙ тип тыу бейә һуйып ит бешергән дәү ҡаҙанға һалырға тура килер, — тип иренә тилмереп ҡараны.

— Эйе, аңра бәрән, кәбәк баш! Бөтә өйәҙҙең аңраһын тубы менән миңә биргән хоҙай! Укол ҡаҙата торған бөтә ауылдың аяғынан баҫҡан әҙәме ошо өйөңә йыйыла. Фәйзәхмәт ҡәйнеш шулай хәл ҡылған. Аңланыңмы, тинтәк? Ошо өйҙә булған бөтә аҙыҡ-түлегеңде алдан йыйып йәшереп ҡуй, Атнағолдоң ас хәйерселәре өйөңдө һыпырып алып сығып китмәҫ тимә!

— Һ...ә...лл...ә. Баштан шулай тиҙәр уны. Ул ниткән эш? Баһымсаҡҡа баҡа айғыр тигәндәй, үткән сходын да беҙҙең өйҙә йыйҙылар, ул ни беҙҙең йортто ҡаҙнаға алдылар?

— Ярар, һөйләнмә! Ҡушҡанды эшлә! — Ләкин Мөхәмәтшәриф был эште шул көйө генә ҡалдырмаҫҡа, «һарыуһыҙ коммундарҙың арт һабағын уҡытырға» ҡарар ҡылды.

Күп тә үтмәй, сельсовет үҙ артынан бөтә «ҡойроғон» һөйрәп, ахундың бейек күтәрмәле алғы өйөнә килеп укол алдылар.

Ике һалдат утыҙ өйлө Атнағолдо сирек сәғәттә урап

сыкты. Лəкин күп кешенең өйө эстəн бикле икəн. Хатта килергə хəлдəре бары ла дауанан ҡәтғи баш тартты.

— Беҙ сиргə юлыҡһаҡ, ауыл муллаһына йөрөйбөҙ. Беҙгə шуның өшкөрөмө килешə.

— Нисек бер ҡасан да аяҡ баҫмаған ахун өйөнə ашаҡлап инəйек ти.

— Һеҙ укол яһаныгыҙ ҙа киттегеҙ. Аҙаҡ укол алған бөтə əҙəмендə ул эт итə ләһə.

Бер һүҙ менəн əйткəндə, ахун өйөнə инергə батырсылығы еткəндəр аҙ табылды.

Абдрахман ахун менəн һөйлəшеп ҡарарға самалағайны ла, тегеһе һыртын ҡуйҙы.

— Бына мин Советығыҙҙың ҡарарына буйһоноп, — оно урында ул эре генə торған Фəйзəхмəткə тишерҙəй булып ҡарап алды, — үҙ өйөмдө биргəнмен. Ҡалғаны — һеҙҙең эш, минең хəбəрем дə, ай-вайым да юҡ. Өй һайын йөрөп, мин ул əҙəмдəрегеҙҙе өгөтлəй алмайын, биғәйбә, — тине лə үҙенең төпкө өйөнə инеп юғалды.

Ауыл халҡы нисек кенə ҡырталашмаһын, ҡайһыһын өгөтлəп, ҡайһыһын өркөтөп тигəндəй, Абдрахман менəн Маргарита кислəтеп кенə булһа ла, Атнағол ауылында прививка үткəреп ебəрҙелəр. Ҡайһы берҙəре менəн ишек аша һөйлəшеп, Абдрахман:

— Əгəр ул вабаға ҡаршы уколдың кəрəге булмаһа, ахун иртə менəн килеп үҙенə һəм бөтə ғаилəһенə укол ҡаратып китмəҫ ине, — тип тə ҡараны.

— Ул ахун ваба тейһə лə, теймəһə лə үлмəҫ. Уның тамағы туҡ, өҫтө бөтөн — дүрт яғы ҡибла.

— Беҙ ул вабаһыҙ ҙа үлергə ятабыҙ. Өсөнсө көн ыстанауына ла бара алмайбыҙ, хəлебеҙ юҡ — асбыҙ. Энə ҡаян кешене ыҙалатҡансы, асығып шешенеп ултырған балаларыма берəй телем икмəк таратһағыҙ икəн.

Көн дə бер тапҡыр бешерелеп ашатыла торған, лəкин үгə ла барырлыҡ ҡарыуы ҡалмаған кешелəрҙең исемлеге төҙөлдө. Өй беренсə йөрөп, ундайҙарға аш таратып бирергə булдылар.

Урта төштə бер йорт бөтөнлəй шар асыҡ булып сыҡты. Күптəн яғылмаған өйҙə, ниндəйҙер əҙəм өркөтөрлөк тынлыҡ. Өй эсен мəйет еҫе баҫҡан. Лəкин эсе ҡараңғы. Сыгып ҡарын көрəп өйҙөң тəҙрəлəрен астылар. Ҡискə нурланкан көн яҡтыһында һике мөйөшөндə иҫке алам-һалым кейем, иҫке сəкмəн аҫтында өс балаһын ҡосаҡлап йəн биргəн бер ҡатынды таптылар. Дүртеһенең дə тəне һыуынып, күгəрə башлауына ҡарағанда, уларҙың бер нисə көн элек үлеүҙəре асыҡланды Балаларының бөгəрлəнеп, арҡаларына йəбешкəн эстəрен ҡосаҡлап ятыуҙарына

ҡарап, уларҙың астан үлеүен төҫмөрләү ҡыйын түгел. Уларҙы иртәгә, көн яҡтыһында, тәрбиәләп, бер ҡәбергә күмергә хәл ителде.

## 6

«Бәдбәхеттәр»ҙең эше тулыһынса барып сыҡмауына сиктән тыш шатланған Мөхәмәтшәриф был «совет көсөктәре»нән үс алырға мәкерле уй ҡорҙо. Уларҙың нимә һөйләүҙәрен, ахун хаҡында ниндәй фекерҙә булыуҙарын, ҡайҙа ҡуна төшөүҙәрен аҫтыртын ғына күҙәтеп, тыңлап йөрөү өсөн ул, беренсенән, былар араһына үҙенең бер шымсыһын ебәрҙе. Икенсенән, үҙенең төпкө өйөнә төнгө йылҡы көтөүсеһе Солтанмәхмүтте саҡыртты. Ул килеп ингәс, түрҙә тәсбих тартып ултырған ахун, етеҙ бесәй шикелле һикереп иҙәнгә төштө лә өй ишегенең келәһен элеп ҡуйҙы.

— Ултыр әле, мырҙа! Ҡис тә булып килә. Билғау аҫтыңды нығыттыңмы? Унда һары май һалып һиңә ҡоротло һурпа бирергә ҡушҡайным.

— Булды, булды, ахун ағай! Сепрәккә төрөп абыстай «төндә асығып китһәң, ашарһың» тип, дүрт-биш телем йылҡы ҡаҙыһы ла һалды әле.

— Ярай, ярай, мырҙа. Бик яҡшы булған. Һинең һүҙ йөрөтмәүең, дошман араһында ошаҡ ташымауың миңә күптән мәғлүм. Бауырҙап ятып хеҙмәт итеүеңде Аллаһы тәғәлә күреп тора. Буш итмәҫ. Килешеү буйынса бәлә-ҡаҙаһыҙ йылҡыны ҡара ергә баҫтырһаң, бер урта бармаҡ һымаҡ ҡонажын вәғәҙә иткәнмен. Ана, яңғыҙ йөрөгәнсе Һылыубикәгә никах уҡытырбыҙ ҙа, үҙ алдыңа донъя көтә башларһың. Һине ҡыумайым мин. Балам хоҡуғында ҡалырһың. Әйҙә йөрөһөн теге ҡыутомшоҡ сабакылар әҙер донъянан ҡасып, эт һуғарып. Имеш, «аталарынан ваз кисеп, Совет юлына күскәндәр». Теге милицияла йөрөгән ләғнәт Әбделхаҡ менән Мирсәйетте әйтәм әле.

— Рәхмәт инде, ахун ағай. Мәрхәмәтегеҙ өсөн рәхмәт.

— Солтанмәхмүт мырҙа, һин бөгөн иртәрәк ҡуҙғал. Теге Ғәҙелша мәмерйәһендә йәшеренеп ятҡан Унасов әтрәтенең өс кешеһен тап. Улар бөгөн ҡараңғы төшөп, ай байыр алдынан ҡоралдарын алып, бында килеп етһендәр. «Эш бар», тип әйтте тиерһең. Ҡөтөүҙән менгегә өйрәтелгән өс ат тотоп бирерһең. Эйәр-өпсөн алып торма. Өс йүгән алһаң, еткән. Яйҙаҡ булһа ла, килеп етерҙәр әле, осалары тишелмәҫ. Улар, һин барып күренеү менән, иң башта тамаҡ таптырасаҡ. Ана, ишек төбөндә торған ҡуржынға ит-май, быжыр шешәле ике һауыт араҡы һалып ал.

Уныһын абыстайың әҙерләп бирер. Бар, изге эште хоҙай ашыҡтырырға ҡушҡан.

Көн буйы бергә йөрөп, муйынынан ҡылыс-мылтыҡ төшөрмәгән Хәйрулла менән Абдрахман дуҫлашырға ла өлгөрҙө. Уның етеҙлеге, ауаныраҡ батырлығы, кешегә ярҙамға атылып тороуы Абдрахман күңеленә хуш килде, ул бер арала:

— Хәйрулла ҡорҙаш! Бына ошо минең кәләш инде, — тип Маргарита менән таныштырҙы. — Дуҫ булышайыҡ, юл төшкәндә беҙгә, Ялан ауылына, килә-китә йөрө, ташлашмайыҡ.

— Була ул! Эшебеҙ, уйыбыҙ бер бит. Күпме һуғыш утын күреп, тере ҡайттыҡ! Хәҙер инде, ҡулға-ҡул тотошоп, шул Совет власын бына Атнағолда ла урынлаштыраһы ҡалды. Ана тегеләр, — һалдат Мөхәмәтшәриф өйөнә, ҡынынан һурып, ҡылысының осо менән төртөп күрһәтте, — беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың ҡанын күп эстеләр инде. Етте! Уларҙы елкәләренән тотоп бырғарға мөҙҙәт килде!

Ул Абдрахман менән Маргаританы йоҡларға үҙҙәренә алып ҡайтты.

Хәйрулла өйөндә лә һыйыр мөгөҙөнә элерлек ҡаралты юҡ. Шул уҡ ҡаҡ һике, ҡоромға буялып бөткән сыуал, кинder еп уратып нығытылған бер-ике пар шәшке, тимер менән ҡоршалған һауыт-һаба. Сәйе булмаһа ла, был өйҙә самауыр ҡайнаттылар.

— Атай Герман һуғышында үлеп ҡалды. Атайҙың үлем ҡағыҙы менән ҡуша уның түшендә йөрөгән бер Георгий кресы һәм миҙалы ҡайтты. Ана, әсәй менән икәүләп көңгөр ҡаңғыр итеп донъя көтөп ятҡан булабыҙ, — тип көлдөксәлә көлгә күмелгән таба аҫтынан сөсө икмәккә оҡшаған түңәрәк нәмә сығарып, уның көлөн сепрәк менән һөртөп маташҡан хужабикәгә күрһәтте.

— Мал-тыуар юҡ, атайҙың ҡола аты, бер һыйырынан башҡа малы булманы ла. Аты ҡазаланып, саҡ бысаҡҡа өлгөрөп һуйғандар. Һыйырҙы ла шул үткән йыл үлән булмау сәбәпле, бесән әҙерләй алмағас, һуйғандар, — Хәйрулла һике йөҙлөгөндә ултырып мылтығын таҙартҡан арала үҙ хәлдәрен һөйләп алды. — Һәр ҡасан яһаулы тотам мылтыҡты. Донъялар бик буталсыҡ бит. Юҡ-юҡ та урманда төрмәнән ҡасып йөрөгән бандиттар килеп сыҡҡылай. Былай ҙа ас, фәҡир-фоҡараны бик йәберләйҙәр. Мөхәмәтшәриф кеүек байлығынан хаттин ашып ҡоторонған кешеләргә теймәйҙәр улар, — тип мылтыҡ, ҡылысын ишек төбөндәге сөйгә элеп ҡуйҙы.

Бер аҙҙан сәйгә ултырҙылар. Ҡасандыр үҙенә төҫ булған, хәҙер инде һелте менән йыйыуҙан һарғая төшкән

кешмир яулығын яҙып ябынған, алсаҡ йөҙлө, кәүҙәгә, улы кеүек, һонтор апай эргәһендә ултырған ҡарайып бөткән сәйнүккә һындырып еләк сәйе һалды ла сәйнүген самауырға кейҙерелгән камфаркаға ултыртты.

— Әсәй, самауырыңды тығып ҡуй, ҡунаҡтарҙың башына еҫ тейеп ҡуйыуы бар.

— Ярай, ярай, зыян юҡ. Беҙ ҙә шул самауыр еҫен еҫкәп үҫкән кешеләрбеҙ, — тине Абдрахман, ашъяулыҡ ҡырынан урын алып.

— Артыҡ һый-хөрмәт юҡ, балалар. Заманы шундай. — Хәйрулланың әсеһе алабута менән ағас ҡайырын онтап, ҡул тирмәнендә тартып бешергән, баяғы усаҡтан алған сөсө, дөм-ҡара икмәген бүлә башланы.

— Апай, ул икмәгегеҙгә оронмағыҙ әле һеҙ. Бында беҙҙең үҙ хәрезебеҙ бар, беҙҙекенән дә ауыҙ итегеҙ, — тип Абдрахман Маргаританың тоҡсайынан әйберҙәрен сығара башланы. Берәр шөкәрә, берәр пирожки таратып сыҡты ла:

— Бынытын оло кешене алдап, апайға тоттороп булмаҫ инде, — тип, кеҫәһенән бәке сығарып, ҡуңыр-көрән сусҡа майы телде. — Бына беҙ, өсәүләп, гонаһын иңебеҙгә алып, ашамай булдыра алмабыҙ.

Ас булыуына ҡарамаҫтан, хужабикә танауын сирып, ауыҙын яулығының осо менән ҡапланы.

Сәй эсеп бөткәс, шәмдең майы бөтә тип, донъя хәлдәрен төпсөп ултыра алманылар, йоҡларға ашыҡтылар. Хужа ҡатын «урынды нисек һалырға?» тип һораманы, күрәһең, Хәйрулла Маргаританың кемлеген уға алдан әйтеп өлгөргән. Сәй эскәндә күҙенең ҡойроғо менән уға бер нисә уҫал ҡараш ташлауынан, хужабикә Абдрахмандың былайтып «сит енестән кәләш алыуын» хупламауын аңланы.

## 7

Төн уртаһы етеп, кистән Ирәндектән өргән ел көслө ҡар буранына әйләнеп, ауыл эргәһендәге япраҡһыҙ ағастарҙы ныҒыраҡ шаулатҡан сағында, Мөхәмәтшәрифтең бүреләй эттәрен абалатып, уның ҡапҡаһы төбөнә өс һыбайлы килеп туҡтаны. Шәп килеп, ҡапыл туҡтаған аттар, бер урында тора алмай, алғы аяҡтары менән ҡар сапсып, өҙөп-өҙөп бышҡырып алды. Өҫтән яуып, ерҙә ыжғыр буран булыуға ҡарамаҫтан, бөйөрҙәрен йыш-йыш һуҡҡан аттар өҫтөндә ҡар әҫәре юҡ, тик тирә-яҡҡа йылы ат еҫе аңҡытып, боҫ күтәрелде.

Шуны ғына көтөп ятҡан йоҡоһоҙ Мөхәмәтшәриф һы-

бәйлыларҙы ҙур ҡапҡаһынан ихатаға индерҙе, ялсыһына аттарҙың башын әүеҫлек түшәменә күтәртеп бәйләп һыуытырға ҡуйырға әмер бирҙе лә, төнгө кешеләрҙе өйгә саҡырырҙан алда, бәләкәй ҡапҡаһын асып, ауылды үрлетүбәнле ҡарап, бер аҙ ҡолағына ҡулын ҡуйып тауыш тыңланы, ләкин выжлаған, буран тауышынан башҡа бер шипкерт тә ишетмәне. «Йә, әлхәмдилилла! Ауыл тыныс!» Килеүселәрҙе мал өйөнә индерҙе. Ике аҫмалы шәм менән яҡтыртылған өйҙөң түпһаһын аша атлау менән төнгө ҡунаҡтарҙың яҡтыға күҙҙәре сағылды. Өсөһө лә берҙәй сипылауланып ҡыҙарған, һыуыҡта һурпаланып килгән күҙҙәрен ҡулдары менән баҫтылар. Кемдер әкрен генә:

— Әссәләмәғәләйкүм! — тигәс, төлкө тунын сисеп маташҡан Мөхәмәтшәриф:

— Ни һин, һаташып бараһыңмы әллә? Өйҙә сыуал артында ятҡан бохар бесәйенән башҡа йән эйәһе юҡ бит, — тип аҫҡы ҡалын иренен һалындырып, мыҫҡыл иткән кешеләй ауыҙын салыштырып ҡуйҙы. Араларынан һаҡал-мыйығын боҙ ҡаплаған урта йәштәрҙәге мыҡты кәүҙәлеһе — быларҙың башлыҡ йораты булыу кәрәк — өйҙө яҡтыртып торған шәмгә ишара яһап, урамға эйәк атҡайны, Мөхәмәтшәриф уны тиҙ генә аңлап:

— Хафаланма! Тәҙрә ҡапҡастары екһеҙ, бер шипкерт тә булыуы мөмкин түгел, — тип тынысландырҙы.

Нигән кешеләр түрбашта бешеп ултырған йылҡы итенең еҫен һиҙеп, өшөгән танауҙарын мырш-мырш тартып, ҡулдарын йылытты.

— Йә, егеттәр, аяҡтарығыҙҙы сисегеҙ ҙә ҡулдарығыҙҙы һабынлап йыуып ашҡа ултырығыҙ. Битегеҙҙе лә йыуып, мосолман булып алһағыҙ ҙа килешер ине. — Үҙе төҫөнә сығармай ғына: «Хәшәрәттәр! Башҡа ваҡыт булһа, мин һеҙ шапшаҡтар менән бергә ултырып бер табаҡтан ашау түгел, ана, Алабай менән Кетмергә аш ҡойған кәритәне лә бирмәҫ инем!» тип уйланы. «Бына Совет элекке өйәҙҙең ахунды кемдәр менән тиңләне, ошо һаҫып бөткән мәмерйә кешеләре менән бер табында ултыр инде», тип, Советты тағы һүгеп алды.

Тегә һаҡалтай, олораҡы, тубыҡ тиңенән күрпәһен сисергә йыйынғайны:

— Ярар, егеттәр, өй ҙә һалҡынса күренә. Сисенмәй генә ашаһағыҙ ҙа ярар, — тип береһен дә сисендермәне. Ауыҙын ослайтып, өҫкә өрөп ҡуйған булды. Хәйләкәр ахун асылда кейеҙҙәрен ҡыҙғанды.

Абыстай шым ғына аш әҙерләп биргәс, төпкө өйгә сығып китте.

Мөхәмәтшәриф ашъяулыҡ йәйҙе лә ҙур табаҡ менән

бишбармаҡ, сәскә төшкән батмуста боҫоратып ит килтереп ултыртты. Өс кешенең алты күҙе ит турай башлаған ахунға текәлде. «Ағай аш алдынан берәр сеүәтә шарап һалып бирмәҫме икән?» Уларҙың теләген аңлаған шикелле, ахун һике аҫтынан бер сирек «Верхурал» араҡыһын һөйрәп сығарҙы ла ваҡ ҡына сеүәтәләргә һала башланы. Иң тәүҙә: «Изге эшебеҙ уң булһын», тип үҙе бер сеүәтә тондорҙо, унан бер киҫәк йомшаҡ ит киҫәге һоғондо. Тегеләр ҙә берәр сеүәтә төшөрөп алдылар ҙа, йығылып ятып, бүре һымаҡ ашарға керештеләр. Яңынан берәр сеүәтә һемереп алғас, әҙләп-әҙләп телдәре лә асылды. Ахундың табаҡҡа ынтылмағанын күргәс, теге һаҡалтайы:

— Әллә, ахун хәҙрәттәре, берҙе һоғондорайыммы? — тигәйне, хужа, танауын ситкә бороп: — Юҡ, юҡ, мырҙа, кем, Дәүләткирәй, мин ашҡа үҙем генә етешермен, беҙ абыстай менән яңы ғына ашап туйғайныҡ, — тип ҡотолдо.

— Ярай, әләйһә, көсләү — беҙҙән, ашау — һеҙҙән, — тине лә Дәүләткирәй тигәне, арандай ауыҙын асып, усы өймәләм бишбармаҡты үҙе һоғондо, ике уртын тумпайтып, лас-лос сәйнәргә керește. Тамаҡ туйҙырып, яңынан ҡул сайҡағас, Дәүләткирәй ашыҡмай ғына һүҙ башланы.

— Йә, абзый, беҙ бөтөнләй ләх булып китмәҫ борон йомошоңдо һөйләп бир. Беҙҙе, үҙең беләһең — һинең йомошоңдан баш тартҡан юҡ.

— Иншалла, уныһы хаҡ. Хеҙмәтегеҙ ерҙә ятып ҡалмаҫ. Ошоға тиклем мин дә һеҙҙең алда ҡом түләүле бурысҡа ҡалғаным юҡ шикелле?

— Шулай, шулай, дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ.

— Эш түбәндәгесә тора, — ахун уңайланҡырап ултырҙы ла, тауышын әкренәйтеп, һүҙ ҡуйыртты. — Бына ауылға килеп, ике кафыр камун остоғо — береһе ир, береһе мәрйә ҡыҙы — вабаға ҡаршы укол яһап, халыҡты ҡотортоп йөрөй. Ир кешеһе һалдаттан яңы ҡайтҡан булыр кәрәк, Ялан ауылы кешеһе Манап хәҙрәттең элекке шәкерте тип әйтәләр. Бына шул әҙәмдәр халыҡ араһында отҡо таратып, ата-олаталарыбыҙҙан ҡалған ғөрөф-ғәҙәтте боҙмаға ауыл халҡын өндәй. Үҙемде лә бала-сағa алдында битәрләп ташланылар. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул: яңы ҡыҙылдарҙа йөрөп ҡайтҡан Хәйруллаға төшкәндәр. Йоҡоларының хәҙер иң тәмле сағы, барып баҫырға кәрәк.

— Һуң, уларҙы нишләтәбеҙ?

Был һораүҙан ҡапыл асыуы ҡабарған ахун:

— Нишләтәбеҙ?! Нишләтәбеҙ?! Йоҡоларынан уятаһығыҙ ҙа ошо ҡалған ашҡа саҡыраһығыҙ, — тип ажғырҙы.

— Юҡ, юҡ, ағай, уйындан ғәйре?

— Теге волостан килгән Абдрахман тигән йолҡошо ме-

нән Хәйрулланы дөмөктөрәһегеҙ ҙә, улар артынан көсөк һымаҡ эйәреп йөрөгән ҡыҙҙарын, аяҡ-ҡулын бәйләп, үҙегеҙ менән мәмерйәгә алып китәһегеҙ.

— Беҙ уны мәмерйәлә нишләтәйек?

— Ғүмер баҡый ҡатын-ҡыҙ менән зина ҡылалар. Һеҙ ҙә шулай итерһегеҙ. Һеҙҙең эше айҙар буйы ҡатын-ҡыҙ эҫен онотоп, мәмерйәлә ятҡан берәҙәк ирҙәргә ҡырын китер, тип ҡурҡаһығыҙмы ни?

Әҙәм рәүешен юғалтҡан кешеләр берсә турайып ултырҙылар ҙа, өсөһө берҙәй ғарҡ кикереп, уйға ҡалдылар. Гүр тынлығын Дәүләткирәй боҙҙо.

— Ахун хәҙрәттәр, ышаныс күрһәтеүең өсөн рәхмәт! Донъя булғас, бер-береңә терәк-таяныс булып йәшәмәй ҙә булмай, ләкин бындай эшкә ҡулыбыҙ бармай.

— Нишләп? Ул ни хәбәр?

— Шулай, ағай! Беҙҙең дә үлге килмәй, йән ғәзиз бит. Ошоға тиклем ғәзиз башыбыҙҙы ҡәҙерһеҙгә һалып, ағай, һүҙеңде йыҡмай, һинең ҡушыуың буйынса, — был һүҙҙе ул, Мөхәмәтшәрифкә күҙенең ағын еңдереп тура ҡарап, баҫым яһап әйтте, — ошо ҡулдарыбыҙ менән енәйәт эшләп, үҙ иңебеҙгә ғүмерҙә юйылмаҫлыҡ гонаһ күтәрҙек.

Мөхәмәтшәриф ахундың эсендә дөрләп янған усаҡ һымаҡ тиреһенә һыймай асыу ҡайнаны. Тороп ишекте асып: «Барығыҙ! Бетлеғош хәйерселәр! Күҙемдән юғалығыҙ», — тип, аяҡ тибеп ҡысҡырырға ла уйлағайны, ләкин бергә ҡылған ҡара енәйәттәр иҫенә төшөп, йөрәге жыу итеп китте. «Хәҙер волосҡа барырҙар ҙа, түкмәй-сәсмәй бөтә бергәләп ҡылған хыянатты хөкүмәт алдында асыр ҙа һалырҙар. Быларға, аҙып-туҙып йөрөгән бандиттарға, ни булыр тиһең? Күп булһа, бер-ике йыл Йылайыр төрмәһендә ултырып сығырҙар. Ә мин? Таяҡтың йыуан башы, күҙе лә йөҙө миңә төшәсәк!» Ошо уй шашынып ҡыҙған асыуҙан йөрәге тулаған ахунды һыуындыра төштө, кире үҙ урынына ултырырға мәжбүр итте. «Ә хәҙер былар был эштән баш тартып, таралышып китһәләр, ни ҡылырһың? Уларҙың осаһына ағас тығаһыңмы? Барып һинең яманатыңды һаттылар ҙа, Советҡа ярамһаҡланып, ауылдарына ҡайтты ла киттеләр, вәссәләм! Шып-шыма һыуәлләди!» Ахун артына шыр ебәрә яҙҙы, күпте күргән төлкө һымаҡ ҡойроҡ болғарға кереште.

— Бәлкем, һеҙҙең минән һорайһы үтенесегеҙ барҙыр? Әйтегеҙ! Ауылдарығыҙҙа һәр икегеҙҙең ғаиләгеҙ, шаурап ятҡан донъяғыҙ бар.

«Әһә, аҡыл инә башланымы һинең туң башыңа, ҡарт бурһыҡ?» тип уйлап алды Дәүләткирәй. «Хәҙер самай умырып ҡала торған сәғәте етте, бынан ҡайырып алып

ҡалырға кәрәк. Беҙҙең кеүек зимагурға ҡайҙа ла бер. Төрмә булһа, бигерәк шәп, мәмерйәлә туңып, үлемендә көтөп ятҡансы, хөкүмәт ҡулында булаһың».

— Ҡыла торған гонаһ эш бик ауыр шул. Кеше йәнен алыу ул бит себен үлтереү түгел. Беҙ былай ҙа әҙәм ҡанына муйыныбыҙҙан батҡанбыҙ инде. Төндә төшкә керә ҡылған эштәр, йоҡлай алмай интегәбеҙ, йоҡлап китһәк төшәнеп уянабыҙ.

— Билдәле, еңел түгел, уныһы һәр икебеҙгә лә мәғлүм инде.

— Бына, ахун ағай, тейәре шул: өсөбөҙгә өйөрөндән өс ат һайлап алабыҙ, беҙгә ҡыш сығырлыҡ бер тыу бейәнде һинең ялсың һуйып, өс көндән дә һуңға ҡалмай килтереп еткерһен. Беҙҙең ҡайһы ауыл кешеләре икәнде бик яҡшы беләһең, беҙҙең бала-сағаға ҡара ергә баҫҡансы ялғанып сығыу өсөн йәшертен генә унар бот он алып барып таратаһың. Тейеш әжере шул, әгәр риза булһаң, уҫҡа ус һуғабыҙ ҙа эше лә бөттө.

Мөхәмәтшәриф уйлағанса барып сыҡманы. «Волостан килгән ике санитарҙың башын ҡыям тип, үҙ башымды түмәр өҫтөнә һалдым түгелме? Ни эшләргә? Кире сигенеп булмай, ошо әҙәмдәр менән ныҡ бәйләнелгән шул. Был санитарҙарҙың башы миңә бик ҡыйбатҡа төшә түгелме?»

— Ярай, мин һеҙҙең шартҡа риза булдым, ти. Ни рәүешле атҡарып сыҡмаҡсыһығыҙ һеҙ ул...

— Беҙҙең һәр беребеҙҙең ҡоралы үҙебеҙ менән. Ул беҙҙең бишмәтебеҙ эсендә ята, — башлыҡ көбәге йылтырап торған наган сығарып күрһәтте. — Алға һалып әйткәндә,— бында береһе тыңлап тормаймы, тип ул ян-яғына ҡаранып алды ла тауышын әкренәйтте. — Бына Ғабдулла ҡусты барып ишек ҡаға. Ишек асырға, моғайын, хужа сығыр. Ғабдулла уны дөмөктөрә. Беҙ икебеҙ ишектең ике яғында аңдып торабыҙ ҙа, хужа ҡолағас, өйгә инеп, йоҡлап ятҡан һинең ике санитарыңды тере көйөнсә бәйләп, һинең ҡулыңа килтереп тапшырабыҙ. Теге мәрйә менән, үҙең әйтмәксе, туйғансы зина ҡылырһың да, шунан уны беҙҙең мәнфәғәткә тапшырырһың. Ҡаршылашып, ҡулын сусаңлата башлаһа, теге һалдатын да юҡ итәбеҙ. Бына шул. Ҡайҙа, ағай, оло эш алдынан тағы берәр анау нәмәнде һал да беҙгә фатиха бир.

Яңынан берәр сеүәтәне төп күтәрә эстеләр ҙә төн ҡараңғылығына сығып юғалдылар. Эттәр яңынан тауыш күтәрмәһен өсөн уларҙың ялғашына ашты мул ҡойҙолар.

Ҡыҙмаса булып алған, ләкин ҡарыулы аяҡтарында әле ныҡ баҫып торған Дәүләткирәй сығып китер алдынан:

— Ахун ағай! Һин бер ҙә бошонма! Һиңә тел тейҙе-

рергә батырсылыҡ иткән ул бәлшәүик өхөйтөләрен беҙ эт һарығансы юҡ итеп ҡайтырбыҙ. Ә теге күңелеңә оҡшаған мәрйә — һинеке, түшәгеңде йәйеп, тәһәрәтеңде алып, көтөп ят, ха-ха!.. — тип хихылданы.

Дәүләткирәй араҡы еле менән был «изге эшкә» күндәм генә риза булһа ла, үҙ яҙмышы тураһында ла байтаҡтан баш вата ине. Һоро ҡорттарҙың, мулла-мунтағайҙарҙың өгөт-нәсихәтенә, вәғәҙәләренә еңел генә ышанып, «әфисәр Унасов» артынан сығып китеүенә ул инде күптән әсенә. Сөнки мәмерйә төбөндә ятһа ла, тирә-яҡтағы ауылдарҙа яңы власть ярлы-ябаға мәнфәғәтенә ниҙәр эшләгәнен, ниндәй сәйәсәт үткәргәнен ул ишетеп тора. Үҙ ауылдарында астан интеккән фәҡир-фоҡара өсөн ашхана асылыуын, үҙенең ут күршеһе Фәтхелисламдың, үҙе үлгәс, балаларының хөкүмәт ҡарамағына тапшырылыуын да белә. «Ғаилә башлығы Дәүләткирәйҙең ауылға кире ҡайтып, баш һалмауы арҡаһында» ғаиләһен ашханаға йөрөүселәр исемлегенән һыҙып ырғытылыуы ла эсен нык ҡына бошорҙо. Ябылған мәҙрәсә урынына ҡайҙандыр ситтән килгән мөғәллимә, балаларға бушлай уҡыу әсбаптары таратып, улар өсөн Иҙелбай кулактың күрнәсәһендә яңыса мәктәп асыуы ла уға мәғлүм. Йылайыр һәм Үсәргән кантондарында элекке Унасов отрядында йөрөп тә Совет власына һәм уның урындағы органдарына бер ниндәй ҙә зыян килтермәгән кешеләргә амнистия иғлан итеүе уны бигерәк ҡаҡшатты һәм оҙон төндәр буйы уйландырҙы. Үҙе менән бергә йөрөп, ауылға әйләнеп ҡайтҡан Йәғәфәр тигән иптәшенең ошо көндә кантон мәркәзендә сельсоветтар курсында уҡып ятыуы уны тағы ла нығыраҡ ғәжәпләндерҙе. «Тимәк, Совет власы беҙгә үс тотмай, беҙҙе кеше итергә тырыша...» тип Дәүләткирәй, бер кем менән дә фекер алышмай, үҙе генә уйлана. «Бәлки, Йәғәфәр ауылға элекке староста урынына яңы Совет түрәһе булып ултырғас, ҡайтып та төшөрмөн әле, моғайын ауылдаштар тотоп ашамаҫ әле. Минең бөтә ҡылған ғәйебем — уғрылыҡ. Уныһы ла тик шул астан үлмәү өсөн, тамаҡ туйҙырыу ялына ғына эшләнелде. Бына Йәғәфәр, ҡулына документ алып, ауылға ҡайтып ултырһа, мин дә был кәсебемдән ваз кисәм», тип елкенде Дәүләткирәй. Ҡыҫҡаһы, уның өсөн Совет власының дошманы һәм дуҫы кемдәр икәнлеге төҫмөрләнә башланы. Бына шуға күрә лә ул бөгөнгә «ҡулын бысратмай», ситтән генә ҡарап торорға булды. «Ана, ауан-дыуамал йәштәр эшләһен, уларға ике донъя һеуалла, уларҙың ни ғаилә, ни донъя, кругом ҡибла. Ә ахундың вәғәҙә иткән болон был эш барып сыҡмайынса ла, аҙаҡтан уны ҡурҡытып та алам мин.

Ул үҙ өйөндә ҡурҡышынан шыр ебәреп ята. Бирмәй ҡараһын, бер төндә донъяһының көлө күккә осҡанын белмәй ҙә ҡалыр», тигән һығымтаға килде ҡараҡтар башлығы.

Төн уртаһы булһа ла, тиреҫтән иҫкән ел тынманы, буран ҡоторғандан-ҡоторҙо.

Хәйрулланың соланһыҙ өйөнөң ишеген шаҡынылар. Хужа тиҙ генә йоҡоһонан уянып, салбарын кейә һалды ла, ишек янына барып:

— Кем унда? — тип тауыш биреүе булды, тыштан атып та ебәрҙеләр. Ләкин ни хикмәттер — әллә Хәйрулла бер яҡҡа ялтанып өлгөрҙөмө, пуля уға теймәй, көпләнгән ишекте тишеп, ҡаршы стеналағы урам яҡҡа ҡараған бер ҡатлы тәҙрәнең быялаһын селпәрәмә килтереп ватты. Тиҙ генә ҡараңғы өйҙә шау-шыу, ғауға ҡупты. Абдрахман йоҡо аралаш «Икегеҙ ҙә иҙәнгә төшөп ятығыҙ ҙа ҡуҙғалмағыҙ!» тип ҡысҡырҙы. Өй эсенән тышҡа ҡарай ишек аша инде Хәйрулла атып ебәрҙе. «Иҙәнгә ҡолағыҙ!» тип ҡысҡырҙы ла Хәйрулла урамға ҡараған ике тәҙрәнән тағы ике тапҡыр урамға атты. Бер аҙға ғына урамда ла, өйҙә лә тынлыҡ урынлашты. Ике яҡ та шымып ҡалды. Бер нисә минуттан тупаҡ өй башына һалған ҡар өҫтөндә шығыр-шығыр иткән аяҡ тауыштары ишетелде. «Тимәк, ишек аша бер ни ҙә эшләй алмағас, сыуал мөрйәһенән берәр этлек көтөргә кәрәк», тип уйланы Абдрахман. Ысынлап та, күп тә үтмәй, мөрйәнән ике тапҡыр аттылар, ләкин бер кемгә лә теймәне. Өй түбәһендә аяҡ тауыштары бер аҙға яңынан тынып торҙо ла, тағы ҡырт-ҡырт баҫып, лап-лоп итеп, айыу йөрөгән кеүек, ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла өй түбәһендә йөрөй башланылар. Аяҡ атлауҙарына ҡарап, өйҙәгеләр ҙә түбәлә йөрөгән баҫҡынсының ике кеше икәнен белделәр. Үҙҙәрен ҡулға ала алмай, бөтә тәндәре ҡалтыранған Хәйрулла менән Абдрахман шыбырлашып алдылар ҙа, ҡапыл берәһе бөтә көскә асылған ишек менән тышта торған бер баҫҡынсыны аяғынан йығып һалды. Юлбарыҫ тиҙлеге менән икенсеһе уның өҫтөнә барып та ултырҙы. Тағы атыу тауышы ишетелде. Ҡар өҫтөндә ике кеше көрмәкләшә ине. Кемдендер башына балта төйҙәһе эләкте, буғай. Кемелер «уф» тип тәрән ыңғырашты ла ергә гөрһөлдәп ауҙы. Икенсеһе, уныһы Хәйрулла булырға кәрәк, өй башынан көрткә ырғып төшөп, урам буйлап тап-топ йүгергән кешеләр шәүләһе артынан тоҫмал менән тағы ике тапҡыр атты. Күп тә үтмәй, ҡолаҡҡа урам буйлап сапҡан ат тояҡтары тауышы салынды. «Тимәк, ҡәһәр һуҡҡырҙар, һырт биреп ҡасты», тип уйланы Хәйрулла. Ул артына әйләнеп кире килгәндә, Абдрахман өнһөҙ ят-

ҡан кешенең ҡулын артҡа ҡайырып, ҡайыш менән бәйләп маташа ине. Хәйрулла менән икәүләп уны һөйрәтеп өйгә алып инделәр. Иҙән уртаһында һуҙылып ятҡан был кешенең күп ҡан ағыуҙан иҫе ауа башлағайны инде. Саҡма таштан осҡон сығарып, мүк яндырҙылар ҙа май шәм тоҡандырҙылар. Иҙәндә ятҡан кешенең баш осонда ҡан еҫе аңҡыны, иҙән буйлап ҡарағусҡыл шыйыҡса аҡты. Май шәмде яҡын килтереп, уның ҡаҡашып ятҡан сәсе араһынан соролдап ҡан аҡҡан урынын ҡаранылар. Балта төйҙәһе уның нәҡ соңҡаһына тура килгән.

— Әсәй, сыуалыңды яғып, кейеҙ көйҙөр. Быны ҡанын тымыҙырға кәрәк, юғиһә таң атҡансы ҡанһырап аяҡһуҙыуы бар, — тип, май шәмдән сыра яндырып алды. Сыуалда һөйәлгән утынға ут төртөп ебәрҙеләр. Ҡурҡышынан дер ҡалтырап торған Маргарита сумкаһынан бер төргәк бинт сығарып тағата башланы. Хәйрулла ҡылысы менән һикегә түшәлгән кейеҙҙең мөйөшөнән ҡолаҡсындай киҫәк ҡырҡып алды, уны сыуалда ныҡлап яна башлаған ут өҫтөндә бер аҙ тотоп өткәс, килтереп теге кешенең башындағы яраға ҡапланы. Ә ул аяҡтары менән тыбырсынып: «Уй, алла!» тип ыңғырашты.

— Тиҙ генә үлерлек түгел әле, алла иҫенә төштө хәҙер был бандиттың!

— Ҡан һаумаһын өсөн башын өҫкә һалырға кәрәк, — тип, уның башын көлдөксәгә күтәреп һалдылар.

— Был лаяҡыл иҫерек таһа, эргәһенә яҡын килер хәл юҡ. Был заманда Атнағол ауылында ул араҡыны кем өйөндә табырға мөмкин?

Башына тағы кейеҙ баҫып, йәрәхәтләнгән урынындағы сәсен түңәретеп ҡайсыланылар, уның аһылдап ҡысҡырыуына ҡарамай, йәрәхәтенә йод һөрттөләр. Маргарита уның башын эйәк остарына төшөрөп, бинт менән һығып бәйләп ҡуйҙы. Ошо арала тышта ҡапыл ат кешнәгән тауыш ишетелде. Хәйрулланың мылтығын тотоп, тиҙ генә шинелен кейеп, Абдрахман тауыш сыҡҡан яҡҡа йүгерҙе. Бына ыжлап өргән һепертмәле буранда әҙерәк барғас, ниндәйҙер ҡарасҡыға оҡшаған шәүлә күренде. Мылтығын йәтешләп тотто ла Абдрахман уға яҡынлашты. Ул үҙҙәренең өйөнән илле таяҡ самаһы ситән бағанаһына теҙгененән бәйләнгән ат булып сыҡты. Кеше күргәс, ат тағы әкрен генә кешнәп алды. Өргән буранға артын ҡуйып кәкрәйеп торған аттың өҫтөнә һалған ҡарҙы ҡулы менән һыпырып төшөрҙө лә Абдрахман уны етәкләп ҡайтты. Һерәйеп торған яңғыҙ бағанаға атты бәйләгәс, өҫтөнә шинелен ябып: «Берәй еп менән сырмап ҡуйғанда, септә һымаҡ торор ине», тип өйгә йүгерҙе. Тик шунда ғына теге кешенең бая ҡу-

лына тотҡан наганы уның иçенә төшөп ҡалды. Янып торған торомбаш тотоп сыҡты ла, тупһа ҡырында аунап ятҡан наганды табып, көбәген өрөп таҙартты һәм кеçәһенә тығып ҡуйҙы.

— Хәйрулла, мин урамда бер ат таптым!

— Ҡитһәнә! Ул ниткән ат ти?

— Ышанмаһаң, сығып ҡара!

Хәйрулла Абдрахмандың һүҙенә ҡарамай шлемын кейҙе лә тышҡа сығып, бағанаһына бәйләнгән атты күреп кире инде.

— Ысынлап та, ҡәҙимге ат, аттың да ниндәйе бит әле! Был яҡын тирәләгегә оҡшаған, тоҡом малына тартҡан. — Һикелә ятҡан балаçты һыпыра тартып алды ла, яңынан урамға сығып, шуның менән бәйле атты япҡас, Абдрахмандың шинелен кире индерҙе.

Иҙәндә ятҡан кеше тауыш бирҙе:

— Уф, һыу! Тамаҡ кипте, һыу бирегеҙсе.

Ул бер сүмес һыуҙы башын ҡалҡытып эсте лә яңынан ауҙы.

Өйҙәгеләрҙең йоҡо ҡайғыһы ҡасты. Ватылған тәҙрә өлгөләренә алам-һалам тыҡтылар. Бер кемдең дә яңынан йоҡларға ятыу ниәте булманы, барыһы ла төнгө һөжүмдең кем тарафынан ойошторолғанын юраны.

— Был бандаға беҙ ниңә кәрәк булдыҡ икән? Ауыл халҡына бер ниндәй насарлыҡ эшләмәнек тә. Ҡемдер ваҡытынан алда ҡуҙғыра, тимәк?

— Граждандар һуғышы бөткәндән һуң, Совет власы башҡорт ауылдарында Әмерик столовойы асты — бер. Хәҙер прививка. Бына ошо сара ҡайһы бер кешеләрҙең, бигерәк тә Микулайҙы көн дә төштәрендә күргән әҙәмдәрҙең, тамағына бысаҡ булып ҡаҙалыр.

Ошоға тиклем шымып ҡына ултырған Хәйрулланың әсәһе һөйләнде:

— Шулай булмай ни? Мөхәмәтшәриф ахун мәсеткә намаҙға барған кешегә: «Совет власы бөгөн-иртән ҡоларға тора. Ул үлем түшәгендә ята, уның ясины күптән уҡылған, уның законадарына баш һалмағыҙ. Совет беҙҙең өсөн ҡулай хөкүмәт түгел, совет — кафырҙар уйлап сығарған нәмә», — тип вәғәз әйткән.

Шул арала Хәйрулла мылтыҡ-ҡылысын таҡты ла Фәйзәхмәтте алып килде. Иҙән тулып ятҡан кешене күргәс, ул бер аҙым артҡа сигенде:

— Собханалла, собханалла! Ошомо һеҙҙе атырға килгән Унасовтың бандиты? — тип һораны. Ҡулына сыра яндырып, яралының битенә яҡын килтерҙе. — Был әҙәм бик тә таныш кешегә оҡшай. Төçөн сырамытам да, исемен әй-

тә алмайым шул. Ҡайҙан таныйһың быны, ғүмерендә йыуынмаған әҙәмгә оҡшай был, битен һаҡал баҫҡан, — тип, сельсовет төкөрөп ҡуйҙы. Һикегә ултырғас, елкәһен тырнап, өҫтәне: — Тимәк, Совет власының бына ҡусты менән ҡарындаштың үткәреп йөрөгән мироприятияһына кемдеңдер эсе көтөрләй. Кем булһын? Быны кем тарафынан эшләнгәне көн кеүек асыҡ. Аты ла бар тинегеҙ бит әле? Хәйрулла ҡустым, минең ҡамыт-сбруйҙы ал да, иртәгә был әҙәмде тейәп, волосҡа алып китәһең инде, башҡа сара юҡ. Шунда тикшереү органдарына сдавать итеп, ҡулына документ ал... Ҡайтыуға ла ашыҡ. Был ҡусты иртән китеп барһа, мин бында бер үҙем ҡалам бит, — Фәйзәхмәт Абдрахманға ҡарап, тәрән көрһөнөп ҡуйҙы. — Шунан үҙеңә берәй төндө яңынан килеп баҫыуҙарын көт тә ят. Тә-әк, столовайға инеп, үҙеңә тейеш бер-ике ашарлыҡ нәмәнде алып кит. Ҡайтҡансы һинең норманң юғалмаҫ.

## 8

Иртә менән һыуға барған Мөхәмәтшәриф ахундың аҫрау ҡыҙы, бағанала бәйле торған үҙҙәренең өйөр айғырын танып:

— Атаҡ, атаҡ! Был ни ағайымдың өйөр айғыры ла инде, был нишләп бында тора? — тип, ошо уҡ һуҡмаҡ буйлап һыуҙан ҡайтып килгән еңгәһенә, сельсовет бисәһенә, абайламай һөйләп ташлаған. Ошо хәбәрҙе ишетеп, Фәйзәхмәт тыны бөтөн Хәйруллаларға яңынан килеп инде. Эйе, шөбһә юҡ, төнгө бандиттың менеп килгән аты — Мөхәмәтшәриф ахундың өйөр айғыры.

Йоҡоһоҙ төн үткәреп, күҙҙәре шешмәкләнеп бөткән ахунды Хәйрулланың өйөнә саҡыртып килтерҙеләр. Төндә мылтыҡ тауышы ишеткәс: «Был ләғнәттәрҙең һабағын уҡыттыҡ, әҙерәк, бәлки, телдәре тыйылып, өркә төшөрҙәр», тип, шатлығынан тағы бер сеүәтә төшөрөп, ахун аяҡ-ҡулы бәйләнгән һутлы, тумалаҡ мәрйәне үҙенең алдына килтереп һалыуҙарын көттө. Ул һикенән бер төшөп, бер мендә. Ике туҡмаҡлы, башына Мәҙинә үә Мәккә мәсеттәре һыны эшләнгән кәкүкле сәғәт эргәһенә эленгән көҙгөгә ҡарап, төрлө ҡиәфәткә керҙе. Йә ике уртына һыу уртлаған кеүек итеп, ауыҙын бер ҡымтып, йә бер асып, көҙгөлә сағылған үҙенең рәүешенә һоҡланып, оҙаҡ ҡарап торҙо. Үҙенең йыуан, йомшаҡ бармаҡтары менән араһында аҡ күренә башлаған ҡуйы һаҡалын кирегә һыпырҙы. Шунан элек-электән таралған: «Илле йәштә ирмен тигән

ир ил хужаһы булыр, алтмыш йәштә алғыр бүреләй булыр, етмеш йәштә һары төлкөләй булыр, һикһән йәштә һикереп атҡа менмәç, туҡһан йәштә бисә-сәсәне белмәç», тип һамаҡланы. «Ҡара, минең алда башҡара торған ҡайһы тиклем вазифалар бар? Әлегә мин алғыр бүремен икән» Бер аҙҙан урамда мылтыҡ тауыштары яңғырағас, шатлығынан бөтөнләй хәле бөттө. Яланғас, ап-аҡ тәнле, тығып тултырылған кеүек тумалаҡ кафирәнең түшәккә һуҙылып ятыуын күҙ алдына килтереп, тыны ҡыçылды, күҙҙәре тонdo. Ул көттө, ҙур сабырлыҡ менән көттө... Ләкин...

Иртәнсәк тирбәлә-тирбәлә көйәнтәләп һыу алып ҡайтҡан Һылыубикә ҡапҡа төбөндә үҙенең көтөүгә менеп йөрөгән «Ҡасаған» тигән ерән бейәһенең эйәре өçтөндә арҡыры бәйләп һалынған Солтанмәхмүтте күрҙе.

— Ыстағафирулла, был ни ғәләмәт? Әллә үлгәнме? — тип, биҙрәләрен ҡар өçтөнә ултыртты ла маңлайын тотоп ҡараны. Һылыубикәнең йылы, йомшаҡ усы тейеүҙән йән кергән һымаҡ булған Солтанмәхмүт ғырылдауыҡ тауыштары сығарып, аяҡтарын тыбырсытты. Һылыубикә уның аçҡа һалынып төшкән ауыҙында ниндәйҙер сепрәк осо күрҙе. Баҡһаң, уның ат ҡорһағына тейә яҙған ауыҙы бысраҡ сепрәк менән тығылған икән. Һылыубикә ауыҙынан сепрәкте алып ырғытҡас, көтөүсе яйлап телгә килде:

— Һылыубикә ҡарындаш! Йәһәт кенә хужаны саҡырып сығар! Ләкин анау сепрәкте кире ауыҙға тыҡ. — Ә бер ни ҙә аңламай торған Һылыубикәгә:

— Бар, юлыңда бул! Әйткәнде эшлә! — тип екерҙе.

Ҡушҡанды ҡаршылашмай үтәп өйрәнгән Һылыубикә теге шайыҡҡа дымланып ҡар өçтөндә туңа яҙған сепрәкте тыҡты ла бәләкәй ҡапҡанан өйгә һыпыртты. Тыштағы был хәлде тыны бөтөп һөйләгәс, Һылыубикә: «Ахун ағай! Һалдат Хәйруллаларҙың өйөнөң ҡаршында беҙҙең өйөр айғыры бағанала бәйле тора. Балаç менән өçтө сырмалып ябылған» тигәйне, ахун намаҙын боҙоп, ике ҡулы менән башын тотто ла: «Йә алла, үҙең ярлыҡа!» тип урынынан торҙо, ҡарһаланып кейенә башланы.

Бер аҙҙан ах-вах итеп, юлда тунының төймәләрен элә-элә Мөхәмәтшәриф ҡарт килеп сыҡты. Үҙенең аты һыртында, эйәре өçтөнә бәйләп арҡыры һалынған көтоүсеһен күреп, илай-һыҡтай «Ай, эттәгенәһе, был ни эш? Ҡайһы яуыздың ҡылған эше был?» тип разбой һалып, ян-яғына ҡарана-ҡарана «Ҡарауыл! Ҡарауыл! Солтанмәхмүтте үлтергәндәр!» тип ҡысҡырырға кереште. Ләкин уның тауышын ишетеп, йүгереп килеүсе булмағас, Фәйзәхмәттәр яғына үҙе йүгерҙе. Ҡапҡаһы төбөндә торған Фәйзәхмәтте күреп, ахун яр һала-һала:

— Бына, ҡәйнеш! Әллә ниндәй ләғнәт төшкөрҙәре Солтанмәхмүтте эйәргә арҡыры бәйләп һалып, ауыҙына сепрәк тығып ҡайтарып ебәргәндәр. Ышанмаһаң, пүнәтәйҙәрең менән үҙең барып ҡара. Минең ҡапҡа төбөнә көтөүсене «Ҡасаған» үҙе алып ҡайтҡан, — тип, уның һүҙенә ҡолаҡ та һалмай ниндәйҙер тәрән уйға сумып торған сельсоветтың еңенән тарта-тарта, илау ҡатыш ҡиәфәт менән теҙеп алып китте. Фәйзәхмәт бер ни ҙә әйтмәгәс:

— Һин, Фәйзәхмәт ҡәйнеш, кеше ялыуына ниңә ҡолаҡ һалмайһың? Һине Совет власының вәкиле итеп ошо беҙҙең кеүек кешеләрҙең үтенесен үтәмәккә һайлап ҡуйҙыҡ түгелме һуң? Был ниткән илтифатһыҙлыҡ? Әйҙә, ҡәйнеш, гуаһтарыңды алып барып ҡарағыҙ ҙа, протокол төҙөп, волосҡа ебәрергә кәрәк. Был йөҙө ҡаралар тиҙҙән үҙеңә йәбешерҙәр, Совет власы ындай эшкә сик ҡуйырға бурыслы, әйҙә, әйҙә! — тип, ҡулынан етәкләп тигәндәй, Фәйзәхмәтте үҙ ҡапҡаһы эргәһенә алып килде. Ысынлап та, эйәр өҫтөндә арҡыры сырмап һалынған бай көтөүсеһе Солтанмәхмүт ята ине.

— Эй, гадук, нишләп һин ат өҫтөндә арҡыры ятаһың, төш! — тигәс, тегеһе аяҡтарын тыбырсып, тамағынан ниндәйҙер ҡарлыҡҡан мөңрәү сығарҙы. Фәйзәхмәт сепрәкте тартып сығарҙы ла уны сырмаған бәйҙе тағата башланы. Ул ике метрлы дилбегәне урыны-урыны менән ҡамтарып, йәтеш итеп бәйләүҙәренә ҡарағанда, уны кемдер ҡабаланмай бәйләгәнен Фәйзәхмәт һиҙеп ҡалды ла:

— Һине ат өҫтөнә бәйләп ташларҙан алда, «Ҡасаға»ның һыртына үҙ теләгең менән менеп ятыуға оҡшай, ауылдаш! — тип, ергә төшкәс, быймаларын ҡаҡҡылап, ойоған аяҡтарын ыуып маташҡан көтөүсегә көлөмһөрәп ҡарап ҡуйҙы. Ул бер хужаһына, бер сельсоветҡа ҡарап: «Ҡисә, эңер төшкәс, Ғәҙелша яғынан Ирәндек аша йәйәү йөрөй торған ҡыҫыҡтан өс әзмәүер саңғыла килеп сыҡты... Мине саҡырып алдылар: «Беҙгә өс ат кәрәк», тип таптыра башланылар. Мин: «Үҙемдең мал булһа, бирер инем, малдың хужаһы Атнағол ауылы Мөхәмәтшәриф ахун бит» тигәс, берәһе, һаҡаллыһы, мине эйәр-утым менән ат өҫтөнән ергә тартып төшөрҙө. Шунан улар ҡар өҫтөндә аяҡ-ҡулды сырмап, «Ҡасаған» өҫтөнә һалдылар. Атты, теҙгененен муйынына сырмап, янбашына ҡамсы менән бер-ике һыпыра тартып, Атнағолға бара торған йылҡы юлына төшөрөп ебәрҙеләр. Бына шул! Бүтәнсә кәметәһе лә, арттыраһы ла юҡ! Әгәр ки хөкөмгә тарттыра торған булһағыҙ, анауы гыпыуы тиһегеҙме әле, шуның алдында ла ошо нуапты бирәсәкмен.

— Әйҙә, Солтанмәхмүт ҡустым, өйгә ин. Үәт әй, әллә

ниндәй ҡасҡылар көпә-көндөҙ әҙәм талап йөрөһөн әле?! Харап бит!

Өйгә ингәс, ахун шилмаланып:

— Фәйзәхмәт ҡәйнеш, һеҙҙең Советығыҙҙың өйрәһе бик шыйыҡ күренә, әллә тамаҡ ялғап сығаһыңмы? Булмаһа, ана, — тине батмус өҫтөндә ятҡан иткә күрһәтеп, — ашап сыҡ! Хоҙайҙан айырылмағас, биш намаҙыбыҙҙы үҙ мөҙҙәтендә үтәп торғас, тәңре ризығынан да мәхрүм итмәй, ебәреп тора. Алланың биргәненә мең шөкөр. Кругом ҡыҫалар. Тын алырға ла әмәл ҡалманы. Ултыр, ҡәйнеш, аптырап торма! Беҙҙең һымаҡ карттарҙың хәбәре күп була инде ул. Бынауы Әхмәтзәки Вәлиди ҡусты барҙа бер әҙерәк тын иркенәйеп ҡалғайны. Уға ижтимағи-сәйәси ярҙам да итеп ҡаралды. Анау Колчагы беҙҙе баҫып алғас, Әхмәтзәки ҡустының отрядтарын күпме ашатып-эсереп, бөтә булған болды, тапҡан-таянғанды исрафлап ҡаралды. Барып сыҡманы шул! Ошо һеҙҙең Ленинығыҙға ярап ҡына хөкүмәт башында ултырһа, ни ҡалған һуң? Юҡ, булманы. Беҙҙе етем ҡалдырып далаға ҡасып, анауы баҫмасылары менән бәйләнмәһә, бәлки, һеҙҙең Ленинығыҙ уны ғәфү ҙә итер ине, юҡ, яҙмаған икән. Үҙебеҙ айырым хөкүмәт төҙөп, иңерәп йәшәп ятыр инек.

— Эйе шул, — тине быны тыңлап ултырған Фәйзәхмәт. — Анау Колчак яғына күсеп, фронт тотоп, йәнен фиҙа ҡылған башҡорт ғәләме бихисап бит!

— Бынауы атаҡа нәғләт, коммунистары булмағанда, ул Советы бөтөнләй ярамаҫлыҡ хөкүмәт түгел дә һуң, баштарына картуз кейгән анау Белорет, Баймаҡ заводы урыҫтары һенәне ҡоротто. Шулары йәшәргә бирмәй — тип бик оҙонға төшмәксе ине ахун, ләкин сельсовет ҡырт киҫте.

— Хәҙер атыңды ектер, тегеһен ектерәһеңме, быныһынмы, минең өсөн барыбер. Советҡа инеп протокол төҙөйөм дә һинең көтөүсеңде, башынан раний булып ятҡан төнгө бандитты Хәйрулла менән волосҡа ебәрәм. Унда барып етеүгә байтаҡ ваҡыт кәрәк. Юлды буран баҫты. Ҡарыулы атыңды ектер.

Ул һөйләгән һайын төҫө нығыраҡ емерелеп, ҡыҫыҡ майлы күҙҙәре асылып, йөнлө ҡаштары өҫкә сөйөлгән Мөхәмәтшәриф түҙмәне, ҡапыл аларынып:

— Ул тағы ниндәй әҙәмде волосҡа алып барырға бойораһың? Ул ҡайҙан килеп төшкән бында? — тине.

— Белмәйем. Төндә Хәйруллалар өйөн баҫҡан кешеләрҙең береһенең башына балта менән эләктергәндәр. Хәҙер хәл өҫтөндә ята. Быны шуны ла алып барырға кәрәк.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, ҡәҙимге һин дә мин һөйләшеп

ултырған ахун, уң ҡулы менән йөрәген баҫып, тәүҙә бер аҙ сүкте лә:

— Алла, алла! — тип ҡапыл һалҡын тир бәреп сыҡҡан маңлайын һул ҡулы менән һөртөп алды. — Әллә нишләп ҡапыл ғына өйәнәк тота ла китә бит. Бер ҙә ҡыҙып һөйләшеү килешмәй. Йөрәгемә ярамай, саҡ ҡына булһа, ҡабына башлай. — Ахун һике өҫтөнә менеп, күлдәй мендәр өҫтөнә ятты. «Уф алла! Уф алла! Үҙең ярлыҡа», тип ыңғырашты-ыңғырашты ла: — Теләһәгеҙ нишләгеҙ! Миндә баш ҡайғыһы. Нишләп бөтә ауылығыҙҙы тейәп волосығыҙға оҙатмайһығыҙмы? Унда минең эшем юҡ! — тине.

Фәйзәхмәт торҙо-торҙо ла:

— Ярай, ахун ағай, ошо арала өйөңдә бул! Берәй яры олаҡма! — тине лә ҡабаланып үҙ юлына китте.

## 9

Яңынан ярты сәғәттән төн буйы бәйле тороп ҡатҡан ахун айғыры, тәртә араһына һыймай һелкенә-һелкенә, Атнағолдоң өс кешеһен тейәп, волосҡа һыпыртты.

Фәйзәхмәт сығып киткәс, ахун башын төйгөсләп үҙен һүгергә тотондо. «Сей алйот! Нишләп кенә бәйләндем икән Унасов ҡараҡтары менән? Үҙ башыма ғына булғандыр инде! Бысағыма кәрәк инеме миңә ул волостан килгән санитарҙары?!»

Абыстай инеп: «Әй, әй! Әй, тием! Әллә берәй нәмә һуғылдымы? Был нишләп алъюҫыҡҡа кәкрәйеп яттың, атаҡ, атаҡ!» тип һөйләнә башлағайны, ахун ятҡан еренән бохар ситекле аяҡтары менән тибенгеләп:

— Бар! Телеңә һалышып торма! Күҙемдән юғал! — тип аҡырҙы. Бисәһе аяҡ осо менән генә атлап, ишекте ябырға ашыҡты.

«Нишләп ҡарарға? Ни хәл итергә? Кем менән кәңәш итергә? Был заманда кәңәш ҡорорлоҡ кешеһе ҡайҙа һуң? Ҡайҙа бер закон белгәнерәк башлы кеше? Ауылда башлы кеше ҡалманы шул: берәүҙәре уңмаған Әхмәтзәкп артынан йөрөп һәләк булып бөттө, ә икенселәре тырым-тырағай ҡасып йөрөй».

...Бурыл айғыр, күптән тәртә араһында булмауына ҡарамаҫтан, ҡорһағына тиклем ҡар ярып килде лә Ирәндектең иң бейек текәһенә күтәрелә алмай талығып, келәпләп һалынған ҡарға батты ла ятты.

— Әйҙә, Мөхәмәтшәриф ахунды ен һымаҡ алып йөрөй торғайның бит, ә бында бауырыңа тиклем ҡарҙы ла йыра

алмай ятаһың? — Хәйрулла хәлһеҙ айғырҙы бер-ике ялландыра ҡамсылап ҡараны.

— Ахунға булған асыуыңды ниңә ул ғәйепһеҙ януарҙан алаһың? Уның сана һөйрәү түгел, кәүҙәһен йөрөтөрлөк тә ҡарыуы ҡалмаған бит, — көтөүсенең үпкә һүҙҙәре Хәйрулланы һыуындырҙы.

Атты туғарып, тәртә араһынан иллә-алла менән сығарҙылар ҙа, берене уның артынан этеп, ә икенсеһе теҙгененән һөйрәп, барлыҡ көсөн йыйып, ҡуян һымаҡ һикергән атты ҡар һайыраҡ урынға ҡуйҙылар. Бөтә тәне дерелдәгән ат арты менән ел аҫтына әйләнде лә башын алғы аяҡтары араһына йәшерҙе. Гелән ел-дауыл уйнап торған Ирәндек өҫтөндә ҡупҡан ғәрәсәт ғәйрәтлерәк ыжлап өрҙө. Кеше яткан сананы үҙҙәре тартып юлға төшөрҙөләр ҙә әҙерәк хәл алған атты яңынан ектеләр. Ғәҙәттә тартҡы һалып төшә торған Ирәндек һөҙәген, икеһе ике яҡтан тәртәгә йәбешеп, бәлә-ҡазаһыҙ Ҡалҡан күле башындағы аҡланға килеп еткәндә, күҙ асҡыһыҙ буран ҡупты. Башта ҡатҡан ҡар өҫтөнә генә төньяҡ-көнбайыштан һиҙелмәйенсә генә башланған йәйәүле буран Энәлек йылғаһы башында ҡабырғанан өргөләп торҙо ла әкренләп ағас баштарын шаулата башланы, ә унан күк көмбәҙен бөтөнләй ҡаплап алды. Күк менән ерҙе тотош аҡһыл-күгелйем үтә күренмәҫлек шаршау япты. Бер аҙ торғас, ойоҡһотоп ҡар яуа башланы. Ергә төшөргә өлгөрмәгән, ябалаҡлап яуған ҡарҙы көслө ел өйөрөлдөрөп юлсыларға бәрҙе. Тиҙ генә волость үҙәгенә етеүен уйлап, шинеле өҫтөнән берәр «күҙһеҙ тун» киймәгән Хәйрулла, донъя туҙҙырып өргән ҡаршы буранға сыҙай алмай санала әкрен генә ыңғырашҡан яралы янына бөгәрләнеп ятты ла башын, шиненең өҫкө ҡаптырмаларын ысҡындырып, күкрәгенә йәшерҙе. Бейәләйен сисеп, сана төбөндәге ҡаулан бесән араһында ятҡан һалҡын мылтығын һәрмәп ҡараны. Теге кеше сығып барған бөтә йән көсөн йыйып, бер-ике тәрән һулап алды ла:

— Ҡурҡма, иптәш! Мылтығыңа теймәҫтәр, башыңды ҡара! Ҡотороуына ҡарағанда, был әжәл буранына оҡшай. Мин, бажалый, волосҡа тиклем тарта алмам. Йән бирһәм, мәйетемде эт-ҡошҡа ташлап китә күрмәгеҙ. Волосҡа алып барып сдавать итеп китегеҙ. Мин Йылайыр кантоны Балғаҙы ауылы кешеһе, — күрәһең, фамилияһын әйтергә уйлағандыр, тик хәле бөтөп тынып ҡалды.

— Ярай, ярай. Бик байғошланма. Кисә һәләк шәп инең әле.

Буран берсә аждаһа кеүек ажғырҙы, берсә бесәй кеүек сыйылданы. Күҙ керпектәренә, ҡабағына йәбешеп боҙға

әйләнгән ҡар бөрсөктәрен бейәләйенең һырты менән әле-нән-әле ыуғылап, юл төҫмөрләп килде лә, тамам арығас, Солтанмәхмүт дилбегәне айғырҙың үҙ иркенә бирҙе. Әкәл сиккә етеп, хәлдән тайған ат ҡабырғаһын елгә ҡуйып, янтайып бер аҙ барғас туҡтаны. Солтанмәхмүт, сананан төшөп, ат күҙенә, морононоң ике тишегенә уҡмашып туңған ҡар боҙон ыуҙы. Меҫкен ат, кеше хәстәрлеген һиҙеп, ауыҙа күкрәгенә башын терәп, муйынын, түшен үҙе ышҡыны. Сонтанмәхмүт сыбыртҡыһын һабына әйләндереп бәйләне лә, ат һыртындағы боҙло ҡарҙы баштан-аяҡ һыпырып төшөрҙө. Бурыл, рәхмәт белдергәндәй, аяҡтары ҡалтыранғансы һелкенеп алды.

— Әйҙә инде, хайуан: Бөтә өмөт һиндә! — Солтанмәхмүт, ат арҡаһын өшөтмәҫ тип тағып сыҡҡан сүс дилбегәһен тартҡыланы.

Диңгеҙ тулҡыны кеүек ташланған өйөрмәле буран, ҡарһыҙыраҡ урындарҙа сананы, хәлһеҙ атты кәйелтә һуҡты, юлдан яҙҙырҙы. Ат, ҡоторонған елгә ҡаршы тороп, быуыны бөткән алғы аяҡтары менән бер урында тапанып, эҙләп тапты ла, сөгөн тейәгәндәй ауыр сананы тағы юлға алып төштө. Ошо рәүешле күпме барғандарҙыр, ат туҡтап тороп хәл йыйҙы ла тағы ла ҡуҙғалды, аҙашһа, алғы тояҡтары менән ҡаты юл эҙләне. Ләкин тора-бара хәле бөткән сананы буран үҙ ыңғайына борҙо, ат әкренләп бөтөнләй икенсе яҡҡа аҙымланы. Бата-сума Ҡалҡан күленең төньяҡ башында үҫкән ҡуйы ҡарағайлыҡҡа инеп киттеләр. Ат ике ҙур ағас аралығынан ҡорһағына тиклем бата-бата үҙе сыҡты ла, сананы шул араға эләктереп, ары китә алмай, туҡтаны. Атты туғарҙылар. Ышығыраҡ күренгән йыуан ҡарағас төбөнә, өҫтөн балаҫ менән ябып, алдына септәгә төргән бесән һалып, бәйләп ҡуйҙылар. Һыуыҡтан ҡалтыранған Хәйрулла, сананы үрәсәһенән тартып сығарырға маташҡан Солтанмәхмүткә мөрәжәғәт итеп:

— Йә, һин былдай ғәрәсәтте күберәгерәк күргән кеше, әйт әле, нишләйбеҙ? — тип һораны.

— Былдай хәлдә ике сара: береһе — ҡар өңөп ятып, буран тымғанын көтөү, икенсеһе — икәүләшеп юлды яңынан эҙләү. Икенең бере.

— Әйҙә, юл эҙләп ҡарайыҡ, булмаһа, ағастарҙы билдәләп китәйек тә, ошо урынға, буран тыма биргәс, кире әйләнеп ҡайтырбыҙ. — Шулай итеп, Солтанмәхмүт менән Хәйрулла бер-береһенә тотоношоп тигәндәй, ҡуҙғалырға торғанда, саналағы кеше, көслөк менән ауыҙ эсенән бышылданы:

— Ике... ҡу...лымды сисегеҙ, бу...ша...тығыҙ зинһар

өсөн! Йән бирер алдынан доға ҡылам: хоҙайҙан фани донъяла ҡылған гонаһтарымды кисереүен һорайым.

— Ҡасып китмәҫһеңме һуң? Һине ҡалдырыу йәл дә бит...

— Мин ҡайҙа китәйем, ике аҙым китһәм, йығылам, хәлем бөткән. Аҙашып йөрөгән эт-ҡошҡа ем булам.

— Әйҙә, доғаңды ҡыла күр! Беҙҙе лә ҡыҫтырырға онотма, — тине лә Хәйрулла уның хәрәкәтһеҙ ойоп ҡатҡан ҡулдарын систе.

Былар ҡуҙғалып китер алдынан уның «Ярай, туғандар, бәхил булығыҙ!» тигән әкрен генә тауышын ишеттеләр. Ҡулға-ҡул, салғыйҙарға тотоношоп былар күпме барғандарҙыр, ләкин сана юлын табыу теләге һаман нәҙегәйә, сомторая барҙы. Тора-бара ике ауылдашта ундай теләк бөтөнләй өҙөлдө. Ҡулдары менән биттәрен ҡаплап бишалты аҙым барҙылар ҙа ҡоторонған буранға тағы арҡаларын ҡуйып торҙолар. Үҙ-ара һөйләшергә, фекер алышырға лә әмәл ҡалманы. Туңған ирендәре ҡыбырламаны. Башта ҡып-ҡыҙыл биттәре һуңынан ап-аҡ булып өшөнө, биттәрен ҡар менән әленән-әле ышҡый-ышҡый, алға ынтылдылар. Тындарының ҡыҫылыуы, хәлдәренең әкренләп бөтөүенә ҡарағанда, улар өҫкә менеп барған төҫлө тойолдо, ләкин ҡайҙалығын төҫмөрләү һәләтенән уҙғайнылар инде.

Туңған бармаҡтары менән һыуыҡта майына ҡатҡан затворҙы саҡ шылдырып мылтығын яһаны ла Хәйрулла һауаға атып ебәрҙе, тора биргәс, йәнә атты. Мылтыҡ тауышына ажғырып өргән буран һәм атыу шаңғырауынан башҡа яуап биреүсе булманы. Шулай ҙа мылтыҡ тауышы аҙашыусыларға көс өҫтәгәндәй булды. Улар тағы ҡуҙғалды. Ләкин теп-текә таш ҡаяға килеп текәлделәр.

— Туҡта, ағай, был тиклем таш ҡаяның берәй өңө йә еге була торған, — тип ҡысҡырҙы Солтанмәхмүт Хәйруллаға. Әмәлгә ярағандай, эҙләнә торғас, ике-өс кеше һыймалы өҫкө кәрниз аҫтында өң табып алдылар. Ауыҙынан иңкәйеп эсенә ингәс, ул иркенәйә барып, бер бүлмәгә әйләнде. «Бирҙе хоҙай! Күктән эҙләгәнде, ерҙән бирҙе!», тип үҙенә үҙе ышанмай, Солтанмәхмүт Хәйрулланы ҡосаҡлап өйрөлтә башланы.

— Әйҙә, ағай! Бына ошо мәмерйә беҙҙең ятаҡ булыр. Шырпы әҫәре лә юҡ бит әле, исмаһам. Утын табырға булыр ине, — тип Солтанмәхмүт тиртуны тышынан кейгән сей һарыҡ тиреһенән тегелгән, хәҙер инде ҡыптырлап туңған толобон систе.

— Бына, мылтығыңды ҡосаҡла ла ят. Мин дә һинең менән. Өҫкә толоп ябынабыҙ. — Бай көтөүсеһе аяғынан йығылып өлгөргән Хәйрулла янына ауҙы. Бер аҙ ята бир-

гас, ике кеше тынына йылына биргән толоп аҫтына йән керҙе. Шунда ғына улар үҙҙәренең биттәре сәнкеп һыҙлауын, аяҡтарының зыңҡып ауыртыуын һиҙҙе.

— Нисек тә йоҡламаҫҡа тырышырға кәрәк, сөнки икебеҙ ҙә нык өшөгәнбеҙ, таң атҡансы йән биреп ҡуйыуыбыҙ бар, — тип кәңәш бирҙе ҡыштарын ҡар өҫтөндә ятып өйрәнгән бай көтөүсеһе.

Йылынып алғас, ике йәш кеше, әйтерһең, улар был мәмерйәлә ғүмер буйы торғандар, әкренләп һүҙгә тотондо.

— Ай-һай, Солтанмәхмүт ҡусты, һин нисектер, әммә минең камил асығыу яңы беленә башланы, муҡсайҙа берике ҡапҡыларлыҡ тәғәм бар ине лә һуң, санала ятып ҡалған, — тип Хәйрулла ҡайғырып ҡуйҙы.

— Буранда мәтәләнеп йөрөп, бөтөнләй иҫтән сыҡҡан. Бер сөсө тары икмәге минең түштә ҡыҫтырып сыҡҡан көйө тора, — тип ул тиртун эсенән сепрәккә уралған бер түңәрәк икмәк сығарҙы ла Хәйруллаға һәрмәтеп ҡаратты.

— Һо!.. Һо!.. Йән биргәнгә йүн биргән!

— Тик иртәгәгә лә ҡалдырайыҡ.

Ярты икмәкте уртаға бүлешеп ашап алдылар. Тышта дауыл да әҙерәк тынған һымаҡ. Хәйрулла үҙенең һалдат тормошонан бер-ике хәл һөйләп алды. Солтанмәхмүт үҙенең бауыры ҡалҡҡандан алып көтөү көткәндәге бер нисә ваҡиғаны иҫенә төшөрҙө. Бер аҙ һүҙһеҙ ятҡас: «Был беҙҙең ғазап сигеүебеҙ барыһы ла ахун этлеге, әллә барыһын да түкмәй-сәсмәй Хәйруллаға һөйләп бирергәме? Волосҡа йөрөүҙең хәжәте лә булмаҫ, теге кеше таң атҡансы барыбер йән бирер, алып ҡайтып ҡына күмәбеҙ ҙә, әйҙә, волосҡа ахунды ебәрәйек», тигән уй ҙа килгәйне Солтанмәхмүттең башына, ләкин үҙ уйынан үҙе ҡурҡты.

«Әгәр ул ахун менән берәй хәл булып китһә, мин ҡайҙа бара алам. Ҡупме йәберләһә лә, ашар тамағым, ятыр мөйөшөм бар. Етмәһә, әйтеү итеп тигәндәй, имен-һау яҙ сыкһаҡ, Һылыубикәгә никах уҡытып, бер ҡонажын тотторормон» тигән һүҙе лә бар бит әле. Үҙе ғүмер буйы шәриғәт законын даулап йөрөгән әҙәм нисек үҙ һүҙендә тормаҫҡа мөмкин?.. Китер алдынан иҙәндә йөгөнөкләтеп ултыртып, ҡөрьән дә үптерҙе бит әле. Һин унда волосҡа барып теләһә ни лығырлап, үҙеңде аҫрап кеше иткән ахун ағаңа яла яғып йөрөмә. Әгәр ошо ҡөрьәнде үбеп тә вәғәҙәңдә тормаһаң, волостан ҡайтып етә алмаҫһың, хоҙай орор үҙеңде, тип киҫәтеп сығарҙы бит. Юҡ, юҡ! Ҡөрьән тиклем ҡөрьән үбеп, тәүбәңә хыянат яһап булмай инде!» Шуларҙы уйлап, Солтанмәхмүт тә тынысһыҙ йоҡоға талды.

Иртә менән яҡты нур арып-талып йоҡлап киткән ике

юлсыны һөңгө менән төрткән keүек төртөп уятты. Хатта мәмерйә эсе бөтөнләй яҡтырған, уның көмбәҙенән түбәнгә ослайып торған таштары ла күренә. Көтөүсе имгәкләп тышҡа сыҡты ла күҙе сағылыуҙан башы әйләнеп, йығылып китә яҙҙы. Буран нисек ҡапыл башланһа, шулай ҡапыл тымған. Ҡып-ҡыҙыл булып ҡалҡҡан ҡояш нурҙары бөтә ерҙе көмөштәй, күҙҙең яуын алғандай итеп, яҡтыртҡан. Былар төн үткәреп сыҡҡан мәмерйә сана юлынан байтаҡ ситтә, Ирәндек башына етергә бик аҙ ҡалған урында, ҡалҡыулыҡта булып сыҡты.

Ана, һул яҡҡа табан дәү балыҡҡа оҡшабыраҡ Ҡалҡан күле һуҙылып ята, уның нәҡ уртаһында, балыҡтың урта ҡанаттары тирәһендә, өйкөм генә сауҡалыҡ менән ҡапланған утрауы ла күренә. Уң яҡтараҡ, Энәлек йылғаһы үйһыулығының уң битләүендә, алтын приискыһы, Түбән руднигының ер ҡыртышынан һалынған ваҡ-ваҡ ҡына өйҙәре, ҡояш нурына сағылған ҡалай түбәле бер нисә йорто күренә.

Батырша Әлиев восстаниеһының тәүге битен асыусы, ата-бабалары батша самодержавиеһына ҡаршы тиңһеҙ көрәштә һәләк булған, хәҙер уларҙың ейәндәре йәшәгән Әмин ауылы. Аяҡ аҫтында ғына кеүек күл буйына бер урам ғына булып һуҙылған, ауылдың уртаһында Кейекбирҙин кантондың биш стеналы бер өйө — аҡ ҡалай менән ябылған йорто — маһайып ултыра. Өҫкө урамдың һыртынан ғына уйпат-уйпат соҡорҙарында, үҙәк-үҙәгендә йөҙйәшәр ҡарағастар үҫкән Ҡанйылға тауының битләүе башлана. Бына хозур донъя!

— Әй... Әй! Кем бар унда? — тип ҡысҡырҙы буденовкаһын ҡулына алып ялан баш торған Хәйрулла.

— Әй... әй! Һин бар унда! — тигән кеүегерәк әйләнеп ҡайтты тауышының шаңдауы.

— Әйҙә, ҡустым, тиҙерәк ат-сбруйҙы эҙләп табайыҡ. Бындай матур көндө хоҙай беҙгә башҡа күпме һораһаҡ та бирмәç, — тип Хәйрулла юлдашын ҡабаландырҙы. Өҫтән йүнәлеште самалап, тау түбәненә, урман яғына йүнәлделәр. Күп тә бармай, ҡуйы ҡарағайлыҡ ситендә ат кешнәп ебәрҙе. Ике көн йүнләп ашамаған, һуғарылмаған, һабан туйға яратылған арғымаҡтай эсе тартылған бурыл быларҙы илаған төçлө, һарғылт-йәшел күҙҙәрен алартып ҡаршы алды.

— Ат ашатып торабыҙмы? Әллә приискыға етә алырбыҙмы?

— Нисауа, әкренләп етербеҙ әле.

Атты тапҡас, шатлығынан был ике егеттең башҡала бер ғәме лә юҡ.

— Атаҡ-атаҡ! Санабыҙ бар ҙаһа! — Солтанмәхмүт ҡабаланып санаға табан бер-ике аҙым атланы ла «ай-бай!» тип кире сигенде.

— Ҡара әле, ҡара! Теге кеше бигерәк ҡурҡыныс ята бит, ағай!

Ысынлап та, кисә бәхилләшеп санала ятып ҡалған Балғаҙы кешеһе... былар килеүгә йән биргән. Хәйрулла уның күкрәгенә ҡуйған ҡарағусҡыл яланғас ҡулдарын тотоп ҡараны. Мәйет һыуынып бөткәйне. Тик ҡуңыр күҙҙәре генә ҙур асылған да сикһеҙ күктең бер нөктәһенә төбәлгән. Гүйә, ете ҡат күк йөҙөндәге алланан был фани донъяла үҙе ҡылған гонаһтарын кисереүҙе һорай. Хәйрулла был кешенең үлемен һуғыш ваҡытында, яраланып, окоп төбөндә күҙҙәре асыҡ килеш туңып үлгән һалдаттарға оҡшатты. Эйе, уларҙың кәүҙәһе, кейгән кейеме, милләте, ҡайһы губернанан икәнлеге онотолорға мөмкин, ләкин утеүесле ҡараш менән бер нөктәгә төбәлгән ул күҙҙәр мәңгегә оноторлоҡ түгел. Хәйрулла мәйет битен балаҫ мөйөшө менән ҡапланы ла кеҫәләрен ҡараны. Тиртунының уң яҡ кеҫәһенән ҡарайып ҡатҡан ҡулъяулыҡҡа уралған, салғынан эшләнгән ағас һаплы, йөҙөнөң уртаһы ашала башлаған бәке, һул кеҫәһенән ҡыҙыл ебәк епкә теҙелгән өс көмөш балдаҡ табылды. «Быныһы инде таныш нәмә: һалдатҡа алынғанда ауыл ҡыҙҙары, бигерәк тә һинең күҙең төшөп йөрөгән ҡыҙ, көмөш балдаҡтарҙы епкә теҙеп кеҫәңә һалып ебәрә. Йәнәһе, ул балдаҡтар һине бәлә-ҡазанан һаҡлай, кире иleңә алып ҡайта. Ауылға иҫән-һау йөрөп ҡайтҡас, һин ул балдаҡтарҙы кире эйәһенең ҡулына тапшырырға бурыслы. Һине һағынып көтөп торған ауыл кешеләре, һинең яҡындарың өсөн ошонан да оло аманат юҡ. Был бәхетһеҙ кеше лә балдаҡтарын тапшырам тип өмөт иткәндер ҙә, ана, үҙенең үлемен ни рәүешле, ҡайҙа килеп тапты. Тәҡдир, аяуһыҙ тәҡдир!»

— Әллә мәйетте тейәп кире китәбеҙме? — тип һорап ҡуйҙы Солтанмәхмүт аптыранып торған Хәйрулланан.

— Юҡ, волосҡа етеп, протоколлап, властар ҡулына тапшырып ҡайтабыҙ, — тине Хәйрулла. — Әйҙә, атты егә башла.

10

Волосҡа еткәс, милиция бинаһын эҙләп таптылар. Аҫтында тауар, аҙыҡ-түлек лавкаһы, өҫтөндә революциянан һуң ҡасып киткән татар сауҙагәре йортонда урынлашҡан икән милиция. Ауылдан килеүселәрҙе ике бүлмәнең төпкөһөндә өҫтөнә иҙәнгә тейеп торған кавалеристар шинеле,

аҡ быймаһына шпорҙар, биленә наган, ҡылыс таҡҡан, мыйыҡтары өҫкә тырпайып торған ҡалмаҡ битле, ҡыҫыҡ күҙле, киң яурынлы урта йәштәрҙәге мыҡты башҡорт ҡаршы алды. Ул инеүселәрҙе өҫтән аҫҡа һөҙөп ҡараны.

— Йә, ни йомош, ҡустылар? — тип һораны ла турайып ултырып, ҙур ҡулдарын өҫтәлгә һалды. Аяҡтарына алмашлап баҫып, иҙән уртаһында торған Хәйрулла, юлда теләһә нисек килеүҙән кеҫәһендә таушалып бөткән конверт сығарып, тегенең өҫтәленә һалды. Начальник конвертты улай-былай әйләндереп ҡараны ла, ипһеҙ ҡулдары менән уны йыртып, Фәйзәхмәттең ғәрәпсә яҙылған протоколын сығарҙы. Әҙерәк яҫы битенә төҫ биреп, ҡағыҙға күҙ йүгертеп сыҡты ла:

— Йомошоғоҙҙо телдән генә һөйләп бирегеҙ, — тине.

Хәйрулла бик ҙур һаҡлыҡ менән генә:

— Шул ҡулығыҙҙағы ҡағыҙҙа барыһы ла яҙылған бит, — тине.

— Ә мине һеҙҙең шикелле мәҙрәсәлә уҡытмағандар. Мин хәреф танымайым, урыҫсаһын да, ҡәҙимен дә күҙем танымай, — тине.

Хәйрулла: «Бынағайыш! Үҙе башлыҡ, үҙе наҙан!» — тип уйлап алды ла ваҡиғаның асылын телдән тасуирлай башланы. Уға ара-тирә Солтанмәхмүт тә ҡушылғылап торҙо. Һүҙ араһында милиция начальнигы ике бармағы менән былай ҙа тырпайып торған мыйыҡтарын өҫкә борҙо. Быны диҡҡәт менән күҙәтеп торған Солтанмәхмүт уны һүрәттәрҙәге ҡарт юлбарыҫҡа оҡшатты.

— Шулай тиһең инде, эйе, эйе!.. Бандиттар һөжүм итте тиһең инде! Ҡайҙа әле, саҡырығыҙ миңә ул Унасов ҡалдығын, һөйләшеп ҡарайыҡ әле! Нимә әйтер икән?

— Ағай, ул кеше тере түгел. Юлда аҙашып, мәтәләнеп йөрөгән арала санала яткан көйөнсә туңып үлеп ҡуйған. Етмәһә, башы йәрәхәтле ине.

— Нимә бында мәйет тейәп йөрөп ятаһығыҙ! Волоста үлгән кеше әҙ тип уйлайһығыҙмы әллә? Астан ҡырылған әҙәмде ерләп өлгөртөп булмай.

— Тәфтишкә-фәлән хәжәте тейер ине тип уйлағайныҡ.

— Ул тик теге донъяла тамуҡ зобанийҙары менән мөнкир-нәнкиргә хәжәт. Үлек кеше гуаһ та, ғәйепләнеүсе лә була алмай.

Шунан һуң милиция начальнигы алдындағы еҙ ҡыңғырауҙы ҡулына алып шалтырата башланы. Ҡолағы өҫтөнә ручкаһын ҡуйып, күрәһең, волость писарылыр, йот йылына үс иткәндәй ҙур ҡорһаҡлы, өҫтөнә жилет кейгән бер кеше килеп инде. Уға әлеге протоколды һуҙып, милиция башлығы:

— Иван Степанович, бынауы протоколды уҡып ишеттер инде. Атнағол сельсоветы ебәргән, — тине.

Бер ҡулын салбарынан ысҡындырып, мөгөҙһөҙ күҙлеген төҙәтеп алды ла, урыҫ кешеһе булыуына ҡарамаҫтан, сеп-сей башҡорт шикелле ул Фәйзәхмәт яҙған протоколды ҡысҡырып уҡый башланы.

«1922 йылдың 13 февраль көнөндә беҙ Бишенсе Бөрйән Нәмәс волосы Таналыҡ-Түңгәүер кантоны Атнағол общество граждандары Совет рәйесе Аллабирҙин Фәйзәхмәт, волос санитарҙары Игебаев Абдрахман, Неверова Маргарита вә фәҡир Айытбаев Хәйрулла... ошбу протоколды түбәндәге хаҡта төҙмәктәбеҙ...»

— Аңлашылды... — тине һуҙып ҡына милиция башлығы.

— Был протоколды нишләтәбеҙ? Делопроизводствоға ебәрәбеҙме, әллә папкаға тегеп ҡуябыҙмы?

— Атнағолдарҙың папкаһына тегеп ҡуй, донъялар төҙәлгәс, иҫән булһаҡ, бер яңынан ҡарарға, бәлки, форсат тейер.

— Слушаюсь...

Иван Степанович сығып киткәс, үҙен аҡларға теләгән кешеләй, милиция башлығы үҙ алдына һөйләнеп алды.

— Шулай, ҡустылар! Бөтә волосты бандит, ҡараҡ баҫты, ауылдарға сығып тәфтиш алырға милиционерҙар етешмәй. Закон буйынса икегеҙҙе лә волость төрмәһенә ябып, тәфтиш алырға кәрәк ине лә бит...

Ошо урында юл ғазабы менән үҙенең фаш ителеүенән ҡурҡып йөрөгән Солтанмәхмүт бик шөрләнә. Ябыҡ арҡа һөйәктәре буйлап шыбыр ҡара тир аҡты. «Әстәғәфирулла, әстәғәфирулла, алла үҙең ярлыҡа!» тип уҡынды ла, күҙ алдары ҡараңғыланып, стенаға һөйәлде. Күпме ошо рәүешле торғанын ул хәтерләмәне, тик милиция башлығының гөрөлдәп сыҡҡан тауышынан һиҫкәнеп уянды.

— Ул бандиттарҙы ауыл байҙары, мулла-монтағайҙар ашатып-эсереп тота. Ҡорал бирә. Совет власына, уның закондарына ҡаршы өндәй, ҡоторта. Ә улары кем аҡса, тамаҡ бирә — шуларға хеҙмәт итә. Һеҙҙә лә шул уҡ хәл, юғиһә ул өс бандитҡа ауыл һайын укол һалып йөрөгән ике санитарҙың бысағыма кәрәге бармы? Юҡ! Юҡ! Килер бер көн, беҙ ҙә ныгынып, һөйәккә май йыйып алырбыҙ әле, көнө бөгөн түгел, бандиттарҙың да, уларҙы ҡотортоп ятыусыларының да ҡойроғона баҫырбыҙ. — Ошо һүҙҙәрҙе һөйләгәндә Солтанмәхмүткә башлыҡтың тишә ҡарап алыуы уны иҙәнгә сүктерҙе, уҫал ҡараштан ҡурҡып, ул, башын икенсе яҡҡа бороп, күҙен йәшерҙе. «Был кеше минең һәм ахундың ғәйебен үтәнән-үтә күреп тора, тик хәҙергә ва-

ҡыты ғына юҡ, ҡулы теймәй», тип уйын ослап та өлгөрмәне, шуны һиҙгән шикелле, милиция башлығы:

— Һин, малай, бай көтөүсеһе, барын да протоколға яҙылғанса дөрөҫ күрһәттеңме? Юғиһә һине бында алып ҡалып һыуыҡ төрмәлә йондоҙнамә күрһәтергә лә мөмкин, — тип уң ҡулы менән наган һауытына тотондо.

Солтанмәхмүт иҙәнгә «лап» итеп йөгөнөкләп ултырҙы. Ялбарған тауышына илау ҡатыш һыҡтау ҡушып:

— Иптәш! Ағай! Зинһар өсөн теймәгеҙ. Минең тырнаҡ шәбеһендәй ҙә ғәйебем юҡ, — тип теҙҙе.

Милиция башлығы:

— Етер! Ваҡыты килер, был сырмалсыҡтың осона сығырбыҙ. Бына ошо минең һөйләгәндәрҙе бөтәһен дә ҡолағыңа киртеп ҡуй. Хужаң ахунға түкмәй-сәсмәй алып ҡайтып еткер. Хужаң башы иҫән саҡта ҡулын да, телен дә тыйһын. Совет власы менән шаярмаһын. Ирәндек артында беҙгә ҡаршы төтөн быҫҡытып ятһа, уның усағын тиҙ тығырбыҙ. Төшөндөңмө? — тип екерҙе.

— Төшөндөм, төшөндөм, ағай!

— Бына шул: тиҙҙән Стәрлетамаҡтан беҙҙең волосҡа ана шул бандиттарға ҡаршы көрәшеү өсөн махсус отряд килә. Ул бандиттарығыҙҙың төйәген самалап белеп ҡуйығыҙ. Быны һин сельсовет Фәйзәхмәт ҡустының ҡолағына төшөрөп ҡуй, — тип «ағай» мылтығын ҡулына тотоп торған Хәйруллаға мөрәжәғәт итте.

— Эшләрбеҙ, барыһын да еткерермен.

— Бына беҙҙең милицияның уң яғында земство больнисының үлектәрҙе йыя торған келәте бар. Санағыҙҙағы мәйетте, теге бандитығыҙҙы әйтәм, шунда тапшырып кәпитәнсә алығыҙ ҙа юлығыҙҙа булығыҙ. Хуш!

— Хуш!

Ошо ваҡиғанан һуң Мөхәмәтшәриф ахун үҙенең иҫән ҡалыу хөрмәтенә ҡорбан салдырҙы, инде быҙдай алабарманлыҡ күрһәтмәҫкә тәүбә итте. Ә теге тере ҡалған ике бандит үҙ эштәрен башҡара алмаһалар ҙа, һөйләшелгән буйынса Мөхәмәтшәриф вәғәҙә иткән ике баш атты өс баш итеп, егерме бот урынына утыҙ бот ондо ҡайырып алдылар.

## 11

Өйҙән сығып китеүенә дүрт аҙна үтеп киткәс, февралдең аҙаҡтарында Игебаев Абдрахман ауылына кире әйләнеп ҡайтты. Волосҡа киткәндә буйҙаҡ ине, хәҙер башлыкүҙле булып ҡайтып төштө. Ата-әсәләре өсөн хеҙмәт тул-

тырып ҡайтҡан берҙән-бер уландарының «икенсе йыныс»тан кәләш алыуы тураһындағы хәбәр Яланға күптән килеп етеү генә түгел, ауылды байтаҡ шаулатып та өлгөргәйне. Быға төрлө кеше төрлөсә ҡараны. Быны ишетеп ҡайтыусы Ғәлимйән хажи мәсет алдына бөтә йыйылған ғәләм алдында «Минеңсә, был эштә бер ниндәй ҙә хилафлыҡ юҡ. Хәҙерге заманда, йәғни Совет заманында, тиҙҙән бар енес тә бергә ҡушылып бөтәсәкбеҙ. Бына мин күпме сит мәмләкәттәрҙә булдым, Рәсәй ҡалаларында ла әҙ булырға тура килмәне. Ҡайҙа ғына барма, «еңгәсәйҙәр йорто» бар. Бына шуны әйтәм әле: инеп аҡсаһын түләйһең дә, шарабын эсеп, күңелеңә хуш килгән ҡатын-ҡыҙ менән зина ҡылаһың да сығаһың. Уның кафирәме, мөслимәме икәнен бер әҙәм дә ҡарап тормай. Тик аҡсаң ғына булһын. Шулай уҡ һинән дә бер кем һин мосолманмы, кафырмы тип төпсөнмәй. Кафирәләр, киреһенсә, мосолманды өҫтөнөрәк күрәләр, дәрте лә, ғәйәре лә икенсе фурмы тип маҡтайҙар», тип ихахайлап һөйләп торған, ти.

— Ул һөйләр, ул тик хажи исемен генә йөрөтә, ә ысынлап та, ул рус хажийы.

— Борҡолдатып тәмәкеһен тарта, Верхуралдан алдыртып туйғансы тахил шарабын эсә, йәрминкәләрҙә кәрт уйнап йөрөй. Ул ниткән хажи ти ул?

— Ул хажи түгел, уйнашсы!

— Тик ер-һыу күрәм тип, аҡса туҙҙырып, Мәҙинә үә Мәккәгә барып ҡайтыуы инде!

Ғәлимйән хажиҙың хәбәренә ошондай баһа бирҙе ауыл халҡы, ләкин күпселек халыҡ Абдрахмандың был аҙымын хупламаны. Ул әле Ялан ауылы күренерҙән күп алдан, унан элгәре лә, Маргаритаға үҙенә генә хас булған тотанаҡлылыҡ менән ауылда улар менән осрашыу нисегерәк булыуы мөмкинлеген иҫкәртә килгәйне. Ләкин Маргарита үҙ ирен һыға ҡосаҡлап, шарҡылдап көлдө генә:

— Эй аҡыллым! Ниңә бушҡа башыңды ватаһың? Ялан ауылын күтәреп һуғып киттек барҙыҡ? Һинең менән минеңи тота: шаулап ятҡан донъямы? Ҡыйрап ятҡан малмы?

Ләкин Абдрахмандың уй-фекере икенсе юҫыҡтараҡ ине шул. «Ҡаужыған, ҡарыуҙары ҡайтҡан әбей-бабайға берәр терәк булмаҫмы?» тип тә уйлағайны. Ә нисек килеп сыҡты? Яҙмыш үҙенекен ҡайырҙы. Тик шуныһы көн кеүек асыҡ: нисек кенә ауыр булмаһын, киләсәктә ниндәй генә яҙмышҡа юлыҡма — бер-берендән айырылмаҫҡа, ташлашмаҫҡа! Быны улар яҡшы белә, берҙәй типкән йөрәктәре тоя.

Ҡараңғы соланға килеп ингәс тә үҙенең тоҫмалы менән йәһәт кенә ишек бауын тартты ла Абдрахман, ишек

асып, алдынан кәләшен индерҙе. Үҙенең ғәзиз улы атай йортон беренсе булып түгел, әллә ҡайҙан килгән «аҙып-туҙып йөрөгән кафирәне» алдан индереүе былай ҙа имеш-мимеште күп ишетеп ултырған Сәрбиямал әбейҙең йөрәгенә бысаҡ булып ҡаҙалды. Усаҡ алдында иңкәйеп ут тоҡандырып маташҡан әсәһе, һикелә ҡул тирмәне тешәп ултырған атаһы, эштәрен ташлап, берсә турайҙылар.

— Әссәләмәғәләйкүм, атай, әсәй! — яһалмараҡ күтәренке тауыш менән Абдрахман сәләм бирҙе. Атаһы күҙенең ҡыры менән генә ҡараш атып алды ла ауыҙ эсенән ниҙер мығырлап ҡуйҙы. «Түрҙән уҙығыҙ», тип өндәшеүсе булмағас, Абдрахман иҙән уртаһында аптырап ҡатып ҡалған кәләшен сисендерә башланы.

Сәрбиямал әбей яҙып ябынған яулығының осон тешләне лә күҙәтеүен дауам итте: ул бер иҙәнгә, бер Маргаритаға ҡараны. Иҙәнгә текләп тороуының тағы бер хикмәте бар шул: кисә генә имсе Өммөгөлсөм ҡарсыҡты килтереп, юҡ ерҙән сәй табып, самауыр ҡайнатып, буласаҡ киленде Абдрахмандан һыуындырыу, өйҙән биҙҙереү өсөн әллә ниндәй доға-аяттарын уҡытты. Өммөгөлсөм сығып китер алдынан: «Аллаһеү! Аллаһеү!» тип яҡ-яҡҡа төкөрөндө лә көлдөксәнән бер күмер алып иҙәнде ҡап урталай бүлеп, һыҙып китте. «Бына, килен, ошо ҡара һыҙыҡ өйөңә аяҡ баҫаһы йөҙө ҡара кафирәгә кәртә булыр. Әммә мәгәр шул һыҙыҡты теге Абдрахманды арбап алған нәмә ашаҡлағанда, үҙеңдең собханалланды уҡып тор. Ул нәмә унан аша сыға алмаҫ, шул урынында хоҙай орор», тигәйне. Бына бөгөн Сәрбиямал әбей тешһеҙ ауыҙын йыбырлатып белгән генә доғаһын уҡып торғанда, сисенеп өлгөргән Маргарита нәҡ күмер һыҙығы өҫтөнә аяҡ юлы ҡалдырып, шарт-шорт баҫып башта — әбейгә, ә унан Әбделғәлим ҡартҡа ҡулын һондо. Ләкин ни уныһы, ни быныһы ҡулын бирмәне, икеһе лә ике яҡҡа әйләнеп, һырт бирҙеләр. Абдрахман да сисенеп түргә үтте. Үҙенең һыуыҡта туңып ҡатҡан һалдат тоғон һикегә ултыртып, ауыҙын сисә башланы. Барлы-юҡлы аҡсаһын ҡырып-һепереп, ул волоста Мортазиндар магазининан атаһына ярты миллион һумға нағышлап эшләнгән түбәтәй, дүрт йөҙ мең һумға әсәһенә бүләк тип күл дәүмәллеге бер батист яулыҡ һатып алғайны. Һырт ҡуйып ултырһалар ҙа, ололар улының күстәнәстәрен алып, эргәләренә һалып ҡуйҙы. Әсәһе ни өсөндөр ҡаты көрһөндө лә еүешләнгән күҙенең йәшен ҡулының сырышҡан һырты менән ҡара ябыҡ битенә буяны. Был тынлыҡты боҙорға ҡурҡҡан һымаҡ Маргарита шым ғына килеп Абдрахман эргәһенә, һике йөҙөнә, ултырҙы.

— Йә, мин юҡта ни рәүешле торҙоғоҙ? Һыйырығыҙ

имеиме? Әллә аҫрай алмай тотоноп ҡуйҙығыҙмы? — тип Абдрахман ҡарттарының ҡылдарын сиртеп ҡараны. Ләкин ҡарттарының былай ҙа тартынҡы ҡылдары түҙмәне, «зың» итеп өҙөлөп тә китте. Тәүҙә бабай башланы:

— Йә, мыҡты кеше, бик килештереп йөрөйһөң икән? Беҙ һине ул волосҡа кафирә эйәртеп ҡайтырға ебәрҙекмени? Укол тигән нәмәһен бында ла эшләп китге һинең ише йәш егет. Бер ҙә йөрөгән ерендә бисә алып тормаңы. Ҡалай килде, шулай имен-һау ҡайтып китте. Ә һин, кафыр, йөрөгән ереңдә ата-әсәңдең йөҙөнә серкеү килтереп, уларҙың фатихаларынан ғәйре никахһыҙ кәләш алып йөрөйһөң! Тфү, мәлғүн! Аҙғын! Эт аҙғыны буранда ҡотора, ти! — Әбделғәлим ҡарт хәле бөтөп үҙ нотоғон туҡтатҡас, ҡулын ягына ҡуйып, бабайының һүҙен тыңлап ултырған әбей эләктереп алды.

— Шулай булмай ни! Хаҡ шулай! Ата-олаталарының йолаһын боҙоп, һорашмай-нитмәй, сит енестән йәмәғәт алып ҡайтсы әле! Ҡайһылай ҙа анһат — никах та юҡ, ҡалым да юҡ!

Быны тыңлап йоҡа ирендәре ҡалтырап, асыуынан һиптелле биттәре оҙонайып яҙыла башлаған Абдрахман түҙмәне, ҙур йоҙроғон ҡаҡ һике таҡтаһына һуҡты ла: «Етәрегеҙ, туҡтағыҙ!» тип ҡысҡырҙы. Уның һуғыуынан һике таҡтаһының арғы башы ҡапыл күтәрелде лә, тәҙрә һыуы ағып торһон өсөн аҫып ҡуйылған шешә йығылып, балаҫҡа һыуы түгелеп китте. Үҙе тураһында һүҙ барғанын йөрәге менән һиҙеп, ләкин түҙеп ултырған Маргарита былай ҙа ҙур күҙҙәрен түңәрәкләндереп, бер килке ауыҙын асып торғас, Абдрахманға ташланды.

— Был нindәй йүнһеҙлек! Нишләп ҡарт кешеләрҙе йәберләйһең? Әйтһендәр! Шуны алдан белеп килдек бит.

Батша һалдатында булып ярайһы ғына урыҫса һөйләшергә булдыра алған Әбделғәлим ҡарт аптырап төштө. «Нисек инде ул? Беҙ уны үҙ өйөбөҙҙә битәрләп әрләп ултырабыҙ, ә ул беҙҙе үҙ улыбыҙҙың тупаҫлығынан ҡурсалай». Ҡарттың күңелендә Маргаритаға ҡарата ниндәйҙер өмөт сатҡыһы уянды. Ләкин таҡтаға һуғыу менән генә кисәге һалдат өйҙә үҙ тәртибен урынлаштыра алманы. Әбей сөңкөлдәүен дауам итте.

— Бына күңелебеҙ төшөп йөрөгән Әнисәне генә никахлаған булһаҡ, үҙебеҙсә ижап ҡабул итеп, алла бойорһа, йылдар имен килеп, иген-бесән уңып китһә, һәүетемсә туй яһап, килен аяғы аҫтына йомшаҡ яҫтыҡ һалып, шәриғәтсә өйгә төшөрөп алыр инек. Булманы!

Әҙерәк тынысланған Абдрахман әсәһенә боролоп ҡараны ла:

— Әсәй, етте! Ошоноң менән бөтһөн! Минең ала торған бисәм дә, һеҙҙең өйгә килә торған килен дә ошо! Башҡаһын көтмәгеҙ ҙә, булмаясаҡ та! — тип ҡырт киҫте.

Хәҙергә өй эсендә ҡупҡан тәүге дауыл шуның менән туҡталып торҙо. Ләкин был өйҙә килеп тыуған ваҡытлы тынлыҡ бөтөнләй, иң аҙаҡҡы солох түгел ине әле, тик һәр кем үҙенең ҡайнаған асыуын, эске тойғоһон кире күкрәгенә йәшерҙе. Ата менән әсә күңелен улын көнләшеү, уның кәңәшһеҙ ҡылған аҙымынан ғәрләнеү, бигерәк тә әсә күңелен көн һайын күҙ йәштәрен түгеп, дүрт йыл буйы күҙ ҡараһы кеүек көтөп алған улын йәлләү тойғоһо сорнап алды. Хәҙер инде ҡарттар Абдрахмандың алып ҡайтҡан кәләшен энәнән-ептән күҙәтергә тотондолар. «Былай өҫтө-башына ҡарағанда бик фәҡир кеше балаһы булырға ла оҡшамаған, бөтөн генә, ләкин кейгән кейеменең рәүеше бер ҙә беҙҙең яҡтыҡына оҡшамаған шул. Осаһын, түшен кипсәп әллә ниндәй тар нәмә кейгән, түштәрен ҡара әле — имсәктәре эт башындай бит! Ҡитсе, китсе, шундай ҙа түш буламы? Төҫө былай күркәм генә, бите шалҡан шикелле туп-тумалаҡ, ап-аҡ, соҡорло икән, ауыҙғынаһы уймаҡтай, ирендәре ҡалын — былай артыҡ яһил, уҫал булмаҫҡа тейеш. Күҙҙәре ниндәй йөҙө ҡараның! Үҙе туҫтаҡтай, түптүңәрәк, уйнап тора, шилма!» Уның был билдәһен әбей нимәгә юрарға ла белә алманы. Бабай иһә: «Был сусҡа малай кәләштең кәттәһен тапҡан, аяҡ балтырҙарына ҡара, бөтә ағзаһы тыштан нәғез килгән, беленеп тора бит кафирәнең, тик бынауы һары сәсен көҙәтеп, түбәһенә сынаяҡ аҫты һымаҡ нәмәһен түңкәреп ҡуймаһа ни була инде?» тип уйланы. Әбей сәй ҡайнатырға тип самауырының ҡолағына тотонғайны, янына Маргарита килеп баҫты.

— Мама, дайте самовар, я сама поставлю, вы посидите, — тигән булды. Һиҙгер ҡәйнә килененең теләген тиҙ генә аңлап алды ла:

— Ана ултыр! Сидим! Бисмилла нету! — тип самауырын көлдөксәгә ултыртып, тоҡандырырға кереште. Абдрахман һуғышҡа китер алдынан үҙе сығарып киткән, күптән аҡламау арҡаһында урыны-урыны менән кирбес, балсыҡтары күренеп торған мейескә ҡараны. Самауыр торбаһы тығыу өсөн шул саҡта ул тишек тә уйып ҡалдырғайны. Әсәһе самауырға ҡаҙанда йылытылған һыу һалып, ҡуҙ һалғыс менән яныш бөтмәгән тал күмере төшөрҙө лә, торба ҡуйып, самауырын шаулатып та ебәрҙе.

Сәйгә ултырҙылар. Маргаританың саквояжынан Абдрахман ике арыш ҡаласы һәм йөҙроҡ ҙурлыҡ шәкәр сығарҙы. Ике ҡаласты ла әсәһенә һуҙғайны, ләкин ул күҙ һирпеп ҡараны ла ҡулын да ҡыймылдатманы. Арыш ка-

ласынан бер нисә телем атаһы алдына ла һалғайны, ләкин ул икмәк киҫәктәренә ҡарамай ғына, ҡараһам, аслыҡты еңә алмам, тип ҡурҡты, буғай, улы алдына кире ҡуйҙы. Ҡарттар алабута орлоғона ҡырлыҡ ҡушып ҡул тирмәнендә тартҡан ондан бешерелгән дөм-ҡара икмәк ашанылар. Мәгәр алдарына һалған ике киҫәк шәкәрҙе кетер-кетер тешләп, үлән сәйе эстеләр ҙә ҡалған шәкәрен түңкәрелгән сынаяҡ төбөнә һалып ҡуйҙылар. Үҙҙәре доға ҡылғас, был мәрйә мөйөшкә ҡарап әллә суҡынып алырмы икән, тип көткәйнеләр, ләкин Маргарита «спасибо!» тине лә урынынан торҙо ла китте. «Мәрйә булыуҙан ғәйре был аллаһыҙ ҙа бисә икән», тип уйлап алды Сәрбиямал. Ашъяулыҡты, һауыт-һабаны йыйыштырам, тип урынынан торған килененә яман итеп ҡараны ла Сәрбиямал был эште үҙе генә башҡарҙы. Маргарита, тулы ирендәрен ҡыйшайтып, Абдрахманға үпкәләү ҡатыш йылмайҙы.

Сәй эскәндән һуң ҡаға-һуға аталы-уллы ауыл хәлдәрен һөйләшеп алды. Күп кешеләр астан ҡырылған, әҙәмдә мал, ҡош-ҡорт ҡалмаған. Тартып-һуҙып, көҙҙән әҙерләп ҡалдырылған ағас япрағы ашап ҡыш сығып килгән Әбделғәлим ҡарттың берҙән-бер һыйыры бына-бына быҙаулай икән. Ләкин Абдрахман нисек кенә тырышмаһын, үҙ атаһын эскерһеҙ, асыҡ күңел менән һөйләштерә алманы. Ике яҡ та үҙ һүҙҙәренең ҡойроғон йәшереп, бер-береһенән һаҡланып һөйләште. Әбделғәлим ҡарт, иҙәндә ултырған көйөнсә, ситеген һалып тәһәрәт алды ла тамағын ҡырып, аҡ керә башлаған кәзә һаҡалын һелкетә-һелкетә ауыҙ эсенән ниҙер уҡып, намаҙға ултырҙы. Маргарита, Сәрбиямал әбейҙең, хәҙер инде ҡәйнә кешеһенең, түрбашта ниҙер менән маташыуынан файҙаланып, Абдрахманды ҡосаҡлап, супылдатып үбеп алды. Ләкин уның был ҡылығы әбей һиҙгерлегенән ситтә ҡалманы. «Ух! Битһеҙ нәмә! Ғүмер буйы осаһына ыштан киймәгән мәрйәлә ниндәй әҙәп булһын», тип әбей эсенән генә саҡырылмай өй баҫып килеп ингән киленен әрләне.

Әңгәмә ипкә килмәгәс, етмәһә, яҡтыртҡан сырағынаһы ла хисаплы булғас, тиҙерәк ятыу яғын ҡаранылар. Һикенең бер мөйөшөнә түшәкте үҙҙәренә, ә икенсеһенә йәштәргә йәйҙеләр. Әбей күпме гены асыулы булһа ла, арҡыс-торҡос ҡалай таҫма менән биҙәлгән ҙур һандығын асып, үҙе килен булып төшкәндәге, ләкин ғаиләлә бик һаҡлыҡ менән тотонолған ҙур яҫтығын, йәштәрҙең өҫтөнә ябынырға кәзә мамығынан һырылған ҡорама юрғанын һөйрәп сығарҙы.

— Әйҙә, ятығыҙ! Урынығыҙ әҙер, — тине лә иҙәндә, көлдөксә янында ултырған еҫ тас эргәһенә, йылы һыу һа-

лып, еҙ ҡомған ҡуйҙы, ләкин һайыҫҡан һымаҡ эленән-элә күҙен килененән алманы. Маргарита быймаһын һалып, көлдөксәгә киптерергә ҡуйҙы, әбей бабай алдында тартынып тормай, сарафанын, юбкаһын сисеп, тоҡ һымаҡ итеп аҡ митҡалдан тегелгән, әммә еңһеҙ күлдәктә генә ҡалды һәм ялан аяҡ, үс иткәндәй йыуан балтырҙарын уйнатып, юрған эсенә инеп тә ятты. «Собханалла, тәүбә! Был ниндәй бисура! Тере көйөнсә кәфененә төрөнөп алған инсафһыҙ бәндә! Ут һүнгәнен дә көтөп торманы!» тип әбей бисмиллаһын уҡып, ишек киләһен элде... йәнәһе төнгө иблес, ендәргә өйгә инмәҫкә кәртә яһаны. Бабай килененең эске күлдәгенә ҡарата икенсерәк фекер йөрөттө. Ошо тамашаны күргәс, уның иҫенә Аҡмулланың күптәнге мөнәжәте килеп төштө:

Мөслимәнең ниһе яҡшы?
Күркәм булғаны яҡшы.
Күркәмлегән аҡ пәрҙәгә
Төргән булғаны яҡшы.

Ләкин шул уҡ мөнәжәттә бабайҙың хәтере икенсе юлдарҙы әләктереп алды:

Мөслимәнең ниһе яҡшы?
Эшсән булғаны яҡшы.
Иренән алда түшәгенә
Барып ятмауы яҡшы.

Әле генә киленен аҡлап та өлгөргән бабай уны иренән алда түшәккә барып ятҡаны өсөн «уй, хәсис, инсафһыҙ!» тип һүкте.

Ут һүнде. Өй эсенең төнгө тынлығын тик усаҡ аҫтындағы сиңерткә сырылдауы ғына боҙҙо. Әбейсә эргәһендә ятҡан бабай ауыҙ эсенән генә төнгө доғаһын уҡыны ла мышнап йоҡлап та китте. Ләкин әбейҙе йоҡо тиҙ генә алманы.

Таң һарыһынан уянған әбей еҙ ҡомғандың дыңғырлағанын көттө, йәштәр иртүк торорҙар ҙа соланға мосолманса ғөсөл ҡойонорға сығырҙар, тип уйланы. Ләкин бушҡа ғына! Ғөсөл ваҡытында йәштәр төшәнә-төшәнә ләззәтләнеп йоҡлайҙар ине әле. Ярһыуынан йөрәге ҡабынған әбей «был кәнтәй улымды кафыр итеп тә өлгөргән икән», тип юрғанын һирпеп торҙо ла асыуынан ҡараңғыла өй эсендәге һауыт-һабаны шалтыратып йөрөй башланы.

Күп тә үтмәй Түбәнге мәхәллә мәзиненең кәзә тауышы менән ҡысҡырған аҙаны мосолмандарҙы иртәнге намаҙға мәсеткә саҡырҙы. Тревога менән уятылған һалдат шикелле, Әбделғәлим ҡарт урынынан һикереп торҙо ла, арлы-

бирле тәһәрәтләнеп, ҡыптыр-көптөр кейендә лә мәсеткә ашыҡты. Өйҙә кеше йөрөй башлағас та уянған Абдрахман, тоноҡ ҡына аҙан тауышын ишетеп: «Илдә йотлоҡ, астан әҙәм ҡырылып ята, ә Мөхәмәтрәхим мулла халыҡты мәсеткә намаҙға саҡыра. Астан хәле бөтөп, һыуыҡ өйҙә калған тараҡан һымаҡ саҡ ҡына ҡыбырлап йөрөүҙәренә ҡарамаҫтан, йәне бар ир-ат һөйрәлеп булһа ла мәсеткә киләсәк. Быуаттар буйына шулай булған, киләсәктә лә шулай булырмы?» тип уйлап алды.

Салғыя тауы яғынан ҡыҙарып ҡояш ҡалҡып килгәндә, Абдрахман атаһының ағас көрәге менән урамда ойоҡһотоп ҡар көрәп йөрөй ине. Тиҙҙән март башы. Ҡыш бауыры ни тиклем генә оҙон булмаһын, яҙ билдәләре төҫмөрләнә башлаған. Ҡояш нурҙары ла сағыулана, уның мамыҡ кеүек ҡар өҫтөндә йымылдаған бихисап ынйылары күҙҙе сағылдыра. Унда-бында тере ҡалған һыйыр мөңрәүе, һарыҡ-кәзә баҡырыуы ҡолаҡҡа салына. Бына яңы ғына ситән һарайҙан Абдрахман сығарып түккән тиҙәктә ни моғжизә менәндер инде тере ҡалған ике ҡара башлы турғай типкесләп ем эҙләй. Ғәҙәттә һыу өсөн иретергә ҡар алырға сыҡҡан кешеләр ҙә урамда яҡ-яғына ҡараштырып оҙағыраҡ торорға тырыша. Мәке уйыусы булмағас, ҡыш Ҡыҙылға һыуға төшмәйҙәр. Ә байҙарҙың үҙҙәре эсергә, мал эсерергә ҡапҡалары эсендә үҙ ҡойолары бар.

Әбделғәлим ҡарттың өй ихатаһын, ялан кәртәне уратып алған ситәне, башҡаларҙыҡы кеүек үк, ығылып бөткән тиерлек. Тик бесәнлегенең генә бер яғы тороп ҡалған. «Урта хәлле домахужаин» хисапланған Әбделғәлим дә ошо көнгә төшөп ҡалғас, башҡаларына ни һан?

Мәсеттән ҡайтып килгән ҡарт, әйтерһең дә, ҡар көрәп йөрөгән улын ул итеп күрмәй. Ҡуҙға баҫҡан бесәй һымаҡ, еңселдәтә баҫып өйөнә инеп китешләй аяҡ һөрткөс кейеҙ өҫтөндә арҡыры ятҡан быйманы осора типте лә муйынындағы тағатылып өлгөрмәгән дебет шарфының осона баҫабаҫа һикегә мендә һәм урле-түбәнле йөрөй башланы. Быға аптыраған әбейе:

— Ни булды, бабай? — тип һорашып ҡараһа ла, ҡарты өндәшмәне, тик йолҡоп ырғытырҙай итеп тотҡан һаҡалын һәлберәтеп, ҡаҡса битенә ниндәйҙер ғәрәп күркәмлеге биреп торған оҙон, ҡыу танауын ике тишеге ағарғансы киңәйтте лә:

— Ана шул булған! Мәлғүн! Дин боҙоусы, иманһыҙ! — тип һүгенә башланы.

Ярты сәғәт кенә алдан, иртәнге намаҙ тамамланғас, Мөхәмәтрәхим мулла мендәренә баҫты ла мәхәллә мосолмандарына вәғәз әйтергә тотондо:

— Иәмәғәт! Мосолман әһелдәре вә мосолмандар! Илебеҙ өҫтөнә килгән афәтте бөкиллегеҙ күреп тора. Бына был ҡытлыҡ сәбәби илә ғәләмгә килгән вә афәт Мөхәммәт өммәтенең биш фарызын шартына житкезеп, һәр мосолман бөкилле иҡдиһатын салып башҡармауда. Биш рәкәте намаҙ ҡылыу урынына, ошбу иртәнге намаҙ атҡарыу илә генә ҡәнәғәтләнеү, ураҙаны рәғая ғына тотоу, һәммәсе мосолман ғәләменә хилаф, иблес шатланыу өченгә ҡылған ишләр. Иблес, кафыр икесе бер мәгънәдә. Ҡайҙа иблес — анда кафыр. Түбәнге мәхәлләнең кайсы бер мосолманнары кафырны куйынына кертә, әлхәсил унын илә зина ҡыла, өстенә олуг гонаһ ала. — Күҙен сырт-сырт йомоп, ҡыҙара биреп намаҙлығында энә өҫтөндә ултырған кеүек ыуаланған Әбделғәлим ҡартҡа төбәп: «Ул һинең коммунарға эйәреп йөрөгән малайың, шуның тураһында һүҙ бара», тип туп-тура әйтергә лә самалағайны, тик баҙнаты етмәне.

Шулай бер заман ошо уҡ мендәрҙән «Ғәлимйән хажи кафирәләр илә типтерә, шулар илә зина ҡыла, дөхән сура», тип һөйләп торғанда, әллә мулланың бәхетһеҙлегенә күрә, беренсе тапҡыр мәсеткә аяҡ баҫҡан Ғәлимйән хажи мулланың салғыйынан мөнбәрҙән һөйрәп төшөрөп үҙ мәсетендә, бөтә ғәләм алдында һыу эскеһеҙ итеп туҡмап сыҡҡайны. Аҙаҡтан становой пристав, мировой судья килеп тәфтиш ҡылып та йөрөнө, ләкин Ғәлимйән хажи һәр береһенә берәр тыу бейә етәкләтеп ҡайтарҙы ла шуның менән вәссәләм! Мөхәмәтшәриф ахунға ялыуға ла барып ҡараны, ләкин уныһы үҙ табаҡташы хажи яғына ауҙы. Тик мулланың үҙен генә: «Сандалап буш артынан йөрөмә, бынан кире ил уҙамандарына тел тейҙерәһе булма ғөшөрһөҙ ҡалырһың!» тип орошоп ҡайтарҙы.

Ә хәҙер инде мулла-монтағайҙың койроғо ҡыҫылғас, ҡайҙа инде ул мөмбәрҙән исемләп вәғәз әйтеү. Мулла шөрләне. Ләкин Әбделғәлим күршеһенең урынында ултыра сыҙай алмай өтәләнеүенә ҡарағанда, Мөхәмәтрәхим мораҙына ирешә, буғай.

— Иртәнге намаҙҙа маҡтанылар, олуғланылар әле... Мөхәмәтрәхим мулланың ҡайһылыр эте: «Абдрахман мәрйә бисә алып ҡайтҡан», тип һөйөнсө һорарға ла өлгөргән. Үҙ вәғәзендә беҙҙе телгә алып, бөтә халыҡ алдында рисуай итте. — Атаһының кемгәлер төбәмәй генә зарланыуы шинелен сисеп торған Абдрахманға йәшен тиҙлегендәй тәьҫир итте.

— Минме? Мин барып хәҙер ул ҡарт бурһыҡтың табалай битен типһәндәй итеп ҡайтмаһаммы? — тип яңынан кейенә башланы.

Быны күреп, атаһы һикенән һикереп төштө лә Абдрахмандың яғаһынан алды, нимәлер һиҙенеп, күҙе биш булған Маргарита салғыйына йәбеште.

— Һы, һин мулланы туҡмап ҡайтыуың менән эш бөтәме?

— Телеп тыйһын! Мин Совет власын яҡлап бушҡа һуғышмаған! Телеп тыйһын!

— Улым, һин ҡыҙма, тыныслан! Ярай, хәҙер һин мулланы барҙың да боғаҙланың да ҡайттың, ти. Бер ауылда ут күрше булып йәшәйбеҙ бит, мин унан нисек кеше күҙенә күренәм? Әҙәмдән оят! — Әбделғәлим әҙерәк һүнә төшкән улының күҙенә ҡарап ялбарҙы.

— Ярай, бер юлға ҡалдырып торам. Ләкин мин быны сәйемдә эсәм дә, мулланың өйөнә барып, уның менән күҙмә-күҙ һөйләшәм.

— Уныһы һинең эш, ләкин оронма. Дин әһеленә ҡул теййереүҙән дә оло гонаһ юҡ.

Әҙерәк асыуы һүнеп һике ситенә ултырған Абдрахман эргәһендә, бесәй һымаҡ һыйынып, быныц сәбәбен белә алмай уралган кәләшенә:

— Иғтибар итмә! Ваҡ эш, — тип кенә ҡуйҙы.

Иртәнге сәй ваҡытында һүҙ өндәшмәй сәй эсеп ултырған улына күҙенең ҡырыйы менән генә ҡарап, Әбделғәлим ҡарт: «Улым, аллаға шөкөр, үҙемә оҡшаған, яғаһынан кеше алдырыр егет түгел», тип эстән генә маһайып ҡуйҙы.

— Мин бөгөн ат тапһам, утынға барып килермен. Егерме саҡрымда урман була тороп, ситән яғып ултырыу кәрәкмәй түгел, — тип, сәй эскәс, Абдрахман йыйына башланы. Артынан сығырға әҙерләнгән Маргаритаһына:

— Өйҙә ултыр, әсәйгә булыш, — тине лә сығып китте. Ләкин бөтә йәне-тәне менән киленен һөймәгән Сәрбиямал ҡарсыҡ уны бер нәмәгә лә тотондорманы, «нильжә, грех!» тип кенә торҙо. Ни эшләргә белмәй аптыраған Маргарита тәҙрә төбөнә килеп, урамға бойоғоп ҡына ҡарап торҙо ла, ишегалдына сыҡты. Ләкин унда кәртәһе һүтелеп яғылған өй артындағы яланғас өс муйыл, ярты ҡыйығы аҡтарып ташланған һарайҙан башҡа күҙгә элерлек нәмә тапманы. Тирә-йүн бөтөнләй ҡола ялан, ағас әҫәре юҡ. Көньяҡта ауылдың һыртынан уҡ бейек булмаған ике тумалаҡ тауҙың итәге баш ала. Һыртҡы урамдың ситендә йыуан ҡарағас бүрәнәләрҙән һалынған бейек болдорло тәҙрәһеҙ бер йорт ултыра. «Был берәй келәттер инде», тип уйланы Маргарита. Эйе, яңылышманы — ул ысынлап та келәт. Мир менән ҡулыҡ аҡсаһына һалынған келәт — мөгәзәй ине. Ялан яҡтарында ҡоролоҡтоң эленән-эле ҡабатланып тороуын

иҫәпкә алып, һәр бер йорт йыйып алған игендең ботонаı ун ҡаҙағын ошо мөгәзәйгә йыл да һала барған. Иген һалыусыларҙың исемлеге «зельский»ҙа, тимер һандыҡта, һаҡланған. Ауылда ваҡ мал юғалған, ҡайһы бер кешеләр, гонаһынан өркөп тормай, һыйыр урлап һуйғандар, ҡыйыуыраҡтары ат та урлаған, мәгәр мөгәзәйҙәге мир йыйып һалған игенгә тейеүсе булмаған. Сөнки ул — изге. Ә быйыл ана шул мөгәзәй буралары ла буш.

Тауҙың береһенең башында, арғырағында, өс аяҡлы таған ултыра. Ул таған хан заманынан бирле алыҫтан күренеп, маяҡтай тора. Ниндәйҙер яғымлы тауыш Яланға килен булып төшкән Маргаритаға аңлатма биреп: «Уның аҫтында хисапһыҙ мәғдән ята, тиҙәр. Ул тағанға ла бер кем теймәй, сөнки быға асыуы килгән мәғдәндең зәхмәте ауыл халҡына тейә», тип һөйләй төҫлө.

Ошо ике тауҙан алыҫтараҡ Маргарита һырты көньяҡҡа, алыҫҡа һуҙылып киткән тағы бер яланғас тау теҙмәһен күрҙе. Баяғы тауыш яңынан телгә килә: «Уныһы Ҡаҙаҡ үлгән сағылы. Ҡаҙаҡ менән башҡорт үсләшкән ваҡытта барымтаға килгән ҡаҙаҡтарҙың береһе шунда үлемен тапҡан». Маргарита ҡарашын төньяҡ-көнсығышҡа йүнәлтте. Яҡында ғына бормаланып аҡҡан, ләкин хәҙер туңып, типтигеҙ ҡар менән ҡапланған йылға күрҙе. Уның ике яғында таллыҡ, артабаныраҡ, йылғаның һул яҡ ярында, өйкөм-өйкөм тирәктәр йылғаға ниндәйҙер күркәмлек өҫтәй. «Эйе, — тине таныш тауыш,—ул бынан өс йөҙ йылдар элек Стәрлетамаҡ яғынан күсеп килеп ултырған, балығы менән дә, һунары менән дә уңайлы, мал көтөү өсөн күҙ күреме ерҙән йәйрәп ятҡан далалары булған Ялан ауылы һыулаған Ҡыҙыл йылғаһы. Ана унан ике генә саҡрым ерҙә бейек таш ҡабаҡ һуҙылып китә, ҡасандыр Ҡыҙыл йылғаһының ағышы шуның аҫтынан үткән. Хәҙер уның иҫтәлеге булып ҡабаҡ аҫтында әҙәм буйы күрән менән ҡапланған күләүектәр, «Оҙон күл» тип аталып йөрөтөлгән күл ҡалған. Ҡасандыр ошо быуат башында ҡапыл ҡотороноп сыҡҡан ямғырлы дауыл ошо Оҙон күлдән күккә аждаһа күтәргән. Елдауыл менән алышҡан ҡойроғон болғап һелтәгәндә, төбөтамыры менән ағастар ҡубып, уның менән ҡуша күккә осҡан, өй түбәләре емерелгән. Хәҙер ул күл эргәһенә кеше бармай, ҡурҡа. Бик йөрәкле кешеләр генә уның эсенә төшөп, йылым менән табан балыҡ һөҙә. Әммә ундай кешеләргә ошоғаса бер ни ҙә булғаны юҡ».

Маргарита көнбайышта томан кеүек күгәреп ятҡан, әллә ҡайҙарға һуҙылған Ирәндек тауына ҡарай. Ана шул бөгәрләнеп һуҙылған бейек тау аръяғында уның ихтирамлы докторы йәшәгән волос үҙәге Нәмәс ауылы булырға

тейеш. «Эйе, Маргарита, яңылышмайһың, нәҡ шул күгәргән тауҙар артында ятып ҡалды һинең ауыл...», тип йөпләй теге тауыш. Был сит кешеләр йәшәгән шөкәтһеҙ ауылда үҙен ситлеккә бикләнгән ҡош һымаҡ тойған Маргаританың күҙенә йәш эркелә. Ысынлап та, ошо ят башҡорт ауылында уның ҡайнар мөхәббәт менән һөйгән Абдрахманынан башҡа кем бар? Тик ул ғына баһадирҙарса буй-һыны менән, көслө ихтыярлы характеры менән ошо йән өшөткөс күренеште шаршау һымаҡ ҡаплап тора. Әгәр был донъяла үлеп яратҡан кешеһе булмаһа, Маргарита бында бер минут та тормай анау күгәреп ятҡан тауҙарға ҡарай ҡасыр ине.

Йәш кәләшенең тирә-йүнде күҙәтеп тороуын күреп, уның эргәһенә Абдрахман килеп баҫа. Көнсығышта, Ялан ауылына ҡаршы ғына, дүрт-биш саҡрым ерҙә стена һымаҡ текә ташлы бер ҡаялы ҡалҡыуҙы күреп:

— Был ниндәй ҡая? — тип һорай Маргарита.

— Был Салғыя ташы тип атала. Уның тураһында боронан ҡалған легендалар бигерәк күп, — Абдрахман кәләшенең һораулы ҡарашын һиҙеп, аңлатырға керешә. — Ул таш тирәһендә ҡышын да, йәйен дә берәмләп бер кем дә йөрөмәй. Сөнки уны кирәмәтле ҡая тиҙәр. Уның әллә ҡайҙарға, ер аҫтына төшөп киткән ике мәмерйәһе бар. Унда әллә ниндәй ендәр, пәрейҙәр оялаған, тип һөйләйҙәр. Улар тәңгәленән үткәндә һәр кеше үҙ күлдәгенең иҙеүен ысҡындырып, «ләхәүлә вәлә ҡеүәтә» йәки үҙе белгән башҡа доғаны уҡып үтергә тейеш. Шул доғаны ишетһә, ендәр, пәрейҙәр мәмерйәлә шымып ҡына тик кенә ултыралар, әгәр шуны ишетмәһә, төнө буйы шаулап, әллә ниндәй тимер-томор шылтыратып, халыҡты яфалап сыға. Ул ҡаяның көнсығыш һырты йәйпәк, уның битләүендә ауыл халҡының бесән болондары, игенлеге йәйрәп ята. Йәй ҡыуыш ҡороп, «Салғыя ташы» эргәһендә йәки теге яҡ битләүендә бесән сапҡан, иген урған кешеләр төндә үҙ ҡыуыштарынан уҡынып, берәмләп түгел, икешәрләп-өсәрләп сығалар. Берәмләп сыҡҡан кешене мәмерйә эйәләре яуырындарына йөкмәп үҙҙәренә алып ҡасалар икән, тигән һүҙ йөрөй. Шул мәмерйәгә оялаған ендәрҙе, пәрейҙәрҙе күмәкләп ҡурҡытыу маҡсаты менән бәләкәй генә түбәлектә, нәҡ шул мәмерйәләрҙең береһе тәңгәлендә, ерҙән бер аршындан юғарыраҡ итеп таш өйгәндәр. Уның бүлмәләре мәхәллә эсенә оҡшаған. Унда мулла мөнбәре лә бар. Мәсет нигеҙенә оҡшатып өйөлгән ул ҡалҡыулыҡты халыҡ Таш мәсет тип атай. Рамазан айы яҙға йәки йәйгә тап килһә, ауыл мосолмандары күмәкләп шунда ураҙа ғәйете, ҡорбан ғәйете уҡыған. Ул һеҙҙеңсә Великий пост кеүеге-

рәк дини ғәҙәт. Йыйылып намаҙ ҙа уҡығас, мәмерйә эйәләре ҡурҡып, ояларында тыныс ҡына ултырған. Салғыя ташының өҫтөнә күтәрелһәң, уң ҡулдараҡ Әмин тауы тигән бер һөҙәк түбә шәйләнә. Уның эргәһендә уйһыуыраҡ үҙәгендә сейәлек бар. Ҡыҙарып сейә бешкән мәлдә моҙғаларын, ағас күнәсектәрен бәләктәренә элеп, бөтә ауыл халҡы шул сейәлеккә китә. Ләкин камил бешеп, һутын йыйып ҡарағусҡылланмайынса, бер кем дә ул сейәгә теймәй. Ауылдың бөтә халҡы шул ғәҙәткә күнеккән. Әмин тауының аръяғында икенсе донъя башлана. Әмин тауы казактар менән башҡорттарҙы айырып тора. Ике халыҡты бүлеп, һул яғынан Ҡазак граны башланып киткән йылғаны Яйыҡ тиҙәр. Уның буйында эре-эре атлы казак хуторҙары, станицалар, Буҙ тирәк, Йәнгел, Ҡыҙыл, Магнит һәм башҡалар теҙелеп киткән. Был көҙгө кеүек типһән дала аша, Яйыҡ буйлап XIX быуаттың аҙағында Рәсәй императоры Александр III-төң улы киләсәкке һәм һуңғы император цесаревич Николай уҙып киткән. Уны Батша юлы тиҙәр. Был юлды йөҙәрләгән ат-арбалы башҡорт айҙар буйы эшләгән.

Яңы килен булып төшкән Маргаритаға тик Ялан ауылы тураһында ғына бер-ике ауыҙ һүҙ әйтәһе ҡалды.

...Ялан — Бөрйән ырыуынан бүленеп ултыраҡ тормошҡа күскән иң боронғо ауылдарҙың береһе. XVIII быуат аҙағындағы ревизия буйынса бында утыҙ йорт булһа, хәҙер — йөҙ йорт. Ауылда бер нисә ара бар, мәҫәлән, ауылдың иң юғары осондағы араны ҡарағалпаҡ, уларҙан бирәләре бүре, урта төштө һәм сомтор урамды семәтәйҙәр, мөгәзәйгә төшөп киткән тыҡрыҡты ҡаҙаҡтар, ә һин килен булып төшкән осто яйҡарҙар араһы тип йөрөтәләр. Был арала муллаһы ла, байы ла, ауылса әйткәндә, мясниги ла, йәғни ит менән сауҙа итеүсе урыҫ Ибрайы ла, зимагуры ла, картежниги ла, фәҡир-фоҡараһы ла бар. Ләкин был араның теләһә ниндәй ыштанһыҙ ярлыһы ла: «Беҙҙең менән шаярма, улай тигәс тә беҙ Яйҡар кешеһе әле», тип күкрәк һуға, үҙен ауылда башҡаларҙан өҫтөн ҡуя. Ундайҙарҙы «ярлы тәкәббер» тип йөрөтәләр...

Күп тә үтмәй, бер йөнтәҫ ҡола ат егеп, сана өҫтөнә аяҡ үрә баҫып, Абдрахман килеп туҡтаны. Маргарита һиҫкәнеп китте.

— Кешене ҡурҡытаһың бит! Ҡапыл килеп сыҡтың! — тип ғәйепле кеше һымаҡ ул иренә ирҡәләп ҡараны.

— Оҙаҡ һөйләшеп торорға ваҡыт юҡ, атты бөгөнгә генә һорап алдым, — тине лә Абдрахман балта-көрәккә, арҡанға өйгә инеп китте.

— Мин һинән бер аҙым да ҡалмайым. Мине бынан

кире өйҙә ҡалдырып китмә! Миңә күңелһеҙ, — Маргарита моңһоуланып башын түбән эйҙе.

— Бынағайыш? Туңып йөрөмәгә унда һиңә ни бар? Мин тиҙ ҡайтырмын, өйҙә генә ултыр!

— Юҡ, ҡалмайым тигәс ҡалмайым, — тине лә санаға килеп тә ултырҙы.

Өгөтләп булдыра алмағас, кәләше менән йәнәш ултырҙы ла Абдрахман Ирәндек итәгенә утынға һыпыртты.

## 12

Абдрахман күҙенә бер нәмә күренмәй Мөхәмәтрәхим мулланың өйөнә барып ингәндә ул яҫтыҡ өҫтөндә тәсбих тартып ултыра ине. Ултырған еренән һиҫкәнеп тигәндәй ҡапыл луянды ла, мулла, киң битенә, күҙенә йылмайыу йүгертеп, тыштан ҡарамаҡҡа ҙур ризалыҡ белдереп:

— Һай, афарин, афарин! Һалдат ҡайтҡан икән, әйҙә. түрҙән уҙ! Ишетеп ятабыҙ, башлы-күҙле лә булып ҡайтҡанһың икән, бик мәслихәт, бик мәслихәт! Бәлиғи булған кешенең никахлы булыуын китап маҡтай ул, — тип тағы әллә ниҙәр сурытырға уйлағайны, Абдрахман:

— Мулла, сабыр ит әле! Мин һиңә йомош менән килдем, — тине.

— Йә, йә, мырҙа, күрше булғас, уның йомош-юлы ла төшмәй тормаҫ, — мулла Абдрахмандың йомошон тыңларға әҙерләнде.

— Йомош бына шул: бөгөн иртәнге намаҙҙа уҙ вәғәзеңдә мине телгә алып киткәнһең икән. Илтифатың өсөн ҙур рәхмәт. Ләкин шуны мороноңа киртеп ҡуй, әгәр ҙә мәгәр ошо ҡылығыңды яңынан ҡабатлай торған булһаң, мин һине Ғәлимйән хажиҙан былайыраҡ итермен. Ишетәңме?

— Нишләрһең?

— Мөнбәреңдә йығып һалып, анау көрәктәй һаҡалыңды көҙәп сығырмын.

Ҡурҡышынан шыр ебәреп, өй мөйөшөнә һырынған мулла ҡысҡыра башланы.

— Самосуд! Самосуд таһа! Һеҙ ҡайҙа, ләғнәттәр!

Бабайҙың тауышына ялан күлдәк, ялан аяҡ улы Уйылдан, ҡаршылағы мал өйөнән, күрәһең, йүгереп килеп, Абдрахманға йәбешеүе булды, күлдәгенең һиҙәпһеҙ иҙеүенән тотоп, Абдрахман уны осора һелтәне. Абдрахмандың уң ҡулында Уйылдан күлдәгенең йолҡоноп өҙөлгән бер киҫәге тороп ҡалды. Йыртылған урынын усы менән ҡаплап Уйылдан, ауыҙын бәлшәйтеп, күҙ йәшен еңе менән һөртә-һөртә илларға тотондо.

— Атай. күлдәгемде йыртты! Миңә өр-яңы күлдәк һатып алып бирһен, — тип ҡалын тауышы менән һөрән һалды.

Асыуы ҡабарған мулла илап торған малайын бер-ике сикәләне лә:

— И мәжнүн! Алырһың ул ауыҙын асһа үпкәһе күренгән фәҡирҙән күлдәк! — тине лә һикелә үрле-түбәнле йөрөй башланы.

— Юҡ, мин быны был көйөнсә ҡалдырмайым. Эте лә, бете лә яғаға йәбешә башлаһа, ҡайҙа китә ул! Язаһын алырһың! Волосҡа, Башревкомға ялыу төшөрәм. Ҡулыңды бик сусаңдатһаң, уныһын да ҡыҫҡартырбыҙ.

— Быныһы башы ғына әле! Белеп ҡуй, Башревкомды Совет власы күптән ҡыуып ебәрҙе. Көнөгөҙ һанаулы. Хуш!

Ишеген күгәгенән аҡтарып сығарғансы бөтә көсөнә шаҡылдатып япты ла ошо ҡыҙыулыҡ еле менән Ғәлимйән хажиға барып керҙе.

— Әссәләмәғәләйкүм!

— Вәғәләйкүмәссәләм!

— Абдрахман ҡусты ла был! Әйҙүк, әйҙүк, түрҙән уҙ, — тип үҙе сәй эсеп ултырған өҫтәл артынан урын күрһәтте.

— Юҡ, юҡ! Ултырып торорға ваҡытым юҡ. Йомошҡа ғына килгәйнем.

— Йә, йә, ул ҡандай йомош?

— Утынға барып килергә бөгөнгә генә бер атыңды һорап торайым тигәйнем.

— Ала ғына күр. Нишләп бишәүһен алмайһың? — тип өҫтәлендә графин менән ултырған ниндәйҙер һары эсемлекте рюмкаға һалып төп күтәрә эсте лә алдында ятҡан суҡлы таҫтамал менән ҡалын ерән мыйығын, дүрткел итеп үҫтерелгән һаҡалын һөрттө. Иртә менән тороп баш төҙәтергә үҙенә иптәш таба алмай аптырап ултырған хажиҙың күңеле асылып китте. Рәсәйҙең һуңғы императорына тартымыраҡ уның йөҙө Абдрахманға киң йылмайҙы, уға текәгән зәңгәр күҙҙәре туң көйөнсә бер урында туҡтап ҡалды. — Һин ҡайһылай тиһәң дә беҙгә ҡәрҙәш кеше бит әле. Сыбыҡ осо булһам да, мин һинең атайың яғынан ағай тейешле. Әйҙә, ултыр! Бына Верхурал ашынан ауыҙ итеп, һалҡын булһа ла йылҡы ите ҡабып сыҡ.

Абдрахман өҫтәл артына ултырмайынса булдыра алманы.

— Вот маладис, вот исмаһам, егет! Ҡак ошо араҡыға тотона башлаһаң, бөтөн әҙәм һырт биреп ҡаса. Әллә ниткән ҡыҙыҡ халыҡ! Һин, ҡусты кеше, ағайыңдың ҡулын буш итмәҫһең бит инде. Әйҙә, тот әле. — Рюмкаларға ул теге һарғылт шыйыҡсаны һалды.

— Йылтыр түгел тип бик иçең китмәһен. Уға андыҙ һыуы ҡушылған, — тине лә ул тағы күтәреп ебәрҙе.

— Юҡ, мин ҡапмайым. — Абдрахман эш күплеккә һылтанды.

— Ой, ҡустым! Бөтөнләй буш кеше булып сыҡтың бит һин былай булғас. Хыт алдыңа һалғанды аша.

— Унынын булдырам.

Абдрахман ит ашаған арала Ғәлимйән хажи:

— Ситтән бер урыҫ ҡыҙы алып ҡайтҡанһың икән тип ишетеп ятам. Бик шәп иткәнһең уны. Урыҫ ҡыҙҙары бик илсаҡ, һөйкөмлө була улар. Беҙҙең башҡорт бисәләре кеүек тупаҫ, сығын түгел. Ир тип үлеп баралар. Мөхәббәт эсен дә бик шәптәр. Шулаймы? — тине.

Нимә тип әйтергә лә белмәй, ике бите ут һымаҡ янған Абдрахман:

— Шулай... шулай, — тигән булды.

— Шулай булмай ни?.. Ағайыңдың ҡулынан байтаҡ үткән инде улар. Ҡайтҡас, киленгә әйт: Ғәлимйән тигән ҡайнағаң күрергә теләй, күренеш әҙерләп ҡуйһын тип әйттә тиерһең. Булдымы?

— Булды! — Абдрахман тиҙерәк сығып китеү яғын ҡараны. Ул сыға башлағас:

— Йә, ярай, рәнйемә. Йомошоң төшһә, килеп йөрө, беҙгә килмәй, кемгә бараһың. Ғүмерҙә таныш түгел кешегә лә ярҙам итеп ебәрәһең, һин, нисә әйтһәң дә, туған бит әле. Сыҡҡас, малайҙы күреп әйтерһең, Ҡола атты егеп бирһендәр, — тине хужа.

«Хажи нишләп был рәүешле йомарт булып китте әле, бигерәк алсаҡ, бигерәк яғымлы». Абдрахман үҙенең һорауының осона сыға алманы. Ә Ғәлимйән хажиҙың иçәбе юғиһә икенсе төрлөрәк ине: үҙенең ул фекерен Абдрахман Ҡыҙыл Армиянан ҡайтҡас та тәңкләп күңел һандығына һалып ҡуйғайны. «Унын һымаҡ ғәйрәтле, арыу-талыуҙы белмәгән, тотҡан урынынан һындырып бара торған кешене был заманда ҡайҙан табаһың. Башҡа кешене әпкилеп йомош юлыңа йөрөтә башлаһаң, «Хажи ялсы тота» тип йәйләнеп баралар. Ә был минең туған кеше, үҙ теләге менән ағаһына ярҙам итә... Бынауындай бола заманда үҙеңдең янында Абдрахман ише ҡыйыу, көслө егеттең булыуы үҙе бер таяныс-терәк. Ә миңә килеп баш һалмай унын да әмәле юҡ. Өйҙәрендә яңғыҙ туҡал һыйырҙарынан башҡа мал әçәре ҡалманы. Унынһы Әбделғәлим ҡартҡа ла таптаман. Ергә ереккән Абдрахмандың хәҙер көрәк, балтаға ҡулы ҡысып тора». Бына нисек фекер йөрөттө Ғәлимйән. Бөтөнләй хаҡ булмаһа ла, унын был фекере нигеҙһеҙ тү-

гел ине. Үҙенең был ниәтен ул Әбделғәлим ҡартҡа ла ҡаға-һуға еткереп ҡуйғайны...

Сана Ирәндек итәгендә ятҡан ҡайын урманына килеп туҡтаны. Маргарита, сананан һикереп төшөп, бер төп-төҙ ҡайынды ҡосаҡланы.

— Ах, ниндәй матур ҡайындар!

Абдрахман иһә был ҡайын сауҡалығында бер ниндәй ҙә матурлыҡ тапманы.

— Ошо нескә билле ҡыҙҙар кеүек ҡайындарҙы һин нисек ҡулың барып ҡырҡаһың?

— Ҡырҡыу ғына түгел, беҙ уны дөрләтеп усаҡҡа яғабыҙ. Өй йылытабыҙ.

Абдрахман, шинелен сисеп ташлап, бер өйкөм сауҡаға ҡар көрәп һуҡмаҡ һалды.

— Бына мин хәҙер ҡайындарҙы ҡырҡам да ботап торам, ә һин уларҙы сана ҡашына ташып һала барырһың.

Бер-ике сәғәт эсендә Абдрахман гел бер төрлө генә ҡайындарҙы ауҙарып ботарланы ла туғарылған сананы тейәп ҡайтыу яғына бороп ултыртып та ҡуйҙы. Былар кире әйләнеп ҡайтҡанда, ҡояш байып, әле күк йөҙөндә таралып бөтмәгән шәфәҡ ҡыҙыллығы ғына ҡалғайны. «Бәлки, утын да алып ҡайтҡас, әсәйҙең әҙерәк күңеле йомшара төшөр», тип Абдрахман бушҡа ғына уйлаған икән. Еүешләнеп арып ҡайтҡан киленен ҡарсыҡ бар тип тә белмәне. «Исмаһам, был әсәйем, спасибо, килен, тип әйтһә ни булған». Әсә менән килен араһындағы мөнәсәбәт яҡшылыҡ менән бөтмәйәсәгенә Абдрахман нығыраҡ ышана башланы.

## 13

Был йәшерен алып барған көрәштә ике яҡтың көсө тигеҙ түгел ине, әлбиттә. Сәрбиямал әбей яғында ғүмер буйы «баҫҡынсы завод урыҫы», «ер талаусы урыҫ» тип уларға быуаттар буйына нәфрәт, күрә алмаусанлыҡ менән ҡараған бөтә ауыл халҡы, ошоға тиклем һис кенә лә үҙгәрмәй йәшәп килгән ҡөрьән сүрәләренә нигеҙләнгән шәриғәт закондары, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәре, килен төшөрөү, ҡыҙ биреүҙең күптәнге ҡануындары. Маргарита яғында — Совет власы иғлан итеп тә урындарҙа әлегә еренә еткереп бойомға атҡарылмаған яңы закондар, йәнә — яратҡан ире Абдрахман.

Ауылда астан интекһә лә, ошаҡ йөрөтөргә, өйҙән өйгә ғәйбәт таратырға кешеләре табылып торҙо.

— Сәрбиямал әбей мөрйәһенән төндә өйөнә күктән төшкән ут инеп юғалғанын күргәндәр.

— Ул ни булһын! Мәскәй әбей инде

— Иблес, ана шул ут сүрәтенә кереп, Абдрахмандың күйынына ингән.

— Шул иблестең шауҡымы ауыл халҡына, малына нисек теймәй ти? Тейә инде ул. Малыбыҙ ҙа, үҙебеҙ ҙә ҡырылып бөтәбеҙ икән.

Ҡайһы бер ҡыйыуыраҡтары: «Ирен дә, үҙен дә ауылдан ҡыуып ебәрергә кәрәк», тип һөйләнде.

Бер көн күрәҙә, ырымсы Өммөгөлсөм әбей Әбделғәлим ҡарттар өйөнә инеп, ауылда таралған ғәйбәткә тағы ағыу өҫтәп сыҡты. Абдрахман менән Маргарита ятҡан ерҙе өсөҡлап, сепрәк яндырып, иблесте сепрәк уты менән өйҙән ҡыуып сығарам тип, әллә ниҙәр имләп бөттө.

— Юҡ, юҡ, Сәрбиямал килен, ошо арала ул кафирәгеҙҙе ҡыуып ебәрмәһәгеҙ, үҙегеҙгә ҙур зәхмәт килеүен көтөп тор. Ана, битеңдең ҡобаралары осоп, бөтөнләй кеше төҫө ҡасҡан.

— Әллә, бынауы Абдрахманын йәлләйем бит әле. Шул елгыуар мәрйә артынан беҙҙе ташлап китеп бармағайы. Ҡуй инде, әллә улымды алмаштырҙы инде сусҡа кафирә, анауы бишмәттәрен систереп, кейҙереп тора. Бер көн өйгә килеп инһәм, еңгә, иҙәнгә йөгөнкөләп ултырып алған да теге бисураның аяғын сисендереп ята. Әстәғәфирулла! Иҫем китте!

— Иблес инде, иблес. Улыңды ла алмаштырған улай булғас.

Сәрбиямал әбейҙең яулыҡ осо менән ауыҙын ябып киҙергәнен ишетеп ҡалды ла Өммөгөлсөм әбей хәҙер генә әләктереп алды.

— Ана бит, сиҡаҡлап, осҡолоғоң тотоп тора. Бисмилләһыҙ аштан эсең күбә, тиҙҙән бүһерең дә ҡалҡа башлар әле.

— Былай мин уны аш-һыу тирәһенә яҡынлатмайым да ул.

— Яҡынлатмаһаң ни? Ул, һиңә ҡарап, һинең бисмилләңде аш-һыуҙан ҡағып тора инде.

— Эй, раббым, үҙең ярлыҡа инде.

Ошо һөйләшеүҙән һуң Сәрбиямал әбей мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйҙы. Әбделғәлим Сәрбиямалы ярһығанда тик кенә ултырҙы.

— Улым, һин беҙгә ят кеше түгел. Беҙҙең... — тип бесәй һымаҡ ҡына тыңлап ултырған иренә ҡарап алды, — бүтән түҙер хәлебеҙ ҡалманы. Ана ята юлы, мәрйәң теләһә ҡайҙа китһен! Беҙ уның менән бер өйҙә йоҡлап, бер табаҡтан ашап-эсә алмайбыҙ. Беҙ уның нише килеңде күргәнебеҙ ҙә юҡ, күрмәһәк тә бәхил. Ҡопә-көндөҙ ире менән

айҡашып, ирен ҡосаҡлап үбеп ултырған әҙәпһеҙ бисә беҙгә ҡулай түгел. — Аҙаҡтан һүҙенә ҡеүәт биреү өсөн, — ана, килгәне бирле йылытып ҡомғанға һыу һалып тора, ғөсөлө лә юҡ хашшаҡтың! — тип өҫтәне.

Билдәле, был ғәйепте әбей йәштәрҙең икеһенә лә ташланы. Абдрахман әсәһенең һуңғы һүҙенән нык ҡыҙарҙы, ҡыҙарҙы ғына түгел, буҙарҙы. Сөнки ул туған әсәһенән был тиклем ҡотһоҙ хәбәр, яһиллыҡты көтмәгәйне. Абдрахман тәпәшәк кенә өйҙә һуйҙайып иҙән уртаһына баҫты ла:

— Ярай, әйтәм: һеҙ ҡыйырһыта тип, Маргаританы ташлаясағым юҡ. Мин ул ата-әсәһеҙ ҡыҙҙы ҡыуып ебәреү өсөн алып ҡайтманым, ул да ташландыҡ көсөк түгел...

— Ана, ҡайҙан килгән шунда китһен, — әсәһе тағы сабып сыҡты.

— Ул минән башҡа бер ҡайҙа ла китмәҫ. Ул китә икән, мин дә ҡалмайым. Төшөндөгөҙмө?

— Бына бит, улыбыҙҙы сихырлаған шул, улыбыҙҙың бөтә зиһенен алған был кәнтәй.

— Ул кәнтәй түгел, минең законлы ҡатыным.

— Ай-һай, закунлы? Закунлы булмай ҙа ни?! Биләрит урыҫы Стәпәндән никах уҡыттыңмы? Битһеҙ! Ни һөйләп тора бит әле шул кафырының һүҙенә төшөп.

Әсә менән ата ҡыҙыулыҡ менән улдарының, мин дә уның менән китәм, тиеүенә, күрәһең, йүнләп ҡолаҡ һалмағандар. Абдрахман сәмле һүҙен яңынан ҡабатланы.

— Һеҙгә килен кәрәкмәй икән, ул иртәгә табанын ялтыратыр! — тигәс, Сәрбиямал да:

— Шулай булмай ни? Китһен! Башы имен сағында, үҙ ихтыяры менән юлында булһын, бик тә мәслихәт! — тип, ҡыуанысынан ни эшләргә белмәй сырыш битенә йылмайыу ғәләмәте йүгертте. Ҡарт та тамаҡ ҡырып ҡуйҙы.

— Мин дә уның менән китәм! — Абдрахман «китәм» һүҙенә баҫым яһап әйтте лә һикегә ултырҙы. — Бына шул, бөгөн йоҡлатһағыҙ, өйөгөҙҙә бер кис ҡунабыҙ ҙа иртә менән хушлашабыҙ.

Быны ишеткәс, әбей менән бабай ауыҙҙарын асып, ҡаҡса биттәрен оҙонайтып, бер аҙға ҡатып ҡалдылар ҙа әйтемләй-әйтемләй сеңләп иларға тотондолар.

— Ошо мәрйә өсөн генә көтөп үҫтергәнбеҙ икән ғәзиз балабыҙҙы!

— Эй, хоҙай! Ниндәй гонаһтарыбыҙ өсөн шул тиклем язалайһың беҙҙе!

— Кемдәр ҡулына ғына ҡалдырырһың инде беҙҙе, мәүләм. Ҡартайған көнөбөҙҙә.

Аҙағына тиклем һүҙҙең айышына төшөнә алмай йә те-

геләргә, йә үҙенең Абдрахманына ҙур күҙҙәрен тәгәрәтеп ҡарап ултырған Маргарита ла ҡайны-ҡәйнәһен йәлләп иларға кереште.

— Абдрахман, бәғерем! Аңлат әле, нишләп ата-әсәңә шул тиклем ҡаты бәғерле булаһың? Улар икәүҙән-икәү бит! Улар ниңә илай?

— Ҡитәбеҙ! Бына бөгөн йоҡлайбыҙ ҙа иртәгә ауылды ташлап китәбеҙ!

— Ҡайҙа?

— Баш һуҡҡан яҡҡа!

— Ҡарттарҙы ла алабыҙҙыр бит, уларҙы кемгә ҡалдыраһың? — тип уларға йәлләү ҡатыш еүеш күҙе менән ҡараны.

— Юҡ, улар бында ҡала.

Маргарита яңынан үкһей башланы. Абдрахман тәрән уйланып ултырҙы ла шинелен кейеп урамға сыҡты. «Ғәлиәкбәр ағайға барып, кәңәш итеп килмәй булмаç, ахырыһы. Ниндәй кәңәш бирер?» тип, ул ҡола яланда ултырған тупаҡ өйгә, сельсовет бинаһына, йүнәлде. Сельсовет кәнсәһендә бер ни үҙгәрмәгән, шул уҡ күренеш, тик Ғәлиәкбәр генә әҙерәк йәнләнә төшкән, күңеле лә күтәренке күренә.

— Әссәләмәғәләйкүм, Ғәлиәкбәр ағай!

— Вәғәләйкүмәссәләм, Абдрахман ҡусты! Йә, йә, түргә уҙ, дуктыр! Һөйләп ебәр, ни фурмылы йөрөп ҡайттың?

Абдрахман стена ҡырындағы эскәмйәгә ултырҙы ла үҙенең эше, күргән-белгәндәре тураһында ағаһына, ауылда берҙән-бер совет власы вәкиленә, һөйләп сыҡты. Атнағол ауылындағы ваҡиға, үҙенең кәләш алып ҡайтыуы тураһында ул Ғәлиәкбәргә бер ни ҙә әйтмәне. Тик һүҙенең аҙағында:

— Ғәлиәкбәр ағай, ул прививканы һеҙгә лә яһағандарҙыр бит? — тип һораны.

— Яһанылар. Беҙгә бер бик илтифатлы, матур егет килеп китте. «Вабаға ҡаршы прививка яһайҙар икән, тип ишеткәйнем, ысынмы, бушмы?» тип, иң башта Манап хәҙрәт, Ғәйнулла бай, Фәйзулла, Ғәлимйән хажи, мәсеттең имамы Мөхәмәтрәхим мулла килде. «Әҙәми зат хоҙаның тәҡдире менән маңлайына күпме яҙылһа, шул тәҡәбелеһе йәшәй» тиһәләр ҙә, бер ҙә вабанан үҙ ваҡыттарынан алда ҡиәмәткә ҡабаланмайҙар, йүгерешеп бала-сағаларын эйәртеп килеп еткәндәр. Улар бушҡа йөрөмәйҙер әле типтер инде, был хөкүмәттең сараһынан баш тартҡан әҙәм булманы. Ә унда, Атнағол ауылында, һеҙгә һөжүм яһап бөткәндәр шикелле? Атнағол ғүмер буйы контр ауыл булды инде ул.

— Эйе, шулайыраҡ килеп сыҡты.

— Кәләш тә алып ҡайтҡан имеш тип ишетеп ятабыҙ, мәгәр дөрөҫ булһа? — тип һораны Ғәлиәкбәр ҡыйыр-ҡыйҡмаҫ ҡына.

— Эйе, ағай, дөрөҫ хәбәр.

— Йә, йә! Яҡшы иткәнһең. Бала-сағалы булып, ал да гөл йәшәргә лә мөҙҙәтегеҙ еткән бит. Тик урыҫ ҡыҙы тиме?

— Эйе, эйе, урыҫ ҡыҙы. Бына шунан килеп сыҡты ла инде бөтә бәләнең башы. Ауылды ташлап китергә тура килә. Әсәй, атай килендәрен ҡыуа.

— Ул мөйөштә ултырған әбей-бабайға ни етмәгән? Әйҙә һылап-һыйпап йомшаһындар ине киленде!

— Улай түгел шул. Китергә тура килә.

— Китеп ҡайҙа бармаҡсыһығыҙ? Ил ташлап байтаҡ йөрөнөң бит инде. Бында һин дә мин — Иблиәмин тигән шикелле, кем бар? Совет закондарын бергә-бергә ҡул тотоноп, ошо төбәктә үткәрербеҙ тип уйланылғайны. Бына кисә генә Үҫәргән яғынан ауылға бер мөғәллимә ебәргәндәр. Урындағы Советҡа башҡа таянырлыҡ кеше юҡ. Сабир писарь ҙа, тағы бер милиционерыбыҙ бар инде, уларҙың тын алышын хәҙергә белгән юҡ әле.

— Хәҙергә Ҡыҙыл станицаһы аръяғындағы Абарашау хуторында йәшәгән атайҙың знакомы Белов ҡартҡа, Әндрәй Ивановичҡа, барып баш һалам инде. Мин һалдатҡа китмәҫтән алда уҡ, Абдулгалимка һин ошо малайынды миңә бир, ер эшенә өйрәтеп ҡайтарайым тип, атайҙың һенәһен ҡоротҡайны.

— Буш артынан йөрөйһөң, ҡустым. Нимә һин шул урыҫ хәтле иген сәсә белмәйһеңме ни? Аты, һабаны, сәсерлек семенәһе генә булһын!

— Бөтә хикмәт тә шунда шул! Беҙҙә һин әйткәндәрҙең береһе лә хәҙергә юҡ.

— Бына, бында, ҡустым, продәтрәдкә лә кеше кәрәк, волостан отношение бар. Бәлки, шуға яҙылырһың?..

— Ятып тороу ҡайҙа һуң?

— Ҡайҙа тип ни? Шул үҙ өйөңдә инде, тик волостың күрһәтмәһе менән барып-китеп кенә йөрөйһөң. Кәләшең атаң-әсәң ҡулында була. Тора-бара, бәлки, бынауы ауылдә асылаһы кәпирәткә ҡуйыу өсөн курс-фәлән башлап ебәрерҙәр.

— Юҡ, ағай, эше, бәлки, ҡулайҙыр ҙа, ләкин килененде ҡуйып китергә урын кәрәк.

— Бәлки, милиция булып барырһың?

— Унда ла шул уҡ хәл.

— Улай булғас, ҡустым, ауыртмаған ягыңа ят. Әммә

Һин ул урыҫ яғында аҙып-туҙып йөрөмә, үҙ яғыбыҙға ҡайт. Боронғолар сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул, тип белмәйенсә әйтмәгән.

Абдрахман сығып киткәс, Әбделғәлим ҡарт елбәҙәк кейо кәзәкейен кейеп, өлтәнләтә баҫып Ғәлимйән хажиға килеп инде. Аяғына кейгән калуштарын һалыр-һалмаҫтан, тынны бөтөп:

— Теге арҡыры малай бисәһен эйәртеп беҙҙе ташлап китмәксе, — тип зарланды.

— Ҡайҙа китә? — тип һораны хажи.

— Ҡайҙалығын уның шайтан белһенме?— Ишек төбөндәрәк ҡуйылған урындыҡта сырайын һытып бер аҙ уйланып ултырғандан һуң, бабай үҙ алдына һөйләнгән шикелле: — Килен үҙе генә ташлап сығып китер тип, еңгәң менән нығыраҡ ҡыҫмаҡҡа алып ташланыҡ. Ә баҡһаң, уларҙың кендеге ҡуша йәбешкән булып сыҡты. Ҡапыл ҡатыраҡ бәрелдек шул, — тип көрһөнөп ҡуйҙы.

— Мәрйәгә тарыһаң, кендегенә генә түгел, әллә ҡайһы еренә йәбештерә ул. Башҡорт иренең ҡәҙерен тик үҙ бисәләре генә белмәй. Юғиһә, урыҫ мәрйәләре араһында беҙҙең баҙар нык ҡиммәт йөрөй ул. Ха-ха!..

— Әллә инде, уныһын кем белгән, — тигән булды тамам аптыранған Әбделғәлим. — Бына анау мәлдә һөйләшелгән буйынса һиңә килдем әле, яңғыҙ малайҙы, һарығып йөрөгән кәнтәй артынан эйәргән эт шикелле, йүгәнен һыпырып, ағатып ебәреп булмай бит.

— Ярай, өйгә саҡырып һөйләшеп ҡарайым, ләкин Абдрахман әйткәнен эшләй торған егет, минең һүҙгә илтифат итһә ярай ҙа һуң?

Эйе, Абдрахман уның һүҙенә лә илтифат итмәне. Асыуы килеп Ғәлимйән хажи:

— Бер йыл килен менән үҙемдә эшләһәң, егеүле ат, быҙаулы һыйыр бирәм. Әгәр инде уҡырға ниәтең булһа, Питербурғамы, Ташкентҡамы ебәреп уҡытам. Минең ни, ҡыҙ балаларға, уҡый торғаны юҡ, ир балалар әле хәҙергә наҡ. Килен беҙҙә тороп торор, — тип тә ҡараны. — Ана Ҡазандан алып ҡайтҡан скрипкала тартырға өйрәтәм, скрипкаһын да ҡулыңа тотторам, — тип ялынды.

Ләкин Абдрахман күнмәгәс:

— Әҙәм арҡырыһы, эт! Яйҡар ҡалдығы! П-ш-ел өйөмдән! Күҙемә күренмә! Ағайым тип башҡаса буҫағама яҡын килһәһе булма! — тип ҡыуып сығарҙы.

Бына шулай унан ҡыуылып, бынан ҡыуылып, ата өйөндә һуңғы төндө сыҡтылар ҙа Абдрахман менән Маргарита иртүк ҡаптыр-ҡоптор йыйынып, оҙон юлға атландылар.

Төнө буйы серем итмәй сыҡҡан Сәрбиямал менән Әб-

делгәлим ҡарт таң беленә башлағас та тороп сыра тоҡандырҙылар. Әбей самауыр ҡуйҙы. Йыуынып, кейенә башлаған улы менән киленен сәйгә саҡырҙы. Ләкин бер кемдә лә тамаҡ ҡайғыһы юҡ ине. Абдрахмандың йөрәген дә, уның ата-әсәһенең күңелен дә айырылыу тойғоһо өйкәне. Әммә һуңғы минутҡа тиклем Абдрахмандың өйөн, ата-әсәһен ташлап сығып китеүенә Сәрбиямал ышанманы. Бына-бына, болоҡһоп, өндәшмәй кейенеп торған улы шинелен сисеп кире элер ҙә: «Ярар, әсәй, әҙерәк дулап алдың, етте. Атай, һиңә лә ҡотортоп ултырыуың булды!»— тип әйтер ҙә көслө ҡулдары менән үҙен ҡосаҡлап арҡаһынан тапар төҫлө тойолдо. Унынса, Абдрахман үҙенең Маргаритаһына әйләнер ҙә: «Маргарита, ғәфү ит, һин үҙең генә беҙҙе ташлап кит инде, мин атам-әсәмдән айырылып бер ҡайҙа ла бара алмайым», тип әйтер төҫлө ине. Үҙе Әбделгәлимгә тотоп никахланғас, сәйнүк ҡаплаған ҡапҡас кеүек, уға, мәүләнең яҙғанылыр инде, тип ғүмер буйы өнһөҙ-һүҙһеҙ хеҙмәт иткәс, Сәрбиямал әбейгә мөхәббәт, һөйөшөү тигән тойғо төшөнсәләре бөтөнләй сит, аңлайышһыҙ нәмәләр ине.

— Шул мәрйәң артынан эйәреп күпме йөрөрһөң икән инде, бәхил бул, улым! Беҙҙе ерләргә ҡайтырһың бит, — тип әсә илап ебәрҙе.

Ҡарт та күҙенән бер-ике бөртөк йәшен һытып сығарҙы. Абдрахмандың тамағына ла эҫе төйөн тығылды.

— Йә, ярар, хәҙергә хушығыҙ. Тере көйөнсә үҙ-үҙегеҙгә ясин уҡып ултырмағыҙ әле, — тине лә улдары ишекте асты.

## *Икенсе бүлек*

### 1

Тағы уйҙар, уйҙар, тағы юлдар, юлдар... Улар ауыл осон үтеү менән Ҡыҙыл һыуының түбәнге ағышы буйлап һалынған юл менән Түбәнге Нуғай ауылына ҡарай йүнәлде. Ауылдан биш-алты саҡрым үткәс, быларға тәп-тәңгәл ҡыҙарып ҡояш сыҡты. Ҡыҙыл йылғаһының уң яҡ ярында үҫкән талдар, Әндрәй тирмәне эргәһендә олондары күккә ашҡан бейек ҡарт тирәктәр, әлморон, балан ҡыуаҡтарының ҡар төшөп ҡатҡан ботаҡтары иртәнге ҡояш нурына йымылдай. Артынса танауын мыш-мыш тартып, ваҡ аҙымдар менән килгән Маргарита йүгерекләп ҡыуып етте лә Абдрахмандың ас биленән ҡосаҡлап алды. Уның йылы тыны Абдрахмандың елкәһен иркәләне. Абдрахман туҡта-

май алға барыуын дауам иткәс, ул аҫылынып, уны туҡтатты ла:

— Ҡара, ниндәй матур булып ҡояш сыҡты. Ул беҙҙе тәбрикләй. Бөгөн яҙҙың беренсе иртәһе беҙҙе ҡотлай, — тип бышылданы.

Һөйөклө кешеһе өндәшмәне, йөгөн йөкмәп атлауын дауам итте. Маргарита үпкәләргә ауыҙын ослайтҡайны, ләкин Абдрахман һалҡында ҡыҙарған шаҙра битенә етди төҫ индереп:

— Маргарита, бараһы еребеҙ бик алыҫ, көсөңдө һаҡла! — тине лә, аяҡ остары менән сәнсә баҫып, уны ҡарлы юлда нисек атларға өйрәтте.

Йот йылы булһа ла Ҡыҙылға бара торған юл тапалған ғына булып сыҡты. Ғөмүмән, Ҡыҙыл станицаһынан Ялан ауылына ҡышын-йәйен юл өҙөлмәй, улар араһында алыш-биреш тә былай ярайһы ғына. Ялан яғы кешеләре Ҡыҙыл казактарына мал һата, урман яғынан килтерелгән дегет, күмер, ағас, тыранса менән сауҙа итә. Станицала тире иләү заводы бар — башҡорттар шунда тире тапшыра. Станицала тирә-йүнгә дан тотҡан биш мөйәшәле һыу тирмәне, тары һәм һоло әрсей торған, ярма тартҡыс тирмән дә бар. Яйыҡ казактары Ҡыҙыл буйын һыулаған ауылдарға һатыу өсөн бойҙай, тары ярмаһы, он килтерә. Ошо юлдан бөрйән, ҡыпсаҡ башҡорттары ла Ҡыҙыл йәрминкәһенә йөрөй.

Юлсылар кисләтеп кенә йәрминкә майҙанының эргәһендә урынлашҡан сәйханаға еттеләр. Унын менән стеналаш — мунса кеүек ҡарайған ятаҡҡа инделәр. Йоҡлап сығыу өсөн унар мең тәңкә аҡса түләп бер бүлмә алдылар ҙа, әйберҙәрен ишек төбөнә ҡуйып, сәйханаға инделәр. Бер нисә урында бушаған һыра мискәһен төбөнә ултыртып, иҙеүҙәрен ысҡындырып, ҡолағына тиклем һаҡалмыйыҡ баҫҡан урыҫтар урталарына сирек ҡуйғандар ҙа гөләшеп араҡы эсә. Мөйөштәрәк, бәләкәй өҫтәлдә, самауыр ҡайнап ултыра. Шүрлектәге кәштәлә ҡаластар теҙелеп киткән, сөйгә бау менән керәндил, сушкиҙар, баранкалар элеп ҡуйылған. Батша араҡыһынан тыш Верхнеуральск шешәләре лә теҙелгән, прилавка өҫтөндә бер йәшник лампасыйы тора. Ерән мыйыҡлы, ҡыҙыл танаулы урыҫ сауҙаны ҡыҙыу алып бара. Аҙыҡ-әүҡәттең күплегенә ҡарағанда, бынан ҡырҡ саҡрым ерҙә бер һыныҡ икмәккә зар-интизар булып кешенең астан ҡырылып ятыуы сәйер.

Абдрахман ҡаҙағы унар мең тәңкәгә дүрт ҡаҙаҡ ҡалас, егерме мең һумлыҡ бер ҡаҙаҡ лампасый алды ла, сәйгә бер нисә йөҙ һум аҡса түләп, Маргаритаһы менән имән өҫтәл артындағы эскәмйәгә ултырҙы. Башҡорт кешеһе ме-

нән йәш кенә сибәр урыҫ ҡатынының йәнәш ултырыуы сәйханалағы кешеләрҙе таңға ҡалдырҙы. Улар ҙур ҡыҙыҡһыныу менән быларҙы күҙәтте. Үҙ-ара ниҙер көлөшә-көлөшә һөйләштеләр. Мискә төбөндә араҡы эсеүселәрҙең береһе, йәшерәге, ҡып-ҡыҙыл битле, төрмәс сәсләһе, кейгән поддевкаһының төймәләрен ысҡындырҙы ла бөйөрөнә таянып бөгөлә-һығыла былар эргәһенә еүеш ирепле ауыҙҙарын йырып килеп баҫты. Ул Маргаритаға терәлеп тигәндәй:

— Пойдем, барышня-красавица, в нашу кампанию. У нас веселее, — тип яурынына ҡулын һалды.

Танау тишектәренә тиклем ағарып асыуланған, тиреһенә һыйыша алмай ултырған Абдрахман:

— Уберите грязные руки! — тип ҡысҡырҙы.

Теге кеше ҡулын алмай ғына мыҫҡыл итеп хихылдап көлдө:

— А вы каким ей родственником доводитесь?

— Я ее муж.

Абдрахман аяҡ үрә баҫты.

Теге иҫерек, майлы күҙҙәре менән Маргаритаға оятһыҙ йылмайып, иптәштәренә күҙен ҡыҫты:

— Слышь, эй, тоже мне муж сыскался!

Тағы берәр бәлә килеп сыға инде тип ҡото осҡан Маргарита ҡалтыранған тауыш менән:

— Да, да, он не обманывает, я его законная жена, — тине.

Теге һаман төпсөндө:

— Какой же он тебе муж-то? Он бусурманин, а ты — православная!

— Не бусурманин, ә мусульманин, — тип төҙәтте Абдрахман. — А, вообще, убирайся отсюда!

Абдрахман эскәмйә аша сыҡҡайны, теге бының шинель яғаһына йәбеште. Абдрахман барлыҡ көсө менән былағайҙы этеп ебәрҙе. Аяғына саҡ баҫып торған әҙәм мискәләр араһына даңғыр-доңғор барып төштө. Быны күҙәтеп ултырған башҡалары мискә араһынан поддевкаһын һыпыра-һыпыра тороп килгән иптәшенән хихылдап көлдөләр.

— Ну, получил! Что мы тебе говорили? Вот же так и надо! — тип үсәнеләр. Теге күҙен алартып Абдрахман ҡаршына тағы килә башлағайны, араһынан бер олорағы тороп, ҡулынан һөйрәп кире урынына ултыртты. Маргарита иренең ҡулбашына һарылды ла:

— Мин һинең өсөн ҡурҡам! Улар күмәк, ә һин бер үҙең. Холҡоң бик ҡыҙыу... — тип бышылданы.

— Уларҙың ни эше бар? Араҡыларын эсеп тик ултырһындар.

— Бәгерем, аҡыллым! Киләсәктә холҡомдо төҙәтәм тип вәғәҙә бир.

— Мин, Маргарита, һиңә бөгөн дә, киләсәктә лә үҙ холҡомдо төҙәтәм тип вәғәҙә бирә алмайым. Үҙемдең һәм һинең намыҫыңды бысратырға мин бер кемгә лә ирек бирмәм. Ул бөгөн шулай һәм киләсәктә лә шулай буласаҡ, төшөндөңмө?

— Төшөндөм, төшөнмәй ҙә ни? Бик яҡшы итеп аңлаттың бит. Ух, арҡыры башҡорт! — Бер кемдән дә тартынып тормай ул Абдрахманды ҡосаҡлап үбеп алды.

Икенсе көндә, төш ауҙырып, улар Обучевка хуторына килеп еттеләр.

## 2

Бикле ҙур урыҫ ҡапҡалы өйҙөң тәҙрәһен шаҡығас та, иҙрыһына тун һалып, ялан баш, ҡуңыр ҡуйы сәсен ялбырлатып, Андрей Иванович килеп сыҡты. Ул бер-ике аҙым артҡа сигенеп, ҡулын маңлайына ҡуйып ҡарап торҙо ла:

— Хаталанмаһам, кажись, Абдрахман үҙе шикелле? — тип икеләнгән һымаҡ ҡоласын йәйҙе.

— Эйе, Андрей Иванович, был мин, Абдрахман! — тип әйтеүе булды, Андрей Иванович уны ҡосаҡлап «по христиански» тип өс тапҡыр битенән үпте лә уның эргәһендә торған йәш ҡатынға ҡулы менән ишара яһаны. «Ҡем был?» тип һорауы ине уның.

— Был минең нареченная, ҡатыным Маргарита була,— тигәс, элекке батша вахмистры өҫ-башын, мыйығын төҙәтеп алды ла, ҡуңысһыҙ быймаһының үксәләрен бер-береһенә ҡағып, торған ерендә бөгөлөп кенә Маргаританың ҡулын үпте.

— Бывший вахмистр Его Величества Оренбургского атаманского полка Андрей свет Иванович, — тип үҙен таныштырҙы. Шунан Маргаританың тап-таҙа урыҫса һөйләүен ишетеп, ул Абдрахмандан: — Һинең хәләл ефетең православный инде әллә? — тип һораны.

— Эйе, ул урыҫ ҡыҙы, — тигәнде ишеткәс, ул яңынан артына әйләнеп бер ҡараны ла:

— Похвально! Похвально! Абдрахман, у тебя жена очень пригожая, поздравляю. Мин һинән һәр ваҡыт ғәҙәттән тыш бер эш көтә инем. Молодец, — тип ҡуйҙы.

Ергә тротуар һымаҡ итеп түшәлгән таҡта буйлап бешек болдор аша бишле шәм менән яҡтыртылған соланға, а унан ишегенә тәре төшөрөлгән, клеенка менән ҡапланған өйгә инделәр. Асығып килгән юлсыларҙың танауына һи-

меҙ борщ, ҡурылған картуф, тағы әллә ниндәй тәмле еҫтәр бәрелде. Бер ни ҙә белмәй һул яҡтағы кухняла аш әҙерләп йөрөгән тулы кәүҙәле, башы түбәһенә түңәрәкләп һалған һары сәсе саллана башлаған һимеҙ битле, ике эйәкле, ләкин асыҡ зәңгәр күҙҙәре дәрт менән тулған Анастасия Петровна килеп сыҡты. Ул ире кеүек икеләнеп торманы, сыҡты ла Абдрахманды ҡосаҡлап үбә башланы.

— Ох, какой же медведь! Ну и верзила! — Тағы арт-ҡараҡ китеп һоҡланыуын йәшерә алмай: — Какой ты видный мужчина, — тип яңынан Абдрахмандың киң арҡаһынан һөйҙө.

Андрей Иванович тиҙерәк таныштырырға теләп:

— Ә был барышня беләһеңме кем? Ул беҙҙең Абдрахмандың кәләше була. Таныш бул — исеме Маргарита, христиан диненән, үҙебеҙҙең урыҫ ҡыҙы, — тине.

Анастасия Петровна Маргаританың битенән үбеп алды ла теләк теләне.

— Ниндәй молодец һин, Абдрахман. Кәләштең дә шәбен эләктергәнһең, алла бәхет бирһен.

Ҡунаҡтары өҫтәл артына ултырғас, Андрей Иванович, тауышына бойороҡ баҫымы яһап:

— Әсәһе, Насть, һин унда ашыңды ҡараштыр. Анау тиклем ерҙән йәйәүләп, асығып килгәндәрҙер, — тине ихлас ҡына.

Икегә бүленгән ҡарағай өйҙөң һул яғында аш бүлмәһе, уның менән йәнәш йоҡо бүлмәһе булып сыҡты. Былар ултырған бүлмә ҡунаҡ өйө, Ялан ауылынса, күрнәсә икән. Иҙәндәре һап-һары итеп буялған. Уң яҡ стенала ике тәҙрә араһында Андрей Ивановичтың ата-әсәләре, батша хеҙмәтендә төшкән карточкалары ҡуйылған. Улар менән йәнәш әйләнәһе әллә ниндәй сәскәләргә оҡшатып эшләнгән оҙонса көҙгө, ике туҡмаҡлы бронҙо сәғәт, арҡы мөйөштә иконостас өҫтөндә Иусус Христос төшөрөлгән икона, уның алдында бәләкәй өҫтәлдә Евангелие, Библия, тағы әллә ниндәй китаптар өйөлгән. Икона ҡаршыһында түшәмдә янып торған май шәм төшөрөлгән. Тәҙрәләр ике ҡатлы, Ялан ауылындағы һымаҡ ватыҡ өлгөләр бында күренмәй. Арҡы стенаһы залға сыҡҡан урыҫ мейесенән йылы бөркөй. Бөтә ишек, тәҙрәләргә ҡорған элгәндәр. Ишек төбөндәге ағас сөйҙәрҙә әллә ни төрлө затлы кейемдәр. Ян-яғына ҡаранып, аптырап ултырған Абдрахманға мөрәжәғәт итеп, Андрей Иванович:

— Әйҙә, балалар, тип әйтәйем инде, үпкәләмәгеҙ, әйткәндәй. Абдрахман, атайың минән тик ике генә йәшкә олораҡ. Әйҙә, ҡулығыҙҙы йыуығыҙ ҙа ашҡа ултырайыҡ, — тине.

Алгы мөйөштә стенаға аҫып ҡуйылған ҡул йыуғысты күрһәтте. Ашар алдынан ул төпкө мөйөшкә икона эргәһенә барып өс мәртәбә суҡынып алды ла Маргаритаға ҡараны. Быны һиҙеп алған Маргарита:

— Мин аллаға ышанмайым, — тине.

Был һүҙҙе ишеткәс, Андрей Ивановичтың битенән йылмайыу ҡасты, күңеле һүрелеп ҡалғандай булды.

— Ҡайһылай итәһең инде, бәндәнең үҙ ихтыярында. Заманы шундай, ғәйеп итеп булмай.

Анастасия Петровна тәрилкәләргә һалып тоҙланған кәбеҫтә, ҡыяр ҡуйҙы. Сәғәт аҫтында ултырған бәләкәйерәк ике асмалы шкафтан йоморо графин менән, «это смирновская водка» тип, хужа араҡы ултыртты. Улар янына үҙҙәренең исем-фамилиялары төшкән вензеллы оҙон рюмкалар теҙҙе. Хужабикә урыҫ мейесендә һап-һары булып, бер сирек ҡалынлығында ҡабарып бешкән көрпәсәтке ҡаласы телгеләне. Дүрт рюмкаға араҡы һалып сыҡты ла хужа, өс бармағын йомоп, араҡы өҫтөнә өс тапҡыр крест һалды.

— Йә, хоҙайҙың яҙған ризығы менән риза булайыҡ, — тине лә рюмкаға тотонорға баҙнат итә алмай ултырған Абдрахманды ҡыҫтай башланы.

— Юҡ, рәхмәт, мин бик күптән бирле араҡы эскән юҡ, әллә нисек ҡурҡыта...

— Һин нимә, арыҫланды тотоп атланырҙай егет бер рюмка араҡынан ҡурҡып ултыраһың? Давай, давай!

Абдрахман да бөтә кешенән артыҡ ҡыҫтатып ултыра алманы. Маргарита ла уны үтенгәс, булдыра алмай, рюмкаһын төп күтәрә түңкәреп ҡуйҙы.

— Вот, молодец, бына был исмаһам, беҙҙеңсә. Әйҙә, әйҙә, тиҙерәк закускаға ынтыл.

Тәүге рюмка Абдрахмандың башына һуҡҡан шикелле тәьҫир итте. Күҙ алдары ҡараңғыланып, өйҙәге кешеләр ҙә, нәмәләр ҙә һәр береһе икешәр күренде, ләкин торабара быңдай хәле әкренләп үтеп китте. Маргарита эсеүҙән баш тартты. Көршәк һауыттарға өҫтөндә майҙары йөҙөп йөрөгән боҫрап торған борщ килтерҙеләр. Уның алдынан тағы берҙе күтәрҙеләр. Андрей Ивановичтың теле сиселә төштө.

— Әйҙә, Абдрахман, һөйләп ебәр тормош хәлдәрен, атаәсәңдең тормошо, сәләмәтлеге нисек? Халыҡ нисек йәшәй?

Абдрахман теләр-теләмәҫ кенә яуап бирә торҙо.

— Атай-әсәйҙең былай һаулыҡтары ярайһы ғына. Үҙ алдарына көңгөр-ҡаңғыр итеп тормош көтөп яталар. Халыҡтың тормошо бик йонсоу — аслыҡ быйыл әҙәмде бик ҡырҙы. Кешелә мал-тыуар ҡалманы. Яңғыҙ һыйыр менән

тороп ҡалған кешеләр ҙә ауылдарҙа бик һирәк осрай. Билдәле, бай һаман шул бай инде, йотлоҡ уны урап үтә, әммә ярлы халыҡ бик йонсоған.

— Нимә, совет власы ул ярлыларға ярҙам итмәйме ни? Ярлыларҙың һөрән һалып, үҙҙәре яулап алған власы бит,— тип Андрей Иванович мыҫҡыл ҡатыш йылмайып ҡуйҙы.

— Дөрөҫ, бөтә халыҡ власы. Уны ҡайһы бер кешеләрҙән башҡа барыбыҙ ҙа яулап алдыҡ, ләкин хәҙергә Совет власы нығына алмай әле. Үткән йыл көҙҙән башлап бик тә йонсоған ауылдарҙа, ярҙам йөҙөнән, ашханалар асылды. Ләкин әле халыҡтың күбеһе мулыраҡ ярҙамға мохтаж, — тип, Абдрахман да Андрей Ивановичтың ҡулына ҡорал алып, атаман Дутов бандаһында советтарға ҡаршы һуғышып йөрөгәненә төрттөрөп ҡуйҙы.

Ошонан һуң әкрен генә үҙ юлы менән китеп ултырған әңгәмәнең осо сеймәлде. Бер аҙ һүҙһеҙ ултырғандан һуң Андрей Иванович яңынан ҡыҙыҡһынды.

— Оҙаҡҡамы беҙҙең яҡтарға?

— Әгәр ҡыйынһынмаһағыҙ, бер аҙ тороп китәйек тигәйнек. Үҙебеҙҙең яҡта бер ҙә кәсептең йүне сығырлыҡ түгел.

Был һүҙҙе ишеткәс, Андрей Ивановичтың йөҙө асылып, күңелдәре күтәрелеп китте.

— Ул ниндәй хәбәр ти ул? Теләйһегеҙ икән, бөтөнләй ҡалығыҙ. Тарыҡҡан кеше юҡ. Был тиклем донъяны мин ни өсөн йыйҙым? Кемгә ҡалдырайым?

— Рәхмәт, рәхмәт!

— Һин һуғышта йөрөгәндә, мин һине һорашып барып та сыҡҡайным әле. Һиңә, ғөмүмән, Әбделғәлим ғаиләһенә ҡарата, — ул бисәһенә ҡарап ҡуйҙы, йәнә һүҙен дауам итте, — мөнәсәбәтебеҙҙе беләһегеҙ. Бер заман мин һине үҙебеҙгә бөтөнләй ул итеп алып ҡайтырға ла йөрөгәйнем, атайың риза булып та бөткәйне, ләкин туғандарығыҙ ҡаршы төштө. Ана бар бит һеҙҙең Ғәлимйән тигән һуғыш суҡмары. Ҡыҙыл йәрминкәһенең атаманы, шул бигерәк ҡаршы торҙо.

— Иҫемдә, иҫемдә. Ул саҡта мин үҙем дә баштан аяҡ ризалыҡ биреп бөткәйнем инде.

— Бына шул, шул. Оҡшаһа, күпме теләйһегеҙ, шул тиклем йәшәгеҙ. Бөгөн минең хужалыҡта артыҡ мөлкәтем юҡ, биш атым бар. Өс пар екке үгеҙ тотам, биш баш, ваҡтарын иҫәпләмәйенсә, һауын һыйырыбыҙ бар. Крәҫтиән булғас, иген сәсмәй ҙә булмай. Сөнки иген беҙҙең Яйыҡ казактарының төп кәсебе. Ҡырҡ десятина сәсәм. Бына быйыл, алла бирһә, биш-алты десятина сиҙәм һөрөп сәсергә ниәтләнеп торам. Үткән йыл игене лә, бесәне лә бик

...кыҫ булды. Һеҙҙәге ҡоролоҡ бында ла, Яйыҡ аръяғына ла, килеп етте. Шулай ҙа ике йылға етерлек аҙау бесәнем, бурала запас ашлығым бар.

— Андрей Иванович, ул тиклем мал-тыуар, мөлкәт менән эш итергә нисек бер үҙең генә өлгөрәһең?

— Бына ҡаршыла ғына бер туған энем тора. Ҡышын-йәйен шуның өс малайы ярҙамлаша, ураҡта һеҙҙең яҡтан килгән башҡорттарҙы яллайбыҙ. Но уңған да, дәррәү ҙә халыҡ инде ул Ҡыҙыл башҡорттары. Үҙҙәренең игендәрен йәһәт кенә урып бөтөрәләр ҙә беҙгә килеп ялланалар. Ауыл-ауылы менән киләләр. Бына шулай ғүмер итеп ятабыҙ. Һин ни шул минең йорт-ҡурамда мал-тыуарға хужа булып йәшәрһең. Маргарита ана апаһының ҡушҡанын эшләр. Быйыл бынауы ҡарҙың ҡалынлығына ҡарағанда, иген емерелеп үҫергә тейеш, башҡорттар ҙа быйыл иген урырға ылаулап-ылаулап килер инде, тик һеҙҙең бер ағай тейеш кешегеҙ элекке йыл эште боҙоп китте әле.

— Кем ул?

— Уның исеме Абдулхадый, атайыңа әйткәйнем, кет-келдәп көлдө лә, эйе, эйе, беҙҙең туған тейеш кеше ул, тине.

— Эйе, ул бабайҙы мин дә бик яҡшы беләм.

Ул арала өҫтәлгә ҙур табала тоҙланған сусҡа майы менән ҡуша ҡурылған картуф ҡуйҙылар. Картуф алдынан ирҙәр, Анастасия Петровна тағы ла берәрҙе төшөрҙө.

— Ул Абдулхадый ҡылды ғына ҡылыҡты. Былай эшләүен дә еренә еткереп эшләне инде. Үҙе генә көн һайын ярты десятина ер ура. Ураҡ осоронда Ҡыҙылдың бер казагына килеп ялланған да теге алдан задаток ике бот он биргән, бер-ике көршәк ҡаймаҡ, дүрт-биш ҡалас алып киткән. Кисә алған да, эш башламай, бөгөн атамандың үҙенә барып ялланған. Ҡыуышын уның ер башына күсереп ултыртҡан. Теге казак килһә, Абдулхадый юҡ. Ер башы һайын йөрөп теге казак Абдулхадыйҙы эҙләй икән. Урал башҡорттары ни бөтәһе лә бер иш.

— Нишләп бер иш була ти?

— Бер иш булмай ни? Барыһы ла көнгә янған ҡап-ҡара, бөтәһенең дә башы ҡырылған, береһенең дә бер ниндәй документы юҡ.

— Шунан?!

— Шунан ни шул, бер ҡыуышта, атаман еренең башында, башы ҡырылған башҡорт ғаиләһе менән ҡаласты ҡайыра тешләп, ҡаймаҡ ашап ултыра икән. Был әҙәм ҡыуышҡа башын тығып ҡараған да, ниҙер сырамытып: «Кисә Ялан ауылының бер башҡорто миңә иген урам тип һөйләшеп, задаток алып киткәйне, шуны эҙләп йөрөйөм»,

тигәс, умыра тешләгән ҡаласын ике яғына һалып сәйнәп ултырған Абдулхадый: «Ниҙәр алып киткәйне һуң ул башҡорт?» тип һораған ти. «Ике бот он, ҡалас, ҡаймаҡ биргәйнек» тигәс, Абдулхадый ашап ултырған ерепән быпың янына килеп, ярты ҡаласты тегенең танауына терәп: «Һинең ҡаласың ошо түгелме?» тип һораған. Теге нишләһен, күрәгарау күҙе менән ҡаласҡа текләп торған да: «Калач так калач, никаких примет нету», тип ҡаласты кире биргән һәм ары киткән ти. Бына, Абдурахман, һинең ҡәрҙәштәрең нишләп йөрөй бында.

— Бик яҡшы иткән. Ялламаһындар. Ул казак ике бот он биргәндән бик ярлыланып китмәгәндер әле.

— Шуның менән генә бөтһә ярар ине лә һуң, Абдулхадый ҡарт тағы бер этлек сығарҙы шул.

— Уныһы тағы ниндәй этлек?

— Бына тыңлап тор. Бынаһы бигерәк ҡыҙыҡ. Но һеҙҙең халыҡ араһында ла шутниктар бар. Атаман баҫыуының янында уның сәсеп ҡуйған ярты десятина картуфы булған. Көн һайын кис Абдулхадый һинең ауылдаштарҙы йыйып ала ла, атамандың яңы өлгөргән картуфын ҡаҙғылай башлаған. Күмәк кеше ҡуямы ни? Иген урып бөтөүгә тегеләр атамандың картуфын бөтөнләй ашап бөткәндәр. Эш ҡабул итәм тип атаман ураҡ өҫтөнә килһә, картуф еренең бөтөнләй ҡаҙылып бөткәнен күреп аптырауға ҡалған. Становой приставты килтергән был. Бөтә башҡорт, эштәренән туҡтап, тамаша ҡылып, быны күҙәтергә тотонған. Һеҙҙең Абдулхадыйҙан былар тәфтип алырға башлаған. Пристав ҡылысының осо менән ерҙә ятып һулып бөткән картуф һабағын эләктереп күтәргән дә: «Эй, башкирин, гололобый вилок, һин ашап бөттөңмө был картуфты?» тип һораған ти.

— Ә ҡарт ни тип яуап бирҙе икән?

— Туҡтап тор, сабыр ит әле! — Андрей Иванович әңгәмәнең тап ҡыҙған урынында һорау биргән Абдрахмандың еңенән тартып, һүҙен дауам итте. — Шунан ни, теге ағайың күҙҙәрен тәгәрәтеп елкәһен тырнап, картуф һабағына текләп торған да ҡапыл эйелеп, картуф һабағында үҫкән өс-дүрт йәшел ҡыңғауыҡты өҙөп ашай башлаған. Становой пристав атаманға үпкә менән ҡарап: «Йөрөйһөң шунда эш юҡта эш яһап. Ғүмерендә картуф күргән халыҡ түгел былар, картуф сәсмәй торған урман кешеләре», тигән дә ҡылысы менән картуфтың ояһын ҡаҙа башлаған. Ашағандан ҡалған бер нисә картуфты сығарып усына алған, ҡартты янына саҡырып: «Эй ты, глупый башка, вот настоящая картошка. Ее моют, потом варят в казане, когда кожура начинает отделяться, только тогда ее едят

с солью, понятно!?» тип өйрәткән, ти. Шутник баш һелкеп: «Тапереча понятно», тип торған була ти.

— Ну атаманды уҡытҡан икән...

— Шулай ул һинең ауылдашың. Хәҙер башҡорт та бо-йола башланы. Революция боҙҙо уны, элек ул бик хәйлә-һеҙ, алла бәндәһе ине, — тип ҡуйҙы Андрей Иванович уй-сап ғына.

Ашап туйғас, Андрей Иванович икона алдына яңынан баҫып, башын алға иңкәйтеп, өс тапҡыр суҡынды ла:

— Алла, һиңә шундай ризыҡ биргәнең өсөн ҙур рәх-мәт. Киләсәктә лә үҙ мәрхәмәтеңдән ташлама, — тип кире урынына ултырҙы. Анастасия Петровна оҙон көршәк менән анара еҫе аңҡып торған кеүәҫ килтерҙе лә балсыҡ көрөш-кәләргә һалып сыҡты.

— Бер-нисә көн ял итерһегеҙ. Маргарита менән өйлә-нешкәнегеҙгә күпме ваҡыт үтте? — тип һораны хужа.

Абдрахман өндәшмәгәс, уның урынына Маргарита яуап бирҙе.

— Бөгөн егерменсе көн.

— Ай, улай булғас, һеҙ бер-берегеҙҙе яратышып та туй-мағанһығыҙ әле. Һеҙҙең татлы айығыҙ бара. Насть, һин уларға урын әҙерләп бир, юлдан арып килгәндәрҙер. Ә мин хәҙер әҙерәк ятып торам да сиркәүгә барып ҡайтам. Бө-гөн изге көн — йәкшәмбе. Бөгөн эш эшләү — гонаһ, йәк-шәмбелә йүнле әҙәм ял итә, ҡунаҡҡа йөрөй, — тип йоҡо бүлмәһенә инеп юғалды. Йәштәрҙе йоҡо бүлмәһе аша шу-ға төкәтеп эшләнгән бер бәләкәй бүлмәгә индерҙе лә Анас-тасия Петровна урын әҙерләп бирҙе.

— Был беҙҙең йәш ваҡытта Андрей Иванович менән ҡушылған бүлмә. Әйҙә, оялып тормағыҙ, сисенегеҙ ҙә ята башлағыҙ. Бында аулаҡ... — Ниңәлер һуңғы һүҙенә серле баҫым яһап әйтеп ҡуйҙы.

...Ял иткәс, улар кейенешеп залға сыҡтылар. Андрей Ивановичтың йоҡо бүлмәһе аша үткәндә Абдрахман сте-наға ҡағылған келәм өҫтөндә уның бөтә хәрби ҡорама-лын күрҙе. Ҡынынан һурып алынған казак ҡылысы өҫ-төнә атлы казактар йөрөтә торған карабин эленгән. Ҡы-лыстың эфесы иҙеү селтәренә теҙгән муйынсаҡ шикелле әллә ниндәй ҡиммәтле ынйы таштар менән биҙәлгән. Шу-лар менән йәнәш тотҡаһы көмөш буталлы кавказ хәнйәре тора. «Һунар менән дә шөғөлләнә икән», тип уйлап ҡуйҙы, ҡуш көбәкле мылтыҡты күреп. Мөйөштә вахмистр погоны ла алынмаған, башҡа казактарҙан үҙенең йәшел таҫмаһы менән айырылып торған йәшел тирәсле фуражка, йәшел лампаслы салбар, ике Георгий тәреһе ялтлаған йоҡа йә-шел буҫтауҙан тегелгән мундир элеүле тора. Абдрахман

карабинды ҡулына алып ҡараны. Майланған затворҙары сыҡылдап тора, әйтерһең, Андрей Иванович хәҙерҙән походҡа әҙер. Мундирының аҫтында хатта силғауҙары ҡуңысына тығылған көмөш шпорлы күн итеге ултыра. Залға сыҡҡас, Абдрахман ярым мәрәкәләп, ярым етди:

— Һин, Андрей Иванович, әйтерһең, берәй яуға әҙерләнгәнһең? — тине.

Андрей Иванович йөнтәҫ ҡаштарын төйнәп, зәңгәр күҙҙәрен бер нөктәгә төбәне. Әҙерәк уйлап алды ла икеләнеберәк яуап ҡайтарҙы.

— Замана бик тә буталсыҡ бит. Донъя хәлдәрен белеп булмай, әллә ниҙәр ҡубыуы бар. Торһон әле, икмәк һорамай, хәжәте тейеүе бик мөмкин, — тине. — Конюшняла строевой ат та тотам әле. Минең Серканың бөтә экстерьеры Его Величество кавалерия уставының талаптарына тура килә. Бөгөн үк теләһә ниндәй генерал эйәрләп атланып йөрөрлөк.

— Һине һаман шул ҡорал тотоп, дауға сығыу ялыҡтырманымы ни әле, Андрей Иванович?

— Дөрөҫөн әйткәндә, ялҡытте. Ләкин ҡоралға йәбешергә мәжбүр итеүҙәре бар.

— Һеҙҙең хәҙер кемгә хәжәтегеҙ бар? Әгәр улай-былай ҡысына башлаһағыҙ, ана, Верхнеурал атаманының ике малайы, Кашириндар, икеһе лә эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл армияһында дивизия менән командалыҡ итә: көлгөөҙҙө күккә осорҙо ла киттеләр. Вәссәләм! Булмаһа, бында Муса Мортазинды ла онотоп бөтмәгәндәрҙер бит. Бригадаһы менән тәртип урынлаштырыу өсөн уның да килеп сығыуы бик тә мөмкин.

— Хоҙай һаҡлаһын! Ул Мусағыҙҙың ҡамсы эҙҙәре казактар һыртында әле лә юлаҡланып тора.

— Шулай булғас, Андрей Иванович, ҡоралһыҙланырға ваҡыт. Тыныс ҡына йәшәйем тиһәң, эйәр-өпсөнөңдө, мылтыҡ-ҡылысыңды хөкүмәт ҡулына тапшыр. Улар үҙеңдең башыңа етеүе бар. Бер һүҙһеҙ уларҙы тик мин генә тағып йөрөй алам, сөнки мин совет кешеһе, шул власты яҡлап, мин ҡан түккән кеше. Ә һиңә... кәңәш итмәйем.

Ултырғыста уның һүҙен диҡҡәт менән, аптырап тыңлап ултырған Андрей Ивановичтың башы әкренләп аҫҡа эйелде, утлы зәңгәр күҙҙәрен ул иҙәнгә төбәне. «Марш отсюда!» тип аҡырырға ла уҡталып ҡуйғайны, ләкин нисектер ихтыярын йүгәнләп өлгөрҙө.

— Мин ҡаршы сыҡмаһам да, бөгөн-иртәгә Советығыҙ ауырға тора. Халыҡ аслыҡтан интегә... Помещик, кулактарҙан талап алған икмәге бөтһә, Советтар яулап алған Петербург, Мәскәү халҡы ҡаршы сығасаҡ. Унда Ленины

ғыҙҙы уратып алған хөкүмәт етәкселәре араһында ғауға ҡубып ята, бер ниндәй берҙәмлек юҡ. Лениндың сәйәсәте хаҡ булһа, уның тирәһендәге ил эшмәкәрҙәре ниңә уға ҡаршы сығып ятһын ти?

— Уныһы үҙҙәренең буҫҡаһы. Ленин иптәш уларға бирешерлек түгел. Лениндың сәйәсәтен бөтә Рәсәй халҡы яҡлай. Мең туғыҙ йөҙ егерме икенсе йыл, Андрей Иванович, ул һигеҙенсе йылдар түгел. Хәҙер контрреволюция һөрөн һалһа ла, элекке кеүек көс туплар рәте юҡ. Өндәшмәй тик ятыуҙан да хәйерле сара юҡ һиңә, Андрей Иванович.

— Юғарыла ниҙәр булып ятҡанын белгең килһә, «Известия Всероссийского Центрального Комитета» тигән гәзитаны уҡып ҡара, — Андрей Иванович тәпәш өҫтәлдән Абдрахман алдына бер ҡосаҡ газета ташланы. — Уҡы, фәһем ал, большевик! Һеҙҙекеләр унда бер-береһенең боғаҙын сәйнәп ята.

— Булыр, булыр, ләкин уларға ышаныс бағламайыҡ.

Һүҙ көрәштереү, бәлки, дауам да иткән булыр ине, әгәр ҙә быны тыңлай-тыңлай аш бүлмәһендә кискә ашарға әҙерләп йөрөгән Анастасия Петровна:

— Һеҙ унда ни бүлешәһегеҙ? Һин улайтып, Абдрахманды хужа хоҡуғында аҙым һайын ҡыҫмаҡҡа алып ултырһаң, ул Маргаритаһын етәкләп ҡайтып та китер, — тип туҡтатып ҡуйҙы.

Ике ир, билдәле, хужабикәне тыңланы, ләкин үҙ фекерҙәрендә ҡалды. Абдрахман: «Был вахмистр нисә тапҡыр ниде моронона алһа ла, һаман ҡоралға тотонорға иҫәбе юҡ түгел», ә Андрей Иванович: «Ҡыҙыл Армияла йөрөп, бөтөнләй икенсе кеше булып, ағыуланып, боҙолоп ҡайтҡан икән, быныҡ менән һағыраҡ ҡыланыу хәйерлерәк», — тип уйланы.

Аштан һуң дүртәүләп ултырып бер аҙ кәрт һуҡтылар ҙа, хужа башы ауыртыуға, иртәгә эштең күплегенә һылтанып, тиҙерәк ятыу яғын ҡараны. Иртә менән үҙе бик иртә ҡуҙғалһа ла, Абдрахман менән Маргаритаға туйғансы йоҡларға ҡушып, ихатаға сыҡты.

## 3

Иртәнге аштан һуң Андрей Иванович Абдрахманды хужалығы менән таныштырырға уйланы. Бөтә донъяны ҡар баҫҡан осорҙа Андрей Ивановичтың ихатаһында, кәртә-һарайҙарында ҡар остоғо юҡ, уның бөтә ихатаһы һарайҙары менән ҡуша таҡта менән берҙәй ҡыялатып ябыл-

ған. Өс урында кәрәсин шәме урамды яҡтыртып тора. «Быныһы — конюшня», тип хужа атлы ғәскәрҙәрҙеке кеүек секцияларҙан торған ат һарайын күрһәтеүҙән башланы. Һәр ат тураһында мәғлүмәттәр бәләкәй таҡтаға яҙылып, алдында элеп ҡуйылған.

— Ошо инде минең иң яратҡан хайуаным — Серка. Дон тоҡомонан, егерменсе йыл Верхурал йәрминкәһенән өс атҡа алыштырып алдым, — тип теҙгененән тотоп, бейек, һомғол һыртынан ҡорһағына ҡәҙәр түңәрәк таплы айғыр сығарҙы.

Ат башын күтәреп, муйынын дуғаландырып, дағалы алғы аяҡтары менән таҡта үҙәнде сапсып алды ла артҡы аяҡтарына күтәрелде. Суңҡаһы түшәм таҡтаһына һуғылғас, ҙур күҙҙәре менән ҡырын ҡарап, ҡойроғон, башын һелкеп ҡуйҙы. Алғы аяҡтарына баҫып, артҡы һынын һикертеп, ҡушаяҡлап тибенгеләп ҡуйҙы. Аты менән маһайып, уға ҡарап туя алмаған хужа нәҡ вахмистрҙарса:

— Стоять, стоять! — тип ҡысҡырҙы.

Айғыр уның командаһын аңлаған һымаҡ, дүрт аяғына баҫты ла Андрей Ивановичтың ысҡындырылған казачий бекешаһына моронон тыҡты.

— Икмәк һорай, шельма! Бар, икмәк сығар әле, — тип һыйырҙар аҫтын таҙалап йөрөгән йәш егеткә һөрәнләне. Тегеһе ярты арыш ҡаласы сығарып хужаға биргәйне, хужа уны бүлгеләп айғырҙың ауыҙына тыҡты. Ауыҙының шайыҡтарын ҡоя-ҡоя арыш икмәген ашап торған айғырға ҡарап, Абдрахман ҡырҙыҡҡа ҡушып алабота орлоғонан бешерелгән икмәккә лә туя алмай, «бөтөп ҡуймаһын» тип ҡарай-ҡарай ашап ултырған ас ата-әсәһен иҫенә төшөрҙө. «Бында берәүҙәр арыш ҡаласын аттарына ашата, ә беҙҙекеләрҙең үҙҙәренә эләкмәй. Бына һиңә тигеҙлек, бына һиңә ғәҙел тормош. Ерҙәге был тигеҙһеҙлекте бөтөрөү өсөн әле күпме ваҡыт кәрәк булыр икән?» Ҡапыл нишләптер күҙенең нуры һүнеп ҡалған Абдрахманға ҡарап, хужа:

— Әйҙә, теләгең булһа, Серкаға атланып бер биш-алты саҡрым йөрөп ҡайт. Нисек теләйһең — яйҙаҡ та ярай. Эйәрле көйө теләйһең икән, хәҙер үк эйәрләп бирерҙәр, — тип оҙон ағас сөйгә эленгән казачий эйәр-өпсөнгә төртөп күрһәтте.

— Юҡ, Андрей Иванович, башҡа ваҡытта. Бөгөн ни эшләптер аяҡтар һыҙлап тора, — Абдрахман баш тартты. Атҡа менеп, ҡанатлы ҡош һымаҡ осоп йөрөргә уның күңеле китек ине.

— Былары инде минең көндәлек эшкә егә торған йөк аттары. Ардени тоҡомо менән урындағы башҡорт аттарынан килеп сыҡҡан хайуан. Башҡорт атының сыҙамлығы,

орденидың ҡеүәте бергә ҡушылған. Нәҡ беҙҙең шарттар өсөн ҡулай, кәрәкле ат. Ашауын да ашай инде, ләкин эшен дә эшләй, — тип ул башҡа аттарын күрһәтте.

— Бына былар бик юғары майлыҡ менән күп һөт бирә торған семменталь тоҡомло һыйырҙар. Ҡыу бесәндән тыш, күберәк сөгөлдөр, картуф ашатырға тура килә, — тип ул күрһәтә-күрһәтә, һыйырҙары тураһында һөйләп алып китте. — Һеҙҙең яҡта уны «Рәсәй тоҡомо» тип йөрөтәләр. Былары инде минең һарыҡ-кәзәләр. Һарыҡтарҙың тунаҫ йөнлөләрен, роман тоҡомонан булғандарын тотам. Улар бик әрһеҙ, һыуыҡҡа бирешмәй, тиреһе тун тегеүгә китә, беҙҙең яҡта унһыҙ ҙа булмай, ә йөнөнән инде бейма баҫабыҙ. Ә кәзәләренән дебет тарайбыҙ, шәл бәйләйбеҙ. Бөтәһе лә үҙ урынында ярап ята. Бөтәһе лә кәрәк. — Иң аҙаҡтан мөйөштә ултырған келәт һымаҡ нәмә күрһәтеп: — Унда ҡош-ҡорт, күркәһе лә, ҡаҙы ла, тауығы ла бар. Хужалыҡ булғас, унһыҙ ҙа булмай. Иген сәскәс, уның ваҡтөйәк ҡый-ғыпыры сығып тора бит, бына шуны ашайҙар. Башҡа төрлө корм кәрәкмәй. Сусҡа аҙбарын да ҡарап кит. Тегендә Анастасия Петровна менән инә торған аҡ мунса. Бына мунса ла яғып ебәрербеҙ әле, алла бойорһа. Башҡорт, урыҫ үҙенең мейесендә йыуына, тип беҙҙән көлгән була...

Кеше йөрөй торған бәләкәй ҡапҡанан артҡа сыҡтылар.

— Быныһы картуф, йәшелсә сәсә торған ер. Йәмғеһе, ярты дисәтинә. Ә быныһы минең элекке йылдан тороп ҡалған алты эҫкерт — аҙау бесән, — тип өҫтәре тарттырып бүлек менән ябылған эҫкерттәргә көрәге менән һоноп күрһәтте.

Абдрахман: «Эй илаһи, фәҡир ҙә йәшәйбеҙ икән үҙебеҙ, Андрей Ивановичтың бер үҙенең байлығы беҙҙең бөтә ауыл байлығынан артығыраҡ. Беҙҙә бай хисапланып йөрөгән Маннап хәҙрәт, Ғәйнулла байҙарҙың ҡоро яланда ҡара сәүкә һымаҡ тибендә йөрөгән йылҡыһынан башҡа бер низәре юҡ. Кәртә-ҡуралары тишек тә тошоҡ, утә атмалы емерелеп ята. Һарай, утлыҡтары, лапаҫы — барыһы ла ситәндән. Үҙҙәренең өҫтөндә ҡышын тире тун да, ә бәлки берәр ҡама туны йәки баса туны барҙыр. Йәйен шул елбәҙәк кәзәкей. Эй, беҙҙең халыҡҡа быныӊ кимәленә килеп етергә, ай-һай, күп кәрәк әле», тип уйлап алды.

Кашауай ектеләр ҙә Андрей Иванович менән Абдрахман баҫыу ҡарарға ҡырға сығып киттеләр. Ер башына еткәс, дилбегәһен санаға ташлап тороп Андрей Иванович һүҙгә кереште.

— Был — арыш баҫыуы. Көҙҙән сентябрҙең беренсе декадаһында парға арыш сәсеп ҡалдырҙым. Арыш беҙ-

ҙең шарттарҙа бер ваҡытта ла уңыш бирмәй ҡалмай. Ул ерҙең өстән бер өлөшөн алып тора. Икенсе өлөшө бойҙай, һоло йәки арпанан ғибәрәт. Ҡалған өсөнсө өлөшөнә үлән сәсәбеҙ, йәки уны парлайбыҙ.

— Ә теге ер өҫтөндә ниндәй юлдар яһап бөткәнһегеҙ, ул ни өсөн?

— Ул юлдар түгел, мин таҡтанан ышыртҡы яһап, бөтә ер өҫтөн бураҙналап, ҡарҙы һөрөп сыҡҡанмын. Бына шул ҡар бураҙналары араһы яуған, буран өргән ҡар менән тула ла яҙ эреп ергә һеңә. Һөрөлгән ерҙе дым менән туйҙыра. Аңлашыламы? Быны ҡар тотоу тип әйтәләр.

— Ә... ә... улай икән.

— Шунһыҙ ерҙе, һеҙҙең ауылдағы шикелле, ҡара һоло баҫа. Бойҙай араһындағы ҡара һолоно беҙ арыш сәсеп, йәки ерҙе парлап, бөтөрәбеҙ. Беҙҙең Обручевка общество менән яллап бер агроном, йәғни ер белгесе, тота. Шул кеше ерҙе нисек эшкәртергә дала шарттарында уңай тәҡдимдәр, рекомендациялар бирә. Шунһыҙ булмай. Һеҙҙәге шикелле арлы-бирле ер сыймаҡлап, иген үҫтереп алып булмай. Ярай, һеҙҙә даръя һымаҡ осо-ҡырыйы күренмәгән ер бар. Бер-ике йыл бойҙайҙан һуң һуҡалап, ағас тырма менән тырматып, тағы бойҙай сәсә лә башҡорт икенсе яңы ергә күсә. Сөнки бер-ике йылда тәүге участогын ҡый баҫып өлгөрә. Ә беҙҙә ундай форсат юҡ. Мин әле күрһәтергә өлгөрмәнем: Американан ҡайтарылған «Моккормик» тигән косилкам, лобогрейкам һәм ҡуша дүрт ат егеп сәсә торған ун ике рәтле сәскесем бар. Мин ҡырҡ-илле дисәтинә ерҙе һеҙҙәге һымаҡ орлоҡто түбәтәйгә һалып, ҡул менән сәсеп йөрөй алмайым.

— Үҙеңдекен бөтөргәс, ул машиналарың барыбер тик торалыр бит?

— Юҡ тик тормай: аҡса, доход килтерә, сөнки уларҙы мин үҙем кеүек кешеләргә аҡсаға ваҡытлыса биреп торам. Мәҫәлән, минең ат менән иген һуҡҡыс машинам күрше ауылда әле лә эшләп ултыра — иген һуға.

— Был мәлдә ниндәй иген?

— Бына шулай, ҡайһы бер кешеләр элекке йылғы эҫкерткә һалып ултыртып ҡуйған игендәрен әле лә һуғып бөтмәгән, шуны һуғалар.

— Бына һиңә кәрәк булһа? Ә һеҙҙә продотрядтар йөрөмәнеме ни? Һеҙҙең артыҡ игенегеҙҙе хөкүмәт нишләп алманы?

— Ә беҙ хөкүмәткә бурала ятҡан игенебеҙҙе бирҙек.

— Ә... Шулай икән. Һеҙҙә бөтә кешелә лә икмәк запасы бармы?

— Миндәге һымаҡ юғын юҡтыр, әлбиттә, беҙҙә лә эш һөймәгән ялҡау фәҡирҙәр етерлек, ләкин һеҙҙәге һымаҡ ярлылыҡ беҙҙә юҡ, тип әйтергә ярай, иң ярлыһының да беҙҙә бер йыллыҡ, ярты йыллыҡ запасы була.

Юлда ҡайтҡанда ла әңгәмә дауам итте.

— Үҙемдең был көнкүреште, хужалыҡты мин һиңә ни өсөн күрһәтәм?

— Әллә, уны кем белгән?

— Белеп ҡуй! Иртәгәнән башлап бына ошо хужалыҡты бөтөнләйе менән һиңә тапшырам. Ҡартайғанмын. Аяҡ-ҡулдарым да, билдәр ҙә һыҙлай башлаған. Ошоларҙан тыш аҙнаһына бер тапҡыр миңә даими рәүештә иген тейәлгән ун ылау менән Верхнеуральск баҙарына барып ҡайтырға тура килә.

— Унда ни бар?

— Унда, Абдрахман Абдулгалимович, аҡса бар. Баҙарҙан миңә доход килә. Мин ауылдағы халыҡтан осһоҙ хаҡҡа иген һатып алам да Ҡыҙыл тирмәненә алып барып тарттырам, уны сорттарға — крупчаткаға, ябай размолға бүлеп йөктәргә тейәйем дә һыпыртам. Верхнеурал баҙарына. Унда ондо бүлеп һата торған лабазниктарға оптом тапшырам, ҡайтыуымда ун атҡа, урман башҡорттарынан һатып алып, бүрәнә, тыранса, септә тейәйем. Дегеҭе лә тура килә. Уларҙы үҙебеҙҙең яҡҡа алып килеп, тағы икеләтә ҡыйбатҡа һатам. Бына шулай, братишка, тинде тин тыуҙыра, тәңкәне тәңкә таба. Башҡаса булмай. Быны атҡарып сығыу өсөн бына был эшләргә тейеш, — тип дилбегәһен ташлап, һуҡ бармағы менән сикәһенә төртөп күрһәтте.

— Ысынлап та, был тиклем эште эшләп сығарыу өсөн баштың йомро булыуы кәрәктер ул.

— Во-во!

— Ул тегенән алып килгән тыранса, бүрәнәләреңде бында үткәрә алмаһаң?

— Уның өсөн дә баш кәрәк.

— Нисек?

— Бына нисек. Ошо ҡуйын дәфтәремдә яҡын-тирәләге бөтә ауыл граждандарының ағас-ташҡа, күмергә мохтажы яҙылған. Шуға ҡарап, мин Верхнеуральскиҙан кәрәкле йөктө генә тейәйем. Һеҙҙең Совет аҫҡан кооперативығыҙ йоҡоһонан уянып ҡуҙғалғансы, мин уның эшләйһе эштәрен башҡарып та ҡуям. Әйткәндәй, кооператив тигәс, иҫкә төштө. Унан ағас-таш тейәмәгәндә, мин ул кооперативтың Верхнеуралдағы Совет аҫҡан товариществоһының йөгөн тейәйем. Йә тоҙ була, йә бындағы кооперативта ағза булып торған ярлы-ялпыға һатырлыҡ кәрәсин була.

— Ә товарищество нишләп үҙ тауарын урындағы кооперативтәренә үҙе ташымай?

— Ул тауар — Советтыҡы. Ә Совет йәйәү йөрөй, уның аты юҡ. Хөкүмәттең беҙгә ялынмай әмәле юҡ. Беҙ уның йөгөн ташыған өсөн, тағы уның һуңғы аҡсаһын һыҙырып алабыҙ.

— Ошолай ҡасанға тиклем... ярлы хөкүмәтте таларһың икән?

— Хөкүмәтегеҙ байып, үҙ аяғына баҫҡансы. Ә хәҙергә уның беҙгә баш һалмай хәле юҡ. Бына был инде һеҙҙең иптәш Ленинығыҙ әйткән: «Кем кемде еңеп сыға?» тигән лозунгы тиһегеҙме әле? Бына шул була.

— Андрей Иванович, ниңә сауҙа михнәттәрен ташлап ҡына ҡуймайһың?

— Эх, братишка, братишка! Башың йәш шул әле. Уны үҙең теләп кенә ташлап булмай шул, сөнки мин бер йылға сауҙа итергә мисәт һуғылған патент алғанмын. Уға мин бер нисә миллион тәңкә аҡса түләнем, шул аҡсаны кире ҡайтарып алырға кәрәктер бит? Һин нисек уйлайһың? ·

Бындай һорауҙы көтмәгән Абдрахман башта ҡаушап ҡалды ла һуңынан:

— Мин бер нисек тә уйламайым, — тип яуапланы.

— Сөнки һинең һуҡыр тинең дә юҡ. Шуға уйламайһың. Ҡеҫәңә аҡса мул керһә, йоҡлатмай ул. Хатта төндәр буйы борғоланып сыҡҡан саҡтар була.

Бер аҙ һүҙһеҙ ултырғас, Абдрахман яңы һорауын бирҙе:

— Ә нишләп Обручевка ауылында йәки башҡа хуторҙарҙа бөтә кеше лә, һинең һымаҡ, сауҙа эшенә тотонол китәлмәй?

— Ай-һай, аҡылың алтын икән! Эй, брат! Сауҙагәр өй һайын булмай ул. Уны башлап ебәреү өсөн капитал кәрәк — ул бөтә кешелә лә юҡ. Бындағы халыҡ бойҙайын нишләп миңә генә һата, тип уйлайһың, ә? — Андрей, шешмәкләнгән күҙҙәрен йомоп, хәйләкәр генә йылмайҙы, шунан елкәһен тырнап алды ла, — беләһеңме ни өсөн? — тип Абдрахманға ҡараны.

Тамам аптыраған Абдрахман:

— Әллә, белмәйем, — тип яуап ҡайтарҙы.

Андрей Иванович, эсенән ҙур ризалыҡ белдереп, көлөмһөрәне.

— Белмәҫһең дә! Сөнки башҡа ваҡ сауҙагәрҙәр бойҙайҙың ботон, к примеру, утыҙар мендән йыя башлай икән, мин тотам да һәр ботона мең тәңкә өҫтәйем дә ебәрәм. Ә тегеләр һаҡалын һәрпәйтеп тора ла ҡала. Халыҡ бойҙайын миңә килтерә, сөнки мең тәңкә артыҡ аҡса тегенең

көрһен тишмәй ҙә инде. Ә шунан һуң теге сауҙаға тотонорға йыйынған кеше, эше барып сыҡмағас, аты менән инцә яллана, минең йөктө ташырға мәжбүр була. Төшөндөңмө?

— Барып етеңкерәмәй әле...

Андрей киң битенә маһайған һыҙат йүгертеп, усы менән үҙенең ерән һаҡалын һыйпап, әйтте:

— Ничево, бына үҙең минең менән бер-ике тапҡыр барып ҡайтһаң, унан үҙ аллы йөрөй башлаһаң, бик яҡшы төшөнөрһөң.

Абдрахман байтаҡ өндәшмәй барҙы.

— Эх, братишка, братишка! Аҡса кәрәк булһа, бына шулай башыңды ла, үҙеңде лә эшләтергә, үҙ аяҡтарың менән йүгерергә тура килә ул. Аҡса еңел генә кеҫәгә килеп кермәй. Мал шунһыҙ табылмай ул. — Үҙенең сауҙа кәсебен төбөнә тиклем төшөндөрөргә теләптер инде, һүҙ тоғо бер өҙөлгәс, Андрей Иванович ярһып һөйләүен туҡтатманы:— Верхнсуралға он тейәп барғас та, ҡайһы саҡта шундайырак хәлдәр сығып тора. Бында инде киреһенсә. Бер он тейәгән әҙәм килә лә мин һата торған лабазниктарға, булочниктарға минән арзанараҡҡа онон һата башлай. Мин ҡарап-ҡарап торам да ондоң хаҡын түбәнәйтәм дә ебәрәм. Он минеке бит, ни теләйем — шуны эшләйем. Он алыусылар тегене ташлай ҙа минең онға йәбешә. Ә теге әҙәм, минең менән ярыша алмай, төп башына ултырып ҡала. Шулай итеп мин бойҙай һатып алыусы ваҡ-төйәк сауҙагәрен дә, осаһын һәрмәп ҡарамай он һатырға матшкан берәр атлы яңғыҙ-тулаҡты ла, йылғалағы ваҡ балыҡ, селбәрләрҙе йотҡан ҡомһоҙ суртан һымаҡ, йотам, бөтөрә барам. Минән башҡа бойҙай алыусы ла һатыусы ла ҡалмағас, мин инде уларға, ләғнәттәргә, үҙ шартымды ҡуя башлайым. Бойҙайына ла, онона ла хаҡты мин, бына мин үҙем, — тип ҡулынан дилбегәһен ысҡындырып, ул шапылдатып күкрәгенә һуғып алды ла кештән тегелгән кәпәс кейгән «махан» башын өҫкәрәк күтәрҙе, — мин үҙем билдәләйем. Шунан теге лабазниктар шаярмаһын өсөн, мин улар менән договор төҙөшөп, ул ҡағыҙҙа хаҡын күрһәтеп ҡуям. Бына шулай ул, көслөнөкө замана, — ҡартлас бейәләйле һул ҡулы менән уйға батып килгән Абдрахмандың арҡаһына һуғып ҡуйҙы.

— Да, Андрей Иванович, һеҙ ысынлап та ҡомһоҙ суртан икән.

Андрей һис тә үпкәләмәне.

— Шулай-шулай. Йәки ҡомһоҙ суртан булып ваҡ балыҡтарҙы йоторға, йәки ваҡ балыҡҡа әйләнеп, суртандан йотолоп, уның эсендә сереп, дерьмоға әйләнергә кәрәк.

Икенең бере — үҙең һайла! Йәшәү законы ла, баҙар законы ла бына шулай. Өсөнсө юлын әле хәҙергә бер кем дә уйлап тапмаған.

Хәбәр төшкө тамаҡ мәлендә лә дауам итте. Абдрахманға Андрей Ивановичтың нисегерәк байығыу юлдарын белергә кәрәк булһа, ә тегеһенә хоҙай тарафынан ебәрелгән «яңы управляющий»ҙы үҙе иртәгәнән башлап алып китә торған хужалыҡтың нескәлектәренә өйрәтергә кәрәк. Андрей Иванович донъя ҡамытын йәш, ғәйрәте ташып торған башҡорт егетенә тапшырырға әҙер.

Ашап туйғас, Абдрахман ҡалағын бер яҡҡа ҡуйҙы ла инде бөтөнләй икенсе — ят кешегә, ысынлап та энә һымаҡ осло тештәре менән үҙ ҡорбанын эләктереп йота торған ҙур ауыҙлы суртанға оҡшаған, йөнтәҫ ерән ҡаштары аҫҡа һәлберәп төшкән Андрей Ивановичҡа мөрәжәғәт итте:

— Асыуланма, Андрей Иванович! Тағы бер һорау бирәйемсе. Берәй заман хөкүмәт һинең бөтә йыйған мөлкәтеңде конфисковать итеп ҡуймаҫмы һуң?

— Ихтимал. Ләкин хөкүмәттең әлегә ҡулынан килмәҫ. Бөгөн мине бөтөрөп, минең бөтә мөлкәтемде конфисковать итһә, ул хөкүмәтегеҙ иртәгә үҙе бөләсәк, сөнки бына мин, минең һымаҡ ер хужалары хөкүмәтте һәм уның ҡалаларҙағы ас эшсеһенең тамағын туйҙыра. Улар беҙҙең ҡулға ҡарап тора. Аңланыңмы?

— Аңланым, ләкин бик барып етмәй әле.

— Хөкүмәткә мин йыл һайын игенлә тә лә, аҡсалата ла үҙ нормамды түләп барам. Продразверстка эттәре минең келәттән быйыл йөҙ бот гәрәбә һымаҡ бойҙайымды алып киттеләр. Йылдың йылы шул рәүешле мине талай башлаһалар, мин тотам да быйыл иген сәсеүҙе яртылаш ҡыҫҡартам, ә икенсе йыл ҡырҡ дисәтинә урынына дүрт дисәтинә генә сәсәм. Анастасия Петровна менән икебеҙҙең тамаҡҡа йылына егерме бот иген баштан ашҡан. Мал менән дә мин шулай уҡ эшләйем. Артыҡ малымды бөгөн үк тотоноп бөтәм дә бер ат менән бер һыйырға торам да ҡалам. Башҡалар ҙа шулай эшләр... Мин һәм минең кеүектәр Рәсәйҙә аҙ түгел. Ғөмүмән, беҙ хөкүмәттең терәге, Беҙ бөтһәк, иртәгә хөкүмәт үҙе бөтә. Беҙ булмаһаҡ, ҡайҙа бара хөкүмәтегеҙ? Һеҙҙең ауылдарҙан хөкүмәткә зыяндан башҡа һуҡыр бер тин файҙа юҡ. Киреһенсә, һеҙҙең үҙегеҙҙе ашатырға кәрәк. Шуға күрә хәҙергә беҙҙең хужалыҡты һәр яҡлап үҫтереү, уны үҫтереүҙә ҡыҙыҡһыныу хөкүмәт өсөн файҙалы. Билдәле, хөкүмәтегеҙҙең елегенә май ултырып нығынып алһа, әҙерәк ауыл хужалығына ҡорамал-ғәләмәт менән ярҙам итеп, айырым хужалыҡтарға орлоҡ ссудаһы биреп, иген етештереүҙе арттырһа, ул

беҙҙең боғаҙҙан аласаҡ. Ләкин яҡын ғына биш-алты, ун йылда Совет хөкүмәтенең беҙгә тотонорға ҡулынан килмәҫ әле.

Абдрахман ҡаты уйға тарыны. Уның пландары икенсерәк ине. Быйыл көҙгә тиклем Андрей Ивановичта эшләп, бол туплап алырға ла, ауылға ҡайтып, үҙ алдына тормош ҡороп ебәрергә, иген сәсеп, икмәк үҫтерергә, мал көтөп, кеше һымаҡ йәшәп алып китергә уйлағайны. «Был мәсьәләлә мин хөкүмәт ярҙамына ла бик нык ышанғайным. Бына бит, әле хөкүмәт тураһында Белов ҡарт ни һөйләп тора. Ышанырлыҡ та шул. Юғарынан йүнле ярҙам булмаһа, ауылдың яҙ сыҡҡан фәҡир-фоҡараһы кемгә барып баш һала инде? Шул Ялан ауылының Беловтарына — Ғәлимйән хажиға, Маннап хәҙрәткә, Ғәйнулла байға. Бына бер әкәмәт тормош — бай һаман байыға, ярлы һаман фәҡирләнә. Был ҡуласанан ҡасан сығырбыҙ һуң? Берәр осо бармы бының? Хәҙергә баш һалып тыбырсынмай ғына, ошо Андрей Ивановичтың миңә ҡарата яҡшы мөнәсәбәтенән файҙаланып, Маргарита менән эшләргә тура килә. Башҡаса бер ниндәй сара юҡ».

Һәр кем үҙ уйы менән мәшғүл. Андрей Иванович иһә: «Ошо еңелсә шаҙра айыу кеүек Абделғәлимдең осҡор малайын уның ошо ауыр хәленән файҙаланып, үҙемә, үҙемдең ғүмер буйы тешем-тырнағым менән йыйған хужалыҡҡа беркетеп булмаҫмы? — тип уйлай. — Тора-бара үҙе лә мал таба башлаһа, ҡыҙығып хужалыҡҡа йәбешеп, мауығып китер. Бисәһенең ҡайһылай тап килеп тороуын әйт әле — хоҙайҙан ятып һораһаң да шулай булмаҫ. Ипле генә, эшһөйәр балаға оҡшап тора. Етмәһә, үҙебеҙҙең кеше, шул тиклем ҡулай. Настя уға өй эшен, ҡатын-ҡыҙ эшен өйрәтеп торор ине, ә мин Абдрахманға хужалыҡ эшен, иген сәсеү, мал ҡарау, мөлкәт ишәйтеү юлдарын өйрәтер инем. Бына, алла бойорһа, уҡмашып йәшәр инек. Ҡартлығыбыҙ ҙа ҡараулы, ҡәҙерле генә булыр. Былар бик иплеләр, ситкә типмәҫтәр ине. Юғиһә, минең үҙ ҡустымдың да малайҙары бар, ләкин береһенең дә ир ҡатылығы етмәй, бәлйерәгәндәр, үҙҙәренә күрә түгел, типтерергә, күңелле тормошто яраталар, етмәһә, эскеселәр. Уларға тапшырһаң, мөлкәтеңде бер аҙнала тырым-тырағай килтереп, эсеп бөтөрҙәр». Андрей Иванович төптәнерәк тә фекер йөрөтә. «Ошолайтып беҙгә тиреғеп китһә, Абдрахманды әкренләп, хәҙерге власҡа ла ҡаршы тәрбиәләп булыр. Малға мауығып, байлыҡ ҡулына килеп инә башлаһа, кешелә аҡсаға ҡомағайлыҡ хәҙер генә хасил була башлай ул. Шунан һуң хөкүмәт уның малына йәбешә башлаһа, тир түгеп тапҡан мал бик йәл була ул, бик үҙ ҡулың менән бирген килеп

тормаç! Эш шуға китһәме, ҡулыңа ҡылыс тотоп, карабиныңды аçып, строевой Серкаға нисек атланғаныңды белмәй ҙә ҡалырһың! Ҡыҙыл әтәс осҡоларын суҡый башлаһа, хөкүмәт боғаҙҙарынан алһа, Дон, Кубань казактары тураһында һөйләп тораһы ла юҡ. Улар үҙебеҙҙең атаманыбыҙ генерал-лейтенант Александр Ильич Дутовтың шәүләһен төштәрендә күрә. Ә унан һуң Семиречье, Байкал артындағы, Приморье казактары ниңә йоҡлап ятһын, барыһы ла берҙәй күтәрелһә, төртһәң ҡоларға торған Советың емерелеп төшмәй ҡайҙа барһын! Бына шунда Серкаға атланып, империяның аҡ-күкһел байрағын баш осонда елберләтеп, Абдрахманыбыҙ Александр Александрович исемен алып, Ҡыҙыл станицаһына атаман булып килеп төшһөнсө әле!» Бына нисегерәк фекер йөрөтә Андрей Иванович үҙенә килеп морон төрткән Абдрахман тураһында. Бына ниндәй тәмле хыялдар, алыç офоҡта күренер-күренмәç булып шәүләләнеп торған сихри киләсәк батша вахмистрының башын әйләндерә, мейеһен ҡайната. «Бирһен һуң! Хоҙай насип итеп, ул көндәрҙе күрергә яҙһын!»

Төшкө аш ваҡытында Абдрахман ҙур һаҡлыҡ менән генә һүҙ күтәрҙе.

— Беҙ Маргарита менән һеҙгә бер генә көнгә килмәнек. Һинең ҡарамаҡҡа баш һалып килдек.

— Бик мәслихәт, бик яҡшы. Мин үҙем дә шундайыраҡ фекерҙә тора инем әле, хуш! Әйҙә, һөйләп бир!

— Атай менән әсәйҙе беҙ бик насар хәлдә, бер һыныҡ икмәкһеҙ ҡалдырып киттек, — тип ул ҡатынына ҡарап ҡуйҙы, һиҙгер Маргарита элеп алып китте.

— Эйе, Андрей Иванович, хәлдәре ауыр...

— Эшләр эштәребеҙ хаҡына алдан әҙерәк аҙыҡ алып барып биреп булмаçмы икән тип уйланылғайны.

— Ул ниндәй хәбәр ти ул? Рәхим ит! Теләгән атты егеп ал да бер-ике тоҡ он алып барып ташлап ҡайт. Шуны ла эшләмәгәс, мин Абдулгалимдың ниндәй знакомы булам ти. Рәхим ит! Анастасия Петровна бураны асып бирер!

## 4

Иртәгәһенә Абдрахман ике тоҡ он һалып алды ла Андрей Ивановичтың көн ярымда Верхнеуральскиҙан әйләнә торған атын егеп Яланға һыпыртты. Ул яҡты көҙҙә ҡайтып инеүҙе кәрәкһеҙ хисаплап, ауылға етәрәк атын яйлатты, тик ҡараңғы төшкәс кенә атаһының өйөнә килеп туҡтаны. Беренсенән, әгәр күрше-тирә Абдрахмандың ике

тоҡ он алып ҡайтҡанын һиҙеп ҡалһа, ҡулы асыҡ Сәрбиямал әбей сеүәтәһен тотоп ингән һәр кешегә он бирел, уның мыҫҡалын да ҡалдырмай таратып бөтәсәк. Икенсенән, әле хәҙергә Абдрахмандың ҡайҙа йөрөгәнен ауыл халҡының белмәйерәк тороуы хәйерле. Атын да туғармай, бер-бер артлы ике тоҡ он өйгә килеп ингәс, Әбделғалим ҡарт менән Сәрбиямал әбейҙең күҙҙәре шарҙай булды. Улар үҙ өйҙәрендә икешәр тоҡ ондоң булыуын бик күптән инде хәтерләмәйҙәр. Сәрбиямал әбейҙә: «Был ондо берәй ерҙән урлап алып килгәндер» тигән ҡурҡыныслы фекер тыуҙы ла ҡысҡырып ебәрҙе:

— Балам, был тиклем мөлкәт харам мал түгелме? Үҙеңдең башыңды һәләк итә күрмә!

— Юҡ, юҡ, борсолмағыҙ! Бына быныһы биш-алты ҡаҙаҡ туң май. Әйҙә, май икмәгеңде бешерә башла, әсәй!

Мөйөштә хайран ҡалып ултырған атаһы ла һүҙгә ҡушылды.

— Уйындан ғәйре. Абдрахман, был ниндәй мал? Күктән теләгәнде хоҙай ерҙән бирҙе ләһә!

— Андрей Иванович бүләге был, һеҙгә улар күп итеп сәләм әйтеп ҡалды.

— Урыҫ булһалар ҙа, шул тиклем изге йәндәр булыр икән. Алла һаулыҡтарын биреп, кәсептәре уң булһын.

Абдрахмандың уй-фекере икенсерәк. Ошо килеүенән файҙаланып, ул сельсовет рәйесе булып эшләгән, хәҙергә Ялан ауылында Совет власының сәйәсәтен үткәреп ятыусы берҙән-бер кешене, Аласов Ғәлиәкбәр ағаһын, күреп киткеһе килде. Ул бер-ике шәшке сәйҙе ашыҡ-бошоҡ ҡына эсте лә ишек төбөндә кейенә башланы. Өйҙә килеп күренгәне бирле, янған сыраҡтай унан күҙҙәрен ала алмаған ҡарт менән ҡарсыҡ күңелен ҡапыл болоҡһоу, ҡара һөрөм ҡапланы, улар бер-береһенә ғәжәпләнеү ҡатыш шикләнеүле ҡараш ташланы. Күҙенән осоп барған улының ишек тотҡаһына йәбешкәнен күреп, әсә ағас табаҡ эсендә шалтыратып сынаяҡ йыуған эшен ташлап, сырышып ҡатҡан ҡулдарын сепрәккә һөртә-һөртә, Абдрахман эргәһенә килде.

— Мынауындай, ҡараңғы төндә ҡайҙа йыйынаһың, улым? Һары таңдан кире юлланыр булғас, ҡалған сәғәттәреңдә ата-әсәң менән бергә булһаңсы. Әллә бар ғүмер-әллә юҡ ғүмер, тағы әллә ҡасан юл төшә әле?

«Хәҙер берәй тупаҫыраҡ һүҙ ысҡындырһаң, уның күңел кереше өҙөлөп, илай башлай инде әсәйем», тип уйланы Абдрахман. Был һүҙгә ҡыҫылмайыраҡ һике йөҙлөгөндә иғтибарһыҙыраҡ булып күренергә тырышып ултырған атаһына ла Абдрахман күҙ ҡыры менән ҡараш ташланы.

«Һыр бирмәҫкә тырыша атай, ә үҙенең эсендә барыбер ут яна».

— Эйе, шул, мынан кискә сығып йөрөмәһәң дә ярар ине, йә бер эт-ҡошҡа юлығырһың, — тигән булды Әбделғәлим ҡарт.

Абдрахман ҡулын әсәһенең яурынына һалды:

— Ярай, минең өсөн борсолмағыҙ, ауылда күрәһе кеше бар, — тине лә, урамға сығып, туп-тура Ғәлиәкбәр ҡарттың өйөнә йүнәлде.

Ошондай ауыр заманда ишектә Абдрахмандың килеп күренеүе, һалҡын землянканың һалҡын ер иҙәнендә аяҡтарына төплө бийма, яурындарына ямалған тиртун һалып, үрле-түбәнле йөрөп ятҡан Ғәлиәкбәр ҡартты шатландырып ебәрҙе. Абдрахман үҙе менән тәпәш землянкаға, күгелйем томан кеүек тәгәрәтеп, ҡыштың һалҡын боҫон индерҙе.

— Ай, рәхмәт яуһын, тәңренең ҡунағы ана шулай аңғармаҫтан өҫтөңә ҡолай ҙа ҡуя ул. Әле бына волостан, кантондан бер нисә фарман юлығып, кем менән кәңәш итергә белмәй, вайран булып йөрөп ятыла ине, ҡалай ҙа йәтеш булды, — тип, шатлығын йәшерә алмай киң йылмайып, ул ике ҡулын һондо. — Әйҙә, түрҙән уҙ, ана еңгәң менән күреш, — тип көлдөксәгә йәйелгән борсаҡ араһынан ҡый сүпләп ултырған ҡатынына күрһәтте. — Йә, юл булһын, ҡустым, — тип Ғәлиәкбәр ҡунаҡҡа һикенән урын күрһәтте. — Һуңғы күрешкәндән һуң, бөтөнләй терәкһеҙ, ике ҡулһыҙ тигәндәй тороп ҡалынды бит. Эшләргә лә, кәңәш итергә лә әҙәм ҡалманы.

Шинелен кәҫ өйҙөң ишеге ҡырындағы ағас сөйгә элгәс, Абдрахман хужа янына килеп ултырҙы.

— Һуң, Ғәлиәкбәр ағай, кеше юҡ тип хәсрәтләнәһең, минән башҡа Ялан ауылында яңы хөкүмәт сәйәсәтен бойомға атҡарырға әҙәм бөтмәгәндер бит, — тине Абдрахман.

Хужа шыйыҡ ҡына кәзә һаҡалын кәкрәйгән бармаҡтары менән аҫҡа тарап алды ла:

— Бар ине лә ул. Совет сәйәсәтен ауылда ең һыҙғанып үткәрә торған егеттәр-ҡыҙҙар юҡ түгел ине, әлбиттә. Бөттөләр.

— Ҡайҙа булдылар?

Хужа бер аҙ һүҙһеҙ ултырҙы ла, бер нисә тапҡыр ҡаты көрһөндө.

— Ҡайҙа тип ни? Уларҙың һәр икеһенең бараһы ерҙәре билдәле инде, ҡустым. Ҡыҙыл Яр буйы, — тип ауыл осондағы зыяратҡа ҡулын һуҙҙы. — Нәғез йәне-тәне менән бирелеп эшләп йөрөгән, кулак-муллаларҙың күңеленә шом

һалған урта бармаҡ шикелле егеттәр-ҡыҙҙар астан ҡырылып бөттө. Үҙең дә күргәнһеңдер бит? Күрмәһәң, ишетә йөрөйһөңдөр, — тип ул нуры һүнә башлаған һыңар күҙен Абдрахманға текәне. Хужаның һарғайып кипкән хәрәкәтһеҙ битендә аслыҡтан үлгән ауылдаштарының шәүләһе сағылып киткәндәй булды.

— Совет власының ауылда күҙ терәп торған кешеләре, таянысы гел генә фәҡир-фоҡара ине бит, ә йотлоҡ иң башта шуларҙың бәкәленә һуҡты, иң алда шулар ҡырылды.

— Шулайҙыр шул, — тигән булды бер нөктәгә текләп уйға сумған Абдрахман.

— Бына шундай хәлдәр. Ауыл осондағы зыяратта мәйет ерләргә урын бөткәс, яңы урындан икенсе ҡәберлек астыҡ. Хөкүмәт ярҙамы килеп етмәһә, беҙ ҙә йәһәннәмгә ҡойроҡ сәнсә инек, йән алҡымға килеп терәлгәйне, — тип ул ябыҡ бармағын һуҙып, көлдөксәлә шылтырлап ятҡан тере борсаҡҡа күрһәтте.

Ҡәҫ землянка эсен тынлыҡ баҫты.

— Йә, ҡатын, нишләп әле беҙ көн элгәре йыназа уҡырға ултырабыҙ, алла бойорһа, инде мынан кире Совет хөкүмәте астан үлтермәҫ. Кисә генә волостан өс подвод борсаҡ, консерва, ярма килтерҙек. Йә, сәйеңде ҡуй, ҡунаҡты борсаҡ икмәге менән булһа ла һыйлап сығарайыҡ, — тине Ғәлиәкбәр.

Абдрахман, тамағы туҡлығына һылтанып, ҡул-аяғы менән ҡаршы торҙо.

— Юҡ, рәхмәт, еңгә, мәшәҡәтләнмәгеҙ, — тине.

— Йә, ярар әләйһә, әйтеү — беҙҙән, ҡабул итеү-итмәү һинән, — тине лә Ғәлиәкбәр ҡарт тәҙрә өҫтөндәге туҙан ҡаплаған кәштәнән ямаулы сепрәк тоҡсай менән ауыл Советынан һуңғы ваҡытта волостан, кантондан килгән ҡағыҙҙарҙы һикегә сығарып һалды. — Бына үрҙән килгән документтар, фармандар. Ә бына быныһы үткән йыл үктәбер башынан ошбу көнгә ҡәҙәр астан үлгән ауылдаштарындың исемлеге. Йәмғеһе бала-сағалары менән ике йөҙ ҙә егерме бер йән. Йәғни ауыл халҡының өстән бер тәҡәбелеһе. — Ғәлиәкбәр ҡарт үҙ ҡулы менән яҙылған оҙон исемлекте Абдрахманға һуҙҙы. Ул һиҙелер-һиҙелмәҫлек булып дерелдәгән ҡулына ҡара ҡайғы шауҡымы, бөтмәҫ хәсрәт тойғоһо бәреп торған исемлекте алды ла бик ҙур иғтибар менән уҡып сыҡты. Бер һүҙ ҙә өндәшмәй, ҙур һаҡлыҡ менән генә, мәңге йоҡоға талған ауылдаштарын уятырға ҡурҡҡан шикелле, уны эргәһенә һалды. Ауылдың бер осонан икенсеһенә тиклем өй беренсә яҙылған исемлектә уның йәш саҡта бергә сәкән-туп һуҡҡан иптәштәре, һалдатҡа бергә ҡаралған таныш рекруттары, йәшел туғай

буйында сәмләнеп, ярыша-ярыша бесән сапҡан ауылдаштары, алсаҡ, көләс йөҙлө сибәр ауыл ҡыҙҙары, йор һүҙле еңгәләре бөгөн дә уның эргәһендә, үҙ үпкәләрен һары йөҙҙәренә һирпеп, теҙелеп тора кеүек тойолдо.

— Бына ошонда китте инде беҙҙең бөтә таяныс, Совет власының күҙ терәгән кешеләре, — тине Ғәлиәкбәр ҡарт, ҡағыҙ кисәгенә моңһоу ҡарашын ташлап. Абдрахман башҡа ҡағыҙҙарға ҡул һуҙҙы.

— Һин, ҡустым, бына ошоларҙы ҡарап сыҡ әле, — хужа мисәтле бер нисә ҡағыҙ тотторҙо.

— Ғәлиәкбәр ағай, был ҡағыҙҙарҙы ни эшләп өйөңдә һаҡлайһың? Сельсовет кәнсәһендә тотоу уңайлыраҡ түгелме? — тип һораны Абдрахман.

— Ул хаҡта уйлағаным бар ҙа ул, тик бер ниндәй һаҡһыҙ, ситтә ултырған тупаҡ өйҙөң һәр ҡасан көлөн күккә осорорға мөмкин. Ә бында ышаныслыраҡ. Совет дошмандары, ҡустым, ҡайһы ектән башын тығырға көтәүелләп кенә тора.

— Шулай тиһең инде. — Абдрахман берәм-берәм ҡағыҙҙарҙы уҡый башланы. — Ялан ауыл Советы рәйесенә. Яңы иҡтисади сәйәсәт [1] кертелеү сәбәбе илә ошбу көндән башлап кантондан урындарға бушлай гәзит ебәреп тороу туҡтатыла вә газеталарға коллективный яҙылыу иғлан ителә. Ошбу фарманға бинаэн һәр ячейка вә Совет ҡашында коллективный газетаға теркәлеүҙе ойошторороғоҙ. Ошбу сарадин төшкән сәрмәйәне партияның волость комитетына оҙатығыҙ. Һәр дана «Правда», «Ярлылар» газетаһына алтын валюта илә ун сум йәғни советтар хисабы илә йөҙ мең сум.

— Бына ошоноң менән баш ҡаңғыртабыҙ әле. Ул алтынлата ун һумды ҡайҙан тапмаҡ кәрәк? Элгәре бик уңай ине әле — почта менән аҙна һайын газета буш килеп тора торғайны. Ашханаға йыйылған халыҡты һуңғы яңылыҡтар менән таныштырып торола ине. Не знай, хәҙер ундай сумманы ҡайҙан тапмаҡ кәрәк?

— Ә быныһы ниндәй ҡағыҙ?

— Уҡып ҡара.

Абдрахман ул ҡағыҙға ла күҙ йүгертеп сыҡты.

«Ҡантземәтдил ошбу хаҡта ҡәтғи ҡуша: ун көнлөк мөҙҙәт эсендә советығыҙға кергән ауылдарҙа, убчыстуаларҙа быйылғы ярауай сәсеүгә орлоғо булмаған йорт хужаларын тикшереп сығығыҙ. Бигерәк тә хөкүмәт ярҙамына мохтаж ауыл ялпылары күҙ уңында тотолорға тейеш. Нисә

[1] Яңы иҡтисади сәйәсәт — Яңы экономик политика (НЭП).

бот, ҡайһылыр ки ниндәй культура икәнен күрһәтеп, кантземәтдилгә егерменсе марттан да һуңға ҡалмай мәғлүмәт бирегеҙ».

— Бына һиңә тағы бер ҙур йомош. Быны нисек бер үҙең генә, йәйәү йөрөп, башҡарып сыҡмаҡ кәрәк, — тип Ғәлиәкбәр ҡарт башын сайҡап алды.

— Ярлыларҙың үҙҙәрен, активтарҙы йәлеп итергә кәрәк.

— Ә ул ярлылар Ғәлимйән, Фәйзулла хажиҙарҙан, Ғәйнулла байҙарҙан баш ҡалҡытырға ҡурҡып ята. Бының өсөн ошо байҙарҙа йөрөгән батрактарҙы ул кешеләр ихтыярынан тартып алырға кәрәк.

— Давай, ағай, ауылда бөгөнгө көндәге активтарҙы һанап сығайыҡ әле, кемдәр улар?

— Һин дә мин, Иблиәмин һымағыраҡ инде. Ярлыларҙан ағалы-энеле Ғүмәр менән Ҡорбанғәле ҡалды. Улар байҙар еленән осоп бара торған ҡәүен түгел, ышанырға була.

— Ә ҡалғандары кем?

— Ҡалғандары әлеге лә баяғы кулак малайҙары. Имам Мохтасип Мөхәмәтрәхим малайы Уйылдан, Фәйзулла хажиҙың кинйә улы Мөхәмәтнур, Ғәлимйән хажиҙың уртансы ҡыҙы Сафия һәм уларҙың эйәрсәндәре. Бер ҙә генә баш етмәй — шуларға ышанып йомош ҡушып буламы, юҡмы? Миңә ҡалһа, минең бер ҙә күңел ятмай. Бер янтау, һикәлтәле урында беҙҙең арбанан төшөп ҡалмаҫтар микән?

— Хәҙергә, Ғәлиәкбәр ағай, ағымдағы эштәрҙе ошо кешеләргә булһа ла тапшырып тормай булмай. Тора-бара ауылда камсамул, фирҡә ячейкаларын төҙөп ебәрһәк, уларҙың һәр ҡайһыһының эшенә тейешле баһа биреп, үҙебеҙҙең иләк аша үткәрербеҙ әле. Ҡипкән тиҙәк бер заман барыбер һыу өҫтөнә ҡалҡып сығыр.

— Шулай тиһең инде?

— Эйе, мин шулай фекер йөрөтәм. Мынауы аҡса мәсьәләһен ошолай эшләргә булыр ине. Тот та был эште Ғәлимйән хажиҙың ҡыҙына — Сафияға йөкмәт. Ул иртәгә үк һиңә артығы менән әпкилеп тапшырыр.

— Ай-һай!

— Ағай, бер ҙә шикләнмә. Хәҙер тыны бөтөп, Совет власына ярарға йөрөүсе мулла, кулак балаларының да хәлен төшөнөргә була. Яңы сәйәсәт елпеүенең ҡайһы яҡҡа өргәнен улар һинең менән миңә ҡарағанда яҡшыраҡ аңлай. Шуның өсөн уларға Совет власы яғына ятыуҙан да уңайырағы юҡ. Уларға ике юл: йә беҙҙең менән, йә аталарына ҡушылып, бер табандан тороп беҙгә ҡаршы көрәшеү. Бындайҙар менән эш иткәндә, Уйылдан һымаҡ ата йәбер-

ләнеүенән йонсоп йәшәгәнлектәрен дә күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай, минеңсә.

— Знамо, знамо. Совет хөкүмәтенә унан ниндәй мәнфәғәт булыр, әммә үҙ атаһы менән ғүмер буйы яғалашып йәшәне инде. Үҙ-ара һуғышып бөттөләр бит, хәҙер Уйылдан килен менән мал өйөндә йәшәп ята. Үҙ атаһын бөгөн үк Совет хөкүмәтенә лә, ғазраилға ла һаҡалынан етәкләп ебәрергә әҙер.

Абдрахман китергә йыйына башланы.

— Ярай, ағай, миңә ҡайтырға ваҡыт.

— Ултыра бир әле, ҡайҙа ашығаһың, төн оҙон, — Ғәлиәкбәр һорау ҡатыш ҡунағына ҡараны. — Ауылға бөтөнләй ҡайтҡанһыңдыр бит, әле бергә-бергә ҡул тотошоп эшләрбеҙ. Совет хөкүмәтен шулай күмәкләшеп нығытмаһаҡ, тырым-тыраҡай барып сыҡмаҫ ул. Ана, ауыл байҙары ҡорбан ғәйете һылтауы менән көн дә йыйылышып кәңәш ҡоралар. Ә беҙ борсаҡ һымаҡ төрлөбөҙ төрлө яҡҡа һибелеп ятабыҙ, беҙгә лә берҙәй булып уҡмашырға кәрәк, — тип тарбайған кәкре бармаҡтарын Ғәлиәкбәр ҡарт бергә йомдо.

Тороп кейенә башлаған Абдрахман күңелендә Ялан ауылы Советы рәйесенең йомолған, ҡарайған керле йоҙроғонда яңы тыуып, үҙенә юл ярып йәшәй башлаған Совет хөкүмәтенең киләсәккә ҡарай йәшәү ынтылышы, көс-ғәйрәте тупланған кеүек тойолдо.

— Ҡитәм шул, ағай. Үҙеңә мәғлүм, мин Белов ҡартҡа барып баш тәрәнем, ләкин оҙаҡҡа түгел. Барыбер тиҙҙән кире әйләнермен. Беҙгә, үҙең әйткәнсә, уҡмашып йәшәү кәрәк. Шунһыҙ беҙҙе тегеләр берәмләп сүпләп бөтөрәсәк. Улар яғында хәҙергә байлыҡ, көс, мәкер. Хәҙерге көндә ас әҙәмде кем ашата, ул шуның ҡурайына бейей. Беҙгә ғүмер буйына иҙелгән, ҡыйырһытылған ярлы-ялпы ауылдаштарҙы үҙебеҙҙең яҡҡа ауҙарып алырға кәрәк. Быйыл өсөн бергә-бергә ойошорға, үҙебеҙҙең ҡурайҙы рәтләп, әҙәм ишетерлек итеп тауышын сығара башларға ваҡыттыр.

Абдрахманды оҙатырға торған Ғәлиәкбәр ҡарттың ҡаҡса битенә моңһоулыҡ ятты, ул килеп инеү менән төҫмөрләнгән шатлыҡлы саҡлылар осҡоно һүрәнләпә төштө. Уны тынысландырырға теләгәндәй:

— Нисауа, мин ғүмергә китмәйем бит әле. Обручевка ауылында бындағыға ҡарағанда аңлыраҡ халыҡ йәшәй. Улар икмәкте беҙҙән бик күп алда ашай башлаған халыҡ. Урында Совет хөкүмәтенең сәйәсәтен үткәреүҙә лә уларҙың тәжрибәләре күберәк. Ҡиләсәктә бәйләнеште өҙмәй, бер-беребеҙ менән йышыраҡ осрашып, хәбәрҙар булып тороу файҙалы булыр. Ярай, ағай, икенсе күрешкәнгә тик-

лем хуш булып торогоҙ, — тип, Абдрахман ихлас хушлашып, ҡараңғылыҡҡа сумды.

Ләкин ауыл кулактары тарафынан ҡуйылған Совет зельскийының һәр аҙымын яҙлыҡмай көнө-төнө күҙәтеп йөрөгән шымсы, Абдрахман үҙ өйҙәренә йүнәлгәс тә, таҡта ҡапҡалы, ауылдың ҡалай түбәле иң бейек йорттарын «һуңғы яңылыҡ» менән таныштырып, ҡыҙырып сыҡты. Билдәле, уға «тоғро хеҙмәте» өсөн әжер йәлләмәнеләр.

Был хәбәрҙе ишетеп, иртәнге тамаҡ алдынан уҡ ҡыҙмаса булып өлгөргән Ғәлимйән ғәрлегенән шартлар сиккә етте.

— Ләғнәт, яҡшынан яман тыуған игелекһеҙ бәдбәхет! Мыҡты кеше, тапҡан кем менән кәңәш ҡороп ултырырға! Ғәлиәкбәр ағаһының совет тaратҡан борсаҡ икмәген һағынғандыр, йүнһеҙ! — тип папиросын боролдатып ары-бире йөрөп алды. Бер аҙ һыуына төшкәс: — Уның Ғәлиәкбәренең ҡулынан да, хәленән дә артыҡ эш килерлек түгел. Ә бәлки хоҙай бирһә... — тип Ғәлимйән хажи март — апрель айҙарында аслыҡтан үлергә тейешле малһыҙ-ниһеҙ тороп ҡалған фәҡир-фоҡара исемлегенең башына Ғәлиәкбәрҙе теркәп ҡуйҙы. «Ә бына Абдрахман Ғәлиәкбәр ише түгел, уның ҡулынан да, башынан да эш килерлек егет һәм уның артынан ауылдың бөтә ыштанһыҙ ярлы-ялпыһы бер табандан эйәрәсәк. Был ауыл көтөүен башлап йөрөгән кеше менән һуң булмаҫ элгәре ни ҙә булһа ҡылырға ине. Йә уның һуҡмағына берәй мәкерле тоҙаҡ ҡорорға, тағы бер тапҡыр ҡулға төшөрөргә тырышып ҡарарға кәрәк, йә булмаһа... — тип ике асмалы быяла шкафының бер бүлкәтенән кобураға тығылған йылтыр алтатарҙы ҡулына алып, оҙаҡ ҡына теклэп торҙо ла, көбәгенә өрөп, кире урынына тығып ҡуйҙы...

Шулай итеп, Абдрахмандың аталарына ярҙам һылтауы менән Яланға килеп, ауыл Советы рәйесе менән осрашып күрешеп китеүе үҙҙәрен ауыл тотҡаһы итеп хисаплаған мулла, байҙарына шул минутында уҡ мәғлүм булды.

Көн кислэтеп кенә ауылына килеп төшкән Абдрахман, атын бер аҙ ғына һәрмәндереп, ата-әсәһенең ай-вайына ҡуймай, таң һарыһынан юлға сыҡты.

Үҙ ауылдаштарынан ҡасып тигәндәй юлға сыҡҡан Абдрахман барыбер үҙ выжданынан ҡасып ҡотола алманы, уның тынысһыҙ күңеле борсоулы ине. Яҙғы ҡарҙа бер төрлө генә шығырлап шыуған сана табаны тауышы уны осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙарға сумдырҙы. «Бына ерһеҙ, һыуһыҙ кеше һымаҡ, ике уртала йөрөп ят инде. Андрей Ивановичта, билдәле, өҫтөң бөтөн, тамағың туҡ буласаҡ, Маргаритаға ла бер ҙә насар булмаҫ. Анастасия Петровна

һымаҡ тәрбиәле ҡатын ҡулында уның йорт эшенә өйрәнсүе лә ҡамасау итмәç. Тимәк, баш ватаһы юҡ, Андрей Ивановичтың ҡушҡанын эшләп, уға байлыҡ арттырып тик йөрө. Ә ауылға ҡайтып төшһә, уны ни көтә? Ярлылыҡ, бөтә илде ялмап килгән аслыҡ. Андрей Иванович шикелле шул уҡ ауыл байы Ғәлимйән хажи көтә. Уларҙың кеме Абдрахман өсөн яҡшыраҡ? Икеһе лә бер, икеһе лә шул ярлы халыҡты йәберләп мал йыя, халыҡ елкәһен киҙерә, әҙәмдең асығыуынан файҙа таба. Бөгөн Андрей Иванович уның өсөн, Маргарита өсөн ҡулайлыраҡ та, сөнки улар бында үҙҙәрен иркенерәк тоя. Хәҙергә шул кулактарға барып баш һалмайынса әмәл юҡ».

## 5

Ҡашауай сананың кузлаһы аҫтында болттар менән тартып, нығытып ултыртылған һандыҡҡа хужабикә ашарға-эсергә һалды. Уның ҡырына бер бәләкәйерәк брезент тоҡ-ҡа нышып тығылған ҡағыҙ аҡса, запас патрондары менән сепрәккә уралған яһаулы карабин, бер тоҡ һоло, тағы әллә ниҙәр тултырҙылар. Ун йөктөң алғыһына Абдрахманды, ә ҡалған икешәр йөккә тағы берәр кеше ултыртып, бойҙай тейәгән ылау таң менән Верхнеуральскиға юлға сыҡты. Оҙон юлға бер ҡосаҡ та бесән тейәмәгәнде күргәс, Абдрахман, бүре толоп кейеп санаға ултырырға йыйынған хужа эргәһенә килеп:

— Аҙналыҡ юлға сығырға торабыҙ. Аттарға юлда нимә ашатабыҙ? — тип һораны.

— Борсолма, Абдрахман! Беҙ туҡтап ат ашатып китә торған ауылдарға алдан бесән ташып ҡуйылған.

Хужаның бик ышаныслы яуап биреүенә Абдрахман көлөмһөрәп ҡуйҙы ла:

— Ул ауылдарҙа Әбделһаҙый ише шуҡтар юҡмы ни? Бесәнеңде ашатып бөтһәләр, ни эшләрһең? — тине.

— Юҡ! Юҡ! Ундай хәлдең булыуы мөмкин түгел. Ул кешеләрҙең үҙ бесәндәре бөтөп, малдары үлә башлауы бар, ләкин улар кеше нәмәһенә орона торған әҙәмдәр түгел!

— Ҡара, ҡара!

Ҡыҙыл сиркәүенең куполдары ҡояшҡа ялтырап күренгәс, Андрей Иванович Абдрахманды үҙ кашауайына саҡырып алды.

— Аяғың аҫтында ятҡан бер тоҡсай аҡсаны үҙең менән ал. Ҡыҙыл тирмәнендә лә, төшкән фатирҙа ла, Верх-

неуральскиға барғас, унан тейəп ҡайтаһы йөктəр өсөн дə һин үҙең иҫəпләшерһең, — тине лə эргəһендə ултырған үҙе əйтмəксе «яңы управляющий»ына ҡайҙа нимəнең күпме торасағын, нисек түлəү кəрəклеген аңлатты.

— Ошо мин əйткəн хаҡтарҙан да түбəн хисаплашып, экономия эшлəй алһаң, артып ҡалғаны һинеке булыр. Минең ағай мəрхүм дə мине бына шулайтып аҡса йыйырға өйрəткəйне.

— Миңə һинең, Андрей Иванович, бер тинең дə кəрəкмəй.

— Ашыҡма əле, брат! Кəрəге тейə ул уның.

— Əгəр мин хисаплаша белмəй, елкəмə сығарһам ни була?

— Ул хосуста хəҙергə мин һине бер-ике юлға кисерəм, лəкин өсөнсө тапҡырҙа мин уны һинəн тота башлайым Урыҫтарҙа ла бик яҡшы мəҡəл бар ул: «Дружба дружбой, но табак врозь».

— Аңлашылды.

— Аңлашылһа, тоғондо ал да, əйҙə, үҙ атыңа барып ултыр!

Ҡыҙыл станицаһының тирмəненə етеп йөктəр уның ҡапҡаһына терəлгəс, Андрей Иванович толобон сисеп кашауайына ырғытты ла стеналарының ек-йоғо, бүрəнəлəре он вағы менəн тулған ҡуласаларҙың, тирмəн-таштарының геүлəп əйлəнеүенəн, фалиж һуҡҡан кеше кеүек тəнтерəклəп, һелкенеп ултырған ике этажлы йорт эсенə инеп китте. Бер аҙҙан һаҡал-мыйығына тиклем онға батҡан, тик күҙҙəре генə йылтырап күренеп торған, кейгəн туны менəн онға аунаған шикелле оло ҡорһаҡлы, мыҡты кəүҙəле бер урыҫты эйəртеп Андрей Иванович ҡапҡа тышына сыҡты. Андрей Иванович теге кешене атының арҡалығын төшөрөп маташҡан Абдрахман эргəһенə алып килде лə бик тантаналы рəүештə:

— Бына минең ярҙамсым, йəғни управляющийым Абдрахман Абдулгалимович, — тип таныштырҙы. «Абдрахман тип кенə таныштырһа, ни була һуң? Бысағыма хəжəт уның Абдулғалимовичы?», тип эсенəн асыуланып ҡуйҙы теге кешенең үҙенə һонған онло ҡулын ҡыҫып Абдрахман.

— Беҙ уны Абдрахман тип кенə йөрөтəбеҙ инде, беҙгə уның Абдул-надулы кəрəк түгел.

— Əйҙə, əйҙə, шулай булһын.

Ҡапҡа асып, саналарҙы йөклө ат менəн тулған ихатаға индереште лə Андрей Иванович: «Бында минең бик мөһим йомоштарым бар», тип атын борҙо һəм Ҡыҙыл станицаһының оло урамына төшөп китте.

Абдрахман йөктəр араһында йөрөп сират алырға уйла-

ны. Ләкин бында уның осона-башына сығыуы мөмкин түгел ине. «Бында ауыл яғынан берәйһе килеп сыҡмағайы». Абдрахмандың шикләнеүе бушҡа ғына булды. Тирмәндә баштан-аяҡ Яйыҡ казактары ғына. Бер кем йүнләп һөйләшмәй, һиңә иғтибар итеүсе лә юҡ. Күрәһең, тирмән хужаһы Андрей Ивановичтың «управляющий»ын көткән-көткән дә уны эҙләргә үҙе сыҡҡан.

— Мин һине эҙләп йөрөйөм әле. Бында сират ала башлаһаң... Әйҙә, бынау тирмән ишеге алдында торған кешеләрҙе бер яҡҡа этегеҙ ҙә, йөктәрегеҙҙе яҡын килтереп, тоҡтарығыҙҙы мөйәшәләргә бушата башлағыҙ.

Абдрахман тирмән ишеген ҡаплап, атының теҙгененән тотоп торған бер урысҡа яҡын килеп:

— Юлды бушат! Хәҙер беҙ тос индерә башлайбыҙ, — тине.

— Ә һин бик йылғыр кеше икәнһең! Ҡайҙан килеп төштөң әле һин?

— Давай, давай юлды бушат!

— Бушатмайым! Мин бында кисәнән бирле сиратта торам!

— Нишләп бер йыл тормайһың! Бушат тигәс, бушат!

— Ә һин кем ул тиклем?

— Мин Андрей Ивановичтың управляющийы. — Был һүҙенә Абдрахман үкенеп ҡуйҙы.

— Ой, харап икән! «Управляющийы»?! Төкөрҙөм мин ана тирмән башынан һиңә лә, ана һинең хужаңа ла, — тип теге кеше тирмәндең ҡыйығына эйәк атып күрһәтте лә сыбыртҡыһына йәбеште. Абдрахман күҙҙәрен аҡайтып, теге кешене күкрәге менән ситкә этеп алып китте.

— Пшол ты на ...! — Был әҙәм, йәнә уның артынан сират алған биш-алты кеше Абдрахманды уратып алды. Берәм-берәм йөктәренән төшөп, Обручевка кешеләре лә толоптарын сисеп, ҡулдарына сыбыртҡыларын йомарлап тотоп, тирмән ишегенә яҡынлашты. Теге беренсе сиратын бирмәй ҡаршылашҡан әҙәм, нишләптер күҙенә төшкән малахайын ҡалҡытып, йүнәтеп кейҙе лә, муйынын болғап һөҙөшөргә әҙерләнгән үгеҙ һымаҡ башын һелкеп алды.

— Һин управляющий булһаң, мин дә Агап протоиерейының доверенныйы. Мин алла бәндәһенең кешеһе, — тип Абдрахманға ташланды, ләкин таш ҡаяға килеп бәрелгән көсһөҙ тулҡын кеүек, Абдрахмандың алға һоноलған ҡулдарына килеп күкрәге менән һуғылды ла, быймаһы тайып, йөгө өҫтөнә йығылды. Мөйәшәнән бураға ҡойолған ондо тикшереп торған тирмән хужаһы ишек алдына сыҡты.

— Бушҡа шаулашмағыҙ! Бына был кешенең тосон сиратһыҙ ебәрегеҙ. Әгәр ҡаршы килһәң, һине сираттың иң

артына алып барып ҡуям. Әйҙә тор! Маңҡаң туңғансы тор!

Теге кеше һүгенә-һүгенә атын тирмәндең ике асмалы ҡапҡаһы тәңгәленән алып китергә мәжбүр булды.

— Әй, Андрей Ивановичтың кешеһе! Һинең тосоң нисә бот? Үлсәп торабыҙмы?

— Өс йөҙ бот! Үлсәүҙең кәрәге юҡ.

— Улай булғас, ҡалғандарығыҙға иртәгә иртәнсәккә тиклем станица трактирында араҡы эсергә мөмкин. Быларҙың игене таңға тиклем етә. Әйҙә, мөйәшәләргә ташый башлағыҙ. Бына быныһы крупчатка, ә тегеһе — ябай размол, — тип бәүелеп ултырған төптәге мөйәшәгә күрһәтте.

Абдрахман кешеләре, елкәләренә һалып, үҙ тоҡтарын баҫҡыстан өҫкә менеп ауҙара башланы. Мөйәшәгә һыймаған бойҙайҙы уның ҡырына өйҙө. Бушаған тоҡтарын аҫта он ҡойолоу өсөн эшләнгән бура ситенә ҡатылған ике сөйгә эләктереп, һоҫҡо менән он тултыра башланылар. Һәр береһе мамыҡ һымаҡ йомшап тирмән ташынан йылынып төшкән ондо усына алып теле менән тәмләп ҡараны. Бура эсендә ваҡ итеп сәйнәлгән бойҙай еҫе аңҡыны. Бер тоҡто тултырып ситкә ҡуйғас, Абдрахман тоҡтарҙы һыңар ҡулы менән һәлмәкләп ҡараны ла:

— Бынан кире тоҡтарығыҙҙы ошо бурала ятҡан ағас туҡмаҡ менән тыңҡыслап тултырығыҙ. Тоғоғоҙ етмәҫ, — тип бер тоҡто үҙе тултырып күрһәтте.

Андрей Иванович кешеләре он тарттырып, тирмән эсендә кем ҡайҙа етте шунда төнәп сыҡтылар. Иртә менән һуңғы тоҡтарҙы тултыра башлағас, тирмән хужаһы Абдрахман эргәһенә яҡын килеп, тирмән геүелдәүен еңеп, уның ҡолағына ҡысҡырҙы:

— Сама менән мөйәшәләрҙә алты-ете бот тосоғоҙ ҡалды. Өс йөҙ бот игенегеҙҙән берәр ҡаҙаҡтан меңә өс йөҙ ҡаҙаҡ иген — гарнцевый сбор тейеш. Ҡалған он — минеке, — тип ҡысҡырҙы.

— Нисек... һинеке?

— Бына шулай! Хәҙер минән Совет власы яңы закон буйынса аҡсалата түгел, ә налогты он көйөнсә талап итә.

Ҡултығына аҡса тоғон ҡыҫтырып алған Абдрахман:

— Нисек инде ул? Ошоға тиклем минең хужа һеҙҙең менән һәр бот башына меңәр тәңкәнән аҡсалата хисаплашҡан бит, — тип екерҙе.

— Ошоға тиклем ысынлап та шулай ине, ләкин бына хәҙер хөкүмәт һәр бер мал, иген тапҡан хужаға продразверстка урынына продналог һалды. Ә мин ул бойҙайҙы һеҙҙән алмаһам, кемдән йыяйым? Бына шул — һеҙҙең хәҙең мөйәшәлә ете ярым бот тосоғоҙ ҡалды, — тине лә мө-

йәшә алдында арҡыры торған тимерҙе аҫҡа тартҡайны, геүләп торған тирмән таштары башта әкренләп шағыр-шоғор килде, һуңынан бөтә тирмән бинаһын дер һелкетеп бөтөнләй туҡтаны.

— Бына, хозяин, шул. Һеҙҙең миллион тәңкә аҡсағыҙ миңә тегендә барырға ғына хәжәт, — тип тирмән ишегенән күренеп торған бәҙрәфкә күрһәтте.

Шулай бәхәсләшеп торғанда, Андрей Иванович килеп етте.

— Һеҙ нимә? Һаман тейәп сыҡманығыҙмы ни?

— Юҡ әле, бына хужа менән хисаплаша алмай тораbыҙ, — Абдрахман «ышанмаһаң, мә ҡара» тигән һымаҡ ҡултығы аҫтындағы тоғон һелкеп ҡуйҙы. Ҡисә төн буйы очко уйнап таң атҡансы араҡы эсеп күҙҙәре шешмәкләнгән, бите, танауы кишер һымаҡ ҡыҙарып, башы сатнап ауыртҡан Андрей Ивановичҡа, ни эшләп ун йөк игененде бөтөнләй биреп ҡалдырмайһың, барыбер ине.

— Бар, Андрей Иванович, инеп һөйләшеп сыҡ. Ете-һигеҙ бот игенде бынауындай ваҡытта биреп ҡалдырыуы ай-һат түгел бит, — тип ҡараһа ла, хужа тыңламаны. Үҙе, кашауайына ултырып, ылауҙы оло юлға төшөрҙө лә, толобон кейеп, иң алғы йөккә, Абдрахман йөгөнә, бөгәрләнеп ятты. Юл башлап кашауайҙа Абдрахман китте.

Магнит станицаһында кис ҡундылар ҙа икенсе көнөнә Верхнеуральскиға килеп етеп яттылар. Баҙарға сығып, быларҙы көтөп кенә торған он һатыусы сауҙагәрҙәргә йөктәрен бушатҡас, баҙарҙың ағас-таш һата торған өлөшөнә киттеләр. Бындағы йүкә, ағас һәм тыранса, күмер һәм дегет һата торған кешеләр барыһы ла тамъян-ҡатай, тамъян-түңгәүер башҡорттары булып сыҡты. Алғы атта йәп-йәш мыҡты кәүҙәле башҡортто күргәс, аслыҡтан яңаҡтары эскә ингән, һүрән күҙҙәре төпкә төшкән, сәкмән, тиртун кейгән, сарыҡ үксәләрен һыуыҡтан шаҡылдатып һуғып торған ағас-таш һатыусылар йәнләнә төштө.

— О-о! Үҙебеҙҙең кеше икәнһең!

— Үҙ башҡортоң булғас, әбижаньеға бирмәҫ әле. Тейәрен генә бирер ҙә алып китер.

— Шулай, шулай булмай ҙа ни? — тиеште баҙарҙа асығып, туңып торған кешеләр.

Абдрахман да үҙенең ябайлығы менән: «Ошо тиклем нужа күреп, йонсоуҙың сигенә сыҡҡан кешеләрҙән Андрей Иванович та ул тиклем ҡайырып тормаҫ инде», тип уйлағайны. Ләкин бик ныҡ хаталанды. Андрей Иванович бөтә ағас-таш тейәгән йөктәрҙе ентекләп ҡарап сыҡты, кеҫәһенән һигеҙгә бөкләнгән тимер аршын сығарып, үҙенә

оҡшаған бүрәнәләрҙе, тырансаларҙы үлсәп ҡараны. Шунан:

— Эй! Был йөктәрҙең хужалары кем? — тип ҡысҡырҙы. Баҙарҙа оҙаҡ тороп аяҡтары туңған бер нисә кеше тубыр-тубыр йүгерешеп үҙ йөктәре тирәһенә өйөлдө.

— Бына был тырансаның хужаһы кем? — тип Андрей Иванович ҡулына тотҡан ҡамсыһының һабы менән таҡтаға төрттө. Шыйыҡ ҡына кәзә һаҡаллы бәләкәй генә ҡаҡса бабай, сәкмәненең итәге ергә һөйрәлеп торған, башына иҫке ҡорайыш кәпәс кейгән малай, танауын мырш-мырш тартып, баҙнатһыҙ ғына үҙ йөктәре эргәһенә килде.

— Был йөктөң хужаһы беҙ, — теге бабай башта һыуыҡта кәкрәйеп туңған бармағын үҙенә, ә һуңынан теге малайҙың күкрәгенә төртөп алды.

— Һуң, нишләп бер йөккә ике хужа?

— Мин — атһыҙ, ә был егет — атлы хужа. Барыбыҙҙың да ат булмағас, бер йөккә икешәр-өсәр кешенең йөгөн тейәнек.

— О!.. Улай булғас, бында һәр таҡтаға бер хужа икән! — Ләкин алыпһатарҙың мыҫҡыллы көлөүенә яуап биреүсе булманы.

— Бер йөк тырансаға күпме һорайһығыҙ?

— Йөҙ мең һум һорап торабыҙ, хәжәин!

— Тейәре күпме?

— Тейәре лә шул йөҙ мең һум инде. Был заманда йөҙ мең аҡса байлыҡмы ни?

— Кеҫәңдә аҡсаң булмаһа, уның тине лә байлыҡ. Ул йөҙ ҡаҙаҡ бойҙай оно тигән һүҙ.

— Знамо, знамо. Уныһы шулай инде. Ә һин, хужа, күпме бирәһең?

— Һеҙҙең был кәкре лә бөкрө тырансағыҙға, уҙа барһа, ҡырҡ мең. Шунан арттырып ҡырҡ тин дә бирә алмайым. Әгәр ҡыйбатыраҡҡа һата алһағыҙ, һеҙҙең сослоҡ.

Башҡорттар, бергә өйөлөшөп: «Бигерәк битһеҙ әҙәм икән. Күҙен дә йоммай бит әй! Донъяла был тиклем дә һыҡмыр кеше булыр икән!» тип шаулашып алды.

Араларынан берәүһе, уртағараҡ сығып:

— Юҡ инде, ағай-эне! Астан үленһә үленер, ул хаҡҡа биреп булмай, — тип ҡысҡырҙы.

— Ярай, муйынына тәре таҡҡан кафыр бер хәл, ул ғүмер буйы башҡортто талап өйрәнгән, ана араларында бер башҡорто бар бит әле, шуның өндәшмәүен әйт, — тип берәһе аты эргәһендә хәбәр тыңлап торған Абдрахманға төртөп, сәнсә ҡарап ҡуйҙы. Ул оялышынан башын ситкә бороп, битен йәшерҙе. «Мин дә һеҙҙең кеүек үк атһыҙ баш-

ҡорт. Ҡейгән шинелемдән башҡа минең дә бер нәмәм юҡ», тип бөтә ғәләмгә ҡысҡырып аҡланырға теләне.

— Йә, нисек? Мин биргән хаҡҡа ризаһығыҙмы? Риза булһағыҙ, хәҙер йөгөгөҙҙө бушата башлағыҙ, — тип яңығына ҡаранып бер аҙ көттө лә Андрей Иванович быймаһының ҡуңысына ҡамсыһы менән бер-ике һуҡҡылап: «Һеҙҙең менән сауҙа бөттө», тигәнде аңлатып, китә башланы. Ҡапыл уның юлына Абдрахман арҡыры төштө. Ул ике ҡулын йәйеп алға һуҙҙы ла аптыраған ҡарашын хужаға текәне:

— Андрей Иванович! Уйлап ҡара! Бигерәк аҙ бирәһең бит. Улар һин биргән аҡсаның яртыһын ошонда ашап бөтөрөп ҡайталар!

— Ә унда һинең ни эшең? Бында ашайҙармы, әллә алып ҡайтып өйҙәрендә ашайҙармы?

— Уларҙы ас бала-сағалары көтөп ултыра.

— Ауыл һайын мин уларҙың ас балаларына хәйер таратып йөрөй алмайым. Был, Абдрахман Абдулг-г-а-лимович, баҙар тип атала. Баҙарҙың уның үҙ законы бар.

— Шулай ҙа әҙерәк өҫтәргә кәрәк. Кешене шул тиклем рәнйетеп, уның хаҡын ашау килешкән эш түгел.

— Бына һинең һуңғы һүҙең бөтөнләй фәрештәләр һөйләй торған хәбәр. Үҙ мөлкәтең булғас, баҙарға сығырһың да ошоноң кеүек ас башҡорттарыңа бушлай таратып йөрөрһөң. Улар һиңә биленән биш бөгөлөп рәхмәт әйтерҙәр.

Асыуы ташып, эстән ярһыуы ҡайнап бите ҡыҙарған Абдрахман үҙ хужаһына уҫал ҡараш атты ла ҡапыл ситкә тайпылды. «Ай-һай, ашараҡ һуҡтырып ебәрҙем шикелле», тип уйлап алды Андрей Иванович. Ул яңынан теге йөк эргәһенә килеп һикһән мең бирҙе лә, таҡталарҙы бушатырға ҡушып, йөк тейәлгән саналар буйлап ары китте. Ләкин Абдрахман эйәрмәне. Ошо әләгешеп алыуҙан һуң Андрей Иванович менән Абдрахман араһы, ҡара бесәй йүгереп үткән һымаҡ, һыуына төштө. Ҡултығында йөрөткән аҡса тоҡсайын хужаһына атып бәрҙе лә Абдрахман аҡсаға башҡаса тотонманы.

## 6

Бер аҙнанан һуң улар бөтөнләй сит кешеләр булып, берберенә бер ауыҙ һүҙ ҡатмай, Обручевкаға ҡайтып инделәр.

Ҡайтып, кис мунса инеп, аш алдынан бер-ике стакан «смирновский» араҡы төшөрөп алған хужаның күңеле әҙерәк күтәрелгәндәй булды, әкренләп хәбәр тоғо асылды.

Маргарита күпме генә ире тирәһендә өйөрөлөп, уның кәйефе насар булыуының сәбәбен белергә ныҡышмаһын, Абдрахман бер нәмә лә өндәшмәне. Тик араҡынан күңел шөрөбө бушай башлаған Андрей Иванович был турала һүҙҙе үҙе башланы.

— Беҙ Абдрахман менән һүҙгә килештек әле.

Ике ҡатын бер-береһенә ҡарашып алды ла һағайып тыңларға йыйынды. Маргарита түҙмәне, ҙур сабырһыҙлыҡ менән:

— Һөйләгеҙ, Андрей Иванович, — тип бер уға, бер иренә ялбарыу ҡатыш һорау менән ҡараны. Андрей Иванович мыйығын һыпырып алды ла, өҫтәлгә ята биреп, үткер күҙҙәрен мөйөшкә текәп, бик алыҫтан һүҙ башланы.

— Беләһегеҙме, ханымдар, беҙ уның менән икебеҙ ике төрлө кеше. Мин тинде ике итергә, мал йыйырға тыуғанмын, ә ул, бик йомарт кеше — шул малды кешегә таратырға тыуған.

— Бер нәмә лә аңлашылмай, асыҡлабыраҡ һөйлә әле!

— Асыҡлайһы юҡ — Верхнеуральскиҙа ваҡ-төйәк һатып алған урында, Абдрахман ағас-таш һатҡан башҡорттарҙы йәлләп, миңә «һин уларға әҙ хаҡ бирәһең» тип бәйләнде. Бына шул — мин улар һораған хаҡты бирергә тейеш булғанмын. Минең улар менән сауҙалашып тороу Абдрахманға оҡшамаған. Мин уларҙы кәмһеткәнмен. Бына шул, башҡаса бер ни ҙә юҡ.

Ҡемде яҡларға ла белә алмай аптырашҡа ҡалған Анастасия Петровна, һораулы күҙҙәре менән Абдрахманға мөләйем ҡарап:

— Минең ҡәҙерлем! Баҙарҙың законы шулай бит уның, унда бер-береһен йәлләшеп эш итмәйҙәр. Берәү алдай — берәү алдана. Шунһыҙ уны баҙар тип әйтмәҫтәр ине. Донъяның кәкреһен һин генә төҙәтә алмаҫһың инде.

Настяның һүҙен ҡеүәтләп, Маргарита ла һүҙгә ҡушылды.

— Һин нишләп Андрей Ивановичҡа ҡаршы төшәһең? Ул оло тәжрибәле кеше, барыһын да белә. Уның ҡушҡанын ғына эшлә лә тик йөрө, — тип, һуңынан Андрей Ивановичҡа иркә ҡараш ташланы.

Абдрахман ҡуйы дөм ҡара сәс үҫә башлаған башын баҫып тыңлап ултырҙы ла ҡапыл аяҡ үрә баҫты. Барыһы ла уның мөһәбәт кәүҙәһенә, ғорур һынына ҡарап һағайҙы.

— Андрей Иванович! Минең һиңә әйтә торған һүҙем шул: мин башҡаса Верхнеуральскиға баҙарға аяҡ баҫмайым. Әгәр минең кәрәгем бар икән, мин ошонда, һинең хужалығыңда, ҡушҡан йомошоңдо үтәп йөрөргә риза.

Әгәр инде уға риза булмаһағыҙ, мин бында бүтән ҡала алмайым. Иртәгә үк ҡайтып китәм.

Абдрахман менән Маргаританың килеп сығыуына шатланып бөтә алмаған хужалар уйға ҡалды. Тик Маргарита ғына сәбәләнеп, ут эсендә ҡалған ҡырағай кейек шикелле, ни эшләргә лә, ни тип әйтергә лә белмәне. Бер аҙ ултыра торғас, Андрей Иванович һүҙ башланы:

— Тимәк, һин баҙарға йөрөргә ҡәтғи баш тартаһың инде? — Яуап ала алмағас, яңынан шымды.

Өй эсен тынлыҡ баҫты. Тик ике туҡмаҡлы стена сәғәте генә тик-тик, так-так тип һуғыуын дауам итте. Ике ирҙең икеһенең эсендә лә, билдәле, ут ҡайнай ине, ләкин уларҙың береһе лә уны тышҡа сығарманы.

«Ниндәй милләт, кем булыуына ҡарамаҫтан, үҙҙәренең холҡо, фиғеле, башҡа кеше хисабынан мал, байлыҡ йыйыуҙағы ҡарунлығы менән бөтә байҙар ҙа бер ата балаһы кеүек оҡшағандар. Ана беҙҙең ауыл байҙары ла үҙҙәренең бер ҡойто бәрәсе өсөн теләһә кемдең боғаҙын сәйнәргә әҙер. Тик ике йыл элек кенә көтөүҙән бер һарыҡ юғалтҡан өсөн Ғәлимйән хажи үҙ көтөүсеһен һыу эскеһеҙ итеп туҡмағайны», тип уйлай Абдрахман.

«Большевиктар һәм уның эйәрсәндәре русмы, башҡортмо бөтә урында ла бер төҫлө икән. Обручевканың да большевик ярлылары, һеҙ ерһеҙ, малһыҙ фәҡирҙәрҙең көсөнән файҙаланаһығыҙ, шулар хисабынан мал йыяһығыҙ, тип һөрән һала. Ана Дутов Александр Ильич Яйыҡ буйында күтәрелеп, Советтарҙы ҡыуа башлағас, уға ҡаршы Обручевканың ярлы рустары ла, Яландың фәҡир башҡорттары ла, Джетыгораның малһыҙ ҡаҙаҡтары берҙәй күтәрелде. Ниндәй ерҙеке, ниндәй милләттән булыуына ҡарамаҫтан, большевик бөтә урында ла шул большевик икән. Боронғо һымаҡ бөтә русты башҡортҡа, йәки, киреһенсә, ҡапма-ҡаршы ҡуйыу ҡыйынлашты. Дошманы кем икәнен уларҙың һәр икеһе аңлап алды. Элек ҡайһылай ҙа шәп булған: «Ана бусурман килә!» тиһәң, бөтә русы ҡаршы сыға ине, заводтың бөтә русын да, шул иҫәптән фәҡирен дә, бөтә башҡорт күрә алмай ине, хәҙер аңлаштылар, ойоштолар. Көн итеүе ҡыйыная», тип фекер йөрөтә Андрей Иванович.

Әле ара бөтөнләй өҙөлөп бөтөүенә тамам ышанып етмәгән Андрей Иванович:

— Ярай инде, Абдрахман. Көслөк менән мәрхәмәтле булып булмай тигән шикелле, һине көсләп эш сыҡмаҫ. Верхнеуральскиға, ҡарт булһам да, үҙем генә йөрөрмөн. Һин бындағы мал-тыуарға күҙ-ҡолаҡ булып ҡалырһың, улай ҙа ярай, — тигәс, бөтәһе лә иркен һулап ҡуйҙы.

Шул көндән башлап Абдрахман хужаның малын ҡараны, йорт эше менән булашты. Көн дә эргәһендә булғас, хужаның был ҡарарына Маргарита шатланып бөтә алманы.

## 7

Андрей Иванович Верхнеуральск юлынан бушаманы. Ләкин унда бер аҙна йөрөп, Обручевкаға кире ҡайтҡан һайын, уның күңеле төшә, моңһоулана барҙы. Артыҡ асылып бармаһа ла, кәсебенең рәте китә барыуын уның күҙ ҡарашынан, ҡулдарын артҡа ҡуйып, өй эсендә һүҙһеҙ генә башын баҫып йөрөүенән төҫмөрләнә ине. Ғәҙәттә, өйҙәгеләр менән асыҡ-ярыҡ Андрей Иванович нисектер бөтә серен эскә йомдо, өндәшмәҫ булды. Ул ниндәйҙер бер оло ваҡиға көткән кеше һымаҡ һағайҙы. Төндәрендә, Анастасия Петровна әйтеүенә ҡарағанда, тынысһыҙ, төрлө яҡҡа әйләнгеләп үткәрә башланы. Ҡәйеф-сафа күтәреү өсөн ул йышыраҡ, ваҡытын белмәйерәк «смирновский» эсемлегенә әүрәне. Бына шундай бер мәлдә ул үҙен борсоған, күңелен өйкәгән нәмәне асып һалды.

— Совет власының аҙыҡ развёрсткаһын аҙыҡ налогы менән алмаштырыуы — тик ваҡытлы ғына сәйәсәт ул. Шәхси сауҙаны, иген сәсеүҙе, күпләп мал көтөүҙе рөхсәт итеп, ул власығыҙ беҙҙе, крәҫтиәндәрҙе алданы. Был сәйәсәтте ул Рәсәйҙең һуғыш һөҙөмтәһендә емерелгән ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыу өсөн генә эшләй. Бына, көнө бөгөн түгел, килер бер заман, беҙҙең иште НЭП ваҡытында күтәрелеп ҡалған хозяйчиктарҙы хөкүмәт килтереп ярға ҡыҫасаҡ, ҡойроҡҡа баҫасаҡ. Лениндың башы эшләй — бына бер нисә йыл үҙ сәйәсәте менән ҡыҙыҡтырып, ул беҙҙе байытып төпләндереп ала ла завод-фабрикаларҙа эшләгән эшселәрҙе икмәккә туйғыҙа, шунан беҙҙең яғаға йәбешә, күреп торорһоғоҙ. Был байлыҡ бөтәһе лә ваҡытлыса, — тип ул өҫтөндә үҙе ултырған аҡса һандығының ҡабырғаһына ҡуңысһыҙ быймаһы менән тибеп ала.

Иренең һүҙен өҫтәл йыйыштырып диҡҡәт менән тыңлап йөрөгән Анастасия Петровна булә.

— Беҙҙе, үҙең әйтмәксе, ярға ҡыҫтап, хөкүмәт илде туйҙырыу өсөн аҙыҡ-түлекте ҡайҙан ала?

— Уны Обручевканың фәҡир-фоҡараһы, ана миңә һөҙә ҡарап ултырған Абдрахман бирә.

— Улар нимәһен бирһен? Уларҙың үҙҙәренә юҡ.

Аңғармаҫтан хужабикә ысҡындырған был һүҙ тағы Абдрахманға барып төртөлдө.

— Бөгөн булмаһа, уларҙың иртәгә бөтә нәмәһе лә буласаҡ. Улар Рәсәй империяһында даръя бит. Беҙ ана шул даръяла унда-бында күренеп, иртәгә шул даръя баҫып китәсәк утрау ғына.

Анастасия Петровна ла төпсөнөүен белде.

— Хөкүмәттең үҙенә булмағас, уны ҡайҙан алып бирә?

— Бер мең туғыҙ йөҙ егерме икенсе йыл ун һигеҙенсе, ун туғыҙынсы йылдар түгел. Илдә ҡайһы бер нәмә бар инде.

— Нимә бар?

— Нимәһе бармы? Бына тыңлап тор. Беҙ йыл ярым буйы сауҙа итеп йөрөгән Верхнеуральск баҙарының нәҡ уртаһында дәүләт шул баҙарға үҙ ағас-ташын килтергән крәҫтиәндәрҙең юҡ-барын ҡабул итә торған кооперация асҡан.

— Асһа һуң? Улар барыбер үҙ әйберҙәрен һеҙгә һатырҙар бит?

— Бынан былай инде — кукиш! — Андрей Иванович, терһәгенә тиклем төрөлгән йөнлө ҡулын өҫкә күтәреп, кемгәлер кукиш күрһәтте.

Хөкүмәт уларҙың бүрәнәләренә, тырансаһына үҙҙәре ҡайнатҡан дегет, күмеренә юғарыраҡ хаҡ бирә. Бына шул аҡса миҡдарына хөкүмәт сәй-шәкәр, шырпы һәм тоҙ кеүек үҙ кәрәк-яраҡтарын да бирә башланы. Манҡа туңдырып, баҙарҙа көн буйы беҙҙе көтөп тороуҙың хәжәте юҡ.

Ул ғына ла түгел, кооперация улар менән ҡайһы айҙа күпме ағас, күмер, дегет тапшырырға договор төҙөшә. Ә крәҫтиән кооперацияға үҙ кәрәк-ярағына заказ бирә. Үҙем кооперацияға инеп ҡарап торҙом. Һис тә ышанырлыҡ хәл түгел: бер башҡорт һабан, тырма һатып алырға заказ биреп ята. Тимәк, тиҙҙән ул кооператив эш ҡорамалдары ла һата башламаҡсы. Бына бит ҡайҙа бара донъялар.

— Ә һинең ниндәй ҡайғың бар? Лабазниктарың үлеп бөтмәгән бит әле, әйҙә алып бар ҙа элек нисек булған, шулай он йөгөңдө бушат та бушат.

— Хәҙер минең ун ат Верхнеуральскиҙан буш ҡайта бит.

— Иген, он менән сауҙа итеүҙең бер мәғәнәһе лә ҡалманы. Иген сәсеүҙе быйылдан башлап ныҡ ҡына ҡыҫҡартырға тура килер. — Мейескә арҡаһын һөйәп торған Абдрахман ирекһеҙҙән һүҙгә ҡыҫылды.

— Һин иген майҙанын сирек дисәтинәгә лә ҡыҫҡарта алмайһың!

— Ни өсөн?

— Ни өсөнмө? Һин егерме икенсе йылға ла, егерме

өсөнсө йылға ла бишәр йөҙ бот иген тапшырырға хөкүмәт заданиеһы алдың. Сәсеүеңде ҡыҫҡартһаң, һин уны ни менән түләйһең? Хөкүмәт һинән иген өсөн аҡса алмаҫ, игенләтә биреүеңде талап итер.

— Бына ғиллә: бер яғынан, шәхси сауҙаны дәртләндереп, иген сәсергә мәжбүр итә, икенсе яғынан, беҙгә ход бирмәй, төрлө яҡлап ҡыҫмаҡҡа ала. Ни эшләргә?

— Бының юлы бер генә: үҙеңдең бөтә мөлкәтеңде, тапҡан-таянғаныңды тапшыраһың да яңғыҙ атҡа, бер һыйырға терәлеп тороп ҡалаһың. Башҡалар кеүек, үҙ көсөң менән донъя көтә башлайһың. Ташла тием бит купислығыңды.

— Уны һиңә кем өйрәтте? Ҡайҙан сығарып һөйләп тораһың бында туҙға яҙмағанды? — Күҙенең ағын еңдерә ҡарап, Андрей Иванович туҙынырға ла самалағайны, ләкин Абдрахмандың:

— Улай булһа, малыңды, байлығыңды арттырам тип, нәфсеңде тыя алмай көнө-төнө сабып йөрөйһөң дә, берҙән-бер көн Совет власы һинең бөтә мөлкәтеңде тартып аласаҡ. Башың иҫән ҡалһа, мең рәхмәттәр уҡырһың, уныһы ла шикле, — тиеүенә ҡарт ҡапыл башынан һалҡын һыуға ҡойондорған кеше һымаҡ шымып ҡалды.

Совет власының яңы иҡдисади сәйәсәте Андрей Иванович һәм шуның кеүек иске Совет Рәсәйенең бөгөн, иртән ауып емерелеүен көнө-төнө төшөндә күргән кешеләрҙе ҡаты уйға ҡалдырҙы.

## 8

Аҙыҡ разверсткаһына ҡаршы Тамбов губернаһында «Бөтһөн аҙыҡ разверсткаһы», «Йәшәһен иркен сауҙа!» лозунгылары аҫтында эсер Антонов етәкселегендә кулак-эсер фетнәһе күтәрелгәс, Яйыҡ казактарының да бай ҡатламы ҡанатланып ҡалғайны. Хатта Магнитная, Ҡыҙыл станицаларынан элекке Дутов ҡалдыҡтарының ҡайһы берҙәре шул фетнәгә ҡушылғайны. Ләкин Тухачевский, Котовский ғәскәрҙәре барып, уларҙы тар-мар иткәс, Антоновтың үҙе шул бәрелештә үлеп ҡалғас, Яйыҡ казактарының кикреге тағы шиңде. Был осор ундайҙар өсөн ҡайғылы көндәргә әйләнде. Улар бигерәк тә дворян тоҡомонан элекке батша офицеры Тухачевскийҙың, ғәскәр башында тороп, баш күтәреүселәрҙе баҫтырыуын тыныс ҡына кисерә алманы. Уны эттән этко һалып һүктеләр. Яйыҡ буйынан киткән кешеләрҙең һау ҡотолғандары киткәндәге һымаҡ һөрән һалып түгел, ҡайтып, шым ғына өйҙәренә таралды, айҙар буйы күҙен кешегә күрһәтмәй боҫоп ятты.

Егерме икенсе йылдың яҙында Обручевка ауылында ла заманса кооперация асып, сауҙа кредиты ойоштороп ебәрҙеләр. Бәләкәй генә процент менән ауыл ярлылары аҡсалата ссуда алып, яңы асылған кооперациянан үҙҙәренә кәрәк-яраҡ: тоҙон, сәй-шәкәрен, шырпыһын, хужалыҡҡа кәрәк төрлө йоҙаҡ-ҡаҙаҡ, башҡа тимер-томорҙар һатып ала башланылар. Күршеләренән үтескә сәй-шәкәр, шырпы, ваҡ-төйәк һорауҙар шыпа туҡталды. Ауылда был тауарҙар менән сауҙа иткән нэпман, Андрей Ивановичтың дуҫы Степан Степановичтың таш лавкаһына бынан һуң барып әйләнеүсе булманы. Уның лавкаһы тора-бара үҙе ҡороно. Ошонан һуң элек лавка тотоусы Степан Степанович «кооперация» һүҙен тыныс ҡына әйтә алманы. Уны йөҙ таяҡ ерҙән урап үтте. Иҫән-һау яҙ сыҡҡан ярлыларға властар ат, ауыл хужалығы ҡорамалдары һатып алыу өсөн кредит бирә башланы. Абдрахман да был турала байтаҡ уйланып йөрөнө лә хужаһы менән кәңәш итергә булды. Был хәбәре йорт хужаларына аяҙ көндө йәшен һуҡҡан кеүек тәьҫир итте. Яңы хәбәрҙе ишетеп ни эшләргә белмәй ҡотороу хәленә еткән Андрей Иванович:

— Шул ғына етмәгән? Һиңә һарайҙағы биш ат аҙмы ни? Ул атты алып нимә ҡырмаҡсыһың? Бер ат менән һабан һөрәләрме? — тип ярһыны.

Быға Анастасия Петровна ла ҡушылды:

— Ҡуй, буш менән булып әҙәм көлдөрмәгеҙ! Һеҙ бит беҙҙә үҙебеҙҙең балалар хоҡуғында йәшәйһегеҙ. Тағы һеҙгә ни кәрәк?

Маргарита ҡыҫылмай булдыра алманы:

— Беҙгә бында атһыҙ ҙа һәйбәт. Нимәгә ул һиңә бер мәшәҡәт?

— Берәй кәсеп табып, үҙ алдыма төтөн сығара алмаммы тип уйланылған эш ине, — тине Абдрахман былар алдында аҡланған һымаҡ.

Хужа:

— Яңынан бер йыл тороғоҙ ҙа егеүле ат менән бер һыйыр етәкләп ҡайтарып ебәрермен үҙегеҙҙе, — тип ысҡындырғас, Маргарита атҡа менгәндәй шатланды. Абдрахманды ҡосаҡлап:

— Күрҙеңме? Бына ниндәй мәрхәмәтле беҙҙең Андрей Иванович, — тип уны ла ҡосаҡлап, маңлайынан үбеп алды. Былар араһындағы мөнәсәбәттең тәүге сатнауы өҫтән ҡарамаҡҡа бөтөшкәндәй тойолдо, ләкин ул сатнау әленәнәле яңырып торҙо, ә ҡайһы мәлдәрҙә ярылырға ла етеште.

Абдрахман таҡта түшәлгән ихатаға сығарып, һабанға егә торған үгеҙ ҡамыттарын, валек, постромкаларҙы төҙәтте, ҡамыт-сбруйҙарҙың өҙөлгән урындарын теҡте, һу-

ҡынан уларҙы парлап-парлап лапаҫ аҫтындағы ағас сөйҙәргә элде. Тәгәрмәсенән тартып сығарып, ун ике рәтле ат сәскесен — ғүмерендә күрмәгән нәмәне — ҡарап, өйрәнә башланы. Һепертке алып уның саңын таҙартты, тешмәндәренә май һалды. Тешле шестернялар оҙон валды әйләндерә икән, тәгәрмәстәр араһына ултыртылған йәшниккә орлоҡ һалалар, йәшник аҫтан ун ике урындан тишелеп ул тәңгәлдә ҡуйылған бәләкәй шестернялар әйләнеп орлоҡто аҫҡа, ике тимер тәрилкә араһына төшкән көпшәк аша, ергә һалып бара икән... Абдрахман эргәһенә өҫтө-башы ябай ғына, башына күн фуражка кейгән берәү килеп инде. Йәше менән ҡорҙашыраҡтыр. Турайып, быға ғәжәпләнеп ҡарап торған Абдрахманға ҡулын һондо ла үҙен танытты.

— Мин — Яков, Совет секретары булам.

— Яҡшы, ни йомош? — Абдрахман ҡабат эшенә тотонорға уйлағайны, теге кеше бының еңенән тартып:

— Слышь! Һине Советҡа саҡыралар, — тине дорфа ғына.

— Ә унда ни бар?!

— Барғас күрерһең.

— Ҡасан?

— Хәҙер алып килергә ҡуштылар.

Абдрахман майға бысранған ҡулын сепрәккә һөрттө лә, яҫы һалдат ҡайышын биленә быуып, бының артынан эйәрҙе. Юлда ул: «Эх! Андрей Иванович менән кәңәшләшеп китергә ине», тип үкенде. Ләкин һуң ине. Улар башы ябылған бейек болдор аша ҙур ғына ҡалай түбәле йортҡа барып инде. Икегә бүленгән йорттоң төпкөһөндә Совет рәйесенең кабинеты икән. Бының ултырған урыны Ялан ауылы Ғәлиәкбәр кәнсәһе ише түгел. Түшәмдән утыҙлы шәм төшкән. Мөйөштә тимер менән көпләнгән голландка мейес, ултырғыс, өҫтәл ялт итеп тора. Өҫтәл ҡыҙыл эскәтер менән ябылған. Рәйес артынса Ленин бабай һүрәте эленгән. Ике яҡ стенала граждандар һуғышы осоронда сыҡҡан бер нисә плакат. Һаҡалһыҙ, тик мыйыҡ ҡына ебәргән урта йәштәрҙәге, ҡуңыр битле, ҡара сәсле рәйестең өҫтө-башы ла ярайһы ғына. Гимнастеркаһының түш кеҫәһе өҫтөнәрәк ҡыҙыл таҫма тағып ҡуйған. Үҙе лә бик йонсоған кешегә оҡшамай. Ул урынынан торҙо ла:

— Давай, давай, бында ултыр, — тип үҙ янынан урындыҡ күрһәтте. Үҙенән ҡалҡыуыраҡ Абдрахманға баштан-аяҡ ҡарап сыҡҡас: — Бына ниндәй иптәш икән, күҙгә башҡа күренмәй ятҡан, — тип ҡулын биреп күреште, мәгәр исемен дә, фамилияһын да әйтмәне. «Ничево, тора-бара белерһең әле», тип уйлауымы?

— Йә, ҡусты кеше, һине кем тип йөрөтәбеҙ? — тип һораны.

— Игебаев Абдрахман. Мин Ялаҡ ауылы кешеһе булам.

— Һинең ауылды беләм мин. Ҡыҙылдарҙа йөрөгәндә, ул ауыл бер нисә тапҡыр ҡулдан ҡулға күсте. Эргәһендә бик ҡаты һуғыш булды. Шул бәрелештә интернациональ бригаданан байтаҡ мадъярҙар баш һалды.

— Дөрөҫ, дөрөҫ.

— Һин үҙең дә ҡыҙылдарҙа хеҙмәт иткәнһең, буғай. Фуражкаңда ҡыҙыл йондоҙ урыны тора.

— Эйе, ҡыҙылдарҙа хеҙмәт иттем.

— Бик яҡшы, бик шәп. Беҙгә хәҙер Совет власы өсөн көрәштә йәнен-тәнен аямаған кешеләр кәрәк. Ятып торошоң шул Андрей Ивановичтамы?

— Эйе, шунда.

— Уның кем, ниндәй кеше икәнен, тын алышын беләһеңме? Әҙерәк уны күҙәтергә, өйрәнергә ваҡытың булдымы?

— Бик үк яҡшы белмәһәм дә, былай бер аҙ ҡараштырып, байҡап йөрөйөм.

— Уныһы яҡшы. Һин, ҡусты кеше, ул Андрей Беловта ниндәй хоҡуҡта йәшәйһең?

— Һорауыңа төшөнә алмайым.

— Ул һиңә берәр туған-тыумасамы? Әллә һин уның батрагымы, бына шуны беләйем тигәйнем.

— Ул атайымдың әүәлге яҡшы танышы. Үткән йыл армиянан ҡайттым — ауылда мал-тыуар ҡалмаған, аслыҡ. Етмәһә, ҡатын бар, нишләргә тип торҙом-торҙом да бына ошонда килеп баш терәнем инде. Андрей Ивановичҡа рәхмәт. Үҙ итте, өйөндә йәшәп ятабыҙ әле.

— А как же? Бынауындай баһадирҙы ла өйөнә индермәһә, ул сей алйот булыр ине. Анау тиклем хужалыҡты алып барырға ла кәрәк. Хужа ҡартайҙы, элекке шәплек бөттө. — Ул һуңғы һүҙен мыҫҡыл ҡатыш йылмайыу менән әйтте. — Күпме торорға ниәт?

— Әгәр бер-беребеҙгә ылыҡһаҡ, берәр йыл торорға тигән уй бар.

— Бына нимә, ҡусты кеше. Күңелеңә ауыр алма: һинең кеүек, бай йортона инеп, уның эшен башҡарып йөрөгән кешене Совет власы байҙың батрагы тип иҫәпләй.

— Бәлки.

— Бер ниндәй ҙә «бәлки» юҡ. Хәҙер ундай батрактар һаны Рәсәйҙә биш миллион кешегә етте. Ә ауылдарҙа, ҡалаларҙа эш таба алмай йөрөгән кешеләр бихисап. Улай

булгас, һинең Андрей Белов менән бер ниндәй ҙә договорың юҡ инде.

— Юҡ, юҡ, телдән генә килештек.

— Дәүләт батрактар яҡлы, уларҙың мәнфәғәтен күҙәтә. Байға ялланып эшләү ике арала төҙөлгән договор менән законлаштырылырға тейеш. Документһыҙ батраҡ тотоу ҡәтғи тыйыла. Бына договорҙың формаһы, ҡайтып, Андрей Белов менән договор төҙөшөгөҙ ҙә миңә килтереп тапшырығыҙ. Уның үтәлешен тикшереү беҙҙең өҫкә йөкмәтелгән.

— Әгәр ул баш тартһа?

— Күрәләтә законға ҡаршы барырға уның башы ике түгел. Әгәр ҡағыҙ төҙөй алмаһағыҙ, беҙ уны бында, Советҡа, саҡырырбыҙ. Ғөмүмән, ҡусты кеше, һин беҙҙән айырылма. Берегеберәк, ойошоңҡорап йәшәргә кәрәк. Ағымдағы хәл шуны талап итә. Совет власына ҡаршы берәр бола килеп сыҡһа, улар бик йәһәт ойошалар бит, — тип урам яҡ тәҙрәгә ҡулын һоноп күрһәтте түрә.

— Тиҙҙән кооперация һәм кредит йәмғиәте идараһына һайлау уҙғарыла. Саҡырырбыҙ үҙеңде. Әйткәндәй, һин беҙҙең сауҙа кредитына ағза булып индеңме әле?

— Юҡ, ул турала ишеткәнем дә юҡ.

— Уның ойошҡанын һинең хужаң, ҡарт төлкө, күптән белеп ята, значит, өндәшмәгән инде. Ярлылар эшенән һине алыҫыраҡ тоторға уйлай. Юҡ, улай барып сыҡмай ул.

— Уның өсөн нишләргә кәрәк?

— Ана Яковҡа килтереп пай взносына мең һум аҡса түләйһең дә, шул йәмғиәттең буласаҡ йыйылышы был мәсьәләне хәл ҡыла, — тине лә: — Яков! Бына был иптәштән взнос алырһың! — тип ҡысҡырҙы.

«Бына әллә ҡайҙа, Урал артының йәйрәп ятҡан типһән далаһында, Андрей Ивановичтың хөкөмөнән тыш үҙебеҙҙең власть та эшләп ята икән», тип уйланы Абдрахман, договор бланкыһын кеҫәһенә тығып.

Ул йүгерә-атлай ҡайтты. Советҡа саҡыртҡандарына баш ватып, айбарланып, ҡайҙа барып һуғылырға белмәй дворында ярһып йөрөгән Андрей Ивановичҡа ҡағыҙын һуҙҙы. Яурынына һалған бекешаһы кеҫәһенән күҙелдерегән алып, ул ҡағыҙҙы ҡулдарын ҡалтыратып уҡып сыҡты ла, ҡобараһы осҡан һимеҙ битен салшайтып, ҡалын ирендәрен дерелдәтеп, бер аҙ ни әйтергә лә белмәй торҙо. Шунан ҡағыҙҙы йыртып ырғытырға ла уйлағайны, ләкин уны усында бөтә көсө менән йомарланы. Әйтерһең дә, ул үҙенең яҫы усында Совет власын һәм уның бөтә декреттарын иҙгеләп ҡабырға кеҫәһенә тыҡты.

— Ах! Беҙгә лә килеп еттеләрме ни был Совет ҡой-

роҡтары? — Абдрахмандың өндәшмәй, билендәге ҡайышын сисеп ташлап, эшенә яңынан тотоноуы хужаны уғата ярһытты. — Һин нимә? Советта телеңде алып ҡалдылармы әллә? Нишләп өндәшмәйһең?

— Ана шул документты яҙып, ҡултамғаларҙы һалып, Советҡа яңынан тапшырырға ҡуштылар, — тине Абдрахман тыныс ҡына.

— Эйе! Хәҙер йүгерҙем, әҙерләнеп торам! Ул бәҙрәфкә йөрөй торған ҡағыҙҙарын өҫтәлдәренә һалырмын! — тип яңынан бер аҡырҙы ла алпан-толпан баҫып, үҙ артынан бәләкәй ҡапҡаны асыуынан шарт ябып, сығып китте. Бер аҙҙан, ямғырға күшеккән кеше кеүек, яурындарын һалпайтып, яңынан ҡайтып инде.

— Мә, ҡарап сығып, ҡулыңды ҡуй ҙа Советҡа үҙең алып барып ташларһың, — тип бөтә графалары тултырылған договор һуҙҙы, үҙе, Абдрахман был ҡағыҙҙы нишләтер икән тигән шикелле, күҙ ҡырыйы менән күҙәтте. Сәскес таҡтаһына һалып, имзаһын сыймаҡлағас, Абдрахман ҡағыҙҙы хужаһына һуҙҙы.

— Миңә уның хәжәте юҡ, кемгә кәрәк — шул килеп алһын, — тине лә хужа ҡулын һелтәп өйгә инеп китте. Бик артыҡ ҡарайһы килеп тормаһа ла, лапаҫ башында ятҡан таҡта өйөмө өҫтөнә ултырып, Абдрахман ике аралағы ваҡытлы тынныслыҡты боҙған низағлы ҡағыҙҙы уҡый башланы. «Батрак Игебаев Абдрахманға һигеҙ сәғәтлек эш көнө, алты көнлөк эш аҙнаһы һәм һәр йәкшәмбелә ял көнө билдәләнде. Икенсе пунктында бер йыл эшләгәндән һуң, ике аҙналыҡ түләүле ял тәғәйенләнә», артабан эш хаҡы, ятып-тороу шарттары билдәләнгән. Ошо минутта Андрей Иванович уларҙың күптәнге знакомы түгел, кеше көсөнән файҙаланған әллә ниндәй капиталист булып күҙ алдына баҫты.

Төшкө аш ваҡытында баяғы хәбәр яңынан тоҡанды.

— Ҡағыҙға ғына ҡарап, беҙ бер-беребеҙгә һырт биреп әйләнмәбеҙ бит инде. Унда хатта, батракты яллаған кеше уға йәшәү өсөн урын бүлергә тейеш, тип тә яҙылған бит әле. Әйтерһең, мин уларҙы мал өйөндә тотам, — Андрей Иванович тағы бер үртәнеп алды.

Ошо көндән башлап ярлы менән кулак мөнәсәбәттәре рәсми төҫ алды. Һабанға төшөр алдынан Абдрахман Игебаевты кредит йәмғиәтенә ҡабул итеп, уның идараһына ла һайлап ҡуйғас, Андрей Иванович үҙ ялсыһынан бөтөнләй ситләште, һөйләшмәҫ булды. Быныц шулай булыуына, уты һүнеп барған усаҡҡа утын өҫтәп торған шикелле, Абдрахманды әленән-әле Советҡа саҡырып, юҡ-юҡ та ҡайһы бер эш йөкмәтеп тороуҙары ла сәбәп ине. Уның ҡа-

рауы, Абдрахман үҙенең элекке ҡайһы бер ғәмһеҙлек, вайымһыҙлыҡ һыҙаттарынан әрселә барҙы, көндән-көн уның фекере яҡтырҙы, кем — дуҫ, кем дошман икәнен тағы ла асығыраҡ билдәләй башланы, уның синфи һиҙгерлеге бермә-бер күтәрелде. Хәҙер инде ул Андрей Ивановичтың аш алдында ҡыҙмаса булып «Абдрахман менән Маргаританы үҙ балаларым кеүек үлеп яратам» тигән баллы һүҙҙәренә, төптәнерәк уйлап, икенсе төрлөрәк ҡарай, бүтәнсәрәк баһалай, был тормошта үҙ урынының ҡайҙалығын етдиерәк төҫмөрләй.

## 9

Партияның X съезы ҡарары нигеҙендә илдә продразверстка урынына продналог ҡабул ителде. Шул уңай менән Волга буйы, Урал райондарында йоттан интеккән ярлы крәҫтиәндәргә ярҙам итеү йөҙөнән РКП(б)-ның Үҙәк Комитеты өс мең коммунисты ҡалаларҙан ауылдарға ебәрҙе.

«Бөтә өйәҙ һәм волость комитеттарына яҡындан тороп эшлекле ярҙам күрһәтеүҙе, ылау менән тәьмин итеүҙе ҡәтғи йөкмәтәбеҙ», тиелгән ине уларҙың ҡулына бирелгән мандатында. Бына шуларҙың береһе, башына күн картуз, өҫтөнә таушалып бөткән күн тужурка кейгән Афиногенов тигән фамилиялыһы ҡара тиргә батҡан атын Совет йорто ҡоймаһына килтереп терәне. Ул көймәле сананан саквояжын тартып сығарҙы ла, крагалы ботинкаларының үксәләрен бер-береһенә шаҡылдатып, дилбегәсегә бер нисә һүҙ өндәшкәс, бейек болдорҙан йүгерә-атлай бинаға инеп китте.

Урта буйлы, йөҙө ихласлыҡ нуры менән балҡыған был һаҡалтайҙы Степан Степанович күптәнге таныштар кеүек күреп, йылмайып, иҙән уртаһында ҡаршы алды.

— Беҙ һеҙҙе, яңылышмаһам, Степан Ильич, йәғни минең аҙашты, кисә үк көтәүелләп торғайныҡ та, нишләптер әҙерәк туҡталдығыҙ, — Степан Степанович һөйләнә-һөйләнә үҙ урынына уҙҙы, ҡунаҡҡа урын күрһәтте. Ҡыҙыл материал менән ҡапланған өҫтәл ҡырындағы ултырғысҡа ултырғас та Степан Ильич саквояжын иҙәнгә ҡуйҙы, йөнтәҫ ҡаштары аҫтында янып торған күҙҙәре менән председатель кабинетын байҡап сыҡты. Степан Степанович артындағы Ленин портреты аҫтында стена буйына эленгән «Продразверстканан — продналогка» тигән лозунгыға ҡарашын текәп, губком вәкиле:

— Партияның яңы күрһәтмәһен ауыл халҡы нисеге-

рәк ҡаршы алды? Крәҫтиән халҡы араһында ниндәй хәбәрҙәр йөрөй? — тип һораны.

Совет рәйесе артҡа ҡайҡая биреп, уның һорауына яуап эҙләгәндәй бер аҙ түшәмгә ҡарап ултырғас:

— Бөтә халыҡ та берҙәй түгел, уның кешеләре лә бит, көтөүҙәге мал шикелле, бер төҫлө түгел — ала ла ҡола. Берәүҙәр хуплай, икенселәр ышанып етмәй — елкә тырнай, ә өсөнсөләр инде, мир ашаусыларҙы әйтәм, асыҡтан-асыҡ күралмай, — тине.

Рәйестең был һүҙе губерна вәкилен бермә-бер ҡыҙыҡһындырҙы. Уның күҙендә өмөт саҡҡылары тоҡанғандай булды, ул йөнтәҫ ҡаштарын яҙып, рәйескә боролдо.

— Йә, йә. Шулай ҙа нисегерәк? Шул һүҙеңде асыҡла әле, ағымдағы моментта ауыл халҡының был сараға ҡарата ниндәй фекерҙә булыуы партия өсөн бик мөһим.

Председатель дә бер аҙ йәнләнә төштө. Тәмәкенән ыҫланған ерән мыйығын усы менән аҫҡа һыйпап алды ла, бармаҡтарын бөгә-бөгә, һанарға кереште.

— Ҡулына ҡорал тотоп, Дутов артынан «Советтарҙы үҙ ҡанына батырабыҙ», тип һөрән һалып йөрөүсе бер нисә ауыл ҡулагы «Был — Лениндың сираттағы тоҙағы, иген сәсмәгеҙ, барыбер үҙегеҙ һуҡҡан бөтә икмәгегеҙҙе хөкүмәт тартып ала» тип асыҡтан-асыҡ ҡотҡо тарата.

— Ә уларҙың өгөт-нәсихәтенә ҡолаҡ һалыусылар бармы?

— Булмаймы һуң.

— Урта хәлле крәҫтиәндәр кем яғында?

— Хәҙергә ике уртала. Уларҙы тыңлаһа ла, беҙҙе тыңлаһа ла баш сайҡай середняк.

— Тимәк, ышанып етмәйҙәр...

— Ә ярлылар? Ярлылар хуплай ҙа һуң, ләкин уларҙан фәтүә юғыраҡ. Ҡоро һүҙ менән генә илде туйҙырып булмайҙыр бит? — Ауыл Советы председателе, нимәҙер өмөт иткәндәй, вәкилгә ҡараны.

— Уныһы шулай ҙа, ләкин... — Вәкил һүҙен өҙөп, бер аҙ өндәшмәй ултырҙы. Иҫенә төшкәндәй ул ҡапыл тужурҡаһының салғыйын ҡайтарып, галифе кеҫәһенән күн тышы йышылып бөткән, уртаһынан еп менән эләктерелгән блокнот килтереп сығарҙы. Блокнот эсенә тултырылған ҡағыҙҙары таралып китеүҙән ҡурҡҡандай, Степан Ильич блокнотын ураи бәйләгән ебен ҙур һаҡлыҡ менән сисергә кереште.

Уның эшен диҡҡәт менән күҙәтеп ултырған Степан Степанович: «Был иптәштең дә кәнсәһе, минеке һымаҡ, яи кеҫәһендә йөрөй икән», тип салбар кеҫәһендәге икегә бөкләнгән дәфтәрен һәрмәштерҙе.

— Онотоп ултырам, бына быныһы Урал губкомы биргән танытмам, — вәкил председателгә ташҡа баҫылған һары балсыҡ төҫөндәге ҡағыҙ һуҙҙы.

— Ярай, ярай, бик яҡшы, — председатель мандатын уға кире ҡайтарҙы.

— Бына быныһы инде мөһимерәк мәсьәлә, — вәкил алдына икенсе ҡағыҙ һалды. Ауыл Советы председателе ул ҡағыҙға башта һәләт кенә күҙ йүгертте лә, һуңынан ижекләп тигәндәй, яңынан уҡып сыҡты. Унда түбәндәгеләр яҙылғайны: «Был танытма бирeләлер ки 1917 йылдан РКП(б) ағзаһы Афиногенов Степан Ильич иптәшкә шул хаҡта: уға Верхнеурал өйәҙе Ҡыҙыл волосы ауылдарында партячейкалар ойоштороу, партия сафына ағзалар ҡабул итеү бурысы йөкмәтелә». Степан Степановичтың һаҡалмыйыҡ ҡаплаған ҡаҡса йөҙөндә шатлыҡ һыҙаттары балҡығандай тойолдо. Ул кинәт кенә урынынан һикереп торҙо ла, нурлы күҙҙәрен уйнатып, рәхмәт әйтергә теләгәндәй, артындағы, уның эшен һәр саҡ күҙәткән шикелле, күҙен ҡыҫыбыраҡ ултырған Ленин портретына боролдо.

— Вот быныһы өсөн рәхмәт. Вот молодец! — тип кемделер маҡтап алды ла урынына кире ултырҙы. — Ато эшме ни? Беҙҙең ячейка ни бары өс коммунистан ғибәрәт, кандидаттар бөтөнләй юҡ. Бына ауылдағы беҙҙең көс, беҙҙең бөтә таяныс, — тип председатель үҙенең күптән уйлап йөрөгән хыялы ғәмәлгә ашҡандай, ике усын ыуалап алды ла: — Хәҙер, исмаһам, аңлы, совет яҡлы кешеләрҙе партияға йәлеп итеп, ойошманы көсәйтеп ебәрһәк, дошмандарҙың ҡойроғона баҫабыҙ, — тип һөйләнде.

— Ә һуң ни эшләп был көнгә төшөп ҡалдығыҙ? Партячейкағыҙ бынауы дарьялай йәйелеп ятҡан диңгеҙҙә юғалып ҡалған утрау һымаҡ ҡына түгелме һуң?

— Точно. Кругом дошман. Ни эшләп тип ни? Уның сәбәбе бер инде — егерме беренсе йылғы партчистка. Ун бишләгән коммунистан бына шулай һерәйеп өс кешегә ҡалып ултырабыҙ.

— Ҡалғандары?

— Ҡалғандарынан ҡолаҡ ҡаҡтыҡ. Өсәүһе атаман Дутов ғәскәрендә Совет власына ҡаршы һуғышып йөрөгән әҙәм булып сыҡты. Дүртәүһе Колчак артынан эйәреп, Себергә ҡасҡан эре кулак гуртаущиктарҙың[1] балалары, береһе — поп малайы, икенсеһе протоиерей ҡустыһы. Та-

---

[1] Гуртовщик — Урал артында халыҡтан күпләп мал йыйып, уны көтөү-көтөү һуғымға оҙатып ятыусы махсус кешеләр.

ҙартыу ваҡытында партияға осраҡлы ингән ошондай эт-рәгәләмдәр барыһы ла ҡыуылған.

— Уныһы бик яҡшы. Партия һаны менән түгел, ә сифаты менән көслө, тип өйрәтә иптәш Ленин.

— Уныһы хаҡ, әлбиттә.

Бүлмәне төнгө тынлыҡ баҫты, тик Совет председателенең күкрәгенән сыйылдап ҡыҫылып сыҡҡан тыны ғына ишетелде. Һыуыҡ алдырғандыр. Бер аҙ ултырғандан һуң, Степан Ильич тәфтиш алғандай председателгә төбәлде:

— Ә уларҙы партияға ҡабул иткән саҡта беҙ ҡайҙа булғанбыҙ һуң? — тип «беҙ» һүҙенә баҫым яһап, һорап ҡуйҙы.

Степан Степанович өҫтәл терәп ултырған күкрәген артҡа ҡайҡайта биреп, үҙ хәленә ышанмағаныраҡ кешеләй, шаулатып тын алды ла:

— Ундай һорауҙы мин дә теләһә кемгә бирә алыр инем, — тип яуапланы.

Әңгәмә тағы өҙөлөп ҡалды. Вәкил дә артыҡ төпсөнөп торманы, сөнки Степандың был эшкә ҡасан һәм ҡайҙан килгәне уға мәғлүм. Ошо ауылдың элекке батрагы Обручевка ауылына Совет хужаһы һәм партячейка секретары итеп партия мобилизацияһы буйынса губком тарафынан йылдан артыҡ ҡына тәғәйенләнгән кеше ине. Вәкилдең үҙенә лә урынһыҙ һорауынан уңайһыҙыраҡ булып китте шикелле: ултырғысын шығырлатып, урынында ҡуҙғалып алды ла тәмәке төрә башланы. Совет председателе лә эстән генә: «Ундай туҙға яҙмаған һорау биреп ултырғансы, һинең ашарыңа һәм балаларыңдың кейеренә бармы? тип һора. Х съезд ҡарарында «волостарҙа, өйәҙҙәрҙә һәм ҡалаларҙа урындағы ойошмаларҙың ойоштороу һәм башҡа эштәрен башҡарыуҙа үҙенең бөтә көсөн сарыф иткән кешеләрҙе бер киҫәк икмәк һыныгы һәм түҙеп торорлоҡ шарттар менән тәьмин итеүҙе мәжбүр иткән түгелме?» тип бойоҡ ҡына уйлап алды. Ысынлап та, уның бөгөн губерна вәкилен үҙ өйөнә алып ҡайтып, уның алдына һалырлыҡ бер телем дә икмәк һыныгы юҡ ине. «Бына дүртенсе ай бит инде бер тин жалунья алған юҡ. Өйгә ҡайтып инһәң, бисә йәнгә тейә, яланғас ултырған балалар күҙенә тыныс ҡына ҡарап булмай. Хоть бөгөн үк ауыл кулагына эшкә яллан».

— Ә партияға ҡабул итерлек аңлы кешеләр бармы һуң? — тип һораны Степан Ильич бер аҙ ултырғас.

— Булмайсы. Беҙҙең ауыл Советы бик ҙур бит. Биш ауылды берләштерә, ике мең ярым йән бар, — тип йоҡонан айныған кешеләй, председатель маһайғаныраҡ төҫлө әйтеп ҡуйҙы.

— Бик яҡшы, бөгөнгә ошоноң менән эште ослап торайыҡ, иртәгәнән башлап, үҙегеҙ күҙ уңында тотҡан ышаныслы иптәштәрҙе ячейкаға саҡырып, эш башларға кәрәк. Ә, онотоп ултырам, һеҙҙең Советҡа хөкүмәт ярлыларға ярҙам итеү маҡсатында быйыл валюта[1] менән биш йөҙ тонка кредит бирҙе. Бына шуны ла иртәнсәк ултырып, кредит йәмғиәтенән иптәштәрҙе саҡыртып, бүлә башларбыҙ.

— Был кредиттың төп маҡсаты нимәлә?

— Нимәлә тип ни, уның маҡсаты һиңә мәғлүм инде. Яҙғы сәсеү яҡынлаша. Ҡооперация аша ауыл ярлыларына эш ҡорамалдары һатырбыҙ, орлоҡ ссудаһы бүленгән, теләгән кешегә кредитҡа эш аттары ла бирербеҙ. Бына шуны һылдамыраҡ ойоштороп ебәрергә кәрәк.

Степан Степанович ҡуйы ҡаштарын өҫкә күтәреп, осҡорло ҡарашын түшәмгә һирпте. Әйтерһең дә, ошоға тиклем үҙ ауырлығы менән башын аҫҡа баҫып торған ауыл ҡайғыһын, фәҡирҙәр хәсрәтен ул ошо минутта өҫкә ҡалҡҡан ҡашы менән ҡапыл һелкеп ырғытты.

— Шәп-шәп. Партияның, йәш Совет власының был сараларын беҙ күптән көтә инек. Давай, мин һеҙҙе хәҙер өйгә алып ҡайтайым. Юлдан арып килгән кешене һаман кәнсәлә ултыртам... — председатель урынынан тороп, мөйөштә иҙәнгә беркетелгән тимер һандығын асты ла наганын сығарҙы. Быны күҙәтеп ултырған вәкил:

— Нимә? Әллә төндә йөрөү хәүефлеме? Шаяралармы? — тип һораны.

Степан Степанович, галифе кеҫәһенә һалынған наганын ҡапшап битенә етди һыҙаттар йүгертте:

— Шаяралар ғына түгел шул, үкенескә ҡаршы, аталар ҙа, — тине. — Әгәр һеҙҙә лә «уйынсыҡ» булһа, уның һәр саҡ яһаулы булыуы мотлаҡ.

Ултырғысҡа менеп, унлы филтәһен ҡайтарып, утын һүндерҙе лә председатель губерна вәкилен үҙ артынан эйәртте...

* * *

Андрей Иванович менән Абдрахмандың бөтөнләй дошманлашыуына бына ошо вәкил сәбәпсе булды ла инде.

Икенсе көнө иртә менән ауыл Советына саҡырҙылар.

---

[1] Валюта — егерменсе йылдарҙа аҡса әйләнеше ике хисап менән йөрөтөлдө. Ҡағыҙ аҡсалар менән бер рәттән алтын валютаһы ла йөрөнө.

Абдрахман ниндәйҙер яңылыҡ һиҙенгән шикелле, совет бинаһының тупһаһы аша атларҙан алда, икеләнгән кешеләй, бер аҙ ҡаранып торҙо ла соланға атланы.

— Ошо иптәш була инде кисә мин һеҙгә һөйләгән егет, — Степан Степанович, инеп сәләм биргән Абдрахманға стена ҡырынан урын күрһәтте.

Абдрахман артынса уҡ Совет кәнсәһенә ауыл халҡы араһында актив хисапланып йөрөгән бер нисә ярлы килде. Улар ҙа стенаға терәлгән эскәмйәнән урын алды. Үҙ ҡаршыһында өҫтә йылтырап-йышылып бөткән эскәмйәләге кешеләргә диҡҡәт менән текләп ултырған Степан Ильичта йәлләү, ләкин килеүселәрҙең ябыҡ биттәрендә өмөтлө, яҡты сырай һыҙаттарын күреп, ғорур хисе уянды. «Бынауы кәүҙәле мосолмандың ғына өҫтө-башы ярарлыҡ, ә ҡалғандары... Аяҡтарында — тумаҡ башлы урыҫ сабатаһы, өҫтәрендә биленән йүкә менән быуылған ала-сола зипун. Баштарында һарыҡ тиреһенән тегелгән тышһыҙ ҡолаҡсын, ә тегенең шинелен һыпырып алһаң, ул да шул сүрәттә ҡаласаҡ. Әйткәндәй, уларҙың тышҡы рәүеше генә түгел, эске тойғолары ла бер — бөтәһе лә Совет власына өмөт бағлап, уның өсөн аҙаҡҡы сиккә еткәнсә көрәшергә әҙер», тип үҙенсә фекер йөрөттө ул.

Степан Степанович — ауыл халҡының телендә Дедко — алдында быҫҡып ятҡан кәзә тояғын усы эсендә тыҙып һүндерҙе лә аяҡ үрә баҫты, һарғылт битенә етдилек йүгертеп, ҙур тамаша алдына сыҡҡан шикелле бер-ике тапҡыр тамаҡ ҡырып алды.

— Иптәштәр! Һеҙҙең алда партияның Урал губернаһы вәкиле иптәш Афиногенов Степан Ильич ултыра. Һүҙҙе уға бирәм, — тип Совет председателе йылмайғандай итеп вәкилгә ҡараш атты ла урынына кире ултырҙы.

— Иптәштәр! Беҙҙең йәш Совет республикаһы ғәйәт ауыр осор кисерә. Эске һәм тышҡы дошмандарҙың көслө баҫымына һәм саботажына ҡарамаҫтан, Рәсәй пролетариаты һәм ауылдың ярлы-ялпыһы ете йыл һуғыш осоронда емерелгән завод-фабрикаларҙы, тимер юлдарҙы ҙур энтузиазм менән аяҡҡа баҫтырырға кереште. Ауыл хужалығы ла шундай уҡ емерек хәлдә. Быға Волга буйындағы, Урал губерналарында халыҡтың аслыҡтан күпләп ҡырылыуын да өҫтәһәк, мәсьәлә асыҡ. Аслыҡ Рәсәйҙең утыҙ дүрт губернаһын солғап алды бит. Әйтеүе генә анһат. Быны оҙаҡ һөйләп тороуҙың, минеңсә, кәрәге юҡтыр, тип уйлайым. Һеҙҙең үҙегеҙҙә лә ошо йотта асыҡҡан, үлгән кешеләр булғандыр бит? — Вәкил диҡҡәт менән тыңлап ултырған кешеләрҙән яуап көткәндәй тынып ҡалды.

Стена буйындағы ярлылар, иҫке зипундарын ҡыштыр-

латып, ултырған урындарында ҡуҙғалышты. Бер нисәһе: «Ниңә, әллә күрмәйһегеҙме?» тигәндәй, үҙҙәренең ҡарайып ҡатҡан устары менән ас, эскә батҡан яңаҡтарын һыйпаны.

— Әһ, иптәш вәкил! — Араларынан иң ҡарты тауыш бирҙе. — Булмай буламы һуң? Ауылдың өстән бер халҡы астан ҡырылды. Совет власының иң ышаныслы кешеләрен юғалттыҡ, — тип ҡаты көрһөнөп ҡуйҙы.

Иң ситтә бөтә кешенән аша ҡарап ултырған Игебаев, киреһенсә, кемдәрҙәндер тартынған кеше һымаҡ, үҙенең шлемын йомарлап тотҡан көрәктәй ҡулдарын аяҡтары араһына тыҡты, башын аҫҡа эйҙе. Һүҙһеҙ ҡалған губерна вәкиле лә, эргәһендәге ярлылар ҙа үҙҙәренең ҡарашын унының туҡ битенә, ҡалын елкәһенә төбәгәндәй тойолдо. Уларҙың был үпкәле тойолған ҡарашы Абдрахман йөрәгенә башаҡлы уҡ булып ҡаҙалды, вәкил үҙ һүҙен яңынан һалмаҡ ҡына башламайынса, Абдрахман эйелгән башын өҫкә күтәрә алманы. Ул эстән генә асыуынан һый-хөрмәт менән тулы Белов ҡарттың өҫтәлен иҙәнгә түңкәреп һуғырҙай булды. Тик уны вәкилдең һүҙҙәре генә бер аҙ тынысландырғандай итте.

— Бына шулай булғас, беҙҙең барыбыҙға ла, ең һыҙғанып, йәш Совет республикаһын аяҡҡа баҫтырыу бурысын үтәп сығырға кәрәк.

Баяғы ҡарт яңынан үҙ тауышын сығарҙы.

— Ә нисек? Ни формала? Уны ҡоро һүҙ менән генә бойомға ашырып булмайҙыр бит?

— Әлбиттә. Бына шуға күрә лә партия продразверстканан продналогҡа күсеү мәсьәләһен ҡуйҙы. Ул хаҡта һеҙгә аңлатҡандарҙыр бит? — Степан Ильич Совет рәйесенә ҡараш ташланы.

— Беҙ партячейка исеменән бер-ике тапҡыр йыйылып һөйләшкәйнек, ләкин әлеге лә баяғы шул аслыҡ сәбәпле, халыҡтың барыһын да йәлеп итә алманыҡ, — тип ултырыусыларға үкенгәндәй һораулы ҡараш атты.

Теге олораҡ кеше яңынан һүҙ ырғытты:

— Беҙ тик ятһаҡ та, кулактар йоҡламай. Совет власы сәйәсәтенең асылын ауыл кулактары халыҡ араһында күптән аңлатып сыҡты инде. Билдәле, үҙҙәренә ҡулайлаштырып, ҡайһы бер телле-тешле ярлыларҙы Андрей Иванович үҙ өйөнә саҡырып, араҡы менән һыйлау түгел, газетаһын уҡып ишеттергән, өҫтәүенә, үҙ теле менән аңлатып та сығарған.

Быны ишетеп ултырған Абдрахмандың битенә тағы ҡапыл эҫе һыу бөркөгән шикелле булды, яҫы маңлайына

бөрсөк-бөрсөк тир бәреп сыҡты. Уны ашарҙай булып, сәнскеле ҡарашын төбәгән Степан Степанович түҙмәне:

— Ә һин, беҙҙең актив, иптәш Йегебаев, ҡайҙа булдың был мәлдә? Ни эшләп контр Андрей Ивановичҡа көсөң етмәй, ә? — тип тауышын ҡатырыбыраҡ һорап ҡуйҙы ла яуап көттө. Абдрахман буҙара башлаған йөҙөн ҡалҡытты ла:

— Был турала мин тәүге тапҡыр ишетеп ултырам, — тиеүҙән башҡа яуап тапманы.

Ике Степан да үҙ-ара һүҙ ҡуйышҡандай:

— Да-а-а, — тип һуҙҙылар ҙа, «был бик насар бит, ни эшләйбеҙ?» тигәндәй, бер-береһенә ҡараштылар.

— Ә һеҙ ҡайҙа һуң, иптәш Дедуля? Һин ауыл Советы председателенән тыш партячейка секретары ла түгелме һуң? Быны нисек аңларға?

— Быны аңлауы бик ябай, иптәш вәкил.

— Йә, нисегерәк?

— Беҙ бөтә ячейкаға һәм ауыл Советына волостан Бөтә Рәсәй Башҡарма Комитеты газетаһы «Известия»ны бер дана алдырабыҙ, сөнки волком беҙгә шунан артығын бүлә алмай. Ә Совет күләмендә кулактар ун дана алдыралар. Уларҙыҡы беҙҙекенән биш көн алдан килә.

— Йә, йә, шул бер үк почта йөрөмәйме ни Советҡа?

— Беҙҙең почтаны Совет почтальоны арыҡ ат егеп ташый, ә улар сиратлап, газета Ҡыҙыл станицаһына килеп етер-етмәҫтән, үҙ аттары менән алып килә.

— Кемдәр улар?

— Әйттем бит, ауыл кулактары тип. Шулар инде.

— Уларға корреспонденцияғыҙҙы алып ҡайтыуҙы йөкмәтеп булмаймы?

— Был эш бит уларҙың үҙ ихтыярында. Теләһәләр — баралар, теләмәйҙәр икән, мейес башында яталар, тик уларҙы бер нисек тә мәжбүр итеп булмай.

— Бер һүҙ менән әйткәндә, давай уйлашайыҡ әле, был миңә һис тә оҡшамай, ошоноң ише күп мәсьәләләр менән волкомға барып һөйләшмәй булмай, — вәкил ситкә ҡарап, уйға ҡалды.

— Бына ошо волком инде «беренсе апрелдән, сәрмәйә булмау сәбәпле, ауылдарға бушлай «Известия» таратыу туҡтатыла» тип ҡағыҙ ебәреп ятҡан ойошма.

— Нишләп?

— Нишләп буламы ни? Һәр газетаға йыллыҡ яҙылыу хаҡы алтынлата илле тин тора. Ул сумманы волком ҡайҙан алһын? Юҡ, Бөтә волкомда тик бер генә кеше — уның яуаплы секретары иптәш Кривобоков ҡына дәүләт жалуньеһында тора бит. Делопроизводителе бар ине, уныһын

да аҡса юҡлыҡтан ҡыҫҡарттылар. Ул һеҙгә мәғлүмдер тип уйлайым, Степан Ильич. — Председатель вәкилгә аңшайып ҡараны.

— Мәғлүм, мәғлүм. Бөтәһе лә шул ярлылыҡ касафаты. — Вәкил ишеккә ҡарап көрһөндө лә тәмәке төрә башланы. Ҡемдәндер үс алғандай, ул ике уртын эскә батырғансы тәмәкеһен һурҙы ла унын күгелйем төтөнөн өҫкә өрҙө. — Туҡта, сабыр ит, Степан Степанович, бында һинең ҡайғы-хәсрәтең күп булыр. Хәҙергә барыһын да гелгә алмай тор. — Ул, өҙөлөп ҡалған еп осон ялғаған шикелле, туҡталған урындан тағы яңы иҡтисади сәйәсәт, аҙыҡ налогының асылын аңлатыуға күсте. — Бына шуға бинаэн, беҙ быйыл бөтә ярлылар тип әйтә алмайым, ләкин күбеһенең үҙе өсөн иген сәсеүен тәьмин итергә бурыслы.

Былай ҙа үҙенә-үҙе асыуы ҡабарып ултырған Абдрахман түҙмәне, ҡалтырауыҡлы тауыш менән:

— Ул һеҙ әйткән ярлылар быйыл яҙғы сәсеүҙе ниндәй тартыу көсө, ни сәсеп башҡарып сығырға тейеш? Был тәңгәлдә һеҙ нисегерәк фекер йөрөтәһегеҙ? — тип һораны.

Шуны күптән көткәндәй, Степан Ильич ярлыларҙың көнкүрешен ҡырҡа яҡшыртыу мәсьәләһенә Совет власы күрәсәк сараларҙы ентекләп барланы. Эскәмйәләгеләр йәнә хәрәкәткә килде. Күпте күргән эскәмйә бер нисә тапҡыр нәҙек тауыш сығарып шығырлап ҡуйҙы.

— Быныһы бик шәп, ләкин бер ҙә осона сығырлыҡ түгел бит әле. Беҙ ни, ғүмеребеҙҙә бер таяҡ ергә түбәтәй ҙә иген сәсмәгән кешеләр, әҙерәк аптырап та ҡалдыҡ әле. Ярай, ул орлоҡ ссудаһын, сәсеү ҡорамалдарын үҙ кооперативыбыҙ аша алырбыҙ ҙа ти, ләкин һабан тартыр аттарҙы Мәскәүҙән алып килмәҫтәр ҙәһә...

Степан Ильич, ҡаршыһында ултырған кешеләрҙең бермә-бер ҡыҙыҡһыныуынан кинәнеп, йәтеш кәүҙәһен артҡа саңҡайтты ла:

— Бик тә урынлы һорау, — тип хуплап ҡуйҙы. — Беҙ һеҙгә кредитҡа биреләсәк аттарҙы урындағы кулактарҙан твердый хаҡ менән һатып алырға тейешбеҙ. Ул ғына ла түгел, ныҡ йонсоған ярлыларға бер-икешәр дисәтинә иген сәсеп биреүҙе беҙ шул уҡ кулактар өҫтөнә йөкмәтергә самалап торабыҙ. Үҙ эш ҡорамалдары, ат-сбруйы менән утыҙ-ҡырҡ дисәтинә ер эшкәртеп биргәндән, һеҙҙең сере гән кулактарығыҙҙың бер нәмәһе лә төшөп ҡалмаҫ, тип уйлайым. — Хуплау көткәндәй, вәкил ауыл Советы председателенә боролдо.

— Шулай, шулай. Уларҙы башта үҙ теләге менән, әгәр инде ипкә килмәһәләр, мәжбүри ҡушырға кәрәк, — тине уныһы.

Эскәмйәлә ултырғандар ҙа:

— Бик дөрөҫ, бик хуп, — тип шаулашты.

Абдрахман эстән генә: «Әгәр быйыл яҙғы сәсеүгә барып етергә насип булһа, иң башта ғүмер буйы Андрей Ивановичҡа бил бөккән ҡустыларына иген сәсеп бирәм», тип үҙ-үҙенә вәғәҙә биргәндәй уйлап алды. Яҡшы хәбәрҙән әҫәрләнеп, эскәмйәнән берәм-берәм тора башлаған кешеләрҙе Степан Ильич яңынан үҙ урындарына ултыртты.

— Эштең иң мөһиме тороп ҡалды бит, иптәштәр. Бына ошо ҙур бурыстарҙы атҡарып сығыу өсөн беҙгә ышаныслы, бер табандан тороп Совет власының иҡдисадын яҡлай алырлыҡ кадрҙар кәрәк. Иң башта — коммунистар. Ауыл Советы ҙур ғына булыуға ҡарамаҫтан, Совет эргәһендәге партячейка бик бәләкәй, һәр ауылға бер коммунистан да кәмерәк тура килә. Бына һеҙҙе, ошо ауылдың активистарын, беҙ, һеҙҙең партячейка секретары менән партия сафына инергә ғариза биреүҙе һорап, ошонда саҡыртып ултырабыҙ. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

## 10

Ләкин ҡаршыһында ултырыусы кешеләрҙән бер кем дә яуап бирмәне. Степан Ильич председателгә ҡараны.

— Был иптәштәр ниндәй сословиенан?

Уның һорауын аңламаған кешеләр бер-береһенә ҡараšты. Тик председатель генә:

— Дворян сословиеһынан түгел, кәнишнә, — тип көлөмһөрәне.

Вәкил аҡланырға теләгәндәй:

— Ул һорауҙы мин шуның өсөн бирәм: партияның X съезы партия сафтарын таҙартыу маҡсатында уға яңы ағзалар алыуҙы ҡырҡа ҡыҫҡартты, ләкин ҡайһы бер ячейкалар, бигерәк тә ауыл ячейкалары, партчистка осоронда ашараҡ һуҡтырып ташланы. Бына һеҙҙәге кеүек ҡайһы бер ячейкалар бер нисә ағзаға терәлеп ҡалды, ә ҡайһы берҙәре бөтөнләй йәшәүҙән туҡтаны. Беҙҙең маҡсат — бына шуларҙы ҡайтанан аяҡҡа баҫтырыу. Был — бер. Икенсенән, был һорауға һис тә аптырарлыҡ урын юҡ. Рәсәй территорияһының борсаҡ һымаҡ һибелеп ятҡан ауылдарында хәҙерге көндә Совет власының ғәҙел язаһынан ҡасҡан, крәҫтиән сәкмәненә төрөнөп йөрөгән элекке дворян ҡалдыҡтары аҙмы ни?

— Һеҙҙең фекерегеҙгә мин риза. Тик был кешеләр ундайҙарҙан түгел. Һүҙемдең хаҡлығына хәҙер үк тамға ҡуя алам. Ышанмаһағыҙ, ана, уларҙың ҡулдарына ҡарағыҙ, — тип председатель халыҡ яғына ымланы.

Ысынлап та уларҙың йылтырап бөткән тубыктары өҫтөндә яткан ҡарайып ҡатҡан имән бармаҡлы, күгәргән тамырҙары һытылырҙай булып ташҡан көрәктәй ҡулдарына ҡарап, уларҙың сословиеһын белеү ҡыйын түгел ине. Степан Ильич уларға текләп ҡарап ултырҙы ла:

— Шулай ҙа һөйләшеп алайыҡ әле иптәштәр менән,— тип эскәмйәнең алғы башында ултырған Абдрахманға төбәлде. — Һеҙ, иптәш, яңы ғына армиянан ҡайтҡан ҡыҙыларммеецтыр инде? Буй-һынығыҙҙан, өҫ-башығыҙҙан күреп торам, — тип өндәште.

Абдрахман аяҡ үрә баҫып, киң яурындарын турайтып, күкрәген алғараҡ сығарҙы ла һаңғырауыраҡ ҡуйы тауыш менән яуап бирҙе:

— Так точно! Врангель фронтында ҡаты яра алып, госпиталдән ҡайтыуыма ярты йыл да тулмай. Үҙем ярлы крәҫтиән ғаиләһенәнмен.

Степан Ильич уның аныҡ яуабынан, бигерәк тә уның мыҡты кәүҙәһенән һоҡланғанын йәшерә алмай, үткер күҙҙәрендә өмөт сатҡылары уйнатты. Степан Степанович уның ҡолағына ниҙер шыбырлағас, вәкил киң йылмайып:

— Молодец, кәләшең дә бар икән. Нишләп уны, күҙгә-башҡа күрһәтмәй, кулак горницаһында йәшереп тотаһың? Етмәһә, сәсәккә, ҡыҙылсаға укол эшләү курсын да бөтөрөп сыҡҡан шәфҡәт туташы икән. Ятҡырма, ятҡырма, — тип ул өҫтәлгә бармаҡ сиртеп алды.

— Әйткәндәй, Степан Степанович, әгәр мин волостан берәр жалуньялы штат юллап ала алһам, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн ауылда родхата асып ебәрербеҙ. Екатеринбургка ҡыҫҡа сроклы курсҡа ла ебәреп ҡайтарһаҡ, бына тигән бер медработник килеп сығар, — тип һөйләнеп алды.

Уның көтөлмәгән был хәбәре баҫып торған Абдрахмандың йәнен ялмап алды. Ул саҡ-саҡ ҡына: «Һин, иптәш, кеше бисәһе өҫтөнән командалыҡ итмә. Ҡайҙа тоторға, нимә эшләтергә — уныһы беҙҙең эш», тип йәбешеп яғалашырға ла уҡталғайны, нисектер тыйылып ҡалды.

— Тимәк, һеҙ партия сафына беренсе категория[1] хисабынан алынасаҡһығыҙ. Ә үҙегеҙ нисек ҡарайһығыҙ һуң был мәсьәләгә?

Абдрахман уның мәкерле һорауына тиҙ генә яуап ҡай-

---

[1] Партияның X съезы ҡарары менән партияға ағзалар ҡабул итеүселәрҙе өс категорияға бүлделәр. Беренсе категория — эшселәр һәм эшсе-крәҫтиәндән сыҡҡан ҡыҙыларммеецтар, икенсе категория — крәҫтиәндәр һәм кустарҙар, өсөнсө категория — башҡалар (хеҙмәткәрҙәр һ. б.). Ошоға ярашлы рәүештә кандидатлыҡ сроктары ла төрлөсә билдәләнде.

тара алманы, урынына ултырҙы, тик тиҙ генә тыныслана алманы. Ҡапыл килеп тыуған был һорау уны әллә ниндәй хистәргә сорнаны, ул үҙен ике юл сатлығына килеп терәлгән, артабан ҡайһы юлдан атлауын дауам итергә белмәй аптырап ҡалған юлсы һымаҡ тойҙо. Эйе, ләһә, партия сафына инеү теләге күңелендә юҡ түгел ине, тик был теләк күк көмбәҙендә ҡабынған өмөт йондоҙо булып ҡына төҫмөрләнә ине. Ни эшләргә? Ул баш тартһа, үкенмәҫме һуң? Ни эшләп үкенә ти? Ошоға тиклем Совет власын яҡлап түккән ҡаны, хәләл көсө... Абдрахман үҙе лә һиҙмәҫтән урынынан ырғып торҙо.

— Иптәш вәкил, мин риза. — Абдрахман урынында һалдаттай ҡатып ҡалды. Битенә эске тулҡынланыуҙан ваҡ ҡына ҡыҙыл таптар ҡалҡып сыҡты, эске көсөргәнештән көс-ғәйрәт бөркөп торған мыҡты кәүҙәһе хәҙер үк ут упҡынына ташланырға әҙерләнгән фиҙәкәр батырҙы күҙ алдына баҫтырҙы.

Степан Ильич йәнләнеп, урынынан ҡалҡынды. Бер нисә тапҡыр иҙәндә аллы-артлы йөрөп, кире урынына ултырҙы.

— Молодец! Һәр саҡ ҡыйыу булырға кәрәк. Өйөңә ҡайтып, унда теге купец менән кәңәш итешәһеңме ни? Бик тә дөрөҫ. Ултырып тор. Әңгәмәне дауам итәйек әле, — тип ул Абдрахман янындағы бик йәш булыуына ҡарамаҫтан, ҡаҡса битен сырыш һыры ҡаплаған тәбәнәк кешене торғоҙҙо. Ул тышһыҙ кәпәсен ҡулына йомарлап тотто ла аяҡтарын алмашлап баҫты.

— Һеҙ кем? — тигән һорауға, егет ҡапыл ғына:

— Минме? Мин Иван Кочергин, — тип яуапланы.

— Иван Кочергин икәнегеҙҙе беләм, — Степан Ильич үҙ алдында ятҡан исемлеккә күҙ йүгертеп алды.

— Сословиеғыҙ, йәғни социаль сығышығыҙ?

— Сығыш ни шул барыбыҙҙың да берҙер инде — атайәсәйҙән тыуғанбыҙ.

Бөтә кеше лә ҡысҡырып көлмәһә лә, уның был бер ҡатлы яуабынан күптәрҙең ауыҙы йырылды.

— Уныһы шулай. Үҙегеҙ ҡайҙан, ниндәй һөнәр кешеһе?

— Сығышым Екатеринбургтан. Атайым да, үҙем дә суйын заводында эшләнек...

— Был яҡтарға нисек килеп сыҡтығыҙ?

— Аслыҡ ҡыуҙы. Революциянан һуң, завод емерелгәс эш ҡалманы, шуның өсөн эшселәрҙең яртыһынан күбеһе Урал буйындағы ауылдарға таралды. Илдә йотлоҡ китте, ә ул ҡалаларҙа элегерәк башланды. Бына шулай элекке йыл Обручевкала төпләндек.

— Ә бында шөғөлөгөҙ ниндәй?

— Тас, биҙрә ямайым, йәбештерәм, сепарат, сәғәт төҙөтәм.

— Ҡире заводҡа ҡайтырға ниәт юҡмы?

— Ул ғынамы? Төн йоҡоларын йоҡламай һағынам, серемгә китһәм, заводым күҙ алдына килеп баҫа. Төтөн еҫен, шыйыҡ аҡҡан суйын еҫен һис кенә лә онота алмайым, — Кочергин, танауын мырш-мырш тартып, үҙ ҡайғыһын асыҡтан-асыҡ һөйләп алды.

— Ә партияға инеү мәсьәләһенә нисек ҡарайһығыҙ?

— Ыңғай ҡарайым. Миңә күп уйлайһы юҡ, тик тиҙерәк хәл итергә кәрәк. Бында атай-әсәйҙең кем булыуы хаҡында ҡыҙыҡһындығыҙ, буғай. Атай 1905 йылғы революцияла ҡатнашҡаны өсөн Себергә оҙатылды. Үпкә ауырыуынан шунда һөргөндә үлеп ҡалды. Бына шул, — тине лә Кочергин бойоҡ күҙҙәре менән ян-яҡҡа ҡараны. «Башҡа һорауҙар юҡмы?» тигәндәй ул вәкилгә төбәлде. Степан Ильич аҫҡа эйелгән башын ҡалҡытмай ғына, тауышына йәлләү биҙәктәре өҫтәгәндәй:

— Да, яҡташ, да. Яҙмыш бына ҡайҙа осраштыра бит. Аслыҡ, аслыҡ, билдәле, ул кешенең бер туған апаһы түгел, үгәй әсәһе, йәберләп, тыуған тупһаңдан да ҡыуа. Минеңсә, иптәш Кочергин — бик йәтеш кандидатура, — тип Степан Степановичҡа боролдо.

Ә тегеһе:

— А как же! Бында бит әҙ-мәҙ кешеләрҙе, уларҙың тыныуҙарын һиҙеп йөрөлә бит инде, — тип ризалыҡ белдерҙе.

Степан Ильич яңынан исемлеккә күҙ йүгертеп сыҡты ла Кочергин эргәһендә ултырған бөҙрә сәсле, ҡыҫҡа ғына ерән һаҡал-мыйыҡ ебәргән, төпкә төшкән йәшел күҙҙәре менән тишерҙәй булып ҡарап ултырған егерме биш йәштәр самаһындағы ирҙе торғоҙҙо.

— Мин Рыбаков Михаил булам. Мин дә Екатеринбургтан. Кочергин менән икебеҙ бер заводта эшләнек, шул уҡ сәбәптәр арҡаһында ошонда килеп һыйындыҡ, — тип тәҙрә аша Обручевка урамына ҡулын һуҙҙы.

— Шөғөлөгөҙ ни?

— Тимерсе. Заводта ла тимерсе булып эшләй инем. Унда сүкеште пар менән һуҡтыра инек, ә бында һандалды ҡул менән тапайбыҙ, — тип усы ҡайышланған бәләкәйерәк табалай ҡулдарын йәйеп күрһәтте.

— Эш бармы һуң?

— Тимерсегә эш ҡайҙа ла етә.

— Шулай ҙа?

— Бына хәҙер яҙ яҡынлаша. Тырма тештәре ослайым, һабан төрәндәрен тапайым, валекка элгес дүңгәләктәр эш-

ләйем. Аслыҡ булһа ла, халыҡ киләсәген уйлай — сәсеүгә әҙерләнә, йәшәргә тырыша.

— Уныһы шулай, дөрөҫ.

Михаил әүәҫләнеп дауам итте:

— Бында килгәс, көмөшсө һөнәренә лә өйрәндем. Көмөш иретеп, ҡатын-ҡыҙҙарға муйынсаҡ, балдаҡ, беләҙек тә һуғып ебәрәм. Ҡайһылай итәһең, нисек тә йәшәргә кәрәк бит, — тип нимәһендер йәшергән кешеләй, Совет председателенә ҡарап ҡуйҙы. Ә уныһы Рыбаковты аңлаған төҫлө баш һелкте.

— Беҙҙең был егет бар яҡҡа ла булдыра. Бында килеп төпләнгәс, бына тигән ауыл сибәренә өйләнеп алды.

Рыбаковтың йөҙөндә бәхет нурҙары сағылғандай булды.

— Молодец, молодец. Ул да кәрәк. Завод төшөңә кермәйме һуң?

— Кереү менән нишләйһең? Минең кендек, күрәһең, Обручевкаға йәбеште. Бисә бер ҡайҙа китергә лә ризалыҡ бирмәй. Был турала һүҙ ҡуҙғатҡайным, өйҙә бик ҡаты буран сыҡты, бигерәк тә ата-әсәләре ҡаршы төштө. Беҙҙең ише завод эшселәрен улар: «Берәҙәк, елғыуар» тип кенә ебәрәләр.

— Крәҫтиән психологияһы билдәле инде. — Бер аҙ уйланып ултырғандан һуң, Степан Ильич үҙ-үҙенә әйткән шикелле һөйләнеп алды. — Бына был эшселәрҙең, завод-фабрикаларҙы ташлап, ауылдарға таралыуы сәйәси йәһәттән шәп күренеш түгел, әлбиттә. Күңелһеҙ факт был. Эшселәр синыфының һан яғынан да, сифат яғынан да тарҡалыуына килтерә, пролетар диктатураның социаль нигеҙен, таянысын ҡаҡшата. Иптәш Ленин был турала үткән съезда бик аныҡлап әйтеп, партияны ныҡ ҡына киҫәтеп үтте. Егерме беренсе йылда бөтә Рәсәй күләмендә йөҙ ҙә ун алты мең тонна ғына суйын иретелгән. Был бит һуғыштан алда иретелә торған суйындың өс процентын ғына тәшкил итә. Аҡылға ла һыйырлыҡ түгел был һан. Бер яғынан быға сәбәп булып һуғыш нәтижәһендә завод-фабрикаларҙың емерелеүе торһа, икенсе йәһәттән, квалификациялы эшселәрҙең бына ошолайтып ауылдарҙа ҡомған-самауыр төҙәтеп, көмөш беләҙек, балдаҡ һуғып йөрөүҙәренән килә. Ошо хәл беҙҙең йәш республика өсөн бик тә насар күренеш, илдең индустрияһын аяҡҡа баҫтырыуға ҙур ҡамасау булып тора.

Степан Ильич ҡаршыһында ултырған завод кешеләренә үпкәләгән шикелле, оҙаҡ ҡына текләп ултырҙы. Бөтәһе менән дә әңгәмә тамамланғас, дөйөм һығымта яһап:

— Ну что же, иптәштәр, бик һәйбәт. Партияның хә-

ҙергә сәйәсәтен аңларлыҡ, ғәмәлгә ашырыу өсөн көрәшерлек егеттәр һеҙ. Был иптәштәрҙе, минеңсә, партияға тәҡдим итергә ярай. Тик бына уларға рекомендаторҙар табып булырмы? — тип, ул партячейка секретарына һорәулы ҡараш атты.

— Табырбыҙ. Иптәштәргә партия сафына инеү өсөн өс йыллыҡ стаж менән өс коммунистың булыуы мохтаж. Береһенә — мин, икенсеһенә — һеҙ, өсөнсөһөнә хәҙер үк үҙебеҙҙең бер коммунисты табып килтерермен. Тик уларҙың барыһынан да ячейка исеменә ғариза кәрәктер бит?

— Эйе, эйе. Барығыҙҙың да ғариза яҙырлыҡ ҡына белемегеҙ барҙыр бит? Нисек тә ғаризаны үҙ ҡулығыҙ менән яҙырға тырышығыҙ. Төшөндөгөҙмө? Һеҙгә хәҙер берәр бит ҡағыҙ таратам. Бында яҙаһығыҙмы, әллә өйҙә яҙып килтерәһегеҙме?

— Өйҙә, өйҙә, — тиеште эскәмйәлә ултырыусылар.

— Тик, егеттәр, һуңлатмағыҙ. Бөгөндән дә ҡалмай килтерегеҙ, сөнки бер нисә көндән партия йыйылышында ҡарағас, мин волосҡа алып китәм, — тип, «эш тамам» тигәнде белдереп, Степан Ильич урынан торҙо ла буласаҡ большевиктарға берәр бит ҡағыҙ таратып сыҡты.

Абдрахман үҙенең партия сафына инергә ғариза биреүен өйҙәгеләргә әйтмәне. Мәгәр яҡындары Абдрахмандың тышҡы ҡиәфәтенән генә түгел, хатта эсендә лә ниндәйҙер үҙгәреш, йөҙөндә ниндәйҙер тәүәккәллек, ҡыйыулыҡ һәм етдилек һыҙаттарының балҡыуын, һиҙемләһәләр ҙә, был хәлде аныҡ ҡына ни нәмәгә юрарға белмәнеләр.

...Бөгөн Маргаританы ла Советҡа саҡырып килгән малайҙарҙың үҙ артынан ишеген ябыуы булды, өйҙә ғауға ҡупты, ел-дауыл күтәрелде. Ғаиләлә былай ҙа үҙ-ара мөнәсәбәттең тартынҡы ҡылы ошо хәбәрҙән һуң зыңлап өҙөлдө. Ҡурҡышынан ни эшләргә белмәй ишек янтауына һөйәлеп торған Маргаритаға ҡыҙмаса Андрей Иванович уҫал ҡараны ла тәфтиш башланы.

— Шул ыштанһыҙҙар менән ирендең көн дә тигәндәй бушҡа ваҡыт үткәреп йөрөүе етмәгән, инде сират һиңә еттеме ни? Уларға һин ни нәмәгә хәжәт булыуың мөмкин? — тип ул яҙғы тап төшә башлаған тумалаҡ битенә ғәжәпләнеү сырайы йүгертеп, зәңгәр күҙҙәрен ҙур асҡан көйөнсә ҡатып ҡалған Маргаритаға осоп ҡунды. — Шулай инде, коммуния булғас бөтәһе лә дөйөм, бергә ойошҡан булырға тейеш, малы ғына түгел, бисә-сәсәһе лә, — Андрей Иванович өҫтәлдә һүҙһеҙ генә борщ ашап ултырған Абдрахманға төрттөрҙө.

Аш Абдрахмандың тамағын ялҡын булып яндырып төштө, ләкин ул ҡулдарын бөйөрөнә таянып торған Ан-

дрей Ивановичҡа ләм-мим өндәшмәне. Уның ҡарауы Анастасия Петровна мейестәге итле сүлмәген төпкәрәк этҡәс, ҡоромланған ҡулдарын билендәге таҫтамалға һөртә-һөртә, ире янына килеп баҫты һәм шунда уҡ һүҙгә ҡыҫылды:

— Конечно, өй эсенән ул Советтарына бер кеше йөрөгән етмәгәнме? Бына битһеҙҙәр, хәҙер ирен генә аҙҙырыу етмәгән, ҡатынын да саҡырырға керешкәндәр. Юҡ, ул ҡатын-ҡыҙ эше түгел, ана, кәртә-ҡураһында һауып эсер һыйыры ғына түгел, мал тоҡомо булмаған ҡыутомшоҡ Дедко үҙ бисәһен саҡыртһын. Ике аяғындың береһен атлайһы булма.

Тамам аптыраған Маргарита, ярҙам көткәндәй, өмөт саҡылары һирпеп, ғәжәпләнгән күҙҙәрен иренә текәне. Уны ни өсөн саҡырғандарын белеп ултырған Абдрахман ҙур семәрле ҡалағын икмәк һыныңы өҫтөнә һалды ла, һәр бер һүҙенә мисәт баҫҡандай, һәлмәк кенә итеп:

— Совет власы — ул беҙҙең власть. Унда һине, моғайын, аҫырға саҡырмай торғандарҙыр, бар, һис шикһеҙ бар, — тип урынынан торҙо.

Өй хужалары бер-береһенә һораулы ҡараш атты. Асыуынан сығырынан сығып ярһыған Белов ҡарт ҡаты һүгенде лә уфтанып мөйөштәге һандыҡ өҫтөнә ҡерәлде. Аяғындағы быймаларҙы һыпыра тартып алғас, Маргаританы һуғып осорорҙай булып, ике быймаһын ҡуша тотоп, мейес артына ырғытты. Ҡобараһы осҡан Маргарита иренә килеп һыйынды, ә Анастасия Петровна, ҙур һандыҡ өҫтөндә аҡ ойоҡ кейгән аяҡтарын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, үксәләре менән ул һандыҡтың ҡабырғаһын тызыған Андрей Иванович эргәһенә баҫты.

— Бына бит, Маргарита, һеҙҙең шундай еңел холоҡлолоҡ өй хужаһын ниндәй хәлгә төшөрҙө, маңлайы ут һымаҡ яна, кабы өйәнәге тотоп китмәгәйе, тип ҡурҡам,— тип йыш-йыш уфтанып, иренең ҡалтыранған башына ҡулын һалды.

Былай эстән генә бисәһенең Советҡа саҡырылыуын билдәле, Абдрахман үҙе лә бик хуплап бөтөрмәй, сөнки бынауындай ваҡытта уны ҡайҙалыр ситкә яңғыҙын оҙатып ебәреүҙән ҡурҡа ине. «Заманалар бит ҡатмарлы, вокзал сираттарында ҡыҫылып, ҡатын бер бәләгә осрап ҡуймағайы», тип уйлана ине ул. Ләкин бөгөн ошо уңай менән өйҙә килеп сыҡҡан низағтан һуң үҙенең ҡарашын ҡырҡа үҙгәртте. «Ничего, бер егерме-утыҙ көнгә ул да, мин дә үлмәбеҙ әле, ебәргән ерҙәренә барһын, уҡып ҡайтһын, бында хужаларҙа аҫрау ҡыҙ хоҡуғында йөрөгәнсе, ситтә әҙерәк күҙе асылып, бер һөнәргә өйрәнеп ҡайтыр», тип хәл итте. Ул урынынан етеҙ генә һикереп торҙо ла:

— Әйҙә, Маргарита, йәһәт кенә кейен дә бергә барабыҙ, — тип, бөтә өйҙө ҡаплағандай, ҙур булып иҙән уртаһына баҫты.

Маргарита: «Һеҙ күрҙегеҙме, минең бер ниндәй ҙә ғәйебем юҡ бит», тигән шикелле, мөлдөрәп, хужаларға ҡараны.

— Давай, давай, йәһәтерәк, — Абдрахман Андрей Иванович хәстәрләп биргән, ҡыҫма билле ҡара тунын сөйҙән алып бисәһенең яурынына һалды.

Асыулы күҙҙәрен секрәйтеп күҙәтеп ултырған Андрей Иванович һандыҡ өҫтөнән төштө лә, иҙәнгә баҫып, кәүҙәһен казактарса «во фронт» турайтты. Ауыҙын бер яҡҡа салшайтып, мыҫҡыл ҡатыш хихылдап көлдө.

— Әйҙә-әйҙә, егет. Бисәнде үҙ ҡулың менән ас коммундарға тотторop ҡайт. Улар былдай туҡ ҡатынды күргәндәре юҡтыр...

Шартлар хәлгә еткән Абдрахман: «Етер!» тип ҡысҡырҙы ла, ҡартты мөйөшкә йығa яҙғансы этеп, тупһа аша атланы.

Советта һөйләшеү асыҡтан-асыҡ барҙы. Ҡүркәм кәүҙәле, һылыу урыҫ ҡатыны Совет бинаһына Абдрахман артынан килеп ингәс, Степан Ильич киң йылмайып, урынынан торҙо. Үҙенең таушалып, ала-сола уңа башлаған тужуркаһының салғыйын тартҡылап, төҙәтенде. Маргарита ултырыр-ултырмаҫтан ике ҡулын һоноп йылы ғына күреште лә күптәнге танышын осратҡан шикелле туп-тура һүҙгә күсте.

— Һеҙҙе тап шулайҙыр тип күҙ алдына килтерә инем. Мөләйем, матур ханым булырға тейештер, тип уйлағайным, сөнки «во!» тигән ирҙең ҡатыны бүтәнсәрәк булыуы мөмкин түгел, — тип ул үҙенең сөсөләнеүенән Абдрахманға ла өлөш сығарҙы. Үҙ ҡаршыһында ултырған ике йәш йөрәккә Степан Ильич һағыш тулы күҙҙәрен тултырып яңынан бер ҡарап алды, нишләптер ҡарашын ситкә ташлап, башын аҫҡараҡ эйҙе.

— Маргарита, ҡәҙерлем, ауыл Советына саҡырыуҙың сәбәбен һеҙгә иптәш Игебаев күптән әйткәндер тим, — Степан Ильич башын ҡалҡытып, һиҫкәнеп, иренә һыйынған Маргаритаға баҡты.

— Юҡ, юҡ, мин бер ни ҙә белмәйем. Абдрахман әйтмәне.

— Ай-ай, иптәш Игебаев. Мин ул мәсьәлә буйынса күптән кәңәшләшеп, фекер туплап килгәнһегеҙҙер, тип уйлағайным.

— Ғәфү итегеҙ, Степан Ильич, был мәсьәлә тураһында һөйләшергә бер ҙә форсат сыҡмайыраҡ тора. Ғаиләләге

хәлде ҡырҡыулаштырмайым тигәйнем, — тип аҡланды Абдрахман.

Быны ишеткәс, Степан Ильич хатта тороп баҫты.

— Иптәш Игебаев! Ҡиреһенсә, хәҙер бөтә мәсьәләне ҡуйыртырға кәрәк. Синфи дошман менән көрәш киләсәктә лә һаман киҫкенләшә барырға тейеш. Көрәш майҙанына сыҡҡанһың икән, дошман менән йөҙмә-йөҙ килеп яғалашмайса булмай ул. Әллә һин партияға алыныуың хаҡында ла өйҙәгеләргә өндәшмәнеңме?

— Юҡ, өндәшмәнем.

Маргарита ҡапыл аптырауға ҡалды. Йәшен кеүек тәьҫир иткән яңылыҡтан уның теҙ быуындары ҡалтыранды, мәгәр ул үҙен тиҙ генә ҡулға алып:

— Абдрахман, был ысынмы? — тиеүен һиҙмәй ҙа ҡалды.

Абдрахман үҙенең бөтә кәүҙәһе менән уға боролдо, ғорурлығын йәшермәй:

— Ысын. Был — хаҡ, мин партия сафына индем, мин — коммунист! — тине.

Маргаританың алһыу бите буйлап гәлсәр йәш тәгәрәне. Ул ике ҡулын күкрәгенә һалды ла иламһырап һүҙ башланы.

— Ағайҙар, был эшкә ул үҙе лә аңламайыраҡ ризалыҡ биргәндер. Беҙҙең ошо кейемебеҙҙән башҡа бер ниндәй ҙә мөлкәтебеҙ юҡ...Андрей Ивановичтың йомартлығы арҡаһында ғына өйөндә ҡош хоҡуғында йәшәп ятабыҙ. Әгәр Андрей Иванович был шомло хәбәрҙе ишетһә, ҡабат ике аяғыбыҙҙың береһен атлатмаҫ. Бөгөн үк ул урамға ҡыуып сығарасаҡ. Ҡайҙа барырбыҙ? Кемгә барып һөйкәлербеҙ? — Йәш ҡатын ныҡлап иларға тотондо. Уны бер кем дә бүлдермәне. Бер аҙ тыныслана төшкәс, Маргарита усындағы ҡулъяулығы менән ҡыҙарған күҙҙәрен һөрттө лә Абдрахманға тура ҡарап:

— Һин, аҡыллым, онотоп та өлгөрҙөңмө ни? Бында ла ауылыңдан ҡыуылып килдек. Беҙ күпме шулай кеше тупһаһында йөрөрбөҙ?! Бына бөгөн мине Советҡа саҡырғас, Андрей Иванович беҙҙе ашарҙай булып ултырып ҡалды, өйҙә ғауға ҡупты.

Абдрахман бер һүҙ ҙә өндәшмәй ултырһа ла, «беҙ бөгөн кемгә барып баш терәргә белмәйбеҙ, сөнки улар менән бергә торорлоҡ тәҡәт ҡалманы», тип күптән бер кем менән дә уртаҡлашмаған аһ-зарын ҡатыны әйтеп һалды.

Бүлмәләге тынлыҡты Степан Степанович боҙҙо.

— Да-а, иптәш Игебаев, хәлдәр шәптән түгел икән шул. Шулай булыр ҙа. Коммунист ике кәмәнең ҡойроғона йәбешеп йәшәй алмай. Йә Совет власын күрә алмаған Ан-

дрей Ивановичтың боғаҙына йәбешәһең, йә, уға ярамһаҡланып, Совет власына, уның сәйәсәтенә ҡаршы көрәшкә сығаһың. Был осорҙа йәшәү юлы икәү генә, өсөнсөһө юҡ.— Ауыл Советы председателе, һүҙен тамамлап, тәмәке төрөргә тотонған вәкилгә ҡараны.

— Ысынлап та, йәш ғаиләнең торлаҡ мәсьәләһе ҡыйынлашты бит әле. Билдәле, Белов менән Игебаев договор нигеҙендә эш итә. Батрак сүрәтендә договор төҙөшкәндәр. Ҡағыҙ ҡағыҙ ҙа ул, ләкин ятыр-инер урындың булыуы ла бик мотлаҡ, сөнки тышта алағар. Урамда йоҡлап булмай ҙаһа.

— Йә, йә, Маргарита, һөйлә әле, ниндәй башҡорт ауылынан ҡыуып ебәрҙеләр, ә? Башҡорттар борон-борондан киң күңелле, ҡунаҡсыл халыҡ түгелме һуң? — Степан Ильич өҙөлгән ептең осон ялғарға тырышты.

— Уныһы шулай, әммә беҙ Яландан да ҡыуылып килдек.

— Нишләп?

— Сөнки Абдрахмандың миңә өйләнеүен ата-әсәләре кисерә алманы. Абдрахмандың ярҙамына бик мохтаж ҡарттар, ләкин бергә тороп булманы, ауыл халҡы ла ҡоторттто. Обручевкаға күҙ терәп килгәс, мәрхәмәтле кешеләргә тап булғайныҡ, үҙ һүҙле ирем арҡаһында тағы бәләгә тарыныҡ, — Маргарита, башына ябынған кешмир яулығының остарын ишә-ишә, эсендә ҡайнаған ҡайғы-хәсрәтен бер епкә теҙҙе. Уның бер ҡатлыраҡ зарына өҫтәл артында ултырғандар ҙа, Абдрахман да шым ғына көлөп ҡуйҙы.

Степан Ильич йомшаҡ ҡына итеп һорап ҡуйҙы:

— Маргарита, һеҙ әле, Абдрахман Андрей Ивановичтың һүҙен тыңлап ҡына йәшәһә, бәлки, беҙ ошо көнгә төшмәгән дә булыр инек, тинегеҙ. Сер булмаһа, әйтегеҙ әле, Маргарита, ул ниндәй һүҙ? Нимә тураһында?

Маргарита икеләнеп, ултырған урынында борғоланып алды ла бер тынала ярып һалды.

— Һүҙ тип ни, ул һүҙ ҙә түгел инде. Андрей Иванович ҡайнымдың знакомы. Улар бер-береһен күптән белә, яҡшы дуҫтар. Әле Абдрахман йәш кенә сағында Андрей Иванович уны үҙенә ул итеп биреүҙе һораған, әллә нисә тапҡыр күҙ йәштәрен түгеп үтенгән, сөнки ул бала-сағаһыҙ... Ләкин ҡайным ҡырт киҫкән.

— Шунан, шунан...

— Шунан ни, бында килеп бер-ике көн ҡунғас та, ошо хәбәр яңынан ҡалҡып сыҡты. Андрей Иванович айыҡ та,

иҫерек тә көйөнсә, Абдрахман алдында теҙләнеп, үҙенең ошо үтенесен яңынан ҡабатланы.

— Абдрахман риза булһа, әллә ниҙәр вәғәҙә иткәндер ул?..

— Итмәй буламы ни? Мин ошо тиклем байлыҡты, мөлкәтте кем өсөн йыйҙым, мин уны һинән башҡа, улым кеүек күргән кешенән башҡа, кемгә ҡалдырып китәйем, тип ҡат-ҡат үтенде.

— Тәк, шулай булғас, Абдрахман ниңә ауып торған хазинанан баш тартҡан? Миңә был, мәҫәлән, бер ҙә аңлашылмай, — Степан Ильич партячейка секретарына мәкерле генә күҙ ҡыҫты. Улар икеһе лә бер ауыҙҙан тигәндәй:

— Бына бит, иптәш Игебаев, ниндәй бәхетле, мул тормош, ошондай дәүләт ҡулыңа килеп ингән ерҙән һин баш тартҡанһың. Үкенмәйһеңме һуң? — тинеләр.

Абдрахман үҙенең ҡуйы ҡара ҡаштарын өҫкә сөйөп, ҡап уртаға һындырҙы ла ут саҡҡылары атҡан ҡарашы менән вәкилде ялмап алды.

— Минеңсә, бында артыҡ тел сарлауҙың кәрәге юҡтыр, тип уйлайым. Мин үҙемдең эсемдә йөрөткән бөтә хыялымды партияға ингән саҡта ғаризамда яҙып биргәйнем. Әгәр инде яңынан бер тапҡыр ишеткегеҙ килһә, рәхим итегеҙ: өс йыл буйы иҙеүселәргә ҡаршы көрәшеп, бөгөн Андрей Ивановичтың халыҡты талап йыйған мөлкәтенә хужа булып, иртәгә үҙем иҙеүсегә әйләнәсәк түгелмен. Быны выжданым ҡабул итә алмай. Мин уның өсөн ҡан түкмәнем. Әгәр ҙә мин бөгөн Андрей Ивановичҡа һатылһам, уның конюшняһында торған строевой атына атланып, ҡулға ҡылыс тотоп, Совет власына ҡаршы сығырға ла бер генә аҙым ҡала. Мин быны ошолай аңлайым. Ә... ҡатынымды ни өсөн Советҡа саҡырттығыҙ? Шуны ғына әйтегеҙ ҙә, беҙ бөгөн ҡуналҡа эҙләргә тейеш, — Абдрахман, уҡылып бөткән китаптың тышын япҡан шикелле, шинеленең салғыйы менән тубығын ҡымтып ҡуйҙы.

Ауыл Советында һәүетемсә барған әңгәмә шундуҡ етди төҫ алды. Был юлайы Степан Степанович башланы.

— Һиңә, иптәш Игебаев, мәғлүм: бер нисә көн элгәре һинең ҡатынды губернала ойошторолған бер айлыҡ курсҡа ебәреү хаҡында һүҙ булғайны, һеҙ уға нисек ҡарайһығыҙ?

— Бер нисек тә ҡарамайым. Бына алып килгәнмен — үҙе менән һөйләшегеҙ! — Абдрахман Маргаритаға төбәлде.

Степан Степанович Маргаритаға боролоп:

— Үткән аҙнала беҙ губерна үҙәгендә ошо көндәрҙә асыласаҡ бер айлыҡ шәфҡәт туташтары курсына һеҙҙе

командировать итергә тип һөйләшкәйнек. Унда родхаталар өсөн мөдирҙәр әҙерләнә. Һеҙҙе саҡырыуыбыҙҙың сәбәбе лә шул.

Маргарита йыш-йыш тын алды ла:

— Юҡ, юҡ. Мин Абдрахманды ошо хәлдә ҡалдырып китә алмайым. Уны ла ебәрһәгеҙ — мин риза, — тип тәтелдәне.

Ауыл Советы председателе вәкил менән икәүләп уны өгөтләнеләр-өгөтләнеләр ҙә, тыңлата алмағас, Абдрахманға күстеләр.

— Ну, иптәш Игебаев, үҙең нисек уйлайһың? Родхата кулак бисәләренә түгел, бигерәк тә ярлы-ялпы ҡатындарына кәрәк тә баһа. Бай бисәләре ауырыһа-нитһә тоталар ҙа, аттарын егеп, земство больницаһына сабалар. Ә фәҡир бисәһе бер ниндәй медицина ярҙамһыҙ үҙ түшәгендә ятып үлергә мәжбүр. Бына бит эш нисек тора?

Аптырағас, Абдрахман да баҫынҡы тауыш менән бисәһенә:

— Иптәштәрҙең һүҙҙәрен кире йыҡҡансы әллә ризалығыңды бирә лә ҡуяһыңмы? — тигәс, Маргарита иренә аптыраулы ҡараш ташланы.

— Һин нимә, минән ҡотолорға самалап тораһыңмы әллә? — тип ысҡындырҙы.

Абдрахман ҡулын кинәт кенә һелтәне лә ситкә боролдо.

— Ярай, юҡҡа ныҡышмайыҡ. Бөгөн Маргарита бик төшөнкө күренә. Ҡайтып кәңәшләшегеҙ ҙә иртәгә әйтерһегеҙ... — Хужалар Маргарита менән бына шулай хушлашты.

## 11

Абдрахман менән Маргарита Белов ҡарттың өйөнә ҡаршы ғына йәшәгән бер туған ҡустыһында ҡундылар.

Ҡистән саманан тыш ярһыған Андрей Иванович таң һарыһынан тороп, ут яндырмайынса ғына өҫтәлдә кистән шешә төбөндә ҡалған араҡы менән баш төҙәтте лә йүткерә-йүткерә тышҡа йүнәлде. Йоҡа ғына кейенеп сыҡҡан хужаны яҙғы еүеш һауа сорнап алды. Ул яңынан өйгә инеп, бекешаһы тышынан яурынына сәкмән һалып сыҡты. Аяҡ тауыштарын ишетеп, кәртәләге һыйыр-һарыҡ, хужаға иртәнге сәләм биргән шикелле мөңрәшеп-баҡырышып ҡаршы алды. Серкоһы башын кәртә аша һалып, әкрен генә кешнәне. Ләкин кәртә тулы мал, иҫәпһеҙ ҡошҡорт уның болоҡһоу күңелен ғәҙәттәгесә күтәрә алманы.

Кисәнән асыуланып, сығып киткән Абдрахман менән Маргаританың өйгә ҡайтмай, ҡайҙалыр ҡунып ҡалыуы уның эсен бошорҙо, күңелен ҡырҙы. Етмәһә, төн буйы Анастасия Петровнаның бер тамсы ла серем итмәй, сәбәләнеп сығыуы уның былай ҙа әлһерәгән йөрәгенә ҡурҡыныслы шом өҫтәне. Хужабикәнең албарланып: «Андрюша, әйҙә тим, йәштәрҙе эҙләргә сығайыҡ. Ҡыҙыулыҡ менән берәй ҡазаға юлығып ҡуймағайҙары», тип сеңләп ялбарған тауышы әле лә уның ҡолағы төбөндә яңғырап ишетелгәндәй тойолдо.

Таҡта менән көпләп ябылған ҡапҡа өҫтөнән ирегән ҡар һыуының шыбырлап ағып тороуы Андрей Ивановичты һиҫкәндереп ебәрҙе. «Бәй, бәй, бөтөнләй онотоп та торам. Бөгөн Евдокия көнө лә баһа. Христиан календары буйынса беренсе март. Евдокия көнөнә ҡарап, йәй ҙә шулай килә. Евдокия көнөндә урамда тауыҡ эсерлек һыу булһа, Егорьела, йәғни егерме өсөнсө апрелдә, һарыҡ үләнгә туя».

Андрей Иванович килер йылды яҡшыға юраны. Ләкин быйылғы өмөтлө йылдың килеше лә китек кәйефен бер илегә лә күтәрмәне. «Нимәгә миңә уның йылы, бысағымамы миңә уның байлығы? Бөгөн-иртән йәһәннәмгә аяҡ һуҙырға торған кеше өсөн ниңә хәжәт уның мөлкәте?» тигән уй йөрәген телгеләне. Йәнә... кисә Абдрахман менән Маргаританың Советка китерен көтәүелләп торған Андрей ҡарттың шымсыһы, шәфәҡ байып, күҙ бәйләнгәс, ян-яғына алан-йолан ҡарана-ҡарана, бәләкәй ҡапҡаны шым ғына асып, өйгә үтте. Боларған донъяның һүрәнләнә башлаған сағында ғына үҙенең ышаныслы кешеһенең ҡапыл ишек төбөндә күренеүе Андрей ҡартты шунда уҡ айнытып ебәрҙе. Ул бармағы менән генә ишара яһап, уны эргәһенә саҡырҙы. Андрей ҡашына ултырырҙан алда, теге, икеләнеп, хужабикәгә ҡараш ташланы. Тик хужа: «Шөрләмә», тигәнде белдереп, ҡулын һелтәгәс кенә эргәһенән урын алды.

— Йә, ни бар? Аяҡтарың еңел булһа ярар ине, хоҙайым, — ҡартлас иконаға ҡарап өс тапҡыр суҡынды.

Ләкин төнгө ҡунаҡ хужа сабырһыҙлана тип ашығып барманы. Иң башта ике күҙен һәҙрәйтеп, тултырылған йомро графинға, уның ҡырында нур сәсеп ултырған «А. И.» хәрефтәре алтын менән буталланған һомғол түңәрәк рюмкаға ҡараны. Андрей Иванович уға араҡы һалды ла алдына тәрилкәгә һалынған тоҙло ҡыяр этте. Ҡунаҡ беренсе рюмканан һуң да телгә килмәне, тик рюмканы терһәге менән ситкә этәрҙе, стакан тултырып һалып биргәс кенә, йөҙөнә йылмайыу йүгертеп, Андрей ҡарттың ҡолағына эйелеп, шыбырлай башланы.

— Андрей Иванович, һуңғы яңылыҡ шул: теге бусурманды Обручевканың партячейкаһы партияға ҡабул итте. Был — бер. Икенсенән, уның бисәһе, теге беҙҙең христианканы, губернала иртәгә-бөгөн асыла торған медработниктар курсына бер айға оҙаталар. Бына бөтә яңылыҡ бөгөнгә ошо. Алла ебәргән ризыҡ өсөн беҙ ҡолондан мең рәхмәт, — тип стакан өҫтөнә тәре «һалды» ла, ҡойолғанды төп күтәрә эсеп, ҡулындағы ҡыярҙы ҡыршылдатып сәйнәргә кереште.

— Нисек, нисек? Кемде партияға ҡабул иткәндәр? — Андрей ҡарт аңғармай ҡалғанын яңынан һораны.

— Һинең ялсыңды, Ялан башҡортон...

Андрей Иванович көтөлмәгән был яңылыҡты ишетеү менән ҡапыл урынынан һикереп торҙо ла:

— Дундук, кемде үҙ өйөмдә, үҙ ҡуйынымда аҫрап ятҡанмын. Аңра бәрән! — тип башта маңлайына усы менән сәпелдәтеп, аяуһыҙ һүгенде. Уның ғазапланғанын күреп: «Уй аллам, ах-ах, был ни хикмәт?» тип ҡысҡыра башлаған Анастасия Петровнаны үсәргә теләгәндәй, Андрей Иванович:

— Бына шулай итәләр ул беҙҙең шикелле кәбәк мейеләрҙе. Һин ҡыҙ итеп алырға йыйынған бусурманкаң ҡайҙа! Хәҙер табып килтер, төкөрҙөләр улар һинең мәрхәмәтеңә, сволочтар!

Теге шымсы ишекте үҙ артынан ябыр-япмаҫтан Андрей Иванович бисәһенә ташланды.

— Бына был бәдбәхеттәрҙең ошо ҡәҙәре аҙыуына тик һин генә ғәйепле. «Шуларға бик ҡаты бәғерле булма, икеһе лә шул тиклем илгәҙәк, инсафлы балалар, арҡаларынан тапап ҡына үҙ яғыбыҙға ылыҡтырыу кәрәк. Уларҙы яуызлыҡ менән түгел, изгелек менән еңәйек» тип кем төндәр буйы минең ҡолаҡ итен ашаны? — тип болоҡһоп илап ултырған Настяһын үсекләне. — Ана, бар, үҙең эҙләп алып ҡайт ғәзиз балаларыңды, миңә уларҙың һыныҡ тингә лә хәжәте юҡ.

Анастасия Петровна һыңҡылдап иланы-иланы ла, йоҡо бүлмәһенә инеп, карауатына ауҙы. Яңғыҙы ҡалған Белов ҡарт иҙән буйлап айыу һымаҡ ауа-түнә бер аҙ йөрөнө лә, ҡайнаған мейеһендә фекерҙәре бутала башлағас, башын өҫтәлгә һалып, шул минутында хырылдап йоҡоға талды. Стеналарҙы дыһырлатып, ултырған урынында хырылдап йоҡлаған ирен «йә үлеп-фәлән ятыр» тип Анастасия бер нисә тапҡыр тороп ҡараны. Эйе, Абдрахмандың партияға инеүе тураһындағы шомло хәбәр өй хужаларын шатландырманы. Был ваҡиға улар өсөн бер ҡасан да бәхет килтермәйәсәген улар үҙ йөрәктәре менән тойҙо. Андрей Иванович, билдәле

Абдрахманға бик ҙур өмөттәр бағлағайны, ләкин уның үҙ һүҙлелегенә ҡарап, холҡоноң кирерәк булыуын төрлө яҡлап күҙәтеп, артыҡ ышанып та етмәй ине. Ләкин ошо арала ғына партияға инеп, үҙенә хас дошманға әйләнерен, ул башына ла килтермәгәйне. «Бөгөн — Евдокия көнө. Ҡыҙылда яҙғы йәрминкәләр башлана, ни эшләп әле мин был Обручевкала, һаҫып ятам. Хәҙер үк кашауайға Серконы егергә лә йәрминкәгә осорға, Абдрахмандың был этлеген ауылдаштарына, тәүге башта уның туғаны Ғәлимйән хажиға һөйләп ҡайтырға кәрәк. Әйҙә, уның өсөн мин генә баш ватмайым әле, Абдрахман әллә уларға ла изгелек күрһәтер тиһеңме? Коммунист — ҡайҙа ла коммунист. Обручевкала ла, Яланда ла уның төҫө уңала торған түгел — ҡып-ҡыҙыл. Улар өсөн дә Абдрахман — барыбер шул уҡ хас дошман. Әҙерәк Ғәлимйән менән ултырҙаш булып ҡайтайым, ул беҙҙең эше ояһынан сығырға ҡурҡып ята торған байбаҡ түгел, тотҡан еренән һындыра торған ир. Абдрахманды урынына тиҙ ултыртыр», ошо уйҙарынан Андрей Ивановичтың эсенә йылы йүгерҙе.

Үрәпсеп торған айғырын ектереп, Андрей Иванович ҡара таңдан бер кешелек кенә кашауай санаға ултырып, «әҙерәк тәнде лә, күңелде лә яҙып алыу» ниәте менән йәрминкәгә сапты. «Әгәр Ғәлимйән ниндәйҙер сәбәп менән килмәй ҡалһа, ни эшләрмен? Исеме Ғәлимйән хажи булһа, ул йәрминкәгә килмәй ҡаламы? Уның тамашаһын күрмәйенсә, Ҡыҙыл йәрминкәһенең күңеле буламы?»

Андрей Иванович яңылышманы. Совет власынан патент алып, бойҙай менән сауҙа иткән әшнәһе Карп Ивановичтың крепость кеүек ҡойма менән уратып алынған ҡалай түбәле йортона Андрей Ивановичтың атын терәүе булды, ларһылдап өргән эттәренең тауышына көлдәге өҫтөнән генә яурынына ҡыҫма билле тун һалған хужа яр һалып ҡысҡыра-ҡысҡыра өйөнән килеп сыҡты.

— Ой, Андрей Иванович, алла ҡунағы! Әле яңы ғына Ғәлимйән хажи менән һине иҫкә төшөрөп, һөйәгеңде сайҡап алғайныҡ әле, — тип һөйләнә-һөйләнә икс яғынан да ҡалын тимер менән көпләнгән урыҫ ҡапҡаһын шар асып ебәрҙе.

Өйҙә кәрт һуғып, йылға булып аҡҡан араҡыға ҡуша тәмәке төтөнөнә тонсоғоп ултырған, эсе мунсалағы ише биттәре сөгөлдөрҙәй ҡыҙарған ҡунаҡтар ах та ух килеп, аптырабыраҡ ҡалған Андрей Ивановичты ҡулсаға уратып алдылар. Күлдәксән генә арттараҡ килеп сыҡҡан Ғәлимйән, цирктарҙағы гер күтәрә торған бәһлеүәндәр шикелле киң күкрәген тултырып тын алғас, иҫәнлек-һаулыҡ та һорашып тормай, Обручевка ҡунағын ике ҡултығы аҫты-

нан өҫкә сөйҙө лә өйгә алып инеп китте. Андрей Иванович шешмәк битенә яһалма ҡурҡыу һыҙаттары йүгертеп:

— Үлтерәһең бит, башҡорт айыуы, — тип тауышланған булды. Асылда йылы ҡаршылауға бик шатланды.

Һүрелә башлаған табынға дәрт өҫтәлде. очко уйнап, өҫтәл уртаһына йыйылған отош банкыһын ситкә этәреп ҡуйҙылар ҙа һый-хөрмәткә йәбештеләр.

Кемелер:

— Ағай-эне, ашыҡмайыҡ әле, кем кемгә бурыслы, кемдең күпме отошо бар, сираттағы вест[1] кемдеке, шуны яҙып алайыҡ, тип ҡарағайны, ләкин уның хәбәрен ҡолаҡҡа элеүсе булманы.

Етмәһә, Ғәлимйән хажиҙың таҡыр итеп ҡырылған башын күтәреп, уға уҫал ҡарауы булды, теге кеше шундуҡ аҫҡа сүкте. Күрәһең, ул әҙәм был компанияға яңыраҡ ҡына килеп кергәндер. Юғиһә, араҡы эскәндә, бигерәк тә кәрт уйнаған саҡтарҙа уйын ҡағиҙәһен һәм ултырыу тәртибен тик хажи билдәләй. Уға ҡаршы һүҙ әйтергә йәки әйткәнен йығырға бер кем дә баҙнат итә алмай. Уның ҡарауы, Ғәлимйән хажи үҙ компанияһында ҡатнашҡан кешеләрҙе әшнә итеп ҡабул итһә, улар өсөн теләһә ҡасан үҙ йәнен фиҙа ҡылырға ла әҙер. Әгәр уның алдында кемдер кәрт уйыны мәлендә хәрәмләшеп оторға уйлаһа, уны шундуҡ һуғып та осорғолайҙар. Иң мөһиме, Ғәлимйән аҡсаға һаран түгел, уның уйыны ла ғәҙел, һыйы ла мул. Әгәр уйын һөҙөмтәһендә отолоп, аҡсаһыҙ тороп ҡалһа, ул был осраҡта ла аптырап тормай, үҙе кеүек үк башын ялтыратып ҡырған, уның менән йәрминкәләргә бергә йөрөй торған әзмәүерҙәй башҡорт егете күрше бүлмәлә генә ултыра, уның ишараһын көтә: Ғәлимйән, стена туҡылдатып, уны үҙенә саҡыра ла тик бармаҡ ҡына күрһәтә. Нисә бармағы өҫкә сөйөлһә, төн сыҡҡансы теге күсер, Ялан ауылынан тәртәгә бәйләнгән шунса йылҡыны етәкләп йәрминкәгә яңынан килеп етә.

Быя юлы Ғәлимйән кәрт уйынын туҡтатып торорға ҡушты. Өҫтәл тирәләп ултырған ҡунаҡтар, балсыҡтан эшләнгән көрөшкәләргә һалып, берәрҙе төшөрҙөләр ҙә тамаҡтарын ҡыра-ҡыра ашарға тотондолар. Ләкин саҡырылмаған ҡунаҡ Беловҡа аш барманы — тамағына кисәнән бирле икенсе, ҙурыраҡ төйөн тығылғайны. Уның йәрминкәгә юлланыуының да сәбәбе шул ине — ҡайғы-хәсрәтен әшнәләре алдында тиреп, әҙерәк күңел тыныслығы табыу. Шуға күрә лә ул икенсе көрөшкәне яртылаш эскәндән һуң,

---

[1] Преферанста сираттағы уйынды башлап ебәреүсе.

башы ныҡлап шаңҡый башлағас, аҙыраҡ сабыр итергә булды. «Йә ләх булып, кеше араһында хур булырмын».

Өй хужаһы Андрейға мәкерле ҡараш атты.

— Кем, нишләп ынтылмайһың, әллә Обручевкала Совет власы алдынан ҡалғанса һыйлап ебәрҙеме? — тип мыҫҡылланы.

Андрей Иванович, осаһын эт тешләгән шикелле, урынында ҡапыл ҡалҡынып ҡуйҙы.

— Эйе, ныҡ һыйланып килдем, — тип ауыҙын ҡыйшайтты.

Был хәбәргә башҡалар ҙа ҡолағын һалпайтты. Өй хужаһы уйынлы-ысынлы хәбәрен дауам итте:

— Әле мин ауылығыҙҙа АРА-ның[1] ашханаһы менән йәнәш Совет хөкүмәте үҙенекен дә асып, Обручевка халҡын ыумас менән туйҙырып ята имеш, тип ишеткәйнем. Әллә буш хәбәрме? — тип ул башҡаларға күҙ ҡыҫты.

Андрей Иванович уның был төртмәле һорауына яуап бирмәне, тик уның урынһыҙ мәрәкәһенә сикәләре сирышып, еүеш ирендәрен генә аҫҡа һалпайтты. Өй хужаһы башлаған һүҙен дауам итеп, былай ҙа эсе бошоп ни эшләргә белмәй ултырған дуҫы Андрейҙың тамам теңкәһенә теймәксе ахыры.

— Әле мин һине үҙенең казачий бекешаһын ташлап, Америка таратып биргән һырылған бишмәт[2] кейеп килер тип уйлағайным.

Ҡапыл мәтеләй һары йөн баҫҡан биттәре ағарып киткән Андрей Иванович йоҙроғо менән өҫтәлгә бөтә көсөнән һуҡты ла:

— Етте, Карп! Довольно! — тип аҡырҙы. — Һин, есаул, ауыҙыңды ыржайтып ултырма, кабы тиҙҙән, ошо ауыҙыңды бәлшәйтеп, һиңә иларға яҙмаһын, — тине лә әҙерәк һыуына төшкәс, өҫтәлдән осоп төшкән һауыт-һабаны, аҙыҡ-әүҡәтте иҙәндән йыйыштырып, кире өҫтәлгә ҡуйҙы.

Бер аҙ тынып ултырғандан һуң, ошо унайһыҙ хәлдән ҡотолоу ниәте менәндерме, Ғәлимйән хажи үҙенең ауыр ҡулын Андрей Ивановичтың яурыны өҫтөнә һалды ла:

— Ярай, асыуланма, Андрей Иванович, һине яратып ҡына шаярта. Ауылдағы үҙгәрештәрҙе ул һинән башҡа ла күреп йөрөй, асыуының көһөрөн кемдәндер алырға кәрәк тә инде, — тип йыуатты.

---

[1] АРА — Ярҙам итеүҙең Америка администрацияһы. Ул һуғышта бөлгән илдәрҙең халҡына ярҙам итеү маҡсатында Америка президенты Гувер тарафынан ойошторолған ассоциация. Ул ярҙамды 1921 йылда РСФСР хөкүмәте лә ҡабул итте.

[2] АРА — аҙыҡ-түлек менән генә түгел, кейем-һалым менән дә ярҙам ойошторҙо.

Андрей Иванович башын ҡалҡытып, тәү күргәндәй уҫал ҡарашы менән үҙенең иҫерек дуҫтарын барлап сыҡты.

— Бына һеҙ бында кәрт һуғып, араҡы эсәһегеҙ, ләкин осағыҙға бөгөн-иртәгә шәре керәһен белмәйһегеҙ, — тип үпкә белдерҙе.

Уның был һүҙе араҡы еленән егет булып алған ҡунаҡтарға терпе сәнскеһе шикелле ҡаҙалды.

— Бер ҡасан да буласаҡ түгел. Изге Рәсәйҙең изге кешеләрендә һинең ул шәреңде быуып кире ағыҙырлыҡ ҡына көс-ғәйрәт бар.

— Быға беҙ бер ваҡытта ла ирек ҡуймабыҙ, — тип ныҕыраҡ төшөргән бер-ике йәш сауҙагәр күкрәктәрен киреп, йоҙроҡ һуғышына ташланырға әҙер кешеләй беләктәрен төрә башланы.

— Беҙ өҫтәл артында барыбыҙ ҙа — арыҫлан, ләкин кәрәк саҡта һуҡыр сысҡан шикелле оябыҙҙа йәшеренеп ятабыҙ. Совет власының, уның яҡлы кешеләренең араҡы эсеп, ауыҙҙарын беҙҙең шикелле арандай асып, юҡ-бар хәбәр һөйләп ултырырға форсаттары юҡ, ләкин улар эш эшләй. Киләсәккә нигеҙ һалалар, халыҡ араһында үҙ таяныстарын ныҕытып, үҙ яғына кеше туплайҙар, үҙ сафтарын ишәйтәләр.

— Ә беҙ?

— Ә беҙме? Бына бит ситкә йөрөйһө юҡ, беҙҙең көндәлек шөғөлдө күреп ултыраһығыҙ: мәжлес ҡороп, боғаҙ ярыу, күкрәк һуғыу, уҙа барһа — борсаҡ ярыу, әгәр инде бик тә шәбәйеп китһәк, тас та тос үҙ-ара һуғышыу. Бына беҙҙең һөнәр!

— Ә шулай ҙа Совет власы нишләй?

— Нишләһен? Эш эшләй. Обручевка ярлыларына ярҙам итеү өсөн кредит йәмғиәте аша биш йөҙ һум валюта бүлде. Быйыл һәр ярлы кеше үҙ игенен сәсһен өсөн, алдан хәстәрлеген күрә — осһоҙ ғына кредитҡа эш ҡорамалдары, яҙғы сәсеүгә кәрәкле орлоҡ һата. Хатта ошо уҡ кредитҡа тартыу көсө — ат һатып бирергә лә вәғәҙә итә. Хәҙер был кредитҡа, балға йыйылған себен шикелле, бөтә ярлы-ялпы ябырылды.

— Шунан?

— Шул. Беҙҙең өсөн иң ҡурҡыныслыһын онотоп ултырам икән. Бынан өс-дүрт көн элек Обручевканың партячейкаһы ете коммунисҡа артты.

— Нисек? Коммунистар ҡайҙан килеп ҡушылды?

— Губернанан килгән вәкил яңы ағзалар ҡабул итеүҙе ойоштороп ебәрҙе. Ғәлимйән хажи, һиңә лә бер яңылыҡ ишеттерәйем. Һөйөнсө, һинең туғаның — минең икмәкте

ашап йөрөгән Абдрахман менән хәҙер ауыҙыңды иплерәк асып һөйләш.

Һүҙгә артыҡ ҡыҫылмай ултырған Ғәлимйән терт итеп ҡалды. Һүнмәгән папиросын тәрилкә ситенә һалды ла, ҡорбанына ырғырға йыйынған юлбарыҫ шикелле башын өҫтәлгә һалып, янып торған күҙҙәре менән Андрейға серәйеп ҡараны.

— Һүҙеңде әҙәм рәтле итеп асығыраҡ һөйлә, ни тураһын ғына әйтмәй йомаҡ ҡойоп ултыраһың? — тине хажи, тамағынан ҡуйы ҡалын тауыш сығарып.

— Тураһы шул, хажи әфәнде, миңә бирмәй уның өсөн ҡырталашып йөрөгән һинең Абдрахманың — хәҙер коммунист, — тине Андрей ҡарт ниндәйҙер үс булып яңғыраған тантаналы тауыш менән.

Ғәлимйән хажи, ҡолаҡтары ишеткән был шомло хәбәрҙе ырғытып ташларға теләгәндәй, башта ялтыр башын һелкетеп алды ла уның ерән һаҡалына йәбеште.

— Ах, сволочь! Мин һиңә уны коммунист яһарға ебәрҙемме? Һин ошо көнгә тиклем тыу бисәң менән ҡуша ни ҡарап ултырҙың? — тип үгеҙ кеүек ер ярырҙай булып аҡырҙы ла ҡартты бөтә көсө менән этеп ебәрҙе.

Былай ҙа ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла сайҡалып саҡ ҡына ултырған Андрейға етә ҡалды, ул лап итеп арҡаһы менән иҙәнгә һуҙылып ятты. Ғәлимйән хажи менән йәнәш ултырған ике-өс кеше, ҡурҡышынан күҙҙәре аларып: «Был ни эш? Көпә-көндөҙ казак һаҡалына йәбеште!» тип разбой һалып ҡысҡырырға кереште. Үҙҙәре Ғәлимйән хажи эргәһенән ситләшкәндән-ситләште. Иҙәндән үрмәләп аяғына баҫҡан Андрей Иванович ғәрлегенән йәшел күҙҙәренә эркелгән йәштәрен ҡулының һырты менән ситкә һирпте, урындыҡтан тороп килгән хажиҙың күкрәгенә йәбешеп, бар көсө менән бер-ике һелкте:

— Ғәлимйән, был һинең ни эшең? Мин — Георгий кавалеры, вахмистр Яицкого атаманского полка Андрей Иванович Белов! Һаҡалымдан ғына түгел, яғамдан да алдырғаным юҡ! Ниндәй мәсхәрә?! — тип ҡарлыҡҡан тауышы менән аҡырҙы, әйтерһең, күкрәген ярып ҡысҡырған шул тауышы менән ҡыҫып, ул йән асыуынан бушанды. Тәнтерәкләп барып үҙ урынына ултырҙы. — Ниндәй позор! Быны минең казак намыҫым күтәрә алмай! Кем йәбеште бит һаҡалға? Ялан ауылының картежник бандиты... — тип ҡалтыранған башын Ғәлимйәнгә күтәргәс, күҙенә эркелгән йәшен, башын сайҡап, иҙәнгә һелкте.

Ғәлимйәндең йөҙөндә үкенеү йә булмаһа йәлләү тойғоһо һиҙелмәне, ул алдындағы көрөшкәнән бер-ике араҡы уртланы ла, һүрелә башлаған тәмәкеһен ауыҙына ҡабып,

күгелйем төтөндө түшәмгә өрҙө. Унын ишетмәмешкә һалышып, ғәмһеҙ генә тәмәке тартып ултырыуы Беловты яцынан ҡотортоп ебәрҙе.

— Әгәр Абдрахман ҡустың бик хәжәт булһа, бөгөн үк барып тейәп алып ҡайт, ыһ та итмәй биреп ҡайтарам. Обручевка ауылында эттәр һаны берәүгә булһа ла кәмер, — тине Андрей ҡарт, һәр һүҙенә ярһыған зәһәр ҡушып. Ғәлимйән турайып ултырҙы, иҙеүе ысҡынған күлдәге сытырлағансы күкрәген киреп, папиросын һурҙы.

Өҫтән аҫҡа аҫылынып төшкән сыйыр шикелле төтөн дүңгәләктәре сығарып ултырған хажи осҡон сәсеп торған йәшкелт-һоро күҙҙәрен уйнатты.

— Әгәр мин һиңә барһам, вахмистр әфәнде, уны атыма йөк итеп алып ҡайтырға түгел, ә юҡ итергә барам. Бына ошо ҡулдарым менән һинең өйөңдә боғаҙынан быуып үлтерергә... Тере көйө түгел, ә унын үле мәйетен тейәп ҡайтыу өсөн барам! — тип алаптай ҡулдарының һырты мәрмәр һымаҡ ағарғансы, бармаҡ быуындары шартлағансы гер кеүек һәлмәк йоҙроҡтарын, өҫтөндәге өй түшәмен төртөп тишергә теләгәндәй, юғарыға күтәрҙе лә лап итеп кире урынына ултырҙы.

Бөтә бында йыйылған казактар ҙа килеп сыҡҡан дәғүәнең ҡанһыҙ ғына тамамланыуына шөкөр ҡылып, иркенләп тын алды.

Иң башта өй хужаһы Ҡарп Иванович телгә килде:

— Ай афарин. Ғәлимйән хажи, коммунистарҙың барыһына ла тик шул ғына кәрәк. Башҡа яҙмышҡа ундай берәҙәктәр лайыҡ түгел. Барыһын да арҡан һабынлап дар ағасында аҫырға кәрәк. Йә, алла, ошо көндәрҙе тиҙерәк күрергә насип ит, — тип, мөйөштәге иконаға ҡарап, өс тапҡыр суҡынып алды.

Унан күрмәксе, Ғәлимйәндән башҡа, ҡунаҡтар ҙа суҡына-суҡына большевиктарға үлем көҫәне.

Шунан инде барыһы ла, үҙҙәренең күптәнге хыялы бөгөн үк бойомға ашҡанға хисаплап, араҡыға сумды. Ҡарп Ивановичтың ҡунаҡтарын хөрмәт иткән ике егет сирекле шешәләр менән йүгерә-йүгерә хәмер ташыны, өҫтәлдәге һый-хөрмәтте әленән-әле яңыртып торҙо. Хужаның күрәнәсәһендә ҡатын-ҡыҙҙар нәҫеленән бер кем күренмәне, сөнки был йәрминкә мәжлесендә Ғәлимйән хажиҙың булырға тейешлеген алдан ишеткән казачкалар «бусурман айыуын» күреп ҡалырға ашҡынһалар ҙа унан ҡурҡыу тойғоһо уларҙын нәфсеһен еңде. Сөнки Ғәлимйәндең һарауһыҙлығы һәм үҙенә хуш килгән ҡыҙ-ҡырҡынды һис тә ҡулынан ысҡындырмай торған ғәҙәте барлығы хаҡында легендалар был төбәктә киң таралған. Әлбиттә, хажиҙың станицаға

аяҡ баҫыуын дүрт күҙ менән көтөп алғандар ҙа юҡ түгел ине. Улар өсөн бөтә Яйыҡ казачествоһында хажиҙан да ҡәҙерлерәк, унан да мөхәббәтле, мөһәббәтерәк ир юҡ кеүек.

Башта ҡыҙмасараҡ, луҡынан инде бөтөнләй фекерҙәре буталып, телдәре көрмәлә башлаған казактар кем уҙарҙан һәр хуторҙа, һәр станицала дар ағастары ҡороп, большевиктарҙың үҙен генә түгел, бөтә нәҫел-нәсәбен аҫып бөтөрөргә, тамырынан ҡоротorға һәм был изге эшкә иртәгәнән дә һуңға ҡалмай ең һыҙғанып тотонорға, кем уҙарҙан тауыштары ҡарлыҡҡансы, таң һарыһы етеп, кем ҡайҙа етте шунда төнәгәнсә ҡысҡырышты. «Беҙгә эйәреп, бөтә казачество күтәрелер; беҙҙең шау-шыу Парижда газета сығарып ятҡан Александр Федорович Керенскийға, уның цирктарында был заманда ат уйнатып йөрөгән үҙебеҙҙең казак генералы Шкуроға, Стамбул янында Рәсәйгә баҫып инеү өсөн етмеш меңлек ғәскәр әҙерләп торған Врангелгә лә һәм большевиктар менән иҫәп-хисапты өҙөргә ҡулдары ҡысып йөрөгән башҡа эмигранттар ҡолағына ла барып салынасаҡ, ә инде унан монархияны ҡайтанан аяҡҡа баҫтырыу өсөн көнө-төнө хыялланған Антанта етәкселәренә лә өмөт ҙур. Алла бойорһа, үҙебеҙҙә элекке казачество идараһын яңынан урынлаштырырбыҙ», тип Карп Иванович томанлы өмөттәрен яҡшыға юрап, үҙ һығымтаһын төйнәне. «Эш»те бүлешергә лә онотманылар. Карп Иванович Ҡыҙыл станицаһында, Андрей Иванович Обручевка хуторында, ә инде эшһеҙ ҡалып барған Ғәлимйән хажи көсө еткәнсе башҡорт ауылдарында «элекке тәртипте» урынлаштырыуҙы үҙ иңдәренә алып, көн яҡтыра башлағас ҡына таралыштылар.

## 12

Андрей Ивановичты оҙатыусылар тик уның Серкоһына ғына иҫәп тотто. Ысынлап та, Обручевка юлына төшөп алған аҡыллы хайуан кузла аша һалынған дилбегәне бер кем дә тотмауына ҡарамаҫтан, утыҙ-ҡырҡ саҡрым араны бәлә-ҡазаһыҙ йылдам ғына алып ҡайтып еткерә яҙҙы. Тик Обручевкаға бер нисә саҡрым ҡалған урҙә Серко хужаһы ҡулынан ысҡынған ҡайыш дилбегәгә буталып, уға аяҡтары менән тоҡанланған көйөнсә, юл уртаһында туҡтарға мәжбүр булды. Ҡуҙғала алмай, бер урында байтаҡ тапанып, ҡара тиргә төшкән Серконы Обручевка хуторының почта ташыусыһы ҡыуып етте. Ул тиҙ генә санаһынан һикереп төштө лә толобона уранып бер нәмә белмәй

хырылдап йоҡлап ятҡан Андрей Ивановичты толоп яғаһынан тартҡылап уятырға кереште. Белов шешмәкләнеп ҡыҙарған күҙҙәрен бер тапҡыр асып ҡараны ла икенсе яғына бөгөлөп ятты. «Төнгә ҡаршы юл буйында ҡалдырып китеү оҡшамаҫ, үҙен үлтереп, атын алып китерҙәр». Почта ташыусы малай, уны тартҡыслай-тартҡыслай уятып, кашауай сана һөйәнмәһенә терәп ултыртты.

— Мин ҡайҙа? — тип һораны Андрей Иванович, бысраҡ ҡулының һырты менән йоҡоло күҙен ыуалап.

— Обручевканың урге осондағы ҡабаҡта тораһың, Андрей Иванович, — тине ат баҫҡан дилбегәне Серконың аяҡтары аҫтынан сығарып маташҡан малай.

Андрей Иванович уны-быны аңғармай: «Но, пошел, Серко!» тип ҡысҡырыуы булды, Серко уның ҡырында шлея аҫтына дилбегә үткәреп булашҡан малайҙы йығып, дилбегәһеҙ көйөнсә алға ынтылды. Ләкин сос үҫмер йәһәт кенә тороп теҙгенгә йәбеште. Үҙ атын кашауай сана артына бәйләп, малай Андрей Иванович менән йәнәш ултырып алды.

Бер аҙ юл үткәс, почта йөрөтөүсе, Андрей Ивановичтың йәмһеҙ йөҙөнә ҡарап:

— Андрей Иванович, ҡайҙан ҡайтып киләһегеҙ? — тип һораны.

Белов ҡарт тамағын ныҡ ҡына сиҡаҡлатып алды ла:

— Ҡыҙылдан, йәрминкәнән, — тип яуап бирҙе.

— Бер ҙә йәрминкәнән тейәгән әйберең күренмәй, — тип һаман төптәшмәк булды үҫмер. Асыуы килгән Андрей Иванович:

— Ә мин тейәргә түгел, ауҙарырға барҙым, — тине.

— Нимәне?

— Нимәне түгел «кемде?» тип һора, ахмаҡ.

— Йә, әләйһә, һинеңсә булһын — кемде?

— Бәлшәүиктәрҙе.

— Нисек?

— Быны шулай, браток. Бәлшәүиктәрҙе бөтөнләй төбө-тамыры менән ҡоротоп, Николай батшаны кире тәхетенә ултыртып, Яйыҡ казак ғәскәрҙәренең атаманы генерал-лейтенант Дутов Александр Ильич ғали йәнәптәренә Ырымбурҙы тапшырып ҡайтып киләм, — тип әле айнып та етмәгән Андрей ҡарт йоҡоһонда күргән төшөнә тағы әлләниҙәр ҡушып һөйләп ташланы. Уның менән йәнәш ултырып килгән малай ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне, бер аҙ икеләнде лә, тотҡан дилбегәһен ҡартҡа ырғытып, үҙ санаһына йүгерҙе. Ул көшкөлдәй-көшкөлдәй үҙенең арыҡ атын ҡыуып, ҡарттың алдына төштө лә туп-тура ауыл Советы канцелярияһына барып туҡтаны. Тыны бө-

төп, хәл йыя-йыя, малай Степан Степановичҡа үҙ ҡолағы менән ишеткәндәрҙе һөйләп биргәс, председатель рәхәтләнеп көлдө лә:

— Айныҡтың башында — иҫеректең телендә. Ул һиңә тик үҙенең төшөн генә, эсендә бөрөләнеп сәскә атҡан хыялын ғына һөйләгән, — тине.

Андрей Ивановичтың өйҙә ашатылмаған-эсерелмәгән малы, ҡош-ҡорто ызғырып ҡаршы алды. Ысынлап та таң һарыһынан үҙенең иренең ҡайҙа олағыуын йүнләп белә алмай ҙа ҡалған Анастасия Петровнала мал ҡайғыһы булманы. Уны берҙән Абдрахман менән Маргаританың өйҙән ғәйеп булыуы борсоһа, икенсенән, кистән араҡы эсеп ҡаңғырып йөрөгән хужаның егеүле ат менән юғалыуы аптыратты.

Тик икенсе көнөнә төш ауғас, хушлашырға һәм үҙенең юл саквояжын алырға тип ингән Маргаританы күргәс, кенә, мәсьәлә асыҡлана төштө. Уларҙан бөтөнләй төңөлөп, әллә ниндәй шөбһәле уйҙарға бирелеп, төнө буйы керпек ҡаҡмай сыҡҡан хужабикә, бөтә кәүҙәһен һәм тумалаҡ битен етдилек һәм йыйнаҡлыҡ һыҙаттары сорнап алған Маргаританың янып-бешеп тупһала күренеүе шатлығынан уның муйынына аҫылынды ла илай-илай үҙ ҡайғыһын һорытты. Тәүҙә Андрей Иванович, шунан Абдрахман тураһында һорашты.

Маргарита:

— Абдрахман хәҙер ат егеп, мине өйәҙгә алып китергә килә, — тине.

Ә Андрей Иванович хаҡында Маргарита күңел йыуатырлыҡ бер ни ҙә әйтә алманы.

— Мине ауыл Советы медсестралар курсына ебәрә. Абдрахман үҙе оҙата бара.

Быға Анастасия Петровна шатланырға ла, ҡайғырырға ла белмәне. Тик ул бары Маргаританы һығып ҡосаҡланы ла, күҙенә эркелгән йәшен һөртөп: «Иҫән-һау ғына йөрөп ҡайт инде, ҡолонсағым», тип маңлайына наҙлы ғына өс тапҡыр үҙенең ҡайнар ирендәрен терәне.

Тиҙҙән ауыл Советы мобилизациялаған ылауҙа Абдрахман да килеп етте. Хужабикә менән бик йылы хушлаштылар. Уныһы нишләргә белмәй өтәләнеп юлға аҙыҡтүлек әҙерләне.

— Беҙҙе, ҡарттарҙы, онотмағыҙ. Абдрахман, Маргаританы урынлаштырғас та туп-тура үҙебеҙгә ҡайт. Һеҙ китеп юғалғас, Андрюша менән бик борсолоп бөттөк. Бына уның да ҡайҙалыр олағыуы һеҙҙең арҡала булды. Зинһар, ҡабат улай эшләмәгеҙ инде, ҡартайған көнөбөҙҙә беҙҙең башыбыҙҙы утҡа һалмағыҙ, — тип иламһыраны. Уны ишек

төбөндәге һандыҡ өҫтөнә ултырып, шым ғына тыңланылар ҙа, ҡул бирешеп, юлға ашыҡтылар.

Ихатаға сыҡҡас, Абдрахман артына әйләнеп:

— Анастасия Петровна, беҙ бөгәсә күршеләрҙә ҡундыҡ. Малығыҙ тураһында артыҡ борсолмағыҙ, мин килгәнсе мал, кәртә-ҡураны хужаның туғандары ҡарап торорға вәғәҙә бирҙе, — тине.

Ҡапҡа тышында ҡуҙғалған сана тауышы хужабикәнең былай ҙа болоҡһоу күңеленә яңғыҙлыҡ хәсрәте, ҡайғы хисе өҫтәне, тауышы алыҫлаша барған шул санаға Анастасия үҙенең киләсәккә ышаныслы өмөтөн үҙ ҡулы менән тейәп ебәргәндәй булды. Уның күңеле, ҡуңалтаҡ итек шикелле, бөтөнләй бушап ҡалды. Кәртә эсендә малдары баҡырған, үҙен иркәләп сеңкелдәгән этенең тауышын да ишетмәне ул.

Туңыр-туңмаҫ ятҡан юлдан атын ҡара тиргә төшөрөп ҡайтып еткән Андрей ҡарт толобон сисеп кашауайына ырғытты ла, өйөнә инеп тормай, ас малына бесән таратырға тотондо. Бер аҙ эшләгәс, тыны ҡурыла башлаған ҡарт санаһына ултырып хәл алырға уйланы, маңлайына бәреп сыҡҡан һалҡын тирен бекешаһының ең осо менән һөртөп төшөрҙө, тәмәке тоҡандырҙы. Байтаҡтан бирле йортта һәм ихатала бер ни эшләмәй, тик рюмка тоторға ғына ғәҙәтләнеп өлгөргән усының ҡабарып сыҡҡанын күреп, Андрей Иванович теш араһынан сырт төкөрҙө лә ҡаты һүгенеп ҡуйҙы: «Инәңде... мыҡты кеше большевиктарҙы тамырынан ҡоротторға, башын киҫергә һүҙ биреп ҡайтты, ә малына бесән һалғансы усы ҡабарып сыҡты, бешөлкәһеҙ». Төнгә ҡаршы ҡапҡа бикләргә болдорға сыҡҡан Анастасия, кашауайҙа тәмәке көйрәтеп ултырған ирен күреп бер аҙ ғәжәпләнеп торҙо. Башта асыуланырғамы, әллә шатланырғамы тигән һымаҡ икеләнеберәк торған ҡатын, көн буйы хәсрәт утында янып һарғайған йөҙөнә тәкәбберлек билдәләре өҫтәргә тырышып, болдорҙан төшмәй генә.

— Йә, Андрей Иванович, һеҙҙе имен-һау ҡайтып төшөүегеҙ менән тәбрикләйем, — тип мыҫҡыллау һүҙҙәре атты. Ләкин бисәһенең был ҡотлауы яһалма ғына икәнен һиҙеп ултырған Андрей Иванович бер нисек тә яуап бирмәне.

— Ниңә өндәшмәйһең? Әллә араҡың менән телеңде лә ҡуша йотоп ҡайттыңмы? — тип хужабикә эстән үртәлеүен һиҙелерлек итеп яҡынан һораны.

Үҙ сиратында нишләргә белмәй сикәһе ҡорошоп ултырған Андрей Иванович:

— Нишләп мал-тыуарҙы ҡарамайығыҙ? Өйөрлө эшлек-

һеҙҙәр. Ҡонечно, һеҙ әрәм тамаҡтарға тик алдығыҙҙа ғына булһын, — тип бурылданы.

Көн буйы әллә ниҙәр уйлап, уны һарғайып көтөп ултырған хужабикәгә етә ҡалды:

— Төкөрҙөм мин һинең малыңа ғына түгел, үҙеңә лә... Һин йөрө араҡы эсеп, фәхишә ҡороп, ә мин көн буйы бында ҡарауылсы һымаҡ өй көтөп ултыр!

— Ә теге большевиктар ҡойроғо ҡайҙа?

— Нишләп ҡойроҡ булһын ти, хәҙер ысын большевик. Ул һин түгел, бисәһен тиң күреп яратҡас, өйәҙҙәге бер айлыҡ курсҡа алып китте.

Был яңылыҡты ҡабат ишеткәс, ҡарт ҡапыл урынынан һикереп торҙо ла, санала ятҡан сыбыртҡыһын алып, бисәһенә киҙәнде.

— Бар, күҙемдән юғал, инде һиңә ҡалдымы ни шуларҙың һүҙен һөйләмәгә, әллә һин дә большевиктарға яҙылдыңмы?

Бындай саҡтарҙа эштең аҙағы ни менән бөтөрөн күп тапҡырҙар һынаған Анастасия Петровна:

— Мә, кил, туҡмай һал, инде большевиктар урынына һин ҡалдыңмы? — тип һөйләнә-һөйләнә солан ишегенә атланы.

Андрей Иванович мылтыҡ шартлатҡандай тауыш сығарып, сыбыртҡыһын еүеш болдор иҙәненә һуҡты.

— Өй эсендә шул тиклем большевик үрсеп ятҡас, мәхлүк казак ҡайҙа бармаҡ кәрәк, и... — хужа һүгенә-һүгенә сыбыртҡыһын кире йомарланы. Ғөмүмән, һуңғы көндәрҙә үҙ асыуын кемгә төшөрөргә аптырап йөрөгән Андрей Ивановичтың эсендә лә ут ҡайнай. Ҡайнамаçлыҡмы ни?

Ҡабартылған йомшаҡ яçтыҡта ул бик оҙаҡ йоҡоһоҙ ятты.

## 13

Көн кискә табан ауышыуға, шөкәрәләнеп туңа башлаған яҙғы юлдағы шарлауыҡтарҙы кисә-кисә, ала ҡарҙа йылдам шыуған санала Яланға ҡайтып килеүсе Ғәлимйәндең дә күңеле бик бөçөрек ине.

«Туҡта, нимә һуң әле шул тиклем йөрәкте әрнетә? Әллә һис бер туҡтауһыҙ йәрминкә буйы көнө-төнө араҡы эсеүҙән, фәхишә ҡороп, мәрйәләр менән саманан тыш типтереүҙән шул тиклем эс-бауыр өҙгөләнәме? Юҡтыр. Нимә, минең ғүмер баҡый ошо рәүешле йәшәүгә күнеккән, бешеккән баш-йөрәк шуға ғына бирешеп тора буламы? Юҡ, юҡ. Бында мәсьәләнең төйөнө икенсерәк, мөһимерәк сә-

бәптә. Уны бер нисә көн элгәре Ҡыҙыл йәрминкәһенә килгән Андрей Ивановичтың яңы хәбәре тетрәтте. Имеш, Абдрахман фирҡәгә кергән, коммунист булған. Бына ошо яңылыҡ уға өсөнсө көн инде тынғылыҡ бирмәй. Иншалла, Ҡыҙыл, Һаҡмар һыуын һыулаған башҡорт ауылдарында партячейкаларҙың булмауы, урындағы халыҡты Совет яғына тик ҡыҫҡа мөҙҙәткә килә-китә йөрөгән урыҫ коммунистарының ғына өгөтләүе хажиҙың күңелендә совет сәйәсәтенең бойомға ашмауына ышаныс, тыныслыҡ тойғоһо уята ине. «Бына иң әүәл ошоға бинаэн Совет власы ла һәм уның сәйәсәте лә башҡортҡа ҡул түгел, башҡорт өсөн ауыл старосталары, волость старшиналары тарафынан йыл да төшөрөлгән налогты ваҡытында түләп торһа, ата-бабаларҙан ҡалған ғөрөф-ғәҙәттәрҙе боҙмай, шәриғәт ҡанундарын урын-еренә еткереп атҡарып барһа, шул буйтым еткән. Ҡөръән талап иткән инсафлыҡты, әҙәплелекте, оло-ларҙы мөхтәрәм күреп хөрмәтләүҙе халыҡ күңеленә һеңдерерлек итеп мулла-хәлфәләрҙең мәҙрәсәләрҙә, мәсет мөнбәренән көн дә туҡыған вәғәздәре муйындан ашҡан. Ә бик тә бик баш-баштаҡланып, батшаһыҙ булып, хәттин ашып барған мосолмандарҙы ҡоршауҙа тотоу өсөн Мөхәммәт пәйғәмбәр ҡушып киткән биш рәкәғәте намаҙ, ҡөрьән тәртиптәренә күндереү өсөн ураҙа тотоу, әгәр инде бик тә мохтажлыҡ булһа, ҡөрьәндәренең йөҙ ҙә ун дүрт сүрәһен күңеленә һеңдереп ятлап алыу бик тә фарыз. Бына ошоларға ижтиһад итеп, үҙ нәүбәтендә теүәл атҡарып барһа, мосолманға бер ниндәй ҙә башҡа хөкөмдөң хәжәте юҡ, бүтәнде уйларға алла ҡоло ысын мосолмандың форсаты ла, ваҡыты ла юҡ. Туҡта, туҡта, мин көфөр уйлап барам даһа... Үрҙә хисаплап үткән дини вазифаларҙың мин ҡайһыһын үҙем иң әүәл башҡарғаным бар? Ысынын әйткәндә, йәшерәк саҡта диндең асылын һөйләгән муллалар вәғәзенең һәр ҡәлимәһенә ышанып, ауыҙ асып тыңлап торған саҡтарҙа мин дә шулай дингә мөкиббән киткән мосолман инем. Тик Троицк, Орск, Ташкент, Сәмәрҡәнд ҡалаларында мәҙрәсә менән ҡатар башҡа мәктәптәрҙә уҡыу мине мосолман диненең үтерек[1] булыуы, ә ҡөрьән бөтөнләйе менән үҙ рәсүле Мөхәммәт пәйғәмбәр аша әйтелгән алла һүҙе түгел, тик шуға инанған мосолман халҡының аңын томалау, уның ихтыярын, көс-ғәйрәтен һындырып, азатлыҡҡа булған теләгенә ҡаршы ныҡлы бер ҡоршау булыуына төшөндөм. Эйе, мин дингә, аллаһына ла, силғау сәйнәгән шикелле, мөнбәрҙә сурытып вәғәз әйткән наҙан муллаһына ла әллә ни ышанмайым. Ышанған минең ауылдаш-

[1] Үтерек — алдау, буш хәбәр (ҡаҙаҡса).

тар ышанһын, ҡаршылығым юҡ. Миңә ошбу йәшәп килгән тормош рәүеше хуп. Шулай булғас, башҡорт халҡы өсөн ошо ҡанундарға нигеҙләнгән, бәләкәйерәк булһа ла үҙенең айырым милли дәүләте булһа, башҡа уға бер ни ҙә кәрәкмәй. Беҙҙең халыҡ Петроград, Мәскәү эшселәре уйлап сығарған сәйәсәттән ситтә торорға тейеш, юҡ. Мин бер кемгә лә буйһоноп, кәпәс һалып, баш эйеп йәшәргә теләмәйем. Дөрөҫөн генә әйткәндә, миңә Николайы ла, Советы ла кәрәк түгел, тик миңә теймәгеҙ, әгәр инде минең яҡҡа ҡарап бармаҡ янаһағыҙ, мин инде, бигәйбә, ундай ҡапаҡты күтәрә алмайым, теләһә кемегеҙҙең боғаҙынан алам. Бына мин ниндәй кеше! Мине Николай ярандары ла аңлап бөтөрмәне, ә инде Совет көсөктәре тураһында һөйләп тә тораһы юҡ.

Ә унан был властың тамаҡҡа арҡыры торған, бармаҡ шәбеһенә ингән ҡарағас шырауы һымаҡ, йәнгә тейгән бер ғилләһе бар. Имеш, йәмғиәт күпселек иҙелеүселәр, әҙселек иҙеүселәр синыфынан тора. Имеш, быуаттар буйына иҙелеп йәшәгән синыф, бына шул иҙеүселәрҙе юҡ итеп, үҙ хакимлығын урынлаштырырға тейеш. Бөкилле буш, туҙға яҙмаған тәғлимәт. Мәскәү, Петроград, Екатеринбург губерналарында, бәлки, шулайҙыр ҙа. Ә беҙҙең мосолман ғәләмендә, алайыҡ беҙҙең Ирәндек ҡуйынына һыйынып ултырған ҡараңғы башҡорт ауылында, ҡайҙа ул бер-береһенә ҡаршы торған иҙеүсе һәм иҙелеүсе синыфтар? Беҙҙә улар булғаны ла юҡ һәм булмаясаҡ та. Миҫал өсөн фараз иткәндә, ғүмер буйы миндә йылҡы көткән Килдебай, бауыры ҡалҡҡандан алып һыйыр-һарыҡ көтөп, минең алда йөрөгән ҡыҙ балаға өйләнеп, хәҙер минең ихаталағы мал өйөндә йәшәгән Мотаһар иҙелеүсе буламы? Ә мин кем? Уларҙың хеҙмәтенән файҙаланып, байлыҡ йыйған иҙеүсе буламмы? Бөкилле буш хәбәр. Сөнки беҙ Яӈан ауылының түбән остары барыбыҙ ҙа бер ата балалары, Яйҡар ырыуының бер ҡор булып, уҡмашып йәшәгән кешеләре. Шулай булғас, быуаттар төпкөлөнән бирле йәшәп килгән был араны ниндәйҙер иҙеүселәр һәм иҙелеүселәргә бүлеп, ырыу тарҡатырға бер кемдең дә хаҡы юҡ, ул бер ниндәй ҙә синыфтарға бүленмәй, ул ҡоролош — изге. Беҙ ни күрһәк тә бергә күрәбеҙ. Асыкһаҡ, бөтә ырыуыбыҙ менән ҡуша бергә асығабыҙ, ә инде байыһаҡ, шулай уҡ бергә байыйбыҙ. Быға миҫал итеп йыл да йәй башында күсенеп сыға торған йәйләүҙе генә алайыҡ. Бөтә яйҡар ырыуына ҡараған егерме ике йорт хужаһы — ярлымы, баймы — бер табандан Ирәндек тауының Ҡараташ аҫтына йәйләүгә күсеп сығып, бер ата балаларылай ҡара көҙгә тиклем мал аҫрап, бейә бәйләп, ҡымыҙ эсеп ята. Унда

иҙеүсе һәм иҙелеүсе бер синыф та юҡ. Минең ҡәрҙәш яҡын туғандар минең малды көтөп, минең тирмәлә ашап-эсеп көн итә. Ә Фәйзулла хажиҙың туған-тыумасаһы йәй буйы уның аҡ тирмәһе тирәһендә урала, бер кем дә, мин һинең малыңды көтәм, һин мине нишләп иҙәһең тип яғалашмай, бөтәһе лә туғандарса. Ул шулай хан заманынан килгән һәм киләсәктә лә шулай булырға тейеш. Тик бына революция ғына сығып, бөтә йәмғиәтте ике синыфҡа бүлеп, бер-береһенә ҡаршы ҡотортто, бына шуның сарпыуы беҙгә лә килеп етергә самалай. Ошоға тиклем боронғоса, бик хөр-хиләүәт йәшәп ята инек бит әле. Бына ошо беҙҙең мосолман ғәләменә бик тә ҡулайлы тормош бәлшәүиктәргә оҡшамай имеш. Уларға мотлаҡ тыныс йәшәп ятҡан мосолман донъяһын таяҡ тығып, ҡырмыҫҡа иләүе шикелле, әҙәмде бер-береһенә ҡотортоп, болғатырға кәрәк. Ә бына нәҡ беҙҙең ауылдың кешеһе, ул ғына ла түгел, минең яҡын ҡусты тейеш Абдрахман, бына шул болғатыусыларҙың береһе булып, фирҡәгә яҙылған. Уның тәьҫире Обручевка хуторында ғына бикләнеп, баҫылып ятмаҫ, уның көслө шойҡаны Ҡыҙыл үренә — Ялан ауылына ла килеп етер бит. Был осҡондо ваҡытында сараһын күреп һүндермәһәң, ҙур ялҡынға әйләнеп, дөрләп яна башлаһа, терһәгеңде тешләрһең дә, ләкин һуң булыр...»

Ҡыл тартмалы юлдан ошо ауыр уйҙар даръяһында йөҙгән, ҡыңғыраулы өс тимер күк толпар еккән Ғәлимйән Ялан ауылына етерҙән алда һуңғы ҡабаҡтан төшөп килә. Юл буйы ятып килгән мендәренән тубалдай башын ҡалҡытып, терһәгенә таянды ла, тәмәкенән, араҡынан ҡарлыҡҡан тауышы менән:

— Эй, һин, аттарҙы Әбделғәлим ағаңдар өйөнә туҡтатырһың, — тип әмер бирҙе.

Бер ҡасан да артына боролоп, ҡайтанан һорау биреп күнекмәгән күсер эстән генә: «Ағайым ғүмерендә инмәгән Әбделғәлим ҡарттарҙа нишләмәк итә икән?» тип ғәжәпләнде.

Ике рәт булып теҙелеп киткән бер генә урамлы ауыл осона килеп ингәс, күсерҙең дилбегә ҡағыуын да көтмәй, ярһыған аттар баш ташлап, үҙ йөрөшөн берҙәй шәбәйтә төштө. Ике мисәү аты муйындарын ике яҡ ситкә дуғалай бөгөп, йән-фарман сабыуға күсте, ә инде үҙ тояҡтары менән Урал аръяғы юлдарын байтаҡ тапаған тәжрибәле ҡара күк төпкө ат, тирле шлеяға ултырған килеш, алға аяҡтарын ташлап юртыуға күсте. Уларға быны өсөн бер генә шипкерт тә кәрәкмәй, улар үҙ ауылдарының осона ингәс тә шундай ғәҙәткә күнеккән, үҙ вазифаларын был хайуандар кешегә ҡарағанда ла яҡшыраҡ белә.

— Аттарыңды ярһытма, дилбегәнде ҡулыңа урабыраҡ тот, — тип ҡысҡырҙы Ғәлимйән, туңа башлаған суртмаҡтарҙы тояҡтары аҫтынан осора-осора юртҡан аттарына ҡарап. — Өйҙәре тәңгәленә еткәс, туҡтата алмаҫһың, — тип өҫтәне.

Ысынлап та, ярһыған аттар Әбделғәлим ҡарттарҙың тырансалары бурһып бөткән өйөнән үтеңкерәп барып туҡтаны.

— Әйттем бит мин һиңә, эшкинмәгән.

Ғәлимйән һүгенә-һүгенә сананан һикереп төштө лә юлда таушалған өҫтө-башын төҙәтә-төҙәтә Әбделғәлимдәргә инеп китте.

Яландың бөтә халҡы тигәндәй алабута, ҡырҙыҡ ашап ятҡан мәлдә, Әбделғәлим ҡарт менән Сәрбиямал ҡарсыҡтың кетерләтеп табала күмелгән һап-һары сөсө икмәккә ҡушып сәй эсеп ултырыуы ҡапыл рөхсәтһеҙ-ниһеҙ өйгә килеп ингән Ғәлимйәнде ғәжәпкә ҡалдырҙы. «Был көрпәсәткә оно, моғайын, Яйыҡ түбәненән Андрей ҡарттың бураһынан килеп ингәндер инде». Ул, йөнтәҫ ҡаштарын төйнәп үткер ҡарашы менән өй эсен байҡап сыҡты ла сәләм бирҙе.

— Вәғәләйкүмәссәләм, ҡустым. Ҡайһылай ҙа һөйләмәй генә йөрөйһөң. Әйҙә, әйҙә, түрҙән уҙ, — тип Әбделғәлим ҡарт өтәләнеп урынынан тороп китте. — Әбей, ана алла ҡунағына самауырыңды яңыртып ебәр, — тип өҫтәне.

Ләкин ҡуҙғалмай бер урында торған Ғәлимйән хажи аяғына кейгән кузлауай итектәрен һалып, ҡарттың ҡоро сәйенә бик үрелеп барманы. Күпте күргән Әбделғәлим ҡарт хажиҙың ҡайҙан ҡайтып килгәнен яҡшы белгәнгә күрә, уның теләген һиҙеп:

— Элгәре заман булһа, анау кафыр йылтырын да табыр инек, биғәйбә, — тип аҡланырға тырышҡандай һөйләнде.

— Хәжәте юҡ. Мин һеҙгә йылтыр эҙләп инмәгән.

— Улайһа, әҙерәк ултырып сыҡ. Хәл ал. Ул ниткән, атлы ҡаҙаҡ шикелле, аяҡ өҫтө баҫып тороу ти? — ҡарт һике ҡаҙнаһынан урын күрһәтте.

Хажи ҡуҙғалманы.

— Хуп. Мин ни өсөн юл һуҡтым әле һеҙгә? Теге Абрашауҙағы этегеҙгә урын әҙерләп ҡуйығыҙ.

— Ул ниткән эт?

— Абдрахманды әйтәм.

Быңдай тупаҫлыҡ ҡыҙыуыраҡ холоҡло Әбделғәлим ҡарттың шыртын оторо һыпырған ише булды. Ул да үҙе алдында торған хажиҙан, уның ажар рәүешенән бик өркөп барманы.

— Хажи, һөйләһәң, хәбәренде әҙәм рәтле һөйлә, һине бында саҡырып индергән кеше юҡ. — Ана ята юлың, тип тә ысҡындырырға уҡталғайны, ләкин тотолоп ҡалды.

— Бөтә ингән йомошом — шуны ғына әйтеү: малайығыҙҙы бөгөн-иртәгә Андрей знакумығыҙ Абрашауҙан һөрөп ҡыуып ҡайтарасаҡ, бына шуға теге кафирәһе менән бергә тормаға урын таярлап ҡуй. — Ғәлимйән «теге, эттән тыуған малайығыҙҙы», тип әйтергә уйлағайны, тик былай ҙа әллә ни уйлап түрбаш яғында күҙҙәрен сырт-сырт йомоп, ең осо менән эркелгән йәшен һөртә башлаған Сәрбиямал еңгәһен йәлләне.

Бер аҙ ғәжәпкә ҡалған Әбделғәлим:

— Һуң ни эшләп әле улай Андрей минең малайҙы ҡыумаға булып китте? — тип һораны.

— Һинең ул игелекһеҙ малайың бәлшәүиктәр фирҡәһенә яҙылып, ҡулына кәзә билеты алған. Уға хәҙер Андрей өйөндә урын юҡ.

Тамам аптыраған Әбделғәлим ҡарт шыйыҡ ҡына кәзә һаҡалының осон ирендәре менән ҡымтыны ла:

— Һә-лл-ә, — тигән булды.

— Һәллә-мәлләһе юҡ. Фирҡәгә яҙылып, коммунист булып ҡайтһа, уға бында ла, урын юҡ. Мин әйтмәне тимәгеҙ, ат тәртәһенә муйынынан бәйләп, арҡаһының ете ҡат тиреһен мына үҙем тунармын. Малайығыҙ ҡәҙерле булһа, ошо сәләмде ул ләғнәткә еткерегеҙ, — хажи, аяғы аҫтына сырт төкөрҙө лә, ишекте шарт ябып, өйҙән сығып китте.

Эштең асылын төбөнәсә белеп еткермәһәләр ҙә, хажиҙың ҡабыҡ ҡағып һайыҫҡан осора торған кеше түгелле-ген, ул ысҡындырған һәр һүҙҙең һәлмәклеген ҡарттар күптән белә. Шуға күрә улар оло ҡайғыға тарыны, улдарының бына-бына ҡайтып төшөүен дүрт күҙ менән көттө.

## *Өсөнсө бүлек*

### 1

Март аҙаҡтарында Обручевка ауылына терәлеп торған яланғас сағылды ҡаплап ятҡан тәрән ҡар, зәңгәр күктә хәрәкәтһеҙ аҫылынған ҡояш нурҙарына һыртын ҡуйып сағыла-сағыла, үҙенең ап-аҡ төҫөн ҡуңыртландырып тутлата башланы, тора-бара көн битләүендәге ҡар өҫтө шаҙраланып, ала-ҡола ҡорама юрған ябынды. Әле ошоға тиклем. яҙ ҡояшы менән алышып, бирешергә теләмәгән

ҡыш көләс йөҙлө тәбиғәт йәшлеге яҙға үҙ ҡапҡаһын асып, миҙгелде ҡаршы алмайынса булдыра алманы. Уйпат ерҙә урынлашҡан Обручевканы уратып алған түмәләстәр әкренләп үҙҙәренең ҡышҡы япмаһын алмаштырҙы. Көн үҙәгендә нурға мансылып йомшарған епшек ҡар аҫтындағы яҙғы һыу үҙенә юл йырып, йөҙәрләгән гөрләүектәр булып, ауыл урамына йүгерҙе.

Бындай мәлдә бер кемдең дә өйҙә ултырғыһы килмәй, бөтә әҙәм урамға ашыға. Ҡыш буйы үтә алмалы тишек-тошоҡ тар һарайҙа ҡышлап, ябыҡ сыҡҡан ҡош-ҡорт та сыуаҡҡа тартылды.

Иртә менән тау ашаһынан ашыҡмай ғына күтәрелеп, үҙенең тәүге наҙлы нурҙары менән бөтә тәбиғәтте мансыған апрель ҡояшы, барлыҡ йәнле тереклекте, шул иҫәптән, ҡышҡы сасҡау һыуыҡтар үҙәгенә үтеп интегеп яфа сиккән әҙәм балаларын да хәрәкәткә өндәне, һәр йорт тәҙрәһе аша төшкән иртәнге наҙлы нуры менән һәр йән эйәһенә өмөт сатҡылары өләште.

Ошоға тиклем Обручевканы устарында бейеткән ауыл кулактары ла үҙ ялсыларын ҡыҫтап ҡыуа-ҡыуа яҙғы сәсеүгә әҙерлекте тәкрарлап, йылдың килешенә ҡарап, ергә күберәк орлоҡ һибеп ҡалдырырға тырышты. Ундайҙар үҙ ихатаһының артына терәп эшләнгән ябыҡ ырҙын янына сығарылған һабандарын, сәскестәрен майланы, ҡамыт-сбруйҙарын барлап, йүнәтеп сыҡты, һабан аттарын башҡа йорт эштәренән бушатып, ашатырға ҡуйҙы.

Совет менән ауылдың партячейкаһы ла йоҡлап ятманы. Хөкүмәттең кредит йәмғиәте һәм ауыл кооперацияһы аша ебәрелгән ярҙамынан тулыһынса файҙаланып ҡалырға тырышты. Абдрахман Игебаев, Иван Кочергин, Михаил Рыбаков һәм яңы ғына партия сафына алынған башҡа коммунистарға таянып, шулар ярҙамында ауыл ярлыларын нисек тә күберәк сәсеүгә ылыҡтырыу сараһын күрҙе. Бына бөгөн дә кредитҡа орлоҡ һатып алған бер нисә фәҡир, үҙҙәренә тейеш кубань бойҙайын бәләкәй санаға тейәп, өйҙәренә йүнәлде.

Ошо арала ауыл ярлыларына ярҙам итеү мәсьәләһе менән унда ла, бында ла сабыулап йөрөгән Совет председателе Дедконың һаҡал-мыйыҡ баҫҡан ҡаҡса йөҙө һурыға төштө, битендәге ғәҙәттәге тыныслыҡ һыҙаттарын тәрән етдилек, хәстәрлек шәүләһе алмаштырҙы. Эйе быйылғы яҙ уға һәм ул етәкселек иткән партячейкаға байтаҡ мәшәҡәт өҫтәне. Обручевканың йөҙгә яҡын ярлы хисапланған йорт хужаларынан тик ундан ашыуы ғына кредит хисабына орлоҡ һатып алып, иген сәсергә ризалыҡтарын белдерҙе. Ә ҡалғандары йә йоттан бик йонсоп сығыу сәбәпле,

һабан һөрөп иген сәсеүгә яраҡһыҙ, ә икенселәре, үҙ ғүмерендә бер тапҡыр ҙа ураҡ урмағандары, хөкүмәттең быңдай сараһын ишетеү менән ҡырҡа баш тартты. Ә ҡайһы бер донъя күргәнерәктәре, осһоҙ хаҡ менән таратып бирелгән орлоҡто шундуҡ ашай башланылар. Нисек әйтһәң дә, АРА аша бирелгән серек борсаҡ онона, концентратҡа ҡарағанда, кубань бойҙайының һап-һары икмәген ашауҙы халыҡ артығыраҡ күрҙе. Өҫтәп әйткәндә, иген сәсә белгән ярлыларҙың бер өлөшө Абдрахман кеүек кулактарҙа ялсылыҡта йөрөй ине.

Партячейка, ауыл Советы бындай кешеләр араһында киң өгөт-нәсихәт эшен йәйелдерҙе. Иртәнән алып ҡара кискә тиклем Совет бинаһының ишеге ябылманы. Степан Ильич, волость менән ике арала йөрөп арыған губерна вәкиле, ауыл активына ярҙамға өйәҙ ерселек шөғбәһенән (бүлегенән) берҙән-бер агрономды махсус саҡыртты. Совет бинаһының стеналарына үҙе менән алып килгән диаграммалар, яровой сәсеүгә арналған күргәҙмә материалдары элеп, был күҙлекле әҙәм тамағы ҡарлыҡҡансы сәсеү агротехникаһы, яҙғы һөрөү, тырматыу, орлоҡто сәсеүгә әҙерләү һәм уның нормалары хаҡында аңлатыу үткәрҙе. Таратып биргән орлоҡтоң әрәм-шәрәм итеү факттары асыҡланғас, уны тик йорт хужаларының ҡултамғаһы менән тәүбә иттереп тигәндәй, бирә башланылар. Яҙғы сәсеүгә әҙерлек мәлендә тағы бер ҙур ғына сетереклек килеп сыҡты: сәсеүгә бөгөн үк сығырға үҙ теләктәрен белдергән, ҡайһы бер ауыл ярлыларының үҙҙәренә тейеш ер биләмәләре күптән һатылған икән. Совет власының ергә шәхси милекте бөтөрөү һәм уны дәүләт милкенә әйләндереү тураһындағы декреты, күптән иғлан ителеүгә ҡарамаҫтан, Обручевка ауылында ғына түгел, күп урындарҙа үҙ общинаһы йәки обществоһы тарафынан йылдың йылы быуындан быуынға сәселеп килгән ер биләмәләре, нигеҙҙә иген игеүсе кулактар ҡулында тупланыуы сәбәпле, уларға бер аҙ үҙ нәфселәрен тыйып, ҡыҫылырға тура килде. Ә был эш, ҡоралға уҡ барып етмәһә лә, оло ғына шау-шыу ҡуптарҙы.

Әҙерлек эштәре тамамланғас, ауыл Советы председателе һәм партячейка секретары Дедко үҙенең ҡуйын дәфтәренә: «Ауыл ярлыларына быйылғы яҙғы сәсеүҙе уңышлы атҡарып сығыу өсөн йәмғеһе егерме ат, ун һабан һәм биш йөҙ бот орлоҡлоҡ бойҙай һатылды», тип теркәп ҡуйҙы. Тәүге яулап алынған уңыш уны ғына түгел, ячейканың бөтә коммунистарын да ҡанатландырып ебәрҙе.

Степан Степановичтың тәүге шатлығы бик оҙаҡҡа барманы. Апрель урталарында, яҙғы гөрләүектәр ағып бөтөп,

ер һурыға башлаған мәлдә, Яйыҡ боҙо яҙ менән хушлашҡандай шатыр-шотор шартлап китә башлағас, ул бик тә ашығыс, ҡәтғи йөкмәткеле телеграмма алды. Уны өйәҙ менән волость араһында йөрөгән сапҡынсы фельдегерь, ҡултамға һалдырып, төндә тапшырып китте.

Йорт хужаһы Степан, кистән бик ҡаты йүткереп интеккән, әле яңы ғына йоҡоға киткән икенсе Степанды уятты. Шәм яҡтыһында икәүләп, ҙур һаҡлыҡ менән конвертҡа һалынған ҡағыҙҙы сығарып, уҡырға керештеләр. «Партияның Верхнеурал өйәҙ комитеты һәм өйәҙ башҡарма комитеты һеҙгә түбәндәге эште бойомға ашырыуҙы ҡәтғи йөкмәтә: юғары фирҡә һәм совет инстанцияларындағы килешеүгә бинаэн, орлоҡ сортын алмаштырыу маҡсатында өс көн мөҙҙәт эсендә Ҡыҙыл волосының ер шөғбәһе Башҡортостан йөмһүриәте, Таналыҡ-Түңгәүер кантоны, Нәмәс волосы крәҫтиәндәренә быйыл сәсеү өсөн ике мең бот кубань бойҙайы табып биреүҙе ҡәтғи ҡуша, шул иҫәптән, Обручевка обществоһы ике йөҙ бот орлоҡҡа иген тейәтергә бурыслы. Орлоҡ тейәргә килеүсе иптәштәр ҡулында волость ерселек шөғбәһенең ышаныс ҡағыҙы булыуы мотлаҡ». Аҫтында — етәкселәрҙең ҡултамғаһы. Был күрһәтмәне уҡып бөткәс, ике Степан да артына ултыра төштө.

— Был ни эш? Был ниндәй ахмаҡлыҡ? Бөгөн-иртәгә сәсеүгә сығырға торабыҙ.

— Был тик ҡороҡослоҡ ҡына! Башҡа бер ни ҙә түгел, — тип ярһыны Степан Ильич, ҡулындағы ҡағыҙ киҫәген һелкә-һелкә. — Иртәгә үк волосҡа барып, телефон аша өйәҙ менән һөйләшергә кәрәк, бындай ауыр заданиены бөгөн-иртән генә башҡарып сығыу мөмкин түгел.

— Әйтергә генә анһат — ике йөҙ бот игенде ҡайҙан тапмаҡ кәрәк. Хәҙер...

Ике етәксе таң атҡанын көтөргә булды.

Ауыл Советы председателе, иртә үк атын эйәрләне лә волосҡа сапты, ләкин волкомда уның менән һөйләшеп тә торманылар. Уларҙың стенаға беркетелгән, еҙ ҡомған ҙурлығындағы, телефонды дыңғырлатып бороп, өйәҙҙең ер шөғбәһе менән һөйләшеүҙәре лә бер ниндәй нәтижә бирмәне. Степан Степановичтың илар сиккә етеп ҡарлыҡҡан тауыш менән иҫбат итергә тырышыуына ҡаршы:

— Ул разнарядка һеҙгә генә түгел — бөтә губернаға, мәркәздең күрһәтмәһенә ҡаршы төшөү мөмкин түгел, — тип кенә яуап бирҙеләр.

— Ул ике йөҙ бот игенде килгән ылаусыларға ниндәй шарт менән тейәтеп ебәрәбеҙ? — тигән Степан Степановичтың үтенеүенә:

— Ҡулактарҙың киләсәктә түләйһе һалымдары хисабына йыйығыҙ, — тип трубканы элделәр.

Балтаһы һыуға төшкән кеше кеүек, һөмһөрө ҡойолоп ҡайтып инде Степан Степанович. Уға вәкил менән берлектә ауылдың хәлле крәҫтиәндәрен, буралырында игене булған кулактарын яңынан саҡырырға тура килде.

## 2

Төн сыҡҡансы күҙ йоммаған Андрей ҡартты, гүйә, йәрминкәнән йөрөп ҡайтыуын көтөп торғандар — таң һарыһынан тағы ла ауыл Советына әйҙәнеләр. «Был сволочь Дедкоға мин ни ерем менән оҡшап ҡалдым әле, әллә инде шул тиклем күргеһе килеп тора, саҡыра ла саҡыра», тигән уй менән ул мыштыр-мыштыр кейенгәс, ихатаға сыҡты. Талғын ғына иҫкән һалҡынса ел уның танауына бесән, тиреҫ, мал тиҙәгенең әскелтем-сөскөлтөм еҫен бәрҙе. Ул танауын сирып болдорҙа бер аҙ торҙо ла ошо арала һиҙелерлек бөксәйә төшкән кәүҙәһен тағы ла аҫҡараҡ эйеп, Совет йортона йүнәлде. Карп Ивановичтың ҡунаҡ өҫтәле артындағы көс-ғәйрәт, тәүәккәллек әллә ҡайҙа осоп киткәндәй тойолдо аяғын саҡ һөйрәп атлап барған Андрей ҡартҡа, тик большевиктарға булған һүнмәҫ нәфрәт кенә уның йыйырсыҡлы мейеһенең бер мөйөшөнә мәңге инеп урынлашҡан да һис тә тынғы бирмәй, башын ҡайната. «Әллә Степан Степанович Ҡыҙыл станицаһында беҙ һөйләшеп ултырған теге хәбәрҙәрҙе берәр шымсыһын ебәреп тыңлатты микән? Алла һаҡлаһын! Ул саҡта эш харап, башың ғүмер буйы төрмәлә серер», тип үҙенең шомло уйынан үҙе бөжләгән Андрейҙың теҙ быуындары ҡалтырап китте. Ул үҙенең өҙөлөп ҡалған күңелһеҙ уйын ялғарға тырышты. «Ауыл Советы председателе үткән саҡырғанында ла: «Ҡара уны, Андрей Иваныч! Әгәр төҙөлгән договорҙы боҙоп, үҙ ялсыңды ауылына кире ҡайтып китергә мәжбүр итһәң, закондың бөтә ҡатылығын ҡулланырбыҙ», тип киҫәтеп сығарғайны, был юлыһы ла шул мәсьәлә менән саҡырғандыр. Йә теге, Абдрахман, һуңғы талашыуҙан һуң минең өҫтән ялыу-фәлән тишкәндер. Әллә инде бисә ҡарғышы төштө, кисә ҡатыраҡ бәрелгәйне. Шомло уйҙар менән Андрей ҡарт ауыл Советының ишеген аша уҙҙы, ләкин эш ул уйлағанса булып сыҡманы. Ялбыр башын өҫтәлгә эйеп, ниҙер яҙып ултырған Совет председателе, ишек төбөнән түр яҡҡа үтергә ҡыймай торған Андрей Ивановичҡа эйәк ҡағып, үҙ өҫтәле ҡырынан урын күрһәтте. Ҡарт, башындағы бүркен ҡулына алып, аяҡ

осо менән генә атлап, председатель алдындағы ултырғыс-ҡа шым ғына килеп ултырҙы. Әллә саманан тыш төшөрөү арҡаһында, әллә инде башҡа сәбәп менәндер, уның тәне генә түгел, бөтә йәне ҡалтырап өшөй ине. Маңлайына һалҡын тир бәреп сыҡты. Элекке замандарҙа уны күргән ерҙән кәпәсен алып «здравие» теләп үткән Степка һуңғы осорҙа осрашҡан һайын нығыраҡ ҡурҡыта башланы. Бына бөгөн дә уның етди ҡиәфәте, үҙен бойондороҡһоҙ, иркен то-тоуы, алдында ултырған, ҡасандыр шөһрәтле, ҡөҙрәтле ауыл уҙаманын, ҡалтыранырға мәжбүр итә. «Был беҙҙең һымаҡ эсеп иҫереп, кем уҙарҙан түш һуғып ултырмай, кә-пәренмәй ҙә, бөтә ҡыланышынан ғәйрәт, ихтыяр көсө бөр-көй, быға эләкһәң, атанды танытыр», тип уйланы Андрей Иванович, председателдең өҫтәл өҫтөндә ятҡан, ғүмер бу-йы эшкә сыныҡҡан көрәктәй ҡулдарына ҡарап. Бер аҙ көткәндән һуң председатель яҙған ҡағыҙын ситкә этте лә элекке таныш Степка тауышы менән, бөтөнләй ҡарт уй-лағанса түгел, тыныс ҡына мөрәжәғәт итте.

— Андрей Иванович, һин вәғәҙәңде үтәмәнең. Үткәнен-дә беҙ һинең менән улай һөйләшмәгәйнек. Һин һаман элеккесә үҙеңдекен ҡыуаһың, батрагыңа ҡарата мөнәсәбә-тең насар, тупаҫ. Әгәр улай-былай низағ килеп сыҡһа, мин алдан әйтмәне, тип аҙаҡ хәбәр һөйләп йөрөрлөк булма-һын. Ишеттеңме, ҡарт? — тип ул оҙаҡ ҡына һынаулы ҡа-раш менән һуңғы осорҙа йөҙө лә, үҙе лә нык ҡына ҡау-жый төшкән ҡартҡа теклəп ултырҙы.

Степандың был беренсе тапҡыр Андрей Ивановичҡа «ҡарт» тип өндәшеүе ине. Бындай күнекмәгән, ҡолаҡҡа сәйер мөрәжәғәткә Белов ҡарттың да күңеле кителеп, сиккәһе ҡорошоп ҡуйғайны ла, ни хәл итәһең — власть вәки-ленә ҡабарынып бер эш тә ҡырып булмай шул, замана-лары икенсерәк хәҙер. Шул ғиллә буйынса ғына саҡыр-ғандыр, тип бүҫерек күңеле үҙ яйына төшә башлаған ҡарт, нисек тә түбәнсел булырға тырышып:

— Йәшәй генә күрһен, Степан Степанович, уны өйҙән кем ҡыуа? Үҙе теләгәнсә йәшәһен, донъя булғас әҙ-мәҙ ғауғаһыҙ ҙа булмаҫ инде. Тарһынған юҡ, ул беҙҙә тулы хоҡуҡлы ғаилә ағзаһы булып йәшәй. Ә бисәһе хаҡында һөйләп тораһы ла юҡ, Настя уны үҙ ҡыҙынан да была-йыраҡ тәрбиәләй. Беҙ хәҙер барыбыҙ ҙа тип-тиң, бер ти-геҙ хоҡуҡлы граждандар түгелме һуң?

Эштең былай осланыуына тамам ышанған ҡарт, шат-лығынан тағы әллә ниҙәр һөйләргә уйлағайны ла, ләкин Степан Степановичтың:

— Уныһы шулай ҙа ул... — тип ситкә ҡарап өҫтәл өҫ-төндә бармаҡтарын шаҡып ултырыуы ҡартты тағы ла боҙ-

ло мәкегә тығып алғандай итте, уның элпелдәп кенә торған йәне тағы табанына төшөп киткән шикелле булды. «Ярай әле, аллаға шөкөр, бында мин бер үҙем генә икән әле» тигәндәй, ул ян-яғына алан-йолан ҡаранды.

Совет председателе һүҙҙәре ҡурғаштай һәлмәк.

— Беләһеңме, Андрей Иванович, мин һине Советҡа ни өсөн саҡырҙым: бөгөн үк йоҡо бүлмәңдә келәмгә аҫып ҡуйған боевой карабиныңды, ҡылысыңды үҙ ҡулың менән килтереп тапшыр. Һиңә уларҙың хәжәте бөттө.

Быны ишеткәс, ҡарт бер аҙға ҡаушап, бөтөнләй ҡойолоп төштө. Һелтәгән ҡылыстан боҫорға теләгәндәй, ул ҡапыл башын йәшерҙе, ныҡ шөрләүенән ҡалтыранған өҙөк-өҙөк тауыш менән:

— Ә буш хәбәр! Ошондай шомло осорҙа өйөмдә боевой ҡорал һаҡлап ятырға мин бөтөнләй тинтәк түгел, — тип ялтанырға уйлағайны.

— Иҫән сағыңда, ул ҡорал үҙ башыңа етмәҫ борон, килтереп тапшыр. Тентей башлаһаҡ, күберәген дә табырбыҙ...

Председателдең һуңғы ҡәтғи һүҙе Андрей Ивановичты тиҙ айнытты. «Был Совет әте бына мине ни өсөн үҙенә саҡырған икән?» Ҡапыл уның сатнап шартларҙай булып ҡыҫылған ике сикәһенә ике ҙур төйөр килеп тығылды, күҙҙәрен ниндәйҙер томанлы шәүлә ҡаплаған һымаҡ булды, ул шулай һеңгәҙәп байтаҡ ултырҙы. Ике Совет вәкиленең кулактарҙан өҫтәмә иген тапшыртыуҙы талап иткән етди һөйләшеүҙәрен дә ишетмәне.

Степан Степановичтың талсыҡҡан тауыш менән яңы килеп тыуған хәлде аңлатыуы бөтөр-бөтмәҫтән, кулактар тәүҙә ҡырҡа баш тартты:

— Совет власы көпә-көндөҙ кеше талай!

— Баш-баштаҡлыҡҡа ҡасан сик ҡуйылыр? Был — үҙегеҙ уйлап сығарған баштан-аяҡ законһыҙ ғәләмәт.

— Игенде дәүләт элек уңыш йыйып алғас, әҙерләй торғайны, хәҙер ниндәй тәртип ул — сәселмәгән игенде апрель айында тартып ал, имеш? Дөрөҫ түгел!

Кулактар күпме генә ныҡышмаһын, элекке һымаҡ Совет власының сәйәсәтенә туранан-тура янау ишетелмәне. Ауыл Советы председателе генә түгел, вәкил дә бында йыйылған кешеләрҙән шундай берҙәм ризаһыҙлыҡ менән ҡырҡа баш тартыуҙарын көткәйне. Әгәр сиктән тыш хәл килеп тыуһа, уларҙың ихтыярын һындырып йыуашайта торған ҡоралдың галифе кеҫәһендә ятыуы ике вәкилде лә батырландыра... Ә быҙдай ҡырҡыу ваҡиға сығыуы улар өсөн уңайлыраҡ та, былай сауҙалашып ултыраһы түгел, сөнки ике вәкил дә үҙҙәренең шәхси ҡоралын шыҡылда-

тып өҫтәл өҫтөнә һалырҙар ҙа, артабан сафсата һатып ултырыуҙың хәжәте юҡ. Бер-ике йыл элегерәк бәлки, уның аҙағы шулай тамамланыр ине, ләкин хәҙер ике яҡҡа ла һаҡлыҡ, яһалма булһа ла, яҡты сырай күрһәтергә, ҡорал менән янауҙы өгөт-нәсихәткә алмаштырырға, әҙәп һаҡларға тура килә. Сират, башын ике ҡулы менән терәп уйға сумған Андрей Ивановичҡа килеп терәлгәс, ул ҡапыл йоҡоһонан уянғандай урынынан һикереп торҙо ла ҡарашын түшәмгә текәне.

— Теләһәгеҙ нишләгеҙ, хәҙер минең хужалығым бөттө. Барса мөлкәтемә һеҙҙең алда йүгереп йөрөгән активығыҙ Абдрахман хужа. Шуның менән эш итегеҙ, — тине лә, уң ҡулын биленә таянып, ишек яғына ыңғайланы. — Кешеләрҙең аҡтыҡҡы малын, һуңғы бөртөк орлоғон тартып алып бөтмәйенсә, һеҙ барыбер тынысланмаҫһығыҙ ахыры, — тип сыға башланы.

«Бына быныһы ҡайһылай ҙа уңай — Абдрахман менән эш итеүе беҙгә бигерәк еңел», тигәнде аңлатып, председатель ҙур ризалыҡ менән баш һелкте, ҡарттың һуңғы төртмәле осло һүҙҙәренә артыҡ иғтибар итеп торманы. Ҡайһыһы ун, ҡайһыһы ун биш бот орлоҡ тапшырыуҙы өҫтәренә алып, ҡалған кешеләр Советтан һуң ғына таралышты.

3

— Рәсәй йөмһүриәте енәйәт ҡанундарының[1] өйҙә ҡорал һаҡлаған өсөн матдәһе[2] бик ҡаты. Ун йылға тиклем хөкөм итеү ҡаралған. Үҙ ихтыярың менән бөгөн килтереп тапшырмаһаң, иртәгә үк Гыпыуынан кеше саҡыртып, өйөңә тентеү яһатам! Үҙең килтереп тапшыр! Фетнәләш иптәштәреңә лә әйт! Төшөндөңмө?

Степандың һөйләгәнен керпек тә ҡаҡмай тыңлап торған Андрей Ивановичтың ҡолаҡ төбөндә ошо тауыш бик оҙаҡ яңғырап торҙо. Ул ошо минутҡа тиклем үҙенең бөтмөшө менән Совет власын килде-китте власҡа хисапланы. «Беҙ нисек теләйбеҙ, уны шулай бөгәбеҙ. Кәрәк икән, уның закондарын аяҡ аҫтына һалып тапайбыҙ, кәрәк икән, уны аслыҡ менән быуабыҙ. Әле өс йөҙ йыл хакимлыҡ иткән Романовтар ҙа казачествоның ихтыяры, теләге менән хисаплашмай булдыра алманы. Уның күкһел-аҡ андреевский флагының терәге беҙ булдыҡ, Романовтарҙың нигеҙен әле ҡымшатырлыҡ түгел ине. Тик бынауы асыҡ ауыҙ Нико-

---

[1] Енәйәт ҡанундары — енәйәт закондары.
[2] Матдә — статья.

лай хәләл бисәһе Александра Федоровнаны ҡулында тоталманы бит. Себерҙең ат ҡарағы Распутинды мәрйәһе эргәһенә һалып ҡуйып, батша һарайын фәхешханаға әйләндерҙе, абруйын төшөрҙө. Юғиһә, әүәлгесә йәшәп ятылыр ине әле. Ә Совет нимә? Ул Петербург, Мәскәүҙең большевиктар ҡотҡоһона бирелеп, ас эшселәре яулап алған хөкүмәт. Даръя булып ятҡан крәҫтиәндәргә, бигерәк тә ер хужаһы казактарға, уның кәрәге юҡ. Совет бөгөн килде, иртәгә юҡ. Завод, фабрикалар, ил менән идара итергә ҡайҙа уның кешеләре? Ҡалалағы ашар тамағы, ятып инер өйө булмаған эшсеме, ауылдағы ғүмерендә бер дисәтинә иген сәсмәгән, атҡа йүгән һалмаған ярлы-ябағаймы хөкүмәт менән идара итә торған кешеләр? Юҡ. Ил менән яңынан яурынына эполеттар, аксельбанттар һалған «Ваше высокоблагородие»лар, «Ваше Превосходительство»лар менән «сиятельство»лар етәкселек итергә тейеш. Ҡайҙа һуң улар? Минең алда күн картуз, бишмәтенең түшенә ҡыҙыл бант тағып кем ултыра? Обручевканың минең ише элекке бай казагы, Колчак артынан эйәреп китеп, әллә ҡайҙа Ҡырым-Ҡытайҙа ғәйеп булған Христофор Степановичтың Абдрахман һымаҡ батрагы Степка Дедко ултыра». «Тфү, инәнде эт йыҡҡан, власть!» Андрей Иванович сырт төкөрөргә лә уйлағайны, ләкин шөрләне. Әле уның алдында мандат нигеҙендә эш иткән, ауылдың күпселек халҡы тарафынан танылған яңы хөкүмәттең тулы хоҡуҡлы вәкиле Степан Степанович ултыра. Тыныс йөҙө, ышаныслы һәлмәк хәрәкәте, ҙур ҡулдары Андрей Ивановичты ҡурҡыта, уның «беҙ шулай эшләйбеҙ», «беҙ быға юл ҡуймабыҙ», тип кем исеменәндер әйткән ҡурғаш кеүек ауыр һүҙҙәре, һуғыш ҡырында үҙенә килеп тейгән пуля һымаҡ, уның битен яндырып үтә, тәнен ялмай, «Бөттө! Минең өсөн яҡты донъя бөттө! Минең ҡояшым мәңгегә байыны, барлыҡ булмышымды ҡара һөрөм ҡапланы».

Ул әкрен генә һөйрәлеп өйөнә ҡайтып инде лә келәмдәге карабинын ҡосаҡланы. Карауат аҫтында ултырған тимер һандыҡта һаҡлаған патрондарын ҡуржынға[1] тултырҙы. Ҡалтыранған ҡулдары менән стенала элеүле торған ҡылысын алды ла, аяҡ быуындары бөгөлөп, иҙәнгә сүкте. Зәңгәр күҙҙәренә әсе йәш эркелде. Яланғас ҡылысын ике усына аймап, уның ялтыр йөҙлөгөнә үҙенең һалҡын ирендәрен терәне. Ялтыр, уның ялҡынлы тынынан бер аҙ боҫланған ҡылыс йөҙлөгөндә ул үҙенең бер яҡҡа салшайған, емерек төҫөн күрҙе. Ниңәлер был төҫ Япон һәм

[1] Ҡуржын — балаҫтан йәки кейеҙҙән биҙәкләп эшләнгән артмаҡ, ләкин үрҙә әйтелгән ваҡиғала күн сумка.

Герман һуғышында Яйыҡ казактарының атлы лаваһы[2] ваҡытында ошо үткер ҡылыс менән ҡыйылып, күҙҙәрен аҡайтып, сорлап ҡаны аҡҡан салыш биттәрен ҡулдары менән баҫҡан япон, герман һалдаттарын, «Его Превосходительство генерал-лейтенант Дутов менән йөрөгәндә, аяҡтарына сабата, өҫтәренә йыртыҡ шинель кейгән, башы урталайға сабылған ҡыҙылгвардеецтарҙың ҡар өҫтөндә бер нөктәгә төбәлеп туңып ҡатҡан асыҡ күҙҙәренең сағылышын хәтерләтте. Тубыҡланып, ул икона алдына шыуышып килде. Бер-бер артлы тәгәрәп ерән мыйыҡ-һаҡалы араһына инеп юғалған күҙ йәшен усы менән һөртөп алды ла, йомшарған танауын мырш-мырш тартып, өҙләкһеҙ икона алдында суҡына башланы.

— О, Алла! Минең гонаһлы йәнемде кисер! Донъялыҡта ҡылған ҡара яуызлыҡтарымды кисер! — тип йәнә ҡылысын үпте.

Шул көндө үк карабинын, ҡылысын һәм бер ҡуржын патронын Советҡа алып барып тапшырҙы. Совет председателе Степан Степанович, урынынан тороп:

— Бына бит, аңлы кеше менән эш итеүе ҡайһылай ҙа рәхәт. Ә ҡалғандары тураһында һуңынан... тип бик серле һүҙ әйтеп ҡуйҙы.

Уның һүҙенән тағы ла ҡойолоп төшкән Андрей Иванович:

— Иптәш Степан! Мин һинең нимә әйтергә теләгәнеңде, нимәгә ишара яһағаныңды төшөнә алмай ҡалдым бит әле, — тине.

— Ничего, ничего! Бына юлда уйлай-уйлай ҡайт. Бәлки, иҫеңә төшөр, әгәр инде онотһаң, иҫеңә беҙ төшөрөрбөҙ.

Советта үҙенең ярты йәнен, нимәһендер йолҡоп ҡалдырып сыҡҡан кеше кеүек яйлап ҡына үҙ өйөнә атлаған, тәрән уйға сумған Андрей Иванович: «Ярай, минең кеүек кәбәк башҡа тап-таман. Мылтыҡ-ҡылысты йоҡо бүлмәһенә кеше күҙенә элеп ҡуймаға ни? Иҫәүән! — тип үҙ-үҙен аяуһыҙ һүкте. — Быныһын Советтарға ярамһаҡланып, яҡшатланып Абдрахман еткереүе мөмкин. Ә тегеләрен, минең Настя ла белмәгән нәмәләрҙе, кемдең ошаҡлауы бар?»

Ә «тегеләре» ун туғыҙынсы йылдың йәйендә Колчак ғәскәрҙәре сигенгән саҡта Андрей Ивановичта йоҡлап, бер пулемет командаһы ҡалдырып киткән, хәҙер эт тә инмәй торған ҡыйыҡ аҫтында һүтелгән көйө ағас һандыҡта бер нисә мең патрон менән һаҡланған «Максим», «берәр фетнә-фәлән тыуып китһә», тип үҙ сиратын аяҡтарын

---

[2] Лава — күп һанлы атлы ғәскәрҙең дошман өҫтөнә ташланыуы.

сапсып көтөп торған «бөтә ағзалары менән Его величество кавалерия уставына» тап килгән тимер күк айғыр ине.

Ошо ваҡиғанан һуң Андрей Иванович, үҙ хужалығына тамам ҡул һелтәне, эсеүгә һалышты, бөтә эште «большевиктар ҡойроғо» Абдрахман өҫтөнә һалды.

4

Ауыл Советында аҙаҡҡы һөйләшеүҙән һуң бер-ике көн үтеүгә, унлаған ылауҙың иң алдағыһына ултырып, юл башлап, Ялан ауылының Совет председателе Аласов Ғәлиәкбәр Обручевка Советының бинаһына килеп тә туҡтаны.

Башынан алып аҙағына тиклем ауылдаштарына орлоҡ тейәүҙе Абдрахманға йөкмәттеләр. Ауыл Советына ашығып килеп ингән Абдрахманды күргәс, Ғәлиәкбәр ҡарттың шатлығының сиге булманы, төҫөн юғалта башлаған батист билбау менән быуған тиртунын ҡыптырлатып, ул урынынан торҙо ла оло хөрмәт күрһәтеп, уға ике ҡулын һондо. Быларҙың йылы күрешеүенә кинәнеп ҡарап ултырған Совет председателе, эске ҡыуанысын йәшереп тормай, киң йылмайып:

— Бына, иптәш Аласов, таныш бул — һинең ауылдашың, беҙҙең коммунист Игебаев Абдрахман ошо була инде, — тип аяҡ үрә баҫты. — Орлоҡ кәрәк булһа, ана үҙен һелкегеҙ — ундырһа ла, тундырһа ла шул. Был мөһим бурыс уға тапшырылған, — тип өҫтәп ҡуйҙы.

Ғәлиәкбәр ҡарт Абдрахманды үҙ эргәһенә ултыртып, ауылдашына оҙаҡ ҡына ҡарап ултырҙы.

— Китерҙән алда Әбделғәлим ағайға инеп, хәлен белеп сыҡтым. Һәүетемсә көңгөр-ҡаңғыр йәшәп ята, әгәр малай биш-алты бот симәнә табып ебәрә алһа, быйыл үҙем бер-ике дисәтинә иген сәсергә самалап торам, тип ҡалды. Уның һиңә һүҙе байтаҡ ине, ләкин эргәһендә оҙаҡ әңгәмәләшеп ултырырға форсат теймәне. — Бер аҙ ситкә ҡарап өндәшмәй ултырғандан һуң: — Инеп, донъяларын ҡарап сыҡ. Нисек торған булалар икән? Бәлки, бала-сағалы ла булып киткәндәрҙер, тип белешергә ҡушты, — тине Ғәлиәкбәр ҡарт.

Күптән ата-әсәһен, тыуған яҡтарын күрмәгән Абдрахмандың Ғәлиәкбәр ҡарт менән осрашып, уның бер-ике ауыҙ йылы хәбәрен ишеткәс, күңелен эске тулҡынланыу, һағыш солғап алды.

— Ярар, ағай, беҙ һинең менән иркенләп һөйләшербеҙ, төн беҙҙеке, — тип Абдрахман үҙенә һонолған ҡағыҙ ки-

сәгенә күҙ йүгертеп сыҡты ла ризалығын белдереп баш һелкте.

Ул дәфтәр битендә орлоҡлоҡ иген тапшырырға тейешле ауыл кулактарының исемлеге яҙылғайны. Абдрахман исемлектә иң башта торған Белов фамилияһының ҡаршыһында «фәләнсә бот» урынына буш юлды күреп, ауыҙ сите менән генә йылмайҙы. «Но беҙҙең рәйестең башы йомро ла инде, үҙенең кулагынан күпме иген тейәтә ала, шул тиклемен үҙе теркәһен тигәндер инде».

Абдрахман Ғәлиәкбәр ҡартты һәм уның менән бергә килгән ике йәш егетте үҙҙәренә алып ҡайтты. Береһе артынан икенсеһе тағылып тигәндәй, ҙур ылауҙың Андрей ҡарт ҡапҡаһына килеп туҡтауы Обручевка ауылы кешеләрен таңға ҡалдырҙы. «Беловтың ялсыһы Абдрахман, ҡарттың бөтә мөлкәтен тейәтеп ҡайтарыу өсөн, Ялан ауылынан үҙ ылауҙары менән башҡорттар саҡырған икән» тигән хәбәр төн сыҡҡансы таралып та өлгөрҙө. Ихатаға бер-бер артлы килеп тулған арыҡ атлы, өҫтәренә ҡыптыр тун кейгән башҡорттарҙы тәҙрә аша күреп ултырған Андрей Иванович: «Тфү! Инәнде...» тип ҡаты һүгенде лә тәҙрә төбөнән тороп, иҙән буйлап йөрөп алды. «Бына килде бит замана — тинләп ғүмер буйы йыйған үҙ мөлкәтенде үҙ ҡулың менән этенә лә, бетенә лә таратып ултыр инде, йә. Кемгә таратабыҙ бит әле? Ғүмер буйы үҙ наделдарына түбәтәйләп иген сәскән хәйерсе башҡортҡа гәрәбәләй бойҙайыңды таратып ултыр инде. Әйтер инем был власына ла — бына кем менән тиңләп ҡуйҙы бит беҙҙе, быуаттар буйы батша тераге булып, ер тетрәткән Яйыҡ казачествоһын? Ул башҡорттарҙың ауылдарын да әйтер инем хәйерселәрҙең — исеме лә Ялан бит. Ни һуң ул Ялан тигән һүҙ. Ул — ҡола ялан, яланғас дала, урманы ла, һыуы ла юҡ тигән һүҙ. Башҡорттар, йүнле әҙәмдәр булһа, ауылға башлап нигеҙ һалыусы поход есаулы — башҡорттоң атаҡлы казагы Ирназар Йәрмөхәмәтовтың исемен ҡушырҙар ине. Ул, исмаһам, беҙҙең атай-олатайҙар менән уртаҡ тел таба белгән. Ә былары Өйөрлө ҡыутомшоҡ башҡорттар, ауылдары Ялан, үҙҙәре лә яланғас» [1], тип ярһыны Андрей Иванович, башын тығып, йоҡо бүлмәһендәге келәмдә элек аҫылынып торған боевой карабиндың һәм булат үткер ҡылысының буш урынын күреп, йөрәге әрнене. Аттарын туғарғандан һуң, Абдрахман артынан эйәреп өйгә килеп ингән кешеләргә ҡашын төйнәп, уҫал ҡараш атты ла, уларҙың сәләмен дә алып тормай, үҙ бүлмәһенә инеп юғалды. Тик

---

[1] Шуға күрә лә Яйыҡ казактарының бай ҡатламы Ялан ауылын һуңғы йылдарға ҡәҙәр Йәрмөхәмәт тип йөрөттө.

өйҙә ашыға-ашыға киске тамаҡ әҙерләгән Анастасья Петровна ғына иренең көйһеҙләнгәнен бөтә йөрәге менән һиҙеп йөрөһә лә бер тойғоһон да тышҡа сығармаҫҡа тырышты.

Бөтә кеше ҡайҙа етте шунда ятып йоҡоға киткәс, Ғәлиәкбәр ҡарт менән Абдрахмандың әңгәмәһе оҙаҡ ҡына дауам итте. Ҡарт һорашты, ә Абдрахман яуап бирҙе. Һүҙҙәре, Совет власының урында ярлы халыҡтың тормошон яҡшыртыу буйынса ниҙәр башҡарыуы, ярлы-ялпы араһында ниндәй яңы саралар үткәреүе, яҙғы сәсеүҙе нисегерәк ойоштороу хаҡында барҙы. Иң аҙаҡтан филтәһе ҡыҫылған шәмдең кәрәсине бөтә башлағас, Ғәлиәкбәр ҡарт ялбарыуға оҡшағаныраҡ фекерен әйтеп һалды:

— Абдрахман ҡустым, бында уңай урынлашҡанһың. Етмәһә, үҙенде фирҡәгә ҡабул иткәндәр икән. Тик мына мин киленде күрмәйем дә, әллә арағыҙ боҙолошоп торамы? — тип, ҡарт һаҡлыҡ менән генә һорашып ҡуйҙы.

Икенсе йыныстан кәләш алыу касафаты арҡаһында, Абдрахмандың ауылын ташлап китеүе уға электән мәғлүм. Ҡарттың Маргарита хаҡында һорашып ултырыуы Абдрахман күңелендәге уны юҡһыныу тойғоһон, ваҡытлыса тормош ығы-зығыһы, донъя хәстәре менән бикләп ҡуйған наҙлы хисте яңынан тоҡандырып ебәрҙе.

— Юҡ, ағай. Беҙ Маргарита киленегеҙ менән бик татыу йәшәйбеҙ, аллаға шөкөр. Тик ул хәҙергә ситтә, Екатеринбургта. Уны ҡыҫҡа мөҙҙәтле фершелдәр курсына ебәрҙек. Тиҙҙән ҡайтырға тейеш. Бында балнис рәүешендәрәк бер йорт һиплəп яталар, — тине Абдрахман.

— Ай, маладса. Бына бит мәрйә халҡы — нисә әйтһәң дә ауылынан сығырға ҡурҡып, ирҙәренә йәбешеп ятҡан башҡорт бисәләре түгел шул, үткен була. Ҡара һин уны, ә? Духтыр була тиһең инде, был заманда бик тә кәрәкле һөнәр, асабиннә беҙҙең ҡараңғы ауылда, — тип ҡарт ысын күңелдән ҡыуанды, ләкин Абдрахмандың был еңелсә яуабы менән генә ҡәнәғәтләнергә самаһы юҡ ине.

Обручевка ауылынан орлоҡ алырға тигән волостың күрһәтмәһе килеп төшөү менән, беренсе ылауға ултырып, уның юлға сығыуында ла бер хикмәт бар ине. Ауылдағы бер нисә Совет яҡлы активистар менән кәңәшләшеп, «Граждандар һуғышында ҡыҙылдар яғында көрәшкән, әле инде урыҫ араһында йөрөп, байтаҡ шымарған коммунист Абдрахманды, үҙ ауылына алып ҡайтырға» тигән ниәт менән дә килгәйне ул Обручевкаға. Бына ни өсөн ул бында аяҡ баҫҡаны бирле Абдрахманға күләгә шикелле эйәреп йөрөй. Уның һөйләгәнен һынамаҡҡа тыңлап ултыра — теленән ысҡынған хәбәре эшлеклеме, аша һөйләшмәйме, урыҫ

байының икмәген кимереп, мәрйә алып, бик һауаланып китмәгәнме, үҙебеҙ һымаҡ кеселекләме? Ауыл йәмәғәте алдында һиммәте бармы? Иң мөһиме, хужаһы Андрей Ивановичҡа оҡшап, «йылтыр» менән дуҫлашып китмәнеме?

Үҙенең юлда әҙерләп килгән «һөалдарына» Ғәлиәкбәр ҡарт тулыһынса ыңғай яуап алды. Ә инде «йылтыр»ҙы аш алдынан да, унан һуң да тәҡдим итеү генә түгел, уға иғтибар итеүсе лә булманы. Тик ауылдаштар һандыҡ өҫтөндә шым ғына һөйләшеп ултырғанда, кәфененә төрөнгән мәйет шикелле мул аҡ ыштан-күлдәк кейгән Андрей ҡарт, ялан аяҡ үҙ бүлмәһенән сығып, бур кешеләй ян-яғына аланлап, ул араҡыны бер-ике тапҡыр уртланы.

Иртәнге ҡатҡаҡ юлда, сана табандарын сыйҙырып, Ялан ылаусылары ҡулына исемлек тотҡан Абдрахман артынан ауыл ҡыҙырырға тотондо. Ләкин Андрей Иванович әйтмәксе, «Ялан хәйерселәре»н ике яҡҡа шар асылған ҡапҡаларынан ҡоластарын йәйеп, кисәге ауыл Советында һөйләшкән кешеләрҙән берәү ҙә көтөп тормай ине. Аяҡтарына ҡырҡ ямаулы итек йә сарыҡ, өҫтәренә ҡыптыр тун кейгән, ҡаҡса биттәре ҡояшҡа йылтырап янған Ялан фәҡирҙәрен кулак ихаталарында тик бауҙарынан ысҡындырылған ялбыр эттәр генә ларһылдап ҡаршы алды. Асыуы ҡабарған Абдрахман, күпме генә сыбыртҡы һабының төбө менән бикле ҡапҡаларҙы төйгөсләмәһен, уға өйҙән сығып яуап биреүсе булманы. Түҙемлеге шартлар сиккә еткән Абдрахман Советҡа йүгерҙе. Уның борсоулы етди йөҙөнә ҡарап, эштең асылын алдан белеп ултырған председатель, бер ни булмағандай, көлөмһөрәп:

— Нишләй, Игебаев иптәш, кулактар ҡапҡаларын асмайҙармы ни? — тип һораны.

Абдрахман ултырғысҡа ултырҙы. Ут уйнаған күҙҙәрен бер нөктәгә текәп, ҡаты көрһөндө лә:

— Эйе, асмайҙар. Беҙҙе көтөп торған кеше юҡ, — тип яуап бирҙе.

Ҡайҙандыр яуап эҙләгәндәй, председатель ике сикәһен бармаҡтары менән ыуғалап алды ла:

— Да-а, иптәш Игебаев, тормош икенсерәк шул хәҙер. Хәрби коммунизм мәлендә былдай хәл килеп тыуһа, биләңә наган тағып, өйөнә баҫып инер инең дә, хужаны яғаһынан бер-ике һелкеп, бураһынан үҙ игенен тейәргә үҙенә ҡушыр инең. Ә хәҙер ул сволочь бураһын асһын өсөн билеңде бөгөп үтенергә тура килә, — тине.

Тыныс осорҙа көсләү ҡәтғи тыйылғанын ул бик яҡшы белә, тик эсе бошҡандан һөйләнеп алды. Хәйер, хәрби коммунизм мәлендәге бөтә мәсьәләне көсләү, ҡорал менән ҡурҡытыу юлы менән хәл иткән замандарҙы күп кенә ком-

мунистар, совет работниктары бер Обручевкала ғына һағынмай ине.

Председатель ҡапыл урынынан торҙо.

— Юҡ, былай фәлсәфә һатып ултырып ҡына орлоҡ алып булмаç, әйҙә, киттек.

Һандығындағы револьверын кеçәһенә тыҡты ла ишеккә атланы.

Ауыл активистарынан, коммунистарҙан бер нисә кеше эйәртеп, ул яңынан ауыл осона төштө. Беренсе ҡапҡаға барып терәлгәс тә, башта артына әйләнеп, таҡта ҡапҡаны үксәләре менән тызыны, ә инде бер ниндәй ҙә тауыш ишетелмәгәс, наган һабының төбө менән шаҡый башланы. Совет власының тынын һиҙгәндәй, Абдрахманға ларһылдаған эттәр ҙә шымып ҡалды. Болдорҙа йүткерә-йүткерә сығып килгән хужаның тауышы ишетелде.

— Кем бар унда? Ни кәрәк?

— Беҙ! — тип Совет председателе һаңғырау ғына яуап ҡайтарҙы.

Бәләкәй ҡапҡаһын асып, хужа кеше, аçҡа һалынып төшкән йәмшек табалай битенә яһалма ҡунаҡсыллыҡ һыҙаттары йүгертеп:

— Ә, ҡәҙерле ҡунаҡтар икән. Бынауы, ләғнәт, Сокол ларһылдап, бер нәмә лә ишеттермәй бит, — хужа, аяғы аçтында бөтәрләнеп йөрөгән ялбыр этен типкеләне. — Әйҙә, әйҙә, рәхим итегеҙ, — тип өйгә йүнәлде.

Степан Степанович уның артынан өйгә үтергә артыҡ ашығып барманы. Исемлектән фамилияһын эҙләп тапты ла өҙөп-өҙөп ҡоро ғына:

— Ә-ә, Самаркин Авксентий, бураҙы ас, һинән — ун биш бот, — тип ҡысҡырҙы.

Хужа артына әйләнмәйенсә генә:

— Ана, келәттең ишеге асыҡ, теләһәгеҙ, бураһы менән алып сығып китегеҙ, һеҙҙең көпә-көндөҙ әҙәм талауығыҙ бер бөгөн түгел, — тип болдорона күтәрелә башланы.

Асыуынан ҡобаралары осоп, танау тишектәренә ҡәҙәр ағарған Степан Степанович, йыш-йыш тын алып, кеçәһендәге наганына йәбешеүе булды, Абдрахман, юлбарыç һымаҡ атылып, уға кинәт кенә ташланды ла, ҡулын ҡайырып, наганын һыпыра тартып алды.

Эштең асылын тиҙ генә төшөнөп алған Авксентий ҡарт, болдор өçтөндә ҡапыл тунының түшен ысҡындырҙы һәм Степанға асыҡ күкрәге менән әйләнде.

— Йә ат, сволочь! Нишләп атмайһың! Шөрләйһеңме, эт? Был һиңә ҡулығыҙ ҡысып, законһыҙлыҡ эшләргә ун туғыҙынсы йыл түгел, тфү, мәлғүн! — тип төкөрҙө лә ләғнәт уҡый-уҡый өйөнә инеп китте.

Эсендә әле дөрләп янған асыуы һүрелеп өлгөрмәгән Степан Степанович урынында бер нисә тапҡыр тыпырсынып зыр әйләнде, шунан ҡойма буйында ятҡан бүрәнәгә барып ултырҙы. Был тамашаны һүҙһеҙ генә күҙәтеп торған Ялан кешеләре, бер урынға һерлегешеп, аптырашта ҡалды. «Бына бит беҙҙең өсөн мынауы ауыл Советы рәйесе ни фурмалы яфа сигә. Ул һарыҡорттар бөтә ерҙә лә шул бер төҫлө инде. Әгәр был эш беҙҙең ауылда, Ғәлимйән хажи ихатаһында булһа, ул әллә ниндәй бола, атыш сығарыр ине», тип уйлап алды Ғәлиәкбәр ҡарт.

Бер аҙ һыуына төшкәс, Степан Степанович урынынан тороп, әкрен генә тауыш менән:

— Барыбер келәтенә унан башҡа керәһе булмағыҙ. Үҙе сыҡмаһа, ҡатынына йәки бәлиғ булған берәр ғаилә ағзаһы гуаһ булып торһон, — тине.

Өйгә инде Абдрахман йүнәлде. Бер аҙҙан ул кулактың малайын эйәртеп кире сыҡты. Келәт ишегендәге быҒау йоҙаҡты зыңғырлатып асты ла теге егет:

— Ана пудовка, шуның менән үлсәп һалығыҙ, — тип иҙәндә ултырған ике тотҡалы бер бот һыймалы тимер һауытҡа төртөп күрһәтте, ләкин үҙе, бураға төшмәйенсә, ситтән генә күҙәтеп торҙо.

Бура янында иген тултырған Ялан кешеләре, тоҡтарының ауыҙын бәйләп йөккә ырғытып бөткәс:

— Ҡайһылай яуыз урыҫ, күрәһең, беҙгә тейешле орлоғон бураһына кистән үлсәп һалып ҡуйған. Бура төбөндә ни бары ярты боттай ғына тос ҡалды, — тиеште.

Степан Степановичтың үҙ активы менән башҡарған был мәшәҡәтле эше тик кискә генә тамамланды.

Өҫтәлмә орлоҡ тапшырған кулактарҙан шул көнө кис үк урындағы властарҙың закон боҙоуы һәм уларҙан көсләп ашлыҡ тартып алыуы тураһында өйәҙгә, Авксентий ҡарттың өйөнә йыйылып яҙылған ялыу китте.

Орлоҡтоң һуңғы илле ботон Абдрахман хужаһының келәттәренән тейәтте. Санаға һуңғы тоҡтарҙы тейәп бөткәс, Абдрахман:

— Ғәлиәкбәр ағай, һин алып ҡайтаһы орлоҡта минең атайҙың өлөшө бармы? — тип һораны.

Ғәлиәкбәр ҡарт кеҫәһенән сығарып үҙ исемлеген ҡарап сыҡты ла:

— Ҡустым, Әбделғәлим ағай яҙғы сәсеүгә биш бот орлоҡ биреүҙе һораған, — тип яуап ҡайтарҙы.

Орлоҡ һоҫоп торған ярты ботлоҡ һоҫҡоһон ырғытты ла Абдрахман бер аҙ шым торғандан һуң:

— Әләйһә, ағай, ҡыйын булмаһа, мин атайымдарға үҙ

хисабымдан ике тоҡ ашарлыҡ бойҙай һалһам, атыңа ауыр булмаҫмы? — тип һораны.

— Ой әттә! Нишләп ауыр булһын ти. Ҡустым, ундай изге теләгең булғас, әйҙә, һала ғына күр. Ризыҡтың йөк өсөн бер ҡасан да ауыр булғанын күргән юҡ. Ҡарт, бахыр, ҡыуанып ҡалыр, — тип шатланды Ғәлиәкбәр.

Иген тейәлеп бөткәс, Абдрахман Ғәлиәкбәр ҡартты эйәртеп өйгә инде.

— Һөйләшелгән буйынса, Ғәлиәкбәр ағай, тейәлгән игендең хисабын күрһәтеп, Андрей Ивановичҡа ҡултамға ҡалдырып китәһең инде, һөйләшеү шулай, — тине лә кәштәнән алып бер бит аҡ ҡағыҙ һәм ҡәләм һондо.

Ғәлиәкбәр ҡарт, кәпәсен тубығына һалып, нишләптер, ҡәләмдең осон теленә төртөп, еүешләп алды ла ғәрәпсә ҡағыҙға түбәндәге һүҙҙәрҙе теҙҙе: «Ҡултамға. Бән Нәмәсләр төбәге, Ялан шураһы жителе Ғәлиәкбәр Аласов бирәмен ошбу ҡултамғамды. Абрашыу хуторы гражданы Белуф Әндрәйгә шул хаҡта йәғни ... сәнә 1 апрель көнөндә Ялан ауылы убчыстуасина чәчмәгә кире кайтарып биреү шарты илә илле бот боғдай алмаҡтамын, тип ҡултамғамны салам». Ғәлиәкбәр ҡарт үҙе яҙғанына яңынан бер тапҡыр күҙ йүгертеп сыҡты ла ҡағыҙ-ҡәләмен Абдрахманға тотторҙо, ә инде ул үҙ сиратында быны иконастас эргәһендә «Евангелие» уҡып ултырған хужаһына һондо. Андрей Иванович был ҡағыҙ киҫәгенә сирҡанып ҡараны ла:

— Я же по-татарски совсем белмес, — «тәржемә итэп бир» тигәнде аңлатырға теләп, Абдрахманға ишара яһаны.

Абдрахман һүҙмә-һүҙ ғәрәпсә яҙылған ҡултамғаны ауҙарып бөткәс:

— Бынан тыш мин үҙемә тейешле иген хисабынан атайымдарға ике тоҡ, йәғни һигеҙ бот миҡдары бойҙай тейәттем, — тине.

Быны ишеткәс Андрей ҡарт ҡапыл урынынан торҙо. Һаҡал баҫҡан ауыҙын бер яҡҡа салшайтып, ялбыр ҡашын һындырып, өҫкә сөйҙө. Ҡорбанына ташланырға әҙерләнгән яуыз йыртҡыс шикелле күҙҙәренән утлы осҡон атты ла ҡулындағы ҡағыҙҙы аяғына кейеп ултырған бийма табаны менән иҙгеләп тапарға кереште. Әйтерһең дә, ҡоторонған Андрей ҡарт, асылда табанлы быймаһы аҫтындағы Совет власын иҙгеләй. Таушалған ҡағыҙ киҫәген ҡалтыранған ҡулына алып, баш осонда ялбыратты ла Абдрахманға ырғытты.

— Һеҙҙең ул ус аяһындай ҡағыҙығыҙ миңә бәҙрәфкә сығырға ла хәжәт түгел, — тип бөтә өй эсенә һөрән һалды.

Ҡапыл ниҙер иҫенә төшөп ҡалған кеше шикелле, өҫ-

тәлдә ятҡан ҡағыҙҙы эләктереп алды ла ауыҙын салшайтып усында йомарлап-йомарлап янып ятҡан мейескә ташланы. Шунан һуң дөрләп янған мейес эргәһендәге ултырғысҡа терәлде. Ғәлиәкбәр ҡарттың ҡултамғаһы сығып ҡасмаһын тигәндәй, мейестең суйын ҡапҡасы тышына төшөрөлгән үҙе һымаҡ ҡулына һөңгө тотҡан һыбайлы казак һүрәтенә оҙаҡ ҡына текләп ултырҙы, быймаһының башы менән шыҡылдатып ҡапҡасты ябып ҡуйҙы.

Нисек хушлашырға белмәй аптырап торған Абдрахмандың ауылдаштарына боролоп, Андрей Иванович:

— Пшол! Таларығыҙҙы талап бөттөгөҙ, тағы нәмә көтөп тораһығыҙ? Поезжайте и начинайте своей тюбетейкой награбленное зерно сыпать, хлеборобы, мать вашу... — тип аҡырҙы.

Асылған ишектән берәм-берәм ихатаға сыҡҡан ауылдаштары артынан Абдрахман да атланы. Ни әйтергә белмәй аптыраған Ғәлиәкбәр ҡарт:

— Был ләғнәттең бигерәк бәйеле аҙған икән, элек мин уны алай уҡ күрмәй торғайным. Совет власы һинең был хужаңдың һары һыуын ныҡ ҡайнатҡан, ахыры. Үҙенең ҡара башына булһын мәлғүндең был тиклем хаттин ашыуы, — тине.

Санаһына ултырырҙан алда ул Абдрахманды ситкәрәк әйҙәп, байтаҡтан эсендә һаҡлап йөрөгән серен асып һалды.

— Ҡустым, күреп торам — бында ла һиңә был эт менән бер ояла йәшәүе еңел түгел, — тип ул осло эйәген тәҙрәгә атты. — Был контр менән һин бик оҙаҡҡа түҙә алмаҫһың, берәй табан ялай торған икенсе кеше булһаң, бәлки. килешеп йәшәп тә ятыр инең, ләкин һин ундайҙарҙан түгел. Әбделғәлим ағайыма оҡшап, бик ҡыҙыу тәбиғәтле егетһең. Арағыҙҙа берәр талаш-тартыш сығып китер ҙә саҡ йөрөгән кешене үлтерә һуғып, бәлә-ҡазаға юлығып ҡуйырһың. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул: кеше илендә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул, тип боронғолар белмәй әйтмәгән. Кәләшеңде етәклә лә Яланға кире ҡайт.

Шаҙра һипкеле төшкән битенә тәрән уйсанлыҡ нуры һибелгән, башын эйеп шып-шым ҡалған Абдрахман бер һүҙ ҙә өндәшмәгәс, ҡарт үҙ һүҙен дауам итте:

— Ең һыҙғанып Совет власына ярҙам итеп, уны ҡороуҙа ҡатнашырға теләгең бар икән — күреп торам, һин тап шундай кеше генә түгел, фирҡә ағзаһы ла — һис уйламай, кисекмәҫтән Яланға ҡайтып ет. Унда ошо уҡ Совет власы, тик уны ауылда аяҡҡа баҫтырырлыҡ кешеләре генә юҡ. Бына, ҡустым, һинең ауылдаштарың миңә бына ошо сәләмде еткерергә ҡушты. Аманатым шул, аманатҡа юҡ хыянат.

Ғәлиәкбәр ҡарт, һүҙен бөткәнгә хисаплап, эргәһендә торған Абдрахмандың киң яурынына үрелеп, ҡулын һалды. Ике ҡулын биреп ауылдашы менән хушлашҡас, ҡарт санаһына ултырыр алдынан:

— Йә, һине көтөп торған ауылдаштарға ни тип әйтәйем? — тип һораны.

Ҡарттың ысын күңелдән әйткән һүҙенән тулҡынланыу кисергән Абдрахман:

— Ағай, яҡшы һүҙегеҙ өсөн ҙур рәхмәт. Ағай-энегә, иптәштәргә сәләм тапшыр. Әҙерәк бында эшләп, күҙ-башлы булып, нығыныңҡырап ҡайтырға тигән ниәт бар ине. Былай булғас уйларға тура килер инде. Үҙеңдән үҙең ҡасҡан шикелле, ил ташлап күпме ситтә йөрөргә була, күрелде бит инде, — тине.

Ул йылы ғына күреште лә ҡапҡа асты.

Бер-ике көн егелмәй буш торған шөйлә хәл йыйған аттар бышҡыра-бышҡыра оҙон юлға ҡуҙғалды. Ихата уртаһында моңһоу күҙҙәрен бер нөктәгә текәп тороп ҡалған Абдрахман, үҙе менән хушлашҡан шикелле, сана табандарының сыйылдауын, ат ҡыуған ауылдаштарының алыҫая барған күңелгә үтә яҡын, таныш тауыштарын ишетте.

Шулай итеп, хужа батрағына бай хужалығындағы эштәренән тыш йәмғиәт йомоштары ла табылды. Ул Советта ла, кредит йәмғиәтендә лә үҙ кеше булып китте. Уны кооперация ревизия комиссияһына ағза итеп һайланылар. Ул хәҙер кооперативҡа килгән тауарҙарҙың, көнкүреш кәрәк-яраҡтарының ғәҙел бүленеүен тикшерҙе, кредит йәмғиәтенә ингән кешеләрҙән взнос йыйҙы. Билдәле, уға взнос йыйыу менән бер рәттән яңы ағзалар ылыҡтырыу ҙа йөкмәтелде. Яңы йәмғиәттең әһәмиәтен аңлаған биш-алты кеше советҡа инеп взносын түләп сыҡты, ә ҡалғандары артынан Абдрахмандың үҙенә йөрөргә тура килде. Йөҙ илленән артыҡ йортло Обручевканы көн һайын, өй һайын тигәндәй урап сығыуы еңел булманы. Бына шунда ғына казак тормошоноң асылын ул нығыраҡ та төшөндө. Ошоға ҡәҙәр Анастасия Петровнаның майлы ҡоймағын, мул тоҙлоҡло борщын ашап казак тормошоноң тик йылтыратып буялған алғы яғын ғына күргән икән. Бында ла, Яландағы һымаҡ, ауыл халҡының күбеһе ауыҙын асһа үпкәһе күренеп торған, бер телем икмәккә зар-интизар булып сыҡты. Уларҙың һәр береһенең телендә ярлы халыҡты Андрей Иванович кеүек төрлө яҡлап иҙгән, ҡыҫҡан Обручевка кулактарына нәфрәт ишетелде. Ул үҙенең ауылындағы шикелле бында ла алабута орлоғонан икмәк, ебетелгән тирене ҡаҙанға һалып бешереп ашап ултырыусыларҙы күрҙе. Бик күп өйҙәрҙә аслыҡтан шешенгән бала-сағаларҙы,

яңаҡтары ҡорошоп ҡатҡан, тик ҡоро һөлдәгә әйләнгән әҙәм күләгәләрен осратты. Шундай хәлдә булыуҙарына ҡарамаҫтан, улар Совет власының теләһә нindәй сараһын ҡушҡуллап ҡаршы алды, үҙҙәренең киләсәге тураһындағы яҡшы хыялды яңы власҡа бәйләне. Тимәк, Обручевка ла, башҡа меңәрләгән ауылдар һымаҡ, нигеҙҙә Совет власына йәне-тәне менән бирелгән, ләкин хәҙергә әле хәлһеҙ ярлыларҙан тора. Бер төрлө ашап-эсеренә бары, мал-тыуарлы урта хәллеһе батша хөкүмәтенән ваз кисеп, Совет власына ылыға алмай ята. Ә әҙселек, ярлы, урта хәлле крәҫтиәнде ижтимағи яҡтан иҙгән, төрлө яҡлап ҡыҫырыҡлаған бай ҡатламы, ошо ярлылар власының бөгөн-иртәгә емерелеүен дүрт күҙ менән көтә. Граждандар һуғышы ваҡытында бөтә нәмә ябай, ап-асыҡ: ҡаршылағы окоптан ҡыҙылдарға ҡарап атыусылар барыһы ла — аҡтар, бөтәһе лә — беҙҙең дошман. Уның тышҡы ҡиәфәте лә, эске рухы ла бер төрлө. Ә бында бөтөнләй икенсе эш. Бөтә кеше кеүек башына йәй картуз, ҡышын ҡолаҡсын бүрек, өҫтөнә бөтә кеше йөрөткән зипун кейә, — ә уның эсендә нәмә ятҡанын белеү ҡыйын. Дошман асыҡтан-асыҡ түгел, ә йәшерен, төндәрен һөжүм итергә өйрәнде. Бына Абдрахман шуларҙы таный башланы.

Степан Степановичҡа килеп ул ярлыларға тамаҡ давайланы. Аслыҡтан шешенгән кешеләрҙең исемлеген килтереп тотторҙо ла:

— Давай, кулактарҙы ҡыҫып, игендәрен тартып алырға кәрәк, — тип кәңәш бирҙе.

— Ундай закон юҡ, хәҙер һуғыш мәле түгел бит.

Степан Степанович мәсьәләнән ялтанырға уйлағайны ла, Абдрахман һүҙендә ҡаты торҙо.

Киләһе икмәк налогы хисабынан байҙарҙан йөҙ бот иген йыйып, Абдрахман менән Совет председателе уны ярлыларға таратып сыҡты. Андрей Иванович башта түҙеп-түҙеп торҙо ла, Абдрахман партия йыйылыштарына йөрөй башлағас, кәпәсенең тиҫкәре яғын кейеп алды, бөтөнләй сығырынан сыҡты. Бер йәкшәмбелә, ныҡ ҡына эсеп алып, бөтә эсендәгеһен аҡтарып һалды.

— Бына нәмә, коммунистар ҡойроғо! Ошо көндән башлап мин һәм минең ҡатын коммунистар ҡурайына бейегән кеше менән бер өҫтәлдә ултырып ашай алмайбыҙ! Баста!

Абдрахман да урынынан торҙо. Ике ир әтәс һымаҡ эләгешеп китмәһен тип ҡобараһы осҡан Анастасия ҡулдарын күкрәгенә ҡуйҙы ла ялбарыу менән:

— Андрюша! Христос исеменән үтенәм. Башҡаса һин

Абдрахман менән ҡатынына бәйләнмә! Быныҡ аҙағы насар бөтөүе мөмкин, — тине.

Андрей Иванович, аҫҡы иренен һалбыратып:

— Минең Маргаритаға бер ниндәй ҙә һүҙем юҡ. Баш баҫып эшләй, өнө юҡ, тыны юҡ, — тине.

— Улар икеһе бер кеше. Аңла: Абдрахманға әйткән һүҙең Маргаритаға ла берҙәй тейә.

Абдрахман бер һүҙ әйтмәһә лә, бындай ваҡыт-ваҡыт тезәләп, юҡ-юҡ та хужаның бәйеле аҙыуын күтәрә алманы. Бер көн, башҡараһы эштәренең байтаҡ булыуына ҡарамаҫтан, Совет председателе һәм бер үк ваҡытта партячейканың яуаплы секретары булып эшләгән Степан Степановичҡа инеп, үҙ хәлен һөйләне лә:

— Мин бында был шарттарҙа башҡаса ҡала алмайым, пожалуй, төҙөгән договорҙы боҙоп, тыуған яҡтарға ҡайтып китермен, — тине.

Степан Степанович уға сат йәбеште.

— Һин нимә? Шул Андрей кулак йыйылышҡа йөрөгәнең өсөн бәйләнә тип ҡулдарҙы ҡаушырып тик ултырырғамы? Йәки, башты түбән эйеп, уның лөғәтен тыңларғамы? Юҡ инде! Бик күп кеше ҡанын эстеләр инде улар! Етте!

— Ә мин уның менән нимә эшләй алам? Бер өйҙә тороп, киләсәктә эт менән бесәй һымаҡ йәшәп булмай бит! Беҙ хәҙер бергә ашау түгел, тыныс ҡына һөйләшә лә алмайбыҙ. Ул мине бөгөн өтөп ашар ине, ләкин булдыра ғына алмай.

— Бына быны дөрөҫ әйттең! Тик хәленән генә килмәй. Әле хәҙергә сабыр итәйек, бер аҙҙан тештәрен емерә һуғасаҡбыҙ.

Ошо һөйләшеүҙән һуң Андрей Ивановичҡа партячейкаға аңлатма биреү өсөн яңынан барырға тура килде.

— Башҡаса үҙ батрагыма ҡулымды ла, телемде лә тейгеҙмәм, — тип вәғәҙә биреп ҡотолдо.

Ауыл Советынан ҡайтып, бер аҙ асыуы һүрелә төшкәс, Андрей Ивановичтың ярһыу уйҙары тағы ла үҙенең элекке ярына ултырып, һәүетемсә тыныс ҡына аға башланы. «Ни эшләп һуң әле был Абдрахман ошо бай тормоштан үҙ ирке менән баш тартып, үҙ яҙмышын шул ҡыутомшоҡ ялпылар менән бәйләргә ынтыла? Уға ни етмәй? Бөгөн-иртәгә шаурап ятҡан етеш донъяһының хужаһы булырға тора — тағы ни кәрәк».

...Һабан турғайҙарын сырылдатып, Яйыҡ тарафтарына яҙ ҙа килеп етте. Март аҙаҡтарында өҙәрем юлда Андрей Иванович Верхнеуральскиға һуңғы тапҡыр барып ураны ла: «Унда этләнеп, ыҙа сигеп йөрөп ятыуҙың бер ниндәй ҙә фәтеүәһе ҡалманы», тине ҡайтҡас.

Сөнки совет кооперацияһы, бигерәк тә егерменсе йылдар башында барлыҡҡа килгән Дәүләт банкы, сауҙагәрҙәргә тынлыҡ бирмәне, шәхси һатыуҙы, баҙарҙа хаҡтар торошон үҙ контроленә алды. «Совет беҙҙең менән ныҡлап яғалашырға самалай, ахырыһы, тын алырға ла бирмәй. төрлө яҡлап ҡыҫмаҡлай», тип һөйләнде Андрей Иванович.

Берсә Совет власына, берсә Абдрахманға нисек кенә талағы ташмаһын, дәррәү килгән яҙ һулышы, Андрей ҡартты ла үҙ хәстәрлеге менән солған алды. Әле күптән түгел генә: «Кемгә икмәк кәрәк, игенде шул сәсһен, ыҙанда ҡара тир түгеп, иген үҫтереп, советтың ас ҡарғаһын туйҙырыр хәлем юҡ. Баста! Һабан тотҡаһына бәйләп ҡуйһалар ҙа тотонасағым юҡ», тип ант иткән Андрей Иванович Ҡарабулаҡ тауынан яҙ елдәре иҫә башлағас та йоҡоһонан яҙҙы. Көнсығышҡа һыҙылып, таң шәфәғе тойомлана башлау менән бекешаһын яурынына һалып, болдорға сыҡҡыланы. Папиросын тоҡандырып, дегет силәге кеүек ҡарайған үпкәһе тулғансы тәмәке төтөнө һуланы ла, ирендәрен түңәрәкләп, уны өҫкә өрҙө. Тәбиғәтте күҙәтте, яҙҙың йоҡоһонан уяныуын тыңланы. Өй артынан ғына Яйыҡҡа табан һуҙылған тәрән үҙәктән аҫҡа тәгәрәгән шарлауыҡтың туҡтауһыҙ ағышы һуңғы ваҡыттарҙа күҙгә күренеп талсыға, хәлһеҙләнә башлаған йөрәгенә көс-ғәйрәт өҫтәгәндәй тойолдо.

Абдрахман иһә иң башта, пар үгеҙ егеп, баҫыу өҫтөнә Андрей Ивановичтың ябыҡ ырҙын аҫтында ултырған дүрт тәгәрмәсле таҡта өйөн алып сыҡты. Обручевка урамы уртаһынан тәгәрмәстәре шығыр-шоғор килеп уҙған таҡта өйҙө күреп, башҡалар ҙа ҡуҙғалды. Сәсеүҙең кәм тигәндә тәүге ике аҙнаһына етерлек аҙыҡ-әүҡәт тә алынды. Энеләренең ашауҙан ғәйре эсеүгә әүәҫ икәнен белеп торған хужа, март урталарында урыҫ мейесенең башында ҡыш буйы йылыла ултырып ҡураған мискәне йыуҙырҙы ла ҡоршауҙарын өр-яңынан һуҡтырып, бал әсетергә ҡушты. Анастасия Петровнаның балды элекке кеүек бер биҙрә ҡайнаған һыуға өс ҡаҙаҡ шәкәр һалып ҡойорға әҙерләнеүен күреп ултырған ҡарт, урынынан тороп, ҡапсыҡ төбөндә ҡалған шаҡмаҡлы шәкәрҙе барыһын да ауыҙынан боҫо сығып ултырған мискәгә ауҙарҙы. Ҡатынының һораулы ҡарашына:

— Ничего, шулай үткерерәк була ул. Балдың ҡеүәте булмаһа, ни башҡа сыҡмай, ни работниктарың ваҡыт әрәм итеп бал эсеп тик ултырасаҡ... — тип мығырланы.

Ер башына бер-ике көн алдан килеп, һабан-тырмаларҙы, ҡамыт-сбруйҙы әҙерләп ятҡан Андрей ҡарттың энелә-

ре, таҡта өйҙө һөйрәп килтереп урынына ултыртҡас та, уның мөйөшөнә тимер ҡоршау менән нығытып ҡуйылған мискәгә күҙ һалдылар. Бөкө тишегенән ағып, әсегән апра еҫе аңҡып ултырған мискәне күргәс, улар күҙҙәрен йылтыратып, оҙон еңдәре менән һеләгәйҙәрен һөртөп алды. Ләкин эш шунан арыға китмәне, сөнки был мәсьәләлә Абдрахмандың ҡатылығы уларға күптән мәғлүм.

Абдрахман баҫыуға сығып киткәс, Андрей ҡарт та өйөндә ятып сыҙаманы. Уны ла Яйыҡ ярының һул яғында йәйрәп һауаға дым бөркөп ятҡан баҫыу ере үҙенә тартты.

Тәгәрмәстәре сиҡылдап торған ҡупшы фаэтонына ултырып, ул да ер башына килеп төштө. Иреклеккә сығып, хужаһынан да былайыраҡ тулҡынланып үрәпселәгән Серкоһының теҙгенен тәртә башына ҡамтарҙы ла Андрей Иванович ҡояш нурына мансылып, ялтырап ятҡан һөрөнтө башына килде. Ашыҡмай ғына теҙләнеп ултырҙы ла, ҡояшҡа ҡарап, ихлас күңелдән суҡынырға тотондо.

— Эй, хоҙайым, бөтә ер йөҙөндәге ғәләмгә ямғырыңды йәлләмә, баҫыуҙарыбыҙҙа икмәк мул үҫһен, буралабыҙ тулы, ҡолдарының тамағы туҡ, күңеле көр булһын. Амин.

Тубыҡтарына йәбешкән дымлы тупраҡты ҡаҡҡыланы ла, усына ҡара тупраҡ алып, әүәләргә тотондо. Нишләптер был йомарланған тупраҡ киҫәген еҫкәп ҡараны. Бер кем менән дә һөйләшеп тормай таҡта өй ҡырындағы эскәмйәгә барып ултырҙы. Уның үҙе менән тиң ҡартайып килгән, зәңгәр тышы күптән уңа башлаған картузын, кәңәш ҡылырға теләгәндәй, сусайып торған тубығына элде лә, ҡамыт-сбруй барлап торған Абдрахманды саҡырҙы. Хужаның йөҙөндәге ғәҙәттәге болот шәүләһе яҡты сырай менән алмашыныуы уны ғәжәпкә ҡалдырҙы.

— Быйыл сыбыҡ сәсһәң, тәртә үҫә торған йыл. Шуға күрә бер ун-ун ике дисәтинә сиҙәм алып ебәргәндә шәп тә булыр ине. Дүрт-биш тапҡыр арҡыры-буйлы тырматып, тары ла сәсеп ҡуйһаң, йөҙ бот уңыш — буранда... Тары бутҡаһы, уның ҡоймағы эсте тишмәҫ ине.

Шулай итеп, ас Советтың тамағын туйҙырырға бүтәнсә иген сәсәһем юҡ, тип анттар иткән Андрей ергә ереккән нәфсеһенә хужа була алманы һәм, ике һабанға өсәр пар үгеҙ ектереп, апрель башында ун ике дисәтинә сиҙәм күтәртте. Ҡояшта майланған кеүек ялтырап ятҡан, телеп һалған кеүек тәүге сиҙәм кәҫтәре һабансыларҙың күңелен елкендерәҙе.

Күҙҙән һөрөп ҡалдырған ерҙе лә бик һәләт кенә тырматып ташланылар. Март аҙаҡтарында бөтә эшенән бу-

шатылып ашатыуға ҡуйылған аттар, эш үгеҙҙәре көнө буйы һис талымһыҙ эшләне. Андрей Иванович сәсеүгә төшөр алдынан ҡояш ҡыҙҙыра башлағас, бөтә сәсеү орлоғон ер башына бүлек йәйеп, шунда тараттырҙы.

— Һеҙҙә булмаған бына был ысул яровизация тип атала. Сәскәс тә бөтә орлоҡ берҙәм, бер тигеҙ шытып сыҡһын өсөн, бына шулайтып орлоҡҡа иләктәрҙән һыу һибәләр ҙә ҡояшта ятҡырып шыттыралар, — тип, йәйелгән иген өҫтөндә ялан аяҡ йөрөп, һыу һибеп күрһәтте.

Бынан күп элгәре ер башына иген таҙартҡыс сығарып, ауылдан Анастасия Петровна, Маргаританы, тағы үҙ туғандарының бисәләрен килтертеп, иген елгәргестә сәсеү орлоғон формалин менән ағыуларға ҡушты.

— Иген сәсеүҙе ҡасан башлайбыҙ, Андрей Иванович?— тип һораны Абдрахман киске аш ваҡытында.

— Бына иртәгә ҡояш сығып, ер йылынғанын ҡарарбыҙ ҙа бәлки хоҙайға тапшырырбыҙ.

Иртәнсәк, һабансылар эшкә китеп, көн байтаҡ йылынғас, Андрей Иванович ер башына сығып ҡарап торҙо ла сисенә башланы. Ер тырматып йөрөүселәр тамаша ҡылып күҙәтергә тотондо. Хужа салбар, ыштанын ҡултығына ҡыҫтырҙы ла яланғас осаһы менән ҡара ергә ултырҙы. Быларҙың ҡысҡырып, ялан яңғыратып көлөүен ул ҡолағына ла ҡыҫтырманы. Әкрен генә торҙо, яланғас һонтор аяғына ҡуңылтаҡ итеген кейеп, арыраҡ барғас, өр өҫтөнә яңынан ултырҙы. Абдрахман аттары унын менән тиңләшкәйне:

— Был һинең, Андрей Иванович, ниндәй кирәмәтең? Осаң менән әллә ерҙең берәй әкәмәтен тыңлап ҡарайһыңмы? — тип көлдө.

— Ахмаҡ! Беҙҙең ата-бабалар ерҙең сәсеүгә өлгөрөүен ғүмер буйы ултырып тикшергәндәр. Осаң өшөһә, әле бер аҙ көтәһе бар, әгәр инде осаңа ер йылыһы бәреп торһа, тимәк, ер өлгөргән, сәсергә ярай тигән һүҙ. Ерҙе тикшерә торған бынан да ышаныслыраҡ әмәл юҡ.

— Харап икән!

— Бына шулай ул, Абдрахман Абдулғалимович!

Хужа Абдрахманды сәскес эргәһенә килтерҙе лә:

— Был машина менән элек эш иткәнең бармы? — тип һораны.

— Юҡ, күргән нәмәм түгел.

— Беҙҙең ауылда бының менән сәскән кешеләр бар. Иртәгә, бәлки, шуларҙан берәйһен саҡырырбыҙ.

— Юҡ, кәрәкмәй. Үҙем дә булдырырмын.

Хужа ҙур тәгәрмәс өҫтөндәге вал башына беркетелгән шестерня бүлкәттәрен ҡараны.

— Был сәскес бер дисәтинәгә ун ике бот бойҙай сәсеүгә көйләнгән. Ярай, хәйерле сәғәттә!

Абдрахман ҙур майҙанға төшөр алдынан ер башын киҫеп алды ла ат сәскесен шунда эшләтеп ҡарарға хәл итте. Ер өҫтөнә төшкәс тә сәскескә ҡушарлап егелгән дүрт ат постромкаларына үтә баҫып, буталып, сәскесте ул яҡҡа ла был яҡҡа ла тартҡылап, алдарынан йәйәү төшкән хужа артынан йылдам ғына атлап киттеләр. Орлоҡ йәшниге өҫтөндә дилбегә тотоп ултырған Абдрахмандың тәүҙә аҫҡа ҡарағанда башы әйләнде, валдың, шестерняларҙың, ергә батып әйләнеп барған тимер тәрилкәләрҙең тауышы нисектер ситен ишетелде, ләкин тора-бара күнекте. Бәләкәй генә майҙанда биш-алты тапҡыр әйләндерҙе лә сәскесте ҙур майҙанға төшөрҙө, бураҙна эҙен юғалтмаҫ өсөн, уң яҡ тәгәрмәс артына тимер һөйрәтке таҡты. Бураҙна буйынан йөрөгән Андрей ҡарттың иң аҡыллы туры аты тик тимер һыҙып киткән эҙҙән генә йөрөргә лә төшөнөп алды. Абдрахман беренсе көндө шулай дүрт-биш дисәтинә ер сәсеп тә ҡуйҙы. Ҡискә табан үҙ кәүҙәһендә арыу һиҙһә лә күңеле күтәренке ине. «Исмаһам, яңынан бер крәҫтиән һөнәренә өйрәнелә, киләсәктә, бәлки, тормошта ярап та ҡалыр әле». Сәскес тәрилкәләренә әҙерәк бысраҡ йәбешкәс, хужа уны ҡаҙаҡ менән таҙартып маташҡан Абдрахман эргәһенә килдә лә:

— Пожалуй, бойҙай сәсеүҙе бер-ике көнгә туҡтатып торорға тура килер. Иртәгә һоло сәсә башлайбыҙ, бер көн сәсерлек кенә һоло бар, — тине.

Хужа сәскесен һоло орлоғона көйләй башланы. Баҫыу өҫтөнә күсеп сыҡҡас, Абдрахман үҙ ыҙаны менән йәнәш кешеләрҙе ҡыҙырып сыҡты. Улар араһында хөкүмәт кредитына ат, һабан һатып алып, орлоҡ ссудаһы менән файҙаланған үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр һабанға сыҡҡан кешеләр байтаҡ ине.

Белов ҡарттың күңелендәге эш сәме нисек кинәт дөрләп тоҡанһа, ҡапыл күҙҙән юғалған йәшен һымаҡ һүнеп ҡалды. Күрһәтмәләрен биреп, ҡыҙған баш менән һабансылар араһында буталып йөрөнө лә хужа тәртә башын ауылға ҡайырҙы.

Абдрахман башта үҙ ыҙаны буйынса күршеһе Никонорҙың ҡыуышына башын тығып сәләм бирҙе. Аяғына сабата, өҫтөнә ямаулы киндер күлдәк кейгән, тәбәнәк кенә урта йәштәрҙәге кеше ихлас сәләм алды ла ҡыуыш янында яңы һабан тәгәрмәстәрен, төрәндәрен ҡарап маташҡан Абдрахман менән килеп күреште.

— Йә, күрше, иртәгә ер һөрөүҙе нисегерәк башлап ебәрергә уйлайһың? — тип һораны унан Абдрахман.

Теге ҡулдарын һелтәй-һелтәй:

— Бына ята минең биләмә. Былай ере артыҡ тигеҙ түгел, үргә тартым. Үткән йыл көҙ тунға һөрөлмәй ҡалған ер тура килде. Аттар әҙер, иртәгә, аллаға тапшырып, һөрә башларға тип самалап торам, — тип ҡыуыш ҡырында бышҡыра-бышҡыра ашап йөрөгән тышаулы ике атҡа төртөп күрһәтте.

— Элек аттарығыҙ бураҙнала йөрөгәйнеме һуң?

— Юҡ. Икеһе лә тиҡ арба-санаға ғына егелгән хайуандар.

— Ерегеҙ ҡаты күренә, ике генә ат алдыра алмаҫтыр. Һабанығыҙ дүрт атлыҡ бит. Һөрөүҙе башлау өсөн ике атығыҙҙың береһе элек бураҙнала йөрөй белгән булыуы мотлаҡ, шунһыҙ бик ныҡ этләнәсәкһең, ә бураҙнала ат өйрәтеп торорға ваҡыт булмай. Яҙ бик һуңлап килде, һәр көнө ҡәҙерле.

— Уныһы дөрөҫ, — тине хужа кеше, елкәһендә ойошҡан сәсен тырнап.

— Орлоғоғоҙҙо хәҙер үк бүлеккә таратып йәйеп ҡуйығыҙ, йылына торһон, — тине Абдрахман, ауыҙы бәйле тоҡтарҙы күреп. — Ә түтөң сығарып ятҡан эргәңдәге күршең кем?

— Христофор. Беҙҙең икебеҙгә бер һабан да, берәр ат, бергәләп эшләргә һөйләштек. Шулай уңай, тип уйлаштыҡ.

— Уныһы билдәле, — тине Абдрахман, ҡапыл ниҙер тапҡан кеше кеүек.

Алдында торған кешенең ауыҙынан Абдрахман күңелендә күк көмбәҙендә атылған йондоҙ яҡтыһы кеүек ниндәйҙер яңылыҡ шәүләһе, өмөт сыраһы ялтлап киткәндәй булды. «Ысынлап та, ауылдың был фәҡир-фоҡараһы яфа сигеп, берәм-берәм бер эш тә сығара алмаясаҡ. Ошо яҙғы сәсеү осорона ғына булһа ла уларҙың үҙҙәренән тыш, аттары менән эш ҡорамалдарын да бергә ойошторорға, йәғни дөйөмләштерергә кәрәк. Шулай йәтеш буласаҡ. Ғүмер буйы үҙ межаһында соҡоноп өйрәнгән айырым крәҫтиән был тәҡдимгә риза булырмы? Уларҙың һөрөр ерҙәре, сәсер орлоҡтары бер сама булһа, бәлки, риза булырҙар ине, ә былай... Ул ғына ла түгел. Мәҫәлән, Никанор сәсеүгә бер үҙе генә сыҡҡан, ә Христофор үҙенән башҡа өс малайын да эйәрткән. Был ғәҙелме? Нишләргә?» Абдрахмандың башын ошо һорауҙар борсоно, ләкин «дөйөмләшергә, көстө бергә туплап эшләргә» тигән уй унын мейеһенә ныҡлап инеп ултырҙы. Ур иртәгәһенә сәсеү эшенең нисек башланыуын ҡарарға килергә тейешле Степан Степанович менән губерна вәкилен көтөргә булды.

Алдан һөйләшеп ҡуйғандай иртәгәһенә бөтә ир-ат һабанға төштө. Һауала юғарыға уҡ һымаҡ атылған һабан турғайҙары һайрауына һайт-һайтлап ат ҡыуған, һабан тәгәрмәстәренең сығырлаған, бураҙна боҙоп, постромкаларына үтә баҫып бышҡырған ат тауыштары ҡушылды. Байҙар, аттарҙың тәүге аҙымынан уҡ ер ҡыртышын тигеҙ әйләндереп, үҙ арттарынан ялтырап ятып ҡалған кәҫтәрҙе ҡара таҫма шикелле алға һуҙып, йылдам ғына эш башлап ебәрҙе. Сөнки уларҙың һабаны ла алдан көйләнгән, аттары ла элек бураҙнала йөрөп өйрәнгән шул. Ә ярлы меҫкендәрҙең төрлө ерҙән йыйылған, бер-береһенә таныш түгел аттары һәм тәрәнлеккә, бураҙна яҫылығына көйләнмәгән һабандары ер башында уҡ төрлө сәбәп менән туҡталып ҡалды.

Нәҡ ошо мәлдә арбаһына ултырып, Абдрахман һөрә башлаған урынға ике Степан килеп туҡтаны.

— Йә, иптәш Игебаев, эштәр барамы? — тип һораны ауыл Советы председателе.

— Беҙҙеке бара. Ә, ана, сәүкәләрҙеке ҡара! — Абдрахман, үҙе әйләндереп һалған ике рәт бураҙна өҫтөндә сырсыу килеп ҡорт сүпләгән сәүкә көтөүенә ишараланы.

— Да-а, уларҙың эше көйлө, — тип һуҙҙы Степан Ильич. — Ә күршеләр нисек? Һин бына ике бураҙна ярып өлгөргәнһең, ә улар ер башында ҡысҡырышып, ата-әсәләрен иҫкә төшөрөп торалар. Сәбәп ниҙә?

— Сәбәбе төрлөсә. Бер генә түгел. Кулактар уларға үҙҙәренең насар, аҡ тамыр ҡаплаған наделдарын биргән. Ә беҙ уны аңғармай ҡалғанбыҙ. Икенсенән, ул ерҙе пар ат ҡына егеп һөрөп булмай. Дүртәр ат егеп һөрөргә кәрәк. Өсөнсөнән, һөрөүселәрҙең тәжрибәһе етеңкерәмәй. Бына шул.

— Ә ниндәй тәҡдим?

— Ниндәй тәҡдим тип ни? Тәҡдим бер генә. Уларҙың аты-һабандарын дөйөмләштереп, бергә эшләүҙе ойоштороrға кәрәк.

Степан Ильич был һүҙҙе ишеткәс, йәнләнеп ҡулдарын ыуып алды.

— Степан Степанович, ишетәһеңме? Игебаев иптәш беҙгә аҡыллы фекер әйтеп тора ла баһа. Был бит идея! Был бит иптәш Лениндың ваҡ крәҫтиән хужалыҡтарын кооператив аша коммуналарға берләштереүҙең башланғысы түгелме?

— Минеңсә, шулайыраҡ. Бының бик ҡыҙыҡ та, крәҫтиән өсөн киләсәккә файҙалы, тура юл булып сығыуы бар, — тип Степан Степанович иптәшенең һүҙен ҡеүәтләне.

— Тап шулай. Давай, хәҙер үк ярлыларҙы йыйып һөйләшеп алайыҡ. Тора-бара уларҙы үҙҙәре етештергән ауыл хужалығы продукттарын һатыу өлкәһендә лә дөйөмләштерергә булыр, ә? Бына бит, әгәр ошондай сараға крәҫтиәндәрҙе өгөтләп, ылыҡтырып булһа, был Ленин һыҙған кооперация төҙөү үҙе була түгелме?

Ярты сәғәт эсендә Абдрахман үҙҙәре сәсеүгә сығарған ауыл ярлыларын йыйып килтерҙе. Улар араһында күтәрмә яғалы, биленән ҡайыш менән быуылған сатин күлдәкле, оҙон ҡуныслы күн итек кейгән, бөтә кешенән бер башҡа бейегерәк Абдрахман ситтән ҡараған кешегә үҙе ауыл ҡулағын хәтерләтә. Степан Ильич ике ҡулын артҡа һалып, уртаға сыҡты ла яңы ғына башында хасил булған, әле формалашып бөтмәгән, фекерен аңлатырға кереште. Бында йыйылған бөтә кешенең дә күңел һалып тыңлауына ҡарағанда, вәкил тәҡдим иткән фекер улар өсөн бик эшлекле күренде. Ләкин был әңгәмә һорауҙарға, тәҡдимгә күскәс, төрлө тауыштар ишетелде. Иң башта һүҙгә һаҡаллы Христофор тауыш күтәрҙе.

— Ҡәҙерле иптәш, ғәфү ит, атайыңды белмәйем, был нисегерәк килеп сыға инде? Бына мин, мәҫәлән, сәсеүгә үҙем менән өс улымды алып сыҡҡанмын, ә Никанор һерәйеп яңғыҙ сыҡҡан. Мин өс улым менән тир түгеп, кеше эшен эшләп йөрөргә тейеш буламмы? Давай һеҙ бик тә бик беҙҙе дөйөмләштерергә уйлайһығыҙ, бөтә ерҙе һәм һөрөлгән баҫыуҙы булған ғына орлоҡ менән бергә сәсәбеҙ ҙә, һуңынан бөтә сәселгән майҙанды эшләгән йән башына бүләбеҙ.

— Аҡылың алтын икән. Һин үҙеңдең өс улың менән ике дисәтинә ергә килгәнһең, ә мин бер үҙем өс дисәтинә сәсергә самалап торам: мин нишләп һинең менән бүлешергә тейеш? Юҡ, иптәш, мин кишер заговоньеһына[1] ҡәҙәр ошонда ятһам ятам, ләкин үҙ орлоғомдо үҙем сәсеп ҡайтам. Белдеңме?

— Икешәр ат егеп һөрөп булмаясағы көн кеүек асыҡ. Шулай булғас, әйҙәгеҙ, икешәр ат урынына һәр һабанға дүртәрҙе егеп, бураҙнаға төшөп ҡарайыҡ.

— Ысынлап та, ошолай дөрөҫөрәк булыр.

— Давай, егеттәр, улай-былай иткәнсе, көйлөрәк һабандарҙы һайлап алабыҙ ҙа дүртәр ат егеп төшәбеҙ.

— Ҡарай торғаны юҡ. Давайте, егеттәр, эшләмәгән башмы ни! Элгәрге өмә формаһында биш һабан егәбеҙ

---

[1] Морковкино заговонье — христиан календары буйынса 15 август — Успенье көнө.

ты хәҙер үк бураҙнаға төшәбеҙ, тик төпкә бураҙна эсенән йөрөп күнеккән аттарҙы егергә кәрәк. Шабаш!

Оҙаҡ кәңәшләшә торғас, ун һабан урынына биш һабан ҡалдырырға, дүртәр ат егеп һөрә башларға ҡарар иттеләр. Осраҡлы ғына килеп пәйҙә булған эш ҡорамалдарын һәм тартыу көсөн «дөйөмләштереп», ауылда коммуна төҙөү тигән фекер ике етәксенең башынан бик оҙаҡ ҡына китмәне, икеһенең дә зиһенен солғап алды. Тик ул аҙағына тиклем асыҡланмай, быйылғы яҙғы сәсеү мәлендә өмә рәүешендә генә кәүҙәләнеп ҡалды, коммуна төҙөп, уның эсендәге үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыу, эшкәртеү һәм түләү тәртиптәрен дөрөҫ билдәләүҙе бойомға ашырыу өсөн, әле байтаҡ ҡына ваҡыт кәрәк булды.

## 5

Быйылғы сәсеүҙә Андрей Иванович бөтөнләй ҡатнашманы тиерлек. Һыҙланыуына һылтанып, бөтә эште Абдрахман елкәһенә ауҙарҙы. Ә үҙе аяғына быйма, ҡулдарына яры бейәләй кейеп, көн оҙон тигәндәй, ҡышты яшыҡлап сыҡҡан һыйыр шикелле, өй артында сыуаҡта ҡыҙынды. Быйыл бөтә нәмәгә лә үтә ныҡ күңеле һүрелде, бермә-бер дәрте ҡайтты. Бөтә кәүҙәһе ҡаужып, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүен Совет власының төрлө яҡлап ҡыҫмаҡҡа алыуының касафаты тип хисапланы. Эйе, Андрей Иванович заман мыҫҡалына һалғанда яле яңы ғына илле йәште тултырған, казаклыҡ хеҙмәтенән ужыты ла сыҡмаған кеше ине. Шулай ҙа ул быйыл күҙгә күренеп биреште. Уға бигерәк утлы, дауыллы йылдарҙы бергә үткән боевой карабинын, эфесына әсе тире һеңгән казак ҡылысын Совет хакимдарына тапшырыуы ныҡ тәьҫир итте. «Мылтыҡ, ҡылысһыҙ казак ниндәй ир булһын ти? Ул — талпынып осор ҡанаттары ҡырҡылған бахыр ҡош». Бына нисек хис итте ул үҙен.

Тәрән хәсрәтле уйҙарынан әҙерәк арынған мәлдәрҙә ул ике тапҡыр ғына, үҙенең ҡуян арбаһын егеп, баҫыуға барып ҡайтты. Сәсеүҙе яртылағас, һуңғы барыуында уның былай ҙа боҙоҡ күңеле тағы ла нығыраҡ боҙолоп ҡайтты. Боҙолмаҫлыҡмы ни? Үҙенең таныш әшнәләренән ул Абдрахмандың, күҙ-ҡолаҡ юҡлыҡтан файҙаланып, хужаның ун ике рәтле ат сәскесе менән ауыл ярлыларына утыҙ дисәтинә иген сәсеп биреүен ишетте.

Аттарын туғарып, ҡулына йүгәндәрен тотҡан Абдрахман, төшкө ашҡа ҡайтты. Бер сәғәт алдараҡ килеп, бындағы бөтә хәл-әхүәлде белеп ултырған Андрей Иванович-

тың тамам сикәһе ҡорошоп, кикриге буйтым ҡыҙарып алғайны. Уның ҡашын һындырып, аҫҡа ҡарап ултырыуынан уҡ Абдрахман эштең айышына төшөндө. Ҡарт һаулыҡ та алманы. Абдрахман уға иғтибар итмәй, ҡаҙан эргәһендә таҡтанан юнып эшләнгән өҫтәлгә ашарға ултырғас, теге түҙмәне, асыуынан ҡыҙарған биттәрен ҡабартты ла:

— Бай малын таратырға добродетель табылған икән, мать... — тип әсе һүгенде, ҡулындағы ҡамсыны быймаһы ҡунысына шапылдатып һуҡты. Шунан таҡта өйгә инеп, сөйҙә элеүле торған ижауға шажлап торған бал ағыҙып, мыйыҡтарын тыға-тыға эсте лә, ауылына ҡайтып китте.

Баҫыуҙа ул башҡа күренеп йөрөмәне.

Яҙғы сәсеү тамамланыуға, курстан Марғарита ҡайтып төштө.

Үҙенең үлеп һағынғанын кеше алдында артыҡ күрһәтеп бармаһа ла, өй аулаҡ ҡалғас, Абдрахман бисәһен ике ҡуллап ҡоштай үргә сөйҙө. Осрашыу шатлығынан нишләргә белмәй йыш-йыш тын алған Маргаританың тубығына ултыртып, һығып ҡосаҡланы, ҡайнар ирендәренән ҡат-ҡат үпте, тут баҫа башлаған тумалаҡ биттәрен үҙенең шыраулы устары менән наҙлап иркәләне. Ләкин Абдрахмандың күңеле борсоулы. Маргаританың моңһоу күҙҙәренә керпек тә ҡаҡмай оҙаҡ ҡына текләп ултырҙы ире, әммә ул мөләйем күҙҙәрҙә ысын мөхәббәт нуры менән мансылған тоғролоҡтан башҡа бер ни ҙә шәйләмәне. Маргаританың һиҙгер йөрәге иренең күңелен ниндәй болоҡһоу шәүлә ҡаплағанын тойҙо.

Ул ирен муйынынан ҡосаҡланы ла, уға эҫе тынын бөркөп:

— Эх, ты, мой большой дурачок. Мин һине был донъяла бер кемгә лә алмаштырасаҡ түгелмен. Ант итеп әйтәм; әгәр күңелемдә тырнаҡ шәбеһендәй хыянат булһа, ошо урында мине ер йотһон, — тип бышылданы.

Абдрахмандың бите буйлап Маргаританың бер нисә бөртөк йәше тәгәрәне, был уның саф мөхәббәтенең ике бөртөк кенә ләйсән ысыһы ине.

Ҡарттың соланда йүткерә-йүткерә ишек тотҡаһына йәбешеүе, мөхәббәт упҡынында йөҙгән ике бәхетле йәш йөрәкте һиҫкәндереп уятты.

Абдрахман өсөн бөгөнгө көн иң бәхетле көндәрҙең береһе ине.

Маргаританың, күктән төшкәндәй, ҡапыл хәбәрһеҙ-ниһеҙ ҡайтып төшөүенә Анастасия Петровна ла ҡыуанды, уны ҡайҙа ултыртып, ни менән һыйларға белмәне. Сөнки һәр ваҡыт эштән башы сыҡмаған Абдрахмандың өйҙә булмаған саҡтарында тамам сығырынан сығып, бәйеле аҙған

хужа менән япа-яңғыҙ тороп ҡалыуы уның өсөн бигерәк тә ҡоло ғазап ине. «Бына Маргарита ҡайтыр, бола тормош яйға һалыныр, әүәлгесә тыныс ҡына йәшәй башларбыҙ әле», тип тә өмөт итә ине хужабикә. Эйе ләһә, Маргарита ҡайтып төшөү менән өй яҡтырып киткәндәй булды, ләкин был оҙаҡҡа барманы.

Иртәгеһенә иртәнге тамаҡты ашап, Маргаританың «ауыл Советына барып ҡайтам» тип ишек асыуы булды, ҡарттың ҡашы йәмерәйҙе, бите аҫҡа һалпайып төштө.

Совет председателе тәҙрәнән ҡарай-ҡарай уның килгәнен көтә ине инде. Ул тупһаны аша атлағас та, Степан Степанович ике ҡулын йәйеп, уға ҡаршы торҙо.

— Бына молодчина. Иҫән булғас, беҙҙең доктор ҡайтып та төшкән бит. Бында ни иптәш Игебаев менән көн дә тигәндәй яғалашып торҙоҡ. «Ҡайҙа оҙаттығыҙ бисәне, давай табып бирегеҙ», тип теңкәгә тейҙе бит малай, — тип мәрәкәләне.

Уның менән йәнәш килеп ултырған Маргаританың йөҙөндә председатель һүҙенән уңайһыҙланыу һыҙаттары беленеп ҡалды, уның бит остарында һүрән генә ҡыҙыллыҡ һиҙелде. «Эйе, шулай булмай ни? Ул Абдрахманығыҙҙың ҡырҡ ятып ҡырҡ торғанда ла иҫенә кереп сыҡмағанмындыр әле», тип уның мәрәкәһенә ҡаршы мәрәкә менән яуап ҡайтарырға ла уйлағайны, ләкин тартынды, өндәшмәне.

Маргарита тубығындағы күн сумкаһын асып, председателгә курстан һуң тапшырылған үҙ танытмаһын һуҙҙы. Степан Степанович, уртаға бөкләнгән ҡағыҙға тиҙ генә күҙ йүгертеп сыҡты ла, битенә һибелгән шатлыҡ нурҙарын йәшерергә теләгәндәй, ҙур кинәнес менән яңы тырпайып килгән мыйығын һыйпаны.

— Тағы ла бер тапҡыр рәхмәт. Прививальный сестра һөнәренән тыш акушерка булырға ла өйрәткәндәр икән. Был беҙгә иң кәрәкле һөнәр. Эх, тик һинең ошондай документ менән ҡайтып, эшкә сумыуыңды Степан Ильич кенә күрә алманы. Бик көткәйне.

Маргарита теленән һорау ысҡынғанын һиҙмәй ҙә ҡалды.

— Ә ҡайҙа һуң Степан Ильич? Әллә берәй бәлә-ҡазаға юлыҡтымы?

— Юҡ, уны яҙғы сәсеү эштәре бер аҙ еңеләйә төшкәс, губернаның тау-урман зонаһына ебәрҙеләр. Һиңә сәләм күндерергә ҡушты.

— Рәхмәт инде хәстәрлеге өсөн.

— Эйе, һинең уҡыуға китеүең дә уның тырышлығы арҡаһында бит. Ул ғынамы ни? Волостан медпункт, теге родхатаны әйтәм, йүнәтергә тип бүленгән аҡса етмәгәс, Сте-

пан Ильич менән уйлаштыҡ-уйлаштыҡ та йәштәрҙе ойоштороп, билеттар һатып, ике-өс тапҡыр спектакль ҡуйып ебәрҙек. Степан Ильич менән һаҡал-мыйыҡтарҙы ҡырып ташлап, үҙебеҙ сәхнәлә ҡатын-ҡыҙҙар булып уйнап ташланыҡ. Бер әҙәм дә танымады, әле һаман үҫтереп булмай ятыла, — тип көлөмһөрәп ул элекке ҡуйы мыйыҡ урынын ғәҙәте буйынса тағы һыйпап ҡуйҙы. — Ни эшләмәк кәрәк? Башҡа сара юҡ. Бына шунан төшкән аҡсаны тотоноп, һин ҡайтыуға, ана, ауыл Советына ҡаршы ултырған ике бүлмәле йортто рәтләп, родхата яһап ҡуйҙыҡ.

Председатель бик дәртләнеп һөйләп алды ла, Маргаританы тәҙрә янына килтереп, тыштан бүрәнәләре эзбиз менән аҡланған ике бүлмәле йәтеш кенә өйҙө күрһәтте.

— Уны рәтләп бөткәс, хәҙер волоста эшләп йөрөгән элекке земство врачын саҡырып күрһәттек, ул бик шәп кәңәштәр биреп, беҙҙе маҡтап ҡайтып китте. Әйҙә, Маргарита һеңлем, үҙең эшләйәсәк больницаны барып ҡарайыҡ әле, — председатель тиҙ генә кейенде лә алдан юл башланы.

Иҙәндәре һап-һары итеп, ҡырып, йыуылған бүлмәгә килеп ингәс, Маргарита оло кинәнес менән ике бүлмәне ҡарап сыҡты.

— Степан Степаныч, бына бында дарыуҙар ҡуйыу һәм һаҡлау өсөн ике асмалы быялалы шкаф кәрәк, ә бына был урынға кушетка ултыртабыҙ. Стена ҡырына, медпунктҡа килгән ауырыуҙар өсөн, бер эскәмйә ҡуйырға кәрәк булыр.

Ситтә йылмайып ҡына, яңы фельдшерҙың йәшлек хисе бәреп торған, яҡты хыялға төрөнгән күңелле һүҙҙәрен тыңлап торған председатель:

— Тағы ниҙәр кәрәк булыр, һеңлем? — тип һораны.

Маргарита, иҙән уртаһында яҡты сырайын нурландырып, әҙ генә уйланып торҙо ла:

— Ошо урында матур ғына өҫтәл менән ултырғыс торорға тейеш. Миңә ауырыуҙарҙы теркәп барырға кәрәк, — тип ирендәрен бүлтәйтте. — Ә бында, — ул икенсе бүлмәгә сығып китте, — бала тыуҙырыусы ҡатындар өсөн ике карауат кәрәк буласаҡ.

— Бөттөмө?

— Бөттө.

— Бөтһә, Маргарита һеңлем, ошо медпунктҡа кәрәк нәмәләрҙең исемлектәрен төҙөп, бөгөн үк минең ҡулға тапшыр. Билдәле, һин талап иткән нәмәләрҙең бөгөн генә барыһын да эшләй алмабыҙ, ләкин тора-бара бөтәһе лә булыр, — тип ышандырҙы председатель.

— Степан Степанович, дарыуҙар яғын нишләрбеҙ?

Уны йәһәт кенә волость больницаһынан алып килергә кәрәктер бит?

— Әлбиттә. Иртәгә үк. Унда үҙең генә барып әллә ни ҡыйрата алмаҫһың, Абдрахман менән барырһың. Андрей Ивановичтың атын егерһегеҙ. Әгәр ҡаршылашып маташһа, үҙемә килегеҙ.

Маргарита, председатель һүҙен тыңлап, бер аҙ һүҙһеҙ торғандан һуң:

— Степан Степанович, ниндәй дарыуҙар кәрәк булыр икән? — тип һорап ҡуйҙы ла үҙ һорауынан үҙе оялғандай битен ситкә борҙо.

— Мин, һеңлем, ул дарыуҙарындың исемен әйтә алмайым, ләкин беҙҙең Советҡа ҡараған ауылдарҙа халыҡты йонсотҡан ауырыуҙарға, киң таралған сирҙәргә ҡарап дарыу килтерергә кәрәктер, тип уйлайым.

— Мин яңы кеше булғас халыҡтың ни менән интеккәнен белеп етеңкерәмәйем бит әле.

— Халыҡты, бигерәк тә бала-сағаны, яфалаған ауырыуҙарҙан беренсе урында — тапма. Шуның арҡаһында мәктәп йәшендәге балалар уҡыуға йөрөй алмай, һарыға һабыша, бисаралар. Ә күпме бала-сağа ошо ауырыуҙан яҡты донъянан китеп тора, ата-әсә өсөн ошонан да ҙур ниндәй ҡайғы булыуы мөмкин?! Мәктәпкә йөрөгән балаларҙың барыһы тигәндәй ҡысыу менән яфа сигә. Шуны дауалау өсөн анауы бер әсеташ тигән нәмәһен дә табып булмай бит. Ә инде оло граждандар араһында, аслыҡ нәтижәһендә теләһә ни ашап, эс китеү ныҡ таралды. Уларҙы һанай китһәң, ике ҡулыңдағы бармаҡтарың да етмәҫ. Ә трахома! Былар барыһы ла хәйерселек, шуның арҡаһында йәшәү культураһы түбән булыуҙың касафаты. Бына волостан иҫән-һау йөрөп ҡайтһаң, ауыл Советына ҡараған бөтә ауылдарҙы өй һайын ҡыҙырып сығырға, сирле кешеләрҙең хисабын алырға тура киләсәк. Бер һүҙ менән әйткәндә, эшең, һеңлем, муйындан, иртәгә инеп, минән ҡағыҙ алығыҙ ҙа — волосҡа.

Председатель, үҙ вазифаһын бөткәнгә хисаплап, сығырға уҡталды, ә Маргарита, үҙе башҡарырға тейешле бурыстың шул тиклем ҙур һәм ҡатмарлы икәнен яңы ғына күҙ алдына килтергәндәй, урынынан ҡуҙғалмай байтаҡ ҡына торҙо.

— Һеңлем, аптырама, улар барыһы ла әҙәм башҡара торған эштәр. Билдәле, башта еңел булмаҫ, артабан ярҙам итербеҙ. Әйҙә, һеңлем, киттек. Ҡайтып, Игебаевты шатландыр. Һеҙ хәҙер икегеҙ ҙә партия тарафынан мобилизацияланған боецтар — ең һыҙғанып керешергә кәрәк.

## 6

Төнө буйы йөрөп сыҡҡан Андрей Иванович таңға ҡарай ғына йоҡоға талғас, Абдрахман менән Маргарита, тороп, волосҡа ҡуҙғалдылар. Үҙҙәренең йомош менән Ҡыҙыл станицаһына китеүҙәре хаҡында уларҙы оҙатырға арттарынан сыҡҡан Анастасия Петровнаға ғына әйттеләр. Дарыу-фәлән һалыу өсөн кистән таҙартып ҡуйылған хужаның бәләкәйерәк буш һандығын арбаға тейәнеләр.

Хәҙер инде баҫылып, үҙ ярҙарына ҡайтҡан Яйыҡ йылғаһы өҫтөнә май ҡояшы үҙенең тәүге нурҙарын һипкәндә, улар станицаға бараһы юлды яртылағайны. Абдрахман менән ҡуша ултырып һирәк йөрөгән Маргарита шат.

— Ух, белһәң ине был еңмеш башҡортомдоң эсендә ниҙәр ятҡанын? Ниндәй боҙоҡлоҡ уйлап китеп бара икән?

Абдрахман өндәшмәне, көлдө генә.

— Аҡыллым, әйт, исмаһам, бер һүҙ, — бесәй балаһы шикелле иренә һырпаланған Маргарита һөйләнеүҙән бушамай.

— Ни генә тип әйтәйем икән һуң мин һиңә? Сайыр шикелле йәбештең дә баһа, ә!

— Һине ө-ҙө-лөп-ө-ҙө-лөп яратам тип әйт!

— Юҡ, юҡ. Аҙым һайын, яратам, тип, ҡотортоп булмаҫ инде, ул һүҙҙе ишеткәс, һеҙ бигерәк наҙлана башлайһығыҙ, ә ул ирле бисәгә зарарлы. Беҙҙә улай тип әйтмәйҙәр.

— Ә һин миңә өйләнгән саҡта «Маргарита, мин һине өҙөлөп яратам, ус төбөндә генә алып йөрөтәсәкмен» тигән вәғәҙәң ҡайҙа, ә? Онотоп та өлгөрҙөңмө ни?

— Онотманым, ләкин ундай ҡиммәтле һүҙҙе йыш ҡабатларға ярамай, уның тәме китә.

Абдрахман, эстән генә көлөп, ҡатынының йәненә тейә. Бер аҙ һүҙһеҙ барғас, Маргарита тағы ла хыялланырға тотона.

— Ҡәҙерлем, мин бына ошолай һиңә һыйынып ҡына ултырып, мәңге юл үтергә риза.

— Ә беҙҙең өсөн кем донъя көтә, беҙҙе кем ашатыпкейендерә?

— Ә мин, һин эргәмдә булһаң, бер тәғәм ашамай ҙа ер сигенә тиклем ошолай барырға риза.

— Үкенескә ҡаршы, тормош унан ғына ғибәрәт түгел шул.

— Тағы нимәнән?

— Балалар тыуҙырып, уларҙы ошо үҙебеҙҙең йәмғиәт өсөн кеше итеп, тәрбиәләүҙән дә юғары ниндәй вазифа бар донъяла?

— И, унынһы ла бар бит әле. — Маргарита балаларса ҡысҡырып көлөп алды. Ҡапыл уның алсаҡ битен шәүлә ҡапланы. — Һиңә әйтмәнем дә... минең һуңғы ваҡыттарҙа башым әйләнә, күңелем болғана, тамағыма аш бармай... Буйымда бар шикелле.

Абдрахман дилбегәһен ташлап, уны биленән ҡосаҡланы ла алсаҡ битенә таралған шатлығын йәшерә алмай:

— Бының өсөн илайҙармы ни, иҫәүән? Был бит оло бәхет, тр-р-р! — тип, ылдым ғына юртып барған атын туҡтатты ла ҡыуанысынан нишләргә белмәй: — Ура-а! Ишетәһегеҙме, Игебаевтың төйгөстәй улы буласаҡ! — тип ҡысҡырҙы.

Тиҙҙән Ҡыҙыл станицаһына етәрҙән алда һулға ҙур ғына бөгөлөш яһап Яйыҡ йылғаһының текә яр башына һалынған атаҡлы сиркәүҙең көмбәҙе ялтырап күренде.

Волоста көн буйы йөрөп, алаһы дарыуҙарҙы алып, күрәһе кешеләрҙе күреп бөткәс, Абдрахман Андрей ҡарттың хеҙмәттәшенә кереп, атын ашатты ла кире юлға сыҡты. Обручевкаға бик һуң ғына ҡайтып еттеләр. Уларға ҡаршы сығып ҡапҡа асҡан Анастасия Петровна, Абдрахманға яҡынылраҡ килеп, әкрен генә:

— Ой, минең аҡылдан заяға хыялый ҡарт, көн буйы һеҙҙе таптырып, асыуынан эсте-эсте лә хәҙер быймаһыние менән карауатта сисенмәй ҙә йоҡлап ята, — тине.

— Ярар, Анастасия Петровна, бик хафаланмағыҙ, хәҙер мин өйҙә бит, иртәнсәк ул барыбер бөгөн ни эшләгәнен онотоп торасаҡ. Уның ҡайғыһы иртәгә бөтөнләй икенселә булыр. — Абдрахман хужабикәне тынысландырырға ашыҡты.

Маргарита иртә менән Степан ағаһына йүгерҙе. Беренсе йомошто урын-еренә еткереп үтәп ҡайтҡаны өсөн, Степан уны йәнә маҡтап алды.

— Ярай, ҙур рәхмәт. Оло эш башҡарып ҡайттың. Хәҙер инде дарыуҙарыңды матурлап теҙеп ҡуй ҙа ауырыуҙарыңды көт. Медпункттың файҙаһын төшөнөп алһа, ауыл халҡы иртәгә үк килеп тулыр, — тип шатландырҙы председатель. — Халыҡҡа ул турала аңғартылған.

Ләкин станицанан алып ҡайтҡан дарыуҙарҙы тәҙрә төбөнә, ишек эргәһендәге тумбочка өҫтөнә теҙеп ҡуйып, Маргарита ауыл ҡатын-ҡыҙҙарын бер нисә көн көттө, әммә яңы асылған медпунктҡа, Степан Степанович менән Абдрахмандан башҡа, аяҡ баҫыусы булманы. Байтаҡ ваҡыт яңғыҙы медпунктын һаҡлап ултырғандан һуң, ул Советҡа тағы барҙы.

— Степан Степанович, — тине ул йыш-йыш тынын

алып, — башҡа мин япа-яңғыҙым ул буш өйҙө ҡарауыллап ултыра алмайым, берәй сараһын күрергә кәрәк.

Совет председателе, ғәҙәтенсә, тауышын күтәрмәй фекер йөрөттө.

— Күрәһең, һеңлем, һинең менән был эште етерлек әҙерләнмәйенсәрәк башлап ебәргәнбеҙ. Дин йоғонтоһо көслө... Асылда Советҡа ҡараған бөтә ауылдар ҙа быуаттар буйына дин менән ағыуланған, әҙәм балаһы тыуғас та, суҡыныу, үлгәс уның панихидаһына тиклем сиркәү закондары менән йәшәгән халыҡ барлығын онотоңҡорап ебәргәнбеҙ. Дингә табынған ул халыҡ өсөн сабый тыуһа — хоҙай бирҙе, кеше үлһә — хоҙай алды. Ә был медпункт, дарыуҙар менән, бигерәк тә ауырыуҙарҙы бушлай, дауалау — халыҡ өсөн ят нәмә. Улар әле хәҙергә Совет власының үҙенә, уның үткәргән сәйәсәтенә, атап әйткәндә, уның медицинаһына ла ышанып етмәй, күҙ ҡойроғо менән генә ҡарай. Маргарита, иртәгәнән һиңә, өй һайын үҙеңә йөрөп сығыу кәрәк. Ҡайһы өйҙә нисә кеше йәшәй, шул ғаиләнең кеме ауырыу барыһын да аныҡлап хисапҡа алырға кәрәк. Бына һиңә дәфтәр, ҡәләм, туҡта, ҡәләмеңде бик шәп итеп ослап бирәйем, әйҙә, шулайтып ҡарайыҡ. Ризамы?

— Ярар.

...Өйҙә, билдәле, Маргаританың көндәр буйы медпунктында юғалып тороуына бик шатланып барманылар. Шул иҫәптән, Анастасия Петровнаның да ҡарашы һалҡынса тойолдо. Абдрахман менән уға ашарға ҡуйҙылар ҡуйыуын, ләкин хужабикәнең күңелендә, иғтибар менән ҡараған кешегә, ниндәйҙер төйөн ятҡанын күрмәй мөмкин түгел ине.

Тамағына әҙ-мәҙ ҡапҡыланы ла, Абдрахмандың айвайына ҡуймай, кофтаһы тышынан еңенә ҡыҙыл тәре ҫигелгән аҡ халат кейеп, Маргарита урамға сыҡты һәм ауыл осондағы һалам түбәле өйҙөң тәҙрәһен шаҡыны. Ул урам буйлап атлағанда уҡ, тәҙрәләре асыҡ ул өйҙөң ҡорғандарын тартып ҡуйҙылар, уның ҡат-ҡат шаҡыуына ла тәҙрәлә бер шәүлә күренмәне. Тик ул китә башлағас ҡына, тәҙрәгә ябырылған бер нисә баш күренде. Маргарита кире әйләнеп яңынан тәҙрә шаҡып торманы. тик үҙе артынса: «Ох антихрист, бусурманка», тигәнде генә ишетте. Быны ишетеү, әлбиттә уға артынан таш һалмауырлаған кеүек тойолдо. Уның аяҡ быуындары ҡалтырап, күҙ алдары ҡараңғыланды. Шул рәттә ултырған икенсе өйгә барып етте лә ул ихатаның ағас ҡоймаһына һөйәлеп торҙо. Өйҙөң ҡыйығы ҡалай менән бөрөп ябылыуына ҡарағанда, бында хәллерәк кеше йәшәйҙер. Бер аҙ хәл алғас,

Маргарита, ниҙер һиҙенгән шикелле, инергәме, әллә был өйҙө үтеп кенә китәйемме, тип икеләнде. Тәүәккәлләне, кейеҙ менән көплө ишекте шаҡыны. Өйҙән: «Рәхим итегеҙ!» тигән тауышты ишеткәс, тупһа аша уҙҙы. Өҫтәл артындағы бер нисә йәш ҡатын уны аҫтыртын ҡараш менән ҡаршы алды. Маргарита һүҙен башларға ла өлгөрә алманы, араларынан береһе, урта йәштәрҙәгеһе, ҡапыл торҙо ла уҡлауға йәбеште.

— Ә-ә, һин, шулайтып, беҙҙе үҙенден көфөр мөйөшөңә саҡырып йөрөйһөң икән? Бар, иҫән сағында табанынды ялтырат, килмешәк, сихырсы бисә! Беҙ ошоға тиклем һеҙҙең ярҙамдан тыш та йәшәгәнбеҙ, үҙебеҙҙең дауалаусыбыҙ бар, — тип ул быңдай хәлде көтмәгән Маргаританың яурын башына һуҡты.

Бер ни ҙә аңламаған Маргарита бер нисә аҙым артҡа сигенде лә урамға йүгереп сыҡты.

Был юлы ауыл Советына Абдрахман үҙе килде. Тупһаны ашаҡлар-ашаҡламаҫтан ул:

— Степан Степанович, һинең йомошоң менән йөрөгән минең ҡатынды бисәләр туҡмап сығарған. Ана, үҙ бүлмәһендә илап ултыра, — тип хәбәр һалды.

Председатель урынынан тороп:

— Вот безобразие, ул хулиган бисәләрҙең бөгөн үк арт һабаҡтарын уҡытырға кәрәк. Башҡаларына һабаҡ булыр. Өҫтәренән протокол төҙөп, мин уларҙы хәҙер үк волосҡа оҙатам, — тип ҡыҙып алды. — Исмаһам, ошо Маргаританы оҙатып йөрөү өсөн аңлы йәштәре лә юҡ бит. Анау ике комсомолец йораты ни, ауылда ячейка булмағас, күрше Ҡарабулаҡ хуторында учетта тора. Юҡ, был эш түгел, тиҙерәк үҙебеҙҙәге йәштәрҙе комсомолға ылыҡтырып, ячейка төҙөп ебәрергә кәрәк.

Тиҙҙән «Совет саҡыра» тигәс, һыланып-һыйпанып, теге, Маргаритаға ҡул күтәреүсе бисәкәй, һис бер тартынып-нитеп тормай, председатель өҫтәле эргәһенә килеп баҫты. Эйәге аҫтына төшөп торған яулыҡ остарын тартҡылап төҙәтте лә, иблес шәүләһе атып торған зәңгәр күҙҙәрен уйнатып:

— Степан Степанович, һин саҡырттыңмы мине? — тип йылмайҡланды.

Председатель бер һүҙ ҙә өндәшмәгәс:

— Бына мин килдем, — тип, үҙенең барлығын тағы бер ҡат белдереп, сейә шикелле алһыу ҡалын ирендәрен бүлтәйтте.

Маргарита инеү менән, председатель тәфтиш башланы.

— Марфа, бына беҙҙең хөкүмәт эшен башҡарып йөрө-

гән фельдшерицаға һин һуктыңмы? — тип һораны, стена янына килеп ултырған Маргаритаға эйәк ҡағып.

Теге бисә аяҡтарын алмашлап баҫып алды ла асҡан күҙен дә йоммайынса:

— Эйе, мин һуҡтым. Уҡлау менән, — тип дөрөҫләне.

— Нимә, совет хеҙмәткәренә ҡулыңды күтәреп, төрмәгә ултырғың киләме?

Степан Степанович, башын өҫкә күтәреп, күҙе менән ҡурҡытырға теләгәндәй, теге бисәгә уҫал ҡараш атты. Ләкин ҡатын йөҙөндә, керпектәрен дә ҡаҡмай үҙенә төбәлгән күҙҙәрендә ниндәйҙер етди тәүәккәллек күреп, председатель ҡапыл бушап ҡалғандай булды. «Тимәк, был бисә бөгөн үк үҙе теләп төрмәгә ултырырға әҙер, мин ни эшләп һүҙемде шул, эт талағыр, төрмәнән башланым әле, эх, Степан, Степан, һин һаман шул төрмә менән кеше ҡурҡыта торған элекке ғәҙәтеңдән ваз кисә алмайһың, замананың үҙгәрешен һаман тоя белмәйһең» тип үҙ-үҙен ҡаты тәнҡитләп алды.

— А что же! Төрмә икән төрмә.

Ул шундуҡ ҡағыҙ-ҡәләм алып, йәтешләңкерәп ултырҙы ла протокол төҙөргә тотондо. «Протокол» һүҙен әкрен генә ҡағыҙға төшөрҙө лә, йөнтәҫ ҡаштарын өҫкә күтәреп, алдында торған ҡатынға ҡараны. «Ҡағыҙ яҙа башлағанды күреп, алда торған ҡатын, ҡапыл һығылып төшөр ҙә, үҙ ғәйебен танып, ғәфү итеүҙе үтенер», тип уйлаған председатель бик хаталанды. Марфа Маргарита янына йәнәш барып ултырҙы, күҙҙәрен тәҙрәгә төбәп, председателдең протокол яҙып бөткәнен ҙур сабырлыҡ менән көтә башланы. Председатель дә бик ашығып барманы. Уға бер-ике тапҡыр кәзә тояғы төрөп алырға тура килде. Ике яҡ та бик тиҙ генә бер-береһенә бирешергә теләмәне. Иң ахырҙа, яҙып бөткәнде белдергәндәй, Степан тағы көрһөндө лә, йә, ҡулыңды ҡуй, тигәнгә ишара яһап, Марфаға ҡағыҙ-ҡәләм һуҙҙы. Ләкин ҡултамғаһын ҡуйырҙан алда ҡатын ҡәләмде уң ҡулына тотоп, председатель өҫтәленә ҡаршы бер-ике аҙым атланы, эске көсөргәнештән алһыуланған битендә нәфрәт сатҡылары уйнатып, ҡарлыҡҡан тамаҡ төбө тауышы менән иларға керешт е.

— Ярар, Степан. Мине һөргөн ебәреп, төрмәңдең барыбер өһәне туймаҫ, туясаҡ та түгел. Һеҙҙең Советығыҙҙың да, һинең дә бөтә һөнәрегеҙ — кешене шул төрмә менән янау, ҡурҡытыу. Һеҙҙең башҡа бер төрлө лә сарағыҙ юк. Ләкин мине төрмәгә оҙатыуҙан алда, мин атаһыҙ ыбыр-сыбыр өс баламды бына ошонда, һинең кәнсәңә индереп үҙеңә тапшырып китәм. Әйҙә, бик шәп булһаң, көтөп үҫтер аталары һуғышта үлгән етемдәрҙе, — Марфа

унын һайын ярһып иларға тотондо, танауын мырш-мырш тартып, Маргарита ла йәшкәҙәне.

Уйланмайыраҡ башланған был хәлдең ҡатмарланыбыраҡ китеүенә берәй яй уйлап табалмай ултырған Степан, тауышын бер иле түбәнәйтеп:

— Һинең ирең һуғышта һәләк булһа, Совет илеп һаҡлап үлмәгән, Аҡтүбә фронтында Колчак ғәскәрендә, беҙгә ҡаршы ҡулына ҡорал тотоп, һуғышып йөрөгән саҡта дөмөккән. Үлеп ҡотолдо, тере булһа, барыбер башы төрмәлә серер ине, — тине.

Ошоларҙы әйтте лә Степан «Эй, эсең өҙөлгөрө, тағы шул төрмә, ни булды һуң бөгөн миңә? Шул төрмәнән бүтән йүнле фекер башҡа килмәй», тип үҙ-үҙен тағы һүкте.

— Миңә һәм унын өс балаһы өсөн атаһынын кемде яҡлап һуғышып йөрөүе бик мөһим түгел. Бына ул эттең беҙгә итәк тулы бала ҡалдырып, үлеп китеүе ҡыйын. Бер бала ла үҙ ихтыяры менән ата һайлап алмай. Ул Колчакта йөрөгәнме, ҡыҙылдар яғында һуғышҡанмы, беҙҙең өсөн барыбер — атай. Әгәр ҡыҙылдарҙы яҡлап һәләк булһа, беҙгә ни ҡыуаныс? Балалар барыбер тере етем. Бына унын шулай Колчак фронтында дөмөгөп ҡалыуын алдан белһәм, мин дә ирһеҙ ултырһам ултырыр инем, ләкин ғүмерҙә лә уға иргә сыҡмаған булыр инем, — тип һыҡтай-һыҡтай Марфа үҙ хәбәрен теҙҙе.

«Ҡара һин уны, ниндәй төплө фекер йөрөтә? Ә мин, яртаҡыл, уны һуғышта ятып ҡалған ире менән битәрләп ултырам», тип үкенде Степан.

— Унының шулай, конечно. Аталары ҡылған эш өсөн балаларын ғәйепләп булмай.

Степан да үҙ алдына, ләкин кеше ишетерлек итеп, һөйләнде.

Уңайһыҙ хәлдән иламһырап ултырған Маргарита ҡотолдорҙо:

— Степан Степанович, мин ысын күңелдән үтенеп һорайым: Марфаны был ғәйебе өсөн зинһар яуапҡа тарттырмағыҙ. Мин унын өс бала әсәһе икәнен белмәгәйнем. Бәлки, ул үҙенең бәхетһеҙ тормошонон ҡөһөрөн кемдәндер алырға уйлағандыр. Мин уны кисерәм, — тип, эргәһендә ултырған Марфанын муйынынан ҡосаҡлап, еүеш битенә иренен терәне лә ҡысҡырып илап ебәрҙе.

Марфа ла бурыслы булып ҡалманы, унын сеңләүе тағы ла нығыраҡ яңғыраны.

Был тамашаға хайран ҡалып ултырған Степан Степанович «Бисә халҡын белмәҫһең — шатлығы ла, ҡайғыһы ла бер ҡатар йөрөй, ул ҡыуана икән тип, ауыҙыңды йыра

башлаһаң, шундуҡ күҙе шәмәрә» тип ҡағыҙ-ҡәләмен ултырған өҫтәленең йәшнигенә тығып ҡуйҙы.

Ҡәнсәгә хас дошман булып килеп ингән ике ҡатын, бербереһе менән дуҫлашып, сығып китте. Маргарита артабанғы эшендә һәр саҡ Марфаның үҙенә ҡарата эскерһеҙ ярҙамын тойҙо. Икенсе көндә һәм башҡа көндәрҙә лә ул фельдшер менән ҡуша Советҡа ҡараған бөтә ауылдарҙы йөрөп сыҡты. Степан Степанович волость менән һөйләшеп, медпункт сығымдарына бер аҙ аҡса өҫтәткәс, Марфа йыйыштырыусы булып урынлашты.

## 7

Ҡайһы бер кешеләрҙең кулактар, сиркәү әһелдәре ҡотҡоһона бирелеп, ауыл Советы асҡан медпункт эшенә аяҡ салыуҙарына, уның мөдирен төрлөсә мыҫҡыллап битәрләргә маташыуҙарына ҡарамаҫтан, Маргаританың тырышлығы бушҡа китмәне. Бер-ике ай үтеүгә, медпункттың эшен күп кенә ярлы ғаиләләре яҡшы баһалап өлгөрҙө. Бигерәк тә бала-саға араһында киң тарала башлаған ҡыҙылса иң башта ярлы ғаиләләрҙе ялмап үтте. Мәлендә медицина ярҙамы ала алмай яфаланған бер нисә бала, ҡапыл температураһы күтәрелеп, тишек-тошоҡ өйҙәрҙә һыуыҡ тейеүҙән үпкәләре шешеп, үлеп тә ҡалды.

Маргарита, председатель менән һөйләшеп, әлеге лә баяғы земство врачын Обручевкаға яңынан алып килде. Улар һис кисекмәҫтән түшәктә ятҡан биш-алты баланы, медпункттың икенсе бүлмәһенә күсереп, көнө-төнө дауаларға керештеләр. Был көндәрҙә Маргарита өҫ-башын алмаштырырға, тамағын туйҙырырға ла форсат тапманы. Ауырыуҙарҙы аяҡҡа баҫтырам, тип тумалаҡ биттәре һурығып тартылған, күҙҙәре ҡыҙарып шешмәкләнгән Маргаританы, медпунктҡа килеп, Абдрахман үҙе ашатып йөрөнө.

Бер ни белмәй сәсрәп ауырыған балаларҙың тәндәре ут булып янды. Оҙаҡ ҡуҙғалмай ятыу арҡаһында үпкәләре шешеп ҡуймаһын, тип көнө-төнө һаташып интеккән кескәйҙәрҙе Маргарита әленән-әле бер яҡтан икенсе яҡҡа әйләндергеләп торҙо, аяҡ табанына һалынған эҫе компрестарҙы йыш ҡына алмаштырҙы. Аҙна үткәндән һуң ауырыуҙарҙың тәнен, ябыҡ биттәрен ҡаплап алған сабыртыуы ҡуңыртлана башлағас ҡына уларҙың температураһы төштө, шунан инде балаларын алмашлап көтөп ултырған ата-әсәләр ҙә, Маргарита ла бер аҙ тын алғандай булды. Ҡыҙылса сабыртмаһынан арынған күҙҙәрен асып, ағас

карауаттар өҫтөндә аяҡтарын һалындырып ултырған ҡоро һөлдә ише балаларҙың ауыҙынан «Доктор апай», «Маргарита апай» тигән яғымлы һүҙҙәрҙе ишетеү, Маргарита өсөн үҙе бер ҙур бәхет ине. Ә инде аяҡтарына баҫтырып, ана үләм, бына үләм, тип ятҡан балаларҙы, сикһеҙ ҡыуанысынан күңел хистәре тулған, изге тойғонан күҙҙәренә йәш эркелгән ата-әсәгә тоттороп ҡайтарыу Маргарита өсөн дә, үлем тырнағынан ҡотолған балалар өсөн дә ҡыуаныс. Маргаританы ҡосаҡлап, әсәләр күҙ йәштәрен түгә-түгә уны үҙҙәренә ҡунаҡҡа саҡырҙы, ә бәғзеләре рәхмәттәр уҡып, сепрәккә төрөлгән ризыҡ, үҙҙәре йөрөткән һырға-балдаҡтарын ҡалдырып китергә тырышты. Ләкин Маргарита бүләктәрҙән ҡырҡа баш тартты. Йәйгә баласаға араһында тапма көсәйеп китте. Был юлы Маргарита, ауыл активын эйәртеп, өй һайын тәҙрә шаҡып йөрөмәне.

Маргаританың тырышлығы менән халыҡ араһында таралып өлгөргән яңы медпункттың абруйы Обручевка ғына түгел, тирә-яҡ ауыл сирхауҙарын да үҙенә тартты. Дауахананың ишеге бер ҡасан да ябылманы.

Маргарита арҡаһында Андрей Ивановичтың өйөн халыҡ хәҙер төндә лә маҙаһыҙлай башланылар. Йә берәй ауырлы ҡатындың ете төн уртаһында тулғағы тотҡан, йә кемгәлер эсе тәҡәт бирмәй, кемдер, аттан йығылып, яурынын имгәткән һәм башҡа шуның ише бәлә-ҡаза көн дә табылып торҙо. Маргарита килгән кешеләргә «Мин доктор түгел бит, тик фельдшер ғына, волость больницаһына алып китегеҙ» тип ялбарып та ҡарай. Ләкин бушҡа ғына.

Андрей Иванович ҡарап-ҡарап торҙо ла был мәшәҡәттән үҙенсә ҡотолорға уйланы. Анастасия Петровна аша түбәндәгеләрҙе әйттерҙе: «Был ике Совет ҡойроғон, үҙ иркем менән өйөмә индереп, бөтөнләй күңел тыныслығым бөттө, тормош болаға әйләнде. Абдрахманы көнө-төнө Совет, ячейка, тип саба, бисәһе лә ауыл араһынан ҡайтып килмәй. Әйҙә Абдрахманы шинелен алһын да Степан Дедуля бүлмәһенә, ә бисәһе үҙенең родхатаһына китһен».

Анастасия Петровна, билдәле, ҡартының был әмерен йәштәргә һүҙмә-һүҙ тапшыра алманы. Ситләтеп кенә «икебеҙҙең бик эштәр мәшәҡәтлегә әйләнде, Андрей Иванович та төндәрен бик этләнеп сыға» тип кенә әйтеп алды. Тормош ғилләһен йәштәр аңлай ине, әлбиттә.

— Ярар, Анастасия Петровна, хәҙер ни ҡыш мәле түгел, ҡайҙа ла ятып төн сығырға була. Беҙ таҡта өйҙә лә ваҡытлыса торорға риза.

Абдрахман асыҡ ишеге үҙенә саҡырғандай елгә шығырлап торған таҡта өйгә күрһәтте...

## 8

Июль баштарында түңәрәкләнеп, йөрөштәре ауырая башлаған Маргаританың йөрәге аҫтында тере йән эйәһе ҡуҙғалып ҡуйҙы. Ҡер йыуып торған Маргарита башта күҙ алдары ҡараңғыланып, ҡурҡыуынан иҙәнгә ултыра төштө, сихри хәрәкәттең тағы ҡабатланыуын көттө, ләкин ҡарындағы йән эйәһе ялындырған һымаҡ оҙаҡҡа туҡтап ҡалды. Маргарита был турала тыны бөтөп хужабикәгә, ә унан иренә һөйләне.

Анастасия Петровна:

— Хәҙер, әйткәнеңсә, дүрт ай бит инде, уның һиңә үҙенең барлығы хаҡында хәбәр бирергә ваҡыты еткән, — тине.

Абдрахман яңылыҡтан көлдө, ләкин көлөүендә ғорурлыҡ һиҙелде.

## 9

Быйыл иген-бесән емерелеп үҫте. Андрей Ивановичтың сиҙәмгә сәселгән тарыһы ла, туңға һөрөп сәскән бойҙайы ла дисәтинәһенә туҡһанышар боттан артыҡ уңыш бирҙе. Ҡыҙыл буйы башҡорттарының да уңыштары ярайһы ғына булғас, быйыл уларҙың ярҙамына иҫәп тотоп булманы. Тик иген сәсергә хәле булмаған бер нисә ғаилә генә казактар яғына килеп, ураҡҡа ялланды. Йот йылында асығып үлер хәлгә еткән был йонсоу кешеләрҙе башта ашатып-эсереп, әҙәм рәтенә кертеп алырға кәрәк ине. Шундайҙарҙың береһе Андрей Ивановичҡа ла килеп юлыҡты. Уның менән хужа йүнләп һөйләшеп тә торманы.

— Ана, ауылдашыңа бар, — тип кенә ебәрҙе.

(Ҡыҙыл буйынан, тау яғынан килгән бөтә башҡорттар Андрей Иванович өсөн — «Абдрахмандың ауылдаштары».) Башта өс-дүрт көн ял биреп, ул кешенең тамағын туйҙырып аяҡҡа баҫтырғас, Абдрахман уны бала-сағалары менән ураҡҡа ҡушты.

— Был яҡтарҙа ураҡҡа килгән башҡорт кешеләре хаҡында бик насар дан йөрөй. Ҡара уны, исем һатмай, тырышып эшлә! Хаҡын йәлләп тормам, — тип киҫәтте.

Ишкә ҡуш тигәндәй, был кешенең ярҙамы бик ваҡытлы булды. Лобогрейка саба алмаған ерҙәрҙе, баҫыу боролоштарында ҡалған игендәрҙе, саң туҙҙырып көнө-төнө һуҡты. Абдрахман лобогрейкала үҙе йөрөнө, ә Анастасия Петровна, бөтә эшен ташлап, лобогрейка алдында ултырып, ат ҡыуҙы. Маргарита аш бешерә... Урған, һуҡҡан ашлыҡ

кемдеке генә булыуына ҡарамаҫтан, бөтә кеше лә ниндәйҙер эске рух күтәренкелеге, эш ҡомарлығы тойҙо. Бөтә әҙәм быйыл тормоштоң ҡырҡа яҡшырыуына, икмәктең мул булырына иҫәп тотто. Урып-йыйыу яртылағас, Серкоһын ике тәгәрмәсле арбаға егеп, ырҙын табағына килеп туҡтаған хужа иген һуҡҡысы барабанында көлтәнең бауын ҡырҡып торған Абдрахман эргәһенә килде.

— Андрей Иванович, быйыл иген бик төшөмлө. Бойҙайы ла арпа-һолоһо ла бик туҡ. Һалырға буралар етмәҫ, — тине.

Хужа бер аҙ уйланып торҙо ла мыҫҡыл ҡатыш йылмайыу менән:

— Уның ҡарауы дәүләт буралары буш. Әйҙә, һуғыуынды, оҙатыуыңды бел, — тип ҡуйҙы.

— Юҡ, ысынлап та. Бына бөгөн ауылға биш-алты йөк ташыһаҡ, иген һалырға урын бөтә.

— Нишләйбеҙ һуң?

— Иҫке игенде аҙыҡ һалымы хисабына дәүләткә тапшырырға кәрәк.

— Кәрәк икән, тапшыр!

Шулай итеп, Андрей Иванович ялсыһы менән бөтөнләй сит кеше кеүек һөйләште.

Абдрахман оҙаҡ уйлап тормай, дәүләткә быйыл налог һалымы иҫәбенә биш йөҙ бот иген ташып, беренселәр рәтендә Андрей Ивановичтың бурысын ҡаплап ҡуйҙы. Бура ҡоймаларын урамға сығарып, ике-өс көн киптерҙе лә быйылғы игенде тултырта башланы.

## 10

«Ҡалғандарын һуңынан уйларһың» тип ҡайтарған Совет председателе Андрей Ивановичтың уйлағанын көттөкөттө лә, ауылда ураҡ эштәре бер төрлө еңеләйә башлағас, Верхнеуральск өйәҙе Ҡыҙыл волосы аша ГПУ вәкиле саҡыртып, уның өйөнә тентеү ойошторҙо. Төндә, тап әҙәм йоҡоһоноң татлы сағында, ҡапҡа шаҡынылар.

Андрей Иванович яурынына бекешаһын һалып, «Бынауындай күҙгә төртһәң күренмәҫ төндә ҡайһы эте кеше бимазалап йөрөй тип мығырлай-мығырлай, бәләкәй ҡапҡаһынан:

— Кем һеҙ? Нишләп ваҡытһыҙ бимазалап йөрөйһөгөҙ? — тип ауыҙын ғына асҡайны, ят кешеләр «Тауышланма!» тигәнде аңлатып, «тс-с-с!» тип ҡуйҙы.

Андрей Ивановичтың һуңғы ваҡытта көн дә тигәндәй араҡы эсеп әлһерәгән йөрәге өҙөлөп төшкәндәй булды.

— Был — беҙ! Әйҙә, тиҙерәк өйөңә алып ин! — тине ҡыптыр-тужурка кейгән берәүһе хужаға. Бер-бер артлы дүрт ир кешенең төндә баҫып өйгә килеп инеүҙәренән Анастасия Петровна менән Маргарита ҡурҡып уяндылар ҙа нишләргә белмәй йоҡо бүлмәһенең стенаһына һырылдылар.

— Шәм тоҡандырығыҙ! — Теге кеше яңы әмер бирҙе.

Шәм яҡтылар, вәкил хужаға бәләкәй генә бер ҡатырға тышлы документ һуҙҙы. Хужа ҡалтыранған ҡулы менән документты маңлайына яҡын килтереп уҡырға уҡталғайны, ләкин күҙ алдында гүйә хәрефтәр дерелдәп һелкенде.

Ситтәрәк торған Совет председателе:

— Андрей Иванович! Буш менән ваҡыт уҙғарма! Был иптәш өйәҙ ГРПУ-һынан Склярский иптәш, ә быларын беләһең: ауылдаштар, йәғни, понятыйҙар, — тине.

— Йә, былайтып төн баҫып килеүегеҙгә мин ни өсөн бурыслы?

— Беҙ һеҙҙең өйгә тентеү һалабыҙ.

— Тентеү эшләргә прокурор ордеры бармы?

— Бар, бар! Рәхим итегеҙ! — Склярский кеҫәһенән икенсе ҡағыҙ сығарҙы.

Хужа уныһын да уҡый алманы. Ул ҡағыҙ ҡараған арала ГПУ вәкиле үҙенең төпкә төшкән көҙән күҙҙәре менән өй эсен үрле-түбәнле ҡарап алды, Абдрахмандың ҡайҙалығын һорашты.

— Ул хәҙер ырҙында эшләй. Ҡайһы саҡ ҡайтмай шунда ҡунып ҡала, — тип аңлатты хужабикә.

— Йә, ниҙән башлайбыҙ? Донъяғыҙҙы аҡтарып аҫтын-өҫкә килтереүҙең хәжәте бармы? Әллә үҙегеҙ генә йәшергән нәмәләрегеҙҙе һөйрәп сығараһығыҙмы?

— Һеҙҙе нимә ҡыҙыҡһындыра һуң?

— Һин йәшереп һаҡлаған ҡорал! Иң башта — патрондары менән «Максим».

Өй эсен шомло тынлыҡ баҫты. Берәү ҙә һүҙ башларға баҙнат итмәне. Бөтә кеше үҙ ҡарашын, ике ҡулын ҡорһағына ҡуйып, ҡарамаҡҡа ғәмһеҙ кеүек торған хужаға төбәне. Хужа яндырылған бишле шәм тотоп, соландағы баҫҡыстан төнгө кешеләрҙе солан менән ҡуша ябылған ҡыйыҡ аҫтына алып менде. Шәмен ағас ботағына элеп, өйөлөп ятҡан алам-һаламды алып ташланы ла уның аҫтында ултырған тимер менән көпләнгән ике тоҡалы йәшникте һөйрәп сығарҙы.

— О-о! Йәшереүен бик ныҡ йәшергәнһең, эт тә табырлыҡ түгел! Давай, ас һандығыңды! — тине Склярский.

Хужа ут яҡтыһында уҫал күҙҙәрен йылтыртып, уны ҡулсаға әйләндереп торған кешеләргә ҡараны.

— Былай булғас, баш барыбер китте. Ултырған урыны бик ышаныслы ине лә ул, тик бына мәнфәғәтен күрергә насип булманы.

— Эйе шул! Көткән ышанысың елгә осто. Хәҙер инде иркенләп ятып уйларға ваҡытың була... — ГПУ сотрудниғы икеле-микеле һөйләнеп ҡуйҙы.

Степан Степанович уның ҡолағына килеп ниҙер шыбырланы, тегеһе, ризалығын белдереп, башын һелкте. Пүнәтәйҙәрҙең береһен, ат мендереп, Абдрахман артынан ебәрҙеләр. Ярты сәғәттән һуң, өҫтөндәге ырҙын туҙанын ҡаға-ҡаға ул өйгә килеп ингәндә, өҫтәл тирәләй ултырған теге кешеләр протокол төҙөй ине. Был хәлгә аптырап ҡалған Абдрахман менән Совет председателе ҡул биреп күреште лә:

— Ғәфү ит, Абдрахман, һинең килеүеңде көтөп тора алманыҡ, сөнки ваҡыты шулай, — тине.

— Бер ниндәй ҙә зыян юҡ. Минең бында булыу бөтөнләй мотлаҡ түгел.

— Хужаңды хәҙер ареҫҡа алабыҙ!

Ошо һүҙҙе ишеткәс тә ҡуҙғалырға ла ҡурҡып бер урында ҡатып торған Анастасия Петровна:

— Минең ҡәҙерлем! Мине туйындырыусым! Кемдәр ҡулына ғына ҡалдырып китәһең мине! Һинһеҙ миңә был донъяның бер ниндәй ҙә ҡыҙығы юҡ бит! — тип иҙәнгә йөгөнкөләп ултырҙы, ике ҡулы менән битен ҡаплап, һығыла-һығыла иларға кереште. Маргарита ла ҡушылды.

Өҫтәл ҡырында стенаға һөйәлеп торған хужа:

— Туҡтағыҙ! Олошмағыҙ! Миңә нишләп көн элгәре приговор сығарып тораһығыҙ, — тип ҡысҡырҙы.

Әҙерәк ҡатын-ҡыҙҙарҙың тауышы тына төшкәс, Совет председателе Абдрахманға ҡарап:

— Хужаңды хәҙер үк ҡулға алабыҙ. Уның һиңә хужалығы буйынса, бәлки, ҡайһы бер әмерҙәре булыр тип һаҡырҙыҡ, — тине.

— Әмер, имеш?! Хәҙер әмер биреүселәр — һеҙ, ә беҙ уны тыңлаусылар ғына, — хужа, ауыҙын салышайтып, ишеккә ҡарап ҡуйҙы.

Протоколды төҙөп бөткәс, ҡул ҡуйҙылар ҙа Андрей Ивановичҡа йыйынырға ҡуштылар. Ғауға, сыр-сыу ҡупты. Анастасия Петровна ҡайҙандыр һандыҡ төбөнән иренең тышлы тунын, папаxаһын һөйрәп сығара башлағайны, Склярский:

— Ҡышҡы кейем кәрәкмәҫ. Өҫтөндәге бекешаһы яраған, — тине.

Хужабикә күн итек кенә ҡалдырҙы ла ҡалған әйберҙәрен яңынан йыйып ҡуйҙы.

Анастасия Петровна, еүеш күҙҙәрен һөртөп, ашарға нәмә һалырға мөмкинеген һораны ла мейес башынан бер моҡсай сохари алып өштө.

— О-о!.. Хужа бик уңған кеше булып сыҡты. Бөтәһен дә алдан әҙерләп ҡуйған, — тип, Склярский мәкерле йылмайып ҡуйҙы.

Андрей Иванович аҡланырға тырышҡан һымаҡ:

— Ул, иптәш начальник, быуындан быуынға ҡала килгән ғәҙәт: теләгән ваҡытта казак, ярты сәғәттә үҙенең бөтә аммунициянын алып, ат өҫтөндә булырға тейеш, — тине.

Кәрәк-ярағын иҙә уртаһына өйөп һалғас, Андрей Иванович мөйөштәге икона алдында теҙләнеп ултырҙы ла:

— Йә, алла! Бәлә-казаларыңдан арала, бөтә хәүефтәрҙән ярлыҡа, дошмандарҙан ҡурсала, — тип мөкиббән суҡынып алды. Шунан, баҫып, Абдрахманға әйләнде. — Һин — аҡыллы кеше Выжданың нисек ҡуша, хужалыҡты шул рәүешле алып китерһең. Миндә хәҙер, үҙең күреп тораһың, мал ҡайғыһы юҡ. Тик бер генә үтенесем бар: Анастасия Петровнаны үҙ мәрхәмәтеңдән ташлама, ул ғүмер баҡый ир ҡанаты аҫтында ел-ямғырһыҙ йәшәне. Һаҡла уны!

Анастасия Петровна бәләкәй генә икона килтерҙе, иренең битенә тейҙереп тигәндәй өс тапҡыр суҡындырғас, уның муйынына аҫылынып, юлаҡланып йәш аҡҡан битен тероп, өс тапҡыр үпте.

Андрей Иванович Абдрахман менән ҡул биреп күреште лә, Маргаританың маңлайынан үбеп:

— Бәхетле әсә булыуыңды теләйем, — тип арҡаһынан һөйҙө.

Өйөнөң эсен тағы бер тапҡыр байҡап:

— Ярай, алла беҙең менән! — тип ишек аша атланы ҡарт.

Төн уртаһы ауып, сентябрь көнө һарғайып таң атҡанда, Советтан килгән ылау билдәһеҙ юлға ҡуҙғалды. Арбала дилбегә тотҡан кешенән башҡа төн ҡараңғылығында йәнәш ултырған ике һын төҫмөрләнде — улары Андрей Иванович менән Склярский ине.

## 11

Ире киткәс тә Анастасия Петровна телдән яҙған кеүек булды. Ҡайғыһынан өҫтөнә ҡара күлдәк кейҙе лә уны бер ҡасан да һалманы. Уның «Ирем киткәс, Абдрахман һаualанып, өйҙә үҙен бергә-бер хужа тойоп, ҡысҡырына-еке-

ренә башлар инде» тип ҡурҡыуы бушҡа булып сыҡты. Ул бер нисек тә үҙгәрмәне, элекке кеүек үк, теш араһынан кәрәген генә һөйләп, көнө-төнө башы эштән сыҡмаған ир булып ҡалды. Хужабикәнең Абдрахманға ихтирамы бермә-бер артты. Ҡайһы саҡтарҙа уның көн буйы бил яҙмай сабаулағанын күреп:

— Ҡуй, ҡуй, Абдрахман! Әҙерәк ял итеп алыр инең. Рустың, исмаһам, йәкшәмбеһе бар. Ул ниндәй халыҡ һеҙ? Ал юҡ, ял юҡ! Бөгөн бер ҡайҙа ла йөрөмә, — тип, аҙнаһына бер тапҡыр мунса яғып төшөрҙө.

Мунсанан һуң оҙаҡ сабыныуҙан хәле бөтөп ауған Абдрахманға хужабикә элекке Андрей Ивановичҡа булған һый-хөрмәтте әҙерләй. Хатта шул уҡ араҡылы графин, вензеллы рюмкалар теҙҙе, ләкин уға тотоноусы булманы. Анастасия Петровна уфтана-уфтана ла уларын кире шкафҡа йыйып ҡуя.

Нисек кенә булмаһын, иренең юҡлығына ныҡ ҡайғырҙы ул. Иртәле-кисле икона алдына баҫып, алланан уға именлек, сәләмәтлек һораны, тиҙерәк кире ҡайтарып ебәреүҙәрен үтенде. Ҡистәрен оҙаҡ ҡына кәрт һалды, ләкин ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла һуҙылып ятҡан юл түгел, гел генә «казенный» йорт төштө.

Бер ваҡыт Верхнеуральскиға барырға ла йыйынып бөткәйне, Абдрахман арҡыры төштө.

— Уның ҡайҙа икәнен белмәйенсә, юлға сыҡмау хәйерле. Сабыр ит, бәлки, хаты ла килер әле.

Андрей Иванович, сөмбәйгә ташланған баҡыр аҡса һымаҡ, ғәйеп булды. Киткәндән алып хаты-хәбәре килмәне. Анастасия Петровна күрше Ҡарабулаҡ, Богдановка хуторҙарынан шул төндә алынған бер нисә кешенең ғаиләһенә барып белешеп ҡайтты, ләкин уларҙың яҙмышы ла билдәһеҙ ине. Тора-бара ул Андрей Ивановичтың үҙен дә, яҙмышын да хоҙай ҡулына тапшырҙы.

Хужа киткәс, уның ҡустыһының ошо хужалыҡта эшләп йөрөгән малайҙары Абдрахманға буйһонмай кәпәренеп тә ҡарағайны, хатта береһе, Ҡыҙыл станицаһына бер йөк иген тейәп китеп, он менән сауҙа ла итеп ҡайтҡайны. Һатҡан ононоң аҡсаһын ике-өс көн эсендә эсеп бөтөрҙө лә, өҙөлөп-йолҡоноп, хужабикәгә яңынан килеп баш һалды. Эше өсөн аҙаҡҡы иҫәп-хисап итеүгә договор срогы тулмағас, эшкә төшөп, бабаһы хужалығында яңынан эшләргә мәжбүр булды.

Нисә әйләндерһәң дә шул! Абдрахманды һәм башҡа уның кеүек батрактарҙы кулак хужалығы үҙ ҡуласаһына ныҡ бәйләгәйне, ә үҙ аллы тормош көтә башларға иң кәмендә егеүле ат, бер һауын һыйыр кәрәк, ятып инер өй-

ҙөң булыуы мотлаҡ. Шуға күрә ваҡыт-ваҡыт Абдрахман башында ла килеп тыуған шундай дыуамал уйҙар, тәмле хыялдан ары китә алмай, һүнә барҙы. Нишләмәк кәрәк? Баш ороп, таш ярып булмай. Төрлөсә уйлап, һәр яҡлап үлсәп ҡарай ҙа, рәт сыҡмаҫтай булғас, үҙенең ошо хәле менән килешмәй әмәле юҡ. Ул үҙ асыуының бөтә ҡоһорон эшкә төшөрә. Он менән сауҙа итеүҙе күптән ташлаһалар ҙа, байҙың мөлкәте күҙгә күренеп артты. Ҡышҡыға эҫкерт-эҫкерт бесән ташып ҡуйылды, иген менән тулған буралар-ҙан тыш хужалыҡтың бөтә тишек-тошоғо тулды. Тотоноу-сы, һатыусы кеше булмағас, малдар ҙа ишәйҙе. Әгәр Андрей Ивановичтың мөлкәте йыл һайын ошо юҫыҡта арта башлаһа, ни эшләмәк кәрәк? Өс кешенең ашап-эсеүе ни ҙә, сығымы ни? Ләкин ул тиклем тиҙ үрсеп барған малдың бөтәһен дә ҡышлатыуҙың мөмкин түгеллеген хужабикә лә, Абдрахман да яҡшы аңлай. Әммә мал, мөлкәтте самалы ғына ҡалдырырға тип торғанда, ошо көндәрҙә икенсе бер хәл килеп тыуҙы ла былар тағы икеләнде, уйға ҡалды.

## 12

Ҡыр эштәрен тәҡрарлап, Абдрахман Советҡа инеп сығырға уйланы. Совет йортонда Андрей Ивановичтың бергә ашап-эскән әшнәләре, ауылда хәллеләрҙән хисапланған бер нисә казак ултыра ине. Степан Степанович, Абдрахман килеп ингәс тә, баҫып, ярым шаярыу менән:

— Таныш булығыҙ! Андрей Иванович урынына ҡалған ялсы ла, кулак та Абдрахман үҙе була, — тип көлөп алды, тура өҫтәлгә йүнәлгән Абдрахмандың ҡулын ҡыҫты.— Ултыр яңылыҡтар бар.

Абдрахмандың «Әллә был Андрей Иванович хаҡында берәй хәбәр белә микән?» тип йөрәге жыулап китте.

Ләкин Степан Степанович та хөкөм аҫтында ултырған ауылдаштары хаҡында бер ни ҙә белмәй ине. Абдрахман ултырғысҡа ултырҙы. Председатель кабинетында ҡыҙыл материалға элекке «Продразвестканан — продналогҡа» тигән лозунг урынына «Советтарға берләштерелгән халыҡ — бына кемдәр дәүләт менән етәкселек итергә тейеш!» тип Ленин һүҙе яҙылған яңы лозунг элгәндәр. Уның мәғәнәһен төплө генә аңлап еткермәһә лә, «Совет власының хужаһы ҡорһаҡтарын киреп ҡыҙара бүртеп ултырған Обручевка кулактары түгел, ә бына беҙ булырға тейеш» тигәнде бөтә күңеле менән һиҙҙе. Ул ошо кешеләр араһында үҙен хужа итеп тойҙо. Совет председателенең йылы ҡарашын аңлап, үҙен власть вәкиле менән иркенерәк тотто.

Степан Степанович килгән кешеләрҙе тағы бер ҡарап сыҡты ла, ҡулына «Бөтә Рәсәй Үҙәк Башҡарма Комитетының Известия» газетаһын тотоп, тамағын ҡырып алды, ултырған көйөнсә генә һүҙгә кереште:

— Бына ошо газетала хөкүмәттең яңы баҫылған ҡарарын алдыҡ, — тип газетаны һелкеп ҡуйҙы.

— Йә, йә, ул ниндәй ҡарар? Беҙгә бер мәнфәғәтле ҡарар булһа ярар ине.

— Бына әйтеп бөткәнде көтөгөҙ. Мәнфәғәтен аҙаҡтан күрерһегеҙ. Эш шулай тора: хөкүмәт һеҙҙең һандыҡтарығыҙ нышып тултырылған миллионлаған һум ҡағыҙ аҡса урынына червонецтар сығарҙы. Һәр червонец алтын хаҡы менән тигеҙләнде. Был сара аҡсаның ил эсендә лә, башҡа мәмләкәттәр менән сауҙа иткәндә лә ҡимммәтләнеүенә килтерәсәк.

Стена ҡырында һимеҙ ҡулдарын ҡорһаҡтарына ҡуйып ултырған биш-алты кеше был һүҙҙе ишетеү менән һағайҙы, йәнләнә төштө.

— Степан Степанович! Шуны асыҡлабыраҡ һөйләп булмаймы? Аңламайыраҡ ҡалдыҡ.

— Мин уны үҙем дә бик ныҡ аңлап еткермәйем, тик волостан ың тәүге сиратта һеҙҙе йыйып аңлатырға бойороҡ булған өсөн генә әйтәм.

— Нисек инде ул? Хәҙер тиребеҙҙе түгеп тапҡан аҡсаларыбыҙҙы ҡайҙа ҡуйырға тейешбеҙ?

— Хәҙергә бер ҡайҙа ла ҡуймайһығыҙ! Күрһәтмә көтәһегеҙ. Бына был хөкүмәт ҡарарына бөтә Рәсәй йәмһүриәтендә аҡса реформаһы, йәғни, халыҡ ҡулындағы хәҙерге аҡсаларҙы икенсе аҡсаға, червонецтарға, алмаштырыу ҡаралған. Ҡасан, ҡайҙа, нисек алмаштырыу тәртиптәрен беҙ һеҙгә аңлатырбыҙ. Быныһы — беренсе.

— Нимә? Әллә икенсеһе лә бармы?

— Бар, бар! Сабыр итегеҙ! Уныһы бигерәк тә мөһимерәк.

— Йә, йә! Тыңлап ҡарайыҡ әле! — тип араларынан ҡартырағы, председатель яғына башын ҡыйшайтып, ҡолағына усын терәне.

Председатель үҙ урынында уңайлабыраҡ ултырып алды.

— Быйылғы йылда бөтә Рәсәй йөмһүриәтендә аҙыҡ налогы йәғни натуралата налог, аҡса налогы менән алмаштырыла.

— Бына һиңә кәрәк булһа? Ниңә хәҙер Совет власына икмәк, ит, башҡа продукт хәжәт түгел микән ни?

— Билдәле — кәрәк! Ләкин хәҙер аҡса кәрәгерәк! Бөгөнгө көндә Совет власы илдәге емерек заводтарҙы, фаб-

рикаларҙы аяҡҡа баҫтырырға ҡарар итте. Ә быының өсөн аҡса кәрәк. Ни өсөн кәрәк? — Степан Степанович үҙ һорауына үҙе яуап бирергә тырышты. — Сит ил мәмләкәттәренән машиналар, станоктар, әле илдә етешмәгән металл һатып алыу өсөн кәрәк. Ә ул аҡсаны ҡайҙан алырға мөмкин? Бына һинән, минән, барыбыҙҙан да аҡсалата йыйылған налог рәүешендә туплларға мөмкин. Сөнки капиталистик мәмләкәттәр, барыһы ла тигәндәй, беҙгә аҡсалата заем биреүҙән баш тарттылар.

— Ну, малай, әйтһәнә! Ленин тирәһендә лә тин һанай белә торған аҡыллы баштар бар икән, әй!

— Ә һин нисек уйлағайның! Николай заманында бөтә батшалыҡ аҡсаһын хисаплап ултырған кешеләр ҡайҙа булған тип уйлайһың? Батша аҡсаһымы, Совет аҡсаһымы уларға барыбер, тик һанарға ғына булһын. Жалунья түләһәләр, улар теге донъяла ла аҡса һанап ултырырҙар.

— Бына һиңә! Хәҙер беҙгә нишләргә инде? Хөкүмәт беҙҙе нисек теләй, шулай бөгә башланы түгелме?! Әйтсәле! Бөтә Рәсәй ас сағында хөкүмәт халыҡтан иген йыйҙы, ә хәҙер, халҡының тамағы туя башлағайны, бына һиңә кәрәк булһа, тотто ла налогты аҡсалата талап итә башланы.

— Ни тип тә әйтеп булмай. Нишләп ҡарарға?

Ҡайһы бер донъя күргәнерәктәре тағы ла төплөрәк, тәрәнерәк фекер йөрөттө.

— Бына хәҙер малыңды тотоноп, сәсеү майҙанын шыпа ҡыҫҡартып ҡуйыр инең — шул игендән, малдан килгән доходтан башҡа беҙ аҡсаны ҡайҙан табабыҙ?

— Һуң, хужалығыңды ҡыҫҡартып быйыл һиңә төшкән аҡсалата налогты нисек түләмәксеһең?

— Степан Степанович! Икенсе йыл налогының двор башына күләме билдәле түгелме әле?

— Хәҙергә юҡ. Ләкин көнмө-көн көтөп торабыҙ.

— Ҡара, ҡара, хөкүмәттең шуны килтереп сығарыуын!

— Элек игенләтә төшкән налогты түләйем тип сәсеүлек майҙанын бер аршынға ла кәметеп булмай торғайны, ә киләһе йыл аҡсалата төшкән налогты түләйем тип, шул уҡ майҙанда иген сәсергә, шул уҡ һанда мал көтөргә тура киләсәк. Бына һиңә кәрәк булһа — бикләнгән мал һымаҡ, ул яҡҡа барырға ла, был яҡҡа китергә лә рәт юҡ.

— Хәҙер һиңә, Иван, элеккегә ҡарағанда күберәк иген сәсергә, артығыраҡ мал көтөргә тура килер. Ни өсөн тиһеңме? Сөнки быйылғы үкереп үҫкән иген-бесәндән һуң һин игененде, малыңды задарма бирәсәкһең. Элек һин игенеңдең ҡаҙағын мең тәңкәгә һатһаң, хәҙер биш-ун тингә үҙең көсләп бирәсәкһең. Күр ҙә тор!

— Бына кисә генә Ҡыҙыл баҙарынан ҡайтты минең күрше. Гәрәбә һымаҡ Кубань бойҙайының ботона ике тәңкә һорап торалар, ти.

— Уның ошолай килеп сығыуын хөкүмәт, алдан белеп, шулай эшләй ҙә инде.

— Хөкүмәтте алдап булмай. Ул үҙенең алырын барыбер ала инде.

— Әле бөтмәне, тағы бер мәсьәлә бар әле. Совет власы бына яңы ғына Бөтә Рәсәй Үҙәк ауыл хужалығы банкыһы асты. Ул ярлы крәҫтиәндәргә осһоҙ кредит таратыу буйынса эшләй, — тине председатель.

— Уныһы беҙгә ҡағылмай, һи, ярлы крәҫтиән, ярлыябаға тип, ауыҙығыҙҙың һыуы ҡороно инде.

— Хәҙер беҙҙең Совет власына кәрәгебеҙ бөттө! Әйҙәгеҙ! Председатель хәҙер ярлыларҙы йыйһын!

— Юҡ әле, һеҙҙең кәрәгегеҙ бөтмәгән! Ҡайтып, хужалығығыҙҙы пыран-заран туҙҙырып ташламағыҙ!

— Кәңәшең, илтифатың өсөн ҙур рәхмәт инде, председатель иптәш!

Барыһы ла урындарынан тороп ишеккә йүнәлде. Председатель, Абдрахмандың еңенән тартып, ҡалырға ишара яһаны.

— Йә, Абдрахман дуҫ! Ишетеп ултырҙың бит инде, хәҙер ни эшләмәксеһең!

— Ҡайтам да байбисәгә доложить итәм, теләһә нишләһен. Минең бында ни ҡыҫылыш?

— Уныһы шулай ҙа ул. Ләкин һин хәҙергә уның малтыуарын таратмайыраҡ тор әле. Унан, үҙе ҡайтып килмәһә, Анастасияның бер үҙенә ни кәрәк, бәлки, бөтә малын, байлығын станицала асылған балалар йортона һатып бирербеҙ!

— Ярай, хәҙергә хуш!

— Хуш!

Абдрахман ишетелгәндәр тураһында юлда төрлөсә уйлап, һуң ғына ҡайтып инде. Өйҙәге ике ҡатын уны һораулы ҡараш менән ҡаршы алды.

— Нишләп оҙаҡланың?

— Йомош булды. Кәңәшкә саҡырғандар.

— Ул ниндәй кәңәш?

— Бик етди...

Ҡыҫма билле кәзәкей эсенән таҡҡан алъяпҡысына ҡулын һөртә-һөртә, хужабикә Абдрахманға тилмереп ҡарап, ниндәйҙер бер мөһим хәбәр көткәндәй күренде.

— Әйҙә, Анастасия Петровна, ултыр әле, бер аҙ һүҙ бар, — тип ҡурҡынған хужабикәне ул өҫтәл артына ултыртты.

— Андрей Ивановичтың бер ниндәй ҙә хәбәр-хәтере юҡ, — тигәс, хужабикә Абдрахмандың әйтәһе һүҙенә бер ниндәй ҙә ҡыҙыҡһыныу тойғоһо белдермәне.

Киреһенсә, Абдрахман Советта ишетеп ҡайтҡан һүҙҙе уға үҙенсә аңлатырға тырышыуына ҡолаҡ һалманы тиерлек. Абдрахмандың һөйләгән хәбәре ҡайҙандыр стена аша ишетелгән төçлө ине.

— Анастасия Петровна! Мин һөйләгәндәрҙән һин берәй нәмә аңланыңмы?

— Юҡ, минең ҡәҙерлем! Башыма бер ни ҙә кермәне,— тип дөрөçөн әйтергә мәжбүр булды.

— Һин хужа бит! Нишләйбеҙ?

— Ул минең эшем түгел. Андрей Иванович һиңә ҡушып китте бит, ни теләһәң, шуны эшлә, — хужабикә йоҡо бүлмәһенә ыңғайланы. Билдәле, ул икенсе хәбәр көткәйне...

Бер аҙнанан һуң Абдрахман менән Анастасия Петровна тимер һандыҡты өçтәл өçтөнә ҡуйҙылар ҙа кис буйы аҡса һананылар. Илле миллионға тиклем һананылар ҙа, тау булып өйөлөп ятҡан аҡсаның осона сыға алмай, һандыҡҡа кире тултырҙылар. Улар икенсе көнө, Ҡыҙыл станицаһына барып, волость банкыһына бер һандыҡ аҡса тапшырҙылар: бер усҡа йоморлоҡ йөҙ дана берәр тәңкәлек алтын аҡса, ике йөҙ дана берәр тәңкәлек — һәр береһе мыçҡал[1] тартҡан көмөш аҡса алып ҡайттылар. Һандыҡ тулып ултырған аҡсаны тапшырып ҡайтҡас, Абдрахман да, Анастасия Петровна ла, мунсанан һуң яңы күлдәк кейгән шикелле, еңеләйеп ҡалдылар.

Буйы тулышҡан Маргарита бер нисә көн бойоҡ ҡына йөрөнө лә, төн уртаһында өйәнәге тотҡандай, ҡаты ауырып карауатҡа ятты. Абдрахман шәм яндырып, уның маңлайына бөрсөк-бөрсөк булып сыҡҡан тирен һөрттө, ут һымаҡ янған битен һыйпаны. Ләкин Маргарита ике ҡулы менән эсен баçып, нисек кенә ауыр булмаһын, ыңғырашмаçҡа тырышты. Уның биле, эсе тәҡәт бирмәй ауыртты. Маргаританың бөгөн-иртәгә әсә булырын көткән Анастасия Петровна йәш ҡатындың бала тулғағы тотоуын белеп, тиҙ генә кейенде лә, кендек әбейенә йүгерҙе. Кендек әбей әллә ниндәй доғаларын һамаҡлап быларҙың йоҡо бүлмәһенә үткәндә, аптыранған Абдрахман бер урында ҡатып тора ине.

— Бала ҡабул иткәндә, ир кешегә ҡарап торорға ярамай, — тип әбей уны өйҙән ҡыуҙы.

---

[1] Мыçҡал — 4,25 грамға тигеҙ.

Йортҡа ҡаршы бер коридор менән тоташтырылған мал өйөнә инеп, Абдрахман түҙемһеҙлек менән «һөйөнсө» хәбәрен көттө. Йоҡлар-йоҡламаҫ, күңеле иләҫ-миләҫ булып ятты ла таң алдынан йорт эсендә яңы тыуған баланың ҡысҡырған әсе тауышын ишетте. Ул аяҡ осона ғына баҫып, ишеккә яҡынлашты. Еңен беләгенә тиклем төргән етеҙ әбей елпелдәп күрнәсәнән килеп сыҡты ла:

— Әй! Әй! Һин ҡайҙа? Һөйөнсө, улың бар! — тип ҡысҡырҙы.

Нимә әйтергә лә белмәй аптырап ҡалған Абдрахмандың ҡулын тотоп, кендек әбейе:

— Бына ошондай бүкән һымаҡ малайың бар! — тип, ике ҡулын һуҙып күрһәтте.

— Рәхмәт инде, инәкәй! Бындай ҙур шатлыҡты бергә уртаҡлашмай булмаҫ, хеҙмәтегеҙ әжәрһеҙ ҡалмаҫ.

Әбей, әйҙәләп, Абдрахманды өйгә һөйрәне. Ун ниндәйҙер эске тулҡынланыу менән Маргарита ятҡан бүлмәгә инде лә хәлһеҙ йылмайып ятҡан ҡатынының ағарған битен һыйпаны.

Үҙенең хеҙмәтенән кинәнеп, ситтәрәк торған кендексе, Абдрахмандың киң арҡаһынан этеп, Маргаритаға яҡын килтереп терәне лә:

— Йә, урман айыуы, бисәңде матур итеп христиандарса өс тапҡыр үбеп ал инде, — тип бойорҙо.

Аптырауға ҡалған ата кеше, килбәтһеҙ әйелеп, үҙенең ярылған ирендәрен яңы ғына әсә бәхетенә юлыҡҡан бисәһенең эҫе бөркөп торған битенә терәп алды. Ошо көндән башлап Абдрахманда, уның эске донъяһында ниндәйҙер үҙгәреш, ошоға тиклем һиҙелмәгән ҙур тойғо, ата ғорурлығы, ата хисе яралды, ул ҡатынына мөхәббәтенең тағы ла эҫеләнеүен, мөнәсәбәтенең тағы ла наҙланыуын тойҙо. Ике-өс аҙна үтеүгә, күрәһең, Анастасия Петровна менән кәңәшләшептер инде, малайын имеҙеп ултырған Маргарита иренә мөләйем ҡараны.

— Сабыйға исем ҡушайыҡ. Ошондай карапузик, атаәсәһе була тороп, нишләп исемһеҙ ятырға тейеш.

— Әйҙә, әйҙә. Риточка. Мин ҡаршы түгел.

— Киләһе йәкшәмбелә сиркәүгә алып барып, суҡындырып, законлаштырып ҡайтайыҡ.

Был хәбәрҙе ҡолағын ҡарпайтып, мәгәр ишетмәмешкә һалышып ултырған хужабикә:

— Эйе шул! Шулай булмай ни? Исем ҡушыу мотлаҡ кәрәк, — тип һүҙгә ҡушылды.

Әҙерәк һағая төшкән Абдрахман:

— Балаға исемде кем тип ҡушабыҙ? — тип һораны.

— Бына Владимир, йәғни, владей миром, донъяны яу-

лап ал тигән исем нимәгә ярамаған. Ысын христиан исеме. — Хужабикә Маргаритаға һораулы ҡараш атты.

— Шулай шул. Бик тә килешле, матур исем.

— Беренсенән, сиркәүгә ике аяғығыҙҙың береһен баҫыу юҡ. Икенсенән, мин улыма герман һуғышында үлеп ҡалған бер туған ағайҙың Вахит тигән исемен ҡушам.

— Вахит... Вах-ит, — тип ике ҡатын бер нисә тапҡыр иреңдәрен ҡыбырлатып алдылар ҙа бер-береһенә ҡараштылар.

Күрәһең, Абдрахман әйткән исем улар күңеленә хуш килмәне.

— Ярай, улай булғас, һеҙ Владимир, ә мин Вахит тип кенә йөрөтөрмөн, ҙурайып, аҡыллана төшкәс, ҡайһыһы оҡшаһа, шуны үҙе һайлар. Шулай буламы?

Абдрахман йылмайып ҡатындарға ҡараны.

— Мин ни? Барыбер, тик хоҙай һаулығын, аҡылын, фиғелен бирһен!

## 13

Бәпәй хәсрәте менән һәүетемсә генә йәшәп ятҡанда, йәнә бер ваҡиға был өйҙөң аҫтын-өҫкә әйләндерҙе. Ғинуар аҙаҡтарында, саҫҡау бер һыуыҡ төндә, урамға ҡараған ике тәҙрәнең береһенә ҡаты шаҡыныLAR. Былай ҙа төндәрен, бигерәк тә сабый тыуғас, йоҡоһоҙ, иләҫ-миләҫ үткәргән Анастасия Петровна һиҫкәнеп уянды. Тышҡа яңғыҙ сығырға ҡурҡып, Абдрахманды уятты.

Ҡапҡа аша бышҡырған ат эргәһендә ҡар шығырлағаны ишетелде. Кемдер тамағына һыуыҡ үтеп ҡарлыҡҡан тауыш менән:

— Белов Андрейҙың өйө ошомо? — тип һораны.

— Эйе, эйе. Ошо, — тип яуапланы Абдрахман.

— Ҡапҡағыҙҙы асығыҙ! Ҡустәнәс алығыҙ!

Әҙерәк аптырап төшкән Абдрахман, ике асмалы ҡапҡаға арҡыры һалынған типкене систе лә, төнгө юлаусыны ихатаға индерҙе. Санала бөкрәйеп ултырған, ниндәйҙер нәмә менән баштан аяҡ уралған әҙәмде ике кеше, ҡултығынан алып, бейек болдорға күтәреп тигәндәй мендерҙе лә ишек асырға бойорҙо. Алдан юл башлап килгән Абдрахман, шәм филтәһен нығыраҡ сығарып, соланды яҡтыртты. Ҡолаҡсынын төшөрөп эйәк аҫтынан бәйләгән, битенең ярты өлөшөнә тиклем дебет шарф ураған кешене танырлыҡ түгел. Икеһе ике урында баҫҡан ҡатын ишектән, быуланып тәгәрәп ингән томанлы һыуыҡ аша, ят кешеләр-

гә ҡурҡыу ҡатыш ғәжәпләнеп ҡарап торҙо. Эске тойғоһо низер һиҙенгән шикелле, хужа ҡатын йөрәк өҙгөс әрнеүле тауыш менән:

— О, алла! О, алла! — тип ҡысҡырып иларға кереште.

Уртала аяҡтары иҙән буйлап һөйрәлеп килгән кешене ултырғысҡа ултыртып бите астылар. Был күҙҙәре төҫһөҙләнеп эскә батҡан ныҡ, һурығып оҙонса битен ерән һаҡал-мыйыҡ баҫҡан ослайған яурындары алға бөксәйгән Андрей Иванович түгел, шуның һөлдәгә ҡалған шәүләһе ине. Анастасия Петровна ҡапыл аҡылдан зая булған кеше һымаҡ теге кешенең аяҡ аҫтына йығылды ла, уның һөйәккә ҡалған аяҡтарын ҡосаҡлап әйтемләй-әйтемләй, быуыла-быуыла иларға тотондо.

Абдрахман Анастасия Петровнаны күтәреп тигәндәй икенсе ултырғысҡа ултыртты.

— Етте, етте, тынысланығыҙ!

Уны алып килгән кешеләр:

— Ярай, хужабикә! Беҙҙең ваҡытыбыҙ бик тар. Таң атҡансы Ҡарабулаҡҡа ҡайтып етергә кәрәк. Беҙ уның иптәштәре, — тип, сыға башланы.

Бер аҙ иҫенә килгәс, Анастасия Петровна:

— Нисек инде ул? Йоҡлағыҙ! Әҙерәк ашап-эсеп, йылынып китегеҙ! — тип үтенеп тә ҡарағайны, ләкин тегеләрҙе күндерә алманы.

— Юҡ, улай булғас, буш сыҡмағыҙ!

Хужабикә төнгө кешеләргә бер ҡалас, бер быжыр шешәле араҡы төрөп бирҙе.

— Бына рәхмәт!

Сығып китер алдынан юлсыларҙың береһе Анастасия Петровна эргәһенә яҡын килде.

— Беҙ Андрей Иванович менән бер көндө ҡулға алынғайныҡ. Верхнеуральск төрмәһендә аҙна ултырғас, Андрей Ивановичтың аҡылы бер төрлө килде-китте булып яңылыша башланы. Ҡайһы ваҡыт тик ултырған урында алъюҫыҡҡа йә ҡысҡырырға тотона, ниндәйҙер командалар бирә, йә ул кемдәрҙелер быуып үлтерергә теләй, йә йәнәһе лә уның үҙен кемдәрҙер үлтерергә йыйына. Бигерәк Николай батша менән һаташты. Йә шул батшаны үпте, йә ҡосаҡланы. Иң аҙаҡтан уны эттән алып эткә һалып һүкте.

— Ул өйҙә саҡта ла Николай батша менән бутала башлағайны инде, — тине.

— Бына шулай этләнә торғас, уны аҡылдан яҙған кешеләр йортона оҙаттылар.

— Ай, бахырҡайым! Ниндәй гонаһтарым өсөн хоҙай һине шул тиклем язаларға дусар иткәндер!

— Беҙ бына дүрт ай ултырып, ҡотолоп ҡайтып киләбеҙ, ә уны «Хәҙер аҡылы камилланды, ләкин сәләмәтлеге ҡаҡшау сәбәпле терелеүе бик шикле» тип, беҙгә ултыртып ҡайтарып ебәрҙеләр.

— Ярай, рәхмәт инде һеҙгә! Хоҙай һеҙҙе киләсәктә бәлә-ҡазаларҙан ҡурсалаһын!

— Хушығыҙ!

Өс көн урынынан тормай ятҡан Андрей Иванович дүртенсе көнөнә башын ҡалҡытты. Көн дә тигәндәй, мунса төшөрөп, мунсанан һуң яңы ғына һыҙырылған сей тирегә урап тәрбиәләй торғас, ул шөйлә карауатҡа, стенаға тотоноп, өй эсендә йөрөй башланы. Тора-бара, этеп-төртөп булһа ла, өйҙәге кешеләргә һүҙ ҡушҡыланы. Ун биш көнләп ятҡас, урттары эскә ингән битенә, һөйәктәре шыҡылдап торған тәненә ит ҡуна башланы. Үҙ хужалығы менән бер аҙ ҡыҙыҡһынып, ҡайһы бер нәмәләрҙе лә һораштырҙы. Бер көн киске аш ваҡытында уйланып ултырҙы-ултырҙы ла, мәғәнәле итеп:

— Да... Да! — тип ҡуйҙы.

Уның шулай шәбәйә башлауына сикһеҙ шат Анастасия Петровна:

— Атаһы, һин ниҙер әйтергә теләгәйнең шикелле? — тип һораны.

— Эйе, эйе. Настя! Мин ошоға тиклем йәшәп бер нәмәне белмәгәнмен: кешелек донъяһында бөтә яуызлыҡтың башы — байлыҡ. Үҙ нәфсеһенә баш була алмай байлыҡ арттырырға тырышыу — бына шул кеше генә түгел, мәмләкәттәрҙе бер-береһе менән талаштыра, һуғыштыра. Әгәр кисә үлгән булһам йәки ана шул Верхнеуральскиҙың казенный йортона барып эләкмәһәм, мин ошо дөрөҫлөктө белмәй гүргә инер булғанмын.

Бөтәһе лә аптырап уға төбәлде. Абдрахман эстән генә «Әллә был яңынан килде-китте була башланымы?» тип уға бер аҙ текләп ултырҙы. Ләкин ундай зәхмәт тойолманы. Хужаның Верхнеуральскиҙан алып ҡайтҡан яңы хәбәренең мәғәнәһенә ныҡлы ғына төшөнә алмаған бисәһе һорап ҡуйҙы.

— Ә шунан?

— Шунан ни — шул!

«Әһә, башына аҡыл инә башлаған икән. Күрәһең, үҙ тормошон яңыса башларға хәл ҡылған. Ниңә? Бер ҙә һуң түгел, хәйерле булһын!» тип уйланы Абдрахман.

* * *

Сеүлә һыуыҡтары бер аҙ һынып, көндәр яҙға тартым киткәс, аталарына ара-тирә барып-ҡайтып йөрөү Абдрахманды һис тә ҡәнәғәтләндерә алманы. Ул бөтә йәне-тәне менән ауылға тартылды. Беренсе нәүбәттә иренең һуңғы ваҡыттарҙа бойоҡ йөрөүенән ниҙер һиҙенгән бисәһе менән кәңәшләшергә булды. Уныһы киреләнде.

— Юҡ, юҡ, йомған ауыҙыңды ла асма, мин унда ни күҙем менән ҡабат барып күренәйем. Барып инер өйөң юҡ, ике ҡулыңа тотоп эшләрлек эше юҡ. Минең бында, исмаһам, бәләкәй генә булһа ла эшем, ә шуның арҡаһында ауыл кешеләре араһында абруйым бар...

— Һуң быға ниңә аптырарға? Шул уҡ эш, шул уҡ хөрмәт тегендә лә булыр. Бөтә ерҙә лә бер Совет власы ла баһа, башың ғына һау булһын.

Маргарита, стенаға әйләнеп, оҙаҡ ҡына уфтанып ятты ла яңынан һүҙ башланы:

— Һин, аҡыллым, үҙең уйлап ҡара: ярай ҙа һин атайың-әсәйең, туғандарың эргәһенә ҡайтаһың, ә мин улар өсөн кем? Бөтөнләй ят кеше, өҫтәүенә, ләм-мим тел белмәгән килмешәк.

— Ә бында һин кем?

— Бында ла шул уҡ хоҡуҡта, ләкин бында мине ситкә ҡағыусы әҙәм юҡ. Хәҙер унда мине генә түгел, берҙән-бер малайыңды ла ситләтәсәктәр, — тип, мыш-мыш килеп йоҡлап ятҡан малайының арҡаһынан һөйҙө. Нисек кенә булмаһын, Маргарита үҙенең яғымлы һүҙҙәре менән Абдрахманды күндерә аласағына ышанмай ине. «Был барыбер алдына алғанын ҡуймай, әйткән һүҙен нисек тә үтәй торған үҙ һүҙле, был юлы ла, моғайын, шулай булыр, күсенеүгә әкренләп әҙерләнә башлау хәйерлерәк булыр» тип уйланы Маргарита.

Ысынлап та, Абдрахман иртән тороп тамағын да ашамай Степан Степановичҡа йүгерҙе. Эске тулҡынланыуҙан үҙ теләген ҡаға-һуға аңлатҡанын председатель ҙур сабырлыҡ менән тыңлап ултырҙы ла, тауышын күтәрмәй генә:

— Ай-һай, Абдрахман ҡәҙерлем, бындай аҙым яһап хаталанмаҫһыңмы икән? — тип һораны. — Һин буйҙаҡ кеше түгел, ә Маргарита нисек ҡарай был мәсьәләгә?

— Ҡасандыр мин барыбер үҙ яғыма ҡайтырға тейеш бит, мин, ауылда ҡартайған ата-әсәм була тороп, бында төпләнеп ҡала алмайым, ә Маргарита... бөтөнләй ҡаршы.

Степан Степанович сабырлығын юғалтып:

— Мин дә ҡаршы, — тине. — Мин быны председатель булыуҙан тыш, партячейка секретары булараҡ та әйтәм.

Тынлыҡ бик оҙаҡҡа һуҙылды. Степан Степанович, өҫтәлгә күкрәге менән ята биреп, тәмәке төрҙө. Ике урты эскә батҡансы тәмәкеһен һурып, ауыҙынан, танау тишектәренән сыҡҡан күгелйем төтөндө өҫкә өрҙө. Һорауына яуап эҙләгәндәй, баш бармағын эскә бөгөп, остары төтөнгә өтөлөп бөткән ҡуйы ерән мыйығын ышҡыны.

— Ә Андрей Белов ни рәүешле йөрөп ҡайтҡан? Хәле нисек? — тип һорап ҡуйҙы.

Абдрахман һипкелле битенә һораулы сырай йүгертеп, икеләнеберәк йылмайҙы ла:

— Ул төрмәнән партийный булып ҡайтҡан, бөтә ғәләмде бер-береһенә дошман яһаған нәмә хосуси милек, байлып икән, уны тамырынан бөтөрөргә кәрәк, тип ултыра, — тине.

Степан Степанович әҙәпле генә кеткелдәп көлдө.

— Да. Верхнеурал төрмәһендә ултырған бар. Әгәр унда элекке надзирателдәр ҡалһа, улар теләһә кемде аңбелемгә ултыртып сығаралар, унан һуң байтаҡ ваҡыт, контуженный шикелле, баш шаулап тора. Былай аҡылыфиғеле дөрөҫмө? Башынан элекке Дутов вахмистры рухы сыҡҡанмы?

— Ҡайтҡас, бер ун биш көнләп һөйләшмәне тиерлек. Хәҙер унда-бында хәбәр һөйләй башланы, ләкин элекке вахмистрҙың тик ҡоро шәүләһе генә тороп ҡалған, өрһәң кәбәк кеүек осорға тора.

— Нисек йәшәргә итә? Ниндәй пландар ҡора?

— Киләсәккә әллә ҡайҙа барған пландары һиҙелмәй, тик бер нәмә көн кеүек асыҡ — үҙ мөлкәтенә бик ҡәһәтләнеп ҡайтҡан, уны билдәле, бөтөрәсәк.

Председатель кабинетын тағы ла тынлыҡ баҫты.

— Әҙерәк, иптәш Игебаев, һине йәмәғәт эшендә файҙаланып, сыныҡтырыбыраҡ ҡайтарырға тип уйлағайныҡ бит әле. Ҡайтыу хаҡында ҡасан да һүҙ сығарын мин, әлбиттә, көтөп йөрөй инем. Ни эшләмәк кәрәк? Бәлки, һинең фекерең дә дөрөҫтөр? Ярай, үпкәләштән булмаһын.

— Рәхмәт, Степан Степанович, — тине Абдрахман башын ҡалҡытмай ғына.

— Иптәш Игебаев, Обручевкала бер нисә йыл йәшәп, бына беҙҙең арала ҡайнашып, әҙерәк аҡты ҡаранан айырырға өйрәндең шикелле? Сәйәси аңың да ныҡ ҡына үҫкәндәй тойолдо миңә, әгәр яңылышмаһам?

Степан үҙенең күҙ ҡарашын үҙенә ҡаршы ултырған Абдрахманға йүнәлтте.

— Билдәле, Степан Степанович, бәхет юҡта бәхетһеҙлек ярҙам итте тигәндәй, ситкә ҡаҡмай үҙ итеп, үҙ күреп, яҡындан ярҙам итеүегеҙ өсөн ҙур рәхмәт инде. Үҙем-

де килгән саҡтағыға ҡарағанда бөтөнләй икенсе кеше итеп тоям.

— Иптәш Игебаев, ара әллә ни алыҫ түгел, мин һинең бындағы эшең тураһында бик яҡшы итеп волкомыһыҙға хат яҙып ебәрермен. Партячейка бармы ауылығыҙҙа?

— Әлегә ойошторолмаған.

— Бына күрәһеңме? Ауылға ҡайтып, бына тигән боевой партячейка төҙөп ебәр. Совет власын урындарҙа нығытыу буйынса ысын көрәш яңы башлана, ә һеҙҙең яҡ хаҡында һөйләп тораһы ла юҡ. Унда күтәрелмәгән сиҙәм. Унда әлегә ауылығыҙ байҙар, муллалар тәьҫиренән ҡотолоп бөтмәгән. Бер һүҙ менән әйткәндә, унда һиңә эш муйындан, ярлы халыҡтан, аңлы йәштәрҙән актив туплап, ең һыҙғанып эшкә тотон. Бына һиңә туғандарса әйтер һүҙем шул. — Ул ҡапыл урынынан торҙо ла бер аҙ ҡаушап ҡалған Абдрахмандың ике ҡулын һелкә-һелкә йылы хушлашты. — Әгәр эшеңдә ҡыйынлыҡтар осраһа, ара йыраҡ түгел, йә хат яҙып ебәрерһең, булмаһа, яҡшы атҡа бер көнлөк юл — килеп тә урарһың. Һин минең өсөн һәр саҡ ҡәҙерле ҡунаҡ ҡына түгел, дөйөм эшкә ныҡ бирелгән соратник та...

Апрелдең беренсе яртыларында Ялан ауылы кешеләре иртәнге тамаҡ ваҡытында Нуғай юлынан был яҡҡа килгән бер атлыны оҙаҡ ҡына күҙәтеп торҙолар. Яҡшы ат егелеүенә ҡарамаҫтан, арбаны ул көскә тартып килә ине. «Тимәк, арбаһына тос йөк тейәлгәндер... Арбаның бер яҡ тәртәһенә был яҡтарҙа аҫралмай торған «Рәсәй тоҡомло» быҙаулы һыйыр бәйләнгән. Арба өҫтөндә — ирле-ҡатынлы...»

Абдрахман үҙ Яланына үҙенең һәм ауылдаштары тормошоноң яңы битен асырға ашҡына ине.

## *Дүртенсе бүлек*

### 1

Ауылға инер алдынан, зыярат эргәһендә, юлаусыларға атлы Уйылдан тап булды. Арбалағыларҙы ҡапыл танып ҡалды ла:

— Тр-р-р! Абдрахман ҡорҙаш, был һин түгелме? Әссәләмәғәләйкүм! Юл булһын! — тип үҙ арбаһынан һикереп төштө.

— Вәғәләйкүмәссәләм, ҡорҙаш! Эйе, был мин. Бына, ситтә йөрөй торғас, ауылға ҡайтып баш һуғырға хәл иттем әле.

Абдрахман тәү осраған ауылдашын ситләтеп үтмәй, дилбегәһен бала ҡосаҡлап йөк өҫтөндә ултырған Маргаритаға ырғытты ла арбаһынан төштө. Уйылдан, дилбегәһен тәртә осона бәйләп, уға ҡулын бирҙе. Игебаев әүәлгесә ике ҡулын һонғайны, Уйылдан, көләмһерәп:

— Юҡ, ҡорҙаш, боронғо ғәҙәттәрҙе бөтөрҙөк: хәҙер ошолайтып күрешәбеҙ, — тип Абдрахманға һыңар ҡулын һуҙҙы. — Был яңыса, йәғни, камсамулдарса була.

Уйылдандың «яңыға» күскәнлеге тышҡы ҡиәфәтенән үк күренеп тора. Танау аҫтынан һыҙылып киткән кеүек мыйығын, кәзә һаҡалын «Уйылдан мәхзүм» бөтөнләй ҡырып ташлаған, өҫтөнә нәҙек кенә ҡайыш менән быуылған ҡара күк гимнастерка, балаҡтары ҡыҙыл ойоҡбашына тығылған шул уҡ төҫтәге галифе, аяғына аяҡ йөҙлөгөнән арҡыры ҡайыш менән тартылған һары сандали кейгән — Уйылданды хәҙер танырлыҡ та түгел. Ҡаҡса йөҙөндә ниндәйҙер дәртле нур балҡый. Мөхәмәтрәхим мулла мәҙрәсәнән мәҙрәсәгә ҡыуып йөрөткән, башы ялтыр итеп ҡырылған элекке шәкерттең әҫәре лә ҡалмаған. Үҙенә баштанаяҡ ҡарап аптырап торған Абдрахманды Уйылдан яңынан бүлде.

— Беҙ ни, ул шулай хәҙер! Мулла-байҙар хакимлығының көнө һанаулы. Уларға тиҙҙән ясин уҡыйбыҙ. Уларҙы бөтә яҡлап ҡыҫмаҡҡа алып ятабыҙ.

Арбала кемдер шыңшығас, Уйылдан шул яҡҡа күҙ һирпеп:

— Әллә малай бармы? Тауышы ҡалын ишетелә, — тип һораны.

— Эйе, малай алып ҡайтып киләбеҙ.

Абдрахман сыбыртҡы һабы менән арба яғына ымланы.

Уйылдан күҙ ҡыҫып һорап ҡуйҙы:

— Ҡорҙашбикә шул, элеккеме?

— Эйе шул, теге ваҡыт алып ҡайтҡан йәмәғәт.

Уйылдан, Абдрахмандың ҡыҫҡа билле кейемен, башына кейгән күн картузын, аяғына кейгән таҙа дегет еҫе аңҡып торған кузлауай итегенә ҡарап:

— Һине, ҡорҙаш, әле осратмаһам, бер Ҡыҙыл урыҫы икән тип, билләһи, үтеп китәһе булған. Нисауа, ауылға ҡайтып, баш-күҙ алғас, мынамын итеп камсамулдарса кейендереп ҡуйырбыҙ әле, — тип, «бына ошолайыраҡ итеп» тигән шикелле үҙенең өҫ-башына ҡарап алды.

— Әллә һин, Уйылдан ҡорҙаш, камсамулға яҙылдыңмы?

— А как же? Самай ячейканың активында йөрөйөм. Ҡамсамулдың башы теге... Фәйзулла хажи малайы Мөхәмәтнур, ләкин беҙҙең паддиржкәһеҙ ул ҡайҙа бара? Ярай,

шулайтып, ҡайтып киләһең инде, — Уйылдан, әңгәмәне тамамланған хисаплап, атының дилбегәһен ысҡындыра башланы.

Абдрахман бойоҡ ҡына сиге офоҡҡа барып тоташҡан далаға баҡты.

— Килеүен киленә лә ул, ҡорҙаш...

— Һин әллә үҙебеҙгә ҡайтыуға риза түгелме?

— Ауылға килеп етелһә лә, баш төртөргә урын юҡ шул әле...

Уйылдан ыуаланып алды ла:

— Тапҡанһың ҡайғы, — тине. — Бер кемгә лә барып йөрөмә. Ҡәнишнә, Ғәлимйән һине күптән көтә ине. Хәҙер үҙенең биш комыт өйөндә шыпа яңғыҙ ҡалды бит. Малтыуарын вис кенә һатып эсеп бөттө. Ҡапҡаһына тәртәң терәлһә, ҡыуанысынан нишләргә белмәҫ ине. Ләкин ул беҙгә хәҙер иш-юлдаш түгел инде. Һин дә камсамулға яҙылғанһыңдыр бит?

— Мин камсамул түгел, ләкин партия һәм Совет сәйәсәтен яҡлаусы активисмын, даже партийный.

— О, бик шәп, улай булғас ни, ниңә уға барып буйһонмаға! Әйҙә, киттек үҙемә.

— Һуң һин үҙең... элгәрерәк?

Абдрахман һорауына яуап та бирмәй, Уйылдан атын кирегә бора башланы, тик арбаһына ултырыр алдынан ғына:

— Хәҙер, ҡорҙаш, мин Мөхәмәтрәхим мулланың күрнәсәһенә инеп алдым. Мулла «Беҙгә әсәң менән аш өйө лә ярар. Бына һеҙ, балалы кешеләр, беҙҙең күрнәсәлә торорғоҙ» тип үҙ бүлмәһен бушатып ҡаршы өйгә сыҡты. Һиҙә, ҡарт бүрһыҡ, эштең ҡайҙа барғанын.

Абдрахман өндәшмәне.

— Әйткәндәй, беҙ ҙә Сәғилә менән Алмабикә атлы киләләй ҡыҙ үҫтереп ятабыҙ бит.

Уйылдан арбаһына ултырҙы ла ауылға юл башланы.

Бына Абдрахмандың йөрәк түренә мәңгелеккә инеп ултырған, уның өсөн бөтә донъяның иң гүзәл мөйөшө — Ялан ауылы. Ҡыл тартҡан шикелле бер урамлы, Ҡыҙыл ярында ултырған Ялан. Әле ул июнь баштарында ҡылған сәскә атып, бөтә тирә-йүнгә хушбуй бөрккән мәлде үлеп һағына! Ҡылған өйкөмө төбөндә салҡан ятып, сәғәттәр буйына зәңгәр күккә ҡарап ятҡыһы, үҙ урамында хәтфә кеүек сырмалып үҫкән бесәй үләне өҫтөндә аунағыһы килә. Бына нисәмә йылдар инде ул, атын үҙ һабанына егеп, биләмәһендә ер һөргәне, иген сәскәне юҡ. Нисәмә йылдар тәүҙә «Аҡ батша»ның фарманы менән «ерен-һыуын һаҡлап» герман һуғышында, ә унан Колчак ғәскәр-

ҙәре Башҡортостанды баҫып алғас, «Верховный правитель» армияһында үҙ ихтыярынан ғәйре һалдат мылтығы, ауыр һалдат сумкаһы йөкмәне, иң һуңынан ошо үҙе бөгөн ҡайтып килгән Ҡыҙыл станицаһы эргәһендә өс-дүрт иптәше менән ҡасып, ҡыҙылдар яғына сыҡты ла, ҡулына яңынан ҡорал алып, был юлы үҙ ирке, халҡының азатлығы өсөн һуғышты. Уның алты йылға яҡын ғүмере һалҡын, еүеш окопта йәшәү менән үлем тартышы барған аяуһыҙ, ҡанлы көрәштә үтте. Башҡа иптәштәре кеүек өшөнө лә, туңды ла, сигенеү ғазаптарын елкәһендә татып көйөндө лә, һөжүм, еңеү ҡыуаныстарын да күреп һөйөндө. Иң һуңынан, 1920 йылдың июнендә, уң аяғынан йәрәхәтләнеп, Житомир, Киев, Харьков госпиталдәрендә оҙаҡ ҡына дауаланып сыҡты, яңынан аяғына баҫты. Госпиталдән сыҡҡас, күрәһең, ҡурҡыу белмәҫ һуғышсы икәнен иҫәпкә алып, мөһәбәт буй-һынына, мыҡты кәүҙәһенә ҡараптыр инде, уны кесе командирҙар әҙерләп сығара торған мәктәпкә лә тәғәйенләп ҡарағайнылар. Бында уҡып, командир булып сығырға, үҙенең ҡалған ғүмерен, бөтә яҙмышын Ҡыҙыл Армия менән бәйләргә бөтә нигеҙлектәр ҙә бар һымаҡ ине. Абдрахман үҙенең зирәклеге, мәргәнлеге менән бөтә полкта танылған яугир ине, ләкин ул командирҙар курсына барыуҙан ҡырҡа баш тартты. Ата-әсәһенең ҡартлығына, сырхаулығына һылтанды. Иптәштәре менән хушлашҡанда, батальон командиры уның ҡулдарын ҡыҫып:

— Абдрахман, хәҙер бөтә Волга буйында, һеҙҙең тирәлә лә әҙәм аслыҡтан бик ҡырыла. Әгәр ҙә өйөңә ҡайтып етеп, эштәрҙең мөшкөл икәнен күреп, бында кире әйләнергә ниәтең булһа, тот та тура үҙемә кил, ҡушҡуллап ҡаршы алырбыҙ, — тип ҡалды.

Ләкин Абдрахманды үҙе ереккән атайсалы тартты, йөрәкһетте.

Бына ата тупһаһын аша атлап сығып китеүенә байтаҡ йылдар үтте, ә ул һаман да шул үҙе бала саҡта ялан аяҡ йүгереп үткән һуҡмаҡтарына, балағын тубығына тиклем төрөп Ҡыҙылда балыҡ ҡармаҡлаған шаршылы кисеүгә, һуғышҡа алыныр алдынан Салғыя ташы һыртында һуңғы кәбән ослаған ҡылған аҡланына килә, иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, баш эйә алғаны юҡ. Бына әле Уйылдан артынан Абдрахман ашыҡмай ғына урам буйлап бара. Таныш, бик тә эҫе, күңелдә мәңгегә уйылып ҡалған юлдар, һуҡмаҡтар. Бейек нигеҙгә ултыртылған, башҡа өйҙәрҙән аша ҡарап торған ағас ҡапҡалы, башы таҡта менән ябылған Маннап хәҙрәттең мәҙрәсәһендә хәлфәлек иткән Мөхәмәҙи йорто. Улар ихатаһында был түбәнге оста бер кемдә лә булмаған таш һарай бар. Унда был хужаларҙың май-ҡай-

мағы һәм ҡышҡыға әҙерләнгән һуғымы һаҡлана. Был йортта түбән остоң берҙән-бер сепараты бар. Сепарат төбөндә сират көтөп торған бисәләр һөт тулған биҙрәләрен стена ҡырына теҙеп ултырталар ҙа, ауыҙҙарындағы һағыҙҙарын сартлатып сәйнәй-сәйнәй һуңғы яңылыҡ менән уртаҡлашырға тотоналар. Улар араһында һис шикһеҙ хәбәр башлаусы була. Уныһы, һағыҙ сәйнәүҙән уртына һыймай ирен ситтәренә йыйылған төкөрөгөн ҡулының усы менән һөртөп ала ла, сепарат геүләгән тауышты баҫырҙай итеп, һүҙгә керешә:

— Үткән төндә, әллә ҡайҙан эсеп ҡайтып, Ғәлимйән ҡайнаға өлкән һыйырҙарын таң сыҡҡансы һуйып ташлаған, ти ҙә баһа. Ҡарт булһа ла, тоҙлоҡло ите сыҡҡан, тисе.

Уның был яңылығы сепаратҡа килгән бөтә кешегә аңлашыла. Тимәк, Ғәлимйән хажи, төндә эсеп ҡайтып, таң сыҡҡансы өлкән бисәһен туҡмаған. «Тоҙлоҡло ите» уның оло ҡатынының итләс, һимеҙ булыуын аңлата. Был башланған хәбәрҙе икенсеһе элеп алды.

— Ҡисә кис беҙҙең күрше Әбделғәни, һыйырҙарына быҙау ҡушылғанына асыуланып, бер яшыҡ таналарын һуйып ҡуйған ти бит. Уның ни тоҙлоҡ тигән нәмәһе юҡ инде. Ҡуяндың итен күр ҙә һурпаһынан төңөл.

Быныһы инде Әбделғәни ҡәйнешенең ябыҡ ҡына йәш кәләшен туҡмағанын аңлата. Барыһы ла хихылдашып көлөшөп алалар.

...Урыҫ ҡапҡаһының ҡабырғаһындағы таҡта ҡоймаға терәп эшләнгән, өҫтө шымарып бөткән эскәмйәлә Ғәлимйән ултыра. Ул ерән ҡаштарын төйнәп, үҙе ҡырынан үтеп барыусы юлаусыға көсәнеп-көсәнеп ҡараны, әммә таный алманы. Йөҙөндә лә, кейгән кейемендә лә элекке тәкәбберлектең әҫәре лә ҡалмаған. Ерән һаҡал-мыйығы ныҡ еткән. Ғүмеренә лә урамға итекһеҙ сыҡмаған хажи, бөгөн эскәмйәлә ялан аяғына ҡуңалтаҡ тәрән калуш кейеп ултыра. Сырышып, бөтәрләнеп бөткән өҫ-башына ҡарағанда, уның күптән үҙен ҡарамағанлығы күҙгә бәрелә. Бөгөн ул нисектер йыуашайып ҡалған төҫлө, сөнки элгәрерәк заманда уның яман күҙ ҡарашынан ҡурҡып, сәңкелдәп, арты менән ҡапҡа аҫтына инеп юғала торған ҡара-ала ҡарпыш ҡолаҡ эте уның ике аяғы араһында рәхәтләнеп йоҡлап ята.

«Бының да йыуашайыр көндәре бар икән» тип үтеп китте үҙен таный алмай көсөргәнеп ҡараған хажи тапҡырынан Абдрахман.

«Берәй яҡҡа ғаиләһе менән күсенеп китеп барған Яйыҡ казагылыр. Ат-сбруйына ҡарағанда, донъяһы бөтөн бер

әҙәмгә оҡшай» тиг п уйланы Ғәлимйән. Тоҡ өҫтөнә суҡайы ултырған Уйылдан ндың юл башлап килеүе лә уны ғәжәп ләндерҙе.

Иҫке, ямғыр а ҫтында бурһып бөткән ике тәҙрәле тә пәш кенә өй тапҡ ырына килеп етә башлағас, Абдрахман дың йөрәге йышы раҡ тибә башланы. Биләүле балаһы алып ултырған Ма аргаритаға ла иренең эске тулҡынланы уы күсте. Ул да ш шул өйгә башын борҙо. Ошонда Абдрах мандың хәҙер әллә ә ҡайҙа, иҫендә күкһел томан ғына бу лып ҡалған балал ыҡ сағы үткән. Ошо тәпәш кенә өйҙөн тупһаһы аша ул о ло тормошҡа беренсе аҙым яһаған. Ба лаҫ йәйелгән һике элә, алты аршынлыҡ йортта, уға ата бабаларынан күсә килгән тәрбиәне, быуындан быуынға то таша торған ғөрөф ф-ғәҙәтте һеңдергәндәр. Ихатаның теге башында яңғыҙ һы йыр аҙбары һерәйеп ултыра, уға яғыл май ҡалған ситәнд ең осо терәлгән. Унда бер нисә һайғау ҙан бесәнлек әтмә әләнгән. Ҡасандыр бер нисә тирәктән муйыл һәм ҡарағат ағастарынан торған баҡсаның кәртә һе генә түгел, ағаст ары ла ҡырҡып ағылған.

Башына керлән еп бөткән түбәтәй, ә өҫтөнә камзул, салбар урынына бе р нисә урындан ямалған киндер ыштан кейгән эре һөйәкле кәзә һаҡаллы ҡарт әллә ҡайҙан бо таҡлы түмәр килте реп ултыртҡан да уны сәрпеп маташа, күрәһең, самауыр ҡайнатыр өсөн тап әҙерләй. Бына Әб делғәлим ҡарт бер кемгә лә тоттормай торған ҡыҫҡа, шы ма һаплы оҫта балт аһын һаҡлыҡ менән генә түмәргә сап ты ла, ауыртҡан би лен яҙып баҫты. Нуры һүнә башлаған, ҡояшҡа ҡараулан йәшләнгән күҙе өҫтөнә ҡулын ҡуйып, ул оҙаҡ ҡына үтке нселәргә ҡарап торҙо. Алда килгәнен Мөхәмәтрәхим мул ланың малайы Уйылдан «мәхзүм»де танины, ләкин уны н арбаһын тапай яҙып килгән оҙонораҡ, казачий ат екк ән юлаусыны, күпме ҡараһа ла, таный алманы. Уның ҡара ы, казактар егә торған бер атлы ходлы фургон өҫтөндә дилбегә тотоп ултырған, башына кун картуз кейгән кеше нең уға текләгән ҡартты күргәс тә, төҫө үҙгәрҙе, эске тулҡынланыуынан шаҙра битенә эҫе бөрктө, тамағына ни дәйҙер төйөн тығылған һымаҡ булды. Арбаһынан һикереп төшөп, уның шул нимәлер көтөп, оло өмөт менән зарығы , күҙҙәрен талдырып ҡараған ҡартты — үҙенең ғәзиз а таһын биленән ҡосаҡлап күккә сөйгөһө, арбала йоҡлап килгән малайын, Вахитын ҡарт ҡулына тоттороп: «Ата й, бына был тумалаҡ битле, һары сәсле малай, һинең ей нең, беҙҙең Игебаевтар тоҡомон дауам итеүсе йән эйәһ е була, һөйөнсө!» тип бөтә Ялан ауылы ишетерлек итеп ҡысҡырғыһы килде. Ләкин ул тыйылып ҡалды.

Арба Мөхәмәтрәхим мулланың ҡара-ҡаршы һалынған урыҫ ҡапҡалы өйө тапҡырына туҡтаны. Ихатала ларһылдап өргән эт тауышы ишетелде. «Эт көтөргә форсатынан килгәс, мулланың тормошо зарланырлыҡ түгел, ахырыһы» тип уйлап алды Абдрахман. Ҙур ҡапҡаға арҡыры һалған ағасты эс яҡтан тартып, ергә төшөрҙөләр. Ҡыйыҡлы ҡапҡа ике яҡҡа шар асылып китте. Ҡапҡа асыусы йыуантаҡ ҡына ҡатын — Уйылдандың бисәһе икән. Уйылдан атының башын ихаталағы ситәнгә терәне лә Абдрахмандан:

— Бынау бисәне таныйһыңмы? — тип көләмһөрәп һорап ҡуйҙы.

Арбаһынан һикереп төшкән Абдрахман, сибәр ҡатынға тура ҡарарға уңайһыҙланып, күҙ һирпеп кенә алды ла:

— Сырамытам, ләкин бер ҙә таный алмайым, — тип яуапланы.

— Был минең хәләл ефет Сәғилә үҙе. Теге урге ос Фәхри ҡарттың өйөнән сығышмай торған бер ҡыҙы була торғайны бит, бына самай шул инде.

Сәғиләһе ҡыҙарҙы. Абдрахман йәнә хужабикәгә ҡарап алды ла:

— Таныным, таныным, ул миңә бик әҙ-мәҙ ҡоҙаса тейеш әле, — тип көләмһөрәне.

Сәғилә лә был сит кешене таныған төҫлө йәнләнеп:

— Әллә Әбделғәлим ҡоҙаның улы Абдрахманмы? — тип һорап ҡуйҙы.

— Нәҡ үҙе. Өҫтөнә генә баҫтың, ҡоҙаса, — Абдрахман мәрәкәләп алды. — Ана, арба өҫтөндә — Маргарита. Ҡулында — Вахит, улыбыҙ була.

Мулла абыстайын эйәртеп сыҡты. Ҡөмөш төймәләрен ысҡындырған ялтыр, ҡара кәзәкейе эсенән ҡулдарын биленә һалып, әле лә ит ташламаған ҡалын ғына кәүҙәле, шешмәк ҡабаҡтары күҙенә, ике һимеҙ бите аҫҡа һалынып төшкән Мөхәмәтрәхим «Ҡһем... кһем...» тип тамағын ҡырҙы ла башта арбалағы ҡатынға, ә унан һуң ат туғарып йөрөгән Абдрахманға ҡараны, уны шундуҡ таныны.

Билдәле, элеккерәк заман булһа, «был мәсет дошманы»н дөрә һуғып, уға ялағайланып, ҡойроғон болғап торған йөнтәҫ Алабайын бауынан ысҡындырып, ихатаһынан ҡыуып та сығарыр ине, ләкин, күренеп тора, замана уның телен дә, ҡулын да ҡыҫҡартҡан. Ул, ике ҡулын һоноп, ярамһаҡланып, Абдрахманға үҙе килеп күреште.

— Ай, ҡустым, ҡайһылай һөйләмәй генә йөрөйһөң. Ана соланда абыстайындың самауыры шаулап ултыра. Абыстай, әй, абыстай! Ниндәй ҡунаҡ килеп төштө, әйҙә, самауырыңды йәһәтлә, кискегә һәйбәт итеп аш һалып ебәр.

Арбаһынан төшөп, өҫтө-башын йүнәтеп, ҡулъяулыҡ менән етәкләгән малайының битен һөртөп маташҡан Маргаритаға башын эйеберәк, түбәнселек менән:

— Ыздрасти, килен! — тип өндәште. Шунан, Абдрахманға ҡарап: — Хаталанмайымдыр? Килендер бит, төҫө-башы шуға тартым, — тип өҫтәп ҡуйҙы.

«Абдрахман шәриғәт законын боҙоп, кафира алып ҡайтҡан, бына шуға ла ауылдың ҡото китер, һарыҡтар бәрәсләмәҫ, бейә ҡолон һалыр, мосолмандың берҙән-бер һыйыры быҙауламай ҡалыуға сәбәп булыр» тип, Абдрахман Маргаритаға өйләнгәс, мөнбәрҙән мосолмандарға һөйләгән вәғәзенән башҡа мулла уның ҡатынын күҙмә-күҙ күргәне юҡ ине әле. Бына бөгөн үҙ ихатаһында үҙенең бесән һырыған итәген алға эйелеберәк таҙартып торған күркәм һынлы, бейек ботинкаһының ҡуңысы ҡыҫып торған йыуан балтырлы Маргаританы күргәс, мулла майлы күҙҙәрен уның яғына атты ла «ошо өйөрлө аллаһыҙ ләғнәт ҡайҙан табып ала күркәм йәмәғәтте» тип уйлап алды. Шунан, ниҙер иҫенә төшкәндәй:

— Әйҙә, Уйылдан, ҡунаҡтарҙы сәйгә алып ин, ҡул сайығыҙ, — тип, Маһитабын өтәләп, өйгә инеп китте.

Уйылдан мулла күрнәсәһендә күлдәй ашъяулыҡ өҫтөнә арыу ғына һый әҙерләнгәйне. Был йорттағы бөтә нәмәгә ятһынып, аяғын һикегә һуҙып ултырған әсәһенең яурынына ышҡынып торған малайҙы күреп, Мөхәмәтрәхим мулла, ике ҡулын һуҙып:

— Йә, кил әле бында, һарыбаш малай. Үәт, Яланға бер йәшел күҙле, ҡылған сәсле малай ҡайтҡан икән. Кил, кил, кәнфит бирәм, арҡаңды бер тупылдатып һөйөп алайым, — тип үҙенә саҡырҙы.

Обручевка ауылында үҙенең Настя инәһенең алдынан төшмәгән малай, бындағы ят күренештән, шешмә ҡабағы аҫтында сысҡан күҙендәй генә тишектән үҙенә төбәлгән сәскеле ҡараштан ҡурҡты.

— Эй, улым, улым, һин бер ҙә атайыңа оҡшамағанһың икән, батыр түгелһең, — тип, сөйгә эленгән ебәк моҡсайҙың бөрмәле ауыҙын сисеп, бер нисә лампасый алып, малайға һуҙҙы.

«Минең «батырлыҡты» иҫкә төшөрә, ҡарт төлкө. Теге ваҡыт һаҡалынан алғанды онота алмайҙыр инде» тип уйланы Абдрахман.

Ҡаршы өйҙән аяҡтары ҡатып бөткән бер ҡыҙ бала туп һымаҡ тәгәрәп килеп инде лә ҡарттың алдына килеп ултырҙы. Ул бөтә кешегә лә сиратлап ҡарап сыҡты ла ҡарашын үҙе ҙурлығы малайға төбәне.

— Был минең ейәнсәрем. Алмабикә була. Йә, ҡыҙым, ошо моҡсайҙа ни бар? — Олатайы уға баяғы янсыҡты күрһәтте.

Алмабикә, йомрандыҡы шикелле алғы ике тешен күрһәтеп тамшанды ла:

— Мәнфит, — тип ауыҙын яңынан япты.

Уға ла лампасый тотторҙолар.

Күптән ауыҙ ителмәгән сейәле май, семәрле батмус өҫтөндә һап-һары булып йылтырап ултырған бер сеүәтә һары бал өй эсенә баш әйләндергес еҫен аңҡытты. Был замандарҙа һирәк була торған һалҡынса йылҡы ите, телем-телем киҫелгән ҡабырғалы ҡаҙы, юлдан асығып килгән ҡунаҡтарҙы саҡырғандай, үҙенә тартып тора.

Мөхәмәтрәхим «бисмилла, йә аштан рәхим итегеҙ» тине лә алдында ятҡан өҫтө һап-һары сөсө икмәккә үрелде. Һуңғараҡ хужа, Уйылданына ҡарап, бер күҙен генә уйнатып алғас:

— Абдрахман ҡусты, нәпсеңә яраһа, балдан ҡойолған шәрбәт тә бар. Әллә аш алдынан бер-ике сеүәтә һелтәйһеңме? — тип һораны.

— Ауыҙға алған нәмәм түгел, рәхмәт. — Абдрахман баш тартты.

Уйылдан «бал» һүҙен ишеткәс, тамағына килеп тығылған төкөрөгөн ҡылҡылдатып йотоп ебәрҙе.

Абдрахман, былар ашынан ауыҙ иткәс, эргәһендә ултырған ҡуржынын асып:

— Инде хужалар, беҙҙең тәғәмдән ауыҙ итегеҙ, — тип, мендәр һымаҡ күпсеп торған ҡалас сығарып телгеләне, ашъяулыҡ тирәләй һалып сыҡты. Ыҡсым ғына ҡалай ҡумта сығарып, ҡапҡасын сылтлатып асты ла бөтә кешегә берәр ҡыҙыл әтәс перәниге таратты.

Ҡумта эсенә төшөрҙәй булып торған Алмабикәгә перәник тотторол, Абдрахман:

> — Ҡыҙыл билле аҡ перәник
> Етә ҡыҙҙар башына, —

тип һамаҡланы.

— Бына быныһы ана Вахит ҡорҙашыңдың күстәнәсе.

Сәй эскән арала Абдрахман өй эсенә күҙ йүгертеп сыҡты. Түшәмдән нәҡ өйҙөң уртаһына был яҡтарҙа һирәк осрай торған түңәрәк шәм эленеп төшкән. Баш осонда ғына ике туҡмаҡлы кәкүкле сәғәт һуғып тора. Унын ике мөйөшөндә ғәрәп илдәренең әллә ниндәй бейек быуынлы-быуынлы мәсете ултыра. Һике менән ишек араһында стенаға терәп ултыртылған быялалы шкаф эсендә боронғо китаптар теҙелгән. Уртансы кәштәнең бер мөйөшөндә ҡара

һауытына тығылған ҡауырһын ҡәләм менән мулланың үҙ мәхәлләһендә үлем-тыуымды теркәп бара торған зәңгәр тышлы ҡалын китабы, ә уның өҫтөндә шәм ҡоромона ҡуйып баҫа торған бәләкәй генә тотҡалы баҡырҙан эшләнгән мулла мөһөрө күренә. Түрбаш яғында шунда уҡ быялалы шкафта көмөш һауыт-һаба, семәрле көмөш балғалаҡтар, алтын буталлы сынаяҡтар, ә аҫҡы өлөшөндә ҡымыҙ көрәгәһе, ижау, билдәренә төрлө биҙәктәр төшөрөлгән ағас сеүәтәләре теҙелеп киткән. Өй уртаһынан стенанан стенаға һуҙылған урҙа өҫтөндә был йорттоң бөтә байлығы эленгән, затлы күлдәктәр, дүрткә бөкләнгән эре биҙәкле ситса шаршау, остары сигелгән һөлгө, таҫтамалдар, төрлө төҫтәге шәл, баш яулыҡтары, яңы ғына һуғылған дебет шәлдәре элеп ҡуйылған. Күп нәмә эленеү сәбәпле, уртанан эйелә башлаған урҙаны ике урынынан түшәмгә тимер сыбыҡ менән күтәртеп ҡуйғандар.

«Да, егерме беренсе йотлоҡ йылы был өйҙө ситләтеп үткән, бында бер ни ҙә кәмемәгән».

Ҡунағының ни уйлап ултырғанын һиҙгән шикелле, мулла тынлыҡты боҙҙо.

— Былай тормошобоҙ уртаса ғына инде, кешенән артыҡ бер нәмәбеҙ ҙә юҡ. Ошо көнгәсә бына ҡорҙашыңды ла башҡа сығарылмаған әле. Уға ла форсат етмәй ята. Беҙ хәҙер ҡартайҙыҡ инде, беҙгә байлыҡтың хәжәте юҡ. Теге донъяны, асылыңды уйлап ҡына ултыра торған мөҙҙәт етте беҙгә. Беҙҙә хәҙер әхирәт ғәме, — тип, ниндәйҙер ярҙам эҙләгәндәй, һике ситендә һөрпөлдәтеп сәй эсеп ултырған улына ҡараны, ләкин хужаға яуап биреүсе булманы.

Абдрахман да, Маргарита ла шәп-шәп ашанылар ҙа, икешәр сынаяҡ сәй эсеп, сынаяғын түңкәрҙеләр.

— Ҡуйығыҙ әле, ике шәшке лә сәй булған икән! Ана бит, абыстайығыҙ сәйҙе яңынан һалды. Һеҙ, ысынлап та, урыҫ ерендә йөрөп, урыҫса ғәҙәтләнеп бөткәнһегеҙ икән, — мулла ла, абыстай ҙа быларҙың сынаяғына йәбеште. Сәй эсеү яңынан дауам итте.

Мулла, ултыра биргәс, кемдәндер шикләнгән шикелле йән-яғына ҡаранды ла:

— Йә, Абдрахман ҡусты, юл булһын! Килен менән берәй яҡҡа китеп барыуығыҙмы, әллә, баш терәп, Яланға ҡайтып килеүегеҙме? — тип сабыр ғына күңелен күптән өйкәгән һорауҙы бирҙе.

Абдрахман ауыҙ асырға ла өлгөрмәне, уның урынына Уйылдан яуап бирҙе.

— Абдрахман ҡорҙаш Абрашауҙан бөтөнләй күсеп ҡайтҡан. Яланда төпләнергә ниәте. Хәҙер баш терәргә

урыны булмағас, бына, «Әтәс тирәк»кә китеп барғанда, юлда осратып, үҙебеҙгә алып ҡайттым.

Ҡапыл Мөхәмәтрәхимдең битендә асыулы һыҙаттар уйнаны, ҡулына тотҡан сынаяҡ аҫты дерелдәп бейей башлағас, уны сайпылдыра-сайпылдыра батмусҡа ултыртты. Шулай ҙа мулла һүҙһеҙ генә ултырып ҡалманы:

— Белов кулактың әллә нисә комнытлы күрнәсәһенә, аҡ мунсаһына өйрәнгән бала-сағалы кешене ҡайһы өйөңә керетмәксеһең? — тип улына тишеп ҡараны.

Уйылдан һис аптырап торманы:

— Кәрәк икән, күрнәсәне лә бирербеҙ. Ниңә, әллә ярлыға һинең күрнәсәң ҡырын китер тиһеңме? Бик тә ярап ҡалыр, — тип киҫә яуап бирҙе.

Өйҙә бер аҙға тынлыҡ урынлашты, ләкин был алдаҡсы ғына тынлыҡ ине. Абдрахман сынаяғын ауҙарҙы.

— Мин өйөгөҙгә килеп, бер ҙә һеҙҙе ҡыҫтарға уйым юҡ. Тик ҡорҙаш әйҙәләгәнгә тәртә ҡайырғайным, юғиһә...

— Юҡ инде, буш менән булма! Беҙгә ни, икебеҙгә өс өй. Атайымдың һүҙенә ҡарап, шулай итеп ҡылтайышмайыҡ әле. Теләһәң ҡайһы йортта йәшә, үҙ ихтыярыңда, — тип ялынды Уйылдан.

Мулла ла, үҙ асыуын ете ҡат тиреһе аҫтына йәшереп, сәй эсеп ултырған еренән һикереп торҙо. Тик был низағтан бер ни ҙә аңламаған ике бала, биргән перәниктәрен ашамай, етәкләшеп урамға һыҙҙылар.

Өй артында йыйылған тиҫтерҙәре араһында ал-ҡыҙыл, күҙҙәре йылтырап торған әтәс перәник менән һәр баланың ауыҙына терәп тигәндәй «күҙең ҡыҙамы, күҙең ҡыҙамы?» тип маҡтанып сыҡты ла, Алмабикә:

— Беҙгә мәрйә апай килгән. Бына был малай — улы, — тип, башына бәләкәй күн картуз кейгән Вахиттың күкрәгенә бысраҡ бармағы менән төрттө.

Ситтән балаларҙың уйынына ҡатнашмай ғына ҡарап торған зәңгәр күҙле, ҡылған башлы малайға Алмабикәнең яңынан әйләнеп:

— Урыҫ малайы ул. Уның теле башҡа. Ауылса һөйләшә белмәй, — тип әйтеүе булды, аяҡтары табанына тиклем ярылып бөткән, ҡояшҡа ҡара янған ыштанһыҙ ауыл малайҙары Настя инәһе тегеп кейҙергән йәшел лампаслы салбар, шул төҫтәге гимнастерканың билен йылтыр ҡайыш менән быуған һары малайҙы йә береһе, йә икенсеһе килеп ҡаҡҡылай башланылар.

— Бар, ауылыңа ҡайтып кит, урыҫ!

— Беҙ һине бында уйнатмайбыҙ!

Ә бер малай:

Яйыҡ яры текәлер
Урыҫ башы һеркәлер, —

тип үсекләне лә ҡулындағы перәһиген тартып алды.

Бер ни аңламаған, үҙ ауылында Беловтарҙың йылы ҡанаты аҫтында иркә генә үҫкән Вахит «папа, папа!» тип һөрәнләп, өйөнә ҡайтып китте.

Өй эсендә килеп тыуған уңайһыҙлыҡтан тиҙерәк ҡотолоу өсөн, Абдрахман атын ҡарау һылтауы менән ихатаға сыҡты. Уның артынса уҡ Маргарита:

— Абдрахман, ниш ләп кенә килдек беҙ бында тағы ла! Андрей Ивановичтарҙа ғына тороп ҡалһаҡ ни булған һуң? — тип мыжыны.

Абдрахман бер һүҙ ҙә өндәшмәгәс:

— Әйҙә, бөгөн төн сығайыҡ та, Обручевкаға кире китәйек, — тип ялбарҙы.

Абдрахман бисәһенә ҡалын, көслө муйынын борҙо.

— Беҙ бер ҡайҙа ла китмәйбеҙ!

— Ә ҡайҙа йәшәрбеҙ?

— Хәҙергә бына ошонда, унан ҡайҙа урын бирәләр, шунда йәшәп торорбоҙ. Ни эшләп шул тиклем өҙгөләнәһең, Маргарита? Быҙаулы һыйыр бар, бер йылға етерлек икмәк тейәп килдек, — тип ире бричкалағы аҡ тоҡтарға ҡарашын атты.

## 2

Абдрахман сығып киткәс тә, өй эсендә ғауға булып алды. Мөхәмәтрәхим ситекле аяғы менән үҙе бая ғына ултырған күпмәләй мендәрҙе иҙәнгә осора типте лә:

— Килештереп йөрәйһең, мәлғүн, үҙ өйөңә камун саҡырып! Өрә белмәгән эт өйөнә бәлә килтерә, тигән боронғолар, хәсис, — тип ярһыны.

Иҙәндә сандалийын кейеп маташҡан Ҡйылдан:

— Һин, атай, бик ҡабарма! Абдрахман һиңә биленә тиклем бөгөлөп сәләм бирәп йөрөгән элекке Әбделғәлим малайы түгел, ул Абраша уҙа актив коммунист булып ҡайтҡан, уның кеҫәһендә бик ҙур дукамент. Әйтте — бөттө, — тип аңлатырға тырышты.

Ләкин сығырынан сыҡҡан мулла:

— Төкөрҙөм мин уның ул ҙур дукаментына. Әле ул малайығыҙҙың үкенер көнө алда, — тип кемгәлер мөрәжәғәт иткәндәй бармаҡ янаны.

— Хәҙер уларҙы төкөрөп кенә еңеп булмай. Улар күмәк, уларҙа көс, тамаҡ ярып ярһығансы, шулар яғына ятыуың хәйерлерәк.

— Ятҡан һин ят! Суҫка! Өйөрлө донъя ҡоротҡостар! Бик тә яҡын булғас, ана, күрнәсәңә һалып ҡуй ул камуныңды! Донъяң артып баралыр шул, ғүмерендә ғөсөл ҡойонмаған мәрйәне өйөңә кертмәһәң, бесталкауай! Һинең урынында аҡылы камил әҙәм шул һин уҡыған мәҙрәсәләрҙә белем алһа, быға тиклем аҡ сәлләле ишан булып ултырыр ине, ҡыутомшоҡ! Бөтә мосолман шәрегенең остазы Зәйнулла ишанды алдап шаһәҙәтнамә алып йөрөгән берәҙәктән ниндәй өмөт булһын? Ә хәҙер Фәйзулла хажи малайына эйәреп, атаһын ҡыйырһытырға әҙер. Ғүмеремдә лә фатихам юҡ динен аяҡ аҫтына һалып тапаған хәсискә! — Мөхәмәтрәхим һике буйлап йөрөнө-йөрөнө лә, хәле бөткәс, аяғын салып, икенсе мендәр өҫтөнә ултырҙы.

Ысынлап та, ошо берҙән-бер малайын мәҙәниәт юлына күндерергә, үҙ урынына Түбәнге мәхәлләнең имамы итеп ҡалдырыу өсөн күпме көс һалды. Уйылданды ҡайҙарға ғына ебәреп, ниндәй генә мәҙрәсәләрҙә уҡытып ҡараманы, күпме сәрмәйә түкте, күпме байлығын сарыф итте, бына бөгөн алдында сандали кейеп, ҡайҙалыр камсамулдар йыйылышына китергә торған, һул беләгенә ҡыҙыл тағып торған берҙән-бер малайына. Ғәрлегеңдән шартларһың!

— Ялғансы һин! Элгәре батша хөкүмәтен алдап йөрөнөң, ә хәҙер Совет власын алдауға күстең. Ә алхасил һинең башыңда мыҫҡал да ғаҡыл юҡ.

Уйылдан түҙҙе-түҙҙе лә, сыҙамлығы һынғас, сандалилы аяғы менән һикегә һикереп менде һәм атаһының боғаҙынан алып, ҡара сатиндан тегелгән атайының кәзәкейен яғаһынан итәгенә тиклем йыртып төшөрҙө.

— Иптәш мулла, мин һине властарға үҙем тотоп бирәм. Етте, бына ошонан етте, — тип, ҡулының ҡыры менән үңәсен ышҡып, бысҡы бысҡанды аңлатты. — Динең менән халыҡты ағыулаған һин ялғансы, мин түгел, — тип иҙәнгә төкөрҙө лә, ишекте шарт ябып, сығып китте.

Ғәрлегенән үңәсенә боғал һалыр сиккә еткән ҡарт мөйөшкә боролоп ятты ла һулҡылдап иларға кереште. Әҙерәк тынысланғас, меҫкен генә ултырған абыстайына текәлде.

— Үәт, абыстай, тормоштоң аҙағы нисек тамамланды? Ҡарт көнөндә яңғыҙ улыңдан яғаңдан алдырып, әҙәм көлкөһөнә ҡалып ят инде! Әҙәм ишетмәһен — мирҙан оят! Үҙемә үҙем ҡул һалыр инем, ҡөрьән генә ҡушмай, оло гонаһынан ғына ҡурҡам, шуныһы булмаһа, хәҙер үк муйыныма арҡан һалыр инем, — тип ярһыны.

Ҡыҙыу холҡон яҡшы белгәнгә күрә, Маһитап бер ниҙә әйтә алманы. Уны йәлләгәнлеген күрһәтергә теләптер

инде, әленән-әле таҫтамал еүешләп, ҡартының ут булып янған маңлайын ҡаплап ултырҙы. Ҡарт бер ҡыҙғанында абыстайына ла «Бына был бәләләрҙең башы һиндә ята. Һин ул ошо йүнһеҙ мәҙрәсәләрҙә шәкерт булып йөрөгәндә минән йәшереп, аҫтыртын уға аҡса, аҙыҡ-әүҡәт ебәреп яттың. Ә ул һин ебәргән тәңкәләргә тәхил шарабы эсергә, дөхән һурырға өйрәнде», тип ҡаты ғына бәрелеп алырға уйлағайны, ләкин «Улдан яҙғас етеп торор, юҡһа, бисәсәсәгә ышаныс юҡ, быныһы ла, Уйылдан һүҙенә төшөп, уның яҡлы булып китһә, алла һаҡлаһын, ҡарт көнөмдә бөтөнләй шыпа яңғыҙ тороп ҡалырмын» тип, асыуын тел төбөнә йомоп ҡалдырҙы.

Бөгөн йылдар буйына атаһы менән улының ана тоҡанам, бына тоҡанам тип төтәп ятҡан үҙ-ара мөнәсәбәте ҙур янғынға әйләнде.

Ошо көндән Мөхәмәтрәхим мулла улына үс йөҙөнән абыстайын етәкләп мал өйөнә күсеп сыҡты. Мулла үҙенең был ҡарары менән әле Ялан ауылындағы үҙе яҡлы мосолмандарҙың тойғоһонда уйнамаҡсы булды. Уйылдан һәм уның ише элекке тәртипкә ҡаршы күтәрелгән ауыл йәштәренә ҡаршы үҙ мәхәлләһен ҡоторторға уйланы. Баштараҡ ул яңылышмаған һымаҡ ине, ләкин аҙағы барыбер унынса бөтмәне. Ә Абдрахман үҙ ихтыярынан ғәйре мулланың күрнәсәһендә тора башланы. Кескенә Алмабикәнең урамда, тиҫтерҙәре араһында, «беҙгә бөгөн мәрйә апайҙар килде» тигән һүҙе бер урам ғына булып ултырған Ялан ауылының һәр бер өйөн айҡап сыҡты.

Абдрахмандың ғаиләһе үҙе лә аңламаҫтан, ваҡытлыса булһа ла, Мөхәмәтрәхимдең ҡунаҡ өйөн биләүе үҙ ауылдаштары араһында Әбделғәлим малайы Абдрахман, урыҫ яғында партийный булып ҡайтып, ауылдың муллаһын ҡунаҡ бүлмәһенән мал өйөнә ҡыуып сығарған, ти. Бынан һуң бөтә ауыл камсамулдарына, партийныйҙарға, кулаҡ, мулла өйҙәрен таратып бирәләр имеш. Ялан ауылынан өҫтәрәк Ҡыҙыл һыулап ултырған Ҡыҙыл һартында Яҡуп хәҙрәттең биш бүлмәле арандай өйөн тартып алып, уның ялсыһына биргәндәр хоҙайым. Уныһы хәҙрәт өйөн ни эшләтергә белмәйенсә аптыраған-аптыраған да, бәрәс ояһына әйләндергән, ай-бай, тигән юҫыҡта береһенән-береһе шомлораҡ хәбәр таралды.

Ошо ваҡиғанан һуң мулла-монтағайҙар, ауыл байҙары өйөндә ҡараңғы төшөү менән үк элекке кеүек ғәмһеҙ йоҡоға талманылар, уларҙың бөтә тәҙрә ҡапҡастары екһеҙ итеп бикләнеп, өйҙәрендә шәм ғәҙәттәгенән оҙағыраҡ янды, сөнки уларҙың күңеленә оло шикерт төштө: улар төн ҡараңғылығында бер-береһе менән хәбәр алышты, үҙ-ара

шымсы йөрөттө, фирҡәләр һәм Совет яҡлылар хаҡында ауылдан ауылға уйҙырмалар таратты. Ә Мөхәмәтрәхим иисә йылдар Уйылдан йәшәүенә ҡарамаҫтан, өйҙә һаман ирон, түшәмдәренә тиклем әсе мал еҫе һеңгән тынсыу, тәшош бүлмәлә башы сатнап, тәғәм дә йоҡлай алмай төнө буйы уйланып сыҡты. Үҙ-ара ҡупҡан дәғүәгә ул бик оҙаҡ яуап эҙләне. Сырмалсыҡ фекер ебен тағатып, үҙ улының бала сағын, уның шәкертлек осорҙарын ҡайтанан байҡап сыҡты. Герман һуғышы осоронда Орск өйәҙе түрәләре усына мул ғына аҡса һалып, әрменән аҡ билет менән тороп ҡалған Уйылданының мәҙрәсәлә «эт һуғарып» йөрөүҙәренең ахырында остазы Зәйнулла ишан мәрхүмде алдап ҡасыуын күҙ алдына килтереп, шыбыр тиргә батты.

Мөхәмәтрәхим мулла үҙ ҡуйынында үҫтергән ғәзиз балаһы Уйылдандың киләсәктә уны Түбәнге мәхәлләгә үҙ урынына имам итеп ҡалдырыу ниәте менән һалған тырышлығының елгә осоуына сәбәптәр эҙләне. «Нишләп һуң әле уның һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ һымаҡ ел-ямғыр теймәй үҫкән малайы имамдың хас дошманына әйләнде? Атаҡлы мәҙрәсәләрҙә арҙаҡлы ислам әһелдәренән ғилем алған малайыңдың бөгөн боғаҙыңа йәбешеүенә ни сәбәп? Бәлки, быға мин үҙем ғәйеплемендер? Улай тиһәң уның зиһененә ислам хәдистәрен, шәриғәт ҡанундарын һеңдереү өсөн мин бөкилле ҡулдан килгәнен башҡарҙым шикелле? Түбәнге мәхәлләлә генә түгел, яҡын тирәләге бөтә мосолман өммәтендә минең өсөн унан да яһилыраҡ, унан да хәсисерәк дошман бармы? Юҡ. Дин әһелдәрен, үҙҙәре әйткәнсә, башҡа «һоро ҡорттар»ҙы атырға Уйылдан ҡулына алтатар тотторһаң, валлаһи ғәзим, ул иң башта күҙен дә йоммай минең йәнемде аласаҡ бит. Әллә мосолманды тоғро юлға күндереү өсөн олуғ мәҙрәсәләрҙә ҡөрьән-кәримдең утыҙ параһын[1] үҙләштереп, макәменә[2] килтереп аяттарын уҡыу етерлек түгел микән? Ул баланы тәрбиәләүҙе мин мәҙрәсә мөдәристәренә[3] генә тапшырып ҙур хилафлыҡ эшләнемме?» Бына ниндәй ҡатмарлы сөьәлдәр бирҙе мулла үҙ-үҙенә, бына ниндәй тәрән замана кисерештәре һыҙлатты уның уйланыуҙан ҡан һауған йөрәген.

Ул үҙенең аҡыл һандығын асырға мәжбүр булды. Уйылдан тормошо менән бәйле эреле-ваҡлы ваҡиғаларҙы барлау ниәте менән зиһенен үткән ғүмеренең ун йыллыҡ ҡат-

---

[1] Пара — ҡөрьән-кәримдең һәр ун битен шулай атайҙар. (Ғәрәп.)

[2] Макәм — аят сүрәләрен көйләп, нөсхәһенә еткереп уҡыу. (Ғәрәп.)

[3] Мөдәрис — мәҙрәсә мөғәллимдәре йәғни хәлфәләре. (Ғәрәп.)

ламына улының мәҙрәсә шәкерте булып йөрөгән мөҙҙәтенә йүнәлтте.

3

Иртәнге намаҙҙы ашыҡ-бошоҡ ҡына атҡарҙы ла, Ялан ауылының түбәнге мәхәллә имамы[1] Мөхәммәҙи-Рәхим, ҡулына ҡауырһын алып, мәҡдүб шәриф[2] яҙырға ултырҙы, ләкин уның башына йүнле фекер ҙә, теленә аҡыллы һүҙ ҙә килмәне. Уның һарыуын ҡайнатҡан, яҡты донъяһын, етеш тормошон ҡыйырһытҡан бер мәсьәлә уны күптән, бик күптән борсой. Был хәсрәт иҫенә килеп төшһә, намаҙ доғалары бутала, мөнбәрҙән[3] вәғәз[4] һөйләгәндә телдән яҙҙыра. Уның башын ҡайғы-хәсрәткә юлыҡтырыусы, мәхәлләнең бөтә мосолман йәмәғәте алдында былай ҙа мөсһөҙ генә абруйын бермә-бер төшөрөүсе нәмәнең сәбәпсеһе уның берҙән-бер малайы — Уйылдан мәхзүм[5].

Бына әле лә мулла, үҙ выжданын көс-хәл менән еңеп, ҡаҡ ҡағыҙға» хәреф теҙгәндә, уның күптән инде егермене ашаҡлаған типһә тимер өҙөрҙәй берҙән-бер улы вайымһыҙ, бер һике булып хырылдап, иҙерәп йоҡлай. Ялтыратып ҡырылған башы яҫтыҡтан тәгәрәп төшкән. Табаҡтай ҡыҙыл бите, ҡалын еүеш ирендәре бер яҡҡа салышайған. Тәпәш ултырғыста китап өҫтөнә ҡағыҙ һалып хат яҙырға ултырған мулла, малайының килбәтһеҙ йоҡлап ятыуын күреп, түҙә алманы «Тфү, мәлғүн, хәсис!» тине лә иҙәнгә сарт төкөрөп ҡуйҙы, ысынлап та, ауылда мәғрифәтле генә хисапланған ғаиләгә күп мәшәҡәт, бихисап ҡыҙыллыҡ килтерҙе йүнһеҙ малай. Ҡайҙа ғына «ғилемгә» ебәреп ҡараманылар уны, ни генә ҡыландырманылар! Ҡуян ул тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған кеүек инде. Иң әүәл, иркә үҫкән сибек кенә Уйылданды Бохараның Мир-араб мәҙрәсәһенә оҙаттылар. Ата тубығында ғына ултырған, әлепбей, тей-сейҙе генә өйрәнгән ауыл балаһына Бохараның данлы мәҙрәсәһендә танылған дин әһелдәренән, ғөләмәләренән ныҡлап һабаҡ алырға насип булманы. Бының кеҫәһе ярайһы ғына ҡалын икәнен белеп, төрлө яҡтан йыйылған шәкерттәрҙең иң йорҙары уның төрлө тамашаға — сәйхана, һәр тыҡрыҡта күҙ өҫтөндә шыжла-

---

[1] Имам — мулла (ғәрәпсә).

[2] Мәҡдуб шәриф — хат, сәләм (ғәрәпсә).

[3] Мөнбәр — мәсеттә мулла намаҙ һәм вәғәз башҡара торған бейек урын.

[4] Вәғәз — өгөт-нәсихәт.

[5] Мәхзүм — мулла балаһы.

тып шашлыҡ әҙерләп торған урындарға йөрөттөләр. Тора-бара, кәрт уйнарға өйрәнде. Ә уҡыуының икенсе йылында төхөл шарабын да ауыҙ итә башланы. Атаһынан йыш ҡына аҡса һорап яҙған хаттары мулланың һиҙгер күңелендә бер аҙ шөбһә тыуҙырғайны ла, ләкин мәҙрәсә хәҙрәте Саҙретдин әфәнденән йылы ғына хат килгәс, тағы ла тынысланa төштө. Әлбиттә, уның мәҙрәсәһендә уҡыған ҡайһы бер шәкерттәр ҡала сауҙагәрҙәре, байҙары саҡырған йома намаҙына бармайынса баш-баштаҡлыҡ ҡылыуҙары, ҡөрьән, шәриғәт ҡанундары тарафынан мөхәррәм[1] ителгән эштәргә батырсылыҡ итеүҙәре ишандың оҙон ҡолағына ҡаға-һуға салынып ҡалһа ла, ул эште ҙурға ебәрмәйенсә, баҫтырып ҡалыу яйын хуп күрҙе.

«Бар, әллә ҡайҙа Урал буйы, Ырымбур губернаһының Бөрйән волосында ятҡан муллаға һинең малайың тәртип боҙа, биш рәҡәғәте намаҙын башҡармай, икенсе йыл уҡыуына ҡарамаҫтан, әфтиәктән уҙа алғаны юҡ, тип яҙып ҡара. Ул имам Бохараға ғына түгел, бөтә диниә назаратҡа рисуай һалыр. Унан ни хәйер? Әйҙә, мулла шунда үҙ мәхәлләһе менән булышһын, мәҙрәсә эшенә тығылыусы әтрәгәләмдәр бында ла бөтмәгән» тип фекер йөрөттө ишан хәҙрәте. Бер һабаҡ тыңлатҡан мәлдә Уйылдандың ауыҙынан тәмәке еҫенең борҡоп ултырғанын һиҙеп ҡалды ла, Ҡазый ҡулындағы тал сыбыҡты һыпыра тартып алып Уйылдандың ябыҡ һыртын бер-ике мәртәбә арҡыры-буйын үлсәне һәм мәҙрәсәнән, элеккесә әйткәндә, бер ниндәй шаһәҙәтнамә бирмәй, ҡыуып та сығарҙы. Ун көн тигәндә буйы һонтайып үҫкән, байтаҡ һурыға төшкән, ҡәҙимге һаҡал-мыйыҡ ебәргән Уйылдан, ҡуржынын ҡултығына ҡыҫып, оҙон кәзәкейен һәм ҡырылған башына суҡлы фәс кейеп, «һуп» итеп килеп тә төштө: өйҙә аптырашта ҡалдылар.

Йонсоп ҡайтҡан Уйылданға мулланың ҡарағарышылы өйөнән сығыу ҡәтғи тыйылды. Уның ҡайтып төшөүе тураһында ауылда шипкерт тә һиҙелмәне. Өс-дүрт көн ашатып, эсергәндән һуң уға төҫ керҙе. Кейем-һалымын рәтләп, уны яңы сәфәргә әҙерләй башланылар. Мулла ҡатыны, оҙаҡ ваҡыт өйҙән, ғаиләнән айырылып торған Уйылданды күреп тә туя алмаған Маһитап абыстай, улының тағы ла китәсәген ишеткәс, бөтөнләй ҡайғыға һабышты. Тамаҡтан, йоҡонан яҙҙы. Кис, түшәккә ятҡас, әкренләп кенә ире менән был турала һүҙ башларға ла бер нисә тапҡыр уҡталып ҡуйҙы, ләкин баҙнат итмәне. Үҙ һүҙле, ҡаты бәғерле иренең әсә аһ-зарына ҡолаҡ һалмаясағын ул белә

---

[1] Мөхәррәм — харам ителгән, тыйылған.

ине. Хәйер, унын күҙ сырағы кеүек күргән улына ҡайнар мөхәббәтен ул икенсе төрлө күрһәтергә булды. Таң һары-һында тороп «улым ҡайтҡас һыйлармын», тип мулланан йәшереп һаҡлаған төрлө затлы ашамлыҡтарҙы: кипкән ҡыҙыл эремсек, бәләкәй генә тәпән сейәле май, талҡан ҡушылған һары майҙы ҙур ҡуржынға тултырҙы.

— Мин һине Йәкәтеренбург губернаһы Ялан-Ҡатайҙағы Әлмән мәҙрәсәһенә ебәрәм, — тип иғлан һалған атаһына Уйылдан башын да ҡалҡытып ҡараманы.

Ялан муллаһы уны икенсе мәҙрәсәгә оҙатты.

Өс айҙан һуң мөлкәтен һатып эсеп, мәҙрәсәне күтәреп һуғып, Уйылдан мәхзүм ауылға яңынан ҡайтып төштө.

Бына шуға күрә лә ауылдың имамы Мөхәмәтрәхим, сараһыҙҙың көнөнән, ҡауырһын ҡәләменә йәбеште.

«Қөлһыу аллаһи бари
йыраҡ ернең хәли

Сезки гиззәтле вә хөрмәтле күргечи остазымыз Зәйнулла ибн Хәйбулла Рәсүли ишан хәҙрәтләри без ки ак падишах хезмәтендә йөргечи, бер күреүгә зар-интизар улуб сезләрнең элгәрге шәкертеңез, ошбу көндә Ялан мәхәлләсенең имам мохтасибы Мөхәммәдирәхим ибн Мөхәммәдивәлидән купдин-куп сәләм вә изге теләкләр күндереп, Алланың биргәненә шөкөр, сау-сәләмәт диәрсезләр. Дәхи лә мөхтәрәм хәләл йөфөтеңезгә чукдин-чук сәләм тапшырыңыз.

Ишан хәзрәтләри! Ошбу мәҡдүб шәриф аша сездән түбәнчелек илә үтенәмез: остазымыз, сезләргә мәғлүм ки, бәнем ғәзиз уғлым Уйылдан олуғ мөдрәсәләрҙә — Бохарада мир-араб, Ялан-Ҡатайдағы Әлмәм мәдрәсәһендә вә ғәйре урындарҙа ҙур гөләмәләрдән ғилем алған бала. Әммә Аллаһитағәләнең ихтыяры иләдер имди, ошбу көнгәчә кулына ижазәтнамә алғаны юҡ. Үземезнең күз карасы кеби күргән Уйылдан мәхзүмдән имтиханлар кабул кылыб, берәр мәхәлләдә изге юлда хезмәт кылу өченгә кулына мандат бирсәгез икән. Ошбу турыда Өфө диниә-назараты мөфтие Мөхәмматсафа ибн Ғатаулла хәзрәтләре илә дә сүз улған иде. Уйылдан мәхзүм сезгә кечкенә аманат: бер тәпән сары май вә әзким чәчкә балы тапшырыр. Разыйлар улып кабул кылыңыз.

Дәхи дә олуғ сәләм күндереп, катибеңез Мөхәммәдирәхим ибн Мөхәммәдивәли диәрсезләр.

*1334 йыл Һижри. (1916 йыл)».*

Хатын яҙып бөткәс мулла, сөйҙә элеүле торған кәзәкей кеҫәһенән янсыҡ төбөнә һалынған бәләкәй генә ҡурғаш мөһөрөн сығарҙы. Һуҡыр шәмде яндырып, мөһөрөн шунын

ҡоромо өҫтөндә бер аҙ тотто ла, хатын һул ҡулының усына һалып, шәм утында ныҡ ҡыҙған мөһөрөн, ҡулын бешергәнсе, күрәһең, асыуланып, хатының аҫтына — үҙ ҡултамғаһы тәңгәленә — «шап» иттереп баҫып ҡуйҙы. Хатты бик ҙур иғтибар менән көйләп, Уйылданға уҡып ишеттергәндән һуң, уны бетеү кеүек өскөлләне, конвертһыҙ хатҡа «Троицк получать Зайнулла ишан. Отпичал имам Мохтасип Мухаммадрахим» тип русса адресын яҙып ҡуйҙы. Ҡыланышын ситтән генә диҡҡәт менән күҙәтеп ултырған малайына асыулы ҡараш ташланы ла атаһы уны үҙ янына ултыртты.

— Бына, мәхзүм, ошбу мәҡдуб шәрифне Зәйнулла ишан хәҙрәтләренә яҙырға мәжбүр әйләде бәне Аллаһитәғәлә. Аҡ падишах бөтә Русия ғаләмен алман[1] вә Австрия дөвәл могаззамаларына[2] дәһшәтле дәғүә күтәргәндә син ахмаҡ ошбу суғыштан ҡачып дөхән[3] сурып, Тахәл шарәбе эчеп эт сугарып, тизәк тибеп, бивөзәннәр[4] илә ғүмер үткәрәсең. Әгәр ҙә мәгәр бәнем сүзне колагыңа алмай дәхи дә элгәрге хилаф эшләреңне кабатлайсы улсаң ата йортона кайтып керәсе улма. Бәнем сиңа биғәйбәм юк. Ҡалған ғүмереңне урамда бибәһрә[5] үткәрерсең, — тине.

Мулла, тыштан асыуланһа ла, эстән үҙенең берҙән-бер ғәзиз балаһының ошо көнгәсә бер ниндәй эшкә йоғошмай аҙып-туҙып йөрөүенә ныҡ борсола. Ҡайһы ваҡыт унда йәлләү тойғолары ла уянып киткәндәй була. Йыш ҡына ҡатырғанып өндәшһә лә, улы бер ваҡытта ла баш ҡалҡытып яуапламаны. Бына был юлы ла мулланың «Төшөндөңмө?» тип һорауына Уйылдан, яуап урынына ике ҡулын күкрәгенә ҡуйып, атаһы алдында үҙенең ялтыратып ҡырылған аҡ башын түбәнселек менән аҫҡа эйҙе. Атаның күңеле тулды. Доға ҡылғас, хәйерле сәфәр теләп, икенсе өйгә тайырға ашыҡты. Яңғыҙ ҡалған улы эргәһенә инеп, абыстай, үҙенең бөтә аһ-зарын күҙ йәштәре менән йыуҙы.

Бейек урыҫ ҡапҡаһының асылыуы булды, көймәгә егелгән тройка урам буйлап йомарланып сабып Троицкиға ҡарай юл алды.

Билдәле, Ялан ауылынан сығып, Батша юлына[6] төшөп алғас, Уйылдан, әсәһе менән айырылышыуҙың еңелсә яманһыу тойғоһон алып ырғытырға уйланы. Ҡаты бәғер-

---

[1] Алман — герман, немец.
[2] Ҙур дәүләттәр.
[3] Тәмәке, төтөн.
[4] Тол ҡатындар.
[5] Бәхетһеҙ, өлөшһөҙ.
[6] 1890 йылдарҙа Царевич Рәсәй буйлап сәйәхәт ҡылған саҡта уның өсөн махсус һалынған Ырымбурға бара торған юл.

ле, ҡарун Мөхәмәтрәхим ҡулынан ысҡыныу уға сикһеҙ шатлыҡ булһа, берҙән-бер ғәзиз әсәһен уның ҡарамағына ҡалдырып китеү Уйылдандың тынғыһыҙ китек күңелен бер аҙ борсоған да кеүек ине. Хәйер, был оҙон юл ыңғайында Яйыҡ йылғаһының текә яры буйына, бер-бер артлы ултырған станица, хуторҙарында уның һытылған күңелен асып, кәйеф-сафа күтәрерлек батша кабактары аҙым һайын теҙелеп киткән.

Ялан ауылынан ун биш саҡрым киткәс, арттан атай эҙәрләп килмәйме, тигән шикелле көймәле арбанан башын тығып ҡараны ла Уйылдан беренсе осраған трактир эргәһендә туҡталырға әмер бирҙе. Трактирҙың бейек болдоронан, юлбарыҫ шикелле бер-ике һикереп инеп киткән шәкерт, ярты сәғәт ваҡыт үткәндән һуң, алһыуланып тирләгән биттәрен ҡулына йомарлап тотҡан фәсе менән һөр-һөртә ишектән килеп сыҡты ла ауа-түнә арбаға килеп ултырҙы. Көймәгә инеп, уның төбөндә ятҡан күн мендәргә башын терәгәс тә, бер ҡараһаң, атаһын эттән алып эткә һалып һүкте, икенсе ҡараһаң, ауыҙ эсенән генә кәйефе килгәндә әйтә торған үҙенең мөнәжәтен һуҙҙы.

Башта Уйылдан трактирҙарға ингәндә әсәһенең кәзәкейенең эске ҡатына ике-өс урынға тегеп ебәргән Николайҙың көмөш аҡсаларын тотондо. Көндәр буйы йә эсеп, йә баш төҙәтәм, тип ҡыҙара бүртеп шытып килеү өсөн Маһитап абыстайҙың мулла саҙаҡаһынан йыйыштырған ғына сәрмәйәһе етмәне. Ул көймә артына бәйләнгән ике ҙур тәпәнде сисеп ергә төшөрҙө лә Верхнеурал баҙарында туҡтап, маҡтай-маҡтай Мөхәмәтрәхим мулланың ишанға аманат итеп бағлаған бал-майын һатырға тотондо. Тик бейек тәпәндәрҙән эйелеп, бал-майҙы һоҫоп алырлыҡ рәте ҡалмағас ҡына, бының был шөкәтһеҙ ҡылығына хайран ҡалып, кузлала ултырған Ғәбделбарыйға balға батҡан ҡулдарын кәзәкей салғыйына һөртә-һөртә килбәтһеҙ рәүештә шарҡылдап көлдө.

— Ярай, ишан балһыҙ-майһыҙ интегеп ултырмайҙыр әле, тәпәндәр төбөндә ун ҡаҙаҡ самаһы бал-май ҡалды. Троицкиға оло йома көнө барып инергә тейешбеҙ. Мөхәмәтрәхим имамдың остазына үҙ мөриттәре менән йыйылып, йома сәйе эсергә лә етер, — тип мығырланы тәпәндәрҙе яңынан ултыртып бау менән сырмап маташҡан Уйылдан.

Бындай ғибрәтте ғүмерендә күрмәгән Ғәбделбарый «Йә хоҙай, боронғолар аманатҡа юҡ хыянат, тип әйткәндәр, ләхәүлевәлә... был гонаһ мәхзүмдең үҙ башына ғына булһын инде» тип юл буйы белгән генә доғаһын уҡыны. Ул бигерәк тә баш ташлап йән-фарман сабып барған го-

һаһыҙ аттарға бинахаҡтан хоҙайҙың ҡәһәре теймәүен үтенде. «Мына-мына аяҙ көндә күк ҡабағы уртаға шартлап ярылыр ҙа был хайуандарҙы йәшен атып ҡуйыр», — ошо ҡурҡыныс уй бөтә булмышын солғап алды. Ул, энербауҙарын ысҡындырып, юл буйына шундай дәһшәтле яза көттө, ләкин Троицк манаралары ялтырап күренде, ә Ғәбделбарыйҙың күккә ҡарай-ҡарай көткән язаһы былар көймәһен ситләтеп үтеп китте. «Иншалла, тәңре яҙлыҡты» тип был хәлгә хайран ҡалып килгән күсер яңынан эңербауҙарын бәйләне, кузланан төшөп, аттың тамаҡ бауҙарын ныҡытты, арҡалығын күтәрҙе.

Оло йома көнө ишандың мосолмандарҙы ҡабул итеү көнө булғанға күрә, уны табыу артыҡ ҡыйын булманы. «Мосафирхана» эргәһендәге матур бина ихатаһында ишанға инеп, фатиха алырға теләүсе йөҙләгән мосолмандарҙың сираты баҙар кеүек мыжғып тора. Уйылдан да юлда таушалған кәзәкейен төҙәткеләп, сиратҡа баҫты. Ишек төбөндә тәртип һаҡлап торған хәлфә, бөтә кеше ишетерлек итеп, иғлан ҡылды.

— Хөрмәтле мосолмандар! Ишан хәҙрәттәрен донъяуи ғәмегеҙ илә йонсотмағыҙ, ул наукастап, йәғни сирләп тора, килтергән саҙаҡаларығыҙ ҡағыҙ аҡсанан ғибәрәт булһа, ҡулына тоттороғоҙ, көмөш аҡсаларығыҙҙы уның алдындағы тәрилкәгә һалыуығыҙҙы үтенәбеҙ.

«Быға әле саҙаҡа ла бирергә кәрәк икән?» тип Уйылдан, һуңғы көмөш аҡсаһын тигәндәй, ҡартайып ныҡ ҡына ҡаужыған, әммә әле ҡарашы һүнмәгән, өҫтөнә алтын төймәле кәзәкей кейгән, яурынынан бөкрөһө сыҡҡан ҡарт алдындағы тәрилкәгә аҡсаһын ырғытты ла өҫтәлгә мулланың мәҡдуб шәрифен һалды. Ҡырлы танауы өҫтөнә төшөп килгән күҙлеген ябыҡ ҡына бармаҡтары менән өҫкә күтәрҙе лә ишан үҙенә тәғәйен хатты уҡыу өсөн эргәһендәге хәлфәгә һондо. Мулланың ҡайнар сәләмдәре ишанға һәм уны уратып алған кешеләргә бер нисек тә тәьҫир итмәне. Киреһенсә, һүҙ имамдың улы хаҡындағы үтенескә күскәс, ишандың ҡаҡса бите, бауы сиселеп аҫҡа шылып төшкән сарыҡ ҡуңысы шикелле, сырышты. Тик хаттағы «аманат» һүҙе генә уларҙы бер аҙ йәнләндереп ебәрҙе.

— Ошбу көндәрҙә ҡаштарым тартып йөрмәктә инем, имам аманатын татымаҡҡа насип булған икән, бик бишарәт [1], — тине бер аҙ сырайы асыла төшкән ишан. — Бу, бәрәкаллаһ, мәхзүм илә ни ҡыламыз? — тип ҡырында ултырған кешеләргә һорау менән мөрәжәғәт итте.

---

[1] Бишарәт — шатлыҡлы хәбәр.

— Мулла һораған ижазәтнамәне ҡулына бирергә лә әйҙә, юлында булһын!

— Имтихандан ғәйереме?

«Имтихан» һүҙен ишеткәс, быны тыңлап торған Уйылдан аҫтына шыр ебәрҙе.

— Ишан хәҙрәттәре! Бохаралағы Садретдин ишандың данлыҡлы Мир-араб мәҙрәсәһендә олуғ ғөләмәләрҙән ғилем алып, ҡөрьәнде мөттәҡыйн[1] белгән мәхзүмдән имтихан алып ултырыу хилаф булмаҫмы?

— Һис тә муафиҡ түгел!

— Эйе лә һуң! Был әфәнде үҙенең тышҡы ҡиәфәте, бөтмөш рәүеше илә ошбу сәғәттә үк мулла булып бөтөп тора бит, ҡулына ижазәтнамә тоттороп, фатиха бирәйек, хаҡ мосолмандар, — тип шаулашты тиҙерәк йома намаҙын тамам ҡылып, бәлешкә вә ғәйре мөһимерәк тамашаға ашыҡҡан хәлфә халҡы. Ә һуңғы һүҙҙе әйткән мыҡты кәүҙәле иң йәш хәлфә күкрәген киреп, хәҙер үк мулла булырға әҙерләнеп, «эш беште» тип торған Уйылданға күҙ ҡыҫты.

Ишан үҙ мирзаһын[2] саҡыртып, ижазәтнамә тултыртты ла, мөһөрөн баҫып «Йә, хәйере илә улсин, тәңрегә бимәләл[3] хеҙмәт ҡылың, әдикәңез жибәргән бәхешне[4] бәнем катибым илә абыстайға тапшырың» тип алтын бутал менән биҙәкләнгән ҡағыҙҙы Уйылданға һуҙҙы.

Эске тулҡынланыуҙан ни әйтергә белмәгән Уйылдан ҡағыҙҙы бөкләп кәзәкей кеҫәһенә тыҡты.

— Амин, хәҙрәт! Алланың рәхмәтендә булығыҙ! — тине лә асыҡ ишеккә атланы.

Ике буш тәпәнде дыңғырлатып абыстай келәтенә ҡуйғас, Уйылдан шул минутта уҡ Зәйнулла ишандың араҡы магазинында баш төҙәтеп, ҡайтыр юлға сыҡты.

Уйылданға шундай мөғжизәләр менән алып ҡайтҡан шаһәҙәтнамәһенең изгелеген күреп, имам мохтасип булараҡ, мәхәллә мөнбәренә менергә насип булманы. Донъяның аҫтын-өҫкә килтергән инҡилап[5] уның яҙмышын да икенсе юлға бороп ебәрҙе.

Мөхәмәтрәхим мулла үҙ мәхәлләһенең үлгән, яңы тыуған кешеләрен теркәп барған китабына: «Бер мең туғыҙ йөҙ ун етенсе йыл һикһән алты йәшендә икенсе февраль пәнжшәмбе[6] көн Троицк өйәҙе Туңғатар волосы Шә-

---

[1] Мөттәҡыйн — берәр нәмәне һис шикһеҙ яҡшы белгән кеше.
[2] Мирзаһын — секретарь, яҙыусы.
[3] Бимәләл — арымай-талмай хеҙмәт итеү.
[4] Бәхешне — күстәнәс, аманат.
[5] Инҡилап — революция, түңкәрелеш.
[6] Пәнжшәмбе — кесе йома.

рип ауылы шәйех Зәйнулла ибн Хәбибулла Нәҡышбәнди ишан хәҙрәтләре дәрелфанадин дәрелбаҡыға рихләт[1] әйләде. Аллаһы тәғәләнең рәхмәтендә улсин», тип теркәп ҡуйҙы. Олуғ рәхмәт йөҙөнән ул үҙ остазының шәжәрәһен дә ҡағыҙға төшөрҙө. «Зәйнулла-Хәбибулла-Рәсүл-Муса-Байрамғол-Ғашиҡ-Солтанай-Морат Тупай-Ураҙғәле-Яңшы-Ятаби». Мөхәмәтрәхим мулланың улы Уйылдан менән Зәйнулла ишанға күрһәткән һуңғы мәрхәмәте ошо булды.

4

Мөхәмәтрәхим мулла әйтмәксе, «мәҙәниәт» юлынан, ә халыҡ телендә — муллалыҡтан ваз кискән үҙ улын йорт араһында, үҙенең йомош юлында, файҙаланырға хәл ҡылды... Тамам ата ҡулына ҡарап ҡалған Уйылдан башҡаны талап та итмәне. «Башы аҙып-туҙып йөрөмәһен» тип уға ауылдың иң фәҡир, өйөндә һыйыр мөгөҙөнә элерлек тә мөлкәте булмаған кешенең күҙгә-башҡа күренмәй ултырған Сәғилә тигән ҡыҙын йәрәштерҙеләр. Ҡаҡса ғына битле, мөлдөрәп торған дөм-ҡара күҙле, йоҡа ғына кәүҙәле өнһөҙ-һүҙһеҙ Сәғилә яңғыҙлыҡта интеккән Маһитап абыстайға тыңлаулы ғына килен дә, унан бигерәк, яҡын әхирәт тә булып алды.

Мулла өйөндәге һыйлы тамаҡ: майлы бәлеш, һимеҙ бишбармаҡ, зимагорлыҡ холҡон ташлап, атаһының мал-тыуарын, кәртә-ҡураһын ҡарарға ихлас йәбешкән Уйылдандың йылы ҡосағы Сәғиләгә килеште. Ярты йыл үтеүгә арыҡ кәүҙәһенә ҡәҙимге ит ултырып, йомро бисәгә әйләнде. Уның ҡаҙ ботло балтырына һыймаған ситеген, яурынбаштары йөйөнән һүтелә башлаған кәзәкейен, бишмәтен яңынан тектереп бирҙеләр. Аҡшам намаҙы уҡып, сәждәгә киткән Мөхәмәтрәхим мулла, килененә күҙ ҡырыйы менән ҡарап, «Бәхете бар зимагурҙың. Бирә бит хоҙай биргәненә, ниндәй күркәм йәмәғәт булып китте. Теге ваҡыт икенсе ҡатынлыҡҡа үҙем генә һоратаһы булған. Бына хәҙер ҡарт күңелде елкендереп, күҙ ҡыҙҙырып тик йөрөй» тип тә ҡуя. «Ни намаҙын йүнләп уҡып булмай, ни ҡулға эш бармай. Ҡалымын күберәк ысҡындырһаң, бирмәй нишләрҙәр ине тиһең. Уйылданға бисә табылыр ине әле, улай-былай әйләнгәнсе, уның дәртенең дә һүнеп ҡалыуы бар бит әле». Шунан, ҡапыл ғына үҙ гонаһынан ҡурҡып, башына килгән был боҙоҡ уй, йәнәһе лә, уныҡы

[1] Рихләт — фани донъянан кешенең үҙ асылына ҡайтыуы, үлеү. Әйләнде китте.

түгел, иблестеке, тип, биш намаҙ доғаларын ижтиһадлыраҡ уҡып, баяғы иблесте ҡыуа, гонаһын юя. Ләкин күпме генә тырышмаһын, уның был фекере башында ниндәйҙер нурлы эҙ ҡалдыра...

«Эх, әллә берәр йүнен табып, самалап ҡарарға инде?» Ләкин «әрвәлутсиә сығып», уның көслө шауҡымы Ялан ауылына ла килеп еткәс, мулла-монтағайҙар ҡойроғон ҡыҫты. Уның ҡарауы, ошоға тиклем өнһөҙ-һүҙһеҙ йәшәгән балалары телгә килде. Улар беренсе булып активҡа, комсомолға яҙылдылар ҙа, үҙ аталарын йәмәғәт алдында, газета биттәрендә фаш итергә тотондолар. Уйылдан да рамазан айында ғәйеткә йыйылған халыҡ алдында бейек мәсет болдоронан мәҙрәсәләрҙә уҡыған китаптарын йыртып, елгә осорҙо. Намаҙға килгән ауылдаштары алдында атаһын фашланы.

Уйылдандың был «егетлеге» Мөхәмәтрәхим өйөндә язаһыҙ ҡалманы. Ҡыҙыулыҡ менән сәлләһен ҡыйыш кейеп, саған таяғын ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, елпелдәтә баҫып өйгә килеп ингән мулла әле япраҡтарына ҡырау тейһә лә, тамыры шаҡтай ныҡ ағас шикелле, Уйылдандың ҡоро һөрәненән генә йығылып бара торғандарҙан түгел ине. Ғүмерендә байтаҡ ел-ямғыр күргән, үҙен ил уҙаманына һанаған кеше бит әле. Ул күҙе аларып өйгә йүгереп килеп инде лә, түр башта төшкө аш ярактырып булашҡан киленен эткеләп ҡуйҙы. Түшәк йыйылған һандыҡҡа арҡаһын терәп, мулланың күҙлеген кейеп, Бәдеүәм уҡып ултырған абыстайға таяғын ырғытты.

— Барығыҙ, сығып китегеҙ! Күҙемдән юғалығыҙ! Мал балаһын аҫраһаң, ауыҙ-морононоң май итер, әҙәм балаһын аҫраһаң, ауыҙ-моронондо буҡ итер, тип боронғолар белмәй әйтмәгән! Әрәм тамаҡтар!

Бындай ғилләне тәүләп күргән Сәғилә мейескә һырына-һырына, бәләкәй һикелә төкөрөгөн сәсеп сисенеп маташҡан ҡайныһынан күҙен алмай, тышҡа һыпыртты. Йыйылған түшәккә арҡаһын терәп, күҙ йәштәрен эске түшелдереге менән һөртөп, нишләргә белмәй аптыраныи торған абыстайын ашарҙай булып ҡысҡырҙы мулла.

— Бына ошбу көндән алып мин мәхәлләлә хужа түгел, ана һинең уйнаштан тыуған зимагур улың хужа.

Маһитап абыстай ҙа әкренләп телгә килде.

— Ни булды һуң? Хоҙайым, йүнләп кенә төшөндөрөргә булмаймы? Әллә берәй бәлә-ҡазаға юлыҡтыңмы?

— Бәлә-ҡаза аяҡ аҫтында ятҡан. Ул бәләне беҙ, һинең менән ике алйот, үҙ башыбыҙға ҡуйыныбыҙҙа үҫтергәнбеҙ. Ошбу сәғәттән башлап мин ул эттән тыуған игелекһеҙ ләғнәт менән бер өйҙә йәшәп, бер табаҡтан ашай алмайым.

Ана, бөкилле мөлкәтен ҡултығы аҫтына ҡыҫтырһын да, бисәһен етәкләп, теләһә йәһәннәмгә китһен!

— Ҡем һуң улар?

— Киленең менән ғәзиз балаңдан башҡа беҙҙең өйҙә тағы кем бар?

Ҡайтанан ниҙер һорарға абыстай баҙнат итмәне. Ҡаршы ҡунаҡ өйөнән буй-буй балаҫ сығарып, иҙәнгә йәйҙе лә Уйылдан менән Сәғиләгә тейеш иҫкереп бөткән бер һары самауыр, ике пар ҡоршаулы сынаяҡ, ятып-тороп йөрөргә ырп-ярп түшәк, арлы-бирле өҫ кейемдәрен төрөп, ишек төбөнә ҡуйҙы.

Улы мәҙрәсәнән алып ҡайтҡан кәштәләге китабына тотонғайны, сисенеп, ҡарты ҡапыл һикереп торҙо.

— Бынан кире аслан китаптарға оронма! Уйылдан хәсискә китап тотоу — гонаһ! Үҙе уҡыған китаптарын бөтә ғәләм алдында елгә осороуы ла еткән, — тип ҡысҡырҙы.

— Улай-былай иткәнсе мал өйөндә йәшәп торорҙар, — абыстай иренең үрә торған шыртын ыңғайына һыпырып ҡараны.

— Теләһәгеҙ нишләгеҙ! Теләһәләр, ана, ат һарайында торһондар! Унда минең хәбәрем юҡ! Әммә башҡаса үҙе лә, бисәһе лә минең алдымда күҙ көйөгө булып йөрөмәһендәр!

Ошо көндән башлап йәш ғаиләнең төйәге ике бәләкәй генә тәҙрәле, яртыһы ергә һеңгән мал өйө булды. Тәүге сабыйҙары Алмабикә лә ошо ҡараңғы өйҙә тәү тапҡыр яҡты донъяға күҙен асты.

Был ваҡиғанан һуң Уйылдандың атаһына нәфрәте көсәйгәндән-көсәйҙе. Улар бер-береһенә хас дошманға әйләнде, бер-береһен тереләй тотоп ашау хәленә килеп етте. Мулланың ҡара-ҡаршы ҡарағай өйө була тороп, яңғыҙ улының яңы тыуған балаһы менән мал өйөндә йәшәүе үҙ мәхәлләһендә Мөхәмәтрәхим мулланың абруйын бермә-бер ҡаҡшатты. Ғүмер баҡый үҙ мөнбәренән изгелекле, кешегә инсафлы булыуҙы тылҡыған мулла үҙ вәғәзен үҙе аша атланы. Мәсеткә йөрөп ғибәҙәт ҡылыусылар араһында ла муллаға ҡарата мөнәсәбәт үҙгәрҙе. Билдәле, быны өсөн ҙурыраҡ, сәйәси сәбәптәр ҙә юҡ түгел ине. Мәсет манараһына менеп, таң һыҙылып атҡанда, тәрәүех көндәрендә динде данлап, «Әлбиҙаҡ» әйткән ауыл йәштәрен яңы ойошторолған комсомол ячейкаһы үҙенә тартты, сөнки уның алыҫ офоғонда бығаса күрелмәгән үҙгәрештәр, быуаттар буйы халыҡтың аңын быуып, күҙен томалап килгән дин, мосолмандың аяҡ-ҡулын бығау менән бикләп килгән шәриғәт ҡанундарына ҡаршы яңы, көслө дауылдың килеүе төҫмөрләнә ине. Уйылдан да Сәғиләһе менән шулар ар-

тынан эйәрҙе. Шулай итеп, үҙ атаһына булған асыуынан ҡапыл икенсе юлға, замана юлына, ҡайырылған Уйылдан «мәхзүм» ислам диненә булған үҙенең мөнәсәбәтен «ете ҡат ер аҫтына» йәшерҙе.

«Ҡамсамул»дарға эйәреп тә Уйылдан артыҡ эш ҡыра алманы. Күрәһең, йәш сағында мәҙрәсәнән мәҙрәсәгә йөрөп алған мәғлүмәте нисек кенә һай булмаһын, Уйылдан күңелендә — эҙ, мейеһендә бураҙналар ҡалдырмай үтмәгән. Йәш саҡ — йәш инде! Ни тиклем генә иждиһатһыҙ уҡыма, барыбер хәлфәләр көнө-төнө туҡыған. Ҡөрьәнкәрим сүрәләре, аят-доғалар Уйылдан зиһенендә уйылып ҡалған. Ул ҡайҙа ғына бармаһын, нимәгә генә тотонмаһын «бисмиллаһыҙ» эш башламаны. «Ҡамсамулдар менән ҡуша: «Йәшәһен Совет власы, бөтһөн буржуазия», тип йырлап йөрөһә лә, кис, өйөнә ҡайтҡас, тәһәрәт алды, намаҙ ҡалдырманы. Совет законддары иғлан иткән азатлыҡ, ҡатын-ҡыҙҙарҙың тигеҙлеге яңылыҡҡа ҡарағанда ныҡ сәлек, шәриғәт ҡанундарының бизмәне уның күңелендә һәлмәгерәк тартты. Шуға күрә лә ул ике юл сатында тороп ҡалды.

Ауылдағы комсомол башлығы Өмөтҡужин Мөхәмәтнурҙың өгөтөнә бирелеп, ул комсомолға ғариза бирҙе. Ләкин «сәс толомдарын төбөнән көҙәп, тубыҡ тиңенән күлдәк кейеп тыҙаңлап йөрөгән ҡыҙҙар менән ҡуштап ултырғыһы» килмәне. Күпме генә «яҡшылыҡ»ҡа ынтылмаһын, бисәһе Сәғиләне лә «аҙа, боҙола» тип улар тирәһенә яҡын ебәрмәне.

* * *

Бына шулай итеп, оло ниәттәр, изге өмөттәр менән тыуған ауылына кире әйләнеп ҡайтҡан Абдрахман Игебаев, үҙ ихтыярынан ғәйре, бына ниндәй ғаиләгә юлыҡты, ниндәй кешенең ҡапҡаһына килеп тәртә башы терәргә мәжбүр булды.

## 5

Обручевка менән Ялан араһы түтә юлдан алтмыш саҡрымдар самаһы булыуға ҡарамаҫтан, Абдрахмандың ауылдаштары уның бер нисә йыл буйы рус байындағы шөғөлөнөң асылын бер аҙ һиҙенәләр ине.

Орлоҡ тейәп ҡайтҡан Ғәлиәкбәр ҡарт тоғон тотоп килгән берәүгә: «Бына, белеп сәсегеҙ, был орлоҡто Абдрах-

ман биреп ҡайтарҙы. Ярай әле, бәхетегеҙҙән Абрашауҙа Абдрахман тап килде. Әгәр ки ул булмаһа, һуйһаң ҡаны сыҡмаҫ рус казагынан алыр инең атаң башын», тип һөйләнде.

Бәләкәй арбаға һалып орлоҡ алып ҡайтыусы ҡайһы бер олораҡ кешеләр «Әбделғәлим ҡарттың анауы ғәскәрҙән ҡайтҡан малайы шул тиклем байыған, ти, хатта сәсмәгә орлоҡ таратып ята» тигән хәбәр таратты. Ә ҡайһы бер аңлыраҡтары «Юҡ, ул беҙгә кредитҡа тигән игенде кулактарҙан йыйып биреүҙә генә ҡатнашҡан» тип төҙәтергә маташты.

Нисек кенә булмаһын, Обручевканан ауылына ҡайтартҡан бойҙайға фәҡир-фоҡара Совет власына ысын күңелдән рәхмәт уҡыны. Күреп-белгәндәр Абдрахманға иҫәнлекһаулыҡ теләне, «яҙған малдың ҡасан да булһа бер үҙ тупрағына кире әйләнеп ҡайтыуын көттө». Был изге хәбәр ҡаға-һуға Әбделғәлим ҡарт ҡолағына ла етте. Абдрахман ебәргән «көрпәсәтке» ондан майлы ҡоймаҡ ашап алғас, ҡарсығы алдында ул хатта борсаҡ шыттырырға өлгөрҙө.

Бер нисә көн Абдрахмандың исеме ауыл халҡының теленән төшмәне. **Ләкин Ялан кешеләренең** барыһы ла берҙәй маҡтап телгә алманы. Уның исеме менән ауылдың күпселек өлөшө үҙенең киләсәк тормошон бәйләргә тырышһа, ошоға тиклем Яңы Иҡдисади Сәйәсәт күләгәһендә мал арттырып, ҡорһаҡ бүрттереп ятҡан ауыл байҙары, мулла-монтағай уға бәдбәхет уҡыны. «Күрҙеңме, теге бәлшәүиктәр ҡойроғо Абдрахман, яҡшынан яман тыуған, ауылдың бөкилле ҡыутомшоғона иген таратып, мул тормошҡа сығармаға ята икән». «Үҙ ғүмерендә бер түбәтәй иген сәсмәгән өйөрлө ыштанһыҙ алған игенен ҡурмас ҡурып ашап бөтөр ҙә ас үңәсен хөкүмәттәренә ҡайтанан һуҙыр». «Әгәр ҙә мәгәр ошо Мысыр хәйерселәре быйыл Күбань бойҙайынан икмәк ашай торған булһа, ошо башымды заклад һалам!» — Ғәйнулла бай усының ҡыры менән йыуан елкәһен ышҡыны.

Ҡайһы саҡтарҙа ҡаҙаҡсараҡ ебәрә торған Фәйзулла хажи:

— Усы бөттө адәм нан жиәтен буса осман ортаға жарылатын екен, — тип мыҫҡылланы.

Шулай итеп, Обручевканан килгән бер ылау сәсеү орлоғон бүлеү Ялан ауылы кешеләрен ҡап уртаға бүлде.

Тик егерме беренсе йылғы йоттан имен-аман сығып, яңы сәйәсәттең тәьҫире аҫтында үҙ хужалыҡтарын бер аҙ тәртипкә һалып, бер нисә дисәтинә иген сәскән, арыуыраҡ тормош көтә башлаған кешеләр генә, үҙҙәре әйткәнсә, «ул яҡты ла, был яҡты ла тотмай, ике уртала ҡалдылар. Ун-

дай «думахәжәйендәр» үҙҙәренең һиҙгер ҡолаҡтарын ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла борҙо, ике яҡтың да елпеүен тойҙо.

Абдрахмандың мулла өйөндә оҙаҡ ятырға самаһы юҡ ине. Ул бер кис ҡунды ла, таң һарыһынан ат эйәрләп, волосҡа сапты. Иренең юлға әҙерләнеүен күреп, Маргарита: «Вахит менән мине лә алып бар, Апполинарий Христофоровичты күреп ҡайтыр инек», тип күҙ йәше менән бик ялынһа ла, Абдрахман ваҡыт тарлығына һылтанды.

— Бына бер аҙ баш-күҙ алғандан һуң, иркенләберәк барып ҡайтырбыҙ

Ҡапҡа асылыуын ишетеп, төндә йоҡлар-йоҡламаҫ үткәргән Мөхәмәтрәхим, тамағын ҡыра-ҡыра ҡатаһын һөйрәп, елбәҙәк көйө тышҡа сыҡты. Абдрахмандың бүртә бәхмисе[1] торған һарай буш икәнен шәйләп, «Таң һарыһынан был бәлшәүик ҡайҙа һыҙҙырҙы икән?» тип шомланды. «Бына әҙәмдең ихласы шулай була инде ул. Белов ҡартта үҙ ғүмерен эт һуғарып уҙғармағанға оҡшай. Һай сос, йылғыр» тип уйлап алды ла, үҙ йомошон башҡарып, мал өйөнә йүнәлерҙән алда, улының ишеген төртөп ҡараны.

Тәҙрә ҡапҡастарын ябып, солан ишегенә арҡыры типке һалып, йәштәрҙең бер ни белмәй ҡаты йоҡлап ятыуҙары мулланың асыуын килтерҙе. Былай ҙа талағы ташып, кемдән үс алырға белмәй йөрөгән хужаға етә ҡалды. Уйылданы хырылдай... Аталары «тороғоҙ, атаңа ләғнәттәр, ҡабырғағыҙ серегерҙәр» тип аҡыра-аҡыра ҡатаһы менән ишекте тызыны.

Ыштан-күлдәксән генә болдорға йүгереп сыҡҡан Уйылдан, ҡурҡышынан нишләргә белмәй ялан аяҡтары менән торған урынында бейеп алды ла күҙҙәрен ыуа-ыуа атаһына ташланды.

— Ниңә шул тиклем урам ярһып ҡысҡыраһың? Ҡотороп бараһыңмы әллә?

Аҫта саған таяғын төйгөсләп торған мулла:

— Анауы Абдрахман әшнәңде ҡара тандан ҡайҙа оҙаттың? — тип йәнә аҡырҙы.

Атаһының асыуын ҡабартҡан сәбәптең ниҙә икәнен тиҙ генә төшөнөп алған Уйылдан:

— Мине уға ҡарауылсы итеп ҡуйҙыңмы ни? Ҡайҙа йөрөһә лә үҙ ирке, — тине лә, ишекте шарт ябып, өйөнә инеп юғалды.

— Һеҙгә шул ике донъя һыуалла, өйөрлө ғәмһеҙ ялҡау, әйҙә, ихатағыҙҙы берәй афәт ялмағансы ятығыҙ, мәлғүндәр, — тип ҡарғай-ҡарғай ҡарт та мал өйөнә йүнәлде.

---

[1] Бәхмис — йөрөк толпар, һомғол, бейек ат.

Ҡабат түшәгенә ятып торманы. Һике мөйөшөнә ултырҙы ла иртәнге намаҙын да уҡымай тәсбихенә йәбеште. Тиҫбенең һалҡын төймәләре йәнен бер аҙ тынысландырғандай, уның ҡайнаған мейеһенә аҡыл сафлығы өргәндәй тойолдо, ләкин «был бәлшәүик ләғнәттең ҡайҙа олағыуы мөмкин?» тигән борсоулы һорау һаман бәғер итен өҙгөләне.

Бер нисә сәғәттән Абдрахман ҡара тиргә батҡан атын партияның волком бинаһы алдындағы ҡоймаға килтереп терәне. Ул бейек болдорҙан йүгереп тигәндәй менде лә туп-тура волкомдың яуаплы секретары кабинетының ишеген асты.

Бәләкәй генә ике тәҙрәһе баҡсаға ҡараған бүлмәлә ҡырылған башын яурынына ҡырын һалып, оло йәштәрҙәге берәү ниҙер яҙып ултыра ине. Ул, ҡоршаулы күҙлеген маңлайына күтәрҙе лә ишектән ингән мыҡты кәүҙәле таныш түгел кешегә ҡарашын текәне. Танау аҫтында сал керә башлаған ҡалын мыйығын яҙылдырып йылмайғас:

— Йә, егет, ни йомош? Һине кем тип беләйек? — тип һораны.

Абдрахман ҡулындағы ҡамсыһын йыйып тотто ла, хәрби кешеләрсә кәүҙәһен турайтып:

— Мин Ялан ауылынан Игебаев Абдрахман булам. Бына Ҡыҙыл волосынан кисә генә ҡайтып төштөм дә һеҙҙең ҡарамаҡҡа килдем, — тип һаңғырауыраҡ яуап ҡайтарҙы.

Яуаплы секретарь, талдан үрелгән креслоһын шығырлатып, урынынан һәлмәк кенә торҙо ла башта йәшел френчын, галифе салбарын төҙәтте, шунан һуң ғына ишек ағына иҙән уртаһынан йәйелгән балаҫ буйлап Абдрахманға килеп күреште. Абдрахмандың ҡулын ҡыҫып, уға оҙаҡ ҡына һынаулы ҡараш менән текләп торҙо.

— Йә, иптәш Игебаев, һөйләп ебәр. Иртүк юлланғас, йомошоң бик мөһимдер. Ниҙәр алып килдең? — Волком секретары үҙ урынына ултырҙы ла ҡыҙыл буҫтау менән ҡапланған өҫтәле ҡырына Абдрахманды саҡырҙы. Ни өсөндөр уны Игебаевтың был яҡтарҙа һирәк осрай торған тышҡы ҡиәфәте, көрәктәй ике ҡулы араһында әүәләгән күн картузы ҡыҙыҡһындырҙы.

Бүлмәләге ярлы ғына күренеште ҡарап, күңеле бер аҙ тынысланғас, Абдрахман «Волком секретарының кабинеты ла, үҙе лә Обручевка советыныҡына ҡарағанда күпкә ҡайтыш, секретарҙың өҫтө-башы ла ҡойто ғына күренә», тип уйлап алды, уның ямалған терһәгенә ҡарап. Игебаевтың текләүенән уңайһыҙланыпмы, волком хужаһы төҫөн юя башлаған френчының еңдәрен тартҡылап, күҙлеген өҫтәлгә һалды.

— Мин, ағай кеше, ысынлап та, ҙур йомош менән килеп сыҡтым, — тине Абдрахман ҡарашын аҫҡа текәп.

— Иптәш Туҡыбаев, тип һөйләшәйек. Мин бында, һинең шикелле үк, күптән түгел генә Тамъян-Ҡатай кантонынан ебәрелгән яңы кеше, — тине лә волком секретары Игебаевты диҡҡәт менән тыңларға әҙерләнде.

Ул ентекле, оҙон хәбәр көттө, ләкин килеүсе үҙенең тәржемәи хәлен, һөйләр ҡиссаһын сомторлап та өлгөрҙө. Ҡалған мәғлүмәттәрҙе волком секретарына әкренләп һығып алырға тура килде.

Тәүҙә хужа өҫтәл ситендәге еҙ ҡыңғырауҙы ҡулына алып, бәләкәй генә бүлмәһен яңғыратып, шылтыратып ебәрҙе. Шундуҡ хәрби кейемдәге ыҫпай ғына егет килеп тә инде.

— Бына иптәш Рәжәпов үҙе була инде. Минең боевой урынбаҫар: сәркәтип тә, машинистка ла, йәнә волкомдың ике атына хужа, — тип көләмһерәп ҡуйҙы.

— Был иптәш Ялан ауылынан Игебаев Абдрахман булыр. Үҙеңдең кенәгәңдә ҡарап ал әле, хисап карточкаһы килеп еткәнме, юҡмы? — тине.

Абдрахман «йәп-йәш кенә — ниндәй өлгөрөм, сос егет» тип уйларға ла өлгөрмәне, Рәжәпов, ишектән башын тығып:

— Юҡ, иптәш Туҡыбаев, килеп етмәгән әле, — тип яуап бирҙе.

— Ярар, ничауа. Килеп етер. Былай ғына һөйләшә торайыҡ.

Ул казачийҙар ауылында Абдрахмандың ни менән шөғөлләнгәнен һәм нишләп унда барып сығыуы менән ҡыҙыҡһынды.

— Ялан — бик боронғо, ошо тирәлә иң ҙур ауылдарҙың береһе. Мәгәр, граждандар һуғышы осоронда ҡыҙылдар фронтына артыҡ күп ир-егет бирә алманы. Уның ҡарауы, ул ауылдың байтаҡ йәштәре, Әхмәтзәки Вәлидовҡа ҡушылып, Колчак яғында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыштылар.

Ошо урында яуаплы секретарь башын ҡалҡытып, Игебаевҡа мәкерле генә ҡарап ҡуйған төҫлө тойолдо.

Абдрахман һиҫкәнеп ҡуйҙы, шаҙралы битенең ҡаны ташып, сикәһе ҡыҫылды. «Әллә был ялтыр башлы әҙәм минең Колчак армияһында буталғанды беләме?» тигән шөбһәле уй йәшен тиҙлеге менән уның мейеһен тишеп үтте. Уның: «Етте, иптәш Туҡыбаев, оҙаҡ сурытмайыҡ, мин дә башта Колчакта булған кеше лә», тип ҡысҡырғыһы килде.

Туҡыбаев, Абдрахмандың кисерештәрен белгән төҫлө:

— Билдәле, хәҙер беҙ фәлән кеше ҡасандыр Колчакта

йөрөгән тип, уға яла яғып, ғәйепләй алмайбыҙ. Ундай факттың һәр ҡайһыһын ентекләп тикшерергә, аныҡларға кәрәк. Уларҙан Колчак армияһына көсләк менән алынып, аҙаҡтан аямай ҡыҙылдар яғында һуғышып йөрөүселәр ҙә етерлек, — тине.

Игебаевтың йөҙөндә һиҙелеп ҡалған һөрөм шәүләһе ошо һүҙҙәрҙән һуң нурлы сырай менән алмашынды. Ул, бөтөнләй тынысланып, «Донъя күргән кешегә оҡшай, төплө фекер йөрөтә» тип һығымта яһаны.

— Шулай ҙа, иптәш Игебаев, Яланда төпләнергә ниәтең булғас, һин бер нәмәне бик яҡшы белеп торорға тейешһең. Һеҙҙең ауыл — мулла-монтағайҙар, байҙар, һоро ҡорт ояһы. Элек ул ауылда есаул, харуньялар хөкөм һөрһә, хәҙер хажиҙар, мулла-байҙар хакимлыҡ итә. Ауыл халҡының күбеһе, үкенескә ҡаршы, шулар ауыҙына ҡарап тора. Йыйылышта совет сәйәсәтенең асылын волост работниктары ауыҙынан ишетеп ҡайта ла кис, күҙ бәйләнгәс, хажи, байҙарға кәңәшкә йүгерә. Ауылда уларҙың сәйәси вә ижтимағи тәьҫире көслө. Бына һин унда бөгөнгөһө көндә берҙән-бер коммунист, үҙең тирәһендә ауыл йәштәрен актив туплап, шул һоро ҡорттарҙың умыртҡа һөйәген һындыра һуғырға, аңһыҙ халыҡты улар тырнағынан ҡотолдороп, үҙебеҙҙең ҡанат аҫтына алырға бурыслыһың. Эшсән халыҡтың улар бығауында биклəнеп ятыуына сик ҡуйырға кәрәк.

Секретарҙы туҡтатырға баҙнаты етмәгән кеше шикелле, Абдрахман әкрен генә һүҙ ҡыҫтырҙы.

— Иптәш Туҡыбаев, бөгөнгө көндә ауылда партячейкаһы ла төҙөлмәгән әле уның. Актив, бигерәк тә комсомолдар араһынан алдынғы йәштәрҙе һайлап алып, коммунистар һанын ишәйтеп, партячейка ҡороп ебәреү шулай уҡ бик мөһим мәсьәлә тип уйлайым.

— Әлбиттә, әлбиттә, бик дөрөҫ.

— Хәҙергә һине ауылығыҙҙа ячейка булмау сәбәпле, Хәлим партия ойошмаһына беркетергә тура килә. Ҡыйын булһа ла, башта шунда эшләп алырға кәрәк. Һигеҙ саҡрым күп ара түгел. Хәҙергә бына шул формыла эшләп ятабыҙ. Волостың бөтә ауылдарында ла партячейка төҙөү мөмкинлеге юҡ. Улар күбеһенсә бер нисә ауылды берләштерә. Урал өлкәһендә, нисә әйтһәң дә, пролетариат тәьҫире көслө булыу арҡаһында, был эш алдыныраҡ тора. Беҙҙә, үҙең күреп тораһың, әле хәҙергә ҡараңғылыҡ көслө. Халыҡ совет законына ҡарағанда күберәк ахундың шәриғәт законына, совет сәйәсәтенә ҡарағанда ҡөрьәндең аят-сүрәләренә ҡолаҡ һала. Совет власы ҡатын-ҡыҙҙарҙың хоҡуғын ирҙәр менән тигеҙләүҙе күптән иғлан итеүгә ҡарамаҫтан, йәше тулыр-тулмаҫ ҡыҙҙарҙы ҡалым менән көсләп, кейәү-

ғə биреү факттары, ə совет ҡояшының яҡтылығы төшмəгəн ҡайһы бер ауылдарҙа ҡалын ҡатлап кешелəрenең шəриғəт ҡанундарына һылтанып, үҙ бисəлəре өҫтөнəн йəш ҡыҙға өйлəнеү факттары тулып ята. Əле бына кисə генə Ҡушый ауылының йəше ун алтыға ла етмəгəн бер ҡыҙ балаһын биш баш йылҡыға, егерме баш кəзə-һарыҡ хаҡына көслəп бер бай балаһына тағып ебəргəндəр. Бына был боронғонан ҡалған серегəн ғөрөф-ғəҙəттəрҙе алға һөргəн, совет закондарын һанға һуҡмаған кешелəрҙең ҡойроғона ныҡ ҡына баҫырға кəрəк. Бына был беҙҙең көн үҙəгендəге бурыс.

Секретарҙың был һүҙҙəрен ҡеүəтлəгəндəй, «Дөрөҫ һүҙ йөрөтə секретарь, əйтерһең дə, былаҙың барыһын да Ялан ауылына барып, ҡарап торған» тип уйланы Абдрахман.

— Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул, ҡусты кеше. Ошоға тиклем вайымһыҙлыҡҡа бирелеп, зерə оҙаҡ яттыҡ. Ең һыҙғанып тотоноу фарыз, ауылда яңылыҡҡа юл ярыуҙы мына һеҙ, коммунистар, етəклəргə бурыслы. Хəҙер үк инеп, теге егеттəн комсомол билеттары алып ҡайт. Уларҙың һанын берҙəй ишəйтергə, был ойошманы Совет власының ауылдағы көслө таянысына əйлəндерергə кəрəк. Шулаймы?

— Шулай, бик дөрөҫ.

— Яңылышмаһам, комсомол ячейкағыҙҙы ла, моғайын, шул биш-алты кешелер инде. Шундай ҙур ауыл өсөн ул һан сиктəн тыш аҙ, етерлек көс түгел, уларҙың һөрəне манаранан аҙан ҡысҡырған мəзин ауазынан да көсһөҙөрəк.

— Йəмғеһе алтау.

— Бына күрҙеңме? Моғайын, яртыһы шул элекке бай-мулла балалары инде, дөрөҫ əйтəмме?

— Дөрөҫ.

Абдрахман тиҙ генə Ялан комсомолдарын күңеленəн барлап сыҡты. «Ячейка башында хажи малайы Мөхəмəтнур тора, иң активтары булып Ғəлимйəн хажи ҡыҙы Сафия, Мөхəмəтрəхимдең Уйылданы... Ə мин шул мулланың күрнəсəһендə йəшəп ятам» тип сəйер генə йылмайып ҡуйҙы. Лəкин ул үҙен борсоған һорауҙы бирмəй түҙə алманы:

— Иптəш Туҡыбаев, башҡа ячейкаларҙа эш нисектер, уныһы миңə мəғлүм түгел, əммə бына беҙҙең ауылдағы комсомол башында мулла-бай балалары беркетелгəн, хəҙергесə əйткəндə, оялашҡан тиһəк тə ярай. Һеҙ быға нисек ҡарайһығыҙ?

Волком секретары башта ирендəрен бөрөштөрҙө. «Ə һин үҙең нисек уйлайһың?» тигəн шикелле мыйыҡ аҫты-

нан мәкерле генә йылмайҙы ла ҡырылған башындағы ҡарайып үҫә башлаған шырт сәсен тырнап алды. Шунан оло һүҙгә кереште.

— Һорауың, иптәш Игебаев, бик урынлы. Ул хәл һеҙҙә генә түгел, волостың башҡа ауылдарында ла шул уҡ күренеш. Колсомол сафына киң ҡатламдан килгән, тип уларҙы бөгөн генә комсомол сафынан ҡыуа башлаһаҡ, ул сәйәси хата булыр ине. Уларҙың комсомолға тәү башлап килеүҙәре лә бик үҙенсәлекле бит. Беренсенән, улар ауылдың башҡа йәштәренә ҡарағанда күпкә уҡымышлыраҡ, шуға күрә уларҙың сәйәси һиҙгерлеге лә башҡаларға ҡарағанда етдиерәк, сөнки уларҙың уҡып, ғилем алыу өсөн мөлкәте лә, форсаты ла булған. Ә ярлы балаһына ҡайҙан килгән ти ул ундай мөмкинселек? Уҙа барһа, бер-ике йыл мәҙрәсәлә ятып — мөғәллим әл әүүәл китабы. Шуға күрә, елдең ҡайһы яҡтан өрөүен улар башҡа кешенән алдараҡ тоя. Ундайҙар тураһында һүҙ барғанда ҡайһы бер икенсе яҡтарҙы ла хисапҡа алмау дөрөҫ булмаҫ ине. Эш шунда: ундай йәштәрҙең күбеһе үҙ аталарының башына һеңгән, һөрһөп бөткән ғөрөф-ғәҙәттәр, ҡөрьән, шәриғәт закондарын ғаиләлә үҙ елкәләрендә беренсе булып татыған, шуға күрә лә ул хан заманындағы догмаларға, закондарға, тип әйтәйекме, беренсе булып ризаһыҙлыҡ белдереп ҡаршы сыҡҡан кешеләр. Раҫ икән, ундай йәштәр — дин һөрөмө менән ағыуланған аталарының беренсе дошмандары. Синфи көрәштең асылы ла шунда: халыҡ мәнфәғәте, ярлылар мәнфәғәтен күҙәтеү, Совет власының сәйәсәтен ғәмәлгә ашырыу өсөн барған синфи көрәш атаны-улды, инәне-ҡыҙҙы танымай. Уның төбөндә, нигеҙендә килешә алмаҫлыҡ сәйәси-идеологик ҡапма-ҡаршы принцип ята. Шулай булғас, мин был мәсьәләне хәл ҡылырҙан алда ул кешенең ҡайһы һыҙыҡта тороуын беренсе нәүбәттә хисапҡа алыр инем. Бына, ҡустым, ҡыҫҡаса һин биргән һорауға яуап һәм беҙҙең позиция. Аңлашылалыр бит?

— Так точно. Аңлашыла.

— Так точно булһа, бына эш ошо сүрәттә тора, — волком секретары, һүҙен бөткәнгә хисаплап, бөхтә итеп сиртелгән ҡалын мыйығын һыйпап ҡуйҙы, әйтерһең үҙенең һуңғы һүҙен ауыҙын ҡаплай башлаған мыйыҡ осонан һыпырып төшөрҙө, ләкин, Абдрахман хушлашырға тора башлағас, ҡулы менән уның яурыны башына баҫып, яңынан ултыртты.

— Туҡта, туҡта, сабыр итеп тор, — тип ул өҫтәл йәшнигенән бер бит ҡағыҙ сығарҙы, күҙлеген кейеп, алдында ятҡан яҙыуға күҙ йүгертеп сыҡты. — Эйе, эйе, шулайҙыр, тип уйлағайным да. Тап шулай. Һеҙҙә ошо көнгә ҡәҙәр

ҡатын-ҡыҙҙар советы ойоштоторолмаған. Ул хаҡта бөтә комсомол һәм партия ячейкаларына кәрәкле күрһәтмә бирелгән. Ҡайт та шуға тотон. Был советка ирҙәрҙең яғаларынан тотоп һелкерлек уҫал, сая ҡатын-ҡыҙҙарҙы табығыҙ. Ныҡлаңҡырап ҡараһаң, беҙҙең ауылдарҙа ундай, баҫҡан һайын табанынан ут сәсеп йөрөгән ҡатын-ҡыҙ бар ул. Ағымдағы моменттың иң мөһиме — бына үксәгә баҫып килгән яҙғы сәсеү кампанияһын уңышлы үткәреп ебәреү. Һин казактарҙа ул эште үҙ елкәңдә татыған кеше, иртәгәнән башлап, ваҡытлыса бер бәләкәй генә агрокружок ойоштороп ебәрегеҙ. Мин хәҙер волость башҡарма комитетына әйтермен, әгәр волость агрономы бер яҡҡа сығып китмәгән булһа, иртәгә һинең артыңса уҡ барып етер. Тартыу көсө етмәһә, ауыл кулактарын ҡыҫмаҡҡа алығыҙ, ҡара сәүкә ише йылҡыһының тиҙәге төшөп ҡалмаҫ. Баш тартһалар, күҙ күрер. Бер һүҙ менән әйткәндә, һинең шикелле батырҙарҙы көрәш майҙаны көтә, көрәш, ҡаты көрәш! Ҡурҡма, ҡыйыу тотон. Беҙҙең эшебеҙ изге, ғәҙел. — Һуңғы һөйләмде волком секретары бик тулҡынланып, баҫып әйтте. — Хәҙергә хушлашайыҡ. Яҙғы сәсеү ваҡытында барып сығырға тырышырмын. Ялан ике өлкәнең сигендә ятҡан иң алыҫ, оло ауыл. Унда эште ҙур ойошҡанлыҡ менән башлап ебәреү — бөтә волость өсөн бик мөһим буласаҡ. Хуш.

Секретарь өҫтәл аша Игебаевҡа ҡулын һуҙҙы.

Абдрахман бик кисләтеп, атын талыҡтырып ҡайтып төштө. Эйәренә ҡағылып-һуғылып, етмеш-һикһән саҡрым ара үтеүгә ҡарамаҫтан, үҙ тәнендә бер ниндәй ҙә талсығыу тойғоһо һиҙмәне, киреһенсә, гүйә волость үҙәгендә ҡанат ҡуйғандар — өйгә дәртләнеп килеп инде. Маргарита иренең иҫән-һау ҡайтып төшөүенә сабый бала һымаҡ ҡыуанды. Шунан докторы хаҡында берәй төрлө хәбәр көттө, ләкин Абдрахман: «Маргарита, ваҡытым булманы», тигәс, бүлтәйергә уйлағайны, иренең үҙен бер үбеүе булды, үпкә һыҙаттарының эҙе лә ҡалманы.

— Йөрөйһөң шунда кеше ҡужғытып. Мин генә түгел, ана, мулла ағай ҙа һине һорашып, өйгә әллә нисә ҡат кереп сыҡты.

— Ай-һай, минең мулла алдында баҙарым бик күтәрелгән икән, үҙенә аҙансы итеп алырға самалайҙыр ахыры.

Ире көләмһерәне, асҡан ауыҙын өҫкә күтәреп, ике ҡулы менән ҡолаҡтарын һуҙҙы ла ҡалын тауыш менән мәзиндәрсә:

— Аллаһуәкбәр, аллаһуәкбәр... — тип ҡысҡырҙы. — Манараға менһәм, килештерәм икән.

Абдрахман бер-ике сынаяҡ ҡына сәй эсте лә Ғәлиәкбәр

ҡартҡа йүгерҙе. Ишетһендәрр тигән шикелле, уның тупаҡ өйөнөң соланы алдында түшәлгән яҫы ташты шаҡылдатып, итек табандарын таҙартты.

Түр башында һауыт-һабаа шылтыратып йөрөгән хужабикәнән ишектән инер-инмәҫтән:

— Еңгә, ағайымды ҡайҙаа ҡуйҙың? Бик кәрәк ине бит әле, — тип өтәләнде.

— Атаҡ, атаҡ, быңа бер ҡыҙыҡ бәндә, мынауындай кәүҙәң менән ишек төбөндә мосафирҙай тормаға, әйҙә, ҡәйнеш, түргә уҙ, хәҙер самғауыр шажлатып ебәрермен.

Ҡурмас бойҙай еҫен һиҙеп, Абдрахман «Ғәлиәкбәр ағай, эх, сельски, һин дә симәнәндде ҡурып ашарға йәбешкәнһең икән» тип күңелһеҙ генә уйлап алды. Етмәһә, усаҡ көлдөксәһендә майланған сүлмәк, һикегә һөйәп ҡуйылған ике ҡул тирмәне ташы тора. «Эште Ғәлиәкбәр ағайҙың үҙенән башларға тура килә былай булғас».

Абдрахман үҙ урынынан ҡуҙғала башланы. Хужабикәнең түрбашта самауырына йәбешкәнен күреп, Игебаев ҡырҡа арҡыры төштө.

— Юҡ, юҡ, еңгә, буш мәшән булма. Ҡабаланам.

— Ҡитсе, китсе, ошо ҡәйнеш ут алғандай ҡабаланыр ҙа йөрөр. Хәҙер ағайың ҡайтыр. Әбдрафиҡ ҡайнағалар мунса тандырына саҡырғайны. Мынауы хөкүмәт эше тип бигерәк йонсоп китте бит ағайың. Ҡоймаҡ та ҡойғайным, — хужабикә яулыҡ осо менән япҡан битен Абдрахманға борҙо.

— Һиҙеп торам, еңгә, — тине Абдрахман, көләмһерәп.— Һи, хөкүмәт эше ҡоро һылтауҙыр, үҙең йонсотҡанһыңдыр әле ағайымды.

— Тоторһоң ағайыңдың ҡойроғон. Уның өйҙә ҡыл да ҡыбырлатмағанын белмәйһең шул. Һин түгел ул һуйылдай бисәһенә көйәнтәләп һыу ташырға...

Был һүҙ Абдрахманды һыуыҡ һыу менән ҡойондорғандай булды. «Ауыл халҡынан йәшереп, берәй нәмә эшләп ҡара! Килеп төшкән көнө Ҡыҙылдан ике биҙрә һыу алып ҡайтҡайны. Эте лә һиҙмәгән кеүек ине. Быңа һиңә кәрәк булһа. Ауылға таралып та өлгөргән».

— Ирҙәргә һыу ташыу, еңгә, бер ҙә гонаһ түгел. Ана, урыҫ яғында бисәләренә һыу ташыуҙан ирҙәренең бер нәмәһе лә төшөп ҡалғаны юҡ. Бисәләре рәхмәт уҡып ултыра.

— Ҡитсе, китсе, ишү йылмайып ҡарап торған була. Ташыһындар. Ул яҡта, бәлки, ғәҙәт шулдыр. Улар суҡына тип беҙгә лә суҡынырғамы ни?

Өй хужаһының ысын күңелдән шелтәләүенә Абдрахман рәхәтләнеп көлдө генә.

Әллә нисә урындан ямалып бөткән киндер күлдәге өҫтөнән яғаһыҙ сәкмән һалып, ах та ух ҡартлас ҡайтып инде. Ул һикегә ултырыр-ултырмаҫтан, самауырына ҡуҙ һалып маташҡан бисәһенә йәбеште.

— Ошо шамтыр еңгәң бер нәмәгә өлгөрә алмай башланы әле. Мунсанан ҡайтырҙы белеп тора — самауырын да ҡайнатып ҡуймаған.

Абдрахман ҡапыл урынынан торҙо ла:

— Ағай, әйҙә, советҡа ҡуҙғал, кәңәш бар, — тип, иркенләп сәй эсергә йыйынған хужаның уй-байына ҡуймай, үҙ артынан эйәртеп, алып сығып китте.

...Абдрахман, ябыуһыҙ өҫтәл ҡырына ултырып, һүҙен башланы.

— Бөгөн һине волосҡа юлланған, тип ишеткәйнем, ысын хәбәр булған икән, — тип, Ғәлиәкбәр тәпәшәк тәҙрәгә терәлеп торған урындыҡҡа ултырҙы.

«Бәй, волосҡа китеүем хаҡында Маргаританан башҡа бер кемгә лә әйтмәгәйнем».

— Эйе, бик ашығыс ҡына волосҡа барып, Туҡыбаевты күреп ҡайтҡас, тауҙай мәшәҡәттәр йөкмәтеп ҡайтарҙы волком секретары.

Абдрахман үҙенә һау күҙе менән текәлгән Ғәлиәкбәргә эшләнәһе эштәрҙе теҙеп сыҡты.

— Ай-һай, ҡусты, үҙәккә барып, мөһим яңылыҡтар алып ҡайтҡанһың икән әләйһә,ниҙән башлайбыҙ?

— Минеңсә, бөгөн үк, кисекмәҫтән ауыл активын, комсомолдарҙы саҡыртып, кәңәш беркетеп алыу кәрәк. Ауыл мөғәллиме Әлимғәфәровтың булыуы мотлаҡ. — Абдрахман түш кеҫәһенән дәфтәр сығарып, исемлек сыймаҡлай башланы: — Мөхәмәтнур, Сафия, Уйылдан... Актив йыйылғансы, Ғәлиәкбәр ағай, һин үҙеңдең төп кенәгәңде алып, ҡарап ебәр әле — ошо көнгә тиклем твердый налог һалынған кемдәр хөкүмәт алдында бурыслы икән? Ошо сәғәттә үк сельсоветҡа саҡырып, бурысын шаҡарып алырға кәрәк уларҙан.

— Уны, ҡусты, төп кенәгәнән ҡарайһы юҡ. Барыһы ла башта. Кисә генә налог төшкән ауыл байҙарын өй беренсә йөрөп сыҡтым. Налог түләү түгел, йүнләп һөйләшмәйҙәр ҙә. Барыһы ла яҙға ҡарай бөтөнөп сығыуҙарына зарлана, көҙ байына шылдырырға маташа, — тине Ғәлиәкбәр күңелһеҙ генә.

— Ә һуң нишләп һин дәүләт һалған налогты, мосафир шикелле, өй беренсә йөрөп, һорап йөрөргә тейешле? Сельсовет кәнсәһе ни өсөн? Улар менән ошонда айҡашырға кәрәк. Ҡайҙа, яңынан әйтеп сыҡ әле, кемдә күпме бурыс?

— Өмөтҡужин Ғәлимйән — ике йөҙ илле һум да алт-

мыш биш тин көмөш, Өмөтҡужин Фәйзулла — йөҙ етмеш тәңкә, тине юҡ, Хәйруллин Ғәйнулла бай — өс йөҙ илле тәңкә, тине юҡ...

— Ғәйнулла байҙың бурысы үҙенең йылҡыһы тәкәбе-леһе икән, һәр башын берәр тәңкәгә һатһа ла, быға тиклем күптән хисаплашыр ине. Өмөтҡужин Ғәлимйән үҙегеҙ бы-йылғы Ҡыҙыл йәрминкәһендә генә утыҙ баштан артығы-раҡ йылҡы һатты, тип ултыраһығыҙ. Аҡсаһын ҡайҙа ҡуй-ған?

— Эй, тапҡан болдоң нимәгә сарыф булыуы бөтә ғә-ләмгә мәғлүм инде.

— Ҡайҙа сарыф булған? Нимә хажиҙы ла үҙ ҡана-тың аҫтына алырға самалайһың? Әллә аҡсаһын үҙең ме-нән бүлештеме? — тип ысҡындырҙы ла Абдрахман үҙ һү-ҙенән үҙе оялыбыраҡ ҡуйҙы.

— Ҡуй әле, ҡустым, туҙға яҙмағанды сәйнәп ултырма. Минә ҡарағанда, ул һиңә яҡыныраҡ туған да, бәлки, һин беләһеңдер ағайыңдың аҡса хисабын?

Ҡарт, Абдрахманға үпкә белдереп, ҡабырғаһы менән әйләнде.

— Ничауа, ағай, хәҙер бында саҡыртып, ҡыҫмаҡҡа алып ҡарайыҡ әле. Ни һөйләр икән?

— Ҡуй, ҡустым, ахмаҡланма, тик торғанда йә бәлә сығарырһың, ул сельсовет ишеген аша атлаған бәндә түгел, бында килеп, икебеҙҙе лә түбәләп китмәҫ тимә, уға бер ниндәй ҙә инабат юҡ. Уның үҙ законы үҙендә, яйына ҡарап түләр әле, буш менән булашмайыҡ, ҡустым, — тип Ғәлиәкбәр ҡарт ҡурҡышынан бөршәйә башланы. Был иһә Абдрахманды сәмләндерҙе генә.

— Эх, ағай, ағай, ул рәүешле ауыл кулактарынан бо-ҫоп ятып, совет власын ҡороп булмай ул. Уларҙың бында килеп, баш һалыуын көтөп ултырһаң, ҡалған сәсең аға-рыр.

Абдрахман сикәһе ағара башлаған Совет рәйесенең осло кәбән шикелле башына ҡараш ташланы.

— Улай булһа, ҡустым, үҙ мәйелең. Теләһәң ни эшлә. Әммә мин Ғәлимйән хажи менән хәҙергә яғалашмаҫҡа кәңәш бирәм, бәлки, мынауы эктифтәр йыйылғас, сүтәки күмәк кеше алдында саҡырырбыҙ — ҡулын да, телен дә тыйнағыраҡ тотор.

— Хәҙер үк саҡырт, ҡайҙа берәр малайың?

Абдрахман урынынан торҙо.

— Ярар, алай өҙмәй ҙә ҡуймағас, һинеңсә булһын, — ҡарт урамға **сығып китте.**

Ғәлимйән, ҡустыһы уйлағанса, саҡырыусы артынса уҡ, кәнсәгә килеп инмәне. Бер аҙҙан уны саҡырырға ебәргән

малай урам буйлап илап ҡайтып инде. Уны күреп, Абдрахмандың ҡапыл төҫө үҙгәрҙе, шаҙра битенең төрлө урындарында тош-тош ҡыҙыл таптар ҡалҡты.

— Һөйлә, нимә маңҡаң ебеп, күҙеңде шәмәртеп тораһың? Хажи нишләне? — тип аҡырҙы Абдрахман, алдында хажи үҙе баҫып торғандай.

Малай, еүеш танауын мыршылдатып тарта-тарта:

— Кил әле, мин һиңә сольсовет күрһәтәйем, тип эргәһенә ултыртты ла сикәләп сығарҙы, — тине шыңшый-шыңшый.

Уның шул хәбәре етә ҡалды — шинелен кейә-кейә Абдрахман хажиҙар өйөнә йүгерҙе. Артынан сығып, Ғәлиәкбәр ҡарт туҡтатырға маташты:

— Абдрахман, Абдрахман, тием, йөрөмә, тик торғанда бер ғауға ҡуптарырһың.

Абдрахман хажиҙың абалап сыҡҡан этен осора типте лә йүгереп тигәндәй парад ишек яғынан өйгә инеп китте. Ике яҡҡа асмалы ишекте шартылдатып тибеп асҡас, бәләкәй өҫтәл артында тәмәкеһен борҡолдатып, ниҙер төҙәтеп ултырған хажиҙың яғаһына йәбеште.

Үҙ ғүмерендә бындай хәлде күрмәгән Ғәлимйән башта ҡойолоп төштө, иҫенә килгәс, яғалашырға ла самаһы юҡ түгел ине, ләкин хәленән килмәне — ул һуйҙайып ята ине инде. Өҫтөнә атланып ултырған Абдрахман уның ялбыр ерән сәсенән тотоп, суйындай ауыр башын иҙәнгә ике тапҡыр бөтә көсөнән шаҡылдатып бәрҙе лә:

— Еттеме, сволочь, әллә тағы кәрәкме? — тип төкөрөктәрен сәсеп ажғырҙы.

Аяҡтарын тырпыратып, аҫта ятҡан хажи:

— Самосуд, разбой! — тип яр һалды.

Оло бисәһе, бала-сағаһы сыр-сыу килеп Абдрахмандың арҡаһынан йәбеште.

Хажи еүешләнгән йәшел күҙҙәренән ут сәсеп:

— Пшол... Бында эҙегеҙ булмаһын! — тип ҡарлыҡҡан тауыш менән ҡысҡырғайны, тегеләре ел өргән шикелле юҡ булдылар.

Бер аҙ ятып тынысланғас, Ғәлимйән:

— Абдрахман ҡусты, әҙәм алдында мәсхәрә итмә! — тип ялбарҙы.

Абдрахман уның өҫтөнән етеҙ генә торҙо ла күтәрелә алмай иҙәндә ятҡан хужаға ҡулын һуҙҙы.

Хажи иҙәндән һеңгәҙәп кенә тороп, кире урынына барып ултырҙы. Бер аҙ йөҙөн боҙоп, йомолған күҙҙәрен асып, маңлайына һуғылған үгеҙ һымаҡ башын бер нисә тапҡыр сайҡап алды ла күҙ йәше менән иларға тотондо.

Иҙәндә аяҡ үрә торған Абдрахман бер аҙ ҡаушап

ҡалды. «Әллә ҡатыраҡ бәрелеп ташланым инде, имгәтеп ҡуймаһам ярар ине, бәләнән баш-аяҡ» тип уйланы.

Башын түбәнгә эйеп, һыңҡылдап ултырған хажи, танауы йомшарып, сәсәгәнсе йүткереп алды ла турайып ултырҙы. Абдрахманға ҡарамай ғына:

— Ни атлы ҡаҙаҡ һымаҡ күҙ алдында һерәйеп тораһың? Йомошоң булһа, ултырып һөйләш, бәлшәүик ялсыһы, — тип ҡырлы танауын шаңҡайтты ла элекке рәүешенә ҡайтты, ҡалтыраған һәйкәлдәй артҡа ҡайҡайғас, папирос ҡабыҙҙы. — Йә, ни йомош? Ул ниткән ятыр алдынан Совет аласығына саҡырып, әҙәм бимазалап ятаһығыҙ? Советығыҙҙың осҡалағы тотоп ыҙалатамы әллә? — тип ерән мыйығы аҫтынан мыҫҡыллы йылмайҙы. — Әгәр советығыҙға ясин уҡырға саҡырһағыҙ — хатта тәһәрәтһеҙ йүгерәм.

Абдрахман үҙен тыя алды.

— Совет власы ҡарыулана башлаған икән. Елегенә, күрәһең, әҙерәк май ҡунғандыр. Ялан ауылында совет власын урынлаштырам тип, бисмилла урынына ағайың яғаһына йәбешеүҙән башланыңмы ни? Совет власын, ҡустым, мирный гражданиндарҙы туҡмап урынлаштырмайҙар уны. Остазығыҙ Ленин шулай ҡушамы? Эт! Ғәйепһеҙ кешеләрҙе туҡмап, аҡса йыйырға тигән яңы закон сыҡҡанмы әллә? Ошолай ҡулыңды һерәндәтһәң, оҙаҡҡа бармаҫһың, төтөмөң күпкә сыҙамаҫ, — тип хажи оҙон ғына лөғәт һөйләп алды.

«Көнө-төнө араҡы эсеп, төрөпкә һурып ултырһа ла, үҙенә тигәндә ҡайһылай ҙа дөрөҫ һөйләй, мәлғүн, һис кенә лә ҡаршы һүҙ әйтерлек түгел, был әҙәм ошо ваҡиғаны бик оҫта итеп файҙаланыуы ла бар әле» тип Абдрахман үҙ эсенән бик әсе үкенде.

— Һуңғы твердый налог һалымы ике йөҙ ҙә илле һум да алтмыш биш тин бирәсәгеңде хәҙер үк сельсоветҡа тапшыр. Әйтмәнеләр, тип аҙаҡтан сәйнәнеп йөрөмә, ҡолағыңа киртеп ҡуй, — Абдрахман һәр һүҙенә баҫым яһап, һеңдерерлек итеп әйтте лә ҡуҙғала башланы.

— Ә Абдрахман өйөмә баҫып инеп, иҙәнгә йығып туҡманы ла аҡса таптырҙы, тип пыркарурға ялыу төшөрһәм, нисек булыр?

— Уныһы — һинең эш. Мин һинең ошағыңдан өркөп, ҡылған эшемдән баш тартып, тайҡала торған кеше түгел.

— Уныһы беҙгә мәғлүм инде. Ояһында ни — осҡаны шул. Ул яҡҡа китһә, беҙ икебеҙ ҙә ҡашығаяҡ шалтырағандан өркөп бара торғандарҙан түгел. Атаҡлы Ййҡар тоҡомонан беҙ, ата-олаталар — бөркөт беҙҙең. Да... бөркөт... Ултыр әле, ниңә шул тиклем ҡабаланаһың? Яңы ғына ҡай-

тып төшкәйнең, тип ишеткәйнем, хәл-әхүәлендә һөйләп сыҡ, — тине хажи бөтөнләй тынысланған ҡиәфәттә.

— Ваҡыт юҡ. Ҡәнсәгә кеше йыйғанбыҙ.

— Күреп торам: ни тиклем ыуаланһағыҙ ҙа, Ғәлимйән хажиҙан башҡа эшегеҙ бармай, ахыры. Советский арбағыҙ күсеренән батып ултыра, өйөрлө хәйерсе тейәлеп алғас, шулай була ул. Уны һөйрәргә лә кеше кәрәк. Әле яңы ғына бер маңҡағыҙ килеп, Сафияны кәнсәгә саҡыртып, ҡултамға алып китте. Бик ҡыҙыу тотонмаҡсыһың әле, ҡустым. Ауыр күтәреп, билеңде биртендереп ҡуйма.

— Ничауа. Беҙҙең бил ауыр күтәреп сыныҡҡан ул. Үҙеңдең билеңде ҡара. — Абдрахман да бирешергә теләмәне. — Хуш, кәнсәлә аҡсаң менән көтәбеҙ.

— Ярай, ярай, көтөгөҙ. Бөгөндө һинең кеше өйөн баҫып, безвинный кешене туҡмаҡ сығыуыңды совет власының тәүге еңеүе тип хисапла, хәйерсе! — тип ҡысҡырҙы хажи ул япҡан ишек артынан.

Күп тә үтмәй ҡултығы аҫтына дүрткел ҡумта ҡыҫтырып, Ғәлимйән сельсоветҡа килеп инде. Уны күреү менән Ғәлиәкбәр, ҡәҙерле ҡунаҡты ҡаршы алған шикелле, урынынан һикереп торҙо, аптыраштанмы, ҡурҡыуҙанмы өтәләнеп, урынында зыр әйләнеп ҡуйҙы.

— Ай, маладис, Ғәлимйән хажи Советҡа үҙе аяҡ баҫты ла баһа, ҡалай ҙа хуп, ҡалай ҙа килеште, — тип сөсөләнде рәйес.

Абдрахман асыуынан рәйесте һуғып осорорҙай булды.

Ғәлимйән, кәнсәгә йыйыла башлаған активист йәштәр булыуға ҡарамаҫтан, һаулыҡ та һорашып торманы, ҡумтаһын йоҙағынан тотҡан килеш, рәйес өҫтәленә ултыртты. Ә үҙе стена эргәһендәге эскәмйәгә барып ултырҙы. Өҫтөндәге ауырлыҡҡа зарланғандай, йышылып бөткән иҫке эскәмйә ауыр тауыш сығарып шығырланы. Ҡәнсәләге бөтә кеше ялтыр тимер менән көпләнгән ыҡсым һандыҡҡа төбәлде, ләкин башлап һүҙ ҡатырға бер кемдең дә баҙнаты етмәне. Үҙенән бер-ике кеше аша Сафияның да бында ултырғанын күреп, Ғәлимйән хажи йәшел күҙҙәренән ут сәсеп, уны баштан-аяҡ һөҙөп ҡарап алды. Атаһының асыулы ҡарашынан оялыпмы, Сафия оҙон ҡуңыслы ботинка кейгән аяҡтарын эскәмйә аҫтына йәшерҙе.

Иң башта Абдрахман телгә килде.

— Хажи ағай, тексәйеп тик ултырабыҙ. Ул һандығыңда ниҙәр бар һуң? — тип һораны.

— Советҡа беҙҙең байлыҡ ныҡ хәжәт. Ошо һандыҡта барлыҡ мөлкәтем ята, шуны һалым урынына тапшырырға килдем. Атай-әсәй мәрхүмдәрҙең мираҫы... — тине хажи, ҡаты көрһөнөп.

«Атайым, ысынлап та, өйҙә күҙ ҡараһы шикелле һаҡлаған һандығын килтереп, тапшырмаға ултыра микән ни? Ошоға ҡәҙәр беҙҙе ул һандығы тирәһенә яҡын да ебәрмәй торғайны ла баһа». — Сафия атаһының был ҡылығына ғәжәпләнде.

— Ул һандығынды асып, эсендәге мөлкәтте ҡарарға рөхсәтме, хажи ағай? — Абдрахман тыйнаҡ ҡына һорап ҡуйҙы, сөнки үҙ-ара тағы бер ыҙғыш килеп сыҡмаһын, тип уйланы.

— Мөмкин, бик мөмкин, уны шуға ла әпкилгәнмен бит инде. Мәгеҙ, ҡарағыҙ, кәрәген хисаплап, ҡабул итегеҙ. Мин, варис башыма, ул һандыҡҡа үҙем дә оронғаным юҡ. Пажалыста, — хажи салбар кеçәһенән асҡыс сығарып йоҙағын асты ла һандығын Ғәлиәкбәр өçтәленә түңкәрҙе. Әллә ни төрлө тимер, баҡыр, алтын аҡсалар, ҡағыҙ червонецтар, һарғайып бөткән ҡағыҙҙар өçтәл өçтөн тултырҙы. Ҡайһы бер нәмәләре сылтырап иҙәнгә тәгәрәне. Көтмәгәндә хажиҙың был ҡылығына ғәжәпләнеп, нимәгә юрарға ла белмәгән Ғәлиәкбәр ҡарт, башын ситкә бороп, һырты ҡара янған ҡулы менән һыңар күҙен ҡапланы.

Йәштәр урындарынан тороп, әллә ни төрлө ҡиммәтле таштарҙан теҙелгән муйынсаҡтарҙы, үрмес осона таға торған көмөш тәңкәләрҙе ҡулдарына тотоп, ҡыҙыҡһынып ҡарарға кереште, тик Сафия ғына урынынан ҡуҙғалманы, ҡатҡан килеш, эскәмйәһендә бойоғоп ултырыуын дауам итте.

Ғәлимйән хажи битараф кешеләй эскәмйәгә барып ултырҙы.

Абдрахман урынынан торҙо, өçтәл ҡырына килде.

— Ярар, йәмәғәт, бөтә нәмәһен дә һандығына кире һалығыҙ. Беҙҙең хөкүмәткә ундай байлыҡ хәжәт түгел. Мильон «керенка»ларын һандығында хажи үҙе һаҡлаһын. Ул налогын хәҙерге менән түләргә тейеш, — тип өçтәл өçтөндә туҙып ятҡан ҡағыҙ аҡсаларҙы усына йомдо ла һандыҡҡа ырғытты. Бөтә кеше лә ҡулдарындағы әйберҙәрен һандыҡҡа һалғас, Абдрахман хужаға һандығын бикләргә ҡушты.

— Бөтә нәмәң дә теүәлдер бит, беҙгә бер нindәй ҙә дәғүәң юҡмы, хажи?— тип, Абдрахман уға мөрәжәғәт итте.

Хажи, аҡланырға теләгәндәй:

— Аҡса ла аҡса, тип боғаҙҙан алғанығыҙ өсөн аптырап килтерҙем мин һеҙгә ошо һандыҡты, минең ошо сәғәттә ҡулымда башҡа болом юҡ. Бына көҙгә йәрминкәләр етеп, бер аҙ мал үткәрә алһам, налогымды килтереп түләрмен, шуға тиклем биғәйбә. Был мәсьәлә буйынса бү-

тәнсә минең теңкәмә теймәгеҙ. Бына шул, — һандығын ҡултығына ҡыҫтырып, хажи ҡуҙғала башланы.

Берәр хәбәр әйтер микән, тип был тамашанан телһеҙ ҡалған Ғәлиәкбәргә бер ҡарап алды ла, Абдрахман, хажи алдына ҡаршы баҫты.

— Бына нәмә, хажи ағай, беҙ һинең көҙгә йәрминкәлә мал һатыуынды көтөп тора алмайбыҙ. Ошо арала ҡалған налогыңды кертеп бөтөр. Ярлыларға яҙғы сәсеү осоронда кредит менән ярҙам итеү ошо һеҙҙең налог түләп бөтөрөүегеҙ менән бәйләнгән. Ҡайҙан алаһығыҙ, уныһы — һеҙҙең эш. Ә беҙгә хан заманынан һаҡланған шаҡы-шоҡо кәрәкмәй. Бына Микулайҙың алтын аҡсаһы хаҡында волость банкыһы менән кәңәш ҡылырбыҙ, уларҙы тапшырырға кәрәк булыр.

— Былай алтынды баҡырҙан һеҙ ҙә айыра беләһегеҙ икән? — тип көлөмһөрәне Ғәлимйән хажи.

— Ҡулыбыҙҙа тотмаһаҡ та, Рәмиевтәр кеҫәһен алтын менән байтаҡ ҡалынайттыҡ бит. Уға ғына беҙҙең дә аҡыл етә. — Абдрахман хажиҙың сәнскеле һүҙенә мәрәкә менән яуап бирҙе.

Мир алдында сельсовет башы менән һыу уртлаған шикелле өндәшмәй ҡалыу оҡшамаҫ тигәндәй, Ғәлиәкбәр ҡарт та һүҙ ҡыҫтырып ебәрергә уҡталды.

— Һин, мырҙа, налуғыңды оҙаҡ мөҙҙәткә һуҙмай ғына түләп ҡуй инде. Түләүең булһа, муйында бер йөк аҫылынып торған һымаҡ була ул, хәйерһеҙ, — тип үҙенең башта бик етди төҫлө күренгән талабын берҙәм генә һил һуҡмаҡҡа төшөрөп тамамланы. Аҙаҡтан үҙенең кәкерсәкле һүҙен йомороҡ тамамлау ниәте менәндер инде: — Хөкүмәт көтә бит, мырҙа, — тигән булды.

Хажи:

— Ғәлиәкбәр түрә, «хөкүмәт көтә», тиһең инде, ә? — тип, уның һүҙен яңынан ҡабатланы ла, башын өҫкә саңҡайтты.

— Эйе, мырҙа, көтә шул, сабырлыҡ менән көтә, — бер ни ҙә уйламаған бер ҡатлы сельсовет та үҙенекен йөпләне.

Ғәлимйән ике ҡулын бөйөрөнә таянды ла:

— Һәр хажи эргәһендә туҡтап, уны көтөп торған ниндәй хөрәсән хөкүмәт ул? Әйтегеҙ ул хөкүмәтегеҙгә — мине көтөп тормаһын, ары китә торһон. Һәр кешене шулай туҡтап, көтә башлаһа, һеҙ өйөрлө берәҙәк, унығыҙҙы нисек алға ебәрмәксеһегеҙ? Әммә ләкин власығыҙҙың артыҡ барымы күренмәй, әллә ҡайҙа бара алмаҫ, түңкәрелер, әйҙә, һеҙ ҙә уның өйөрлө хәйерсеһе артынан ҡуҙғалығыҙ, мине көтөп ултырмағыҙ, әйҙә, хөкүмәтегеҙҙең арыҡ

атының ҡолаҡ бауына йәбешегеҙ, һөйрәгеҙ, оҙаҡламай бергә түңкәрелерһегеҙ! — тип үсәне кәнсәләгеләрҙе.

Бының мыҫҡыллауына саҡ-саҡ түҙеп торған Абдрахман шартлар сиккә етте. Ул нисек ҡысҡырып ебәреүен һиҙмәй ҙә ҡалды.

— Етте, хажи! Берәр аулаҡ урын булһа, күрһәтер инем мин һиңә хөкүмәттең нисегерәк көткәнен. Бәхетең — балаһаға күберәк. Оҙаҡ телеңә һалышма, марш! Бына ике аҙнанан налогыңды түләмәһәң — һине көтөп торған хөкүмәттең ни эшләрен үҙ елкәңдә татырһың.

— Ҡапаҡлама, ҡустым. Әйләндергән тиртун йөнөнән өркөп барыусылар беҙ түгел. Һеҙҙең хөкүмәтегеҙ арбаһы күсәренән батып ултырыуында минең ғәйебем юҡ. Ул һеҙҙең хәстәрегеҙ. Хушығыҙ!

Бөтә кешегә лә эйәк ҡаҡты, ләкин утлы күҙҙәре Абдрахман йөрәгенә ағыулы уҡ ҡаҙағандай сәнсеп ҡарап ҡуйҙы.

— Ә һиңә, ҡустым, асабый һүҙем бар. Әгәр ки минән шөрләмәһәң, әйҙә, арттан эйәр.

Бөтә кеше бер аҙ ҡаушап ҡалған Абдрахманға текәлде.

— Ярар, ярар, рәхим ит, сығырмын.

Абдрахман уның артынан атланы.

Был икәү сығып киткәс, шомло тынлыҡ баҫҡан тәпәш бүлмәлә кешенең тын алыуынан башҡа шипкерт тә ишетелмәне. Барыһы ла ниндәйҙер мөғжизә көттө, ә атаһының холҡон бөтә кешегә ҡарағанда ла яҡшыраҡ белгән Сафияның күҙенә йәш эркелде, ул тышта атыласаҡ мылтыҡ тауышын көтөп, яулығы һыртынан бармаҡтары менән ҡолағын ҡапланы.

Ләкин бер аҙҙан Абдрахман ғәмһеҙ генә кире килеп урынына ултырҙы. Тышта ни булғанын бер кем дә, бер ҡасан да белмәне.

Саҡырылаһы кешеләр килеп бөткәс, аяғына сандали, йәшел гимнастеркаһының һул еңенә ҡыҙыл сепрәк бәйләгән, үҙе кеүек үк шаҙраҡ, оҙонса битле, ҡыр танаулы, бейек ҡаҡса кәүҙәле Мөхәмәтнурҙы эргәһенә ултыртып, Абдрахман тамағын бер нисә тапҡыр ҡырып алды ла килеүселәргә мөрәжәғәт итте. Был уның кеше алдында беренсе тапҡыр телмәр тотоуы ине. Ул: «Иптәштәр!» тип тәбиғи булмаған тауыш менән бер ҡысҡырҙы ла артабан һүҙ эҙләгәндәй, алаптай ҡулдарын галифейы кеҫәһенә тығып, шып туҡтаны. Уның күҙенә шәмдәй ҡарап ултырған ауылдаштарын ул тәүге күргән төҫлө тойолдо. Алдында ултырған унлаған ғына кеше уға бихисап булып күренде. Уларҙың ап-асыҡ йөҙҙәре әкренләп үҙ һыҙаттарын юғал-

тып, диңгеҙ өҫтөндә йөҙгән ниндәйҙер рәүешһеҙ, тумалаҡ ҡарағусҡыл шарға әйләнде, уның күҙ алдары ҡараңғыланып, башта маңлайында бөрсөк-бөрсөк тир бәреп сыҡты, ә уның арҡаһы манма тиргә төштө. Уның уңайһыҙланыуын, теле көрмәлгәнен аңлағандай, кешеләр ҙә, уға ҡеүәт бирергә ынтылған һымаҡ, урындарында ҡуҙғалышып ҡуйҙы.

— Ағай, ошо һының менән ни бер йәш килен шикелле ебеп төштөң, күңелендәген сатнатып һөйлә лә ташла, — тип өндәште хатта Сафия.

Уның тауышы Абдрахманға йән өргәндәй булды, ул бер аҙ тынысланғандан һуң, һүҙен һәлмәк кенә теҙеп алып китте. Волком секретары әйтмешләй, ул һүҙен: «Яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреү, унда бөтә ярлыларҙың да актив ҡатнашыуын тәьмин итеү комсомол ойошмаһы өсөн ҙур имтихан булып тора», — тип башланы.

— Һеҙ ауыл кулактарының мәкерле уйын минән башҡа ла яҡшы беләһегеҙ. Орлоҡ таратып биреү менән фәҡир-фоҡара быйыл йүнләп барыбер иген сәсә алмай, ул ыштанһыҙҙар ҙа, хөкүмәте лә ҡулдарын һоноп, беҙгә ялынасаҡтар, тим ымһына. Быйыл уларға үс итеп, һәр ярлының дисәтинә булһа ла иген сәсеүенә өлгәшергә кәрәк. Иртәгәнән дә ҡалмай ауылға волземотделдан агроном килеп етергә тейеш, ул фәһемле кәңәштәрен бирер, әлбиттә. Ләкин һис кисекмәҫтән комсомолдарҙы унар өй һайын бүлеп, ярлылар араһына сығарырға кәрәк. Кем ҡайҙа, күпме иген сәсә — шуларҙың барыһын да ентекләп белеп, ярҙамға мохтаж иптәштәрҙе айырата иғтибар аҫтына алыу — комсомол иптәштәрҙең иң мөһим бурысы. Әйткәндәй, мин волостан комсомол билеттары алып ҡайттым. Иртәгәнән дә һуңға ҡалмай ауылда алдынғы, аңлы йәштәрҙе комсомолға йәлеп итеп, ячейканы үҫтереү, нығытыу бурысы ҡуйыла. Комсомол кулактың Советҡа ҡаршы аҫтыртын сәйәсәтен емерә һуҡҡандай ҙур көскә әйләнергә тейеш.

Абдрахман сүместәй йоҙроғон өҫкә күтәрҙе. Уны диҡҡәт менән тыңлап ултырғандарға Абдрахмандың ныҡ йомған һалыулы йоҙроғо эсендә ауыл комсомолдарының көс-ғәйрәте тупланған төҫлө күренде.

— Бына, Мөхәмәтнур, волостан ун биш дана билет алып ҡайттым. Ҡиләсәктә ағзаларға икәүләп таратырбыҙ. — Абдрахман эске кеҫәһенән ҡағыҙға уралған бер төргәкте ячейка секретарына һуҙҙы. — Бына бөгөн ҡатын-ҡыҙҙар советының рәйесен дә тәғәйенләп китергә кәрәк. Кемдә ниндәй тәҡдимдәр бар?

Мөхәмәтнур һүҙ алды.

— Минеңсә совет рәйесе итеп Өмөтҡужина Сафияны тәғәйенләргә кәрәк. Тәржемәи хәле бай ҡатламдан бу-

лыуға ҡарамаҫтан, ауыл йәштәре араһында унан да етеҙ, һүҙе үтемле кешене табыуы ҡыйын.

— Дөрөҫ, дөрөҫ, бара, — тиеште йәштәр.

— Бөгөнгә ҡул күтәреп, һайлап тормайбыҙ, икенсе йыйылышта бөгөнгө кертелгән тәҡдимдәрҙең һәммәһен дә тәсдиҡ итербеҙ. — Абдрахман тумалаҡ тулы битен ҡулы менән ҡаплап, аҫҡа текләп ултырған Сафияға яғымлы ғына ҡараны. — Беҙ һайлауын һайларбыҙ ҙа, ләкин был тәҡдимгә Сафия ҡарындаш үҙе нисегерәк ҡарай һуң әле?

Сафия тәүәккәл, тура һүҙле, шаян ҡыҙ ине. Ғәлимйән хажи баштараҡ уның шуҡлыҡтарын бөтөрөргә теләп, ҡамсыға ла ҡырсынғайны, шулай бер саҡ атаһына шундай әҙәм ишетмәҫлек һүҙ ысҡындырҙы — атаһы ҡамсыһы менән иҙәнгә ултыра төштө. Ошо ваҡиғанан һуң уны тәрбиәләү эшенә төкөрөп кенә ҡараны. Ә бер заман Сафия атаһының мундирын кейеп, биленә алтатарын таҡҡан көйөнсә, артығыраҡ төшөрөп, өҫтәл артында төнәп ултырған хажиҙың «хәҙер йәнеңде алам» тип ҡотон осорғайны, уға тора-бара бөтөнләй ҡул һелтәне.

Ә был юлыһы Сафия баҙыян һымаҡ ҡыҙарҙы, ләкин үҙен бик тиҙ генә ҡулға алды.

— Ҡушһағыҙ ни, ниңә эшләмәҫкә? Моғайын, әҙәм башҡара торған йомоштор, — тип бик тәүәккәл яуап бирҙе. Бер аҙ аяҡтарын алмаштырып, баҫып торҙо ла: — Тик миңә бер генә нәмәһе ҡараңғы: ул тағы ниндәй икенсе совет? Беҙҙә ана бер Совет бар, уның рәйесе Ғәлиәкбәр ағайым ҡағыҙға мөһөрөн баҫып ултыра ла инде, шул етмәгәнме ни? — тип һораны.

Ғәлиәкбәр ҡарт, ауыҙын усы менән ҡаплап, әҙәпле генә көлдө лә, үҙенсә ҡупайып, аңлатырға тотондо.

— Сафия ҡыҙым, эш ошо рәүешле тора: мин дүрт ауылдың, бала-сағаларын да ҡушып, бөтә жителенә һәм житәйәһенә хужа, ә һин шуларҙың бисә-сәсәһенең башлығы булаһың инде.

Сельсовет хужаһының һәр кемдең вазифаһын үҙенсәрәк аңлатыуына йәштәр шарҡылдашып көлөшөп алды.

— Эш унда түгел, бер кем дә бер кем менән дә хужалыҡ итә алмай, һәр кемдең үҙенең хоҡуғы, ирке бар. Хәҙер ысын хөрриәт заманы. Ғәлиәкбәр ағай совет власының закондарын урын-еренә еткереп атҡарыу өсөн, уны боҙмаһындар өсөн ана шул ирекле халыҡ үҙе һайлап ҡуйған урындағы власы, халыҡ власы, йәғни Мәскәүҙәге Үҙәк башҡарма Комитетының ауылдағы иң тәүге органы, шул властың тәүге нигеҙ ташы, аңлашыламы? Бөтә Рәсәй хөкүмәтенең бер иләк күҙәнәге.

Абдрахмандың аңлатыуы, ни тиклем генә ябай бул-

маһын, бөтәһенә лә һеңмәне, күрәһең. Араларынан береһе, атаһы ғүмер буйы Ғәйнулла байҙа хеҙмәт иткән ялсы малайы, урынынан тормай ғына:

— Ялсы менән байҙың араһында ниндәй ул тигеҙлек була ти? Революция булып үтеүенә ни ғүмер — атайым түгел бына мин дә шул байға бил бөгәбеҙ, шул тигеҙлек, ғәҙеллек буламы? Уның Һыулыҙәк буйын ҡара сәүкә шикелле ҡаплап ятҡан өйөр-өйөр йылҡыһы бар, ашағаны көн дә ҡалья, бал да май, ә минең атайым осаһында ҡышынйәйен бер тире салбар, ҡатҡан тиртун. Өйҙә һыйыр мөгөҙөнә элерлек мөлкәт юҡ, — тип кемгәлер үпкәләгәндәй, башын ситкә борҙо ла, кире урынына лыпашты.

— Шәрифулла раҫты әйтә. Совет хөкүмәтенең тигеҙлеге ҡоро ҡағыҙҙа ғына ул,— тип ҡыҫҡырҙы уның эргәһендә иҫке ҡорайыш кәпәсен башына ҡырын һалған бер егет.

Абдрахманға тороп, Яңы иҡтисади сәйәсәттең асылын, әле бөтә Рәсәй халҡы сәйәси тигеҙлек яулап алһа ла, кешеләр араһында ижтимағи тигеҙлектең булмауы хаҡында бер аҙ яңынан аңлатырға тура килде:

— Совет власының бурысы: атһыҙ, малһыҙ кисәге Ғәйнулла байҙың ялсыһын йыл да бирелә торған кредит ярҙамында тартыу көсө, эш ҡорамалы һәм орлоҡ менән тәьмин итеп, үҙ хужалыҡтарын аяҡҡа баҫтырып, кулак тырнағынан тартып алыу, уны ижтимағи бойондороҡһоҙ итеү.

— Ҡана һуң, шулай булһа ҡайһылай ҙа килешер ине. Иртәгә үк бай хужалығына төкөрөп, үҙ донъябыҙға йәбешер инек, — быны баяғы ҡорайыш кәпәс әйтте.

Әлеге лә баяғы ныҡышмал Сафия:

— Алай булғас был ҡатын-ҡыҙҙар советының вазифаһы ниҙән ғибәрәт буласаҡ һуң? — тип тағы төпсөндө.

Абдрахман яңынан торорға мәжбүр булды.

— Сафия ҡарындаш, совет тигән һүҙ — кәңәш мәғәнәһендә. Тимәк, һинең советыңда кәңәш ҡылыу өсөн бер нисә кешенән торған бер һайланмыш ярҙамсың булырға тейеш. Ҡатын-ҡыҙҙар советының вазифаһы хаҡында бында өлгөлө устав ебәрергә миңә вәғәҙә иттеләр итеүен. Ләкин ул ойошманың бурысын мин иң башта ошоларҙан ғибәрәттер, тип уйлайым: элекке шәриғәт ҡанундары һәм, иң беренсе нәүбәттә, үҙ ирҙәре тарафынан иҙелгән, кәмһетелгән ҡатын-ҡыҙҙарҙы ошо сәйәси һәм ижтимағи ҡоллоҡтан азат итеп, уларҙы ауылда социализм төҙөү эшенә йәлеп итеү. Уларҙы элекке ғөрөф-ғәҙәт бығауынан мәңгегә ысҡындырып, ирекле, хөррийәт юлына төшөрөү, уларҙың тома һуҡыр күҙҙәрен асып, бөгөнгө яҡтылыҡҡа сығарыу, уларҙы мал һымаҡ ҡалымға һатып биреүҙе тамыры-

нан ҡоротоп, ғаилә мәсьәләһен үҙ-ара мөхәббәт нигеҙендә хәл ҡылыу.

Ошо урында Сафия эргәһендә ултырған бер йәш егет «ишеттеңме?» тигән шикелле, уның бөйөрөнә төртөп алды.

— Бына тиҙҙән китапхана, йәштәр өсөн клуб ойоштороп ебәрһәң, был биналарҙың ишеген беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙар ҙа асып инергә тейеш. Өҫтәүенә медпункт асып, ауырлы ҡатындар шунда бала таба алһалар, өйҙән өйгә бал да май ашап йөрөгән Өммөгөлсөм кендек әбейең бөтөнләй кәсепһеҙ тороп ҡаласаҡ.

— Ыстағафирулла, ул ниндәй бала табыу йорто ти, әллә хәҙер йөклө бисәләрҙе икенсе ергә тейәп алып китәләр микән? — тине Сафия, былай ҙа ҙур күҙҙәрен шарҙай асып.

— Тапма, трахома, ҡыҙылса ауырыуҙарын ошо киләсәктә асыласаҡ медпунктта совет фельдшерҙары дауалай башлаһалар (ошо урында Абдрахмандың «Маргарита еңгәгеҙ дауалай башлаһа», тип әйткеһе килде), Мөхәмәтрәхим муллаға «Ас ҡарындан мулла төкөрөгө шифалы була» тип ҡулына йомортҡа, күнәсек ҡаймаҡ тотоп, өшкөрөм-төкөрөмгә йүгереүсе кеше булмаҫ.

Абдрахман быларҙы әйткәндә, күҙ ҡырыйы менән генә Уйылданға ҡарап ҡуйҙы, ләкин уның мыйыҡһыҙ шыпшыма битенең бер йөйө лә ҡыбырламаны. Ҡиреһенсә, Абдрахманды ҡеүәтләп, «Әйҙә, беш, һыҙырып һал» тигәнгә ишара яһап, башын һелкте Уйылдан.

— Ленин һүҙе менән әйткәндә, «НЭП Рәсәйенән социалистик Рәсәй булыр», — тип бөтөрҙө Абдрахман үҙ һүҙен.

Тәбиғи, йәштәрҙең башындағы томанлы, уй-фекерҙәре бер кис ултырыу менән генә яйға һалынып, бөтөн генә бер ынтылыш, көслө бер ағым булып алға тәгәрәп китмәне.

Сельсоветҡа йыйылған халыҡ бик һуң ғына таралышты. «Иртәгә ауыл Советына егерменсе йылдарға тиклем Яйыҡ казактарында ялсы булып йөрөгән, нэп заманында сиҙәм күтәреп, үҙ хужалығын байтаҡ ҡына нығытырға өлгөргән Хәлимов Ҡәҫтәрәнде саҡырып, быйылғы яҙғы сәсеүҙе нисегерәк үткәреү мәсьәләһендә кәңәш итергә кәрәк. Ул, элек үҙе фәҡир булған кеше, хәҙер ҙә ярлыларға ярҙам итеүҙән тартынмаҫ, ныҡлы ғына урта хәлле крәҫтиән булыуына ҡарамаҫтан, ул бик аңлы, совет яҡлы кеше булырға тейеш».—Абдрахман шулай уйлана-уйлана Маргаритаһы янына — Мөхәмәтрәхим муллалар өйөнә табан атланы.

## 6

Рамазан шәрифендә[1], сысҡан һыртлы ҡола аттарын тройкаға егеп, Ғәлимйән хажиға Атнағол ауылынан Мөхәмәтшәриф ахун килеп төштө. Бынан бер ай самаһы алда Юлыҡ йәрминкәһендә осрашып, Ғәлимйән менән ҡаға-һуға ғына был хаҡта хәбәр алышҡайнылар. Ғөмүмән, йәрминкәлә улар бер-береһенән ситләшергә тырыша, сөнки йомоштары төрлөсә. Ғәлимйән мал, иген-бесән хаҡын арлы-бирле белешә лә, бөтә эште үҙе артынан мал етәкләп килгән күсергә тапшыра. Шул баҙарҙа беренсе һатылған йылҡының аҡсаһын кеҫәһенә йомарлап тыҡҡас, ул Юлыҡ ауылының трактир хуҗаһына китә. Уның килгәнен ишеткән хужа ҡалған яғын үҙе башҡара. Йәрминкәгә сығып, һимеҙ ҡуй итен күмәртә һайлап алып ҡайта ла кискегә аш һала, өс-дүрт сирек араҡы алдыртып, йәрминкәгә килгән кәрт уйнаусыларҙы саҡыра. Билдәле, трактир хужаһы Ғәлимйән хажи уға үтә яҡын булған өсөн түгел, ә әсә малын һатып тапҡан аҡсаһы хисапһыҙ булғанға тырыша, мәгәр өҫтәлгә түккән бөтә сығымын Ғәлимйән һәр саҡ артығы менән ҡаплап бара, уның йомарт ҡулынан трактирщик та өлөшһөҙ ҡалмай. Бында урыҫы ла, татары ла, һирәк-һаяҡ башҡорто ла осрай.

Ҡис кәрт уйнаусыларҙың нескә тойғоһонда уйнар өсөн, ул үҙенә таныш бер нисә ҡатын-ҡыҙҙы ла саҡырырға онотмай, улары инде күңел хисе тулған сауҙагәрҙәрҙе дүрт күҙ менән көтөп тора. Ғәлимйән хажиҙың килеп төшөүе лә бер кемгә йәшерен түгел. Ул башта үҙенең тамаҡ тунын ит үлсәү өсөн остары ергә нығытып ултыртылған өс тағандың бер сатаһына элә. Тәмәке төтөнөнә өтөлөп бөткән ерән мыйығын, ауыҙ тирәләрен ҡаплап торған ҡуйы түңәрәк һаҡалын һыйпап ала ла итселәр янына килә. Уны күреп белмәгән баҙарсылар уның тышҡы ҡиәфәтенә, был яҡтарҙа һирәк осрай торған күтәрмә яғалы, ике рәт төймәләре аҫҡа төшкән йәшел мундирына, йылтыр итегенең ҡунысына тығылған шул төҫтәге салбарына иғтибар итәләр. «Ниндәйҙер бер батша чиновнигы түгелме?» Ул янып торған йәшкелт үткер күҙҙәрен ит һалынған рәткә бер йүгертеп ала ла, унан-бынан итселәр менән баҙар хаҡы тураһында гәпләшә. Тамаҡ тунын кейерҙән алда таған уртаһында ятҡан икешәр ботлоҡ герҙәрҙе алып, ике ҡуллап һауала уйната-уйната ла үҙенән ярты аршын бейегерәк таған аша ул герҙәрҙе туп һымаҡ ырғыта башлай. Үҙ эштәрен ташлап, баҙарҙағылар уны уратып ала. Шунан бәләкәй генә

---

[1] Рамазан шәрифе — **ураҙа осоро.**

һабан туйы башланып китә. Уны әйләндереп алған һәр тарафтан йыйылған халыҡ:

— Был ни, теге Ялан балыуаны Ғәлимйән хажи ҙа инде!

— Әй, кит әле, хажи башы менән нишләп бында баҙар уртаһында кәмит ҡороп йөрөһөн!

— Раҫ шул, Ғәлимйән хажи, тас үҙе, — тип уны әйләндереп алған баҙар халҡы бер тиклем шаулаша.

Ике бите ҡыҙарып, көслө аяҡтарын арҡырыраҡ баҫып торған, яурынтыҡ дүрт һанлы Ғәлимйән ҡулына яҫы ҡайыш ала ла, теләүселәрҙе уртаға көрәшкә саҡыра.

— Әйҙәгеҙ, егеттәр, көрәштән кем имгәнгән. Көс һынашып ҡарайыҡ. Урыҫы менән беләктән тотоп көрәшәбеҙ, ә башҡорто менән билдән алышабыҙ.

— Ә һине ташлаған кешегә ниндәй бүләк?

— Ошо урындан бер аҙым китмәй ташлаған кешегә бер бәрән хаҡы, кәрәк икән — бәрәнен терелəй һатып алып бирәм, — тип хажи ҡулын мал баҙары яғына һондо.

— Ә ташланған кеше ни бирер?

— Ул бер ни бирмәҫ, тик мәсхәрәһе бынау ерҙә ятып ҡалыр, — тип тимер үксәле итеге менән аяҡ аҫтын төйөп ҡуйҙы.

— Әйҙә сыҡ! Әйҙә бил һынашып ҡара, исмаһам, үҙ ғүмереңдә бер хажиҙы бырағытҡайным, тип, ҡайтҡас шытырһың.

Эштәрен ташлап, хажиҙы инде бер нисә ҡат ҡулса менән әйләндереп алған кешеләр араһында уға ҡаршы сығырға йөрәге етеүселәр һирәк осрай. Бер аҙ ваҡыт үткәс, аяғына дегетләнгән итек, өҫтөнә ҡара тун кейгән мыҡты, хажиҙан бер башҡа тиерлек юғары, бөтә битен һап-һары һаҡал баҫҡан бер урыҫ егете уртаға сыҡты. Ике әзмәүер бер-береһенең беләктәренән матҡып тоттолар ҙа тартыша башланылар. Теге егет ҡапыл арҡаһына лап итеп ергә йығылды ла хажиҙы тубығына ултыртып башы аша ырғытырға самаланы, ләкин беләктәренең ҡарыуы етмәй ҡапыл һынған шикелле бөгөлдө — хажиҙы үҙ өҫтөнә төшөрҙө. Йыш-йыш тын алып яңынан аяҡ үрә баҫтылар, тәкәшергә әҙерләнгән тәкәләр шикелле бер-береһенә яңынан йәбештеләр. Урыҫҡа ҡырынырaҡ торған Ғәлимйән уны үҙенә тартыбыраҡ килтерҙе лә, ике мөгөҙөнән йәбешеп үгеҙҙе ергә йыҡҡан шикелле, бөтә кәүҙәһен шаҡарып, ялпылдатып арҡаһы менән ергә һалды.

— Ай, маладис, ҡарыу ҙа бар икән!

— Бер атлыҡ ғәйрәт бар был балыуанда!

Киң күкрәген бер ҡалҡытып, бер төшөрөп йүткерә-йүткерә тын алып торған хажи:

— Йә, тағы жалающий бармы? — тип һөрәнләй. Бер нисә кеше аяҡтарына сарыҡ кейгән айыуҙай бер егетте уртаға этәләр. Аранан кемдер:

— Әйҙә, аптырап ҡурҡып торма, хәл йыймаç борон биленә йәбеш, — тип өйрәтте. Күрәһең, ауылдашы егеткә сәм өçтәне. Ул билендәге алты аршынлыҡ билғауын сисеп икегә бөкләп тотто ла Ғәлимйәндең биленә тотондо. Һул яҡ тубығына сүгеп ултырыуынан уҡ Ғәлимйән был кешенең көрәштәрҙә һыналған таçыллы икәнен һиҙҙе. Ғәлимйән уға үҙ билен ҡыçып тоторға ирек бирҙе. Быны көтмәгән көрәшсе, таçтамалы менән хажиҙың ике бөйөрөнән тотоп бер яҡҡа һирпеп ташлау өсөн уны ерҙән күтәрергә теләп, хажиға яҡынайып турайҙы. Хажи билен таш һымаҡ ҡатырып уның ҡыçып тотҡан таçтамалын үҙенең ике ҡалаҡ һөйәге аçтына шылдырып ебәрҙе лә, теге сарыҡлы ҡайҙандыр күбәләк-тиләү яғынан килгән тамъян батырын ерҙән күкрәгенә һалып бер иле күтәрҙе, һауала ике тапҡыр әйләндереп алды, шунан һул яҡҡа бөтә көсөнә һирпеп ебәргәйне, ул тәкмәс атып, биш-алты метр ергә барып төштө, тик аҡ сарыҡтары ғына баш осонда ялт итеп күренеп ҡалды. Йығылған батырҙы уртаға этеп сығарған яҡташтары уны ҡулдарынан тартып торғоҙҙолар, ғәрлектәренән осаһына шарт тибеп, ҡулсанан алып сығып киттеләр.

Йыйылған халыҡ шарҡылдап көлә... Башҡа Ғәлимйән хажиға ҡаршы сығыусы булмағас, ул өс тағанға килеп өçтө-башын ҡағыштырҙы ла, ағас сөйҙә элеүле торған тамаҡ тунын яурынына һалып, трактирға төн буйы кәрт һуғырға, эсергә, ә инде уңайы тура килһә, йәрминкәгә килгән еңел-шалҡы мәрйәләр менән зина ҡылырға йүнәлде. Мөхәмәтшәриф Орск өйәҙенең бөтә мосолман ғәләмендә шәриғәт ҡанундарының дөрөç ғәмәлгә ашырылышын тикшереп, күҙәтеп йөрөүсе батша хеҙмәткәре булараҡ, иблес юлында йөрөгән Ғәлимйән хажиҙың был аҙғын эштәрендә асыҡтан-асыҡ ҡатнаша алмай. Мосолман түрәләре, ауыл мәхәлләһе имамдары алдында үҙ абруйына тап төшөүҙән шөрләй. Былай хажиҙың бер кемдән дә тартынып тормай эшләгән әхләк-ҡылыҡтары уның күңеленә хуш килә килеүен, уны ишетеп тә, күреп тә йөрөгән ахундың, юҡ-юҡ та, үҙенең дә күңеле елкенеп ҡуя, ләкин шәриғәт кәртәһен емереп, муйынынан гонаһҡа батҡыһы килмәй, теләге булһа ла, йөрәге етмәй. Шуға күрә лә ул бындай ҙур йәрминкәлә, нисек кенә әшнә булмаһын, хажиҙан ситтәрәк йөрөргә, уның бысрағын үҙ өçтөнә сәсрәтеп ҡуймаçҡа тырыша. Шулай ҙа әлеге килеүендә Рамазан шәрифендә уның менән Ялан ауылында осрашырға һүҙ ҡуйышҡайны.

Ғəлимйəндең йəрминкəнəн ун биш көн тигəндəй ҡайтмай, кəрт уйнап, аҡсаһын оттороуы һəм уның үҙ күсерен тағы ла мал алып килеү өсөн Яланға ҡыуыуы ахунға ишетелеп тə ҡалғайны, лəкин нишлəмəк кəрəк: ялынмыш донъяла шул зимагор хажиҙың да ҡайһы саҡта хəжəте тейеп ҡуя.

Ахундың Яланға килеп төшөүе ошо араларҙа күңеле болоҡһоп торған Ғəлимйəнгə бик тə килешеп ҡалды. Хажиҙың «Саҡул»ын абалатып, ҡыптыр тунын һыға быуып ахун күсере Солтанмəхмүттең өйгə ҡапыл килеп инеүе, скрипкаһы өҫтөнə күптəн йыуылмау сəбəпле ойошҡан ерəнерəк сəсле башын ҡыйшайтып һалып, «Тəфтилəү»ҙе сиҡылдатып ултырған хажиҙы таң ҡалдырҙы. Хужа скрипкаһын өҫтəлгə ырғытты ла иҙеүе ысҡынған күлдəген салбары эсенə тығып, аяғына кейгəн ҡаталарын иҙəндəн ҡыштырлатып һөйрəп, ишек төбөнə килде. Ахун күсерен тəүгə күргəн кеше һымаҡ уға баштан-аяҡ ҡарап сыҡты, икелəнеберəк, ғəжəплəнгəн зəңгəр күҙҙəрен уға текəне.

— Һин, Солтанмəхмүт, бер яҡтан ҡайтып килешлəй аттарыңды ашатырға юл һуҡтыңмы, əллə беҙгə тура килə ятыуыңмы?

Солтанмəхмүт яры бейəлəйен һалып билғауына ҡыҫтырҙы ла өшөгəн ҡулдарын ыуа-ыуа:

— Хужа менəн туп-тура төбəп һеҙгə килдек, — тип тə өлгөрмəне, хажи күлдəге өҫтөнəн баса тун ябынды ла тышҡа сыҡты. Йүгерə-йүгерə килеп эстəн ҡапҡа биклəгəн арҡыры ағасҡа йəбеште.

— Əй, һеҙ, ҡайҙа йөрөйһөгөҙ? Өйөрлө эшкинмəгəн, ҡапҡа асырға ла ҡулығыҙҙан килмəй.

Быны инде ул өй эсендəге үҙ кешелəренə түгел, ə ахун ишетһен, уның күңеле булһын өсөн шуға атап ҡысҡырҙы. Ике яҡҡа асылған ҡапҡанан күсерҙең кузлаға ултырыуын да көтөп тормай, йəнəш егелгəн өс ҡола ат туп-тура ихата ҡаршыһындағы таш ҡоймаға килеп баштарын терəне. Көймəнең күн менəн ҡапланған ишегенəн шəшке тиреһенəн тегелгəн бүрек кейгəн ахундың ҡаҙандай башы күренде. Йорт хужаһы ҡулын һуҙып ахунды ултырған күн мендəре өҫтөнəн тартып торғоҙҙо ла, күтəреп тигəндəй, ергə баҫтырҙы. Улар бик йылы күрештелəр ҙə бер-береһенə ҡарашып байтаҡ һүҙһеҙ торҙолар.

— Бəхетленең ҡунағы бер көндə тигəндəй, күктəн көткəнде ерҙəн бирҙе хоҙай. Ошо арала бер хəбəр-хəтер булмағас, эс тə бошоңҡорай ине əле, — тип хажи өҫтөн ҡағып маташҡан ахундың һалпы яғына һалам ҡыҫтырҙы.

Көймəһенəн төшөп, ихата уртаһында баҫып торған ахун тирə-яҡҡа күҙ йүгертеп сыҡты ла:

— Əллə һин, Ғəлимйəн хажи, донъяңды тарата баш-

лағанһың инде? — тип һораны, элекке эсе батрактар менән шығырым тулған ҙур ғына ағас өйҙөң юҡлығын күреп.

— Хәҙер элекке шикелле тубы менән батрак тота торған заман түгел, минең ҡалған малға шул аға-эненең берике малайы ла еткән. Әйҙә, ахун ағай, өйгә рәхим ит.

Сисенеп, йыуындылар, ҡунаҡ өйөнөң түңәрәк өҫтәле артына ултырҙылар. Хажиҙың өлкән ҡатыны, Атнағол ауылы ахундар араһының ҡыҙы, Мөхәмәтшәриф ағаһы янында үҙен иркен тотто:

— Ҡалай һәйбәт иткәнһең әле, ағай, килеп сығып. Исмаһам, кеше юҡта аулаҡлап ҡына кейәүең менән һөйләшеп ултырырһығыҙ, — тип, һөйләнә-һөйләнә, өҫтәл йыйыштырҙы.

— Һеҙ, башҡа кеше булмай тип, бик иркенләмәгеҙ, кискегә аш һалығыҙ. Ҡунаҡ килгәс, ауыл уҙамандарына ла әйттермәй булмаҫ.

Ғәлимйән папиросын ҡабыҙҙы. Мөхәмәтшәриф ахундың танауын сирып усы менән уны солғап алған күгелйем төтөндө ҡыуып маташҡанын күргәс, ғәҙәттә, яңғыҙы булғанда өнһөҙ генә бисә түҙмәне:

— Исмаһам, кеше килгәндә ҡуйһаңсы шул нәмәңде. Бөтә өй ыҫланып бөттө бит инде төтөнөң менән, — тип, яҡлау көткәндәй, ахунға ҡараны, ләкин уныһының ниҙер әйтергә батырсылығы етмәне.

Хужа тәмәкеһен ныҡыраҡ борҡотоп:

— Аш-һыуыңды тиҙерәк ҡуй ҙа, киске мәжлескә әҙерләнегеҙ, — тип күҙҙәрендә ут уйнатып алды.

«Ҡемдәр килергә тейеш, нисә кешегә аш әҙерләйем» тип ҡатыны хажиға мөрәжәғәт итмәне, сөнки ул былай ҙа күптән мәғлүм ине.

Ахун ғына муйыны аша һалынған алтын сылбырлы сәғәтен сылтлатып асып ҡараны ла:

— Ваҡыт та байтаҡ икән. Киске намаҙ ҙа етеп килә, — тип үҙенең асығып килеүен дә ошо рәүешле хужаға аңғартып ҡуйҙы.

Ә уныһы ҡалын ерән мыйығы аша көләмһерәй. «Ни бушты һөйләп ултырған булаһың, миңә нисә тапҡырҙар килеп, бер кәррә намаҙ уҡығаның бармы?» тип ахунды сәнсеп алырға ла уйлағайны, тыйылып ҡалды.

— Ярай, ахун ағай, барыһына ла өлгөрөрбөҙ. Ғүмер буйы уҡыған намаҙың сауабы ла бөтә өйәҙ мосолман маҡәмына етерлек булғандыр инте, — тине.

Ахун, ирәбеләнеп, араһына сал керә башлаған көрәктәй һаҡалын йыуан бармаҡтары менән аҫҡа тараны ла:

— Әлхәмделилла, — тип ҙур ризалыҡ белдерҙе.

Өҫтәл әҙерләнеп бөткәс, хажи салбар кеҫәһенән сыл-

бырға теҙелгән аҫҡыс бәйләменән береһен һайлап алды ла, мөйөштә аҡ ҡалай менән көпләнгән һандыҡты зыңғылдатып асып, бәләкәй быяла мискәгә оҡшаған бер сирек араҡы сығарҙы. Ике стена араһында ултырған әллә нисә кәштәле быяла шкафтың ҡапҡасын асып:

— Ниндәй һауыт менән эсәбеҙ? Сеүәтә менәнме, әллә мынауы стаканы ла ярап торормо? — тип һораны.

— Беҙ ни... хужаның ишәге. Хужа ни бойорһа, беҙ шуға һәр ҡасан таяр.

Ахун кеткелдәп көлөп ҡуйҙы.

— Әләйһә, булды.

Хужа, түңәрәк өҫтәл ситенә ике семәрле сеүәтә ҡуйып, яртышар сеүәтә араҡы һалды.

— Йә, ҡунаҡ, юлда өшөп, тамағың асып та килгәндер, — тип үҙ сеүәтәһен ҡунаҡ менән сәкәштергәс, яҫы усына ултыртып сеүәтә ситенә тығылып торған ерән мыйығы аша һөҙөп, араҡыһын ғолт-ғолт итеп һемерҙе.

Эсеп бөткәс ауыҙын түңәрәкләтеп «һо-һо» тип ситкә өрҙө.

Ахун, сеүәтәне ҡулға алғас, ян-яғына ҡаранды. Ни бисмилла, ни амин тип әйтергә белмәй, күҙҙәрен сырт йомоп, ваҡ-ваҡ йотом менән ҡойолған араҡыны ярты кимәлгә еткерҙе, шунан сәсәй-сәсәй сеүәтәһен өҫтәлгә кире ҡуйҙы.

— Уй, кафырҙың шул тиклем мөслөләгөн әйт. Хас та иблес эсемлеге был, табанға барып етә бит, хәйерсе, — тип, үҙе ҡылған боҙоҡлоҡтоң гонаһын иблескә япһарырға ашыҡты.

Ғәлимйән хажи тулыр-тулмаҫ сеүәтәне бер тынанан эсеп бөткәс, тәрилкәләге тоҙланған кәбеҫтәгә үрелде. Ҡәҙә шикелле кертелдәтеп бер аҙ кәбеҫтә сәйнәне лә, «бының менән генә эш ыратып булмаҫ» тигән шикелле, кәбеҫтәнең уртаһына сәнскеһен сәнсте лә, ике ҡулы менән йылҡы ҡабырғаһына тотондо. Башына һуҡҡан кеше шикелле һеңгәҙәп, аңына килә алмай ултырған ахунға ла шундай уҡ ҡаҙы тотторҙо. Сөсөрәк майы ауыҙҙа иреп торған, эсәккә яңы тығылған ҡаҙыны ашап алғас, ахунға бер аҙ хәл кергәндәй булды, ләкин, боҙ аҫтында шаңҡыған шамбы һымаҡ, күҙе аларып байтаҡ ҡына ултырҙы. Яңынан бер ҡабырға ҡаҙыны ашап алғас, күҙ алдындағы бөтә нәмә лә ап-асыҡ булып күренә башланы, башын баҫып туҡтамай ашап ултырған хажи ҙа үҙ рәүешендә күҙенә сағылды.

Ахун ҡарҡ кикереп:

— Иншалла, әҙерәк тамаҡ ялғанды шикелле, — тине лә, өй эсендәге йыһаздарға күҙ йүгертеп, һүҙгә кереште. —

Ҡарап-ҡарап торам да, хажи, мин һиңә аптырап ҡуям әле.

Хажи ҡолағын ҡарпайтып һағайҙы.

— Йә, йә ағай, һүҙ булһын.

— Мына шуны әйтәм әле: элгәрерәк һинең өйөң затлы йыһаздар менән тулы ине. Өйҙөң эсе бөтөнләй туҡалға әйләнеп, ҡуңалтаҡ иткә оҡшап тора ла баһа.

— Йә, элек булған ниҙәр һинең күҙеңә салынмай? — тип һораны хажи.

— Элек һинең иҙәнеңә баҫырлыҡ урын булмай торғайны, ситек менән иҙәнеңә түшәлгән келәмеңә батып йөрөлә ине, алтын, көмөш һауыт-һаба ла күренгеләй торғайны, мынауы стенаңда өйәҙҙә бер кемдә лә юҡ икешәр ҡаҙаҡ туҡмаҡлы, кәкүкле сәғәтең дә бар ине шикелле, — тип ахун тағы ла ниҙер теҙергә самалағайны, ләкин хужаның ике күҙендәге уҫал ут саткыһы рәхәтләнеп хәбәргә керешкән ахунды ялмап алды.

— Әллә, ахун, мине ул мөлкәтте кәрткә отторған, тип уйлайһыңмы?

— Юғын юҡ та, әммә үҙең йәшәгән йорт-ҡураңдың күркәм, етеш булыуы фарыз.

— Бөрсә йыйып ятҡан шул бохара, афған келәмдәре өҫтөндә һин үҙең күпме ятмаҡсыһың?

— Алла бойорһа, дәрел фанадин дәрелбаҡыға рихләт иткәнсе иҫән-аман ятырмын тип торам.

— Ятырһың атаң башын, ятмай ни! Хәҙер һинең ғүмерең буйы һыйынған алланың ҡөҙрәте китте. Бөтә замандың аллаһы — бәлшәүиктәр. Питербург, Мәскәү, Киев, Екатеринбурҙағы өҫтөнә майлы кейем, башына күн картуз кейеп завод, фабрикаларҙа эшләгән эшселәр хужа хәҙер илеңә лә, һиңә лә. Алла хөкөмө йөрөмәй хәҙер Рәсәйҙә.

— Ыстағафирулла, ыстағафирулла, был һинең ни һөйләүең, хажи? Тәңребеҙҙән ғәйре мосолманға ҡайҙа барып баш ормаҡ бар?

— Йәки бәлшәүиктәр менән, йәки уларға ҡаршы. Башҡа юлы юҡ. Ә мин уларға ҡаршы ла түгел, улар менән дә ҡосаҡлашып йөрөгөм килмәй. Бына шуның өсөн дә бәлшәүиктәр килеп берҙән-бер көн боғаҙҙан алмаҫ элгәре үҙ мөлкәтемде үҙ ҡулым менән бөтөрәм, белдеңме? Исмаһам, мин үҙем тере саҡта уның мәнфәғәте менән үҙем файҙаланам.

— Китсе, китсе, нишләп ул бәлшәүик тигән нәмәләре килеп, минең ғүмер буйы хәләл көстө түгеп йыйған мөлкәтемде талап, ғүмерем буйы йәшәгән йортомдан ҡыуып сығарырға тейеш? Хәленән килмәй уларҙың, хаҡтары юҡ.

— Беренсенән, яҫтап ятҡан бөтә мөлкәтең һинең хәләл көсөң менән йыйған мал түгел.

— Шунан? — Ахун ғәжәпләнеберәк хажиға ҡараны. — Минең мөлкәтем, байлығым кемдеке була инде?

— Ана, алғы бүлмәлә апаһы менән сәй эсеп ултырған Солтан Мәхмүттеке. Тағы... мал өйөндә көнө-төнө ал-ял белмәй һиңә мал арттырған батрактарҙыҡы.

— Уларҙың минең малда ни ҡыҫылышы бар? Өйөрлө ыштанһыҙ!

— Бына шулай, ахун ағай, Питербурҙарға йөрөп ятһаң да, һаман төшөнә алмайһың икән әле. Бына хәҙер шул ыштанһыҙҙарҙың ыштаныңды һалдырып ала торған ваҡыттары бөгөн булмаһа, иртәгә етер. Шуның өсөн дә мин һыйыр мөгөҙөнә элерлек тә нәмә ҡалдырмайым бәлшәүиктәргә. Ошо биш бүлмәле өйөмдө лә тотонам. Тотонам да бер тупаҡ өйҙә тороп ҡалам. Ә уларға бының хәжәте юҡ, сөнки үҙҙәре шул тупаҡ өйҙән ҡалай түбәле өйгә күсергә иҫәп тоталар. Бына уларға! — Хажи, сүместәй йоҙроғо эсенән ҡалаҡ башындай баш бармағының башын сығарып, кемгәлер кукиш күрһәтте.

— Ә минең ҡурҡа торғаным юҡ. Бәлшәүиктәр ниңә кеше мөлкәтенә ҡул һуҙһын ти? Мин үҙ өйөмдә, арҡа терәп, алла бойорһа, ныҡ ултырам.

Билдәле, большевиктарҙың ҡасан да бер ахунды үҙенең ҡалай түбәле йортонан һөйрәп сығарып, малын һәм бөтә мөлкәтен ауыл ярлыларына таратып бирәсәген дә белә. Үҙен ике абыстайы менән бесән санаһына тейәп, Себер оҙатасаҡтарын да, көн һайын тигәндәй, көтөп ята. Ләкин был осраҡта үҙе лә ышанмаған ошо хәбәрҙәрен үҙенең күңелен тынысландырыуҙан ғәйре, хажиҙың асыуын килтереү, сәмләндереү өсөн генә, уны совет власына ҡотортоу, һөсләү теләге менән генә әйтә.

— Өйөңдөң нигеҙе таш булған өсөнмө? — тип хажи, ҡуйы мыйығы аҫтынан ахунға мәкерле ҡарап йылмайҙы.

— Эйе, эйе, өйөмдөң нигеҙе таш булған өсөн.

— Бәлшәүиктәрҙең батша, бөйөк кенәздәрҙең торған ҡышҡы, йәйге һарайҙарына ла көсө етте. Әллә нисә ҡатлы таштан, кирбестән төҙөлгән йорттарҙың хужаларын ҡыуып сығарҙы бәлшәүиктәр, ә сығырға ҡарышҡандарын боғалға аҫып ҡуйҙы. Төшөндөңмө?

— Төшөнһәм дә, ләкин мин ышанмайым.

— Ышанмаһаң, әйҙә, көтөп ултыр әле. Өйөңә аҙна һайын килеп торған гәзитеңде ҡарар инең. Хәҙер ғүмер буйы үҙ көймәңдә алып йөрөгән, тышы мәрйен-яҡут менән көпләнгән ҡөрьәнеңде ташлап торһаң да ярай.

Хажиҙың бик етди был фекер йөрөтөүе ошоға тиклем

тыныс ҡына йәшәп, советҡа ҡаршы аҫтыртын эш алып барған ахунды тәрән уйға тарытты. Хажи яңынан ярты сеүәтә араҡы төшөрҙө, ҡапыл ҡойолоп төшкән ахун сеүәтәһен күтәреп ауыҙ ғына итте лә сеймәлгән хәбәр осон яңынан тартып сығарҙы.

— Беҙ шулай, бәлшәүиктәрҙе ҡапҡаны шар асып ҡаршы алып, бөтә мөлкәтебеҙҙе үҙ ҡулыбыҙ менән уларға тапшырып ебәрербеҙ микән ни?

— Уныһы инде мәйелегеҙ. Мин үҙ фекеремде әйттем. Башҡа һүҙем юҡ.

— Юҡ, хажи әфәнде, улай ғына барып сыҡмаҫ ул. Эш улайға китһә, тағы бер тапҡыр бәлшәүиктәрҙең ҡанын ҡойоп алмай булмаҫ. Иҙелбаев, Мағазов, Унасовтар хөрриәт өсөн йәндәрен фиҙа ҡылһалар ҙа, уларҙың күләгәһе мосолман илендә һаман йәшәй, уларҙың нурлы йөҙҙәре, уларҙың ҡылған изге эштәре яҡты сыраҡ булып беҙгә һаман ҡояш кеүек юл күрһәтеп, яҡтылыҡ биреп тора.

— Ҡарап ҡарағыҙ, ләкин мин һеҙҙең ул эшегеҙгә ҡыҫылаһым юҡ, сөнки мин бәлшәүиктәрҙең ысын көсөнә ышанам. Зәки Вәлидиҙең һәм башҡа уның кеүек ише тел биҫтәләренең ҡапҡа аҫтынан советҡа ҡаршы өрөп ятыуҙарына мин ышанмайым, — тине лә Ғәлимйән хажи һүнгән папиросын яңынан тоҡандырҙы.

«Ун алты йыл төрлө мәҙрәсәләрҙә уҡытып ҡараны был этте. Кәрт уйнарға, араҡы эсергә өйрәнде, гармунын да, ҡурайын да, скрипкаһын да тартты, башына ун ике пар сынаяҡ ултыртып та бейене, ләкин ата-әсәһенең изге теләген, ғәмәлгә ашырырлыҡ, дауам итерлек мосолман сыҡманы был бәндәнән». Аяҡ сәнсеп папиросын һурып, танауынан да күгелйем төтөн сығарып ултырған хажиға ахун сирҡаныып, ирендәрен былтайтып оҙаҡ ҡарап ултырҙы. «Бына ошо була инде, яҡшынан яман тыуған. Ата-әсәһе ҡайһылай изге ниәттәге дини кешеләр ине, исламға йәне-тәне менән хеҙмәт итеп асылдарына ҡайтты. Бөтә өйәҙ тигәндәй уларҙы ихтирам итеп әхирәткә оҙатты. Зәйнулла ишандың фарманы менән атаһы мәрхүм Сәлимйән хәлфәнең зыяратына, Троицк оҫталарынан яҙҙыртып, бейеклеге өс аршын аҡ таш ҡуйҙылар. Ошбу көндә лә Сәлимйән хәлфә зыяраты әүлиә зыяраты менән бәрәбәр хисаплана. Унан көнө-төнө мосолман өҙөлмәй, киң итеп уратып алынған ташының еге һайын мосолман, сырхау кешеләр ҡалдырып киткән хәйер-саҙаҡа тулып ята. Зыяратына тимер ҡапҡа ҡуйылған. Уға теләһә кем инеп йөрөмәһен өсөн йоҙаҡ менән биклəп, асҡысын ошо малайының ҡулына тотторғайнылар, был зимагоры көнө-төнө эсеп йөрөп, ул асҡыстарҙы әллә ҡайҙа ырғытҡандыр инде. Ал-

ла бойорһа, быйыл имен-аман ҡараға баҫһам, Сәлимйән хәлфәнең ҡәберенә махсус килеп, зыярат ҡылып ҡайтам. Барыбыҙҙың да бараһы йортобоҙ. Мосолманға ҡылған изгелеген онотмаҫҡа кәрәк» тип уйланды ахун.

Хужаның тәмәке төтөнөнә янып, ерәндән көл төҫөнә әйләнеп барған ҡуйы мыйығына, даими араҡы эсеүҙән буҙара башлаған ике битенә ҡарап, Ғәлимйәндең әллә ҡасан йәш сағына бәйләнешле бер ваҡиға ахундың иҫенә төштө.

Хәйер, хужа ла «ахун менән әңгәмә бөттө» тигән шикелле, өҫтәлдәге төбөнә һыу һалынған көмөш көллөксәгә тәмәкеһен баҫып һүндерҙе. Ҡулына гармунын алып, башта бармаҡ остары менән генә көй һайланы, шунан ҡоласын йәйеп «Зимагорҙар толчокта» көйөн уйнап ебәрҙе, бармаҡтары менән көмөш ҡыңғырауҙы көй ыңғайына зыңғырлата башланы. Биш рәҡәғәте намаҙ ваҡытында көпә-көндөҙ тәхел шарабынан ләх булып, тальян гармунын өй яңғыратып уйнап ултырыу ахун күңеленә бик ситен булып тойолдо. Ул көн дә булмаһа ла, ара-тирә тәңре алдында гонаһ ҡылыуҙан шулай ҙа аҙыраҡ тартына ине. Ләкин «шул нәмәнде хәҙергә ҡуйып торһаңсы» тип әйтергә баҙнат итмәне, сөнки ҡөрьән сүрәләрен мөғәменә килтереп уҡыуҙа ла, уларҙы ғәрәпсәнән башҡортсаға тәпсирләп тәржемә итеүҙә лә, ә инде ислам диненең боронғо тарихы тураһында һөйләп тораһы ла юҡ — яҡын тирәлә Ғәлимйән хажи менән ярышырлыҡ кеше юҡ икәнен ахун күптән яҡшы белә. Шулай ҙа ул ашҡа хуш итмәй генә:

— Аяҡтарым талып китте, аҙ ғына хәрәкәт итеп алайым, — тип, бик ҡыйынлыҡ менән өйрәнмәгән ултырғыстан торҙо, ҙур бүлмә буйлап йөрөп алды. Стенаға һөйәп ултыртылған китап шкафы янына килде. Ике ҡулын артҡа ҡуйып буш кәштәләргә ҙур үкенес менән ҡарап торҙо. Мосолман әһелендә бик һирәк осрай торған, Сәлимйән хәлфәнән варис булып ҡалған Ҡаһирә, Мәҙинә вә Мәккә, Йәрүсәлим китапханаларын биҙәрлек ҡиммәтле китаптар бар ине был шкафта! Уның мөйөшөндә ҡәғбәнән алып ҡайтҡан аҡ ҡабырсаҡтар, зәм-зәм һыуы һалған ғәрәп һауыттары ла тора ине. Улар ҙа ҡайҙалыр осҡан... «Нишләп кенә элегерәк килеп, шундай һәр мосолман өсөн ҡиммәтле нәмәләрҙе үҙемә алып ҡайтып ҡуйманым икән?» тип үкенде ахун. Ғәлимйән хажи ҡунағының кәйефен аңлап, уның «кафыр ҡорамалы» тип гармун яратмағанын электән белгәнгә, скрипкаһын алды ла сеңләтә-сеңләтә бигерәк тә моңло көй уйнап ебәрҙе. Йырҙың бөтә нескәлектәрен, бөтә аһәңен ҡалтыранған скрипка ҡылдарының сыңлай-сыңлай бейек, шаңғырап торған ҡарағай өй эсенә таратыуы әҙерәк тәхел шарабы төшөргәндән һуң ахундың кәйефләнгән

күңелен күккә күтәрҙе, май бөргән, елле-дауыллы тормоштоң эҙҙәре һырлаған ҡарт йөрәген елкендерҙе.

«Эйе, эйе, йыр дөрөҫ әйтә: «Заманалар ауыр, дошмандар күп, дуҫ-иш кәрәк ғүмер итергә». Ләкин Ғәлимйән хажи — башыңа ундай ауырлыҡтар төшһә дуҫ-иш түгел, ул тик бына ошолай ашап-эсеп ултырыу өсөн генә яратылған зимагор. Уның өсөн бәлшәүикме, батшамы — барыбер, тик эсеп күңел асырға ғына форсат булһын. Әгәр изге мосолман юлында ғына йөрөһәң, ислам диненә хилаф эштәр эшләмәй маңлай ороп хеҙмәт итһәң, һинең баш менән дума башында ғына ултырырға кәрәк тә һуң, ни хәл итәһең? Һиңә биргән буй-һынды, башты Зәкигә бирһә хоҙай, ошо күңелһеҙ замандарға тарымаған да булыр инек. Булмай шул, хоҙай бөтә кешегә лә бәхетте бер тигеҙ өләшмәй, бейәнән ала ла тыуа, ҡола ла тыуа». Ахун, күңеленең ҡылын сиртҡән скрипка моңоноң туҡтауһыҙ ағылыуын тыңлап, ул әллә ҡасан булған ваҡиғаларҙы буталсыҡ уйҙар менән тулған мейеһендә аҡтара, хәтер йомғағының осон эҙләй...

Бер мең туғыҙ йөҙ ун өсөнсө йыл, август баштары... Йыл башында Мәҙинә вә Мәккәгә хаж ҡылырға киткән Сәлимйән хәлфә мәрхүмдең хәләл ефете Заһита менән утыҙҙы ҡыуып барған Ғәлимйәндән хәбәр-хәтер юҡ. Уларҙан бер ни ҙә булмағас, Заһита әбейҙең йорт-ҡураһын, малын ҡарап ҡалған туған-тыумасалары быға тиклем өс тапҡыр хаж ҡылған, үҙҙәренә туған тура килгән Фәйзуллаға йүгерҙеләр. Аҡ ыштан-күлдәк менән генә һикенең ҡарағас йөҙлөгөндә ултырған ап-аҡ йөҙлө, һонтор, ҡаҡса ҡарт быларҙың борсолоп һөйләгән хәбәрҙәрен күҙен йомоп тыңланы.

— Мәҙинәү Мәккәгә хаж ҡылыу ул Хәлим баҙарына барып ҡайтыу түгел. Хаж ҡылмыш бөкилле мосолмандың ғүмере тәңре ҡулында. Мин һигеҙ йөҙ туҡһан икенсе йылда тәүге кәррә хаж ҡылғанда йәйәү мосафир булып дүрт йыл йөрөп ҡайттым. Минең туҡталған бер урында мәктүб яҙып һалмаға ҡауырһыным да, ҡағыҙым да булманы. Бәнем мөхтәрәм әдикәм илә әникәм дүрт йыл бер ниндәй хәбәр-хәтер алмай олуғ сабырлыҡ менән көтөп ултырҙы. Ә Заһита еңгә менән Ғәлимйәндең сәфәр сығыуына алты-ете ай ҙа үтмәгән, һеҙ бөтә донъяға рисуай һалып, хоҙай тәғәлә пәйғәмбәрҙәренең асыуын ҡабартып йөрөйһөгөҙ.

— Бер ниндәй хәбәр юҡ бит. Анауы Әтисенән[1] елкәнле караптар ҙа китеп барғанда аждаһалай өлкән балыҡ караптарын юлда тотоп алмағайы, тип ҡурҡабыҙ бит әле.

---

[1] Әтисенән — **Одессанан.**

— Тотһа, ни булған?

— Һәр егерме беренсе кешене терeләй кәфенгә урап, ясин уҡып, шул балыҡҡа ташлайҙар ти түгелме һуң, ағай?

— Ундай мөғжизәләр, бәлки, әүәл булғандыр ҙа, әммә хәҙерге таш күмер яғып йөрөтөлгән парахудтарҙы балыҡ ҡына түгел, теләһә ниндәй иблес тә туҡтата алмай. Әгәр-ким дә бер сүл тапмасына юлығып икесе дә, хоҙаның ҡөҙрәте илә, асылына ҡайтмаҡда икән, улар дин юлында шәһит үлгән әрүәх илә бәрәбәр, уларның жаны жәннәттә, улар өчен ожмах ишеге шар асыҡ. Мөнкир, нәнкирларның сөьәлдән ғәйре улар ожмах түрендә булачаҡ. — Яртылаш башҡортса, яртылаш китапса һөйләүсе хажи һис тә бошонмай.

Күп тә үтмәне, август егермеһе көнөнә «Ырымбур Каруанһарайына тройка ебәрегеҙ» тип, Заһита менән Ғәлимйәндән Яланға сәләм алынды. Ауылда аяғынан атлаған ике мәхәллә халҡы хаждан ҡайтып килгән ике ауылдашын ҡаршы алырға йыйынды. Хажға сәфәр сығыр алдынан Заһита әбейҙең өйҙә тороп ҡалған ҡәйнешенә ҡапҡанан сығып киткәнсе: «Беҙҙең, алланың рәхмәте яуһын, иҫән-аман ҡайтып килеүебеҙҙе ишеткәс тә, өйөрҙән тотоп өс йыл тыу йөрөгән маңлайында урайлы туры бейәне һуйырһығыҙ, бөтә аяғынан атлаған ауыл халҡына «Өс тирәк» эргәһендә ошо уңай менән туй яһарбыҙ. Эс-карынын һалып, алла бойорһа, бер тыу бейәне ике мәхәллә мосолманына ашатам. Хәбәр алғас та, көбөләрегеҙҙе ҡымыҙ менән тултырырһығыҙ», тип туҡыны. Ауыл халҡы ошоно ныҡ нығыраҡ көттө.

Ялан, Хәлим һәм башҡа ауылдарҙан юл ыңғайында ятҡан Ҡушый ауылының йыл да һабан туйы үткәрә торған сауҡалы аҡланына хаж ҡылып ҡайтыусыларҙы ҡаршы алыр өсөн атлы-йәйәүле халыҡ ағылды. Иң башта Ирәндек итәгендә үҫкән ҡуйы сауҡалыҡ эсенән Ҡушый ауылынан сыҡҡан оло юлдан йән-фарман сабып килгән Заһита әбейҙең өс тимер күк толпар егелгән тройкаһы күренде. Һырлы дуға аҫтына эленгән өс еҙ ҡыңғырау өс төрлө тауыш сығарып, сәләм тапшырғандай, Ирәндек буйҙарын зыңлатты. Өс ҡыңғырауҙың зыңлаған тауышы юлсыларҙың өҫтөнә ауырҙай булып ултырған текә таш ҡаяларға барып бәрелде лә уның шаңдауы әллә ҡайҙарға йәйелеп киткән Ҡушый туғайлығына таралды. Бына кузла өҫтөндә ултырған күсере аҡ күбеккә төшкән, халыҡтың шау-шыуына ярһыған аттарының дилбегәһен тартты ла ышлыяға ултыртты. Ике мисәү кеше һөрәненә ярһып, баш ташлап, ер бауырлап, алға сапты. Юлдың ике яғына теҙелгән кешеләргә тәгәрмәстәр майланған дегет, фаэтон көймә аҫтынан

борҡоп сыҡҡан туҙаҡ һәм тиргә батҡан аттарҙың әсе тир еҫен бөркөп, тройка алдараҡ ятҡан түбә өҫтөнә йүнәлде.

— Ай, януарҙар, ҡош шикелле оса бит!

— Күкрәктәрендә ниндәй йөрәк икән был ҡанатлы бәхмистарҙың?

— Ай, ер өҫтөнәҡ йәшен йомғағы шикелле тәгәрәйҙәр! — тип халыҡ ҡысҡырышып ҡалды.

Ҡеме арбала, кеме йәйәү тигәндәй, барып туҡтаған йомғаҡ түбәгә ҡарап йүгерҙе. Билдәле, иң алда, ауылдың һиммәтле кешеләре, мулла байҙары беренсе булып хаж ҡылыусыларға ҡул биреп ҡиммәтле сағында сауап алып ҡалырға ашыҡты. Иң тәүҙә, ах та ух килеп өс тапҡыр хаж ҡылған Фәйзулла, артынса, бөгөн ҡыҙмаса булып үҙ скрипкаһында һыҙҙырған Ғәлимйән алдында ошо күңелһеҙ хәтирәләргә бирелеп, шешмә ҡабаҡ күҙҙәрен йомоп ултырған Мөхәмәтшәриф ахун барып етте. Фәйзулла менән улар үҙ көймәләренән бер оҙонса күпмә һәм мендәр сығарҙылар ҙа, көймә тәҙрәһенән ауылдаштары күрһәткән ихтирамға күңеле тулып, еүеш күҙҙәре менән ошо мәхшәргә таң ҡалып ҡарап ултырған аҡ ебәктән генә кейенгән олпат Заһитаны ҡулдарына күтәрҙеләр һәм ергә ташланған күпмә, мендәр өҫтөнә баҫтырҙылар. Уны, осрашыу тантанаһынан күңеле әҫәрләнгән, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан беренсе хажиҙы, өсәр тапҡыр үҙ күкрәктәренә ҡыҫып күрештеләр. «Башҡа кешеләр йүгерешеп килеп еткәнсе, Ғәлимйән хажи менән дә күрешәйек». Улар уйынса, Мәҙинә вә Мәккә тиклем ергә сәйәхәт ҡылып, Мөхәммәт хәдистәрен[1] тыңлап ҡайтҡан Ғәлимйән хажи, иманына ултырып, оло ғәләмәләр шикелле дәрәжәләнгән, өҫтөнә муллалар еләне кейгән килеш, ауыл уҙамандары менән ике ҡуллап мосолмандарса килеп күрешер инде, тип көткәйне.

Бына көймәнең икенсе яғынан ғына башланып киткән сауҡалыҡты йырып, былар алдына бер таныш түгел, был яҡ әҙәменә һис тә оҡшамаған мыҡты кеше килеп сыҡты. Был сит кеше башына ғәрәп офицерҙарының түбәһендәге ниндәйҙер бер ҡош ҡауырһыны ҡаҙалған йәшел фәс, ә өҫтөнә билен яҫы ҡайыш менән быуған хәрби мундир, аяҡтарына йомшаҡ күндән тегелгән үксәһеҙ йылтыр итек кейгән. Ул, яурындары аша төшөрөп уң яғына бер алтатар, һул яғына икенсе алтатар таҡҡан. Өҫтәүенә, ҡиммәтле мәрйендәр менән биҙәлгән ҡынына һабы суҡлы кәкре ҡылыс тағып, уныһын биленә эләктереп ҡуйған. Ундай кешеләрҙән һәр саҡ ситтәрәк йөрөргә тырышҡан, ғүмер бу-

[1] Хәдис — Мөхәммәт пәйғәмбәр һөйләгән ҡиссалар.

йы үҙ ҡөрьәненән айырыла алмай, үҙен алла кешеһе хисаплап, донъяуи мәшәҡәттәр менән һис ҡасан да борсолмаған Фәйзулла был әҙәмде күргәс, бер нисә аҙым артҡараҡ сигенде. Уның менән йәнәш торған Мөхәмәтшәриф ахун да ҡатып ҡалды. Тик сит кешенең ҡояш нурына йышылған баҡыр шикелле ялтырап торған йөҙөн, бик тә таныш сырайын, ике яҡҡа тырпайған ерән мыйығы һәм түңәрәкләп ҡырҡылған ҡалын ҡуйы һаҡалы араһынан йылтырап күренгән тигеҙ тештәрен һәм ике зәңгәр күҙенән ут сәсеп тороуын күреп, кешене танып алдылар: ул — Мәккәнән иңенә хаж дәрәжәһе күтәреп ҡайтып төшкән Ғәлимйән хажи ине. Быларҙың танып ҡалғанын күргәс, хажи салбар кеҫәһенән портсигар сығарҙы ла бер сирек оҙонлоғо папирос тоҡандырҙы. Фәйзулла хажи түҙмәне, бөтә асыуынан ситкә төкөрөгөн сәсте.

— Собханалла, собханалла! Бу ниндәй иблес? Ҡафыр, жамид, хәнзир[1], сән бында илемезгә ҡайтып мосолман ғәләмен аздырғанча шунда Мысыр сүлендә, дин юлында асылыңа ҡайтсаң шәһит хисабында жәнең жәннәттә булар иде, — тине лә уның менән күрешмәй боролоп китеп барҙы.

Уның ҡарауы, Ғәлимйән хажи:

— Ха... ха... Фәйзулла хажи беҙ ҡайтҡансы күрәғарауға әйләнгән, мине таныманы, — тип ҡысҡырып көлдө лә ҡынынан ҡылысын һурып сығарып бер нисә сауҡа ботағын ергә сабып төшөрҙө.

Мөхәмәтшәриф ахун да күрешмәй кеше араһына инеп китергә теләгәйне, ләкин уны Ғәлимйән хажи ебәрмәне, ҡулынан эләктереп алды.

— Бәй, ахун башың менән Фәйзулла хажи артынан эйәрергә имсәк быҙау түгелһеңдер бит! Ул күптән үҙен был донъянан ваз кискәнгә хисаплай бит инде. Уның йәне тәненән айырылып әллә ҡасан фәрештәләр араһында күктә йөҙә, — тип рәхәтләнеп көлдө.

Мөхәмәтшәриф ахун да папирослы хажи менән өҫтәнмөҫтән генә күреште лә, Заһита хажи эргәһенә — изге кеше янына ашыҡты. Уларҙы ҡаршы алырға килгән бөтә кешегә түбә башында зәм-зәм һыуы тараттылар. Ауылдың уҙамандарына Заһита хажи Мәҙинәнән алып ҡайтҡан бүләктәр өләште, саҙаҡа бирҙе. Аҙағынан, билдәле, Ялан халҡына һый-хөрмәт тә ойошторолдо. Ләкин бөтә йыйылған мосолман күңеленә хаждан ҡайтып төшкән Ғәлимйән хажи, хәрби кейемдә папирос борҡотоп торған килеш бик оҙаҡҡа уйылды.

---

[1] Хәнзир — сусҡа, дуңғыҙ.

Ауыл йыйынына Ғәлимйән барып та йөрөмәне, ул өйөндә көтөп торған ҡатындары эргәһендә ике көн ҡунды ла, өсөнсө көнөнә, Мысыр яғынан кейеп ҡайтҡан кейемен һалмай, артмаҡ-шартмаҡтарын тағып, Ҡыҙыл йәрминкәһенә ашыҡты.

Мөхәмәтшәриф теге ваҡытта «бәлки, Ғәлимйәндең был шуҡлыҡтары йәшлек бәләһелер, тора-бара үҙ урынына ултырыр, дәрәжәләнер, шәриғәт ҡанундары менән дә иҫәпләшә башлар һәм бынауындай ҡатмарлы заманда үҙемә бер ҡанат булмаҫмы» тип уйлағайны. Ләкин ахун үҙ көткәненә ирешә алманы, хажи үҙ холҡон бер өсмөт та үҙгәртмәне, ҡылығы боҙола барҙы, бәйеле аҙғандан-аҙҙы. Өйәҙҙә ниндәй генә оло, мәғлүмәтле ғөләмә булмаһын, ул Ғәлимйән барҙа аят уҡырға, ҡөрьән сүрәһе башларға шикләнде, теләһә ниндәй ҡарый ҙа ул барҙа ҡөрьән сығырға йөрьәт итмәне. Тик хажи дин ҡағиҙәләрен бер ҡасан да үтәмәне.

«Юҡ, юҡ булманы. Был ғәжәп аңлайышһыҙ бәндәне үҙемдең яғыма ауҙарамын тип уйлағайным — булманы. Йәне нисек теләй, шулай йәшәне, нәфсеһе ни теләй, шуны эшләне был әҙәм. Быға ышаныуҙары ҡыйын» тип уның скрипка уйнауына таң ҡалып, уға теклӛп ултырған Мөхәмәтшәриф ахун үҙ фекерен яңынан дөрөҫләп ҡуйҙы.

«Ошо була инде бына — һаҡалы ағарғансы башына аҡыл инмәгән белдекһеҙ бәндә. Бына әсәһе мәрхүмәгә һис һүҙ тейҙерерлек түгел. Ысындан да йәне лә, тәне лә пак, изге мөслимә булды. Сәлимйән хәлфәнән ерәк һымаҡ осоронда ултырып ҡалыуына, диниә назараты ҡазыйының ҡат-ҡат үҙенә йәш йәмәғәтлеккә һоратыуына ҡарамаҫтан, хәлфә алдында үҙ намыҫын бысратмай, хажи дәрәжәһен ғорур һәм лайыҡ йөрөтөп донъя ҡуйҙы. Алланың рәхмәтендә булһын! Мәҙинә вә Мәккәгә хаж ҡылырға теләк иткәс, уның алдына килеп тыуған бихисап ҡаршылыҡтарҙы хоҙай үҙе генә белә. Мосолман ҡатын-ҡыҙҙарына хаж ҡылырға ҡәтғи тыйылғанын белеп, мал-тыуар тотоноп, етерлек сәрмәйә туплағас, уның был теләгенә беренсе булып Ырымбур генерал-губернаторы ҡаршы төштө.

Заһита мәрхүмә үҙ ҡулы менән Өфө диниә назаратының мөфтөйө Мөхәмәтсафа ибн Ғатаулла хәҙрәткә мәҡдуб шәриф яҙып һалды, ләкин ул әфәнденән кире яуап килгәс тә, уның оло сәфәргә ашҡынған күңеле һүрелеп ҡалманы. Заһита Бөтә Рәсәй Дәүләт Советына прошение менән мөрәжәғәт итте. Унан килеп, яуапты оло сабырлыҡ менән ике-өс ай көттө. Бына шул Рәсәйҙең иң оло органының рөхсәте менән бөкилле мосолман донъяһында беренсе булып хаж ҡылып ҡайтты лаһа! Исмаһам, ул дин юлында,

аллаға үлгәнсә хеҙмәт ҡылып асылына ҡайтты, унын менән теләһә ниндәй донъяуи йәки шәриғәт мәсьәләләрендә лә кәңәшләшеп була ине. Унын башында ун ирҙә булмаған ғаҡыл, ғилем бар ине, бөтә Рәсәйгә әбей батша ител кенә ултыртырлыҡ ҡатын ине. Йәл, иртәрәк китте, әгәр ул ошо ҡатмарлы заманда иҫән-һау булһа, мин һиңә кәңәшкә килеп ултырыр инемме? Тфү, зимагур, шараб мискәһе! Дөхәнең төтөнөнә тонсоғоп үлгер!»

Мөхәмәтшәриф ҡарт хужаға теклэп ултыра торғас, иҙәнгә сарт төкөрөп ҡуйҙы. Ғәлимйән хажи ҡунағының йәмшек табаға оҡшаған һытылған йөҙөн күреп, уйнауынан туҡтаны ла:

— Ахун ағай, ниңә төкөрөнәһең? Әллә йөрәгең болғанамы? — тип һораны.

Мөхәмәтшәриф, кәзәкей кеҫәһенән биҙәкле батист ҡулъяулығын сығарып өй яңғыратып итләс ҡыҙыл танауын һеңгерҙе лә, көсөргәнешле уйланыуҙан бөрсөк-бөрсөк тир сыҡҡан маңлайын, битен һөрттө.

Кис, өйгә шәмгә ут алғас, Ғәлимйән хажиҙың ҡунаҡтары йыйылды. Иң башта, ғәҙәттә саҡырыусы өйҙән сығыр-сыҡмаҫтан унын артынса уҡ аҡ күлдәк-ыштаны өҫтөнән еләнен кейеп, төймәләрен дә элмәй, һонтор, ҡаҡса, аҡ мәрмәр битле Фәйзулла хажи таяғына таянып килеп инде. Хужа кеше саҡырыусы малайға ул сығыр алдынан:

— Иң башта Фәйзулла хажиҙы саҡыр, — тип киҫәтте.

Ул Фәйзулла ҡарттың ғәҙәтен белә: киске тамаҡтан һуң ул бер кемгә лә ашҡа йөрөмәй. Ғәлимйән хажи түгел губернатор саҡырһа ла, ике аяғының береһен дә атламаҫ.

Беренсе булып сабып килеп ингәс, тимәк, Фәйзулла хажи киске тамағын туйҙырып өлгөрмәгән, тип уйланы хужа ишек төбөндә калушын сисеп маташҡан ҡунағы менән күрешкәндә.

Ҡунаҡ килгәнен ишетеп, күрше бүлмәнән кәзәкей салғыйҙарын төҙәтә-төҙәтә ахун сыҡты. Улар ҙа күрешеп, доға ҡылдылар ҙа өҫтәл артына уҙҙылар. Береһе тәпәш, йыуан, ә икенсеһе һөңгө шикелле оҙон, нәҙек ике кеше тышҡы ҡиәфәте менән дә ныҡ айырылалар ине. Фәйзулла хажиҙан донъя ғәмен һорашыу бөтөнләй файҙаһыҙ икәнен күптән белгәнгә, ахун имен-аманлыҡ белешеүҙән ары китә алманы. Бына ишеккә саҡ һыйып «махан башына» ҡаҙандай төлкө бүрек, өҫтөнә биҙәкле буй-буй төшкән алзаңғәр бохар ебәге менән тышланған баса тун кейеп ауыл байы Ғәйнулла килеп инде. Тыны бөтөп, көмөш төймәләрен ысҡындыра алмай аҙапланған ҡунаҡты хужаның ишек төбөнә ҡуйылған малайы сисендереште. Ул, шешмәк ҡа-

бағы аҫтында ике бәләкәй генә нөктә булып күренгән май баҫҡан күҙҙәре менән яҡтыға ҡараны ла, түбәнгә аҫылынып төшкән ҡыҙыл битле, ике урында ғына өлпәйеп торған ҡашын һыпырып:

— И, маҡтап йөрөйбөҙ икән. Бик ҡәҙерле ҡунаҡтар бар икән, — тип һөйләнә-һөйләнә һимеҙлектән быуынлана башлаған ҡулдарын ҡунаҡтарға һуҙҙы. Аҫтындағы ҡара имәндән эшләнгән ултырғыс ауыр кәүҙәһенә сыҙай алмай илаған шикелле шығырлап ҡуйҙы. Күп тә үтмәй ҡаҡса ғына, кәүен шикелле еңел генә кәүҙәле Маннап хәҙрәт, түбәнге мәхәлләнең имамы, тышҡы ҡиәфәте менән ахунға тартым Мөхәмәтрәхим мулла килеп инде.

Барыһы ла үҙ урындарын алып бөткәс, хужа:

— Барығыҙ ҙа тәһәрәтлеһегеҙҙер. Яңы ғына йәстүғ намаҙынан сыҡтығыҙ. Ҡул сайҙырып тормайым, — тине.

Бөтәһе лә бер ауыҙҙан:

— Эйе, эйе, тәһәрәтебеҙ һынмаған. Таҙабыҙ, — тиештеләр, сөнки мәжлес сәйҙән башланырға тейешлеген йыйылған кешеләр яҡшы белә.

Хужабикә сәй әҙерләй башлағас та ҡунаҡтар араһында бер аҙ ығы-зығы булып алды. Ҡабат-ҡабат ашарға өйрәнмәгән, Фәйзулла ҡырҡа арҡыры төштө:

— Ғәлимйән хажи, һин беҙҙе, моғайын, ашҡа хәбәр иткәнһеңдер бит? Нишләп сәй менән мәшәҡәтләнеп ултырмаға? — тине.

Башҡалар бер тауыштан:

— Хажи, сабыр ит. Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул, тип әйткән түгелме боронғолар! Сәй тамаҡ түгелме ни? — тип хужаны яҡлап маташҡан булды.

— Хажи ағай, бер ҙә борсолма! Һиңә тигән һарыҡ һебәһе килендең батмусында боҫорап ята, — хужа көләмһөрәп ҡуйҙы.

«Мин был өйөрлө туң баштарҙы бәлшәүиктәргә бәрелештерергә һүҙ беркетергә килеп ултырам, ә улары мәжлес өҫтөндә лә ашау өсөн талашып үлеп баралар» тип уйлап алды ахун.

Сәй мәжлесе әңгәмәһеҙ генә үтте. Бер-икешәр сынаяҡ эстеләр ҙә вәссәләм. Барыһы ла иткә ҡорһаҡ һаҡланы. Ялан ауылының серегән байына ла алағарҙа көн һайын ҡаҙанды лыҡа тултырып ит бешереп тормайҙар, һөрһөгән ҡаҙыял, ҡаҡлаған ит, кәзә-һарыҡ йүрмәһе лә ярап тора. Ә был өйҙә бөгөн яңы һуйылған һарыҡ ите бешкәнгә оҡшай.

Күп тә үтмәй, ахун менән хужа икенсе бүлмәгә сығып, аш алдынан тәхел шарабын тағы ла төшөрөп алғас, хужа алдында йөрөгән малай һул ҡулына еҙ тас, уң ҡулына еҙ

ҡомған тотоп, яурыны аша һөлгө һалып ҡунаҡтарҙың ҡулын сайҙырҙы.

Ҡунаҡтар ашҡа ултырҙы. Хужаның оло ҡатыны биҙәкле батмус тулы һөйәкле ит ултыртты. Бишбармаҡ көтөп ултырған ҡунаҡтар барыһы ла хужаға төбәлде. Уларҙың үтенесле ҡарашынан уҡ мәсьәлә табында ит турау хаҡында барғанын төшөнөп алған Ғәлимйән хажи ултырғысын даңғырлатып ситкәрәк шыуышты. Папирос тоҡандырырға самалап, кеҫәһенә ҡулын да тыҡҡайны, нишләптер был юлыға тыйылып ҡалды. Дөйөм табаҡҡа ит турау ғына түгел, бер ҡасан да мәжлестә кеше менән ултырып аш ашамаған хужа:

— Ҡунаҡтар, бигәйбә, былыһы минән булмай инде, — тип баш һелкте.

Алдында ятҡан ағас ҡалағы менән батмус ситенә бер нисә тапҡыр һуҡты ла ишектән башын тыҡҡан бисәһенә:

— Бауырсыны саҡыр, — тип ғәҙәттә улар өйөндә бишбармаҡ табынында ит турай торған үҙҙәренең махсус кешеһен килтерергә ҡушты.

Уны кеше ебәреп, ситтән алдыраһы юҡ, хажи өйөндә бишбармаҡ бешкәнен алдан һиҙеп йөрөгән күршеһе, салғы бәкеһен үткерләп, йыуылған ҡулын беләгенә тиклем төрөп, аш өйөндә ошо саҡырыуҙы көтә ине. Бында ултырған ҡунаҡтарҙың һәр береһе тиерлек уның ҡулынан күп тапҡырҙар ит ашағаны бар, бының өҫтәүенә, ул кеше ҡунаҡтарҙың кеме ниндәй малдың ҡайһы өлөш һөйәген яратҡанын да яҡшы белә. Фәйзулла хажи алдына ул ҡул менән күтәргәндә ҡыртышы ҡалтыранып торған майлы бер бөтөн һарыҡ һебәһе һалды. Бишбармаҡ ашарға тип ҡорһаҡ һаҡлап килгән хажи ҡабырға һөйәгенән майлы итте оҙон бармаҡтары менән һыпырып төшөрҙө лә, бисмиллаһын әйтеп, бер кемгә лә иғтибар итмәй ашҡа йәбеште. Ғәйнулла бай һарыҡ бауыры өҫтөнә һалынған ҡалын оса майына табаҡ ситендәге тоҙҙо һибәләне лә ус аяһындай һимеҙ киҫәкте һоғоноп ебәрҙе. Ашты яртылағас, былар килер алдынан ҡыҙмаса булып өлгөргән Мөхәмәтшәриф ахун ҡалағына өйәмәләм итеп һалып итле ашты бер-ике һоғонғас, ҡарҡ кикереп ултырғысына ҡырын ятты. Атлы ҡунаҡтың, яртылаш туйып, аштан айырылғанын күргәс, башҡалар ҙа табаҡтан башын күтәреп, күҙ-биттәрен алдарында ятҡан һөлгө менән һөртөп, ҡунаҡтың ниҙер һөйләргә тейешлеген көткән шикелле, уға төбәлделәр. Ә Фәйзулла һарыҡтың икенсе яҡ ҡабырғаһына тотонғайны. Табында ахундан хәбәр көттөләр. Ул бишбармаҡ майына йылтыраған һаҡал-мыйығын һыпырып алды ла, һәр һүҙгә баҫым яһап:

— Йə, ауыл уҙамандары, был фани донъяла ниҙəр бар? Ниндəй яңы хəбəр-хəтер ишетеп ятаһығыҙ? — тип һораны.

Гəрсə уның был һорауына тиҙ генə яуап бирергə ашығып барманылар, сөнки ошондай ҡатмарлы саҡта уның был кинəйəле сөьəленə бер һүҙ менəн генə яуап биреү ҡыйын ине. Хəбəр күп тə ул, тик уның ниндəйе дөрөç һуҡмаҡҡа төшөрə, ə ниндəйе юлда аҙаштырып бер һаҙлыҡҡа алып барып батырыуы мөмкин — шуныһы аптырата. Бында йыйылған, ахун ышаныс бағлап килгəн кешелəр ҙə бигерəк төрлөрəк шул. Ахыры, бер кем ауыҙынан да һүҙ сыҡмағас, ахун тəү башлап был уҙамандарға үҙе көрт ярырға булды һəм, ситлəнеп-нитеп тормай, төрлө рəүештə ултырған ҡунаҡтар уртаһына туп-тура оло, хəтəр хəбəр ырғытты.

— Йə, уҙамандар, был, яман шешкə оҡшап, донъя баçып килгəн бəлшəүиктəр менəн ни эш ҡылабыҙ? — тип һораны ла, Рəсəйҙəге бөтə большевиктарҙың килəсəк яҙмышы ошо табында хəл ителгəндəй, барыһына ла тишерҙəй булып ҡарап сыҡты.

Өндəшеүсе табылмағас, ултырғысын тағы ла ситкəрəк тартып, Ғəлимйəн үткер күҙҙəрен хəйлəкəр уйнатып, ҡабырға мөнйөп ултырған Фəйзулла хажиға ҡараны.

— Бəлшəүиктəр менəн нишлəргə икəнен бына хажи ағай яҡшы белə инде, — тип көлөмһөрəне.

Уның был яуабына Фəйзулланан башҡалары барыһы ла йылмайҙы. Хатта һəр саҡ етди Маннап хəҙрəттең ҡаҡса йөҙөндə лə ниндəйҙер йəнлелек һиҙелде. Эйе, хажиҙың большевиктар менəн бынан дүрт-биш йыл самаһы элгəре нисегерəк һуғышып ҡайтҡанын улар яҡшы хəтерлəй.

Һүнеп барған əңгəмəгə йəн өрөргə телəптерме, Мөхəммəтшəриф ахун мыйыҡтары аçтынан йылмайып һүҙгə ҡыçылды.

— Хажи əфəнде, һинең дə бəлшəүиктəрҙе түбəлəйем тип əҙерлəгəн ҡайын суҡмарың əлдə лə барҙыр бит əле? — тип һораны.

Хажи башын күтəрмəй генə ултырған урынынан:

— Бар, бар, бəлшəүиктарны ихатама тотоп килтерсəңез, мин хəзер дə, алла бойорса, ул бəдбəхетлəрнең мейесен кучерə сукмага таярмын. Əллə ликин аларны эзлəп, артларындин ҡыуып йөрмəгə бəнем форсатым юҡ, — тип яуап бирҙе.

Табындағы бөтə кеше лə ҡытҡылдап көлөп алды.

— Бына, ишеттегеҙме? Уға, тере бəлшəүиктəрҙе тотоп, ихатаһына килтерергə кəрəк икəн, шунда ғына ул түбəлек

аçтына тығып ҡуйған суҡмарын һөйрәп сығыр. Ҡайһылай ҙа хуп, ҡайһылай ҙа уңай.

Өй эсен тағы ла тынлыҡ баҫты. Ҡунаҡтар итте ашап бөтөп, кәүҙәләрен ҡайҡайтып ултыра башлағас, артыҡ күҙ-ҡолаҡ булмаһын тип ит тураған бауырсыны табындан аш өйөнә сығарып ебәрҙеләр. Билдәле, ул сығып киткәс тә ошонан уҡ атына атланып большевиктарға яу сығырға ашҡынып торған кеше табылманы. Хажиҙың уларға ҡаршы көрәше тураһында һүҙ сыҡҡас, өй хужаһы ул тарихтың нисек булыуын көлә-көлә яңынан һөйләп алды.

— Шулай бер көн, хәл беләйем тип, барып инһәм, ошо ағайым ыштан-күлдәксән генә һике йөҙлөгөнә ултырып алған да, ғүмере ҡулына тотмаған сүкеш менән суҡмарына, түңәрәкләп, эре-эре сөй ҡағып ултыра.

— Йә, йә, хуш.

Фәйзулла хажи һүҙҙең үҙе тураһында буласағын һиҙҙе лә, кәзәкей кеçәһенән тәсбих сығарып, бөтә кешегә ҡабырғаһы менән боролоп, ҡиблаға ҡарап ултырҙы.

— Шунан ни, шул. Мин әйтәм, хажи ағай, әллә һунарфәләнгә әҙерләнеп ятаһыңмы? Ҡолас буйы суҡмарыңды ни этемәме сығарҙың, тип һораным. Ә ул: ошбу чукмар илә Баймаҡ бәлшәүиклләрен бөтөрмәгә жыенам, тип яуап бирҙе. Шунан ни, аҙнаға яҡын өйөндә ултырып, суҡмарының башына сып-сыбар итеп сөй ҡағып сыҡты, әйәрөпсөнөн йүнәтте, үҙенең төпкө ҡола атын айырым ашатып, тәрбиәләргә тотондо. Йәнәһе лә, ҡулына суҡмар тотоп, уны уңлы-һуллы Ғәли батыр ише һелтәп, бәлшәүиктәрҙе бөтөрөп ҡайта. Баймаҡты ҡамап алған, һәнәк, балта һәм һунар мылтыҡтары менән ҡоралланған Унасов этрәтенә ҡушылам тип, мөгәзәй эргәһенән тәкбирҙәр әйтеп, һыбай изге көрәшкә сығып китте бер заман хажи ағайым.

Был хәл мәжлестәге бөтә кешегә күптән мәғлүм булһа ла, барыһы ла йәнләнеп хужаға ҡараны.

— Хажи әфәнденең суҡмар тотоп, ҡола атына атланып, ул ләғнәттәрҙе ҡыуырға сыҡҡанын ишеткәс, тегеләр ни... аçтарына шыр ебәрҙеләр инде?

— Шулай булмайса? Шулай инде, шулай. Унасовтың ҡыуанысының сиге булманы, ти. Хажи ҡәҙәре хажи бәлшәүиктәр менән көрәшмәгә ҡорал күтәргәс ни?

— Йә, йә, шунан, хажи нисә бәлшәүиктең башына етте икән?

— Әй, атаһының башы. Ул, юлда таныштарына туҡтап сәй эсә-эсә Баймаҡҡа еткәнсе, ҡаланың пүләмүт менән ҡоралланған бәлшәүиктәре Унасов этрәтенең көлөн күккә осорған, ти. Бөтә һәнәкселәр таралышып бөткән булған. Хажи ағайым үҙ ауылынан сығып киткәндәге шикелле тәк-

бир әйтеп, Баймаҡ эргәһендәге түбәгә килеп менгән икән, ҡаланы һаҡлаған бәлшәүиктәр үҙен эләктереп тә алғандар...

— Улай булғас, хажи әфәнде үҙ суҡмары менән бер бәлшәүикте лә йәһәннәмгә оҙатмаған булып сыға түгелме һуң?

— Шулай. Ағайымды ҡола атынан һөйрәп төшөргәндәр ҙә, атын тартып алып, үҙен элекке Ҡабанов заводының келәтенә ябып ҡуйғандар. Икенсе көнөнә тамағы сарсап, хәле бөткән ағайымды Советҡа допросҡа алып килгәндәр. Йә, бабай, былай ҡулыңа суҡмар тотоп ҡайҙа юлландың, тип һорағас, хажи ағайым күҙен дә йоммай; Баймаҡ бәлшәүиктәрен ҡырырға сәфәр сыҡтым, тип яуап биргән.

— Әй, эттәгенәһе, исмаһам, суҡмар тотоп, Ирәндеккә һунарға сыҡҡайным, тип әйтһә ни булған инде?

— Ағайымды ни шулай алдаҡты һөйләп тора торған кеше? Мыҡты ир, энәнән-ептән эсендәген асып һалған.

— Бәлшәүиктәр көлгән-көлгәндәр ҙә, атына атландырып, ҡайтарып ебәргәндәр бабайҙы, эйеме?

— Улай булмаған. Үҙҙәрен ҡырырға суҡмар тотоп атҡа атланған кешене имен-һау өйөнә ҡайтарып ебәрергә улар әллә бөтөнләй тинтәк тип уйлайһыңмы? Тартып алынған атына бер ҡоралды бәлшәүикте атландырғандар ҙа ағайҙы йәйәү йөҙ сгерме саҡрымға төрмәгә оҙатҡандар.

— Бар һин уны! Шулайтып, хажи әфәнде бәлшәүиктәрҙе бөтөрөп ҡайтты тиң ә?

— Бөтөрөп ҡайтыр ине, әгәр үҙенең улы Абдулла, теге Владивостокта бер ҙур эфисәрҙә ете йыл денщик булып йөрөгәне, уның артынан барып, юллап алып ҡайтмаһа!

— Ярай биреп ҡайтарғандар, ошондай бола заманда атып ҡуйыуҙары ла бик ихтимал.

— Абдулла бик ялынып «ул бер алйот, аҡылынан яҙа башлаған бабай, уның өсөн ҡыҙылдар ни, аҡтар ни, һуҡыр тауыҡҡа барыһы ла бойҙай шикелле, барыбер. Әбейе янына ҡайтып үлһен инде» тип һораған икән. Тегеләр, ысынлап та, тамағына тәғәм ҡапмай таш иҙәндә көнө-төнө намаҙ уҡып ултырған, ҡоро һөлдәгә әйләнгән ҡартҡа ҡарап-ҡарап торғандар ҙа улына биреп ҡайтарғандар. Бына шулай ул, хажи әфәнде. Атынан, эйәр-өпсөнөнән яҙып, ҡаҡ һөйәккә таянып, иллалла менән саҡ Яланға ҡайтып йығылды ул беҙҙең ҡаһарманыбыҙ.

Һөмһөрө ҡойолоп тәсбих тартып ултырған Фәйзулланан башҡалары бөтә тәндәрен һелкетеп шарҡылдап көлөштө. Большевиктарға ҡаршы көрәш дәрте менән янып килгән Мөхәмәтшәриф ахун, был етди мәсьәләне мәрәкә-

гә һабыштырып ебәреүҙәренән ҡурҡып, үҙенең һорауын яңынан етдиерәк итеп ҡабатланы.

— Йә, бәлшәүиктәр менән ни ҡылабыҙ? Шулайтып, йонсоу кешенең тәнендә үрсегән бет шикелле, көн һайын артып барған был ләғнәттәрҙе ҡапҡа асып, ҡолас йәйеп ҡаршы алабыҙмы?

Ғәлимйән хажиҙың сабырлыҡ ҡылы беренсе булып өҙөлдө. Ул, ауыҙындағы тартып бөтмәгән папиросын асыуынан бөтә көсө менән өҫтәл ситендә торған көмөш һауытҡа баҫты ла, ике уртына һауа тултырып, яңаҡ һөйәктәрен шығырлатты, йөнтәйгән ҡалын ҡаштарын бергә төйнәп, һикәлтәле яр һымаҡ текә ҡабаҡтарын сөйҙө.

— Һуң, һеҙгә тағы ни кәрәк? Мин хажи ағайым менән булған был ҡиссаны мәрәкә өсөн бында һөйләп ултырмайым да. Ул һеҙгә фәһем өсөн әйтелә. Әлхәсил, бөгөнгө бәлшәүиктәр ун һигеҙенсе-ун туғыҙынсы йыл кешеләре түгел. Уларҙың һаны ла бер нисә тапҡырға күбәйҙе, власть менән етәкселек итергә лә байтаҡ тәжрибә тупланы улар. Шуны аңларға һеҙҙең барығыҙға ла ваҡыттыр инде. Бәлшәүиктәрҙе ҡолатырға, көлө күккә осҡан Микулайҙы тергеҙеп, яңынан тәхеткә мендерергә Мөхәмәтшәриф ахун, Мөхәмәтрәхим муллаларҙан күпкә көслөрәк инглиз-әмерек мәмләкәттәре лә тотоноп ҡарағайны ла бит. Ә ҡайҙа һуң улар? Улар Рәсәйҙән аяҡтарын саҡ һөйрәп ҡайтып, һаман бына һинең, Мөхәмәтшәриф ахундың, бәлшәүиктәргә ҡасан ҡаршы сыҡҡанын көтөп яталар, — тип, аптыранған майлы күҙҙәрен бер нөктәгә төбәп, ултырғысынан йығылып барған кеше шикелле өҫтәл ситенә тотоноп алған ахунға йылтыр күҙҙәренән утлы уҡ атты. Өтөп алған уҫал ҡарашына сыҙай алмай, ахун башын түбән эйҙе. — Ленин башлығында бәлшәүиктәр өс йөҙ йыл үҙ сәмреғошона кер ҡундырмаған Микулайҙы түңкәреп төшөрҙө. Уның бихисап һалдатын үҙ яғына ауҙарҙы, уларҙың ҡулына ҡыҙыл әләм тоттороп, бөтә капиталистарға, байҙарға ҡаршы күтәрҙе. Ғәзиз ауылыңды ғына алып ҡара. Элекке батша армияһының прапорщигы Өмөтҡужин Ибраһим, погонын яурынынан һыпырып ташлап, ҡыҙыл командир булып ҡайтманымы? Бына ауылға ҡайтып төшкән Абдрахман кем ул? Ул, белгегеҙ килһә, кисә Колчак ғәскәрендә йөрөп, бөгөн бәлшәүиктәр рухы менән һуғарылған камунис, беҙҙең өсөн ошо тирәлә иң ҡурҡыныс әҙәм. Уны ҡамсат бүрек менән генә йыға һуғып булмай. Ошо ултырған хәҙрәтеңдең ике малайы, Зәйнулла ишандың элекке шәкерттәре, ҡулына ҡорал алып, Яйыҡ буйында казактарға ҡаршы һуғышып, Микулай патриттарын бөтә ғәләм алдында талап йөрөмәнеләрме?

Был һүҙҙе ишеткәс, Маннап хәҙрәттең бөтә кәүҙәһе ҡалтыранды, сипалау ғына күҙҙәрен сырт-сырт йомоп, былай ҙа йыйырсыҡ менән һырланған ҡаҡса битен сырыштырып:

— Ҡуйсәле, Ғәлимйән хажи, шул тиклем ярһыма, һәүетемсә генә әңгәмәләшеп ултырайыҡ, юғиһә, һин үҙең бәлшәүиктәргә оҡшап бараһың, — тип, уны туҡтатырға теләгәндәй, ябыҡ ҡулын хужа итәгенә ҡуйҙы.

Ғәлимйән урынынан тороп уҡ китте.

Хәҙрәт, үҙ малайҙарының эсерҙар партияһына инеп, граждандар һуғышы йылдарында ҡыҙылдарҙа буталыуын фашлауҙы яратып бөтөрмәй, сөнки бер нисә тапҡыр: «Бәлшәүиктәр — динһеҙҙәр, шәриғәт ҡанундарын боҙоусылар, ҡатындарҙы ирҙәр менән тиңәргә өндәйҙәр» тип вәғәз һөйләп торғанында, бер нисә мосолман: «Һин, хәҙрәт, бында ниңә күҙ буяп, бәлшәүиктәрҙе яманлап тораһың? Һин ике бәлшәүикте үҙ өйөндә аҫрап үҫтерҙең түгелме? — тип ауыҙын ҡаплағайны. Шунан һуң хәҙрәт сәйәсәт хаҡында һөйләнеү генә түгел, хатта ундай һүҙ барған урында ҡатнашыу теләгенән дә ваз кисте. Мәгәр Ғәлимйән өҙөлгән әңгәмә ебенең осон яңынан тартып сығарҙы.

— Бына һин, ахун ағай, бәлшәүиктәргә ҡаршы көс типларға, улар менән көрәш хаҡында һүҙ беркетмәксеһең. Шулайҙыр бит, әгәр мин яңылышмаһам?

— Эйе, эйе, ҡустым, кәнде шулай.

— Бына мин һиңә бер сөьәл бирәйем әле, тик күңеленә ауыр алма, уҙаман.

— Йә, йә, рәхим ит.

— Һеҙҙә хәҙерге көндә бәлшәүиктәр менән көрәшерлек ниндәй көс бар? Зәки, халыҡты болғатып-болғатып, ахырҙа Төркиәгә ҡасты. «Башҡортостанды урыҫтарҙан башҡа төҙәбеҙ», «Мин коммунисһыҙ Башҡортостан өсөн көрәшәм» тип сандалап йөрөй торғас, Унасовығыҙҙы тотоп аттылар.

Ахун ике сикәһен ҡыҫып уйға ҡалды. Ахыры, башын ҡалҡытып ауыр эйәген аҫҡа һалындырҙы ла көрәктәй ҡалын һаҡалын бармаҡтары менән ике яҡҡа тарарға кереште.

— Һинең, ағай, Ғәҙелша мәмерйәһендә ошо көнгә тиклем властан йәшеренеп, беттән таланып ятҡан Дәүләткирәйеңдән башҡа кемең бар? Улдарыңдың береһен егерме икенсе йыл ҡыш, Атнағол ауылына барып, Абдрахман үлтереп ҡайтты. Ә икенсеһен бандиттарҙы баҫтырырға Стәрлетамаҡтан ебәрелгән Поленов, Руденко әтрәттәре атып китте.

— Ҡарап-ҡарап торам да һиңә, Ғәлимйән хажи, һин...

үҙең бәлшәүиктәр яғына ауып бараһың түгелме? Беҙҙе, ошонда ултырған ил уҙамандарын, һин, бер ҡаның ҡыҙғанда, тереләй тотоп үҙ ҡулың менән шуларға тапшырып ҡуймағайың тип мин хәүефләнә лә башланым әле.

— Бушҡа хәүефләнмә, мин кеше һатып көн иткән бәндә түгел. Ҡайҙа һөйләнгән — шунда ҡала. Һеҙҙе бәлшәүиктәргә тапшырып, минең ҡыҙыл ыштан кейәһем юҡ. Миңә ул хәжәт түгел. Бая әйттем бит инде, мин ҡыҙыл яғын да, аҡ яғын да тартмайым. Үҙ ихтыярымда, йәнем нисек теләй, шул рәүешле йәшәргә тейешмен, тик һеҙгә шуны әйтәм: башығыҙ иҫән саҡта, буш менән булашып, ҡотҡо таратмағыҙ, һеҙҙең генә хәлегеҙҙән килә торған эш түгел, ул бик ауыр, хәүефле мәсьәлә. Уға тотоноп, бүҫерегеҙҙе сығарып ҡуймағыҙ, ағай-эне.

Бер аҙ өндәшмәй ултырғандан һуң, Мөхәмәтшәриф ахун, үҙ-үҙе менән һөйләшкән шикелле, бер кемгә лә төбәлмәгән һүҙгә кереште.

— Лилиндары[1] үлеп ҡалғас, илдә тағы берәй бола ҡубыр тип бик ныҡ ышанылғайны, булманы бит, хәйерһеҙ. Былай, ул донъя ҡуйғас, бәлшәүиктәрҙең мәркәзендә ныҡ ҡына талаш-тартыштар килеп сығыуы тураһында бер аҙ ҡолаҡҡа салынып ҡалғайны. Шул осҡон сәсрәп, оло ғына бер янғын килеп сығыр әле, бәлки.

Ахун һаман үҙенең һуңғы ышанысынан өмөт өҙмәне. Уның һәр һүҙен йоторҙай булып тыңлап, уға ҡушарлап егелеп, бәлшәүиктәргә бөгөн үк ҡаршы сабып сығырға әҙер ултырған Мөхәмәтрәхим мулла:

— Бәрәкалла, бәрәкалла. Хоҙаның ҡөҙрәте киң, алла бойорған булһа, ошбу залимдарҙың горуһлығына, мәсет, дин әһелдәрен мәсхәрә ҡылып рисуай итеүҙәренә бер сик ҡуймай булмаҫ, китһәнә, — тип, бәлшәүиктәргә ләғнәт уҡып, уларға бөгөн-иртәгә үлем теләп, ҡулының һырты менән бәддоға ҡылды.

Быларҙың мәғәнәһеҙ һүҙен тыңлап арыған Ғәлимйән ауыҙын ҙур асып иҫнәгәс, барыһы ла «йә алла» тип әйтер инде тип көткән ине лә, ләкин бушҡа ғына булды, ул «хаха...» тип ауыҙын ҙур асты ла һаҡал-мыйығын һыпырып ҡуйҙы. Ғәлимйән хажи һүҙҙе ҡырҡа икенсе яҡҡа борҙо.

— Һеҙ, ағай-эне, бәлшәүик тә бәлшәүик тип, уларҙы әллә ни ҡырҙан эҙләмәгеҙ. Уларҙың Баймаҡ, Ҡыҙыл бәлшәүиктәре менән иҫәпләшә торған Иван, Стяпан тигән кулак, купестары бар. Улар өсөн, башығыҙҙы ватып, һис тә ыҙаламағыҙ. Һеҙ үҙ бәлшәүиктәрегеҙ менән ни ҡылаһығыҙ?

---

[1] Лилин — Ленин.

Был етди хәбәр һарыҡ итен тыңҡыслап тултырғандан һуң йоҡомһорай башлаған ҡунаҡтарҙы һиҫкәндереп ебәрҙе.

— Ул ниткән бәлшәүик? Ҡемдәр-еү улар?

— Улар һеҙҙең менән бер өйҙә тороп, бер табаҡтан ашап-эсеп йөрөй. Мына бөгөн бәлшәүиктәр боғаҙына йәбешергә ултырған имам өйөндә, фаразан, яңы йомортҡаны һытып сыҡҡан себеш кеүек Уйылдан бәлшәүик, урамға һыймай, һөрән һалып йөрөй. Хажи ағайымдың өйөндә шул ҡырҡма мыйыҡ бәлшәүиктәрҙең башы Мөхәмәтнур туғайҙа бесән сапҡанда ла беләгенә ҡыҙыл тағып, тал ҡырҡа барғанда ла түшендәге ҡыҙыл сепрәген елгә елберләтеп йөрөп ята. Улар менән һеҙ, уҙамандар, ни ғәләмәт эшләргә уйлайһығыҙ? Бәлшәүиктәр һеҙҙең ише көн һайын йә үлеп, йә сырхаулап кәмей бармай, көндән-көн үрсеү, көсәйеү өҫтөндә. Һеҙгә эйәргән әҙәмдәр әҙәйә, ә улар артынан эйәреп, марш йырлап йөрөүселәр көн һайын артыу өҫтөндә, — тип Ғәлимйән Фәйзулла хажи менән ауыл муллаһына ҡараны.

Уларҙан хәбәр ала алмағас, ул, нишләптер, ауыҙ эсенән генә:

Бәйнәл миләл ләғнәт ителгән,
Ҡолдар һәм астар донъяһы, —

тип мығырланы. Унан, һүҙҙәрен ҡара һин уның, инәләрен эт талағырҙар, — тип ишек төбөнә төкөрөп ҡуйҙы.

— Унышына түҙеп торорлоҡ та һуң, аҙағы нисегерәк бит әле? — Нишләргә белмәй биттәрен турһайтып ултырған ахун һүҙгә ҡыҫылды.

— Имеш, был беҙҙең иң ахырғы, хәл иткес һуғышыбыҙ, матәм менән ирекә ирешербеҙ — ҡара һин уларҙы! Ирек кәрәк булған өйөрлө ыштанһыҙға! — Бер аҙ һүҙһеҙ ултырғандан һуң ул фекерен ослап ҡуйҙы: — Улары ғына йомош түгел дә ул. Йылға һыуы ташҡан саҡта бүрәнәгә ҡуша ҡый-һайы ла ағып китеп ултыра. Уларҙың ошо матәмен көйләгән теләһә кем, беләгенә ҡыҙыл бәйләп, аяғына сандали кейеп, үҙен бәлшәүиккә һанай, күкрәк ҡаға. Тора-бара улар араһында ла кемдең кем икәнен аңыша башларҙар. Әле, үҙҙәре әйткәнсә, ярлы-ялпының күбеһенең күҙе асыла алмайыраҡ ята. Тора-бара, яҙғы ташҡын бөтөп, һыу үҙ ярҙарына ҡайтһа, ундайҙар йә утапша ағас шикелле һыу төбөнә төшәр, йә йылғаның берәр ҡолағында ҡалып, тоноҡ һыуҙы бысратып ятасаҡ. Уларҙың һабантуйҙа һурылып сапҡан ат шикелле алыҫҡа барымы юҡ, ярлы кеше ғәмһеҙ була бит, күберәк йоҡларға ярата. Ә уларҙың йоҡоһонда хәҙергә камсамулдар ячейкаһына, ауыл активы булып, мулла-бай балалары оялап алды. Ярлы

һәштәренең танауына еҫ керә башлаһа, араларында урын өсөн талаш китәсәк, эйеме?

— Бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыймай тимәксеһең инде, уҙаман?

— Эйе, эйе. Шулай булыр. Улар тиҙҙән үҙ-ара тас та тос һуғышып аласаҡ әле. Беҙгә лә күберәк ҡоро сытыр әҙерләп торорға кәрәк.

Бүлмәне тағы тынлыҡ баҫты. Оҙаҡ ҡына һөйләшмәй ултырғандан һуң ахун, суҡлы түбәтәйен алып, яңы ғына ҡарайып сәс үҫеп килгән башын тырнаны.

— Сталинға буйһонмай, мынауы Троцкий тигәндәре ҡалҡып сыҡҡас, бер аҙ күңел уйнап алғайны.

— Ул һиңә нимә хәжәт?

— Уның хәжәте бик ҙур булыр ине лә ул, тик уныңса ғына барып сыҡманы. Үктәбер ревәлүтсиәһенән байтаҡ алда уҡ ул әҙәм Лилинға ҡаршы сыҡҡан, имеш. Ошо, киләһе ревәлүтсиәне, крәҫтиәндәрҙе ылыҡтырмайынса ғына эшләйек, тип ҡаршылашҡан ти бит. Йәнәһе лә, улар ғүмер баҡый батша яҡлы, улар ревәлүтсиәгә ҡыҫылып, тик эште генә боҙоуы мөмкин, тип сыҡҡан икән. Лилин да, мәтри, башлы кеше булып сыҡты. Крәҫтиәнгә ер вәғәҙә итеп, кулак, помещиктарға уларҙы ҡаршы ҡуймаһаҡ, завут, фабрик эшселәренән ер талап итеп, улар һәнәк тотоп ревәлүтсиәнең икенсе көнөнә үк күтәрелеп сығасаҡ, тип әйтте ти бит һәм тәки үҙ сәйәсәтен үткәрҙе. Помещик, кулак, батша ерҙәрен ҡабаттан Рәсәйҙең бөкилле крәҫтиәненә бүлеп бирәбеҙ тигәс, позицияла ятҡан, һуғыш сей елкәһенә тейгән баяғы крәҫтиәндәр, Лилин ҡотҡоһона бирелеп, мылтығын батшаға ҡаршы борҙо ла ҡуйҙы. Троцкий әйткәнсә эшләгәндә, улар эшселәр синыфына ҡаршы сығыр ине. Бына бит уның иң тәрән, самай мөһим йәбешкәһе. Лилиндың был фекерен мәркәз бәлшәүиктәре бер ауыҙҙан, бер табандан тороп яҡлап сыҡҡан икән. Әлеге лә баяғы Троцкий тигән тел биҫтәһе тағы үҙенең бер нисә эйәрсене менән түңгәк башына ултырып ҡалған. Беҙгә тигәндәре шулай инде ул, барыһы ла ләпелдәп телгә бөткән, табала ҡыҙҙырылған борсаҡ шикелле сартлап тора, ә үҙҙәренең ҡулдарынан бер ниндәй эш килмәй, бешәлкәһеҙҙәр. Ана бәлшәүиктәрҙең башлығы Лилин ниндәйерәк булып сыҡты: башы ла был тел биҫтәләренә ҡарағанда аҡыллыраҡ, ҡулынан да эш килде. Бик эшмәкәр ҙә, батыр ҙа ир икән, даром что деүәрән балаһы. Тыуа бит әй инәнән шундай ирҙәр ҙә, — тип ахун башын сайҡап ҡуйҙы. — Һин бая телгә алған Абдрахман тигән бәндәң был заманда ҡайһы тарафтарҙа йөрөй? Тереме, үлеме, ни менән мәшғүл?

— Ул ошо заманда үҙенең күркәм мәрйәһе менән мына мулла күрнәсәһенә килеп инде, — тине хужа, мыҫҡыл иткән һымаҡ көләмһөрәп.

— Ул нисек була инде, рөхсәтһеҙ-ниһеҙ туҡал һыйыр һымаҡ, кеше өҫтөнә нисек килеп инмәк кәрәк?

Ахундың был йәнле ҡыҙыҡһыныуынан күңеле тулған мулла, ҡалын ирендәрен дерелдәтеп, үҙе яуап бирҙе.

— Бына шулай, ахун уҙаман. Әлеге лә баяғы мәҙрәсә ҡыҙырып йөрөгән яңғыҙ малай, Уйылданымды әйтәм, яғанан йәбешеп, урамға ҡыуып сығарҙы. Хәҙер бына, ҡартайған көнөмдә, ғүмеремдә аяҡ баҫмаған мал өйөмдә торам абыстайым менән. Бәлшәүиктәргә ҡаршы көрәшемде, хоҙай насип итһә, үҙ өйөмдән, Уйылдан ләғнәттән, башлайым. Тик хоҙай көс-ғәйрәт һәм сәләмәтлек насип итһен.

— Амин. Әле ул Абдрахман тигәнегеҙ ниндәй кәсеп менән мәшғүл? Әллә мулланың күрнәсәһендә бисәһен ҡосаҡлап тик ятамы?

Ахун ауыл имамына үс иткән шикелле тағы ла һорап ҡуйҙы.

— Әле тик өйҙә генә. Күҙгә-башҡа күренгәне юҡ. Былай беҙҙең кешеләргә ялынып маңлай орорлоҡ түгел, ашар-эсеренә Белов казак мул ғына тейәп ебәргән шикелле. Хәҙергә шулай һиҙеләә. Әммә ләкин мин, йәшерен-батырыны түгел, рәсын әйтеп, алға һалып һөйләйем. Ул үҙенең төҫ-фиғеле, һын-торошо менән, минең Уйылдан шикелле, ебегән әҙәмгә оҡшамай. Бил ултырышлы, ҡаты һөйәкле булмаға оҡшай. Ул Абрашауҙа ла ғүмерен заяға үткәреп йөрөмәгән, буғай, эшенә лә өйрәнеп, бәлшәүиктәр еҫе менән дә нык ҡына ағыуланып ҡайтҡан булырға тейеш.

— Әле элекке көн ул волосҡа саптырып бара һалып ҡайтты. Килеп төшөү менән, ауылдың бөтә һәүеректәрен, активын саҡырып, йыйылыш үткәрҙе. Улар үҙ йыйылыштарын беҙҙең шикелле ҡасып-боҫоп, тәҙрәләрен ҡорғанлап үткәрмәй. Уларҙың эше асыҡтан-асыҡ. Бынауы сельский Ғәлиәкбәр менән сл-ямғырһыҙ, тыныс ҡына йәшәп ятыла ине әле, ә бынныһы, барыбыҙҙы ла анауы Совет аласығына саҡырып, «твердый налог» тип, боғаҙыбыҙға йәбеште. Тын алырға ла тәҡәт юҡ.

Ошо урында ауыл байҙары, баштарын һелкеп, хажи һүҙен ҡеүәтләне. Уртын һура-һура теш һыҙлыҡлап ултырған Ғәйнулла бай, түшенә һалынып төшкән «махан баш»ын ҡалҡытып:

— Хажи, һин уларҙың советын «аласыҡ» тип көлһәң дә, тиҙҙән улар беҙҙе кәтергә ебәреп, беҙҙең ҡалай менән ябылған өйҙәргә күсеп алырҙар әле, — тине.

— Ул Абдрахман булған нәмәнең ауылға ҡайтыуы бер ҡаза булды, тотҡан еренән һындыра торған әҙәм күренә, ауылда совет хөкөмөн үткәрергә бик тә ихлас тотондо, — тине лә хажи, бер килке шымып ултырҙы. Яғаһынан бөрөп тотҡан Абдрахмандың көслө ҡулдары, иҙәндә салҡан ятҡан хажиҙың өҫтөндә атланып ултырған мәлдәге ашарҙай булып тишә ҡараған күҙҙәре, нәфрәт бөрккән һипкелле ҡурҡыныс бите Ғәлимйәндең күҙ алдына килеп баҫты. «Тыуа бит инәнән шундай ирҙәр, шуны тәки үҙ ййыма, үҙ ҡурайыма бейетә алманым, һуңлаңҡырап ҡалынды, биллә ҡатмаҫ борон өлгөрөргә кәрәк ине» тип үкенде хажи.

Ошо хәбәрҙән һуң Мөхәмәтшәриф ахундың Абдрахман хаҡында бермә-бер ҡыҙыҡһыныуы арта төштө.

— Әлхасыл Абрашауға бер ышаныслы ғына кешебеҙҙе ебәрәйек, унда нишләп йөрөүен, урыҫ бәлшәүиктәре менән ниндәй бәйләнештә булыуын төптәнерәк белеп ҡайтыр, — тип ахун Ғәлимйән хажиға ҡараны.

Уның ҡарашынан үҙенән нәмә көтөлгәнен йәһәт кенә аңлап алған хажи әйтте:

— Бигәйбә. Мин, улайтып, кеше артынан быҫҡыған еҫте еҫкәп, йәшерен шымсы булып йөрөй алмайым. Мин, кәрәк икән, асыҡтан-асыҡ теләһә кеменең боғаҙынан алырға ҡулымдан килә, ләкин бындай эштән мин ҡәтғи баш тартам, сөнки ундай кәсептән мин сирҡанам, ул минең өсөн түбәнселек.

«Ошо буй-һыным менән ҡулымды бысратасағым юҡ» тигән шикелле, ул киң күкрәген тултырып тын алды ла сүместәй йоҙроғон өҫтәлгә һуғып ҡуйҙы. Өҫтәл өҫтөндәге һауыт-һаба, батмус өҫтөндә ятҡан салғы бысаҡ, уның көйөнә бейегән шикелле, һауала һикергеләп алды.

— Ярай әләйһә, көслөк юҡ. Көсләп асылған күҙҙең яҡтыһы юҡ, тигән боронғолар.

— Икенсе, ҡулайлыраҡ кеше табырбыҙ.

Баштан уҡ ошо табында рәйеслек вазифаһын алған Мөхәмәтшәриф ахун, артҡараҡ киреп ерелде лә:

— Ярай, уҙамандар, бөгөнгә был мөһим кәңәште ослап торайыҡ, әммә шуныһы көн шикелле асыҡ: беҙ бәлшәүиктәрҙән инабат көтә алмайбыҙ, улар беҙгә яҡты сырай менән ҡолас йәйеп килмәҫ, алда үҙебеҙгә өлгөрөп, ҡулдан килгәнен эшләп ҡалырға кәрәк. Күҙгә күренгән бер ҡыйғыпырын мөҙҙәтендә сүпләп барыу хәйерлерәк булыр. Ҡалғандарын, аллаға тапшырып, иртән һөйләшербеҙ, — тине уйсан ғына.

Ҡунаҡтар һуң ғына таралышты.

## 7

Икенсе көн Ғәлимйән хажиҙың ҡунағы һуң ғына уянды. Күсере Солтанмәхмүткә «урам араһында темеҫкенеп йөрөү» ҡәтғи тыйылды. Ҡис кенә килеп хажи ҡапҡаһына аттарын терәгән Атнағол ауылы ҡунағын Яланда кешеғара күрмәне. Ахундың аттарын тик ҡараңғы төшкәс һарай эсендә генә эсерҙеләр. Күҙ бәйләнеп, кеше йөрөшө туҡтағас, Мөхәмәтшәриф, өҫтөнә елбәҙәк кенә кәзәкей ябынып, ян-яғына ҡарана-ҡарана имамдар өйөнә йүнәлде. Уны Мөхәмәтрәхим мулла ҡапҡа төбөндә үк сығып ҡаршы алды. Хужаның тәҙрәләре томаланған, яртылаш ергә һеңгән тәпәш өйөнә бөксәңләп килеп ингәс, ахун, аяҡ баҫырға тартынған кеше шикелле, тупһа төбөндә бер аҙ аптыранып, тапанып торҙо. Кәзәкейен үҙенә ҡулын һонған хужаға тотторҙо.

— Собханалла, собханалла. Ҡылған залимлыҡтары өсөн бәлшәүиктәрҙе нисек кисермәк кәрәк? Юҡ, юҡ, алла бойорһа, иртәгәнән башлап, аллаға тапшырып, был ләғнәттәрҙең баштарын өҙөп, ҡабырғалары менән көл ташытмай булмай, — тип һөйләнде.

Бындай һүҙҙе ул большевиктәргә асыуланып, былай ҙа кикреге ҡыҙарып йөрөгән имамды тағы ла көслөрәк ҡотортоу маҡсатында ысҡындырҙы. Үҙҙәренә ятышлы, ҡулай һүҙҙе ишеткәс, усаҡ тирәһендә аш яраштырып йөрөгән абыстай ғәрлегенән битенә тәгәрәп төшкән күҙ йәштәрен башына тартҡан таҫтарының осо менән һөртөп алды. Ярты битен ҡаплап, ҡунаҡ яғына боролдо.

— Бына шулай, ҡайнаға. Сит кешенән күрмәгәнде, үҙебеҙҙең ғәзиз балабыҙҙан күреп, ошо хәлгә ҡалдыҡ. Бер туған улы яғаһына йәбеште бит. Заман ахыры ошо булалыр инде. Ахырызаман килһә, сысҡан да ҡулына таяҡ тотоп йөрөр, тигән бит китапта, — тип элгәрге ваҡыттарҙа ахун менән асыҡтан-асыҡ һөйләшергә тартынған абыстай, үҙ аһ-зарын һөйләп, әҙерәк эс-зарын буҫҡәртеп алғандай булды.

— Күреп торам, күреп торам. Иреклеһән ошо бәрәс ояһында йәшәрлек кешеләрме ни һеҙ? Бөтә мосолман мөхтәрәм иткән мулла менән абыстай.

Ахун үҙ һүҙен ел ыңғайына һуҡтырҙы ла сирылған йәйпәк танауын ҡулъяулығы менән һөртөп алды.

Мулла ла, күңеле бушауҙан ирәбәләнеп, һүҙгә ҡыҫылды.

— Әйтерең бармы, уҙаман? Ҡартайған көндә, мәхәллә мосолмандарының ихтирамын күреп, түшәгемдә аллаһы тағәлә хөрмәтенә Мөхәммәт пәйғәмбәр хәдистәрен генә

тәкрарлап ултырырмын тип уйланылғайны, мына хас дошман бәлшәүиктс үҙ ҡуйынымда аҫрағанмын икән. Ошоларҙы ла күрергә насип итте тәңре.

Ҡунаҡ яңы ғына түшәлгән һикс өҫтөнә үтте. Ҡарайып бөткән мейес кәрнизендә торған шәмдең зәғиф кенә яҡтыһы түрҙә аяҡ салып ултырған ахун күләгәһен әллә нисек ҡурҡыныс итеп боҙоп күрһәтте. Уның түп-түңәрәк көмрө кәүҙәһе түтөнгә ыҫланып бәткән ҡара степала йәлпәш итеп күбәләнгән бесән күбәһе, ә итләс йомро башы күбә өҫтөнә түңкәрелгән ҙур ҡаҙан булып күренде. Уның алғараҡ сығып, һүҙ һөйләгәндә елберләп торған көрәктәй һаҡалы ҡапҡа төбөнә көлтәһен өҫкә күтәреп эленгән һеперткегә оҡшап ҡалды. Бишбармаҡҡа тотоноп алдынан хужа, ахундың ҡолағына эйелеп, ниҙер шыбырланы.

— Әйҙә, әйҙә, мәйелеңә ҡара, — тине ахун.

Һүҙ, билдәле, «аш алды» тураһында бара ине. Хужа үҙе бер ҡасан да ауыҙына алмаһа ла, был иблес ашын ахундың һирәк-һаяҡ ҡулланғанын ишетеп тә, күреп тә белә ине. Ҡунаҡ ҡымыҙ сеүәтәһе менән һалып биргән йылтырҙы әҙерәк һемерҙе лә ҡорот ҡапты.

Ошо уҡ ваҡытта ахун күсере Солтанмәхмүт мулланың ялсыһы ла, ат ҡараусыһы ла булып хеҙмәт иткән Ғәбделбарыйҙа сәй эсә ине. Үҙ ялсыларына ни тиклем генә ҡатынҡы, уҫал бәғерле булмаһын, Мөхәмәтрәхим мулла үҙ күсеренә биргән вәғәҙәһен үтәне: үҙҙәренең арандай ихатаһы мөйөшөнә уҫаҡтан биш аршынлы дүрткел өй һалып бирҙе. Башын тыранса менән яптырҙы. Алдарында йөрөгән аҫрау ҡыҙҙы, буй еткереп, Ғәбделбарыйға никахланы. Былай мулланың күҙгә күренеп, бешкән алма кеүек алһыуланып янып торған сибәр битле, һут йыйған сейә шикелле ҡарағусҡыл ирендәрен һәр ваҡыт ҡымтып йөрөгән, әҙәмгә алсаҡ, эшкә тилбер ҡыҙҙы өйөнән ситкә сығармай, үҙенә генә ижапларға ниәте лә юҡ түгел ине, ләкин Мәһитап абыстай ҡамасауланы, ваҡытында сараһын күреп өлгөрҙө. Бәлиғ булып килгән ҡыҙҙың йомролана башлаған арт һанынан, ике йәнәш түңкәрелгән сынаяҡ өҫтө шикелле ҡалҡа башлаған күкрәгенән күҙен алалмай тексәйеп ултырған мулланың аҙғын күңелендә ни ятҡанын һиҙеп ҡалды ла әле иллене генә ҡыуып барған шаҡтай таҙа абыстай иренең нәфсеһен бермә-бер баҫырға хәл итте. Элегерәк, ҡарт күңелендә уның икенсе мөхәббәте бөрөләнеп кенә килгән сағында, бөтә нәмәгә лә, шулай уҡ ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәренә ҡул һелтәп ҡараған абыстай башына ла әкренләп аҡыл керә башланы. Өй эшендә артыҡ бәрелмәй-һуғылмай ғына йәшәп килгән абыстай елкенсәк күңелле, дәрте урғылып торған быңа-

мын тигәп бисә ине. Өйҙә көн һайын бешерелгән бишбармаҡ, намаҙ һуңынан мулла артынан энәгә һапланған еп шикелле киске ашҡа йөрөүҙәр абыстайҙың тышҡы ҡиәфәтендә эҙ ҡалдырмай үтмәне. Уның бер ниндәй йыйырсыҡһыҙ, түп-түңәрәк, ап-аҡ биттәре, бер аҙ ҡалыная төшкән, үҙе әйтмәксе, «һөт шикелле пак» тәне теләһә ниндәй ирендә лә дәрт осҡоно ҡабыҙырлыҡ ине әле. Тик атаһы менән улының араһындағы мөнәсәбәт киҫкенләшкәс кенә, ул мулланан һыуына төштө. Ҡайһы саҡтарҙа иренең эске тойғоһо ташып, теге ҡулдарын бөйөрөнә яҡын килтерә башлаһа, унан ситләшергә ашыҡты. Артыҡ өй эшенә яғылмаһа ла, «көн буйы бил яҙмай, баш баҫып эшләүенә» һылтанды. Мулланың ете ҡат тиреһе аҫтына йәшергән иблесенең ҡуҙғалғанын һиҙеп ҡалғас, бермә-бер үҙгәрҙе. Күрнәсә стенаһындағы көҙгөгә көн һайын йышыраҡ ҡарай башланы. Зәйнулла ишандың абыстайы бүләк иткән, аҡ ҡалай менән көпләнгән ҡапҡасы эсенә төрлө сәй ҡағыҙҙары йәбештерелгән һандығы төбөнән кершән. һөрмә сығарҙы. Былай ҙа алһыу йөҙөнә кершән яҡты, ҡыйғас ҡаштарын, һөрмә тартып, оҙайтып ебәрҙе. Мәңге май еҫе аңҡып торған ауыҙынан ҡәләмдер өҙмәй башланы. Өҫ-башын да йышыраҡ алмаштырырға тотондо. Эшләһә-эшләмәһә лә, керләнгән күлдәген шамтыр бисәләр шикелле бөрмәһенә ҡыҫтырып йөрөүҙе ташланы. «Бөрсә ояһы» тип ҡайҙа-лыр ырғытҡан күлдәй күпмәне, ихата аша тартылған арҡан өҫтөнә һалып, көн буйы ҡаҡҡыланы ла кис, түшәк йәйгәндә, кейеҙ аҫтына һалды. Һуңғы йылдарҙа муллаға һыртын ҡуйып ята торған абыстай уға түше менән әйләнде, был үҙгәрештең сәбәбен төшөнә алмай түшәккә ятырятмаҫтан «йә алла, йә алла, үҙең ярлыҡа» тип уҡына башлаған ирен янып торған эҫе ҡосағына алды. Ун биш көн тигәндә әҙерәк һурығып тартылған мулла әфәнде «йәш кәләш» тураһындағы боҙоҡ фекерен башынан алып ырғытты. Ун биш көн тигәндә сәсрәп торған дәртле ҡатын мулланың барлыҡ ҡарыуын, ажарын ҡайтарҙы. Ул хатта, кис етә башлағас, хәләл ефете менән бер түшәктә ятырға ла шикләнә башланы. Бигерәк тә таң һарыһынан тороп, һыуыҡ һыу менән ауыр баҡырсаны күтәреп, баш аша ғөсөл ҡойоноу уның камил теңкәһен ҡоротто.

Бер мәл шулай, һыу тултырылған таш шикелле һәлмәк баҡырсаһы ҡулынан ысҡынып китте лә, башына килеп төштө. Асыуынан шартларға етешкән мулла, утлыҡ эсендә дөңгөрләп, кәзә-һарыҡты өркөттө, ерҙә ятҡан баҡырсаны тибәм тип, аяғын ауырттырҙы. Ул ошо ҡәһәр һуҡҡан ғөсөлдө уйлап сығарған пәйғәмбәрҙең исемен яманлап телгә алды. «Ни эшләп уны тәһәрәт урынына ситек тышынан

мәсих тартҡан рәүешле генә итеп ҡушмаған был Мөхәммәт пәйғәмбәр. Үҙенең хәләл ефете Хәҙисә менән ул әллә, әҙәм балалары шикелле, зина ҡылманымы икән, көнө-төнө дин юлында аллаһитәғәләнең беренсе рәсүле булып йөрөп, ғөсөл ҡойонорға нисек йыбанманы икән?» тип аптыраны. Муллаға ҡатыны күрһәткән мөхәббәт тойғоһо оҡшаһа ла, көн дә сығып ғөсөл ҡойоноу ҡағиҙәһен урын-еренә еткереп атҡарыу сей елкәһенә тейҙе. Ул тамам йыбанып туйҙы. Инде хәҙер мулла үҙ ҡатынына һыртын биреп ята башланы. «Ана шулай итәләр һинең шикелле аңра башҡортто, ҡабат, иблескә атланып, аҙғын фекер йөрөтмәҫкә шәп тә булыр» тип, Маһитап абыстай, үҙенең тапҡырлығына үҙе шатланды. Шунан һуң мулла, үҙ аҫрауына ҡаш һикертеп, ҡарашын атмаҫтай булды.

Бына бөгөн ситтән килгән ҡунаҡҡа йүгереп йөрөп сәй яһаған Ғәбделбарыйҙың ҡатыны алсаҡ битен Солтанмәхмүткә борҙо.

— Йә, бисәң иҫән-һау ғына ятамы? Ни эш бөтөрә? — тине лә үҙ һорауына үҙе үк яуап бирҙе. — Беҙҙең өй кешеһенең йомошо ғүмере лә бөтмәй инде ул. Әллә ҡайҙа ырап киткән донъяң да юҡ шикелле, әҙерәк ултырып тын алырлыҡ та форсат теймәй.

Ҡунаҡ кеше уның һүҙен ҡеүәтләгәндәй:

— Шулай инде. Донъя булғас, уның ҙуры ни ҙә, бәләкәйе ни. Ҙур өйгә нимә кәрәк, кесеһенә лә шул кәрәк. Беҙҙекеләр ҙә шул, тормош көтәм тигән булып, әләгеп-йығылып йөрөй шунда. — Әҙерәк өндәшмәй ултырғандан һуң Солтанмәхмүт һүҙ араһында һорап ҡуйҙы: — Беҙҙең хужа, ҡараңғы төшкәс тә, тамағын ҡыра-ҡыра ошо яҡҡа түбәнләгәйне, әллә Мөхәмәтрәхим мулла эргәһендә ултырамы?

— Эйе, бөгөн Маһитап абыстай мул итеп, ҡаҙан ҡылыһына еткергәнсе, аш һалдырғайны. Бына яңы ҡуҙалғыс йомошлап ингәйнем, шунда ике әшнә ҡыҙара-бүртеп ашанып ултыралар ине. Бик ҡысҡырып һөйләшәләр, әҙерәк шарап та һемерәләрҙер.

Солтанмәхмүт һағая төштө, ләкин үҙенең эске тулҡынланыуын тышҡа сығармаҫҡа тырышты. Ул һүҙен икенсе айышҡа борҙо.

— Йә, Ғәбделбарый, беҙ инде бер-беребеҙҙе дуҫ та, иптәш тә тип әйтә алабыҙ. Беҙҙең донъябыҙ ҙа шул бер сама инде. Башҡарған кәсебебеҙ ҙә бер төрлө. Мин — ахун ялсыһы, ә һин — имам ялсыһы. Яңы ғына иҫкә килеп төштө: хатта беҙҙең йәмәғәттәр ҙә муллаларҙың алдында йөрөгән аҫрауҙар ине лә баһа заманында. Хәҙер ҙә артып киткән ерҙәре юҡ та һуң, шулай ҙа хәләл бисәләр бит әле. Тормоштар нисегерәк? Ниҙәр ишетелә халыҡ ара-

һында? Беҙ берәй заман кеше ише нужаһыҙ етеш донъяла йәшәрбеҙме, юҡмы?

— Һин, дуҫ кеше, бөтә һорауыңды ла өйөп бирҙең бит әле, нисегерәк яуап бирәйем икән һуң?

— Әйҙә, был урын халыҡ мәхкәмәһе түгел, ә мин хаким түгел, нисек күңелең тарта, шулай яуап бир. Был әңгәмәнең бер ниндәй ҙә экен-сәкене юҡ.

— Минең ни әллә ҡайҙа киткән донъям юҡ. Бер ат та бер һыйыр. Бер нисә баш ваҡ мал көткән булам.

— Тәс минеке һымаҡ икән. Минең донъя ла, үлсәп бескәнме ни, һинеке шикелле. Үткән йыл иген сәсә алдыңмы?

— Бик күп булмаһа ла, шул үҙем шикелле ярлылар менән бергәләшеп, ике дисәтинәгә яҡын бойҙай, һоло сәстем. Байҙарҙыҡы ише емерелеп үҫмәһә лә, үҙебеҙгә ҡыш сығырлыҡ иген һуҡтыҡ. Әҙерәк быйылғы сәсеүгә орлоҡҡа ла ҡалыр тип өмөт тотам. Байҙарҙың бөтә нәмәһе лә етеш булғас, бер кемдән дә һоранып йөрөмәй, бер ыңғай ғына сәсә лә ташлайҙар. Беҙҙекеләр элекке йыл туңға һөрөп ҡалдырғайны, үткән йыл бер нисә ҡат тырматты ла сәстеләр. Уларҙың орлоғо ла әллә ҡайҙан килгән ҡый-һай түгел, казактар сәсә торған Кубань бойҙайы. Мулланың бойҙайы үткән йыл ҡойма шикелле үҫте. Бер биргәнгә хоҙайы ла емереп биреп тора бит уның. Беҙҙең ише ярлы ҡыутомшоҡҡа атлаған һайын соҡор.

— Быйыл нисегерәк уйлайһың? Беҙҙең ишеләргә берәр еңеллек ишетелмәйме?

— Насип булһа, быйыл да иген сәсмәйенсә булмаҫ. Бына ошо ихатаға, мулла өйөнә, Абрашау яғынан үҙебеҙҙең ауылдаш — Абдрахман тигән бер кеше күсеп килде. Кисә бик оҙаҡ ҡына һөйләшеп тә ултырғайныҡ. Ҡулынан эш килә. Әҙ-мәҙ грамотаһы ла бар, урыҫсаһы ла яҡшы уҡ күренә. Ул кешене ни һин яҡшы беләһең инде. Ул теге йот сыҡҡан йылды, һеҙҙең ауылға барып, мәрйә бисәһе менән халыҡҡа, укол тиме, шуны һалып йөрөнө.

Солтанмәхмүттең ҡапыл ниҙер иҫенә төшөп төҫө үҙгәреп китте лә, һиҙҙермәҫкә теләп, башын түбән эйҙе.

— Эйе, эйе, хәтергә төштө, бер ҡара шаҙраҡ мыҡты әҙәм халыҡтың арҡаһына энә ҡаҙаҡ йөрөгәйне.

— Самай шул үҙе инде. Шуның менән әңгәмәләшеп ултырғайныҡ. Фәҡир-фоҡор файҙаһына быйыл Совет хөкүмәте байтаҡ нәмә эшләргә уйлай икән. Шул турала һөйләнде әле...

— Ниндәй нәмәләр икән һуң? Хөкүмәт ярҙамында аяҡҡа баҫып, беҙҙең дә ошо ике йыртҡыс ҡулынан ысҡыныр көн булырмы икән? Йә, хоҙай.

— Булыр. Ошо йылдан башлап хөкүмәт ярлыларға

ярҙам итеү йөҙөнән кредит асҡан. Бына шул кредитты ярлы халыҡ үҙенә ат, эш ҡоралы, орлоҡ һатып алырға тотонорға хаҡы бар, ти. Ат тураһында бик аныҡ ҡына төшөнә алманым, әммә эш ҡорамалын, бынау тимер һабан, тырма шикелле нәмәләрен әйтәм, орлоғон хөкүмәт үҙе осһоҙ хаҡҡа һатып бирәсәк икән.

— Уның беҙ төшөнөп етмәгән берәй нәмәһе барҙыр инде, улай булмаһа, дәүләт шул тиклем атаңдан күрмәгән изгелекте эшләп ятмаҫ ине?

— Ул баяғы ярлы халыҡты үҙ ауылдарының кулактарына йылдың-йылы маңлай ороп, теҙ сүгеп һоранып йөрөмәҫкә, улар ҡулына түгел, үҙ ҡулына ҡаратырға тырыша, күрәһең.

— Бик тә уңай булыр ине ул. Фәҡир-фоҡара, үҙ алдына йәшәп, бер иркен тын алып ҡалыр ине.

— Шулай булмайса. Шунһыҙ, аҙым атлаған һайын кәпәс алып, шулар алдында бил бөгөргә тура килә. Ҡөҙ етһә, атын, орлоҡ биреп торған бай һинең игененә лә, үҙенә лә хужа. Ҡатын, бала-сағаң да, шуларҙың һүҙен йығып, бер аҙым атлай алмай. Хөкүмәт тиҙерәк ярлы-ялпыға ҡулын һуҙһа, үҙенә лә еңелгә тура килер ине тип уйлаған булам мин дә үҙемдең камил булмаған ҡара, тома һуҡыр баш менән.

— Шунан, баяғы Абдрахман тағы ла ниҙәр һөйләй?

— Бына яҙ сығабыҙ ҙа, Өмөтҡужа арығында һыу ебәреп, туғайында бесән үҫтереү өсөн тәүәричество, тиме, ниҙер ойоштором, тип торҙо. Бөтә ярлыларҙы шул әртилгә йыям, ти.

— Тағы ниндәй, беҙҙең өсөн ятышлы, яңылыҡтар һөйләне ул ҡырҙан күсеп килгән әҙәм? — Ҡунаҡ төпсөнөүен дауам итте.

Ғәбделбарый, бисәһенең ниндәйҙер йомош менән сығып китеүен көтәүелләберәк ултырҙы ла «әйтергәме-әйтмәҫкәме?» тигән шикелле яҡ-яғына ҡаранды.

— Иң һуңынан мине еңемдән тартып әүеҫлек эсенә индерҙе лә «ә бына мыныһы инде һинең үҙең өсөн генә әйтелә» тип, минең ҡолаҡҡа шыбырларға тотондо.

— Йә, ул ниндәй бик йәшертен хәбәр?

Ҡунаҡ хужаға шыуышып ултырҙы.

Ғәбделбарый, үҙенең икеләнеүен йәшерә алмай, тағы ла ултырған урынында борғаланып алды ла үҙе лә ҡунаҡтың ҡолағы төбөндә шыбырлай башланы.

— Тик һин генә үҙ кеше, яҡын дуҫ ҡына итеп әйтәм. Һин дә шул, минең шикелле, ғүмер буйы ахун артынан муйнаҡтай йөрөмәҫһең бит инде. Беҙгә лә шул үҙебеҙҙең баш менән әҙерәк тормош ағышының ҡайҙа барғанын төҫ-

мөрләргә ваҡыттыр. Ахун менән мулла былай ҙа беҙҙең арҡаның ете ҡат тиреһен етерлек һуйҙылар бит, уларҙың малы хоҡуғында тағы ла күпме йәшәргә мөмкин?

Солтанмәхмүт түҙмәне:

— Һин бөгөн үҙ һүҙеңде әллә нисегерәк, уратып-уратып, һөйләйһең әле. Шуны ҡырҡараҡ һуғып әйтеп булмаймы?

— Ҡыҫҡаһы шул. Абдрахман мынауындай өҙәрем юлда ахундың үҙ әшнәһенә килеп төшөүен кисә үк ишеткән. «Ул ҡарт төлкө тигенгә генә ат ҡыуып килмәгәндер, беҙгә лә күҙ-колаҡ булып, һағыраҡ булыу ҡамасауламаҫ. Моғайын, ул Ғәлимйән дуҫына бер этлек уйлап килеп төшкәндер. Бына һүҙенең нөсхәһен белергә ине», ти. — Ғәбделбарый үҙ һүҙен тағы ла әкренәйтте. — Ауыл кулактарының, ахун, муллаларҙың көнө һанаулы ҡалды. Совет власы бына әҙерәк быуынын ныҒытып алһа, уларҙың барыһының да ҡойроғона баҫасаҡ, ауылда ергә ярлы халыҡ хужа булып ҡаласаҡ, ти.

— Эйе, нисек тә шулай булмаған ти? Мөхәмәтшәриф ахундың ғүмер буйы өс йөҙ илле баш йылҡы йөрөткән тибенлеген, Ирәндектең ул биләгән теге көньяҡ уйпатын әйтәм, ул үҙ теләге менән һиңә тоттороп ебәрер?

— Тиҙҙән уның ана шул тибенлеге лә, Ирәндектең тау үңерендәге шарлауыҡ бар бит әле, шунда ҡара сәүкә шикелле тулып ятҡан малы ла ярлыларға ҡала, ти.

— Ай-һай? Беҙҙә уны әйләндереп килтереп сығарырлыҡ көс ҡайҙа имеш? Һәр бер үлгән ҡорсаңғы бәрәсе, бактаһын ҡоя алмаған байталы өсөн беҙҙең ахун йәнен фиҙа ҡылырға әҙер. Ә бында һин, уның өйөр-өйөр йылҡыһын беҙгә ҡала, тип хәбәр һөйләйһең. Ун биш өйөр йылҡыһын, сереп ятҡан мөлкәтен ул бер кемгә лә үҙ теләге менән ҡулынан ысҡындырмай инде. Ул әле һаман шул байлыҡ ҡыуа, игенен сәстерә, йөкләп-йөкләп тирә-яҡтағы йәрминкәләргә бойҙай оҙата, үҙ малын һаттырыу өсөн Орскиға, Ырымбурға тиклем ҡыуа бит.

— Беҙ уларҙың харам йыйған мөлкәтен, кәртә тулы малын, бура тулы игенен көс менән тартып алырға тейешбеҙ, ти Абдрахман.

— Шунан уларҙың ул байлығы менән ни ҡылабыҙ? Ярлыларға өй һайын таратып бирәләрме икән ни? Уларҙың малын тартып алып, иркенләп тормош көтөп, күпләп иген сәсеп, үҙ бураларыбыҙҙы тултыра башлаһаҡ, кәртәләге малыбыҙ ишәйеп үрсей башлаһа, беҙ үҙебеҙ бер нисә йылдан шулар һымаҡ уҡ байығып китмәбеҙме? Шунан ул байлыҡ менән эш итергә, уны әйләндереп сығарырға көстән килмәй башлаһа, беҙ ҙә улар һымаҡ бат-

рак яллай башларбыҙмы? Һуңынан, кеше көсөн файҙаланып байыҡтың тип, инде беҙҙең яғанан алырға килерҙәр.

— Ҡайтанан ошолай килеп сыҡмаһын өсөн, башта бына ауылдарҙа ерҙе бергәләп дәүләт ярҙамында эшкәртеү өсөн, тәүәричестволар төҙөлөргә тейеш, хәҙергә уны үҙем дә бик белеп еткермәйем, тиҙҙән юғары волос, кантондарҙан кәрәкле ҡағыҙ килеп төшкәс тә, эшкә тотонасаҡ. Был ярлылар әртиле булырға тейеш, ти.

— Былай, уның һөйләүенә ҡарағанда, ул беҙҙең өсөн ҡулайлы эш булырға оҡшай ҙа һуң инде? Ләкин беҙгә ул әртилдәрендә тыныс ҡына эшләргә ошо уҡ һинең менән минең хужа ирек бирмәҫтәр.

— Әллә? Уларҙың ерен дә, малын да һәм бөтә байлығын да киләсәктә үҙ ҡулыбыҙға тартып аласаҡбыҙ, әгәр инде ҡаршылаша башлаһалар, уларҙы хөкөмгә тарттырып, һөргөнгә оҙатасаҡбыҙ, тип бик асыҡлап әйтте. Сөнки тигәндә, уларҙың бөтә байлығы ярлылар көсө менән йыйылған, шуға ла уларҙың ҡулына кире ҡайтырға тейеш, имеш.

— Уныһы шулай инде, Ғәбделбарый дуҫ, кешенең изге мөлкәтенә ҡул һуҙыу, хәрәм мал йыйыу ислам динендә бик оло гонаһ хисаплана бит әле, уға беҙҙең ғүмер баҡый маңлай ороп аллаға ғибәҙәт ҡылған мосолман, ай-һай, барыр микән?

— Мин дә баштараҡ шундай фекерҙәрәк инем. Нисә әйтһәң дә, Мөхәмәтрәхим мулла «фани донъяла башҡа кешенең мөлкәтенә ҡул һуҙыуҙан да ҙур гонаһ юҡ. Әрүәх өсөн унан да ҡатыраҡ яза ҡуйылмаған, бындай мосолмандың йәнен теге донъяның зобанийҙары ғүмер буйы тамуҡта яндырыр», тип ҡурҡытҡас, мин үҙем дә шөрләп йөрөгәйнем.

— Ә хәҙер ҡурҡмайһыңмы? Нисек улай бик тиҙ генә батырайып киттең һуң әле?

— Бына бер көн минең ай-вайыма ҡуймай мулла малайы Уйылдан, ҡулымдан һөйрәп тигәндәй, мине Ғәлимйән хажи өйөнә әйҙәләне. Баҡһаң, унда баяғы йәштәр ойоштортан «аллаһыҙҙар» тиме, шуларҙың йыйылышы бара икән. Бер яҡта дин әһелдәре, икенсе яҡта баяғы аллаһыҙ йәштәр ултырып алғандар ҙа — әйҙә талаш, малай. Бер яҡта йәштәрҙең башлығы ауыл мөғәллиме Аҡмал Әлимғәфәров «алла юҡ, ислам динен тик бай ҡатлам кешеләре үҙ мәнфәғәттәрендә файҙаланыу, ярлыларҙың күҙен бәйләү өсөн генә уйлап сығарған», тип ҡысҡыра. Ә икенсе яҡта минең мулла таяғына таянған да, иҙәнгә туҡылдата-туҡылдата «алла бар, алла бер, барыбыҙ ҙа: әҙәм генә

түгел, бөтә мал-тыуар, ер-һыу, ер йөҙөндәге бөкилле нәмә аллаһы тәғәләнең ҡушыуы менән яратылған. Мөхәммәт — алланың пәйғәмбәре, уның ерҙәге рәсүле» тип талаша. «Әгәр ҙә мәгәр ҡем дә кем алланы юҡ тип инҡар итә икән, ул бәндәне шул минутта уҡ хоҙай орһа, бына һин бөгөн төндә тәңрене битәрләгән өсөн, уның ҡаты язаһына юлығаһың, үҙ түшәгеңдә, таң атҡансы, алла бойорһа, йән бирәһең», тине. Бөтәбеҙ ҙә, ҡурҡышып, Аҡмал мөғәллимде икенсе көнөнә ҡуйырға, теге донъяға йыйыштырырға әҙерләнеп ҡайттыҡ. Әй көтәбеҙ, әй көтәбеҙ. Мулла өйөнә дәррәү йүгереп ҡайтып инде лә, анан-мынан тәһәрәт алып, Аҡмалдың үлемен теләп, ғибәҙәткә ултырҙы. Мин «былай булғас, мөғәллимдең башы китте инде, исмаһам, үлер алдынан мулланан килеп бәхиллек һораһа ла ни була?» тип көтәм тегене

— Шунан нисегерәк барып бөттө был мөғәллим ҡиссаһы? Үлдеме, әллә әле лә тереме?

— Тере генәме ни? Өҙә баҫып йөрөй. Ул ғына тиһең әле һин. Бөгөнгө йәстең намаҙында имам вәғәзенән һуң, мәсет мөнбәренә баҫып тағы ла аллаһын да, муллаһын да туҙҙырып төштө. Бөтә ғибәҙәткә йыйылған түбәнге мәхәллә мосолманы хайран ҡалды. Мына шул.

— Нимәһе шул?

— Нимәһе тип ни? Бына шунда барып ҡайтҡаны бирле, мин үҙем дә алланың барлығына шикләнә башланым. Бер нисә көндән тағы ла шундай йыйылыш була. Барырға тип торам. Нисектер минең бер барыуҙа уҡ, ямғыр һыуы менән йыуған кеүек, күҙ асылып ҡалды.

Өй хужаһының һүҙен диҡҡәт менән тыңлап ултырған Солтанмәхмүт:

— Әлләсе. Былай бик мәҙәк тә һуң, тик әҙерәк ҡурҡыта бит әле, өҙөп кенә әйтеүе ҡыйын шул, — тип баш сайҡаны.

Хужабикә самауырҙы яңыртып килтереүгә, ҡунаҡ менән хужа «әҙерәк тышҡа сығып, тын алып, һауа алмаштырып инәйек» тип өйгә терәлеп тигәндәй ултырған, ҡапҡаһы асыҡ ҡараңғы утлыҡҡа йүнәлделәр. Утлыҡ эсендә ике кешенең ҡысҡырып-ҡысҡырып һөйләшкән өҙөк-өҙөк тауыштары ишетелде.

— Бына шул, мулла, — тине ҡалынырак тауышлыһы.— Алла теләһә, ошонан ҡайтам да Солтанмәхмүтте ебәрәм... Барыһын да энәһен-ептән һорашып, белеп ҡайтһын... Былайтып миңрәүләнеп, ғәмһеҙ ятып булмай, үҙебеҙҙең уңасҡа боғал һалғанды көткәнсе, ул ләғнәттәргә ҡаршы ҡулдан килгәнде эшләп ҡалырға кәрәк. Абдрахманын да... Уйылданын да...

Быныһы Мөхәмәтшәриф ахун тауышы ине. Ә икенсеһе, нескәрәк тауышлыһы, беренсеһенең һүҙен ҡеүәтләне.

— Үҙ малайым тип ҡарап тороп булмаҫ. Ул эттән тыуғанға бәнем фатихам юҡ. — Быны мулла әйтте.

— Теге Фәйзулла хажиҙың һаңғырауын да күмәгәйенән ырғаҡҡа элер кәрәк, йәштәр араһында ҡотҡо таратып йөрөмәһен, эт ҡойҡаһы, — тине тәүге тауыш.

Былар һөйләгән хәүефле хәбәрҙе ишеткәс, Ғәбделбарый ҡалтыранды һәм ҡапыл, үҙе лә аңғармаҫтан, ҡунағының итәгенән тартты. Улар шым ғына өйгә инделәр. Бер аҙ шәм яҡтыһында бер-береһенә ҡарап, аптырашып торғандан һуң, һүҙһеҙ генә урындарына үттеләр. Ғәбделбарый алдына ҡуйылған сынаяҡ аҫтына дерелдәгән ҡулы менән сәй һалды.

— Йә, ишеттеңме? — тип һораны.

Ә тегеһе, тел менән яуап биреү урынына аңлағанын белдереп, башын ғына һелкте.

Күрше өйҙә, аш алдында, бына ниндәй кәңәш беректерҙе был ике изге кеше. Мөхәмәтшәриф ахун хужаның тулыһынса, йәне-тәне менән үҙ яҡлы икәнен белгәс, һүҙҙе артыҡ сурытмай, тоҡан һуҡты.

— Иртәгә Атнағолға ҡайтып төшәм дә, иртәнән һуңға Солтанмәхмүтте Абрашауға юллатам. Һинең күрнәсәңдә хужа булып ятҡан был бәндәнең ул урыҫ хуторында ни рәүешле йәшәүен, ниҙәр ҡылғанын, минең знакумға төшөп, бәйнә-бәйнә белешеп ҡайтһын. Бәлки, беҙ уйлағанса, бер ергә лә моронон тыҡмай, ҡулын сусаңлатмай — шул Белов тиһеңме әле уның хужаһын? — ҡартында тик кенә ятҡандыр, бәлки, мында күсеп килгәс тә, бер ергә лә ҡыҫылып йөрөмәй, яңынан донъя көтә башлау ғәме менән шөғөлдөр ул әҙәмегеҙ? Ул хосус та уға тейеп, көн элгәре ҡужғырыуҙан бер ниндәй ҙә фәтеүә юҡ. Әйҙә, йөрөй бирһен үҙ яйына. Беҙгә шойҡаны теймәгән кешенең ғүмерен юйып, нишләп башты тәгәрмәс араһына тыҡмаға? Шулай түгелме, имам?

— Һүҙең бик хаҡ, ахун. Раҫы ла шул. Ләкин был эште бик һуңға ҡалдырырға ярамай. Изге эште хоҙай ашыҡтырырға ҡушҡан.

— Знамо, знамо. Уның мөҙҙәтен бик ҡыҫҡа тоторбоҙ, алла бойорһа, сөнки тигәндә, һәр көн — беҙҙең өсөн ҡиммәт. Ни тәкәбелеһе ваҡыт күберәк үтһә, шул тиклем беҙҙең ҡарыуыбыҙ бөтә, ә уларҙың быуыны ныҒый бара. Ҡош балаһын, ҡанаты сығып өлгөрмәҫ элгәре, үҙ ояһында туҙҙырыу хәйерлерәк.

— Быны, ахун, иисегерәк атҡарып сығырға кәңәш бирәһеңме?

— Үҙеңә мәғлүм, кеше йәнен ҡыйыуҙы үҙ ҡулыбыҙ менән башҡарып сыға алмабыҙ. Беҙ ауырайғанбыҙ ҙа, ҡартайыуыбыҙ ҙа еткән, ундай эшкә ҡулдарҙың ҡарыуы ла ҡайтҡан, йөрәктең рәте юҡ. Уны баштан-аяҡ кеше ҡулы менән эшләтербеҙ инде, быны аҡса, мал эшләтә. Әлеге лә баяғы Хажиәхмәт Унасов ҡалдығына, мәмерйә йыртҡысы Дәүләткирәйгә, ҡушабыҙ инде. Был эшкә бөгөн генә һурылып сығырға торған таяр ғына башҡа кем бар?

— Бик тә хәтәр эш шул. Кеше үлтереү ул, ҡиблаға муйынын баҫып, кәзә салыу түгел бит. Ғазраил ғәлиәссәләмдең вазифаһын иңебеҙгә күтәреп, эңербауға ҡәҙәр гонаһҡа батабыҙ инде.

Мулланың икеләнеүен төҫмөрләп, ахундың бите ҡыҙарҙы, ике урты төйөрләнде.

— Әллә һинең башҡа фекерең бармы? Имам булғас, бәлки, һинең ғазраилды йомошарлыҡ ҡөҙрәтең барҙыр? Мин бик тә разый, нишләп бөкилле бәлшәүикте ҡырмаға бойормайһың? — тип ахун былай ҙа йәйпәк битен турһайтып ситкә боролдо.

Ҡапыл төҫө үҙгәргән мулла ялбарған ҡиәфәттә:

— Юҡ, юҡ, әфәнде. Бирәйбә, һин ни бойораһың, мин шуға риза, — тип һаҡалын һелкте.

— Юҡ инде, мынауындай бола саҡта ундай баш күтерлек эште ышанып ҡына тапшырырлыҡ кешеһе ҡайҙа һуң, тип кенә әйтмәксе инем. — Ахун тыныслана төштө. — Шул, шул. Әллә нисә кәррә бысранған шул Дәүләткирәй эшләй инде уны. Ул былай ҙа ике терһәгенә ҡәҙәр әҙәм ҡанына батҡан, күптән инде ҡамауҙа, ситлектәге йыртҡыс шикелле мәмерйәһендә бөгөнмө-иртәгәме тип үҙ үлемен көтөп ята. Үҙенең ирке менән хөкүмәт ҡулына бирелеп ҡуймаҫтан элгәре өлгөрөп ҡалыу хәйерлерәк булыр. Яһалған ҡапҡан өҫтөнә аяҡтары менән баҫырға торған әҙәмдән уныһы ла булыуы мөмкин, хәҙер ул ҡоторған йыртҡыс менән бәрәбәр, ҡайҙа барып һуғылырға белмәй, күҙе тоноп алған инде уның.

Эш тәрәнгә китә башлағас, әле генә ризалығын биреп баш һелкеп ултырған имамдың йәлпәк бите тағы аҫҡа тартылды, майлы күҙҙәре түңәрәкләнде, ике ҡатлы ҡалын эйәге һалпайып төштө.

— Ахун әфәнде, илаһи берүк был ҡанлы фажиғә минең ихатамда булмаһын инде!

Хужа, ҡобараһы осоп, ике ҡулын күкрәгенә һалды.

— Һин нимә, көн элгәре һеркелдәп ултыраһың? Һинеңсә, уларҙы мин үҙ ҡапҡам эсендә үлтерәйемме?

— Йәндәрен йәһәннәмгә оҙатаһы кешеләр бөтәһе лә һинең ауылдаштарың, шуларҙың икеһе менән һин үҙең бер

ҡыйыҡ аҫтында йәшәп ятаһың. Әллә һин уларҙың өсөһөнөң дә аяҡ-ҡулын бәйләп минә оҙатмаҡсыһыңмы?

— Юғын юҡ та, ләкин бик төптән уйлашыу кәрәк. Был бик тә шөбһәле, мәсьүлиәтле эштән ситтәрәк тороу хәйерлерәк булмаҫмы тип уйлайым ғына.

— Күптән уйланған инде. Волостағы түрәләр бындағы камсамул ләғнәттәрҙе берәр ваҡыт Нәмәскә саҡырмай әмәлдәре булмаҫтыр бит инде. Мөхәмәтнурын саҡыртһалар, пар атынды егәһең дә Уйылданыңды үҙ аттарыңа күсер итеп, кузлаға ултыртаһың. Шул волосҡа бара торған әҙер атҡа ултырып, һинең өйөндә биләп ятҡан анауы Абдрахмандың, нужәли, волосҡа барып, үҙен күрһәтеп ҡайтҡыһы килмәҫ? Ауылына күсеп килеп, төпләнергә ниәте булһа, ул, күҙе лә йөҙө, шул волость үҙәгенә барып, күрәһе кешеләрен күреп, һөйләшә торғаны менән һөйләшеп аҡыл алып ҡайтырға тейеш. Быныһы мотлаҡ. Әгәр инде ауылдан сығып йөрөргә ниәте булмаһа, һин бында ни өсөн?

— Мин нишләргә тейеш?

— Һин, ауыҙыңды киң асып, ҙур ризалыҡ менән йылмаяһың да, ҡарт төлкө шикелле ҡойроғоңдо уңлы-һуллы һелтәп, «Абдрахман ҡустым, үҙеңә ат ҡыуғансы, һинең һымаҡ эшлекле, абруйлы кешенең волосҡа барып ҡайта торған йомош-юлы булмай булмаҫ. Әйҙә, әҙер атҡа ултырып, мынауындай хозур мәлдә, йәштәр менән бергәләп, рәхәтләнеп юл йөрөп ҡайтығыҙ», тиһең.

— Ағай, илтифатың өсөн ҙур рәхмәт, әле хәҙергә бер ҡайҙа ла барырға йыйынмайым. Әҙерәк баш-күҙ алғас, ҡатын менән малайҙы ултыртып иркенләп барып ҡайтырмын әле, тиһә?

— Нишләп әле хәҙергә ул яңы ғына килеп төшкән килен менән малайыңды йонсотоп йөрөп ятырға? Башта үҙең генә барып, ул волость хәлдәрен белеп ҡайтһаң, хәйерле булыр, аҙаҡтан, алла теләһә, өсәүләп барырһығыҙ, тиһең инде, башҡаса ни тип әйтәһең?

— Ай-һай...

Мулла, башын ҡалҡытып, үҙенә текләгән ахунға ҡурҡаҡ ҡарашын атты ла, башын йәнә түбән эйеп, уйға сумды.

— Уйла-уйлама, уларҙың барыһын да уҡмаштырып, бергә юлға сығарып ебәреү һинең вазифаңда. Ни булғанда ла, Ирәндектең Йәнгүҙәйе аҫтындағы ҡарурманды улар көн кискә һарыҡҡас үтергә тейештәр. Шуның өсөн уларҙың ауылдан кискә табан, яҡты күҙҙә, сығып китеүҙәре мотлаҡ. Бына шул. Бүтәнсә уның бер ниндәй ҙә әмәле юҡ. Бына ошо йомошто, йәғни, шуларҙың өсөһөн дә ми-

сәүле атыңа ултыртып, волостка сығарып ебәрә алһаң — ҡалғаны барыһы ла минең өҫтә, тик ул ҡорбан булаһы бәйнәл-миләлдәрҙең һинең ҡапҡандан ҡасан сығып китеүҙәрен мин көн элгәре белергә тейеш. Миңә уларҙың юлына арҡыры төшә торған кешеләр табып алырға ла ваҡыт кәрәк тә. Әле мин дә, һин дә теге бетлеғош Дәүләткирәйҙең ни тип әйтерен белмәйбеҙ. Теге ваҡыттағы ҡылған, мынауы һеҙҙең Абдрахман менән булған ваҡиғаны әйтәм, эше өсөн дә ул әҙәм, йәне алҡымына килеп, күпме шөрләп йөрөнө. Ай-һай, бик ҡаты барҙы бит тәфтиш. Иллалла менән саҡ ҡотолоп ҡалдыҡ. Өсәүҙән шул мәмерйәһендә Дәүләткирәй бер үҙе тороп ҡалды бит инде.

Ахундың күңелһеҙ ҡиссаһын тыңлап, мулланың күңеле бермә-бер һүрелде. Үҙен дар ағасына аҫылған көйөнсә елгә тирбәлгән үлек итеп күҙ алдына килтерҙе лә «Иннәла иләйһи...» тип эстән генә уҡынды, ләкин ахундың да бошонған күңелен күтәрергә теләптерме:

— Ахун әфәнде, ул Дәүләткирәй арҡырыланып, баш тартып тормаһа ярай ҙа? — тип һораған булды.

— Һыйың үтһә, баш тартып ҡайҙа барһын? Былай кеше башын ашауға тотонғас, ҡарунланып, болдо бармаҡ араһынан ҡыҫып сығарып булмай инде. Мулыраҡ вәғәҙә итергә тура килер.

— Эйе, эйе, тейешле әжәрен бирмәй хәл юҡ.

Мулла һүҙен ахун йәнә үҙенә ташлаған һымаҡ ҡабул итте.

— Әжер, тиһең инде, ә? Ул һиңә фытыр-саҙаҡа йәки ғөшөр ҡәҙәре генә тип уйлайһыңмы? Ул үҙ эшен башҡарырға башын һалһа, һин әйтмәксе, әжерен дә умырып һорай инде. Ғазраил вазифаһын башҡарып, әҙәми зат йәнен алыу уйын эшме?

— Бигүк бизунланып, теймәҫен һорап ҡырталашмаһа, ярай ҙа һуң?

— Әй, мулла, мулла, ут төртөүсенең ҡулына шырпыңды һалғас, нисә өй яныруын алдан ғына әйтеп булмай инде, күпме яндырһа ла уның мәйелендә. «Менгәшмә, менгәшһәң... ауырта тип өндәшмә» тигәндәр бит боронғолар. Арт шәрифең ҡырылһа, әмәлең юҡ, түҙәһең инде — икәүең бер атҡа менгәшеп алғас, күпме һорау — уның выжданында. Уныһынан мин артыҡ шикләнмәйем дә ул. Мине икенсе нәмә борсой.

— Йә, йә, ахун, һине борсоған ул ни?

— Бына барыһын да һөйләшеп бөтөрөп, уҫка-усты шапылдатып һуҡҡас, теге берәҙек үҙ башын ҡотолдормаҡ булып, ошо һүҙҙе түкмәй-сәсмәй Ғыпыуы ҡолағына алып барып еткерһенсе, шунан был ни менән барып бөтөүе

мөмкин? Бына шуға ла алып барып һуғыуы бар бит әле был хәтәр эштең, ул саҡта беҙгә ниндәй сара? — Ахун һуҡ бармағын уң күҙенән өҫкә күтәрҙе лә ҡапыл аҫҡа, иҙәнгә, төрттө. Ҡалын, еүеш ирендәрен шапылдатып алды. — Йүнле мосолмандың мәйете бына ошонда була. Ә беҙҙең мәйет, — ул бармағын тағы өҫкә сөйҙө, — Микулай мәйете шикелле яндырылып, османға һибеләсәк. Әлхасыл көлгә әйләнгән беҙҙең мәйеткә далалағы ел хужа.

Ҡурҡышынан күҙе түбәһенә сыҡҡан мулла түҙмәне:

— Ыстағафирулла, лә илаһи иллалла... бигерәк ҡанһыҙҙар икән был бәлшәүик булған нәмәләре.

Ахун бүленеп ҡалған һүҙен дауам итте.

— Ә беҙ һинең менән, бәҙрәфкә үҙебеҙ йөрөмәйенсә генә, сит кешенең арт шәрифе менән үҙ йомошобоҙҙо башҡарырға уйлайбыҙ. Был юлыһы улай ғына барып сыҡмаҫ, күрәһең. Ҡыйын булһа ла, үҙ ярауыңды үҙең башҡарырға тура килер, ахыры. Тик, мулла, Дәүләткирәйгә бирәһе болдо беҙгә икәүләп күтәрергә тура килер. Теге саҡта ла ул бешәлкеһеҙҙәрҙең булдыҡһыҙлығы арҡаһында барып сыҡмаған эш өсөн ҡом түләүле булып ҡалдым. Эштәре бойомға ашмағас, бәлки, һорамаҫтар ҙа тип уйлағайным. Ҡайҙа ул? Алмай буламы ни? Муйындан һығып алдылар. Бына шулай ул, бысраҡ менән бәйләнһәң, һин үҙең дә шул бысраҡҡа тарымай әмәлең юҡ. Был юлыға үҙ тәһәрәтебеҙҙе һындырырға тура килер ахыры, әҙ-мәҙ уларҙың бысрағы ла өҫ-башҡа яғылмай ҡотола алмабыҙ. Бына шулай, мулла. Был юлы баяғы үҙең әйткән «әжәрен» уртаҡ күтәрәбеҙ инде.

Мулла тағы уфтанды.

— Вай, донъя! Ҡилде бит заманалар. Ошо Рамазан шәрифендә, изге ай, изге көндә үҙеңдең ғәзиз балаңды, хаҡ биреп, ғазраил яллап, йәнен ҡыймаға ризалыҡ биреп ултыр инде. Башыңа ла һыйырлыҡ түгел бит был эш, ыстағафирулла.

— Ә һин, мулла әфәнде, нисек уйлағайның? Һин ул ләғнәттәрҙең бөгөн йәнен алмаһаң, иртәгә һинең йәneңде алыу өсөн улар үҙ түшәгеңә киләсәк. Йә һин, йә улар! Ҡем өлгөрөп ҡала. Замана шулай. Уның бүтән юлы юҡ. Йә, ярай, былай ҙа оҙаҡ һөйләштек. Юл кешеһенең юлда булғаны яҡшы. Донъя хәлен белеп булмай. Былай барыһын да һөйләшеп бөттөк, буғай.

Бишбармаҡ ашап ауырайған ахун, йыш-йыш тын алып, урынынан ҡуҙғалды.

— Йә, изге сәғәттә ултырып бер фатиха бирәйек тә юлда булайыҡ.

Тәпәш кенә һике йөҙлөгәнә ултырып, улар бик оҙаҡ уҡынып доға ҡылдылар.

— Ярай, ҡапҡа тышына сығып йөрөмә инде. Артыҡ кеше күҙенә күренеп йөрөмәйек. — Ҡунаҡ хужаны ихата эсендә ҡалдырҙы. — Миңә көн элгәре хәбәрең килеп етһен. Ҡешегә ышанмай, үҙеңдең килеп китеүең хәйерлерәк булыр.

...Яңы өҫтәлгән самауырҙы бүҫкәтеп өлгөргән Солтанмәхмүт менән Ғәбделбарый ҙа урындарынан ҡуҙғалды. Соланға сыҡҡас, хужа Атнағол ҡунағының ҡолағына шыбырланы.

— Ара алыҫ түгел. Мынауындай ҡараңғы төндә Ялан менән Атнағол ауылын ике тапҡыр урарға була. Берәй шипкерт һиҙелһә, барыһын да түкмәй-сәсмәй бында еткереп тор. Беҙҙең мәшәүлек арҡаһында бынау йәштәрҙең ғүмерен өҙөп ҡуйыуҙары бар. Уларҙан инабат көтөп булмай.

— Ярар, ярар. Бик дөрөҫ.

Ялан аяғына эләктергән ҡатаһын ишек төбөнә ырғытты ла, Мөхәмәтрәхим мулла, киске намаҙын да уҡып тормай, мөйөшкә йәйелгән түшәгенә ауҙы, ләкин ахун алдында эсендәге бөтә бөтмөшөн солғап алған ҡурҡыу тойғоһон йәшерергә тырышыуы, хәҙер инде үҙе яңғыҙ ҡалғас, тышҡа бәреп сыҡты. Үҙ яҡындарына, бигерәк тә йәмәғәте Маһитапҡа, нисек кенә ҡаты бәғерле булмаһын, әле ошоға тиклем уның «бәлшәүиктәр» артынан сапҡан Уйылданына булған йән асыуы уның үҙ өйөндә күҙмә-күҙ килеп ҡысҡырышып-талашыуҙан уҙып киткәне юҡ ине. Ана бер көн Уйылдан менән килеп сыҡҡан низға ла үҙенең артыҡ түҙемһеҙләнеп әпесләнеүенән булды.

«Атта ла бар, тәртәлә лә бар» тигән һымағыраҡ инде. Уйылданға асыуланып, шул тиклем ҡыҙып бармаға? Бына хәҙер үҙемдең мал өйөмдә яңғыҙ баламдың йәненә ҡул һуҙырға ултырам. Собханалла, собханалла, эй яраббым хоҙай!»

Мулланы йоҡо алманы. Бөтә тәне тапма тотҡан шикелле ҡалтыранды, йыш-йыш типкән йөрәге күкрәгенә һыймай туланы, ике сикәһе ҡыҫты, дөйә йөнөнән һырылған ҡабарынҡы еңел генә юрған үҙ өҫтөнә өйөлгән ауыр кәбер балсығылай тойолдо. Саҡ ҡына ҡуҙғалһа, алҡымына килеп тығылған йәне бөтөнләй осоп сығып китер һымаҡ булды. Ни эшләргә? Ҡайҙа маңлай орор әмәл юҡ. Тик кенә ятһаң, бер заман барыбер килеп ишек ҡағалар инде. Ахун артынан эйәрһәң, уның һуҡмағы бигерәк тайғаҡ, унан ғәйре, үтә лә хәүефле. Бошондо мулла, нык бошондо. Бер аҙ ғына күҙе йомолоп серемгә киткәйне,

әллә ниндәй ҡурҡыныс төш күреп, баҫлығып уянды. Аҡ ыштан, күлдәксән генә үңәсенән аҫылынған көйөнсә үҙе дар ағасы аҫтында бәүелеп тора, ә Уйылданы дар ағасының арҡыры бүрәнәһе өҫтөндә атаһының муйынына һала торған арҡан боғалын көлә-көлә һабынлап ултыра...

Өҫтән аҫҡа шымарған арҡан дүңгәләгеп атаһының муйынына ташланы ла Уйылдан, һабынлы ҡулдарын итәгенә һөртөп:

—Һине, ҡарт шайтанды, ҡотортоп йөрөгән ахундың ҡайҙа? Уға арҡандың яңы ишелгәнен шымартып ултырам әле, бына-быны ул да ошонда үҙ йәнен бирмәгә ашығып килеп етергә тейеш. Һеҙгә, ғүмер буйы изге юлда йөрөгән дин кешеләренә, йән биреү нимә ул? Һеҙҙең йәнегеҙ барыбер теге донъяла ла ожмахта, һөт йылғаһы ағып ятҡан ерҙә, хур ҡыҙҙары менән типтереп ғүмер итәсәк. Шуның өсөн үҙ иркегеҙ менән дар ағасында туйғансы бәүелеп, ер-һыуығыҙ менән хушлашып ҡалығыҙ. Ҡемгә тейә әле ул ундай хозур үлем? — тип ҡысҡыра икән баяғы Уйылдан.

Күҙе асылып, иләҫ-миләҫ йоҡоһонан уянып киткән арала мулла дерелдәгән бармаҡтары менән еүеш үңәсен һәрмәп ҡараны. «Ә шулай ҙа, бер ерҙән шәрбәт йылғаһы, икенсе ерҙән һөт йылғаһы ағып ятыуға ҡарамаҫтан, хур ҡыҙҙарын ҡосоп кәйеф-сафа ҡороуҙар нисек кенә һине ҡыҙыҡһындырмаһын, нишләптер шул ожмах тигән нәмәһенә күңел тартмай. Бында, ерҙә лә, насар түгел бит әле, бында ла шул маңлайыңа яҙылған тәҡдирҙе күреп үлге килә. Ожмах та ожмах тип мәсет мөнбәренән кешене өгөтләү генә еңел икән. Үҙ башыңа төшһә, бер ҙә көн элгәре үлге килмәй».

Мулла саҡ ҡына ике күҙен йомғайны, икенсе төшкә тарыны. Ҡулына ун ике армытлы ҡамсы тотоп, бөтә битен йөн баҫҡан Дәүләткирәй муллаға мал дауларға килгән. Ике бөртөк күҙ ише баҙлап янып торған күҙҙәре менән тишә ҡараны ла ҡамсыһы менән киҙәнде.

— Йә, мулла, был һинең ни ҡарап ятыуың? Һеҙ ҡушҡан кешеләрҙең Йәнгүҙәй аҫтында барыһының да мин йәнен алып килә ятам. Ана, мисәүле атыңды сығып ал. Ул мин атып үлтергән кешеләрҙе ни эшләтәһең? Мин хәҙергә уларҙы бер ҡумырыҡҡа тығып киттем. Ләкин улар, бәлшәүик булһа ла, мосолман өммәтенән бит. Унда барып, уларҙы ҡәбергә ерләп китеү һинең бурысыңдыр бит, мулла? Мин үҙ вазифамды башҡарҙым. Хәҙер мин һинең бер өйөр йылҡыңды үҙ мәмерйәмә ҡыуып алып ҡайтам. Минә теге ҡарун, Мөхәмәтшәриф ахун, бер нәмә лә бирмәне. Бөтә һөйләшелгән малды һинән генә алырға ҡушты. Әгәр

һин вәғәҙә иткән малыңды бирмәһәң, хәҙер кантонға, ғыпыуыға сабам. Улар һиңә йәтеш урын табырҙар.

Мулла тағы ла тыны быуылып, уянып китте. Мәскәй әбей күргән шикелле, үңер бауын шатырлатып өҙҙө лә «вә инәлиләйһе рәжиғун...» тип уҡыны. Был төш кенә түгел, ысыны ла шул. Ахун: «Дәүләткирәйгә үҙенең һорағанын бирмәй тура килмәҫ. Бирәһе малыбыҙ уртаҡ булыр», — тип һөйләнеп ултыра ине. Шул саҡта ла мин «был ахундың төлкө һымаҡ ялтарып ултырыуына ҡарағанда, Дәүләткирәйенә бирәһе бөтә бурысты был ҡарт иблес минең өҫкә һала инде, тип уйлап ултырғайным. Тап шулай килеп сыҡты. Барыһын да, ахыры, миңә күтәрергә тура килер, мынауы төшөнөң дә шул рәүешле сығып тороуын әйт әле».

Мулла үҙ малы өсөн ҡайғырҙы. Ул тик таңға ғына йоҡлап китте.

## 8

Ахун, төнләтеп кенә өйөнә ҡайтып төшкө лә иртәгәһенә үк күсерен Обручевкаға юлландырҙы...

Мулла өйөндә тора башлаған Абдрахманды ихатала осратҡан һайын Ғәбделбарыйҙың йөрәге әрнене. «Әйтергәме, әллә хәҙергә өндәшмәй торорғамы?» тигән һорау уны һулыу һайын нығыраҡ борсоно. Хәҙер генә теге утлыҡта ике кешенең ҡаға-ҡуға һөйләгән хәбәрен ҡолағына төшәрһәң, Абдрахман ҡыҙыулыҡ менән әллә ниҙәр эшләп ташлар, тип ҡурҡты. Ул хәбәрҙе ишеткәс тә, волосҡа йәки кантонға барып, кешеләр йыйып килтерер ҙә, Мөхәмәтрәхим менән Мөхәмәтшәриф ахунды улар ҡулына тотоп биреп ебәрер, тип уйланы Ғәбделбарый.

«Нисә әйтһәң дә, яманмы, яҡшымы ошо кеше ҡулында бауырымдан ҡалҡып, әҙәм рәтенә донъя көтөп ятам бит әле. Былай уйлап ҡараһаң, нахаҡтан рәнйеткән саҡтары ла күп булды инде. Шулар иҫкә төшһә, үҙемдең дә эс ҡайнай ҙа ул, тәгәрәтә һуҡҡы килә бәйелһеҙ, һыҡмыр ҡарунды». Ул уның күҙ алдында егет ҡорона ингән, мәҙрәсәнән мәҙрәсәгә ҡыуылып, уның да һенәһенә байтаҡ тейгән Уйылданды йәлләне, мулланың ҡанһыҙлығына иҫеаҡылы китте. «Малдың малы үҙ балаһын ҡурсалай, елямғырҙан, эт-ҡоштан һаҡлай, ҡорһағы аҫтына ҡуйып йылыта. Ә Мөхәмәтрәхим мулла үҙенең берҙән-бер балаһын үлтерергә лә тартынмай, ә үҙе ғүмер буйы «кешегә изгелек ҡылырға» өндәй. Был ни хәл? Ни өсөн баланды шул тиклем күрәлмай ҡаныҡырға икән? Әҙәм балаһына быңдай яуызлыҡ ҡайҙан килгән? Ни эшләргә? Уға ла хә-

ҙергә әйтмәй торорғамы?» Күп баш ватҡандан һуң, Ғәбделбарый Уйылданға ла хәҙергә ләм-мим әйтмәй торорға, Солтанмәхмүт менән осрашып, яңынан кәңәшләшергә ниәтләнде.

* * *

Атнағолдан сығып китеүенең өсөнсө көнөндә кисләтеп кенә Солтанмәхмүт ауылына ҡайтып инде. Ул хужаһының ҡушыуы буйынса, Обручевкаға барып, Абдрахман Игебаевтың Белов ҡарт йортонда нисегерәк йәшәүен, хутор Советында ниндәйерәк йәмәғәт эштәре алып барғанын үҙ белештәренән бәйнә-бәйнә һорашып, белешеп ҡайтты.

Уның килеү уңайы менән әҙерәк ҡыҙмаса булып алған икән өй хужаһы.

— Һеҙҙең Абдрахманды минең хеҙмәттәшем, яҡын дуҫым Андрей Иванович яҡшы юлға күндерергә бик тырышып ҡарағайны. Тамаҡ айырмай, үҙ малайы шикелле тәрбиәләне, ҡатыны менән үҙенең ҡунаҡ өйөнә индерҙе. Үҙенә ул итеп алырға ла уйы бар ине, ләкин шаҡра басурманығыҙ Обручевкаыштанһыҙҙары юлына төштө. Шуларҙың хөсөтөнә бирелеп, бында ярлыларҙы байҙарға ҡаршы ҡотортоп йөрөнө. Ул бында яңы асылған ауыл кооперативында ревкомиссия ағзаһы, кредит йәмғиәте идараһының ағзаһы булып һайланды, кооперативҡа килгән кәрәк-яраҡтарҙы ярлыларға үҙ ҡулы менән бүлеп биреп ултырҙы. Ярлы халыҡтан взнос йыйҙы. Бында партияға инде. Бисәһен яңы асылған медпунктҡа эшкә ҡушты. Совет власына ярамһыҡланып, көн-төнө баш һалып хеҙмәт иттеләр. Бер һүҙ менән әйткән, ул беҙгә хас дошман.

Ауыҙына ҡапҡан тәмәкеһен тәрән итеп бер-ике һурҙы ла:

— Йүнле кеше үҙен ашатып-эсереп ятҡан хужаһын Гыпыуы ҡулына тотоп бирәме? Ярты йылдан ашыу Верхнеурал төрмәһендә ятҡандан һуң, Андрей Иванович өйөнә ҡайтҡас та мандый алманы. Әле бына хәл өҫтөндә ята... — тип өҫтәне хужа.

Солтанмәхмүт өндәшмәне. Абдрахмандың бында башҡарған йәмәғәт эштәрен, айырым ҡағыҙға теркәп, кеҫәһенә тыҡты.

Бына яңы ғына ҡайтып төшкән күсере ҡулынан алған ошо ҡағыҙҙы ахундың, һике ҡаҙнаһына ултырып, төҫтәре емерелеп уҡып ултырған мәле.

— Эттән тыуған, бәдбәхет. Шулайтып, унда ла ҡойошҡанға ҡыҫтырылған тиҙәк шикелле ҡыпыштан ҡалмай йө-

рөп ятты, ти инде, ә? — тип ишек төбөндә тыбырсынып торған күсеренә сәнскеле ҡараш атты. Йөнтәҫ ҡаштарын төйнәп, ҡабаҡтарын күтәрҙе. — Тағы ла ниҙәр һөйләне?

Солтанмәхмүт тышы ямалған кәпәсен ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырҙы, аяҡтарын алмашлап баҫты.

— Ауыл ярлыларына бик ныҡ ярҙам итте, халыҡҡа уның тырышлығы бик оҡшаны, бик тә яҡшы кеше икән,— тип ҡалды ауыл халҡы.

Ахун үҙ күсеренең һүҙен икеләнеберәк тыңланы ла эсендә ҡайнаған асыуына түҙә алмай, тороп китте. Ҡулдарын биленә ҡуйып, аллы-артлы йөрөп алды. Усына йомған ҡағыҙҙы ҡыштырлатып йомарланы-йомарланы ла, «голландка» мейесенең ҡапҡасын ситегенең осо менән асып, теге ҡағыҙҙы бөтә көсөнә утҡа ырғытты.

«Хәленән килһә, Абдрахманды ла ошо ҡағыҙ һымаҡ йомарлап, утҡа ырғытасаҡ был әҙәм», — тип уйланы Солтанмәхмүт, уның шашынған битенә, аларған күҙҙәренә ҡарап.

Ахун иҙәндә ары-бире йөрөнә биргәс, Солтанмәхмүт алдына килеп баҫты. Ике күҙен секерәйтеп, яҫы эйәген алға атты ла, көрәктәй һаҡалын елберләтеп:

— Шулайтып, ярлыларға бик яҡшы ярҙам итте Абдрахман, ти инде минең белеш, ә? — тип ҡысҡырҙы.

Солтанмәхмүт, тыныслыҡ һаҡларға тырышып:

— Эйе, хужа, ярҙам итте, тине, — тип һүҙен ҡабат ҡеүәтләне.

Ахун, төкөрөктәрен сәсеп, елгә ҡабарған күркә шикелле күкрәген ҡалҡытып, күсерен ишек яҡтауына ҡыҫты, ләкин башы осонда уйнаҡлаған йоҙроғона ирек бирмәне.

— Яйыҡ артылып ятҡан Абрашауға ат ҡыуып, мин һине ошо туҙға яҙмаған хәбәрҙе алып ҡайтыу өсөн ебәрҙемме, хәсис! Минең знакум ошо һүҙҙе һөйләй буламы? Абдрахмандың ыштанһыҙ, ауыҙын асһа үпкәһе күренеп торған ярлыларға ярҙам итеүен минең белеш бик яратып ҡалған икән әләйһә, тфү, мәлғүн! Һинең хәбәрең был, уны һин аҫтыңдан сығарып һөйләп тораһың, һеҙ барығыҙ ҙа бер сыбыҡтан һөрөлгән. Ҡысҡырып өндәшмәһәгеҙ ҙә, барығыҙ ҙа бөгөнмө-иртәгәме беҙҙе килеп ғыныуылар алыһ китеүен көтөп ятаһығыҙ. Барығыҙҙың да нимә уйлап йөрөүегеҙ миңә мәғлүм. Һеҙҙең бөкиллегеҙҙе ана мейестәге шартлап янған ҡайын утын урынына, әрҙәнәгә һалып, өҫтөгөҙгә кәрәсин һибеп яндырырға кәрәк, өйөрлө донъя ҡороткос, гонаһшомлоҡтары! Бар, юлыңда бул, күҙ алдымда бағана һымаҡ һерәйеп торма, кафыр.

Ахун Солтанмәхмүтте өйөнән ҡыуып сығарҙы. Арандай өйҙә бер үҙе тороп ҡалғас, ул тиҙ генә тыныслана алманы.

«Бөтә ярлы-ялпыға Советтың ятышлы сәйәсәте килеп етте шул. Иҫкелекте емереп ташларға ҡулдары ҡысып тора! Ул мәлғүндәрҙән изгелек көтөп булмай. Әллә ҡайҙа, Ирәндек тауы араһында ятҡан Атнағол ауылында тыуып үҫкән, ғүмер буйы миңә тоғро хеҙмәт иткән ошо Солтанмәхмүтең шуны һөйләп торғас, башҡаһына ни ҡалған? Ҡара һин уларҙы, йөҙө ҡараларҙы! Ҡафырмы, мосолманмы, ярлы ярлыны яҡлай». Мендәренә ултырып, тәсбихенә тотонғайны, ләкин уныһының да осона-башына сыға алманы. «Әллә ҡартлыҡ етә башланы инде, бер ни булһа, ҡан ҡыҙып, тәнәһә кем өҫтөнә әтәс шикелле осоп-ҡуныл барыла. Солтанмәхмүтте нишләп улайтып эттән алып, эткә һалып сығарырға ине? Башта ҡыҙыулыҡ менән әйтеп ташлайһың да, унан йөрөйһөң терһәк тешләгәндәй булып, ләкин эш үткән була. Солтанмәхмүт менән һис кенә лә араны боҙоу килешмәй, сөнки ул ошо ихатаға килеп ингәне бирле, минең ни ҡылғандар барыһы ла уның күңел дәфтәрендә. Минең бөтә хилаф эш, китапҡа яҙылмаҫлыҡ нәмәләр барыһы ла уның аша эшләнгән. Минең Орск өйәҙендә йә анауы Ырымбурҙа еңгәсәйҙәр йортона барып бысранып йөрөгәнде Солтанмәхмүт менән ҡола аттарҙан башҡа этем беләме? Аттары, аллаға шөкөр, һөйләшмәй торған януар, ә был хайуандың теле бар ҙа баһа, уның телен ҡырҡып алып булмай бит. Егерме икенсе йыл Абдрахман менән ҡатынына ҡаршы ҡара төнгө эште ошо Солтанмәхмүт арҡыры эшләтте бит. Әҙме булды уның шикелле бик тә хәтәр эштәр? Ярай әле шул Солтанмәхмүт өнһөҙ-һүҙһеҙ булыуы арҡаһында ошо көнгә ҡәҙәр ел-ямғырға теймәй йәшәп киленә бит әле. Юҡ, юҡ, иртәгә үк был егетте күреп, яҡты сырай күрһәтмәйенсә булмай. Хәҙер йөндө гел генә оторо һыйпап эш сығара торған заман түгел, юҡ-юҡ та ыңғайына ла һыйпаштырыу кәрәк».

Иртәгәһенә аттарын эсереп ҡайтҡан Солтанмәхмүтте ахун ҡапҡа төбөндә тороп ҡаршы алды. Ҡалҡып ҡарамай ғына һаулыҡ һорашҡан күсерҙең сәләменә бик ихлас яуап бирҙе.

— Вәғәләйкүмәссәләм, Солтанмәхмүт мырҙа! Аттарың бик туҡ күренә. Ай-һай, өлгөрөмһөң дә инде, януарҙарыңды ҡырғаслап та өлгөргәнһең, — тип йылмайҙы.

Оҙаҡ йылдар ахун менән бергә йөрөп, уның ғәҙәтен, фиғелен белеп бөткән Солтанмәхмүт «был хәйләкәр төлкө тағы ниндәйҙер мәкерле тоҙаҡ ҡора, ахыры», тип уйланы ла маҡтауына яуап бирмәй, ат һарайына үтте. Аттары алдына ҡуйылған таҡта йәшниктәргә бәләкәй биҙрә менән һоло таратып йөрөгән Солтанмәхмүт эргәһенә хужа йыбырлап ҡына яҡын килде, таҫма телләнергә кереште.

— Эй, ат йәнле кешеһең дә инде! Беҙҙең бынауы ҡола арғымаҡтарға башҡа ят кешенең яҡын килере бармы? Ажғырып торалар бит. Ә һин әллә шуларҙың телен беләһең инде, һине күргәс тә, өсөһө лә кешнәшеп ҡаршы алып торалар. Араларынан, аҫтарынан үтеп-һүтеп йөрөһәң дә эштәре юҡ. Хайуан булһалар ҙа, уны кем ашатып-эсергәнен белеп торалар шул. Ашатҡанды кем яратмаһын? Әҙәмецә лә, малыңа ла әлеге лә баяғы ризыҡ кәрәк шул, ризыҡ йөрөтә бөтә тереклекте.

Ахырҙа, уның хәбәрен ишетеп тә яуап бирмәгәс, Солтанмәхмүткә майлы күҙҙәрен тәгәрәтте лә:

— Ошо арала гел генә йөрөү ҙә йөрөү булып китте әле. Атына ла, кешеһенә лә пакуй юҡ. Һин дә көнө-төнө юл йөрөп йонсоноң, әллә иртәгә ҡолаттың береһен егеп, килендә ҡуштан ултыртып, берәй яҡҡа йөрөп ҡайтаһыңмы? — тип һораны.

Уның ҡапыл шулай игелекле булырға тырышыуына бер аҙ ғәжәпләнеберәк торғандан һуң, Солтанмәхмүт теләртеләмәҫ кенә яуапланы:

— Әлләсе? Былай киленең, ауылға бер алып ҡайтып килһәңсе, яңғыҙ апайымды күрә алмай үләм инде, тип күптән ҡап ҡаҡшата.

— Уның, Солтанмәхмүт мырҙа, әлләсе-мәлләсеһе юҡ. Килендең үндай теләге булғас, ана, өс ҡола аттың береһен еңел арбаға егеп ал да, бер иркенләп, сәхрәлә хозурланып йөрөп ҡайтығыҙ.

— Рәхмәт, хужа, — тине ат муйыны араһынан башын ҡалҡытып Солтанмәхмүт. — Ғүмерҙә аяҡ баҫмаған ергә ҡоро ҡул барып та булмай бит әле, барам тиһәң, күстәнәсе ҡайҙа был заманда?

Солтанмәхмүт тә байҙың күңел тоғо сиселгән сағынан файҙаланып ҡалырға ашыҡты.

— Күстәнәс, тип ни? Унда тәртәгеҙгә ат бәйләп барырға уйламайһығыҙҙыр бит?

— Ат булмаһа ла, барып төшкәс йөҙ ҡыҙартмаҫлыҡ ваҡ-төйәк ҡуйыу кәрәк инде.

— Ә шулай ҙа?..

— Бер-ике ҡаҙаҡ сәй-шәкәр, ҡәйенбикәнең башына ябырға кейәү күренеше берәй кешмир яулыҡмы тигәндәй...

— Әйтермен абыстайыңа. Таярлап, юлыңа биреп ебәрер.

Солтанмәхмүттең һуңғы һүҙен әйтә алмай уңайһыҙланыуын күрҙе лә хужа:

— Йә, йә, лафканың асыҡ сағында әйтеп ҡал, тағы ни кәрәк? — тип һораны.

Ә үҙе «хәйерсегә йылмайһаң, ямаулыҡ һорай, ти. Бер тин биреп йырлатҡайным, мең тин биреп туҡтата алманым — бына ошо була инде», тип уйлап алды.

— Берәй тырыз сейәле май йәки талҡан булғанда, килешеп тә ҡалыр ине юлға.

Ахундың яңы ғына илтифат сәсеп торған күҙҙәрендә уҫаллыҡ атҡылары ялтлап китте.

— Һин, мырҙа, ахун менән йөрөп, гел генә майлы талҡанға ҡанығып та алғанһың, буғай, — тип әле бирмәгән талҡаны менән Солтанмәхмүтҡә төрттөрөп тә алды.

«Эйе, эйе, туйғандан ҡаныҡҡан яман», — тип ауыҙ эсенән генә мығырланы. Шунан, етдиерәк ҡиәфәткә күсеп:

— Ярай, ярай. Быныһы мәрәкә өсөн генә. Һинең шикелле дилбегә лә ҡаҡтырмай, көнө-төнө талымһыҙ хеҙмәт иткән кешегә бер ни йәл түгел. Абыстайыңа әйтермен, килеп инеп алыр, — тип, ул тамағын ҡыра-ҡыра өйөнә атланы.

Уның тамаҡ ҡырыуына өйрәнеп бөткән аҡыллы хайуандар, һоло ашап торған еренән ҡапыл туҡтанылар ҙа, барыһы берҙәй ҡолаҡтарын шымайтып, баш ташлап, алғы аяҡтары менән түшәлгән иҙәнде шаҡып алдылар.

Икенсе көн, ваҡыт кискә һарыҡҡас, Солтанмәхмүт хужаның төпкө ҡолаһын еңел кырандасҡа егеп, бисәһен ултыртып, юлға сыҡты. Атнағол һымаҡ Ирәндек битләүенә һырынып ултырған Төрөмбәт ауылында ҡатынын төшөрөп ҡалдырҙы ла көн кисләгәс кенә Ялан ауылының осона ағып төшкән Әмин ҡотоғо тамағында өйпәк кенә булып үҫкән сауҡалыҡ эсенә инеп атын туғарҙы. Атын тышап, ситкәрәк ҡыуғас, арбаһын һөйрәп, ҡыуаҡлыҡ эсенә ултыртты. Ә үҙе Ялан ауылының өҫкө урамы артындағы баҡсалыҡ буйлап килде, мулла өйөнөң тәңгәленә килеп еткәс, артҡы ҡапҡаны асып, Ғәбделбарыйҙар өйөнә инде.

## 9

Абдрахман, үҙ ғаиләһен күсереп алып килгәс тә, артыҡ күҙгә-башҡа салынмай мулла йортонда йәшәүен дауам итте. Урамда мулла ейәнсәре Алмабикә артынан эйәреп йөрөгән, башҡа ауыл малайҙарына ҡарағанда яҡшыраҡ кейенгән, йыуантыҡ малай ғына йышыраҡ күҙгә салынды. Һары сәсле ялбыр башына, йәшел селтәрле казак фуражкаһына ҡарап, өлкәнерәк малайҙар уға, «Һарыбаш», «Яйыҡ казагы» тип, ҡушамат тағып та өлгөрҙөләр. Был ситтән килгән, башы ҡырылмаған шуҡ малай бер ауыҙ ҙа башҡортса белмәүе менән үҙ тиңтерҙәрен ғәжәпләндерҙе.

Ул, әҙ-мәҙ русса һупалаһа ла, үҙенең исемен «Владимир» тип асыҡ ҡына әйтә алманы. Бер саҡ ауыл малайҙарынан туҡмалып ҡайтҡас, урамға бөтөнләй сыҡмаҫ булды. Абдрахманға уны етәкләп үҙе менән алып сығырға тура килде.

Ул төрлө йәштәге балаларға лампасый таратты ла, башын ҡырып һалған малайын аяҡтары араһына ҡуйып:

— Эй, малайҙар, ошо баланы үҙегеҙ менән уйнарға өйрәтегеҙ. Аслан оронмағыҙ. Ошо ауыл малайы ул, тик башҡа ауылда ғына торған, — тип аҫтан өҫкә ҡарап, йылтырап бөткән ең остары менән маңҡаларын һөртөп торған малайҙарға өндәште. — Исеме — Вахит. Тиҙҙән ул да башҡортса һөйләшергә өйрәнер, — тине.

Ситән башына менеп ултырған, башы ап-аҡ итеп ҡырылған, йәшкә олораҡ тешһеҙ малай, улын ҡулынан ысҡындырып китә башлаған Абдрахманға ишетелерлек итеп:

— Уны атайым, урыҫ малайы, ти. Уның исеме лә урыҫса. Беҙ уны үҙебеҙ менән уйнатмайбыҙ, — тип ҡысҡырҙы.

Ә икенсеһе:

— Ул атлы казак балаһы. Улар ямаҡ, уҫал кешеләр, — тип өҫтәне.

Абдрахман, ишетмәмешкә һалышып, ҡапҡа эсенә инеп китте. Нисә быуаттар буйына икенсе милләткә ышанмай ҡарауҙы, дошманлыҡты бөтөрөү өсөн күпме көс һалырға кәрәк әле? Был күрә алмаусылыҡ балаларға ла күскән бит.

Абдрахмандың ауылға ҡайтып төшөүе тураһындағы яңылыҡ һөт айырғанда ла, ауыл бисәләре иртәнсәк малдарын көтөүгә ҡыуғанда ла ҡуйырҙы.

Иртә менән һыйыр һауып бөткәс, Маргарита тулы биҙрәһен тупһаға ултыртты ла:

— Бөгөн Ҍорьканы көтөүгә үҙем ҡыуам. Көн дә Уйылдан ҡатынына ҡушыу уңайһыҙ, — тип, ҡулына оҙон сыбыҡ алды.

Галифе салбар кейеп, күлдәксән генә сыҡҡан Абдрахман ҡырҡа арҡыры төштө.

— Ярай, хәҙергә йөрөмә. Үҙем генә ҡыуырмын. Ауыл көтөүсеһе менән дә танышып ҡайтаһы бар, — тип артҡы ҡапҡаны асып, һыйырын етәкләне.

Яҙғы ҡояш, Бишуба өҫтөндә алһыуға мансылған һыртын күрһәтеп, үҙенең тәүге нурҙарын ер өҫтөнә яңы ғына һибә башлауға ҡарамаҫтан, мөгәзәй һыртында һыйыр малы бер урынға, ваҡ мал икенсе урынға көтөүгә ойошто. Иртәнге тын һауаны йыртып, ергә һөйрәлгән оҙон сыбыртҡыларын шартлата-шартлата, өҫтәренә сәкмән кейгән көтөүселәр мал ҡайырҙы. Абдрахман ауыл көтөүенең ҙур ғына булыуына ысын күңелдән шатланды. «Йот йылы

ауылда һанаулы ғына мал ҡалғайны бит, бер нисә йылда ауыл малы ишәйеп тә өлгөргән. Ошо көтөү эсендә минең ҡулдан икмәк ҡыйыры ашай торған атайҙың туҡал һыйыры ла барҙыр әле» тип уйлап та өлгөрмәне, мөгәзәйҙең арғы яҡ мөйөшөнән таныш аяҡтарын шарт-шорт баҫып атлаған туҡал һыйырып ҡыуып, ҡулына оҙон сыбыҡ тотҡан Сәрбиямал әбей килеп сыҡты. Ул, ғәҙәтенсә, ситеге өҫтөнә ҡата ғына элгән дә, күлдәген ыштан бөрмәһенә тыҡҡан. Башына яҙып ябынған аулығын ҡаптырмалы камзулы эсенә һалған. Абдрахманды күргәс, әбей ваҡ ҡына йыйырсыҡ менән һырланған ҡаҡса битен аҫҡа һуҙҙы ла, ынйы һымаҡ тигеҙ тештәрен күрһәтеп, ауыҙын асты.

— Ыстағафирулла тәүбә! Абдрахман, был һинме? Әллә күҙемә генә шулай күренәме? — тип әбей шып туҡтаны.

Ҡулындағы сыбығын ырғытты ла, нишләргә белмәй, сырышып бөткән ҡоро устарын, доға ҡылырға йыйынғандай, ҡыштырлатып ыуып алды.

Абдрахман эске тулҡынланыуын сығармаҫҡа тырышып, һыйыр етәкләгән бауының осон ысҡындырмай ғына әсәһе менән килеп күреште.

— Йә, әсәй, иҫәнгенәме? Һау-сәләмәт йөрөйһөңмө? Атай ҡарттың таҙалығы нисек? Бик бирешеп китмәнеме? — тип улы, йөҙөнә үпкә ҡатыш ҡыуаныс билдәләре йүгергән әсәһенә һорау артынан һорау яуҙырҙы.

Абдрахмандың ауыл һыйырҙарынан аша ҡарап торған йыуан, тыңҡыш муйынлы, ҡойроҡ көлтәһе ергә тейеп торған ҡыҙыл сыбар һыйыры, еүеш күҙҙәре менән эйәһенә ҡарап торған туҡал менән бик ваҡлашып, иҫәнлек-һаулыҡ һорашып торманы, туҫтаҡтай күҙҙәрен алартты ла бөйөрҙәре соҡорайып эскә батҡан туҡалға ташланды. Уңайһыҙланыуынан нишләргә белмәгән Абдрахман һыйырының мөгөҙө араһына бәйләнгән арҡанды тартып ҡараны, ләкин ҡоторонған һыйыр баш бирмәй Абдрахманды ситкә һөйрәкләнс. Ул йүгерә-атлай һыйыры артынан эйәрҙе.

— Ярай, әсәй, был холоҡһоҙ иркенләп һөйләшергә ирек бирмәҫ. Ваҡытың булһа, мине әҙерәк көтөңкөрәп тор, мин мынау малды көтөүсегә тапшырам да киләм, — тине артына әйләнеп Абдрахман.

Һыйырҙарын көтөүгә ҡыуырға сыҡҡан ауыл бисәләре, бөтәһе тигәндәй туҡтап, буралай һыйыр етәкләгән иргә ҡыҙыҡһынып ҡараны. Был яҡтарҙа иртә тороп көтөүгә мал ҡыуыу бисәләр эше һаналғанға күрә, типһә тимер өҙөрҙәй мыҡты ир кешенең бөтә һын-торошо менән ауыл малынан айырылып торған һыйыр етәкләп килеүе уларҙы таң ҡалдырҙы.

— Мынауы уҫтаптай ирҙең һыйыр етәкләп килеүен күр әле, абышҡа башы менән оялмай микән?

— Был ни Әбделғәлим ҡайнағаның ситтә аҙып-туҙып йөрөгән улы түгелме?

— Эйе, шул да инде. Теге мәрйә алған Абдрахман бит.

— Һаумы, Абдрахман ҡәйнеш? Нимә улайтып, мынауындай кәүҙәң менән ҡыҙ-тәкә шикелле, оялмай үҙең һыйыр ҡыуып йөрөйһөң?

— Ул килеләй киленде һуймаға аҫрайһыңмы? Әллә мөгәзәй һыртына һыйыр ҡыуып сыҡҡансы, мәрйәндең уҡаһы ҡойолор тип ҡурҡаһыңмы?

Ләкин ул туҡтап торалманы. Бер яғынан, ҡайҙалыр үлә яҙып тартылған холоҡһоҙ һыйыры асыуын ҡабартты, икенсенән, белә күрә, ауыл ғәҙәтен боҙоп, ирҙәрҙән бер үҙе һыйыр ҡыуып йөрөүенә ғәрләнде. Көтөүсе менән күрештелә һыйырының бауын ысҡындырҙы.

Бер урынға йыйылып, көтөүгә ойоша башлаған нәҙек, ҡыҫҡа аяҡлы, ҡаптай ҙур ҡорһаҡлы ауыл һыйырҙары баштарын ҡалҡытып, ят малға оҙаҡ ҡына ҡарап торҙолар. Бына бер мәл араларынан батырыраҡ айырса мөгөҙлө ҡоба һыйыр янына килде лә, дүрт аяғын сәнсә баҫып, «килмешәк» менән һөҙөшөргә тотондо. Ауыл һыйырының артҡа сигенә барғанын күреп, башҡалары мөңрәй-мөңрәй ярҙамға ашыҡты.

Ҡамауҙа ҡалған һыйырҙы тик көтөүсе генә ҡотҡарып алып ҡалды. Ул сыбыртҡыһын шартлата-шартлата:

— Һәүкәш, һәүкәш! Һеҙгә ни булды? Ниңә шул тиклем ҡотораһығыҙ? Бүреме ни ул һеҙгә, ә? — тип ҡысҡыра-ҡысҡыра һөҙөшөргә өйөлгән һыйырҙарҙы ҡыуҙы.

Ауыл һыйырҙары һөҙөшөүҙән туҡталғас та оҙаҡ итеп был ситтән килгән малға ҡарап торҙолар, ләкин Абдрахмандың һыйырын барыбер көтөү эсенә индермәнеләр. Уның һыйыры яй ғына ҡуҙғалып киткән көтөү артынан эйәрҙе.

Көтөүсе, Абдрахман эргәһенә килеп, уның ҡайғыһын уртаҡлашҡан төҫлө:

— Шулай ул, Абдрахман ҡусты. Өйрәнеп алмайынса, ауыл малы уны көтөүгә индермәҫ. Бер нисә көн көтөү артынан ғына эйәреп йөрөр инде, башҡа хәл юҡ, — тигән булды.

Абдрахман уға ҡаршы бер һүҙ ҙә өндәшмәне. «Эйе, борон-борондан шулай килгән инде. Мине, мәрйә бисә алып ҡайттың тип, ауыл халҡы үҙ араһына индермәй. мәрйә тип Маргаританы атайымдар ситләтә, урыҫ малайы тип, Вахитты ауыл малайҙары үҙ уйындарына ҡатнаштырмай. Хатта минең Обручевканан алып ҡайтҡан һыйырҙы

ауыл малы үҙһенмәй һөҙгөләп сығарҙы. Кеше генә түгел, үҙ ауылың малы ла ситте ситләтергә тырыша». Абдрахман күңелһеҙ уйҙарын тағата-тағата үҙен көтөп торған әсәһе янына килде.

Был хәлде күреп торған әсәһе улын башта йәлләгәндәй булһа ла, аҙаҡтан «ир башың менән бисә ҡотортоп йөрөгән кешегә тап-таман булған. Мынан кире бисә-сәсә эшенә ҡыҫылып йөремәҫкә таман булыр», тип үсәп тә алды. Уларҙың һүҙе, башта үҙ-ара боҙолошоп, аҙаҡтан ярашырға килгән кеше шикелле, бер ҙә ипкә килмәне. Бер-береһенә тәүге күрешкән кешеләр һымаҡ, һынаулы ҡарашып торҙолар. Әсәһе башын бер яҡҡа ҡырынырaҡ һалды ла осло эйәгенең аҫтына шыраулы ҡулын терәне. (Әйтерһең дә, шунһыҙ уның башы аҫҡа тәгәрәп төшөп бара.) Урты эскә батҡан ҡаҡса битендәге юлаҡ-юлаҡ йыйырсыҡ һыҙаттарын нығыраҡ сырыштырып, бөршәйгән күҙҙәренән ҡайғылы, моңһоу ҡараш һирпте. Уның был диҡҡәтле ҡарашында улына мөхәббәт ҡатыш нәфрәт, ғорурланыу ҡатыш үкенеү, һағыныу-зарығыу саткылары уйнаны. «Тыуған төйәгенән айырылып, ситтә йөрөһә лә, бер ҙә бирешмәгән. Тағы ла ҡалынайған, түҫө-башы күркәмләнгән, битендәге шаҙраһы уңа төшкән, йөҙөнә оло сырай кергән. Ә ҡараштары һис тә үҙгәрмәгән, элекке шикелле үткер, шәфҡәт һирпеп тора», — тип уйлай ҡарсыҡ. Ә Абдрахман «әсәйем тағы ла ҡартая, ҡауҙжый төшкән. Ҡул бармаҡтарының быуындары йыуанайып кәкрәйә башлаған. Яулығы аҫтынан ағара башлаған маңлай сәсе күренә, битендә йыйырсыҡтары ишәйгән. Ҡымтыған йоҡа ирендәренә ҡарағанда, әсә тештәре шаҡтай ныҡ булырға тейеш. Тик бына атай ҡарт нисектер инде?» тип уйланды.

Абдрахман әсәһе эргәһенә яҡын уҡ килде лә үҙенең көрәктәй ҡулдары менән уның камзул эсенән ҡалаҡ һөйәктәре беленеп торған арҡаһынан һөйҙө. Улының иркәләүенән былай ҙа саҡ торған әбейҙең күңеле тулды, башта йоҡа ғына ирендәре һиҙелерлек кенә дерелдәне, шунан ул битендәге йыйырсыҡтарын бергә йыйҙы ла, күҙен йыш-йыш йомоп, бер нисә бөртөк эре йәш бөртөктәре һығып сығарҙы. Күҙ йәше йыйырсыҡ һыҙаттары буйлап түбәнгә аҡты. Сәрбиямал камзулының ҡаптырмаларын ысҡындырып, яҙып ябынған яулығының осо менән күҙ йәштәрен һөртөп алды, бәләкәй генә танауын мырш-мырш тартты ла ҡабырғаһы менән улының киң күкрәгенә һыйынды. Бына әсәһе, ҡоршауы ысҡынған сынаяҡ шикелле, бөтөнләй шиңде. Ҡапыл нимәһелер иҫенә килгән һымаҡ, әбей ситкә тайпылды, иртәнге ысыҡтай битендә йылтырап күренгән күҙ йәштәрен дә һөртмәй:

— Ай, улым, улым! Мин һине ошолай, әзмәүерҙәй ир еткереп, көтөүгә һыйыр ҡыуыр өсөн үҫтерҙемме ни? Ана, бөтә ауыл үҙеңдән бот сабып көлә бит, — тип бер нисә урында йыйылып ғәйбәт һатып торған бисәләргә эйәк ҡаҡты.

Абдрахман, башын ҡалҡытып:

— Әсәй, башҡа ҡайғың булмаһа, бының өсөн башыңды ауырттырма, иртән тороп һауып эскән һыйырыңды ир ҡыуҙымы, бисә ҡыуҙымы — уның ниндәй айырмаһы бар? — тип вайымһыҙ ғына йылмайҙы.

— Һиңә барыбер булһа ла, беҙгә улай түгел. Ирҙең үҙ урыны бар, ҡатындың урыны башҡа. Мынан һуң аслан, әҙәм көлдөрөп, бисәләр эшен атҡарып йөрөмә. Йола боҙоп, шәриғәтте ашатлап, мәрйә бисә алып йөрөүең дә еткән, мыҡты нәмә!

— Шунан? Бисәләр эше тип, һыуға барырға ла ярамаймы?

— Уныһы бигерәк тә мәсхәрә!

— Ә мин кисә барҙым инде.

— Бик тә яҡшы иткәнһең, хәсрәт. Нишләп ауыл халҡы бер һүҙ ҙә өндәшмәй. Берәү ҙә күрмәнеме әллә?

— Ә мин ҡараңғыла барҙым.

— Мынан һуң ҡараңғыла ла, яҡтыла ла биҙрә тотҡаныңды күрмәйем. Битебеҙгә былай ҙа оло серкеү килтерҙең, етте! Беҙ ошоға тиклем ауыл халҡы менән бергә йәшәгәнбеҙ, уның йолаһын һанға һуҡмай йөрөргә, һин ул тиклем кем?

— Бер кем дә түгел. Ошо ауыл кешеһе. Хәҙер, әсәй, бөтә ҡатын-ҡыҙҙың да ирҙәр менән хоҡуғы тигеҙ. Шулай булғас, элекке һымаҡ, бөтә йомошто ла ҡатындар елкәһенә һалып, ирҙәр тик ятырға тейеш түгел, бисәләренә ярҙам итергә, уларҙың өй йомошон еңеләйтергә тейеш, беләһеңме?

— Белмәйем, белергә лә теләмәйем. Һинеңсә булһа, ҙур уҡымышлы Маннап хәҙрәт менән Ғәлимйән хажи сыбыҡ тотоп һыйырҙарын көтөүгә үҙҙәре ҡыуыр ине. Ана, яталар бит йылы мөйөшөндә. Ә һин, мыҡты кеше, яңылыҡҡа юл башлап йөрөйһөң икән.

— Ярай, әсәй, бушҡа теңкәңде ҡоротма. Тора-бара ирҙәрҙең һыйыр ҡыуыуына, һыуға йөрөүенә үҙегеҙ ҙә өйрәнеп китерһегеҙ әле. Атайым көйәнтәләп һыу ташый башлаһа, үҙең дә әҙер һыуға рәхәтләнеп ҡалырһың әле.

— Эйе, нисек тә шулай булмаған? Яңғыҙ бабайыма көйәнтә күтәртеп һыуға ебәреп ятмам инде, үҙемдең аяҡ-ҡулым һау сағында.

Улар мөгәзәй тыҡрығынан шулай һөйләшә-һөйләшә ата йортона яҡынайҙы. Ҡапҡаларына боролорҙан алда, әсәһе Абдрахманды баштан-аяҡ ҡарап сыҡты ла, уңайһыҙланып, камзулының итәктәрен тартты.

— Ауыл халҡынан, туп-тумалаҡ, һап-һары бер малайың бар икән, тип ишетеп ятабыҙ. Ҡасан өйгә әпкиләһең улыңды? Атаңа күптән килтереп күрһәтергә кәрәк ине малайҙы, көнө буйы ике күҙен урамдан алмай көтөп ултыра.

Әсә һүҙен бөтөнләй тынысланған төҫлө тамамланы.

— Ярай, әсәй, бөгөн көт. Атайым өйҙә булһын, — тине лә Абдрахман үҙ юлына боролдо.

«Әсәйем үҙенсә мине һаман элекке бәләкәй малайы тип белә, ахырыһы. Аҡыл өйрәтеп алды. Башҡаса ни эшләһендәр? Төрлө тормош һуҡмағында яңылыш аҙым яһап, хаталанып ҡуймаһындар, тип өҙөлә инде улар».

Абдрахман иртәнге тамаҡ ваҡытында тубығында ултырған малайының башын һыйпай-һыйпай әсәһе менән осрашыуын Маргаритаға һөйләне.

«Әсәй» тигән һүҙҙе ишеткәс тә, Маргарита һағая төштө. Уның ҡояш кеүек балҡыған ике алһыу битен ҡапыл ниндәйҙер болот шәүләһе ҡаплаған кеүек булды. Уның саф күңелен борсоулы тойғо солғап алды, аңы томаланды. Һуңғы ваҡыттарҙа бында күсеп ҡайтыу тураһында һүҙ ҡуҙғалғас, ул бик ҡаты ҡайғыға ҡалғайны. Бер кемгә әйтмәһә лә, ул үҙ ҡырында эҫе йылы бөркөп йоҡлап ятҡан иренә сәғәттәр буйына йоҡоһоҙ күҙҙәрен йоммай, текләп аҙмы ятты. Уның шырт сәсен, көнгә янған еңелсә шаҙра һипкел ҡаплаған битен йомшаҡ ҡына итеп һыйпаны, йыш көрһөндө. Әлбиттә, «ауылға күсеп ҡайтыу» хәбәре артыҡ ҡыуаныс түгел. Хәсрәтләнеп йөрөнө-йөрөнө лә үҙенең тойғоһон Анастасия Петровнаға еткерҙе. «Абдрахмандан ҡурҡам бит әле, ауылдарына ҡайтҡас, кеше һүҙенә төшөп, минән һыуына башламаһа ярар ине?» тип илауланы Маргарита.

Анастасия Петровна: «Нығыраҡ ҡосаҡла, ҡосағың эҫе булһа, бик алыҫ китә алмай ул ирҙәр», — тип көлдө. Бер аҙ уйланып ултырғандан һуң, «бындай ирҙәрҙе көндөҙ шәм менән эҙләһәң дә табып булмай хәҙерге заманда, нығыраҡ йәбеш, йәһәннәмгә китәм тиһә лә, артынан ҡалма», тине.

Ләкин йәш ҡатын тыныслана алманы, уйланды. Абдрахмандың ата-әсәһе өсөн үҙенең уңайһыҙ килен икәнен Маргарита яҡшы аңлай. «Улары ғына булһа, бәлки, түҙер ҙә инең, бөтә ауыл өйләнешеүҙәренә ҡаршы ине бит. Ә хәҙер шул уҡ ауылда нимә үҙгәргән тиһең? Теге ваҡытта

беҙ Абдрахман менән икәү генә булһаҡ, хәҙер беҙҙең кендекте бәйләгән мынау малайыбыҙ Володя бар бит, тип бәләкәй ағас карауатта мышылдап ғәмһеҙ йоҡлаған улына ҡарай, тын алған һайын өҫкә, аҫҡа ҡуҙғалып ятҡан уның йомшаҡ йылы арҡаһынан һөйә, наҙлай. «Үткән юлы ауылдағы яман хәбәрҙәрҙән беҙ ситкә китеп котолдоҡ. Хәҙер нишләргә? Ул ваҡытлыса тынып торған хәбәрҙең яңынан ҡуйырыуы ла ихтимал бит әле. Ярай ҙа теге саҡта Абдрахман үҙенең көслө ихтыяры менән шул тулҡынға ҡаршы тора алды. Ә хәҙер, һаман да иҫке ғөрөф-ғәҙәт, боронғо йола менән йәшәп ятҡан ауылдың ҡыҫымына Абдрахман нисек ҡарар? Ул ҡыҫымға бирешеп, уның ихтыяры һынмаҫмы? Иҫке йола ҡорбаны булып, мине, Володям менән, билдәһеҙ яҙмыш ҡосағына ырғытмаҫмы? Ауылдың үҙ битенә туп-тура бәрелгән көслө дауылына ҡапма-ҡаршы торорға уның рухы һәм физик көсө етерме? Бына яңы ғына һыйырын көтөүгә ҡыуып ҡайтҡандан һуң, Абдрахмандың иртәнге тамаҡ алдында әсәһе менән осрашыуы хаҡындағы һүҙе Маргаританы шиндәй өйөр упҡынына ташланы.

Бисәһенең сырайын ҡаплаған борсоуҙы һиҙеп, Абдрахман:

— Риточка, һис борсолма. Тора-бара бөтә нәмә үҙ урынына ултырыр. Хәүефләнмә, аҡыллым, — тип, сынаяғын ситкәрәк этеп, бисәһенең биленән аймап алды.

Маргарита күҙенән ҡыуаныс йәштәрен бармаҡ остары менән һелкте лә ҡайнар ирендәрен иренең битенә терәне.

— Рәхмәт, мин һиңә ышанам, донъя ҡупҡанда ла беҙ бергә булырбыҙ, шулаймы? — тип, башын артҡа ташлап, иренә йылы ҡараш атты.

— Шулай, Риточка. Бошонма, бойоҡма. Ҡешеләр араһында күберәк булырға тырыш. Бына бөгөн Вахитты атайымдарға алып барып күрһәтәм. Өҫтө-башын алмаштыр. Ҡарттарға өсәүләп барырбыҙ.

Абдрахман арбаһына атын еккәнсе, Маргарита малайын кейендереп алып сыҡты. Баштан-аяҡ Яйыҡ казактары кейемен кейгән малайын күреп, Абдрахман йәнләнә төштө.

— Ҡил әле мында, Вахит, — тине лә ул бисәһенә ҡараны. — Ошо көндән башлап был малай өсөн Ялан ауылында Володя тигән исем бөттө, асыуланма, аҡыллым, сөнки уны бында бер кем дә ул исем менән атамаясаҡ. «Урыҫ малайы» тип ҡушамат биргәнсе, уны Вахит тип атауҙары улар өсөн дә, малай өсөн дә уңайлыраҡ булыр. Һин ризамы, Риточка?

Рита малайын ҡул осона өҫкә күтәрҙе лә:

— Вахит так, Вахит. Ҡакая разница? Тик атаһына ғы-

на оҡшаһын, һау булһын, — тип, малайының битенән супылдатып үбеп, ергә баҫтырҙы.

— Вот молодец. Мин үҙем дә шулай уйлағайным. Һинең ризалығыңда шигем юҡ ине, — тип ҡыуанды ире.

— Ат менән барғас, атайҙарға ашарлыҡ бер аҙ он һалып алып китһәңсе, башҡа бирерлек үҙебеҙҙең дә артыҡ нәмә юҡ. Сусҡа итен улар ашамай. — Маргарита малайын күтәреп арбаға ултыртырға йөрөгән иренә өндәште.

Бисәһенең йомартлығы, эске миһырбанлығы, «атайҙарға» тип тә өндәшеүе Абдрахмандың күңелен нисектер йомшартып ебәрҙе. Дилбегәһен кырандасҡа ырғытып, үҙенең бисәһен һауаға сөйөп, уны иркәләйһе, елгә елберләгән һары сәсенән йомшаҡ ҡына итеп һыйпаһы килде. Ләкин мулла ихатаһында көпә-көндөҙ бисәһен иркәләүҙән саҡ ҡына тыйылып ҡалды. Эске әҫәрләнеүен йәшереп, битенә етди ҡиәфәт һыҙаттары йүгертергә тырышты.

— Ысынлап та, берәй тоҡ он һалып алайым әле. Ҡарттар ҡыуанып ҡалыр, — тип ул мулла бураһына ҡуйылған бер тоҡ ондо кырандасына һалды.

Улын йәнәш ултыртып, ихатанан сығып киткән Абдрахманды Маргарита эске кинәнеү менән оҙатып ҡалды.

Ошо һөйләшеүҙән һуң ғына ул күңел тыныслығы тапты, өй эсендә башҡарған эшендә лә, хәрәкәттәрендә лә ышаныс билдәләре һиҙелерлек күренә башланы. Абдрахман иһә үҙен Ялан ауылы буйлап әкрен генә юртҡан атта түгел, ҡанаттарын йәйеп, зәңгәр күктә осҡан ҡош өҫтөндә китеп барған, йәнәш ултырған улы менән ҡуша бәхет диңгеҙендә йөҙгән шикелле хис итте. Юлда осраған бер кеше уның менән һаулыҡ һорашырҙан алда, башта бер аҙ аптырабыраҡ ҡарап торҙо. Урамда осраған кешеләр, был арбалы кеше үҙ тәңгәленән үтеп киткәс тә, боролоп, ҡарашы менән оҙатып ҡалды. Абдрахман аталары ихатаһына ситәнһеҙ яҡтан туп-тура түгел, боролоп, ҡапҡаһыҙ аралыҡтан килеп инде. Бесәнлеккә барып туҡтаған арбалы кешене күреп, ҡарт менән ҡарсыҡ йүгерешеп тышҡа сыҡты. Абдрахман, арбала ултырған малайын күтәреп ергә төшөрҙө лә уны етәкләп ҡарттарға ҡаршы атланы. Башта атаһы менән, ә һуңынан әсәһе менән күреште.

Битен һыйпап, доға ҡылған кәзә һаҡаллы, йөнтәҫ ҡашлы, түбәтәйле ҡартҡа хайран ҡалып ҡарап торған малайға эйелде лә, Әбделғәлим ҡарт уға үҙенең бармаҡтары кәкрәйеп бөткән, төш-төш урынында сурайып әллә нindәй төйөрҙәр үҫеп сыҡҡан, имән ботағына оҡшаған ҡулын һондо.

— Йә, уланым, һаумы? Мин һинең олатайың Әбделғәлим булам, ни эшләп өндәшмәйһең, балам? — тигән булды.

Башына картуз, лампаслы салбарын ҡуңыстарына тығып, яңы итек кейгән һап-һары йомро малай атаһының аяғына ышҡынып торҙо ла башын бер яҡҡа борҙо. Бер аҙ торғас, ирендәрен бүлтәйтеп илап ебәрҙе. Абдрахман руссалап «ой, алйот, нимә ауыҙыңды бәлшәйеп илап тораһың? Бар барып күреш. Ул һинең олатайың да инде», тип малайын күпме генә алға этеп ҡараһа ла, малай, кире боролоп, атаһының аяҡ араһына тығылды. Әбделғәлим ҡарт, уға эйелеп, яңынан руссалап һүҙ ҡушты.

— Я Абдулгалим — твоя дедушка. А ты моя унучок, — тигән булды.

Малай ҡапыл ҡартҡа боролдо ла, бармағын һоноп, ҡайҙалыр алысҡа күрһәтте.

— Ты не дедуска. Мой дедуска там.

Билдәле, яңы теле сығып килгән малайҙың был хәбәре барыһының да кәйефен ҡырҙы. Ҡарт инде уға мөләйем генә ҡарап торған әбейен күрһәтте.

— Үәт иты твой бабушка Сарбиямал, — тине.

Әбей ҙә һүҙгә ҡыҫылды.

— Дә, дә, Сәрбиямал әбей, твой бабушка. — Ейәненән шундай яуап көттө.

Ләкин был юлы ла унан рәтле яуап алманылар. Малай башын түбән осҡа, үҙҙәренең килгән яғына борҙо ла:

— Моя бабуля там, — тип тағы баяғы яҡҡа күрһәтте.

Әбделғәлим ҡарт, асыуы килгәндә бер урында өйөрөлөп алырға ғәҙәтләнгән кеше, торған урынында бер нисә ҡат әйләнеп алды.

— Ярай, баланы йонсотмайыҡ. Алла бойорһа, ошо ауылда ҡала торған булһа, беҙгә ылыҡмай ҡайҙа барыр тиһең. Башына төшһә, нибусь өйрәнер. Малды ла өйрәтәләр. Әйҙәгеҙ, өйгә инәйек, — тип ҡарт өйгә юл башланы.

Тәпәш кенә ярым ҡараңғы өйгә ингәс Володя-Вахит атаһына яңынан һыйынды.

Әбделғәлим ҡарт һике йөҙлөгөнә ултырҙы ла:

— Ай-һай, был малайҙы ҡайһылай ҙа ҡырағай өйрәткәнһегеҙ. Тегендә ни, дүртегеҙгә бер бала булғанға инде ул. Нисауа, бына бында ауыл малайҙарынан бер-ике туҡмалып инһә, аҡылға ултырыр әле, — тип тынысланған кеүек булды. Ултыра торғас: — Был егеттең исеме кем? Ҡем тип ҡуштығыҙ? — тип һораны.

— Вахит булыр был малай, — тип йылмайҙы Абдрахман.

Үҙенең һуғышта һәләк булған Ғәбделвахит тигән малайының исеме ейәненә ҡушылғас, ҡарттың үпкәһе онотолдо, күңеле күтәрелеп китте.

— Ә, Вахитка, Вахитка икән был малай.

Ят исемде беренсе тапҡыр ишеткән малай яңынан телгә килде.

— Не Ахитка, ә Во-ло-дя, — тип ижекләп ҡысҡырҙы.

Аптырап ҡалған атаһы менән әсәһенә Абдрахман:

— Тегендә, Обручевкала, уны Володя, йәғни, Владимир тип йөрөткәйнеләр, — тип төҙәтергә ашыҡты.

Сәй әҙерләгәндә лә, һикегә ултырып сәй эскәндә лә ҡарттар үҙҙәренең берҙән-бер ейәндәренән күҙҙәрен алманы. Уны тоҡомондағы кемеңәлер оҡшатырға тырышты. Иң аҙаҡтан, эҙләнә торғас, малайҙың буй-һынын Ғәбделвахит мәрхүмгә оҡшатып ҡуйҙылар. Нисек кенә тырышмаһындар, өйҙә генә ултырған Беловтар ҡулынан төшмәгән малай, ят ерҙә, ят кешеләргә тиҙ генә ылығып китә алманы. Абдрахман бер-ике сынаяҡ сәй эсте лә, елкәһенә һалып, бер тоҡ ондо өйгә индерҙе.

— Бына, атай, хәҙергә һеҙгә ошонан артыҡ бирерлек нәмә юҡ. Риза булып ҡына ҡабул итегеҙ.

Түҙемһеҙ ҡарт иҙәнгә йүгереп төштө лә тоҡтоң ауыҙына йәбеште. Ҡартының өтәләнеүен һәр саҡ оҡшатып етмәгән Сәрбиямал:

— Ниңә үлә яҙып ул тоҡ ауыҙына йәбештең? Әллә Абдрахмандың он алып килеүенә ышанмайһыңмы? — тип көлдө лә яулығының осон ауыҙына терәне.

— Ышаныуын ышанам да, тик уның ниндәй он икәнен ҡарайым. Ҡазачийҙарҙың оно һәр саҡ яҡшы була бит, улар тосто беҙҙең һымаҡ ҡул тирмәнендә тартмайҙар. — Ҡарт, тоҡ ауыҙын сисеп, усына онон бармаҡтары менән ыуып алды ла танауына яҡын килтереп еҫкәне. — Самай көрпәсәткә оно. Әбей, былай булғас, ҡоймаҡтың нәғеҙен ҡойоп ашатаһың инде, — тип усындағы онон ҡаҡты ла тоғон яңынан бәйләп ҡуйҙы.

Өҫтәлгә ҡайтанан ултырҙылар. Малай ҡулына өләсәһе ҡатҡан ҡорот тотторҙо. Ләкин ул уны ҡытырлатып бер тешләне лә сытырайып кире төкөрҙө. Ул һуңынан, атаһының салбарына йәбешеп, ян-яғына ҡарана-ҡарана, тик кенә торҙо.

— Йә, улым, былайтып, кеше көлдөрөп, Мөхәмәтрәхим мулланың өйөнә килеп төшөүең ни? — тип ҡарт һүҙ башланы.

Абдрахман:

— Юлда Уйылданға осрап, ай-байға ҡуймай үҙ өйҙәренә алды ла ҡайтты, — тине.

Атаһы ҡайҡайынҡырап ултырҙы ла:

— Һин бәлиғ булмаған бала түгелһеңдер бит? Кем етәкләһә шуның артынан китеп ултырмаға, — тип улына ҡараны.

Һүҙһеҙ генә сәй яһап ултырған Сәрбиямал да ҡарт һүҙен эләктереп алды.

— Шулай булмай ни? Әйтерһең дә уның ауылда атаәсәһе юҡ? Ҡилеп баш терәргә кешеһе булмаһа бер хәл.

— Ярай инде, биғәйбә, ысынға алмағыҙ. Ҡилеп-китеп, ярҙам итеп торормон. Күҙгә ҡарайыраҡ күҙ күрер, берәй йорт-фәлән этмәләп булмаҫмы...

Абдрахман туры ғына яуап бирмәй, һүҙҙе икенсе яҡҡа бороорға ашыҡты.

Ҡарттар һағая төштө.

— Ул ни тигән хәбәр? Ошо өй һиңә ниңә ярамаған? Атай нигеҙе бит был. Мин ике-өс бала атаһы булғансы, ошо нигеҙҙә олатаң-өләсәң менән бергә йәшәнем. Быйыл әҙерәк ашлыҡ сәсеп, иген-бесән үҫеп китһә, ҡайтанан йәпләп күтәрергә лә форсат булыр?

— Ярар, атай, ҡарарбыҙ. Хәҙергә йәшәп торорлоҡ урын бар, күҙгә тиклеп күҙ күрер.

Әбделғәлим ҡарт бушаған сынаяғын алғараҡ этте лә һүҙҙе тәрәнерәккә борҙо.

— Йә, хуш, Абдрахман. Шулай ҙа йәйләргә лә ҡалдың, ти. Ниндәй кәсеп тотмаҡсыһың? Атың, һыйырың бар. Атың бик яҡшы бәхмискә оҡшай, һабан һөргәнгә лә оҡшаған. Әллә прогонға [1] тотоноп китмәксеһеңме?

— Ә, бәлки, файҙаһы булғандай булһа, уға тотоноп ҡарағанда ла ярар ине. Бына бер нисә көндән волосҡа юлланырға торам. Бөтә Рәсәйҙә ярлыларға ярҙам итеү йөҙөнән кредит асылып ята. Ауылда кешенең кәрәк-ярағын ҡәнәғәтләндерә торған кәпирәт тә юҡ. Барығыҙ ҙа Ваһап хәлфәнең таш лавкаһына ҡарап тораһығыҙ. Ярлыларға кредит таратып, сәсеү өсөн орлоҡ, һабан-тырма һатыуҙы ойоштороп ебәрергә кәрәк. Атһыҙ ярлылар хөкүмәттең шул кредитын алып, атлы ла булып ҡалырҙар иңе...

— Ай-һай улым, бик тә ҙур нәмәгә ниәтләнеп ҡайтҡанһың икән. Ошо эштәргә тотонорға ауылда һинән башҡа кеше бөткәнме ни?

— Бөткән атай, бөткән. Ҡемгәлер ошо тормошто йүнгә һалып башлап ебәрергә кәрәк бит. Ауыл фәҡиренә байҙарға бил бөгөп, мулла-мәзиндең ауыҙына ҡарап йәшәү еткәндер бит инде? Ни өсөн ошо власть өсөн һуғышта ҡан түктек? Бына ошо властың ярлылар тормошон яҡшыртыуға йүнәлтелгән сәйәсәтен, иҡтисатын урындарҙа бойомға ашырыу — беҙҙең бурыс. Ялан ауылында Совет закондарын атҡарыу өсөн ситтән кеше саҡырып килтереп

[1] Ялан ауылы аша үткән тракттан Балкан прискыһына бара торған кешеләрҙе ташыу кәсебе.

булмай, ярлы крәҫтиәнгә таянып, бына үҙебеҙгә башларға тура киләсәк. Ҡисәге фәҡирҙе атлы-маллы итеп, иген сәсергә өйрәткәс, совет власының ауылға ҡағылған сәйәсәтен урындарҙа үткәреп, ауыл кулактарына урындарҙа көрәшкә сығырға кәрәк. Ә быныһы инде — киләсәккә бурыс. Ошоға тиклем кеше елкәһен кимереп, кеше хеҙмәте арҡаһында байлыҡ йыйған ауыл кулактары, дин-шәриғәт тип кеше талаған Мөхәмәтрәхим муллалар барыһы ла бөтөрөлөргә тейеш.

— Нисек? Һин нимә, Ғазраил ғәлиәссәләм булдыңмы ни?

— Ғазраил түгел, әммә ғүмер буйы ярлы халыҡты иҙеп йәшәгән синфи дошманды мәхкәмә эскәмйәһенә ултыртып, мәсьүлиәткә тарттырыу — беҙҙең бурыс.

— Һәл-лә, алай икән. Хәйерле булһын.

— Бына, атай, минең һәм минең шикелле ауыл ярлыһының яҡын киләсәккә ҡуйылған бурысы шул.

Аталы-уллы ике кеше тәрән уйға сумды. Бер аҙ ултырғас, Әбделғәлим ҡарт:

— Һабан мәле килеп етте бит. Әле мин Ғәйнулла байға һабан һорарға ла барып ҡайтманым. Йәһәт кенә уның атын табып алыуы ла анһат түгел. Үҙең һөйрәп, ер һөрөп булмай бит, — тип һүҙ башланы.

— Уныһы, әлбиттә, шулай. Ләкин быйыл улар алдына барып теҙ сүгеп булмай. Бына иртәгәнән башлап, ауыл ярлыларын йыйып, хөкүмәт кредиты хисабынан кемдең ни һатып алырға теләгәнен белеү кәрәк. Шуға ҡарата күпме кредит һорау мәсьәләһен волость алдында, әгәр инде унда ошо көнгә ҡәҙәр ул ойошмаған булһа, кантон алдында ҡуйырға кәрәк. Бына бит беҙҙең ҡабырға серетеп йоҡлап ятыу нимәгә килтерә? Урал облысында ул эш күптән йүнгә һалынған. Волостарҙа түгел, ауылдарҙа кредит обществолары ойошторолоп, хөкүмәттең ярҙамы менән ярлыялпы бер табандан файҙаланып ята. Ә беҙҙә ул ярҙам ауылға түгел, уның кантонына ла әллә килеп еткән, әллә етмәгән.

Абдрахман үҙ алдына һуҡранып ҡуйҙы.

Стенаға арҡаһын терәп кәзә һаҡалын кәкре бармаҡтары менән тарай-тарай улының үҙе өсөн бигүк төшөнөшлө булмаған хәбәрен диҡҡәт менән тыңлап ултырған Әбделғәлим ҡарт эстән генә «минең малай ситтә оҙаҡ йөрөп, бик үткерләнеп, шымарып ҡайтҡан икән, үҙем шикелле отҡор фекерен бик төптән йөрөтә», тип маһайып ҡуйҙы, тик һуңынан ғына:

— Һүҙеңә ҡарағанда, эштең бик ҙурына, ярлы халыҡ мәнфәғәтенә кәсептең изгеһенә тотонорға тораһың икән,

улым. Эшең уң булһын, хәйерле сәғәттә, — тип үҙенең фатихаһын биргән шикелле әйтеп ҡуйҙы.

Абдрахман урынынан ҡуҙғала башлағас, шуны ғына көтөп, ситлек эсендәге ҡош һымаҡ торған унын малайы талпынып алға сыҡты. Олатаһы менән өләсәһе, малайҙың ишек асып иң алда дәррәү тышҡа сыҡҡанын күреп:

— Йә, йә, балам. Әҙерәк үҫә төшөп, донъяның аңын тоңон төшөнә башлаһаң, «ошо тәпәшәк кенә, ҡараңғы өйҙән ҡайтмайым» тип, олатаңдың һенәһен ҡороторһоң әле. Пагади, малай, — тип оҙатып ҡалды.

— Ярай, берәй яңы хәбәр булһа, күҙ менән ҡаш араһында килеп урармын әле. Атай, әгәр орлоҡҡа бер аҙ игенең булһа, шуны иҙәнгә таратып ташла әле. Тоҡ эсендә тонсоғоп ултырмаһын, симәнәне тын алдырыу, яңынан таҙартыу кәрәк, — тине Абдрахман.

Улын оҙатып, ишек төбөндә камзулы эсенән ике ҡулын биленә һалып торған бабай:

— Бер-ике дисәтинәлек нәмә бар. Ул ни, теге үткән йыл һин килтереп биреп киткән, ат теше шикелле эре кубань бойҙайы инде. Ултырыуы ҡоро булырға тейеш. Уны инде. үҙебеҙ асыҡһаҡ асыҡтыҡ, әммә ләкин ошо көнгә тиклем һаҡлаған булдыҡ, — тигән булды.

— Ярай, атай, әсәй, хәҙергә хушығыҙ. Мин, ваҡыт булғанда, килә-китә йөрөрмөн әле.

Абдрахман хушлашып ҡайтырға ашыҡты.

Ата йортон күреп, улар менән һөйләшеүҙән Абдрахмандың күңеле бер аҙ асылһа ла, бөтөнләй үҙ урынына ултырып етмәне. Ниҙер уның йөрәген өйкәй, күңелен ҡыра ине. Яуапты ул арба өҫтөндә, үҙе менән ултырған малайынан эҙләй ине. Ә уныһы бер ни булмаған шикелле ниҙер бышылдап, ниндәйҙер осо-башы булмаған көйҙө йырлап килә ана.

«Әһә, бына нимә минең эсте бошорҙо? Атай-әсәй эргәһендә күпме булдым, ни уныһы, ни быныһы «килен бала ни хәлдә әле, ниндәй эштәр бөтөрә, уға беҙҙән сәләм тапшыр» тигән ләм-мим бер ауыҙ яҡшы хәбәр булманы. Тимәк, ҡарттар минең Маргаритаға өйләнеү менән һаман килешеп бөтә алмайҙар. Улар әле һаман ниндәйҙер мөғжизәгә ышаналар».

Абдрахман уларҙың килендәренә булған мөнәсәбәтенән шундай һығымтаға килде. Ҡайтып инеү менән, тәгәрмәскә баҫып ергә төшкән, әле генә күргән тәьҫораттарынан айнып бөтә алмаған малай, ике күҙен ҡыҫып, ҡулдарын биленә ҡуйып, һаҡаллы олатаһының писек йөрөүен әләкләне. Эйәгенең аҫтын бармаҡтары менән аҫҡа тарап, «бобо» тип ни күргәндәрен әсәһенә еткерергә ашыҡты.

Маргаританың зәңгәр күҙҙәрендә ғәжәпләнеү күреп, Абдрахман, яһалма булһа ла, ризалыҡ тойғолары белдерергә тырышты:

— Атай, әсәй һиңә бик күп сәләм тапшырҙы. Бигерәк тә әсәйем ҡарсыҡ «нишләп киленде лә алып килмәнең?» тип ҡат-ҡат һораны, — тип алдашырға мәжбүр булды.

Маргарита иренең был «сәләм»ен ышаныр-ышанмаҫ ҡына тыңланы. Ул әкрен генә тауыш менән, ишетелер-ишетелмәҫлек итеп:

— Яҡшы һүҙҙәре өсөн рәхмәт инде. Иҫән булһындар,— тигән булды.

Ҡатынының тел осонан, ирендәрен бүлтәйтеп, көслөк менән генә әйтелгән был һүҙе иренең күңеленә бысаҡ булып ҡаҙалды. «Минең хәйләм барып сыҡманы, ҡатындарҙың нескә хисен беҙҙең ише бер ҡатлы кешегә аңлауы бик еңел түгел шул», — тип уйланы Абдрахман.

Атын туғарып, ҡамыт-сбруйын йыйыштырып йөрөгән Абдрахман янына аяғына ҡуңалтаҡ ҡата кейеп, әллә ҡайһы ике арала мулла үҙе килеп сыҡты. Майлы күҙҙәрен тәгәрәтеп, алан-йолан ҡаранып алды ла әкрен генә һүҙ башланы.

— Ай-һай, Абдрахман ҡусты, бигерәк салт кешеһең дә инде. Баҫҡан ереңдә ут сығып тора. Бәхмисе менән һибә юрттырып әллә ҡайҙарға барып та ҡайтты! Әҙәмдең уңғаны шулай була инде ул, беҙҙең ише бер аяғын ҡалҡытып баҫҡансы, икенсеһен эттән ашатып йөрөмәй.

Мулла шулай юхаланды.

Абдрахман да күҙ буяп, ялтарып торманы.

— Мулла ағай, һин беҙҙе салт та салт тип маҡтап торған булаһың. Бына ауылға ҡайтҡаны бирле, атай ҡартты барып хәлен белергә лә форсат тапмаған кеше салт буламы ни? Ундай кешене беҙҙә үжәт ти торғайнылар элек, — тине. — Бына малайҙы ултыртып, ата йортона барып ҡайттыҡ әле. Ҡарттар ҡыуанып ҡалды, әҙерәк ашарҙарына ла алып барып ташланыҡ.

— Бик мәслихәт, игелекле балаларҙың тыуған нигеҙен, ата-әсәһен ихтирам итеү — борондан килгән яҡшы ғәҙәт, ул бик тә ҙур сауап, ундай эште китап һәр ҡасан маҡтай. Юғиһә... — тип кемделер (билдәле, үҙ Уйылданын инде) телгә алырға уйлағайны ла, тәүге һүҙендә туҡтап ҡалды. Йүгән теҙгененән ситән бағанаһына бәйләнгән аттың муйынын бөгөп, алғы аяҡтары менән ер сапсып торғанын күргәс, эргәһенә килеп, бер аҙ ҡарап торғандан һуң, атҡа һоҡланыуынан телен сартлатып алды.

— Эй, януар, сыҙамай, ер тырнап тора бит. Был бүртә бурылыңдың оҙон тороҡло булыуына ҡарағанда, бик йө-

рәк ат булырға оҡшай. Тоҡомо бик ырыҫлы икән. Был теге һинең Беловыңдың миңә аты түгелме? — тип һораны хужа.

— Эйе, эйе. Ул минең элекке хужаның эйәр һалған аты. Былай йыйындарҙа бәйге сапҡанын Андрей Иванович һөйләмәне, әммә муйынына ҡамыт кейгән мал түгел. Тәртә араһына үҙем индерҙем, — тине Абдрахман, ҡарттың ат менән ҡыҙыҡһыныуын күреп.

— Беҙҙең аттар шикелле, яҙ сыҡһа ла, ит ташламаған, бер иле ҡаҙыһы хәҙер үк күренеп тора. Ҡаҙы ғына түгел, ялы ла бар әле уның.

Мулла ат ялының төбөнә ҡулын тыҡты. Ҡарттың мәкерле уйын шундуҡ һиҙеп алды Абдрахман. «Минең атайымдарға барып ҡайттым тигәнгә ышанмаһы ҡарт төлкө. Шуға күрә аттың ял төбө тирләмәгәнме икән, тип ҡулын тығып ҡарай». Ысынлап та, аттың ситкә йөрөмәгәненә камил ышанғас ҡына, мулла ҡатаһын һөйрәп өйөнә табан йүнәлде. «Тимәк, минең ҡайҙа йөрөүем мулла өсөн барыбер түгел. Алдыңды-артыңды абайлаңҡырап йөрөү хәйерлерәк булыр».

## 10

Тәһәрәтен алып, сәлләһенең ҡойроғон уң яҡ яурыны аша алға, йәшел сапаны өҫтөнә һалды ла мулла тамағын ҡыра-ҡыра йәстү [1] намаҙына китте. Өҫтөнә күлдәк-ыштан ғына кейгән Ғәбделбарый ишекте асты ла Абдрахманды соланға саҡырҙы. Һүҙ башларҙан алда солан ишегенең келәһен эстән элеп ҡуйҙы. Үҙенән бер ҡарыш тигәндәй юғары Абдрахмандың ҡолағына аяҡ ослап үрелде лә:

— Ағай, Атнағолдан минең Солтанмәхмүт тигән иптәш килеп төштө. Бик оло хәбәр алып килгән. Бына шуны һинең ҡолағыңа төшөрөп ҡуяйыҡ тигәйнек, — тип бышылданы.

Абдрахман көтөлмәгән хәбәрҙән ҡапыл тертләп киткәндәй булды, ләкин һыр бирмәне. Вайымһыҙ ҡыланып һорап ҡуйҙы.

— Ә ул кеше ҡайҙа?

— Миндә. Һине көтөп ултыра. Ҡалғанын өйгә ингәс һөйләшербеҙ, — тип ул Абдрахманды үҙ артынан эйәртте.

Ул өйгә барып ингәндә, ахун күсере һике йөҙлөгөндә Ғәбделбарыйҙың бисәһе менән ҡапма-ҡаршы сәй эсеп ултыра ине.

[1] Шәфәҡ байығас аҡҡарыла торған намаҙ.

— Һин, ҡунаҡ кеше, башыңды баҫып, миңә һыр бирмәйерәк торһаң да, беҙ һинең менән байтаҡтан бирле таныш кешеләр булып сыҡтыҡ әле.

Абдрахмандан быларҙы ишеткәс тә Солтанмәхмүттең йыйырсыҡтар менән һырланған битенә кинәт ҡурҡыу шәүләһе ятты. Ул оҙон, ябыҡ үңәсен ситкә бороп:

— Әлләсе... — тигән булды.

— Хәтереңдәлер бит, ағай тиемме, ҡусты тиемме, беҙ һинең менән төндә баҫып ингән бандиттарҙың береһен юлда үлтереп, волос милицияһының келәтенә ҡалдырып киткәйнек.

Абдрахмандың ахун күсәренә ҡараш ташлауы булды, теге, башына күҫәк тейгән кешеләй, аҫҡа сүкте.

— Ошо ваҡиға хәтереңдә юҡмы ни?!

Абдрахмандың төпсөнөүе уның йөрәгенә оло ҡурҡыу һалды.

— Эй, ағай, ағай, беҙҙең хәлдә күп ваҡыт таныш кешеләрҙе танымаҫҡа, белгән нәмәләреңде онотоорға тура килә шул. Бигәйбә.

Солтанмәхмүт үтенесле ҡарашын Абдрахманға төбәне.

Итеген һалдырып, Абдрахманды ҡыҫтай-ҡыҫтай өҫкә ултырттылар.

Хужабикә башын ҡалҡытмай ғына барыһына ла сәй яһаны ла, тышта эш барлығына һылтанып, сығып китте.

Өс ир кеше һүҙҙе ниҙән башларға белмәй өндәшмәй генә һөрпөлдәтеп сәй эсте.

Тынлыҡты Абдрахман боҙҙо:

— Йә, ағай-эне, ниңә һыу уртлаған кеше һымаҡ тымып ҡалдыҡ әле... Әйтерһең дә, беҙҙең донъябыҙ кругом ҡибла, ә тормошобоҙҙа бер ниндәй ҙә хәсрәт юҡ?

— Һөйләй башлаһаң, был етешмәгән донъяның хәсрәтенән күп нәмәһе юҡ инде. Тик баш баҫып өндәшмәй генә йөрөйһөң.

— Шулай инде, шулай. Реүәлүтсиә сығып, беҙҙең ишефәҡир-фоҡара әҙерәк әҙәм рәтле йәшәй башлармы, тип өмөтләнгәйнем, ләкин ошоға тиклем тормоштоң бер ҙә ырап киткән ере юҡ.

— Эйе, ҡорҙаш, һинең һүҙеңә ҡеүәт тау араһында ятҡан беҙҙең утыҙ өйлөк ауылда реүәлүтсиәнән алда ялсы тотҡан ни бары өс өй бар ине. Бына быйыл батшаны ҡолатҡанға ете-һигеҙ йыл була. Һуңғы дүрт йыл эсендә тағы дүрт кеше үҙ хужалығында ялсы тота башланы. Бер көнө хисаплап ятам: йәмгеһе бөгөн ауылдың ун биш кешеһе ялсы булып бил бөгә.

— Ҡара һин уны? Байы ла күбәйгән, ялсыһы ла артҡан тиң, ә?

— Шулай булмай ни? Раç, шулай. Бына һин үҙ ауылыңды, Яланды ғына ҡарале, һеҙҙә лә шул уҡ хәл. Әле мин ялсылыҡта йөрөгән думахәжәин ирҙәрен генә алам әле. Уларҙы ҡатын, бала-сағалары менән хисапланиһәң, илле-алтмыш кешегә барып баҫа.

— Үҙең байға хеҙмәт итһәң, бала-сағаң ҡайҙа барһын? Шул уҡ бай тупһаһында ҡалған-боҫҡанды йыйып йөрөй инде. Йәй булһа балаларың ат башында, һабан һөрә, бесән саба, ә бисәң көнө-төнө байбисә йомошонан бушамай, өй эсендә, кәртә-ҡура араһында йүгереклəй. Шунан ни, улар байымай кем байыһын? Әлеге лә баяғы ҡотҡа-ҡот өҫтәлә, тинде тин арттыра. Байҙың мөлкәте, фәҡирҙең хәйерселеге арта был заманда. Беҙҙең хәл мурҙаға эләккән балыҡ шикелле — ҡанатыңды унда ла, бында ла бәреп ҡарайһың, ләкин сығып китергә бер ниндәй ҙә әмәлен табырлыҡ түгел.

Ике ялсының ҡуңылтаҡ тормоштарынан үртәнеп һөйләгән хаҡ һүҙҙәрен Абдрахман өндәшмәй генә тыңлап ултырҙы, ләкин бүлдермәне. «Әйҙә, үҙ хәлдәрен һөйләп эстәрен буҫҡәртеп алһындар».

Абдрахман нишләп саҡырғаны хужаның ҡапыл иҫенә төшөп ҡалды, буғай, ул әңгәмәне йөйләргә булды.

— Ярар, ҡорҙаш, беҙ зарланыу менән тормошобоҙ бөгөн генә йүнәлеп китмәҫ. Бына Абдрахман ҡорҙашҡа еткерәһе һүҙҙе әйтеп, ҡолағына төшөрөп ҡуяйыҡ, сөнки тигәндә, беҙҙең ташҡорһаҡтарҙан теләһә ниндәй этлек көтөргә була, — тип Ғәбделбарый ҡунаҡҡа һынамсыл итеп ҡарап ҡуйҙы.

Был һүҙ Абдрахманды тағы ла һағайта төштө, ул усындағы сынаяғын батмусҡа ултыртты ла, һәр икеһенә ҡашын атып, уларҙан яуап көттө.

— Йә, Ғәбделбарый ҡорҙаш, һин үҙең генә һөйләп бир ҙә ҡуй инде, һин уны миңә ҡарағанда яҡшыраҡ та беләһең, бер ҡатар кешеләре бит беҙ.

Солтанмәхмүт ҡаты көрһөндө.

— Бында сурытып һөйләр бер ни юҡ. Эш шулай тора, — Ғәбделбарый сисенеп һалҡын йылғаға төшөргә сирҡәнгән кеше кеүек, бер нисә тапҡыр тәрән итеп тын алды. — Бер көн беҙҙең ауылда Мөхәмәтшәриф ахундың хажиға килеп ҡунаҡ булып ҡайтыуын ишеткәнһеңдер бит инде?

— Үҙен күрмәнем, ләкин ҡаға-һуға ғына булһа ла ишетеп ҡалғайным.

Абдрахман Солтанмәхмүткә һынаулы ҡараш ташланы.

Төшөп килгән ҡараңғылыҡта кеше сырайын асыҡ күреп булмаһа ла, сәй эсеүҙән туҡтап, хужаның һүҙенә ҡо-

лак һалып ултырған Солтанмәхмутте был утлы ҡараш саткылары ялмап алғандай булды. Ул хужаның һүҙен дөрөçләргә ашыҡты.

— Эйе, эйе, кесаҙна көнө килеп, Ғәлимйән хажиҙа ахун менән ике төн йоҡлап ҡайттыҡ.

Ғәбделбарый өҙөлөп ҡалған һүҙҙе дауам итте.

— Икенсе көнө, бик кисләтеп кенә, ахунды беҙҙең мулла өйөнә саҡырҙы, хәл-әхүәлде, уртаҡ ҡайғы-хәсрәтте һөйләшеп ултырырға, тип шул көнө кис Солтанмәхмут тә беҙгә инеп ултырғайны.

— Эйе, эйе, килдем, раç.

— Бер аҙ ваҡыттан һуң, тын алырға тип ихатаға сыкһаҡ, ҡапҡаһы асыҡ ҡараңғы һарай эсендә минең хужа менән ахундың үҙ-ара һөйләшеп тороуын бик асыҡ ишеттек.

— Ни ишеттегеҙ? — Абдрахман ҡапыл тауышын күтәрҙе.

— Башта ахун һөйләне. Ул «ошонан ҡайтып төшәм дә, Солтанмәхмутте Абрашауға ебәреп ҡайтарам. Барыһын да энәнән-ептән һорашып-белешеп ҡайтһын» тип ярһыны.

— Нимәне белеп ҡайтһын? Ҡем хаҡында һүҙ бара?

— Һинең хаҡта. Ахун һинең Абрашауҙа торған саҡта нисегерәк йәшәүеңде, ниҙәр менән шөғөлләнеүең хаҡында белеп ҡайтырға Солтанмәхмутте ебәрергә һөйләште. Мулла риза булды.

Абдрахман сабырһыҙланды.

— Шунан? Солтанмәхмут барҙымы һуң?

— Эйе, ҡорҙаш. Минең Абрашауҙан ҡайтҡаныма ике көндә юҡ әле. Шунда барып, төн ҡунып, ахун белешенән һинең хаҡта бөкилле хәлде белеп ҡайттым.

— Йә, йә. Һеҙҙең белешегеҙҙең исеме кем һуң? Ул кем?

— Уның исемен кем белгән. Белеш, белеш инде. Ахундың ғүмер баҡый барып төшөп йөрөй торған кешеһе. Йыуан, быштыҡ, бөтә битен ерән һаҡал баçҡан бер урыç.

— Уларҙың барыһының да бите йөнтәç. Күбеһе ерән һаҡаллы, ул кем булыуы мөмкин?

— Ул кеше һинең хужаң Беловты бик яҡшы белә. Уның менән бергә һуғышта ла булған. Башҡортса ла һыу һымаҡ...

— Ә, улай булғас, Анцифер ҡарт икән. Бер аяғы бөгөлмәй, уныһын һөйрәп атлай. Шулмы?

— Тәс үҙе. Әле мин уның аяғын ағасмы тиһәм?

— Ағас түгел, үҙенеке. Сәүит власын, Абрашау ярлыларын ене һымаҡ күрә. Шулмы?

— Бына шул кеше инде. Теле менән дә һөйләне, ҡулыма унда һинең ярлы-ялпыны яҡлай торған урында эшләүеңде күрһәтеп, бәләкәй генә ҡағыҙ ҙа тотторҙо.

— Ул ниҙәр һөйләне?

— Һеҙҙең Абдрахман ауылдашығыҙ бында, ярлыларҙы бергә туплап, байҙарға ҡаршы ҡотортто. Әллә ниндәй йәшәйкә тиме, обчестуа тиме шунда, ҡыҫылып йөрөнө. Торғаны менән байҙарға ҡаршы, йәне-тәне менән сәүит власына бирелгән кеше булды. Бай-кулактарҙы бөгөн үк тотоп ашар ине, тик хәҙергә ҡулынан ғына килмәй. Беҙҙең өсөн бик тә хәтәр әҙәм, тип һөйләп ултырҙы.

— Ҡыҙыҡ... Тағы нимәләр бар?

— Һеҙҙең ул шаҙра башҡортоғоҙҙа иман юҡ, ул динен һатҡан кеше. Үҙен ашатып-эсереп, улы һымаҡ көтөп торған минең дуҫым Беловты хөкөм ҡулына тотоп бирҙе, өйөнә тентеү төшөрттө. Бына шунан һуң Белов ҡарт хыялыйға әйләнеп, хәҙер өйөндә, йән бирә алмай, түшәк өҫтөндә ята тип, илай-илай һөйләп ҡайтарҙы. Ҡайтырға, тип, атымды егеп, арбаға ултырғас «гаспадин ахунға әйт, ул кешенән нисек тиҙерәк ҡотолһағыҙ, шул тиклем хәйерлерәк булыр» тип ҡат-ҡат туҡыны.

Солтанмәхмүттең ошо һүҙҙәре был өйгә вайымһыҙыраҡ килеп ингән Абдрахманға йәшен һымаҡ тәьҫир итте. Ул ултырған урынында, һике таҡталарын шығырлатып, ҡуҙғалып ҡуйҙы. Йән асыуынан ниндәйҙер эске көс уның күкрәгенә килеп тығылды ла бөтә ҡан тамыры буйлап тәненә йүгерҙе. Галифе салбарының балағы осонан күренеп торған яланғас аяҡ табандары, ҡыҙған табаға баҫҡан шикелле, янды. Эске көсөргәнештән һалыулы, көрәктәй ҡулдарының бармаҡ остары тирләне. Тирткән бармаҡтары менән айырсалап тотҡан сынаяҡты усына йомоп көлгә әйләндергеһе, был яуыҙлыҡты эшләп ятҡан ахундың һаҡалынан һелкеп бейек күтәрмәһенән ергә ырғытҡыһы килде. Уның эсендә нәфрәт уты дөрләп янды, үс алыу дәрте ҡайнаны. Ул хәҙер үк бүртә бурылына атланып, Атнағолға сабырға, совет власына әсе үтен бөркөп ятҡан ахунды йылы түшәгенән һөйрәп сығарырға уйланы. Ләкин икенсе айнығыраҡ тауыш уның ярһып типкән йөрәген тынысландырырға тырышты. «Сабыр ит, Абдрахман, сәүит власы үҙенең синфи дошмандарының һәр береһен, һинеңсә, ҡул менән быуып үлтереп, язалай алмай. Законһыҙлыҡ, баш-баштаҡлыҡ тип атала был. Ахун һәм уның ишеләр бөтәһе лә законға ярашлы рәүештә үҙ язаларын аласаҡ, көн элгәре ыуаланма».

Абдрахман ҡапыл турайып ултырҙы ла ауып барған кеше һымаҡ өйҙөң йомро бүрәнәләренә арҡаһын ныҡлап

тераһе. Үҙенең эске әҫәрләнеүен, йөрәге өҙөлөп, күңеленең һыҙланыуын тәрәнгә йәшереп, үҙ-үҙен тыныс тоторға тырышты. Солтанмәхмүттең хәүефле хәбәренә, һис бер ғәме юҡ кеше төҫлө, ул өнһөҙ генә көлөмһөрәп ҡуйҙы.

— Шулайтып, ҡорҙаш, Анцифер ҡарт ахунға мине тиҙерәк юҡ итергә әмер биреп ҡайтарҙы инде, ә?

— Эйе, эйе. Бына ҡөрьән. Валлаһи, бер ҡалаҡ ҡан, бер ҡалаҡ тоҙ. Шулай.

— Уның был әмерен һинең хужа нисегерәк ҡаршы алды? Хупланымы, әллә ҡаршы берәй һүҙ әйттеме?

— Мин алып ҡайтҡан хәбәремде телдән һөйләп бөтөп, теге ҡош телендәй ҡағыҙҙы ҡулына тотторғайным, ул ҡулдары ҡалтырана-ҡалтырана уҡыны ла янып ятҡан мейескә ырғытты. Тиҙҙән Абдрахманың да, шуның һымаҡ бәлшәүиктәргә эйәреп йөрөгән ҡойроҡтарын да, аяҡ-ҡулын бәйләп, әрҙәнә шикелле һалабыҙ ҙа кәрәсин һибеп яндырасаҡбыҙ, шулай итмәгәндә, беҙҙең үҙебеҙгә тиҙҙән шундай көн килеп етәсәк, тип иҙәндә аяҡ тибеп аҡырҙы.

Абдрахман тауышын ҡалтыратыбыраҡ яңынан һүҙгә ҡушылды.

— Ҡайһылай ҙа анһат! Әрҙәнә шикелле өйөп һала ла кәрәсин һибеп яндыра тиең, ә? Ун етенсе йылда ахундарҙың ҡулынан килмәгәнде, хәҙер уларға шулайтып ҡапҡа аҫтынан ятып өрөргә генә ҡала инде. Эт өрмәһә, башы ауырта бит уның. — Абдрахман Солтанмәхмүт һүҙенә артыҡ иғтибар итмәҫкә тырышты. — Беҙ хәҙер күп. Беҙ көндән-көн күбәйәбеҙ, көсөбөҙ көндән-көн арта. Ә уларға шулай «кантонға бейәләй эсенән йоҙроҡ күрһәткән» һымаҡ, «яр аҫтында яу сыҡҡанын» көтөргә генә ҡала. Ләкин уларҙың был көтөүе бушҡа ғына, беҙгә яңынан ҡул ҡалҡытырға бер ниндәй ахун, мулланың да хәленән килмәйәсәк.

Абдрахман, үҙ һүҙен бөткәнгә хисаплап, урынынан торорға йыйына башланы. Уның еңенән тартып кире урынына ултыртты ла, Ғәбделбарый ҡалтыранған тауышына сабырлыҡ һыҙаттары өҫтәп, һүҙ башланы.

— Һин, Абдрахман ҡорҙаш, улай аша һөйләшмә әле. Ауыл байҙары, мулла-мунтағай үҙ теләге менән генә яңы сәйәсәткә баш һалмаҫ. Улар хакимлығын, мөлкәттәрен үҙ ҡулдары менән генә тотторол ебәрергә тормай. Һәр ауылда, әле сәүит власы урынлашыуға нисә йылдар үтһә лә, байтаҡ халыҡ шулар ауыҙына, ҡарап тора. Имгәнеп иҫәңгерәһә лә, уларҙа ҡарыу әлегә етерлек. Уйланҡырап һөйлә.

— Уйлай торғаны уның күптән уйланған. Уларға күптән ясин уҡылған. Бөгөнмө-иртәгәме йыйыштырып, гүргә оҙатаһы ғына ҡалған, мансух, вәссәләм уларға!

Ғәбделбарый үҙенең ишеткәнен асыҡтан-асыҡ әйтергә тәүәккәлләне.

— Бына улар һинән алда өлгөрөргә хәл ҡылды бит әле, һине юк итергә һүҙ ҡуйышты, белдеңме?

— Йә, ҡуй әле, Ғәбделбарый, шаяртма!

Абдрахман яҡынан уларҙың һүҙен уйынға һабыштырмаҡсы ине. Ләкин йөрәген ниндәйҙер икеләнеү тойғоһо сәнсеп үтте.

— Ышанмаһаң, Солтанмәхмүттән һора, ул әйтеп бирер, беҙ икебеҙ үҙ ҡолаҡтарыбыҙ менән ишеттек.

— Эйе, эйе, ҡорҙаш. Улар һеҙҙе, ысынлап та, яҡын арала үлтерергә ҡырсына — быныһы уйындан ғәйре. Мин ышанам: был кешеләр хәҙер теләһә ниндәй яуызлыҡҡа ла әҙер. Улар күҙҙәре аларып, камил ҡотороп алғандар. Ә ҡоторған этенә лә, кешеһенә лә бөтә нәмә бер, улар аҡ-ҡара тип айырып тормаҫтар.

— Һин, ҡунаҡ кеше, «һеҙҙе» тип ебәрҙең бит әле. Бында фәҡәт минең хаҡта ғына һүҙ бара түгелме ни?

— Юҡ шул. Улар өсөгөҙҙө бер юлы бөтөрөргә уйлай.

— Башҡалары кем?

— Ул исемлектең башына һине теркәгәндәр. Шунан ауылдағы йәштәр башлығы Мөхәмәтнурҙы телгә алдылар. Фәйзулла хажиҙың кинйә малайын. Иң аҙаҡтан Уйылданды ла бөтөрөргә һөйләштеләр.

Ҡараңғы баҫа башлаған өйҙә тынлыҡ урынлашты, тик ҡайҙалыр усаҡ аҫтындағы өй сиңерткәһе генә өҙлөкһөҙ сырылдай. Мулланың йөнтәҫ алабайы ниндәйҙер тауыш ишетеп, сынйырын сылтырлатып, ары-бире ялҡау ғына үтте лә ояһына инерҙән алда, оло йомош башҡарғандай, күккә ҡарап ларһылдап өрҙө. Шығырлап бәләкәй ҡапҡа асылды. Хужаның мәсеттән ҡайтҡанын һиҙеп, ояһынан башын ғына сығарып үҙ хужаһына ялағайланып сөңкелдәне, үҙенең был донъяла тере икәнен белдереп ҡуйҙы.

Мулла ҡапҡаны эстән бикләрҙән алда, муйынын һуҙып, ҡулын ҡолағына ҡуйҙы, башын төрлө яҡҡа бороп, тыңлап торҙо, бер ниндәй ҙә шик-шөбһә ишетелмәгәс, саған таяғының осо менән ҡапҡаһын шаҡылдатып япты ла, оло күн ҡатаһын ерҙән һөйрәп, ихатаға үтте. Үҙ өйөнә инерҙән алда, донъяһын теүәлләгән шикелле, тирә-йүнде байҡап сыҡты. Ялсыһы торған өй тәҙрәһе янына әкрен генә килде лә, бер талай һүҙһеҙ тороп, нимер тыңланы. Шунан һуң ғына ул үҙ өйөнә йүнәлде.

— Бына шулай ул хәҙер минең мулла. Теге хәтәр һөйләшеүҙән һуң, киске намаҙҙан ҡайтҡан һайын, минең тәҙрә төбөндә тороп, хәбәр тыңлап китә, — тип Ғәбделбарый тынлыҡты боҙҙо.

— Тимәк, үҙҙәре кеше үлтерергә йыйынһалар ҙа, күңелдәре тыныс түгел, ул «батырҙар» үҙҙәренең артына шыр ебәреп йөрөй. Һеҙҙе тыңлап, бер һорау тыуҙы әле,— Абдрахман өй хужаһына мөрәжәғәт итте. — Уйылданды үлтереү уйын башта кем әйтте?

— Мулла үҙе әйтте. Ул эттән тыуған мәлғүнде лә юҡ итеү фарыз, тине. Бына уның әйткән һүҙҙәре. Ышанмаһаң, бына Солтанмәхмүт геуаһ.

— Донъяла кешенән дә яуыз нәмә юҡ. Үҙ байлығын һаҡлап ҡалыу өсөн үҙенең ғәзиз балаһын ҡорбан итеүҙән дә тартынмай. Бына ҡомһоҙлоҡ нигә килтерә.

— Әйтмә лә инде! Әлеге лә баяғы ҡомағайлыҡ касафаты инде.

— Эйе, эйе, үҙ ҡолағым менән ишеттем. Мына икмәк, — тип Солтанмәхмүт ашъяулыҡта ятҡан икмәкте семтеп алды.

Тағы бер аҙ тымып ултырғандан һуң, шомло тынлыҡты Абдрахман боҙҙо.

— Беҙ өсәүҙе ҡасан, кемдәр үлтерергә тейешлеген ахун менән мулла һөйләшмәнеме? Ул хәбәрҙе ишетмәнегеҙме?

— Юҡ, юҡ, ул хәбәрҙе ишетмәнек. Был турала һарайҙа улар араһында хәбәр булманы. Бәлки, өйгә инеп кәңәшләшкәндәрҙер, биғәйбә, беҙ уныһына геуаһ түгел.

— Эйе, туғандар, һеҙ бик етди хәбәр еткерҙегеҙ бит әле. Һеҙгә ҙур рәхмәт. Егетлек ерҙә ятып ҡалмаҫ. Тимәк, был ҡоҙғондар әле һаман ҡанға туймаған тиген, ә?

— Эйе, шулай. Быларҙың әле һеҙҙең ҡанығыҙҙа аунарға иҫәптәре юҡ түгел. Эш былайға киткәс, Абдрахман ҡорҙаш, һиңә лә берәй сараһын күрергә тура килер бит? Ҡул ҡаушырып, мөйөшөндә үлеменде көтөп ултырып булмай ҙа.

— Әлбиттә. Быларға ҡаршы берәй сараһын уйламай тура килмәй. Бында мин бер үҙем генә артыҡ эш ҡыра алмам. Һеҙгә лә күҙ-ҡолаҡ булып тороу бик мотлаҡ. Уларҙың ҡыл ҡыбырлатҡанын да һиҙеп тораһығыҙ бит инде.

— Шулайын шулай ҙа... Хәҙергә фаразан, миңә ҡараңғы — нисек, ҡасан ҡара эштәренә тотонмаҡсы булалар икән?

— Ҡасан тотонһалар ҙа, ниндәй хәбәр ишетһәгеҙ ҙә, килә һалып миңә әйтерһегеҙ инде. Һуңлап ҡалмайыҡ. Мин һеҙгә ныҡ ышанам, егеттәр, ошондай хәүефле ваҡытта берҙәм булып, бер ҡорҙа тороу хәйерле булыр.

— Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ. Беҙ ҙә һиңә ышанғанға күрә ошо хәтәр хәбәрҙе үҙеңә еткерергә уйланыҡ, сөнки һуңлап ҡалып, аҙаҡтан үкенестән булмаһын, — тине лә Ғәб-

делбарый, уйға төшөп, бер аҙ тынып ултырҙы. — Әммә, ағай-эне, мин һеҙгә шуны алдан әйтеп ҡуйырға тейеш: мулла миңә хәҙер ышанысын юғалтты. Өй артында бүрәнәһе өҫтөндә Абдрахман ҡорҙаш менән һөйләшеп ултырғанды бер-ике тапҡыр күреп ҡалғайны. Шунан һуң, бер ни өндәшмәһә лә, хужа миңә бүре шикелле ҡырын ҡарап йөрөй, әллә шикләнә.

— Хужам хәҙергә миңә ышана әле. Моғайын, уларҙың был яуыз эштәрен белмәй ҡалмам. Берәй яңылыҡ булһа, төн тип тормам, сабып килеп етермен. Алыҫ ара түгел, — Солтанмәхмүт, һүҙен бөткәнгә һанап, урынынан ҡуҙғалып ҡуйҙы.

Абдрахман хушлашып сығып китер алдынан, ҡулын Солтанмәхмүткә бирҙе лә ысҡындырмай оҙаҡ ҡына ҡыҫып торҙо.

— Теге саҡта мин Атнағолға барып йөрөгән саҡта, Хәйрулла тигән бик тә булдыҡлы бер егет менән осрашырға тура килгәйне. Өйөндә йоҡлап та киткәйнек. Был заманда ул иптәш иҫән-аманмы, ни эштәр бөтөрә?

— Ул хәҙер волосҡа күсеп китте. Милицияла йөрөй, — тип әйтте лә Солтанмәхмүттең ҡапыл тауышы өҙөлдө.

«Теге ваҡыттағы» ҡанлы ваҡиға иҫенә төшөпмө, Солтанмәхмүт үҙенә терәлеп тигәндәй торған дәү кеше алдында тағы бөтөнләй ҡойолоп төштө. Тегенең киң ҡулы эсендә юғалып ҡалған усы тирләй башланы. Үҙенең ҡаршыһында унан нисек ҡотолорға белмәй аптырап торған кешенең эске кисерешен һиҙгән шикелле, Абдрахман уның ҡулын ысҡындырмай ғына, һәр һүҙенә баҫым яһап, бик ҡаты итеп әйтеп ҡуйҙы:

— Теге саҡта быңдай яуызлыҡты кеше ҡулы менән эшләтеп ятҡан һинең ахуның һәм уның башҡа эйәрсендәре ҡотолоп китте. Ул мәлдә заманы шулай ине. Төпләп тәфтиш алып барырлыҡ кешеһе лә булмағандыр инде ул саҡта. Юлда туңып үлгән теге бандит ептең осон үҙе менән гүргә алып китте. Әммә был юлы юха ахун ситтә тороп ҡала алмаҫ. Рәсәй йәмһүриәтенең иң ҡаты яҙаһына тарттырыласаҡ, халыҡ мөхкәмәһен урап үтә алмаҫ.

* * *

Иртә менән тороп тәһәрәткә сыҡҡан мулла, Солтанмәхмүттең көйәнтәләп һыу алып ҡайтып килгән ҡатынын күреп, яулығының осон тешләп, үҙе ҡырынан үтеп барған еренән туҡтатты ла һүҙ ҡушты:

— Йә, иҫән-һау ғына йөрөп ҡайттығыҙмы? Барған ерегеҙҙә ниндәй изге хәбәр-хәтер бар?

— Рәхмәт инде, ахун ағай, әллә ҡасандан бирле күрмәгән апайымды күреп ҡайттым. Бик тә ҡыуанышып, рәхмәттәр әйтеп ҡалдылар.

— Ярай, ярай, барыһы ла алланың рәхмәтендә булһындар. Солтанмәхмүт сәй алдынан инеп сыҡһын әле, йомошом бар, — тип, ахун баҡырсаһын тотоп, болдорға менде лә, башын өҫкә күтәреп, күккә ҡараны. «Көн бөгөн бик аяҙ, йылы булырға оҡшай, самай олуғ эштәрҙе йомошлай торған мәл».

Ҡулына йомарлап ҡамсыһын тотҡан, кәзәкей салғыйҙарын билбауына ҡыҫтырған Солтанмәхмүт тупһаны ашатлар-ашатламаҫтан һике өҫтөнә намаҙлыҡ йәйеп маташҡан хужаһына сәләм бирҙе.

— Әссәләмәғәләйкүм!

— Вәғәләйкүмәссәләм! Һин, Солтанмәхмүт, нисә йылдар күсер вазифаһын башҡарһаң да, ат ҡарау тәртибен һаман белеп бөтөрмәйһең. Төпкө ҡолат бик ҡыуылғанға оҡшай, эстәре тартылып киткән хайуандың. Бесәнгә ҡушһаң ни була? Һыуытмайынса, ҡамыт-ыңғырсағын алмайыраҡ торорға кәрәк ине. Былай ҙа шул һинең йүнһеҙлегең арҡаһында тубырлап, тубыҡ быуындары шешә башлаған бит инде. Бынау ятҡан ергә аянлатып барып ҡайтһаң булмаймы? Барығыҙға ла, ахун хәҙрәттәре шикелле, ат уйнатып йөрөү кәрәк. Ярай, Солтамәт (үҙенең кәйеф-сафаһы күтәренке саҡтарҙа ул шулайтып та ысҡындыра) йомошоң йомош булһа, һинең һымаҡ, көнө-төнө йән аямай хеҙмәт иткән кешегә, ат йәлке түгел. Донъя малы аҡҡан һыу: бөгөн усыңда күренеп ҡала, йоҡлап торһаң — юҡ. Баш ҡына һау булһын, баш һау булһа, ир кешегә мал табылмаймы ни?

Хужа үҙенең атын йәлләп ярһыған асыуын ете ҡат ҡарыны аҫтына йәшерҙе.

Ғүмер баҡый түшәлеп хеҙмәт иткән күсеренең аҡылфиғелендә хужа һуңғы ваҡытта ниндәйҙер үҙгәреш һиҙемләй .Уның ялсыһы хәҙер, ахундың һүҙе бөтөр-бөтмәҫтән, элекке шикелле маңлай ороп сапмай, элек күҙгә тура ҡарарға баҙнатсылыҡ итмәгән кешенең танау сөйөп һөйләргә батырсылығы етә. «Был мәлғүнгә бәлшәүиктәрҙең елпеүе ҡағылды буғай», тип тә уйлай хужа. Әле лә бына аяҡтарын кирә баҫып, күкрәк киреп торған ялсыһына ҡарап, ахундың кәйефе бермә-бер ҡырылды. Эсендә йәшел ут булып ҡайнаған асыуын ул эҫе тыныуы менән мөйөшкә бөрктө. Ләкин, үс иткәндәй, хужаның нахаҡ һүҙен Солтанмәхмүт был юлы тыныс ҡына ҡабул итә алманы.

— Намаҙлығың өҫтөндә бинахаҡ һүҙ һөйләү килешкән эш түгел, хужа. Ғибәҙәт алдында донъя сатаҡтарын

уйлап ултырған мосолмандың доғаһы ҡабул булмай, тип үҙең өйрәтәһең... — тине лә Солтанмәхмүт башын ҡайҡайтып түшәмгә ҡараны. «Элекке заман булһа, ҡулына эләккән берәй нәмә менән өроп-бәреп, мине өйөнән ҡыуып сығарыр ине. Ахунды ла Совет власы ныҡ ҡына өшкөрттө, хәҙер һыуыҡ һыуға ла әрәр булып китте хужа».

— Мин уны, ахун ағай, таң һарғайғас ҡына бесәнгә ҡуштым. Үҙем егеп йөрөгән атты эҫе көйөнә бесәнгә ҡушырға мин тинтәк түгел бит инде, ат ҡарау тәртибен кешенән өйрәнәһе юҡ, аллаға шөкөр.

Уны ишетмәмешкә һалышып ултырған хужа тамағын ҡырып алды ла:

— Ярай, ярай. Тик уны шул һүҙ ыңғайында ғына әйтелә инде. Һинең ат йәнле кеше икәнең бөтә макәмгә мәғлүм. Хайуанға күрһәткән изгелектең сауабы бик ҙур була, тип әйткән китапта. Иңеңдәге мөнкир-нәнкирҙәр һинең ул изгелегеңдең бер кәлимәһен дә ҡалдырмай ғәмәл дәфтәренә теркәп бара торғандарҙыр, иншалла, — тип ишеккә башын борҙо.

Намаҙын ташлап, арты менән шыла-шыла килде лә һике йөҙлөгөнә ултырҙы. Аптырабыраҡ торған Солтанмәхмүткә эйәге менән ымлап, үҙ ҡырынан урын күрһәтте. Ҡулындағы ҡамсыһын ишек төбөндәге сөйгә элеп, сарыҡ ҡуңысының бауын сисергә эйелгән күсеренә хужа:

— Ярай, ярай. Шул көйөнсә генә үт тә ҡуй. Эштәре таш түгел, йыуырҙар әле, — тип ирәбәләнеп киткән булды.

Эргәһенә килеп ултырған Солтанмәхмүткә баштан-аяҡ күҙ йөрөтөп сыҡты, һүҙен башларға икеләнгән һымаҡ, бармаҡтарын тарбайтып, һаҡалын һыйпаны, ситегенең ҡуңыстарын өҫкә тартҡылаңы, тәсбихен ҡулына алды ла тағы тубығына кире һалды. Ялтыр һөйәктән теҙелгән тәсбихе шатырлап иҙәнгә ҡойолоп киткәс, ултырған урынынан эйелеп, унынһын ҡулына эләктерергә маташты, ләкин кәзәкейенең күтәрмә яғаһы эсендә кипсәлеп торған ҡалын муйыны, йәйпәк бите бүртенеп ҡыҙара башлағас, башын ҡалҡытып, ҡан һауған күҙҙәрен күсеренә тәгәрәтте.

— Анау тәсбих булған нәмәне алып бирһәңсе, Солтанмәхмүт.

Хужа үҙенең «биле ҡатыуға» һылтанды.

Шылтырлап торған ялтыр тәсбихен «бисмилла» тип намаҙлығы өҫтөнә ырғытты ла әкрен генә дерелдәгән күкрәк тауышы менән һүҙ башланы.

— Бына, силсәүит булып эшләүсе, беләгенә ҡыҙыл тағып йөрөгән камсамул бәдбәхеттәре ялсы тота, уның эш хаҡын еткереп түләмәй тимәһен өсөн һиңә быйыл, алла

бойорһа, йәйҙе бәлә-ҡазаһыҙ үткәреп ебәрһәк, бер дүнәжен ат, бер тыусаға сыҡҡан һыйыр бирергә булдым бит әле.

«Был ахун, күрәһең, теге уйлаған яуызлығына мине лә ҡыҫылдырырға маташа. Башҡаса ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаған был ҡарун ни эшләп ошо хәбәрҙе һөйләп, йомартланып ултырһын» тигән шомло фекер Солтанмәхмүттең йөрәгенә уҡ булып ҡаҙалды. Ул тыштан ғына ихласлыҡ белдерергә булды:

— Рәхмәт инде, ахун ағай, илтифатың ерҙә ятып ҡалмаҫ, көсөбөҙҙө йәлләмәбеҙ.

— Эйе, эйе, иншалла. Һаулыҡ бирһен мәүлем. Ошо арала сәләмәтлектең рәте китеп тора әле. Ҡис булһа, тәҡәт бирмәй бил һыҙлай, аяҡ быуындары ауырта. Ятһаң, йоҡо алмай. Төн сыҡҡансы уй-фекерең менән ғәләмдең мәшәреғенә лә, мәғәребенә лә барып ҡайтыла. Инде йәшәгән ҡәҙәр йәшәп булмаҫ, шул үҙем һау саҡта, үҙемдең һыңар ҡанатым ише, ғүмер буйы терәк булған һине ризаландырып ҡуяйым тигән көн.

Ахун бер талай меҫкенләнеп алды. Шунан ултыра торғас һүҙ ыңғайында иғтибарһыҙ ғына:

— Һин көн дә шул тирәлә йылҡы тибенләтәһең, ошо арала теге Дәүләткирәй тигән бәндә күҙеңә салынғаны юҡмы? — тип һорап ҡуйҙы.

Уның был һорауынан Солтанмәхмүт ҡапыл тертләп китте.

— Беҙ Ғәлимйән хажиға юл йөрөп ҡайтырҙан алда, бер төн эргәгә килеп, шырпы һорап, хәл-әхүәлен һөйләп киткәйне, шунан бирле күргәнем юҡ.

— Ул нисек ғүмер итә икән?

— Нисек тип ни? Уның кәсебе уғрылыҡ инде. Көндөҙ мәмерйәһендә йоҡлай, төндә һунарға сыға. Халыҡтың ваҡ малын берәмләп урларға тотона, ә ҡыш инде тибендәге тай-ябағаға йәбешә. Әммә беҙҙең көтөүгә зыян килтергәне юҡ. Беҙҙең һый үткәнен, мәмерйәлә ятһа ла, аңлай күрәһең.

Ахун ҡапыл майлы күҙҙәрен өҫкә тәгәрәтте.

— Солтанмәхмүт, һинең нимә һөйләп ултырыуың әле, ә? Әйтерһең дә, мин ул эшем эйәһе кешене буштан-бушҡа һыйлап ятам.

— Бигүк буштан-бушҡа түгел инде. Һинең ҡушҡан эштәреңде лә эленән-эле башҡарып тора бит. Уны ниңә минән йәшерергә? Мин уның дүрт-биш йыл буйы ниндәй эш менән мәшғүл икәнен күреп йөрөйөм дә баһа. Һуҡыр түгелбеҙ — күрәбеҙ, һаңғырау түгелбеҙ — ишетәбеҙ.

Ялсыһының был асыҡтан-асыҡ әйткән ҡурҡыныс хәбәре ахундың башы аша һалҡын һыу ҡойған һымаҡ булды, ләкин уның тәне өшәнмәне, уттай янды, йыйырсыҡ бураҙналары менән һырланған итләс маңлайына бөрсөк-бөрсөк тир бәреп сыҡты.

— Уныһы, Солтанмәхмүт мырҙа, бөгөн һөйләп ултырасы торған хәбәр түгел инде. Булған да бөткән. Үткән эштән төш яҡшы, тигән боронғолар.

— Уныһы шулай инде. Ул эште ҡайтанан ҡуҙғатмау хәйерлерәк.

Күсеренең был хәбәрен ишеткәс, ахунға йән кергәндәй булды. Үҙ ҡырында ултырған ялсыһын ҡулдан ысҡындырмаҫҡа, юртаҡҡа янлатып юрғалатырға теләгәндәй, ахун әңгәмә араһындағы хәбәр һымағыраҡ ҡыҫтырҙы.

— Эйе, эйе, үткән эштәрҙе онотмайыҡ инде. Үҙ ҡулдары менән эшләгән кешеләр уның гонаһын үҙ иңенә алһын. Ошоға тиклем бөтә ҡылынған эштәрҙә лә, мырҙа, беҙ икәүбеҙ, ишәй менән ҡушай ише, бер еп осо менән бәйләнгәнбеҙ инде. Мынан һуң асылда кендегебеҙ йәбешкәс, ни күрһәк тә бергә күрәсәкбеҙ.

Һүҙ төбөнөң ҡайҙа барғанын аңлап, көн элгәре ахунды биҙҙермәҫкә тырышҡан Солтанмәхмүт үҙенең дә ошоға шөрләп йөрөгәнен һиҙҙерергә ашыҡты.

— Шулай, шулай, ағай. Ни күрһәк тә бергә күрәбеҙ инде. Яҙмыштан уҙмыш юҡ, икебеҙ ҙә бер һуҡмаҡтан киләбеҙ.

Ахун, тамам тынысланып, һүҙен дауам итте:

— Бына шул Дәүләткирәйҙе табып алырға ине бит әле. Донъя булғас, уның үҙенә күрә йомошо ла сығып тора бит.

— Уны табыуы бик анһат эш түгел дә... Ат егеп бараһың да, арбаңа ултыртып алаһың да ҡайтаһың. Ул хәҙер былай ҙа, ҡолаҡтарын ҡарпайтып, иртәгәме-бөгөнмө тип һеркелдәп ята.

Ахун тағы уйға ҡалды.

— Ай-һай, уны бында өйгә алып килеү мыуафиҡ булыр микән. Оло ғына хәүефе лә бар бит әле уның?

— Алып килергә ҡулай тапмаһаң, үҙең бараһың инде. Башҡаса хәлең юҡ.

Ахун тағы аптырап ҡалды. «Әллә Солтанмәхмүт менән атҡа ултырып барырға ла берәй төбәгенә үҙен генә саҡырырғамы? Бер ҙә өйгә индерге килмәй бит шул ҡырағайға әйләнеп бөткән хашшаҡты. Хәҙер ул әҙәмдә кеше ҡиәфәте бар тиһеңме? Йә берәй йоғошло сырхауға тарырһың уның менән уралып. Өҫ-башында ла иләнмәгән, бет баҫҡан тиренән башҡа ни бар тиһең? Етмәһә, ошо көн-

гә тиклем волос, кантон милицияһы үҙенең эҙенә төшө алмай йонсой бит. Бер нисә йыл рәттән Ирәндектең ҡуйы шыршы һаҙлыҡтарын, ҡара урмандарын һөҙөп тә сыҡтылар. Бик тә хәүефле уның менән аралашыу. Ә уға барып маңлай ормаһаң, башҡа ундай йомош ҡушырлыҡ кемең бар? Юҡ».

Ахун уйланып ултырҙы-ултырҙы ла, тамам хәл ҡылғандай, ике усын йәйеп, тубыгына шапылдата һуҡты.

— Ярай, Солтанмәхмүт, аллаға тапшырҙыҡ! Бөгөн кискә намаҙға аттарыңды таярлап ҡуй. Юл йөрөп ҡайтырбыҙ.

Солтанмәхмүт оҙон көн буйы борсолоп йөрөнө. Әгәр ошо яуызлыҡты ваҡытында асып һалмаһа, бөгөн-иртәгә өс йәш кешенең ғүмере өҙөлөргә тейешлеге уға һис кенә лә тыныслыҡ бирмәне. Ул төрлө уйҙарға бирелеп, бәреләһуғыла көн үткәрҙе. «Был юлы мин ахундың был яуызлығын баҫырып ҡала алмайым. Дәүләткирәйҙең элгәрге ғәйептәрен йәшергән өсөн үҙ өҫтөмә теләһә ниндәй яза алырға ризамын, әммә был эште баҫырып ҡалырға выжданым етмәй. Етте, ахун ҡурайына бейеп, уның йырын йырлап йөрөү буйтым булды. Ысынлап та, нишләп мин һулыу һайын унан өлөш ашатып йөрөргә тейеш? Миңә ҡылған яуызлыҡтары, уның яһиллығы аҙ булдымы ни? Унан үлер хәлгә еткәнсе туҡмалған көндәрҙе онотторлоҡмо ни?»

...Егет ҡорона ла инмәгән бала сағы келт итеп хәтеренә килеп төштө лә былай ҙа болоҡһоу күңелен күптән булып үткән фажиғәле ҡара болот ҡапланы. Туғыҙ йөҙ ун беренсе йылғы йотта ата-әсәһеҙ тороп ҡалған ун йәшлек үкһеҙ етем Солтанмәхмүтте, сит ауылда йәшәгән апай тейешлерәк кешеһе ахунға малайлыҡҡа бирергә булды. Башта ахун уны алмай маташты.

— Йәтим-ҡараҡ йыйып, ашатып ятырға миндә Әндрәй ҡаҙнаһы юҡ, минең өйөм приют түгел, хәҙер ундай өйөрлө хәйерсе менән донъя тулған, — тип сығарҙы.

Тик ахундың ялсылары ҡайҙа барырға урын таба алмай, йә яғылған мунсала, йә мал өйөндә һарыҡ-кәзә бәрәстәре араһында йоҡлап йөрөгән, ҡаҡ һөйәккә таянған малайҙы, хужаларынан йәшереп бер талай үҙ араларында тотто. Башына тышһыҙ бүрек, аяғына тишек быйма кейҙереп, бер аҙ өйҙә тороп хәл алған малайҙы үҙҙәре менән мал ҡарауға, мал аҫтын таҙартыуға йөрөтә башланылар.

Солтанмәхмүт менән йәштәш тигәндәй үҫеп килгән бай малайы ла: «Атай, уны ялсы итеп ал. Ул малай уҡ-ян эшләргә бик оҫта, уның башаҡлы, ҡауырһынлы һырланған уҡтары иң алыҫҡа, иң бейеккә оса», — тип ялбарғас

ҡына, ахун «бәшәлкәһеҙ, эшкинмәгән» тип, үҙ улын һүкте-һүкте лә, теге малайҙы тамаҡ байына ялсы итеп алды.

— Ятып-тороуың шул мал өйөндә булыр. Тамағың туҡ, өҫтөң бөтөн булһа, шул еткән һинең һымаҡ мосафирға. Ҡалғанын көһәмә. Көткән малың ҡараулы булһын, эшкә һәлкәү булһаң, типкеләп сығарырмын. Бар, йомошонда бул.

Ҡире әйләнеп сығып китергә йыйынған Солтанмәхмүтте яңынан туҡтатты ла:

— Бынан кире аслан минең малай менән бергә уйнама. Ул һинең тиңең түгел. Уның үҙенә тиң башҡа йәштәштәре бар. Быны ҡортло ҡолағыңа киртеп ҡуй, — тип киҫәтте.

Шулай итеп, ошо көндән башлап Солтанмәхмүт ахун өйөндә ҡолаҡһыҙ, телһеҙ, бер ни күрмәй, бер ни ишетмәй торған ялсы булып китте.

Уның балалығын, моронлана башлаған йәшлек дәртен ахун урланы. Йәй сыҡҡас, уны тибендә йөрөгән йылҡы өйөрөн көндөҙ көтөргә ҡуштылар. Ә көҙгә табан, әҙерәк эш тәртибенә, йылҡы малын ҡарауҙың ҡайһы бер серҙәренә төшөнә башлаған, ун берен тултырған Солтанмәхмүттең сослоғон, тырышлығын күреп, бай уны төнгө көтөүгә сығарҙы. Бына ошонда тарыны ла инде уның йәш кенә башы оло бер фажиғәле ваҡиғаға...

Декабрь айының сасҡау һалҡын төнөндә йылҡы көтөүенә бурҙар килде. Ҡурҡыуынан ҡото осҡан Солтанмәхмүт, толоп яғаһынан башын сығарҙы ла, эйәр өҙәңкеһенә ҡалҡа биреп, бөтә Ирәндек буйын яңғыратып нескә генә балалар тауышы менән һөрән һалды.

— Талайҙар! Көтөүгә бур төштө!

Ләкин тирә-яғы шыр урман менән уратып алынған ҡарлы аҡланда уның тауышын бер кем дә ишетмәне, төнгө тауыш Ғәҙелшаның таш ҡаяларына бәрелде лә шаңдау булып Ирәндек армыттары араһына инеп һүнде. Ул тағы ла ҡысҡырырға уйлап, һалҡын һауаны яңынан һуларға ла өлгөрмәне, уны ниндәйҙер оҙон таяҡ менән эйәренән ҡолата һуғып төшөрҙөләр. Шул ҡәһәрле төндө ат ҡараҡтары ахундың Һөтләкәй исемле тура бейәһенең йәй баҡтаһын да ҡоя алмай тибенгә ингән ябағаһын урлап алып киттеләр.

Бер ябағаһының юҡлығын белеп ҡалып, ахун төнгө көтөүсе Солтанмәхмүтте аты өҫтөнән һөйрәп төшөрҙө лә көпә-көндөҙ, бөтә ғәләм алдында һыу эскеһеҙ итеп туҡманы. Урамда иҫһеҙ ятҡан Солтанмәхмүтте, ахундың башҡа ялсылары мал өйөнә индереп, яңы ғына һуйылған мал-

дың йылы тиреһенә урап һалдылар. Шулай бер-ике аҙна мал өйөндә, тире эсендә ятып, Солтанмәхмүт көскә-көскә үлемдән ҡотолоп сыҡты. Тән яраһы төҙәлде, ләкин һынған енсек һөйәге дөрөҫ тоташмау сәбәпле, бер аяғы ғүмергә бөгөлмәй ғәрип булып ҡалды. Бәхетһеҙ бала саҡтың был фажиғәле ваҡиғаһынан әле лә ваҡыт-ваҡыт Солтанмәхмүттең ҡан һауған йөрәген телгеләп үткән, мәңге уңалмаҫ тәрән һырлы эҙ һәм Һылтыҡ Солтанмәхмүт тип ауыл халҡы йәбештергән ҡушамат ҡалды.

Ул әле бына хәҙер ҙә, үҙе ултырып килгән ҡузла алдына юнылған ағас һымаҡ һуҙып һалған төп-төҙ аяғына ҡарап ҡаты көрһөнөп ҡуйҙы. Ҡөймәһенең артындағы күн мендәргә йыуан башын терәп мөнәжәт уҡып килгән ахунды, күрһәткән ҡәһәрлектәре өсөн соҡор төбөнә ауҙарып киткеһе килде Солтанмәхмүттең. «Иҫенә төшөрә башлаһаң, ул ғына булдымы ни уның ҡылған яуызлыҡтары? Бер мәл, сирек сәғәткә аттарҙы һуңлаттың тип, бөтә йәрминкәгә йыйылған мәхшәр алдында туҡманы бит. Уларҙы нисек онотмаҡ кәрәк? Мөмкин түгел».

Һүрән генә юлдан ҡалтыр-ҡолтор килгән арба тауышы ыңғайына Солтанмәхмүт үҙенең бик тә аяуһыҙ үткән тормош йомғағын тағатты. «Ә теге ябаға урлаған кешене ахун нишләтте һуң? Собханалла, ярабби хоҙай! Өйәҙҙән спрауник саҡыртып, уның эҙенә төштөләр ҙә ул йәшәгән ауылдың һәр өйөнә тентеү төшөрттө. Бесәнлеккә йәшереп ҡуйған теге ябағаның тиреһен табып алдылар бит. Шул йорт хужаһын, аяҡ-ҡулдарын бәйләп, Атнағолға алып киттеләр. Өйәҙҙән килгән спрауник өс-дүрт көн ахунда ятып ҡунаҡ булды ла: «Был мосолман кешеһе, һин, ахун, өйәҙҙә шәриғәт ҡанундарының тейешле үтәлешен тикшереп йөрөгән уҙаман, шәриғәт нисек ҡуша, үҙең шулай хөкөм ит»,— тип ҡайтты ла китте. Ахунға етә ҡалды. Ул теге бахырҙы ат тәртәһенә бәйләне лә, ябағаның тиреһе эсенә таш тултырып, тегенең муйынына аҫты. Ялан аяҡ, ялан күлдәк тәртәгә бәйләнгән теге меҫкенде, ҡыш көнө ауылдың бер осонан икенсе осона урам буйлатып туҡмап алып йөрөттө. Ә теге кеше: «Ағай-эне! Минең һымаҡ булмағыҙ! Кеше малына теймәгеҙ!», — тип ҡысҡырҙы-ҡысҡырҙы ла, хәле бөтөп, тәртә араһына ауҙы. Ауылына ҡайтҡас, бер-ике ай тамағынан ҡан төкөрөп ятҡандан һуң, ҡыш сыҡҡас, донъя ҡуйҙы. Бына кем ул ахундың ысын йөҙө. Уны мин ҡулым барып, выжданым ҡушып нисек тағы ла яҡларға, нисек йәнә уның яуызлыҡтарын йәшереп ҡалырға тейеш? Юҡ, булмай. Иртәгә үк хөкөм ҡулына тотоп бирәм был йыртҡысты».

Өндәшмәй генә дилбегәләрен бушатып, аттарын аянла-

тып ҡына бай утарына етеп барған Солтанмәхмүт ошо һығымтаға килде.

Тыштан бығау йоҙаҡ менән бикләнгән утар алдына килеп туҡтағас, ахун тырмаша-тырмаша көймәһенән килеп төштө лә кәкрәйгән билен яҙырға кереште. Аттарын һайғау бағанаһына бәйләп йөрөгән күсеренә әмер бирҙе:

— Көймә эсендәге ҡуржынды өйгә индер. Ана, ишек төбөндәге һепертке менән өйҙөң эсен әҙерәк һепереп сығар, унда әҙәм башын тығырлыҡ түгелдер.

Солтанмәхмүт, йоҙаҡты асып, солан ишеге төбөнә һөйәлгән һеперткене алып, башта соланды, ә унан дымлы серек еҫе бәреп торған өй эсен һепереп сығарҙы. Ерек ағасты урталайға ярып эшләнгән солан мөйөшөнә өйөлгән эрҙәнәне күргәс, барып туҡтаған бер ерҙә ут яғыуҙан ниндәйҙер эске кинәнес тапҡан Солтанмәхмүт түҙмәне:

— Хәҙер сыуалға ут тоҡандырып ебәрәйем. Утар эсен әҙерәк киптереп алайыҡ, — тине.

Ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырған намаҙлығын балаҫһыҙ һике өҫтөнә йәйеп маташҡан ахундың был һүҙгә йәне көйҙө:

— Әҙерәк баш бармы һиндә, кәбәк мейе? Бынауындай тымыҡ көндә, ҡояш байып килгән саҡта, сыуалындың төтөнө ете ҡат күккә күтәреләсәген әҙерәк аңламаҫҡа һин кем? Әллә бында ни йомош менән килеүеңде оноттоңмо? — тип әмер көткән ялсыһына башын борҙо.

— Әллә... Беҙгә һинең йомошоң ҡараңғы. Мин ни хужа ҡыш буйы ыҙмала ятып йонсоп киткәндер, әҙерәк яҙғы сәхрәлә иркен хиләүәттә йөрөп ҡайтҡыһы килгәндер тигәйнем.

Солтанмәхмүт белмәмешкә һалышты.

Ахун саждәгә китер алдынан мәкерле генә йылмайҙы ла эйәге менән ымлап, ялсыһына урын күрһәтте. «Илтифатың өсөн ҙур рәхмәт инде, хужа кеше» тигәнде аңлатырға теләп, Солтанмәхмүт йөҙөнә бер ҡатлылыҡ һыҙаттары йүгертте.

— Рәхмәт, ахун ағай, — тигән булды.

Ахун, бик мөһим һүҙ әйткәндә, ауыҙын усы менән ҡаплап, сит кешенең ишетеүенән ҡурҡҡан шикелле, үҙенә эйелгән ялсыһының ҡолағына шыбырланы.

— Хәҙер генә ашъяулығыңды йәйеп ебәреп, аҙығыңды таярла ла өсәүләп ултырып әүҡәтләнеп алырбыҙ, алла насип итһә.

— Ә өсөнсөһө кем?

— Кем булһын? Һинән йәшергәнде эт ашаһын — йәһәт кенә барып шул әҙәмде бында саҡырып әпкил. Бик сурытып торма. Хужа саҡыра тиген.

— Булдырабыҙ уны, — тине Солтанмәхмүт, хужа йо-

мошон һәр саҡ үтәргә әҙер икәнлеген белдереп, битенә яҡты сырай өҫтәне.

— Эйе, эйе, шуны бында саҡыр.

— Ул әҙәмең был заманда тере микән һуң әле?

— Тере, тере. Уныһын беләм.

Ахундың был һүҙенән Дәүләткирәй менән уның араһындағы бәйләнеш өҙөлмәгәнен Солтанмәхмүт аңлап алды.

Урман, ҡая таш араһынан көтөүҙән ҡасҡан мал, ҡырағай йәнлектәр һыу эсеү өсөн мәмерйә аҫтындағы тау шишмәһенә һалған берләм генә юлдан Солтанмәхмүт түбәнгә атланы. Нәҡ мәмерйәне ҡаплап үҫкән йәнәш сауҡаны айырып, ул башын һалҡынса еүешлек бәреп торған ҡараңғы тишеккә тыҡты ла һуйыр булып өс тапҡыр өҙөп-өҙөп телен сартлатты. Был мәмерйә ташына өс тапҡыр сүкеш менән һуҡҡан шикелле шаңдау булып яңғыраны. Бер аҙ торғас, әллә ҡайҙан, төпкөлдән, нәҡ тәлмәрйен барҡылдаған тауыш ишетелде. «Әһә, был мәмерйә кешеһе тере икән әле», — тип уйланы Солтанмәхмүт һәм япраҡ яра башлаған ағас араһына йәшеренде.

Мәмерйә эсендә өҫтән стена буйлап төшкән таш, аяҡ тауыштары ишетелде. Күп тә үтмәй, баяғы ике сауҡа араһынан ялбыр баш ҡалҡып сыҡты. Тик битен ҡаплаған йөн араһынан, янып торған ҡуҙға оҡшаған, ике күҙ генә йылтырап күренде.

Солтанмәхмүт күренмәй генә йәшеренеп торған урынынан:

— Мин бында, сыҡ! — тип тауыш бирҙе.

Теге, алан-йолан быҙлаған ике күҙен ер һымаҡ ҡарай ған ҡулы менән яҡтынан ҡаплап, ояһынан бер нисә аҙым алға атланы.

Уны күреп, ҡапыл ҡурҡыуынан Солтанмәхмүт:

— Ярабби, хоҙай, собханалла, — тип уҡынып алды.

Дәүләткирәй, мыйыҡ-һаҡал баҫҡан ауыҙындағы тештәрен йылтыратып:

— Нишләй, ағайың бик ҡурҡынысмы әллә? — тип көлдө. — Эргәндә кем бар? — Ул ҡуйынынан һалдат винтовкаһын ҡыҫҡартып эшләнгән обрез сығарҙы. — Ҡеше булһа, мәтри, икегеҙҙең дә мейеһен сәсрәтә атасаҡмын.

Уның был һүҙенән ысынлап та ҡойолоп төшкән Солтанмәхмүт:

— Ҡурҡма, мин бер үҙем, йомош бар, — тип әйтергә ашыҡты.

— Һинең ахуның шул көҙрәте, сереп ятҡан байлығы, мөлкәте менән минән башҡа йәшәй алмаймы ни? Тағы миңә көнө төштөмө бурһыҡтың?

Унының өҫтөндәге ҡасандыр аҡ тиртуны йып-йылтыр булып ҡарайған, шундай уҡ тиренән йөнө эскә әйләндереп тегелгән салбарының ярыһы майланып ҡайышҡа әйләнгән ине. Үҙенең боронғо заманда мәмерйә кешеләре генә кейгән өҫ-башына Солтанмәхмүттең хайран ҡалып ҡарап тороуын күргәс, Дәүләткирәй ағас төймәләрен ысҡындырып, итәктәрен яҙып ебәрҙе лә:

— Беҙҙең, мырҙа, бында гел тире ул. Бына быныһы ла яры, — тип тиртуны эсенән кейгән яры камзулына ҡулы менән шапылдатып һуҡты. — Ә бына былары тужы яры.

Сей тиренән табан, ҡуңыстары тарамыш менән тегелгән, аҫтына бәләкәй саңғы шикелле күтәрмә ҡуйған ситектәрен ҡалҡытып күрһәтте.

Ахун ялсыһының ҡыҙыҡһынғанын күреп, ул хуш күңелләнеп китте.

— Ә, бәлки, ағайыңдың йәшәгән донъяһын күреп сығырһың? Сиркәнмәһәң, әйҙә, рәхим ит. Минең күрнәсәнең ишеге һинең иҫе ҡунаҡтарға һәр саҡ асыҡ.

— Ваҡыт тар. Хужа һине тиҙерәк эпкилергә бойорҙо.

Солтанмәхмүт уны юл башлап алға төшөрөргә уйлағайны, Дәүләткирәй нишләптер үҙе арттан барырға булды.

— Утарға алып бараһыңдыр бит? Ҡара, малай, хөкөм ҡулына тапшырырға уйлаһағыҙ, икегеҙҙең дә башын юҡ итәм.

Берләм генә һуҡмаҡтан ике ҡулын алға һоноп, бербереһенә сырмалып үҫкән йәш, һығылмалы тал, йәшел япраҡлы сауҡалыҡтарҙы ҡайырып алда барған Солтанмәхмүт артҡа ҡарамай ғына, үҙ-үҙе менән һөйләшкән кеүек, мығырланы.

— Дәүләткирәй ағай, һин шул нәмәцде бик сусандатмасы әле. Уны бөтөнләй бер упҡын төбөнә ырғытырға ла ваҡыт етте түгелме?

Бай күсеренең был кинәйәле һүҙен Дәүләткирәйҙең сос ҡолаҡтары ишетте ишетеүен, ләкин ул тиҙ генә яуап бирергә ашыҡманы. Юл ыңғайында ғына күсер теле осонан ысҡынған хәбәр уны тағы ла уйға ҡалдырҙы. Бер аҙ барғас:

— Күптән был эште ҡуйырға ваҡыт та һуң, бер ҙә ҡапыл ғына йөрәк етмәй бит әле. Ике ҡул терһәккә тиклем ҡанға батҡан, ике иңбашта ҡылған ауыр гонаһтар ип бирмәй, — тип уфтанды ла Дәүләткирәй үҙ һүҙен мәрәкәгә һаплап ҡуйҙы. — Бөтөрөр инең дә, юҡ-юҡ та мәмерйә төбөндә ятҡан ағайыңдың һинең байыңа хәжәте сығып тора.

Минең арттан бына икәүләшеп килеп сыкканһығыҙ бит әле.

Солтанмәхмүт уның күңелендә ниндәйҙер бойоҡлоҡ, оло хәсрәт барлығын һиҙемләне.

— Ағай кеше, ошо араларҙа әҙерәк һағыраҡ булһаң да, ярар ине, юғиһә...

Солтанмәхмүттең тамағына бер төйөр килеп тығылды Ул ҡапыл һүҙенән туҡтаны. Күсерҙең яңы хәбәре ошо араларҙа үҙ яҙмышы тураһында гел генә бик ҡаты уйлана башлаған Дәүләткирәйҙең былдай ҙа ҡан һауған йөрәген эҫе ҡурғаш булып яндырып үтте.

— Йә, һин, нишләп һуң әле, юғиһә тинең дә, тынып ҡалдың? Башлағас, һүҙеңде әйтеп бөтөр. Беҙҙең күңел былай ҙа, көнө-төнө теләһә ни уйлап, һеркелдәп кенә тора.

Арттан килгән Дәүләткирәй, тынын йыш-йыш алып, аҙымын тиҙләтте.

Йылдар буйы мәмерйәлә йәшеренеп ятҡан, тормошҡа күптән ҡул һелтәгән был кешегә һүҙ ҡатҡаны өсөн Солтанмәхмүт ҡапыл ҡурҡты. «Нишләп кенә һүҙ ҡаттым ошо әҙәм рәүешен юғалтҡан бәндәгә», тип әсе үкенеп ҡуйҙы. «Хужа ҡушҡан һәр бер яуызлыҡҡа, быраҡ эшкә ҡуш ҡуллап тотонорға әҙер торған был әҙәм тотор ҙа минең әйткәнде ахунға еткерер», тип шөрләне Солтанмәхмүт, үҙе башлаған һүҙен ослап ҡуймайынса булдыра алманы.

— Юғиһә тигән һүҙҙең мәғәнәһен ни, башы бар кешегә тылҡып тораһы юҡ, — тине Солтанмәхмүт, артына ҡарамай ғына юлын дауам итте.

Уның табанына баҫып килгән мәмерйә кешеһен күсерҙең килде-китте яуабы ҡәнәғәтләндермәне, һаман төпсөндө.

— Шулай ҙа ахун мине ниңә саҡыра? Тағы ниндәй боҙоҡлоҡ уйлап ята һинең ул ҡарт бурһығың?

Уның был янауға тартым һорауының һәр һүҙе юл башлап килеүсенең елкәһенә атылған таш булып бәрелде. Ни тип яуап бирергә аптырап, ҡулдарын ике яҡҡа йәйеп, сауҡа ботаҡтарын айырып килгән Солтанмәхмүт:

— Уны ниңә төптәшәһең? Ахун һине әллә бик һағынып көткәнгә, бер күрергә зар-интизар булып саҡыра тип уйлайһыңмы? Саҡырғас, эше барҙыр, — тип тура ғына яуап бирмәй ялтарҙы.

— Ә шулай ҙа?

— Бына утарға барғас, үҙең ауыҙынан ишетерһең, мәтәр һый-хөрмәт әҙерләп, ураҙала ауыҙ асырға саҡырмай, — тине Солтанмәхмүт, ошо май башында ураҙа шәрифе башланғанын хәтеренә төшөрөп.

«Миңә ышанып етмәй, шуға күрә лә бик сиселеп бар-

май...» Дәүләткирәй аяғы аҫтында кипкән ағастың сытырлап һынған тауышынан ҡапыл өркөп, алан-йолан ян-яғына ҡаранып алды. Шырлыҡ араһынан килеүгә ҡарамаҫтан, ағастар аша төшкән киске яҡтылыҡ унын мәмерйәлә ултырып ҡараңғыға күнеккән күҙҙәрен сағылдырҙы. Ул ҡулының һырты менән күҙенән өҙлөкһөҙ аҡҡан тоҙло йәшен ҡарайып йылтыраған битенә һылаштырҙы, ләкин уның башындағы сырмалған буталсыҡ, береһенән-береһе ауыр уйҙар һаҡал баҫҡан битенә төн һөрөмө япты. «Солтанмәхмүткә лә үпкә юҡ. Ул ни эшләп әле минең алда шар асылып, эсендәге бар нәмәһен дә түгә-сәсә әйтеп барырға тейеш. Әйтмәй, сөнки минән шикләнә, ышанмай. Хәҙер минән кем ҡурҡмаһын? Кеше генә түгел, теләһә ниндәй урман кейеге лә, мине күреп, һырт биреп ҡаса бит хәҙер. Юҡ, юҡ, был рәүешле йәшәүҙе бөтөрөргә ваҡыт етте! Икенең бере. Уҙа барҙа бер-ике йыл ултыртырҙар ҙа сығарырҙар. Хажиәхмәттә йөрөгән бөтә кеше лә төрмәлә ултырмай ҙа баһа. Барыһы ла иректә, үҙ бала-сағаһы менән бергәләп, кеше шикелле көңгөр-ҡаңғыр итеп донъя көтөп яталар. Мин кемдән кәм. Аяҡ-ҡулым бар, күҙем күрә, аҡылым теүәл, аллаға шөкөр. Нишләп миңә ғүмер буйы ылдым ат шикелле, ахун теҙгене менән етәкләнергә? Етте, бына ошонан етте. — Дәүләткирәй ҡатҡан бармағының етек тырнағы менән күмәгәйен арҡыры сыйып ала. — Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, бөтәһе лә ошо ҡарт төлкө арҡаһында килеп сыҡты түгелме һуң? Егерменсе йыл июль башында, Баймаҡты Унасов әтрәде менән ҡамарҙан алда, беҙгә килеп ҡотҡо таратып киткән ошо ахун түгел инеме ни? Үҙе ине! Түбә башында, көймәһе өҫтөндә аяҡ үрә тороп, Совет власына ҡаршы маңлай тирен һөртә-һөртә ҡарлыҡҡан тауыш менән «Баймаҡ бәлшәүиктәрен йәһәннәмгә осорорға кәрәк, Башҡортостан тик башҡорттар өсөн, беҙгә коммунистар кәрәкмәй, беҙ үҙ йәмһүриәтебеҙҙе уларҙан башҡа ла төҙөй алабыҙ, милләт үҙенең шәриғәт ҡанундары буйынса йәшәргә тейеш. Беҙҙең Башҡортостан — Гөлбостан йәмһүриәтебеҙ мосолман шәреғенең [1] яҡты шәмесенә [2] әйләнер. Һәр мосолманға слабудахөрриәт ҡапҡаһы ожмах ишегеләй шар асыҡ буласаҡ», тип ҡулына ҡөрьән тотоп, төкөрөктәрен сәсеп, ат сылбыры шикелле оҙон нотоҡ һөйләгән шул ахун түгелме? Һуңынан Унасов әтрәдендә ҡатнашҡан кешеләрҙе ауыл һайын йыя башлағас, мине үҙ арбаһына ултыртып, ошо мәмерйә упҡынына тығып киткән Мөхәмәтшәриф үҙе түгелме?

[1] Шәреҡ — Көнсығыш.
[2] Шәме — Ҡояш.

«Һин Унасов әтрәдендә ябай ғына кеше булманың бит, үҙ ауылығыҙ кешеләренең башлығы булдың, һин элгәрге батша әрмиәһендә лә старший унтер булып йөрөгән кеше, һинең башыңды сәүит барыбер төрмәлә серетәсәк», тип ошо көнгә тиклем мине мәмерйәлә тотоп килгән кеше кем? Мөхәмәтшәриф ахун. Ысынлаңҡырап уйлағанда, мин хөкөм алдында ниндәй ҙур енәйәт ҡылдым? 1922 йылда ауылдарҙа ваба сире таралып киткән мәлдә Хәйруллалар өйөндә йоҡлап ятҡан Ялан ауылы кешеһе Абдрахманды төндә барып баҫтыҡ. Улар өсөһө лә тере ҡалды. Ә беҙҙең беребеҙ — Ғабдулла шунда яраланып, Нәмәс юлы буйында буранда туңып үлде. Был эшкә беҙҙе, араҡы эсереп, кем ҡотортто? Ахундан башҡа кем булһын, шул ғына. Тәүбәгә килергә уйламағайныммы ни мин шул төндә? Яҡын-тирәләге Сәүит яҡлы кешеләрҙең генә малын урла, әйҙә барыһы ла астан ҡырылһындар, барыһына ла ҡырғын тейһен тип, шул һөсләп ултырманымы беҙҙе, өйөрлө Унасов тинтәктәрен? Был ахундың да шеше тулды түгелме? Инде беҙгә лә үҙ башыбыҙ менән йәшәй башларға ваҡыт етте шикелле? Бөтә Ирәндек буйындағы ауылдарға үҙенең әсе үтен сәсеп ятҡан ахунды мин бөгөн хөкөм ҡулына тотоп бирмәһәм, уны ҡасан эшләйем? Тик бөгөн, башҡаса уның форсаты сыҡмауы мөмкин».

Бына ниндәй ҡатмарлы, хәтәр уйҙар борсоно бөгөн кеше артынан моңайып һүҙһеҙ генә атлаған ҡараҡ башын.

Ахун утарына етергә бер-ике йөҙ аҙым ҡалғас, Дәүләткирәй аҙымын йышайтып, Солтанмәхмүткә янланы ла шешмәкләп ҡыҙарған күҙҙәренән эске үтенес менән тулған һораулы ҡараш атты.

— Һин, ҡусты кеше, ул утарығыҙҙа улай-былай хәл килеп сыҡһа, хужанды ҡурсалап, миңә тотонаһы булма. Ҡыҙыулыҡ менән әллә нәмәләр килеп сығыуы мөмкин, аҙаҡтан үкенерлек булмаһын, — тип битенә етди төҫ йүгертте.

Сауҡалыҡтар аша утарҙың бер мөйөшө күренгәс, ул Солтанмәхмүт ҡолағына ауыҙын ҡуйып тигәндәй:

— Был әҙәм ҡарғышы йыйған ахунда һин дә бал-май ашап тормағанһыңдыр. Моғайын, һинең дә уға ҡаршы һары һыуың әҙ ҡайнамағандыр, шулай түгелме? — тип бышылданы.

Һуңғы һүҙенән Солтанмәхмүттең ҡапыл башы әйләнде, әллә ни төрлө хистәр уның эсен һыҙлатып айҡап сыҡты. Ул ни тип яуап бирергә лә белмәне. Тик утарҙы уратып алған һуңғы сауҡалыҡтың ситенә килеп еткәс, ул арттараҡ ҡалған юлдашына башын борҙо ла:

— Аллаға шөкөр, килеп еттек, — тине.

Ләкин ҡырмыҫҡа иләүе кеүек ҡайнаған буталсыҡ уй-

ҙарҙан ул тиҙ генә айный алманы. «Ашыҡма, сабыр ит, ошондай оло һүҙ һөйләп килгәс, моғайын, барыһын да алдан үҙе уйлағандыр әле», тип ул үҙ-үҙен тынысландырырға тырышты.

Һиҙгер Дәүләткирәй өйгә инергә ашыҡманы. Ул ағас артына ышыҡланды ла:

— Бар, хужаңды алып сыҡ. Мин башта уның менән мына ошонда һөйләшәм, — тип, ағас төбөн күрһәтте.

Алпан-толпан баҫып ахун сыҡты. Ул, ҡамсат бүрек кейгән башын төрлө яҡҡа бороп, мәмерйә эйәһен эҙләне.

— Мин бында, ахун.

Ҡулындағы обрезын тоҫҡап, ағас артынан Дәүләткирәй күренде.

Әҙәм ҡиәфәтен юғалтҡан кешене күргәс, ахун ҡурҡыуын йәшерергә тырышып:

— Мырҙа, мынауы нәмәңде алсы әле, тура ҡарап булмай, бигерәк ҡурҡыныс икән, — тигән булды.

Дәүләткирәй сит кешенең барын-юғын яңынан төбәште. Тик доға ҡылып, тәүбә иткәс кенә артынан эйәрҙе. Утар эсенә өсәүләп инделәр. Ситлеккә ҡыуып индерелгән йыртҡыс кеүек аланлап ҡарап торған Дәүләткирәйҙең хәшәрәт тышҡы ҡиәфәтен, үҙе менән күрешергә тип һонған ер соҡоған тауыҡтыҡы кеүек, бысраҡ ҡулдарын күргәс, ахун сирҡанып башын ситкә борҙо, ләкин бармаҡ осон ғына булһа ла бирмәй сараһы ҡалманы.

— Мырҙа, бында тәһәрәт алырлыҡ рәт юҡтыр инде?

Ахун Солтанмәхмүткә һораулы ҡарашын ташланы, тегеһе яурындарын ҡайсыланы.

— Ахун, һин мине бында ғибәҙәткә саҡырмағанһыңдыр бит? Йомошоң, моғайын, икенсерәктер?— тип, Дәүләткирәй ашъяулыҡ өҫтөндә әҙерләнгән ашамлыҡты күреп, бысраҡ аяғы менән һикегә менеп ултырҙы ла, бер кемдән бер нәмә һорап тормай, ҡулын туралған йылҡы ҡаҙыһына һонҙо.

— Мырҙа, мосолманға аш алдында хоҙай тыйнаҡ булырға ҡушҡан, бисмиллаһыҙ ашалған аштың бәрәкәте лә китә. Бисмиллаһыҙ аш эсте таштыра, исраф була.

Ахун уны инсафлыҡҡа өйрәтергә самалағайны, Дәүләткирәй ауыҙына тыҡҡан ҡаҙыны супылдатып имде лә:

— Беҙгә һулыу һайын бисмилла тип торорға форсат юҡ. Дезертир ҡорһағы сөгөн сүлмәккә әйләнеп бөткән ул, бар нәмә лә бешеп сыға, — тип мәрәкәләне.

— Аш алды кәрәкмәйме, һин ни уның тәмен дә онотоп бөткәнһеңдер инде? — тип йылмайҙы ахун.

— Беҙ уны бик оҙаҡҡа оноттормайбыҙ. Андыҙ ҡайнатып, шуның тоноғон булһа ла эсеп ятабыҙ.

— Алай икән...

Дәүләткирәй, «аш алды» тигән йылы хәбәрҙе ишетмәгәндәй, ҡарһаланып һаман ҡаҙы һоғондо. «Етеҙ ҡаҙыны үлә яҙып ашап, эсе ауыртып, оҙаҡҡа әйгәҙәп ятып китмәгәйе. Бөгөн-иртән Ялан ауылынан бик тә мөһим хәбәр килеп төшөүе бар», тип фекерләне ахун.

— Йә ахун, аш алдың ҡайҙа? Әпкилгәс, уны нишләп йәшереп ултыраһың? Ҡилгән малды ауылыңа кире алып ҡайтып китмәсһең бит инде? Ҡана, сығар, — тине ашауҙан туҡтаған Дәүләткирәй, эргәһендә йәнәш ятҡан, приклады йышылып бөткән обрезына ҡарап.

Ахун туҫтаҡҡа араҡы һалды. Башта «бисмилла» тип үҙе эсте, ҡалғанын тегегә һондо. Быларға бер яҡ ситтән ултырып Солтанмәхмүт тә ризыҡҡа үрелде. Яңынан бер аҙ төшөрөп, батырланып алғас, һүҙ асыҡтан-асыҡ китте.

Дәүләткирәй ҡаҡашып, йылтыр ҡайышҡа әйләнгән салбар тубығына ҡулын һөрткәс, ниндәйҙер киптерелгән үләнjapраҡтарҙан төйөлгән тәмәке төрә башланы. Саҡма таш һуғып, осҡон сығарҙы, уның ут саткыһын кипкән япраҡҡа тоҡандырҙы. Өй эсендә янған үләндең сөсө төтөн еҫе аңҡыны. Ахун, танауын баҫып, урынынан тороп уҡ китте. Ҡырын ятып, үлән тәмәкеһе көйрәткән Дәүләткирәйгә асыуы килде.

— Ахун, танауыңды баҫып, ҡунаҡҡа һырт биреп ултырғансы, минең мәмерйәгә берәй һандыҡ кантондар тарта торған тәмәке килтереп ултыртып ҡуйыр инең. Тәмәке яңғыҙ-ярым кешегә ҙур йыуаныс бит ул.

Ҡараҡ әкрен генә ит көйшәп ултырған Солтанмәхмүткә күҙ ҡыҫты. Мәмерйәнән килгән «ҡунаҡтың» тыйнаҡһыҙлығына ахундың эсе бошһа ла, яһалма ғына булһа ла, һикертмә көлөү менән кеткелдәне.

— Ярай, ярай, Дәүләткирәй. Нәпсең теләгәс, эшләрбеҙ уны, моғайын, ат хаҡы тормайҙыр.

Хәҙер ул, үҙенең уйлаған эше барып сыҡһа, был кешегә тәмәке генә түгел, һандыҡ тултырып хазина килтерергә лә риза ине.

Эсеп-ашап алғас, быларҙың кәйеф-сафаһы бермә-бер яҡшырҙы, улар өсөнсө кеше барлығынан да тартынып торманы. Ләкин һүҙ, буталсыҡ эҙгә төшөп китте, әңгәмә бай көтмәгәнерәк төҫ алды. Уның алдында элек кемгә һөсләһәң, шуға ташлана торған ауан, дыуамал ҡараҡ түгел, мәмерйә төбөндә булһа ла, әҙерәк аҡыл йыйған кеше ятҡанын ахун бөтөнләй хисапҡа алмаған булып сыҡты.

«Мин нишләп сабырһыҙланып, үҙем алдан сабып сығырға тейеш әле, ул мине саҡырған бит, тимәк, мин уға кәрәгерәк, ә уның миңә хәжәте бер тин» тип, бер кикергәс,

Дәүләткирәй эскән араҡыһының күңелле шауҡымына бирелеп, сөсө төтөн быçҡытты. Тәмәке төпсөгөн теленең осо менән иҙәнгә ырғытты, тиртуының салғыйы менән обрезын һөрткөләне, теш араһынан һыҙғырып, ниндәйҙер көй сығарырға маташты.

Ахундың ҡото осто. «Атаңа ләғнәт, был мәлғүн, тамағын туйҙырып, тороп китеп барһа, ни эшләрһең? Сарбайлап, артынан йүгереп булмай, икебеҙҙе лә атып йығып, файтуныңа ултырып, юлыҡ тартып китте-барҙы. Унда хәҙер нәҡ яҙғы йәрминкәнең ҡайнап торған сағы. Ат-сбруйынды иптәгәс, аҡсаны янға һалып, ҡаҙаҡ далаһына сыҡты ла юғалды — вәссәләм!»

— Дәүләткирәй мырҙа, бик тә уәжный бер эш, тип әйтәйемме, үтенес, тиһәң дә ярай, сығып тора бит әле ошо заманда. Шуны атҡарып сығыу өсөн һинең шикелле ҡуш йөрәкле ир-егеттәр кәрәк. Башҡарһаң, уны һин генә булдыра алаһың инде, башҡа кешенең ҡулынан килерлек түгел. Бына шул боронғонан бергә-бергә күҙ герәп, бер-беребеҙҙе тыңлашып йәшәүҙе иçкә алып, оло башымды кесе итеп, һиңә маңлай ормай әмәл ҡалманы.

Ахун, хәлфә алдында имтихан тотҡан шәкерт шикелле, ҡулдарын ыуа-ыуа һөйләнде.

Ләкин был «йүкә шына» һикелә ҡырын төшөп ятҡан Дәүләткирәйгә бер нисек тә тәьçир итмәне, киреһенсә, уның таçма теленән сыҡҡан кәкерсәкле-бөкөрсәкле һүҙҙәр ҡараҡтың эсен бошорҙо. Нисә йылдар таш ҡапсыҡта ятып, кешенән һыуынып, ҡырағайға әйләнеп бөткән әҙәмде ахундың тәмле нотоғо йоҡоға тартты. Ул битен ҡаплаған көҙрә йөн араһынан бызлап янған ике күҙенең утлы ҡарашы менән ахунды яндырып алды.

— Ахун, һин миңә ҡыйшанламай ғына хәбәреңде тура әйтеп һөйлә. Мин хәҙер ундай ваҡлап һибелгән сыбар һүҙҙәрҙән биҙеп бөткәнмен. Ундай татлы һүҙҙәр хәҙер минең ҡолаҡҡа инмәй. Минең һиңә хәжәтем ниҙә?

— Һинең ни... мырҙа, кем, хәжәтең ҙур, йәғни хеҙмәтең кәрәк инде...

Ахун яңынан тура һүҙҙән ялтарҙы.

Һаҡал-мыйыҡ араһында ҡыҙыл һыҙыҡ ҡына булып торған ауыҙын салшайтып, Дәүләткирәй ҡасандыр ҡорайыш булған кәпәсен баçыра кейҙе, һикегә ҡалҡынып ултырҙы.

— Тағы ла юлыңа арҡыры төшкән берәй кешене үлтерергә ҡушаһыңмы?

Ул һорауҙы ҡабырғаһы менән ҡуйҙы.

Ахун, аçтындағы һике таҡтаһын шығырлатып, борғоланып алды, ләкин тиҙ генә яуап бирә алманы.

— Шулайырак... шул, — тип, эштең йәнәһе лә үҙенә лә бик еңел түгел икәнен белдергән кеше булып, ҡаты көрһөндө.

— Шулай, тип, ҡаты һөйләш, ахун, — Дәүләткирәй уны тағы ҡыҫмаға алды. — Юғиһә, бизвинный кешеләрҙең йәнен алырға минем дә ҡулым ҡысып тормай. Ҡем инде ул? Ҡул бысратырлыҡ әҙәмме, әллә ваҡ-төйәк ҡый-ғыпыр менән яғалашаһыңмы?

— Уларҙың барыһы ла һиңә мәғлүм кешеләр инде, — тине ахун, һүҙҙең һәүетемсә ыңғайға төшә барыуына кинәнеп.

Кәпәсе аҫтынан лаҡашып сығып торған сәстәрен ергә әйләнгән бармаҡтары менән тырнап алғас, Дәүләткирәй ахунға ғәжәпләнеп ҡараны.

— Ниңә «улар» тип һөйләшәһең? Нисә кеше һуң уларың? Әллә был юлыһы бөтә бәлшәүиктәрҙе лә һепереп түкмәксеһеңме?

— Ҡана һуң. Үкенескә ҡаршы, өсәү генә. Өс кеше. Дөрөҫөн генә әйткәндә, кеше түгел, эттәр. Бәлшәүиктәрҙең ҡойроҡтары. Бына шуларҙы йәһәннәмгә оҙатыу кәрәк.

— Ҡемдәр инде улар?

— Йәмғеһе лә — Ялан кешеләре. Әлеге лә баяғы куманистар артынан эйәреп, беләгенә ҡыҙыл бәйләп, урамда бәйнәл-миләл олоп йөрөгән камсамулдар. Иң башта ана шул ҡырҡма мыйыҡ ауыл һәүеректәрен ҡотортоп ятҡан Абдрахман тигәнен... Шунан һуң ауылда камсамулдар башлығы хажи балаһы Мөхәмәтнурҙы эләктерергә, ә унан инде минең эшнә имам Мөхәмәтрәхимдең иманһыҙы, яҡшынан яман тыуған Уйылдандың муйынын борорға кәрәк.

— Ай-һай, ахун, был ыңғай һин бик уҫал тотонорға уйлайһың түгелме? Ул өс кешенең баҙары бик ҡиммәткә төшмәҫме һуң? Ҡеше бит ул — сәпсек түгел.

— Знамо, знамо. Уныһы шулай инде, мырҙа. Ул баяғы сараһыҙҙың көнөнән эшләнә бит инде, мырҙа. Иркенләп көн итергә бер нисек тә сара ҡалманы бит, көн һайын ҡыҫмаҡлап үлтереп алып баралар ҙа баһа. Әле кисә генә, биш йөҙ тәңкәлек твердый налуг тотторол, ун көн мөҙҙәт биреп киттеләр. Биш йөҙ тәңкә — ярты өйөр йылҡы бит ул.

— Ирәндектең көнсығыш биләүен ҡара сәүкәләй йылҡы менән биләп ятҡан һинең һымаҡ кешегә ярты өйөр ҙә мал булған икән?

— Аны, мырҙа, көсөңдө аямай үҙең таба башлаһаң, ҡорсаңғы тайы ла — мал. Үҙе тир түгеп мал тапмаған әҙәмгә генә шулай анһат күренә ул. Малыңды таратып

алып бөтөрҙәр ҙә шунан әлеге лә баяғы камсамул булған хәйерселәр үҙендең боғаҙынан алырҙар.

— Шуларҙан алда үҙемә өлгөрөп ҡалырға кәрәк, тип йәһәтләп йөрөүең инде һинең, ахун?

— Эйе, эйе, йә улар, йә беҙ. Был минең һүҙем түгел. Бөтә ярлы-ялпыны ҡотортоп, улар ҡулына ошо власты ҡалдырып киткән Лилин тигән остаздары әйтеп ҡалдырған мына был һүҙе.

— Һ-ә-элл-ә...

Былар араһындағы һүҙ һаман киҫкенләшә, тәрәнәйә барҙы. Улар эргәһендә нисек кенә оҙағырак ултырып, улар һөйләгән яуызлыҡтарҙы күңеленә ныҡыраҡ һалырға теләмәһен, Солтанмәхмүт уны бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмағанын күрһәтергә теләгәндәй, урынынан тора башланы.

— Ярай, һеҙҙең ашығыҙға тараҡан булып, мин бында һерәйеп ултырмайым әле. Сығып аттарҙы ҡарап инәйем, — тине.

Ләкин Дәүләткирәй уға сат йәбеште.

— Ҡуй әле, Солтанмәхмүт, буш менән булма. Кешегә ышанмаған һымаҡ — ҡырҡ кеше бер яры, ҡырын кеше бер яры — йөрөмә әле. Бындай оло эшкә тәүәккәлләһәк, һин дә барыбер ситтә тороп ҡалмаҫһың. Ни күрһәк тә, барыбыҙ ҙа бергә күрергә тура килә инде.

Күңеле һүрелә башлаған ахундың эсенә йылы керҙе, уның майлы күҙҙәрендә өмөт саткылары күренде.

— Ай, афарин, дөрөҫ һүҙгә яуап юк. Ир кешенең һүҙе шулай бер булыр. — Ул, ирәбәләнеп, йөҙөнә сыҡкан шатлығын йәшерә алмай, оло кинәнес менән һакалын һыйпаны. — Эйе, эйе, фаразан, Дәүләткирәй мырҙа, бик хаҡ әйтә. Һинең ошонда беҙҙең арала булыуың бик мыуафиҡ, бик тә мотлаҡ, сөнки тигәндә, ошондай хәләл эшкә һине лә катнаштырмай сара юҡ. Эйе, алла бойорһа, һин ул эштең иң уртаһында булырһың. Һинең тешең араһы екһеҙ икәне бөтә ғәләмгә мәғлүм.

«Әйтерһең дә, уртаҡ мал бүлгәндә, бер өлөш сығарыу тураһында һүҙ алып бара, инәһен эт йыҡкан ҡанһыҙ ахун». Ишекте шарт ябып сығып китергә лә ынтылғайны Солтанмәхмүт, ләкин тыйылып ҡалды.

— Ярай, ахун әфәнде, — тине Дәүләткирәй. — Уны нисегерәк алып барып сығарырға уйлап тораһың? Бында килерҙән алда барыһын да башыңдан үткәргәнһеңдер бит инде? Инерҙән алда сығырыңды уйла, тигән боронғолар.

Ахун бер ни ҙә өндәшмәгәс, Дәүләткирәй үҙ алдына ғына, кем менәндер кәңәшләшкән шикелле, һөйләнеп алды.

— Әгәр ул Абдрахман тигәнегеҙ егерме икенсе йыл теге, минең иптәште — Ғабдулланы үлтереп, волосҡа оҙат-

тырған кеше булһа, мин уға күптән теш ҡайрап йөрөйөм йөрөүен.

Ҡобараһы осҡан Солтанмәхмүт уға ғәжәпләнеп ҡарап ҡуйҙы. «Ҡайҙа ғәҙеллек, ҡайҙа ялған?» тигән киҫкен уй мейеһен тишкеләне.

Уның асыуын тағы ла ныҡыраҡ ҡабартырға теләп, ахун ҙур эске тулҡынланыу менән был һүҙҙе эләктереп алды.

— Шул булмай ни, тас үҙе! Хәҙер уның боҙоҡлоғо элекке шикелле генә түгел, бермә-бер арта төшкән. Бынан бер нисә көн элек кенә Солтанмәхмүт уның элекке йәшәгән урынына — Абрашауға — барып ҡайтты. Унда ла баяғы Сәүиттең, каммунистарҙың хыуасы булып, шулар артынан эйәреп йөрөнө, ти. Үҙен ашатып-эсереп, улы хоҡуғында тәрбиәләп торған Белов тигән хужаһын хөкөм ҡулына тотоп бирҙе, ти. Ышанмаһаң, бына, Солтанмәхмүттән һора, ул алдарға бирмәҫ, — тип, ул үҙ күсеренә «әйҙә, минең һүҙемде ҡеүәтлә» тигәнде аңлатып эйәк ҡаҡты.

— Эйе, эйе, хужаныҡы дөрөҫ, — тине Солтанмәхмүт, башын ситкә бороп.

— Уныһына бик кәрәк. Ул Абдрахман тигәнегеҙ ҡулын күптән сусанлата, башын ҡайҙа тығырға белмәй йонсой. Уның башын өҙөп, ҡулына тоттororға күптән ваҡыт, уға күптән үсем ҡайнай.

Дәүләткирәйҙең был һүҙе ахунды ҡанатландырып ебәрҙе, ул хәҙер үк үҙ дошмандарының өҫтөнә осоп ҡуныrҙай булды.

— Әйтерең бармы? Шулай булмай ни? Ир кешенең һүҙе шулай бер булыр. Донъяныҡын донъялыҡта ҡайтармай, уны әжәлгә ҡалдырып булмай инде. Теге саҡта шул эт арҡаһында барыбыҙҙың да башыбыҙ һәләк була яҙҙы ла баһа. Онотorлоҡмо ни?

Дәүләткирәй һүнеп барған утҡа торомбаш ырғытты ла ялбырап тоҡанған ялҡындан үҙ тәртешкәһен тартып алды. Башҡа һүҙгә ҡатнашырға теләмәй, ниндәйҙер тәрән уйға сумды. Ҡапыл йоҡоһонан тертләп уянған кешеләй тағы һорау ташланы.

— Ахун, баяғы минең һоҙалгә яуап бирмәнең бит әле. Был эште башҡарып сығырға нисегерәк фараз ҡылдығыҙ? Бала-сағаһын соролдатып, эт өрҙөрөп, ул кешеләрҙе төндә түшәгендә ятҡан саҡта барып баҫып булмай бит. Уларҙың ҡорал ғәләмәте булыуы ла бик мөмкин. Теге Хәйруллаларға инеп йоҡлап киткән әҙәме бик мыҡты күренә, һалдатта ла оҙаҡ ҡына йөрөп ҡайтҡан тәжрибәле кешегә оҡшай. Уны ҡоро ҡул менән генә алырлыҡ түгел.

— Эйе, эйе, бик мыҡты, таҙа кеше. Аҡылы нисектер, хоҙай кәүҙәне йәлләмәгән.

— Унын аяк-кулын бәйләү өсөн, үҙенә кәм тигәндә ике-өс әҙмәүерҙәй ир кәрәк.

— Бәйләргә китһә, шулай инде, ләкин беҙ башкасарак уйлағайнык. Мөхәмәтрәхим мулланың ике атын ектереп, Уйылданын күсерғә ултыртып, уларҙы волоска оҙатырға уйлағайнык. Иң уңайы бына шул мәлдә, бер ни уйламай юлда китеп барғанында, юл баҫыу инде. Анауы Йәнгүҙәйҙең текә кабағының аҫтынан сығып яткан шишмәне боролғас та, юл шыр урман эсенә инеп китә. Мәлғүндәрҙе шул шырлыкка инерҙән алда, тау үңәрендә, юк итеү кәрәк.

— Һинең уйынса, был эште мин бер үҙем аткарып сыға буламмы? Мин береһен атып йыкkансы, башкалары мулла арбаһында миңә маңлайҙарын куйып көтөп ултырырҙармы? Әгәр быларҙың коралы булһа, ул сакта нисегерәк? Арбаһынан ырғып төшөп, һине камарҙар ҙа, йә атып үлтерерҙәр, йә аяк-кулыңды шакарып бәйләп, бер ағас ботағына тереләй аҫып китерҙәр.

— Юк инде. Уны бер кеше генә аткарып сыға торған түгел. Һинең элгәрерәк үҙең шикелле арыҫландай бер нисә иптәшең дә бар һымак ине, улар кайҙа был замандa?

— Был арала улар менән катнашкан юк. Хәҙер күмәкләп йөрөү бик хәүефле. Һәр кем үҙ йүнен үҙе күрә.

— Уларҙы табып алыуы, моғайын, бик кыйын түгелдер? Әллә бик алыҫ арамы йәшәп яткан төбәктәре?

— Төйәге тип ни, төйәк шул бер инде — Ирәндек. Шуның куйынына һырынабыҙ. Берәүҙәр шуның куйынында калай түбәле йортта рәхәт тормошка мал булып ғүмер итә, ә икенселәре, кыр йәнлеге шикелле, каса-боҫа тау егендә йәшәй.

— Шулай инде, мырҙа. Барыһы ла хоҙай кулында. Уның көҙрәтенән ғәйре бер аҙым да атламак юк. Лә иләһи иллалла Мөхәммәди рәсулулла тигән бит көрьән дә.

— Шулай тигән дә һуң. Бары мосолман өммәтендәге әҙәмде тигеҙ карап бөтөрмәй шул хоҙай тигәнегеҙ. Берәүҙәре майына сыҙай алмай яфа сигә, ә икенселәре аслыктан көндө төнгә ялғай алмай интегә.

Өндәшмәй генә ситтә хәбәр тыңлап ултырҙы Солтанмәхмүт. «Мәмерйә эсендә ултырһа ла, баш юк түгел икән үҙендә. Кайһылайырак беҙҙең мәнфәғәткә ятышлы һүҙ һөйләп ултыра. Кулына әҙерәк бол биреп, ашатып-эсереп, өҫтө-башын рәтләп ебәрһәң, мынамын тигән кеше булырға тора был әҙәм».

— Ярай, ахун. Тәңренең үҙенең вазифаһы, беҙҙең үҙебеҙҙең кайғы-хәсрәт. Әлеге лә баяғы был оло бурысты

атҡарып сығыуға ышаныслы кешеләр табыуҙы миңә йөкмәтмәксеһең инде?

— Эйе, фаразан, шулай уйлашҡайныҡ.

— Әгәр сер булмаһа, һинең арҡа терәгән кешеләрҙе лә белге килә бит әле?

— Уныһы, Дәүләткирәй мырҙа, биғәйбә. Бының һиңә бер тинлек тә хәжәте юҡ. Әгәр инде ҡулды ҡулға һуғып килешкән хосуста, һин минең менән генә эш ҡылаһың. Башҡа кешене ҡыҫтырып, артыҡ геуаһ, артыҡ күҙ-ҡолаҡтың былдай мәсьүлиәтле эштә булмауы хәйерле. Шулаймы? — Ахун, һүҙен дөрөҫләтергә уйлап, уйға ҡалған Дәүләткирәйгә ҡарап мәкерле йылмайҙы.

— Ярай, мин ул эшкә кәрәкле кешеләрен дә таптым, күндерҙем дә, ти. Хатая уныһы ла бик шикле, сөнки ундай хәүефле эштең һәр ҡасан аҙағы ике осло икәне үҙеңә лә мәғлүм. Үҙ теләге менән башын киҫмәгә түмәр өҫтөнә һалырға теләүселәр был заманда юҡҡа хисап. Һуғыш осоронда әҙәми йән себен шикелле ҡырылып ятҡан мәлдә генә ул кешенең баһаһы бер тингә лә тормай. Хәҙер, болалар бөтөп, халыҡтың тормошо күҙгә күренеп яҡшырған, тамағы — икмәккә, өҫтө кейемгә туйып, ҡәҙимге юҡһыл-ялпыға Сәүит власының ятышлы сәйәсәте яңы ғына килеп етә башлаған сағында әҙәмдең ғүмере ҡыйбатлана...

Уны ғәжәпләнеп тыңлап ултырған ахун итләс башын һелкеп алды. Уның ҡарауы, Солтанмәхмүт ҡараҡтың былай фекер йөрөтөүенә шатланып бөтә алманы.

— Һин, Дәүләткирәй мырҙа, нисә йылдар мәмерйә төбөндә ятып, берәй мәҙрәсә бөтөрҙөңмө әллә? Мин һине элегерәк улай күрмәй торғайным, ҡайһылай ҙа шыма һөйләргә өйрәнгәнһең?

Ахун тағы башын сайҡаны.

— Олоғайыла, ахун. Башҡа аҡыл керә башланы. Элекке ауанлыҡтар, һәр эште тоҡан ғына ҡыла торған замандар үтте.

— Һиңә нисә йәш әле, мырҙа?

— Утыҙ бишкә баҫтым. Минең йәштәшгәр ауыл ҡарты булып, теге яғын хәстәрләй башланы инде. Ә минең ошо көнгәсә йүнле тормош күргән юҡ. Минһеҙ үҫеп килгән малайҙан, ҡола ялан өйҙә мине көнө-төнө зарығып көткән бисәнән башҡа бер кем, бер ни юҡ. Ғүмер заяға үтте, кеше ише йүнләп йәшәгән булманы.

Дәүләткирәй йәнә зарланды.

— Ҡартая башлағанһың. Күңел бушаҡлығы шунан килә. Йә, булмаһа, бер ярты сеүәтә тахил шарабын эсеп

ебәр, кәйеф-сафаң бермә-бер, күтәрелеп китер, — тип, ахун уға сеүәтә һонғайны, Дәүләткирәй ҡырҡа баш тартты.

— Үҙ мәйелең, көслөк юҡ.

Бер аҙ ултырғас, байтаҡ юл үтеп, тире сыға башлаған ат шикелле һелкенеп алды ла, әле генә һөрөмләнеп моңһоулanған битенә етди сырай йүгертеп, бошонҡолоҡ хисен һыпырып ташлағандай, Дәүләткирәй эшлекле һүҙ башланы.

— Әгәр мин үҙемдең күрә торған кешеләрҙе күреп, ошо эшкә күндерә алһам, аръяғын нисегерәк алып барып сығарырға һөйләшәбеҙ. Эштең иң ҙуры, хәүефлеһе алда бит әле?

Ошоно ғына көтөп ултырған ахун, йәнләнеп, үҙ фекерен теҙергә кереште.

— Фаразан, беҙ уны бына ошолайыраҡ уйлайыҡ...

— Ҡайһылайыраҡ?

— Улар волосҡа сығып китерҙән бер көн алда, барыһын да һөйләшеп, таярлап бөткәс, Ялан ауылынан бер сапҡынсы килеп, уларҙың ауылдан ҡасан сығып китеүҙәре тураһында миңә хәбәр итергә тейеш. Ә һеҙ инде — нисә кеше булаһығыҙ — бер төн улар үтәһе урман шырлығында көтөп ятаһығыҙ. Ҡалғанын инде һеҙгә өйрәтәһе юҡ. Юлда баҫып алған фәйәтунға ултырып ҡасаһығыҙмы, әллә үҙегеҙҙең килгән атығыҙ менәнме — уныһы һеҙҙең эш. Әммә улар ошо урманды ҡояш байығас, кеше йөрөүҙән туҡтағас ҡына, үтеп китергә тейеш. Шулай һүҙ ҡуйышылған.

— Менге аттарҙы беҙгә кем бирә?

— Йәмғеһен таярлап, һеҙгә ошо кеше бирә. — Ахун үҙ күсеренә эйәк ҡаҡты. — Нисә ат әҙерләргә ҡушаһығыҙ, шунса ат һеҙҙе көтөп торасаҡ. Оло юлға төшмәй, урман тартып, һаҙлыҡтан һаҙлыҡҡа китә лә бараһығыҙ. Урман-тау юлын бында һеҙҙән дә яҡшы белгән әҙәм юҡ.

Дәүләткирәй һораулы ҡарашын ахунға төбәне.

— Шул ғынамы?

— Тағы ни кәрәк?

— Ахун, һин уның иң мөһимен онотоп ултыраһың әле.

— Эй, һин шул әжере тураһында ҡайғырта торғанһыңдыр әле. Эшен башҡарғас, билдәле, хаҡһыҙ булмай инде. Тейешле әжерен алырһығыҙ, — тип, һүҙҙе бөткәнгә хисаплап, ахун турайып ултырҙы.

— Әжер тип, һин бик кесерәйтеп ебәрһәң дә, ул әжер генә булмаҫ. Байға иген урыу, ялланып бесән сабыу хаҡы ғына түгел бит ул. Бик еңелсә генә, тел осо менән генә әйттең әле һин уны, ахун.

— Һуң мин тағы ла ни рәүешле әйтәйем? Тейерен алырһығыҙ. Хеҙмәтегеҙ ерҙә ятып ҡалмаç, буш итмәбеҙ.

— Шулай ҙа?

— Менеп киткән атығыҙ ҡулығыҙҙа ҡалыр. Әммә эйәр-өпсөнгә иçәп тотмағыҙ. Аттарҙы яйҙаҡ менеп китәһегеҙ. Биш-алты тәңкәлек эйәр, үңлек өсөн төрмәлә ултырғы килмәй.

Ахун ҡарт ҡырт киçергә уйлағайны, Дәүләткирәй, ҡулын һелтәп, унан алдараҡ тора башланы. Ахун уның тиртун салғыйына ике ҡуллап йәбеште:

— Йә, мырҙа, бушҡа гөлт итеп тоҡанып барма әле, тейерен генә һора ла был эшкә фатиха бирәйек.

— Тейере шул, ахун: мең тәңкә. Алтын аҡса менән түләйһеңме, көмөшмө — уныһы һинең иркеңдә. Ошо һорағандан ун тин кәм бирһәң дә, мин ул эшкә тотонмайым.

Хужаһы менән бик оҙаҡ тартышып, дәғүә ҡороп ултырғас, «был яуызлыҡтан, күрәһең, баш тартырға итәләр» тип өмөтләнеп ултырған Солтанмәхмүттең, быны ишеткәс, йөрәге жыуланы. Бер нисә көндән волосҡа китеп барған өс таныш кешенең, арбалары эсендә атылып, ҡанға батып ятыуҙарын күҙ алдына килтереп, йәне өшөнө. Баштараҡ унын күңелендә был кешегә бөрөләнеп килгән ихтирам ҡапыл елгә осто. Уның эсендә уға нәфрәт ҡайнаны. Ә инде ахун, Дәүләткирәйҙең «мең тәңкә» тигән һүҙен ишеткәс, боҙ аçтында шаңҡыған шамбы шикелле, байтаҡ һеңгәҙәп ултырҙы, уй-фекерен ҡапыл ғына төйнәй алманы.

— Һинең, Дәүләткирәй, аҡылың камилмы? — тип һораны ахун.

Дәүләткирәй тыныс ҡына яуап бирҙе.

— Камил, миңә әле бер ниндәй ҙә зәхмәт ҡағылғаны юҡ.

— Мең тәңкә аҡса был заманда бөтә кантондың хөкүмәт банкыһында ла юҡ. Һинең был ни һаташып ултырыуың, ә? Аҡсаны, билдәле, сәй-шәкәрлек, өç-башығыҙҙы ҡарарлыҡ бирмәй булмаç, ләкин миндә ул тәкәбеле сәрмәйә ғүмере лә булғаны юҡ. — Ахун зарланырға кереште. — Әҙерәк мал да һорарға булалыр бит? Һеҙҙең үтә атмалы ихатағыҙҙа малығыҙ ҙа кәртә емереп бармай ҙа.

— Һинең малың беҙгә хәжәт түгел. Беҙ унан ни көтөп, ни һатып тигәндәй мәнфәғәт күрә алмайбыҙ. Беҙгә бөгөн ашау өсөн бер-ике баш мал булһа — шул еткән. Беҙҙең нәфсебеҙ мосолманса, самалы ғына.

Алдында ҡырын ятҡан ҡараҡтың был талабынан тиреһенә һыйыша алмаған ахун, күлдәгенең эңер бауҙарын

сисеп ебәрҙе, ҡамытынан ысҡынырға теләгән ат шикелле, бер нисә тапҡыр муйынын борғолап алды.

— Солтанмәхмүт, анауы ишегеңде бер аҙ асһаңсы, өйҙә бигерәк томра булып китте, тын алырға ла тәҡәт ҡалманы ла баһа, — тип, ахун тәпәш кенә өй ишегенә төртөп күрһәтте.

Өй эсендәге тынлыҡты боҙорға бер кем дә баҙнаг итмәне. Тышта ҡыу бесән ашап торған аттарҙың ғына әленән-әле бышҡырғаны ишетелде. «Мең тәңкә», ахундың мейеһен ҡайнатып, мең тапҡыр әйләнеп сыҡты. Ул төрлөсә фекер йөрөттө. Әгәр был Дәүләткирәй тигән мәлғүн тейәрен генә һораһа, ахундың был эштән үҙенә лә өлөш сығарып, бер аҙ кеҫәһен ҡалынайтып ҡалырға ла самаһы юҡ түгел ине. Ул сығасаҡ аҡсаны өс кешегә әҙерләгән: үҙенә, ә ҡалған күберәк өлөшөн Мөхәмәтрәхим мулла менән Ғайнулла байға бүлеп бирергә уйлағайны. Уларҙың бында килеп, минең күпме биргәнемде тикшереп, тәфтиш алып йөрөй торғандары юҡ. Ниндәй хаҡты теләйем, мин уларҙан шуны шаҡарып алам, тип уйлағайны ахун. Ләкин Дәүләткирәй мең тәңкә үк һорар тип башына ла килтермәгәйне. «Ауыҙыңдан бер сыҡҡас, бирмәй әмәл булмаҫмы икән ни? Эш барып сығыуын сыҡһа, вәғәҙә ителгәнде бирмәй ҙә ҡуйырға мөмкин дә инде» тигән өмөт сатҡыһы уның өшөгән күңелен йыуатҡандай булды.

Оҙаҡ уйланып ултырғандан һуң, ахун ике ҡулын күкрәгенә һалды ла:

— Ярар. Мин риза. Эш барып сыҡһа, мең тәңкә аҡса — ҡалтаңда [1] тип иҫәплә. Хәҙер инде артҡа сигенерлек рәт ҡалманы. Шулай хәл ҡылдыҡ, тәңрегә тапшырып, — тине, һүҙҙе бөткәнгә һанап, доға ла ҡылды.

— Ярар, әммә мин был эшкә башты тығырҙан алда ошондай шарт ҡуям.

Ахундың күңеле һеркелдәп, тағы йөрәге жыу итеп ҡалды.

— Йә, йә, фаразан...

— Баяғы беҙгә вәғәҙә иткән аҡсаңды, тинмә-тин беҙгә биреүең тураһында үҙеңдең ҡулың менән яҙылған дөкәминтте беҙгә алдан биреп ҡуйыуҙы мәхкүл хисаплайым, сөнки тигәндә, был хәтәр заманда бер кемгә лә ышанып булмай...

Дәүләткирәй үҙенең башлаған һүҙен сурытырға ла самаһы юҡ түгел ине, ләкин был хәтәр хәбәрҙе үҙ ҡолағы менән ишеткән ахундың йәйпәк бите бер яҡҡа салшайҙы ла нәфрәт менән тулған асыулы ҡарашы, алға атҡан

---

[1] Ҡалта — был урында кеҫә тигәнде аңлата.

эйәге бер урында ҡатып ҡалды. Ул аҡайған күҙҙәрен тәгәрәтеп алды.

— Дәүләткирәй, был һинең ни ҡылып туҙға яҙмаған хәбәр һөйләп ултырыуың, ә? Аҡылы камил әҙәм ошо ризыҡ алдында шундай һүҙ һөйләйме? Ул ниткән дөкәминт? Минең өйәҙней ахун мөһөрөмдән ғәйре нәмәм бар?

— Минә шул да еткән. Шул мөһөрөңдө баҫып, «ошо әҙәмгә мең тәңкә аҡса бирәм» тип, бер-ике кәлимә һүҙ яҙып бирһәң, миңә буйтым була.

Дәүләткирәйҙең йөн баҫҡан йөҙөндә ҡәтғи талапҡа оҡшаған ниндәйҙер хәтәр һыҙаттар сағылып ҡалды. Ул обрезын тиртуның асыҡ салғыйы өҫтөнә шылдырҙы.

Ахундың ҡапыл киңәйгән күҙҙәре өҫтән аҫҡа һәр минут һайын үлем сәсергә ятҡан обрез көбәгенә текәлде, әммә үҙенең эске ҡалтыраныуын еңеп, нисек тә йомшаҡ күренергә тырышып:

— Мырҙа, ул хаҡта яңы ғына һөйләштек бит инде. Бына алдыңда ултырған геуаһ ялғанды һөйләргә бирмәҫ.

Ахун Солтанмәхмүткә төрттө.

— Дөкәминт кәрәк, ахун, дөкәминт. Донъяға ышанып булмай, йә һине минән алда ултыртып ҡуйыуҙары бар, һинең дә шешең күптән тулған инде, йә көтмәгәндә гүр эйәһе булып ҡуйырһың, йәшең еткән, бер аяғың ҡиәмәттә тора. Мин төрмәләге йәки әхирәттәге кешенән аҡса таптырып йөрөй алмайым.

Ахун түҙмәне, ҡаршыһында ятҡан Дәүләткирәйгә төкөрә-төкөрә:

— Тәүбә тиең, хәсис, һине кешегә хисаплап, бер табында ултырған өсөн, һин миңә шөкөрана итергә тейешһең, ә һин, мәлғүн, ана ни һөйләп ултыраһың? Игелекһеҙ бәндә, — тип, туҙынып, ахун урынынан тороп уҡ китте.— Ихатаға яҡын ебәрмәҫлек кеше менән бер табында әңгәмә ҡороп ултырсы әле. Бына кемдәр менән бәйләнмәгә мәжбүр итә бит был фани донъя? Заманында Ырымбур губернаторы кәнсәһенең ишеген аяғың менән тибеп асып йөрөгән санауник инең бит һин, ошо көнгә һине кем төшөрҙө? — тип таҡталары шығырлап ятҡан иҙән буйлап алды-артлы йөрөп алды. — Сәүит төшөрҙө һине ошо хәлгә, Сәүит! Ваҡытында донъяһын күтәреп һуғып, Әхмәтзәки салғыйына эләгеп, төрөктәргә сығып китһәм, ошбу көндә кем булыр ине Мөхәмәтшәриф ахун, ә?

Уның буштан-бушҡа ҡабарыныуына эсе бошоп ятҡан Дәүләткирәй уға ҡаршы аяҡ үрә баҫты ла:

— Эй туңбаш ахун! Әхмәтзәки һинең ише тиҙәк мисҡәһен ни эшләтеп алып йөрөһөн? Быға тиклем һинең ҡабырғаларыңды һары ҡорт йырғыслап бөткән булыр ине

инде, әгәр ки ситкә үтеп китә алһаң, Ыстамбул баҙарында хәйер һорап, мосафир булып ултырыр инең, хи-хи! Күрҙеңме таш ҡарынды! Нисегерәк һөйләнгән була! Бөткән ти унда, төрөк илендә, һинең эше һилен-һыуын һатҡан ҡасаҡ! — тип ыржайып көлдө.

Ә ахун уның һайын ҡабарынып кәперәйҙе, бармаҡ янап ҡысҡырынды.

— Ҡара һин уны! Мәмерйә ҡарағына дөкәминт кәрәк булған! Ҡулыңа дөкәминт тоттороп ебәрмәгә һин кем минең өсөн? Улыммы, ейәнемме? Һин минең хәләл мөлкәтемә ҡасандан бирле вариҫ [1] булдың? Атаңдан ҡалған ниндәй малды бүлергә ятаһың бында, берәҙәк! Бына һиңә дөкәминт, бына һиңә мөлкәт! — тип ахун, йоҙроғон төйөп, Дәүләткирәй танауына терәне.

Дәүләткирәй уның ҡулын эләктереп алды ла артҡа ҡайырырға тотондо. Ахун, ҡыҙарған муйынын бороп, ҡурҡышынан мөйөшкә һырынған ялсыһына кәзә һымаҡ аҡырҙы.

— Атаң башын ҡарап тораһыңмы, хужаңды көпә-көндөҙ бер берәҙәктән туҡматып?! Балта төйҙәһе менән бир сыңҡаһына!

Ахун сыуал алдында ятҡан балтаға ымланы. Ләкин шөрләүенән йәне алҡымына килгән Солтанмәхмүт ҡабырғаһы менән шылышып яҡынлаша башланы. Ахундың ҡулдарын артҡа ҡайырып, Дәүләткирәй уның өҫтөнә атланып алырға уйлағайны ла ҡарыуы етмәне. Ахун, ҡулын ысҡындырып, Дәүләткирәйҙе йыға төрттө лә иҙәнгә төштө. Дәүләткирәй обрезына йәбеште.

— Сығарма, урманға сығарма!

Аңына килгән Солтанмәхмүт, ишекте шарт ябып, келәһен элеп алды. Ахун бөтә көсөнә тибеп ҡараны, ләкин ҡалын ҡарағас таҡта ишекте емерә алманы. Дәүләткирәй көбәгенән эләктергән обрез менән, күҙен алған күгәүендәй ҡайҙа барып һуғылырға белмәй, иҙән буйлап сабыулап йөрөгән ахундың елкәһенә ҡундырҙы. Уның, ике ҡулы менән елкәһен тотоп, бөкрәйеп шыңшый-шыңшый сыуал алдына сүкәйеүе булды, Дәүләткирәй ҡасаҡ уны мөйөшкә йыға типте лә өҫтөнә менеп тә ултырҙы. Унан ысҡынырға тырышҡан ахун күкрәк тауышы менән:

— Ҡарауыл, ҡарауыл, үлтерәләр! — тип аҡырҙы, ләкин Солтанмәхмүттән башҡа уның һөрәнен ишетеүсе булманы.

«Нишләргә? Кемде яҡларға?» тигән һорау йәшен тиҙ-

---

[1] Вариҫ — үлгән кешенең мираҫына хоҡуҡлы кеше.

леге менән уның мейеһен тишеп үтте. «Йәки хәҙер ошо минутта, йәки бындай уңай хәл ғүмерҙә лә булмаясаҡ: аяҡ-ҡулын бәйләп, хөкөм ҡулына тапшырырға». Осҡор ҡарар иләҫ-миләҫ торған Солтанмәхмүткә көс-ҡеүәт бирҙе. Былар көрмәкләшеп ятҡан арала, ул йүгереп тышҡа сыҡты ла, арбалағы ҡайыш дилбегәне ҡулына тотоп, тиҙгенә кире әйләнде.

Дәүләткирәй, ахунды лыпын һалып, өҫтөндә оҙаҡ ултыра алманы, мәмерйә кешеһенә ҡарағанда ике тапҡырға тиерлек дәүерәк ахун, уны һыртынан иҙәнгә ырғытып, өҫтөнә үҙе менеп ултырҙы. Бер ҡулын уның ас үңәсенә батырҙы, икенсеһе менән йөнтәҫ битен төйгөсләргә тотондо. Иҙәндә ятҡан обрезды ул һике аҫтына тибеп осорҙо.

— Бына һиңә, мәмерйә бүреһе, мәмерйә ҡорто!

Ҡоторонған ахун үҙ аҫтында тырпырап ятҡан Дәүләткирәйҙең башын ҡаҡ иҙәнгә тызыны. Хәле бөтөп ғырылдай башлаған Дәүләткирәйҙең өҫтөнән ҡапыл тороп, ул асыҡ ишеккә ташланды. Солтанмәхмүт соланға башын тыҡҡанда, ахун, утар ишегенә яурындарын терәп, борсаҡ-борсаҡ тир аҡҡан битен түбәтәйе менән һөртә-һөртә, ишеккә арҡыры ҡуйылған тимер типкенең башын күгәнгә кейҙереп маташа ине.

«Әһә, тегене өйгә бикләп ҡалдырырға самалай». Солтанмәхмүт, дилбегәһенән ҡороҡ яһап, ахун үңәсенә ташланы ла ҡапыл артҡа тартыуҙан ергә ауған хужаһын быуа башланы. Үңәсенә батып ингән дилбегәне бушатырға теләп, теге ике ҡулын боғал аҫтына тыҡты, ләкин һаман һығыла барған тоҙаҡтан ысҡына алманы. Алпан-толпан баҫып, ҡулына обрез тотҡан Дәүләткирәй күренде.

Уның обрез менән киҙәнгәнен күреп, Солтанмәхмүт:

— Зинһар өсөн, башына һуҡма! — тип ҡысҡырырға ла өлгөрмәне, ус менән ҡамырға һуҡҡан төҫлө тауыш ишетелде — обрездың ауыр приклады, ахундың ҡаҙандай эсенә тыс итеп барып төштө. Ахун йылан һымаҡ бөгәрләнде лә бөтөнләй тынып ҡалды.

— Ай эттәгенәһе, үлтереп ҡуйҙыҡ, ахыры, был таш ҡорһаҡты.

Дәүләткирәй солан ситәненә һөйәлде. Бер аҙ хәл алғас, битенә һылашҡан ҡанын усы менән һөртөп алды ла, ахундың танауын, ауыҙын ҡулы менән ҡаплап, уның тын алышын тикшерҙе.

— Үлтерерһең был айыуҙы, һеңгәҙәп кенә ята. Битенә һалҡын һыу һипһәң, хәҙер иҫенә килә ул. Дилбегәңде бушат. Хәҙергә бер ҡайҙа ла бара алмаҫ. Ҡарыуын алдыҡ. Баҡырса менән үҙәктән һыу алып киләйем, һин тороп тор.

— Юҡ, юҡ, ағай, зинһар минен бер үҙемде ҡалдыра-

һы булма. Мин был әҙәмдән ҡурҡам, — тип ялбарғас, баҡырса тотоп, һыуға Солтанмәхмүт йүгерҙе.

Ситәнгә һөйәлеп, Дәүләткирәй тәмәке төрә башлағайны, хырылдап ерҙә салҡан ятҡан ахун, башта күҙен асып, солан түбәһенә ҡараны, шунан, ҡабырғаһына әйләнеп, мышылдап тора башланы. Дәүләткирәй, тәмәкеһен ташлап, ахун өҫтөнә яңынан атланды. Ахун күпме көсәнһә лә, өҫтөндә ултырған Дәүләткирәйҙе ҡолата алманы. Тартыша торғас, ул да талсыҡҡан, күрәһең. Көс менән булдыра алмағас, ахун эркелгән йәшен күҙ ҡойроҡтарынан битенә һирпте лә оло үтенес менән тилмергән ҡарашын өҫтөндә ултырған «мәмерйә бүреһе»нә, ә хәҙер инде үҙенең әжәленә, төбәне.

— Был рәүешле рәнйетеп, ҡустым, һин мине ни эшләтмәксеһең?

— Бөгөн үк волосҡа алып барып, хөкөм ҡулына тапшырам, һине унда бик көтөп торалар, ти.

— Ҡустым, алла хаҡы өсөн былай эшләмә инде. Ни һораһаң — шул алдыңда булыр. Ошо утарҙан имен-аман таралышайыҡ. Егеүле аттың арбаһына ни теләһәң шуны тейәп ебәрәм, нәфсең туйғансы кәрәк мөлкәтте бөгөн үк барып алып кит. Тик баяғы аш алдында һөйләшкән һүҙҙәрҙе генә онотошайыҡ. Мине тотторoу менән, һин үҙең дә ситтә тороп ҡала алмайһың да баһа. Һине лә шул уҡ бер епкә бәйләйҙәр бит. Һиңә ни кәрәк тағы?

Ахун һулҡылдап илай-илай үҙенең һуңғы үтенесен әйтте.

— Юҡ, ахун. Бушҡа күҙеңдең йәшен әрәм итмә. Үҙ ғүмереңдә һин дә күп ирҙәрҙе илаттың. Бына шуның ҡороһон ҡайтарырға тура килә инде. Илама, әле илай торған көндәрең алдараҡ.

Бер баҡырса һыу тотоп, ҡаҡ битенең тирен һөртә-һөртә һылтыҡлап, Солтанмәхмүт килеп етте. Ахун, башын бороп, үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр күсеренә йәшле күҙҙәрен тултырып инәлеп ҡараны. Уның ҡаҙандай ҡорһағы өҫтөндә йөгөнөкләп ултырып алған Дәүләткирәй, башын күтәреп, ауыҙын йырҙы.

— Ҡустым, һыуыңдың хәжәте юҡ. Хужаң менән һин дә мин дуҫтарса һөйләшеп ултырабыҙ. Һинең ахуның, элек беҙгә күренгәнсә, бөтөнләй йүнһеҙ кеше түгел икән дә баһа, шул тиклем алсаҡ, күңелсәк кеше икән, — тип, ул баҡырса тотоп ғәжәпләнеп торған Солтанмәхмүткә күҙ ҡыҫты. — Тик бына хужаң ҡотолдороуҙы үтенә бит әле. Икебеҙгә лә бик ҙур мөлкәт вәғәҙә итә. Баяғы һөйләгән һүҙҙәрен онотайыҡ, ти бит әле. Нишләйбеҙ?

Солтанмәхмүттән алда ахун яңынан телгә килде.

— Эйе, Солтанмәхмүт, энем... бер-беребеҙгә булған үпкәне онотайыҡ, минең дә хаталар булғандыр инде. Иртәгәнән, тейешле мал-тыуар биреп, мин һине башҡа сығарам.

— Ишетәһеңме, Солтанмәхмүт, ахундың татлы һүҙен?

— Ишетәм. Уның бындай һүҙҙәрен элек тә ишеткән бар, — тине Солтанмәхмүт, баҡырсаһын ергә ултыртып.

— Һуң, нишләтәбеҙ ахунды?

— Нимә менән төптәшәһең? Кәрәк булһа, үҙең эргәһенә мәмерйәгә алып ҡайт, иптәш булыр. Аяҡ-ҡулын бәйләп волосҡа, милиция ҡулына тапшырырға. Бөгөн беҙ уны йәлләп ҡулдан ысҡындырһаҡ, иртәгә коммунистарҙың да, беҙҙең дә баш ҡыйыласаҡ. Мин уға бер тамсы ла ышанмайым.

— Ишеттеңме, ахун? Күсерең ниндәй ҡарар сығарҙы? Бөтә тәнен һелкетеп, ахун иларға кереште.

— Килтер дилбегәне, аяҡ-ҡулын сусанлатмаһын өсөн, шыҡырайтып бәйләп ҡуяйыҡ. Үҙенә лә тынысыраҡ булыр.

Ахунды икәүләп әйләндереп, бөтә кәүҙәһен алты сажинлыҡ ҡайыш дилбегә менән сырманылар. Кәүҙәһе күбәләй булыуға ҡарамаҫтан, ул сәңгелдәктә биләүле ятҡан балаға оҡшап ҡалды. Приклад эләккән биле уға тәҡәт бирмәй һыҙлағанғалыр инде, үҙен әйләндергәндә, ул табалай битен йәмшәйтеп сирып алды, ләкин бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ күрһәтмәне, тик сеңләп илауын ғына белде. Ғүмер буйы бил бөгөп, өнһөҙ-тынһыҙ ошо көнгә тиклем бирелеп хеҙмәт иткән Солтанмәхмүттең ҡулдарын ҡайыра-ҡайыра бәйләүе, тубыҡтарын уның ҡорһағына терәп, йөк тартҡан шикелле, дилбегәне ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла тартып нығытыуы уны бигерәк ғәжәпләндерҙе. Ахырыһы, ҡыҙарып, бөрсөк-бөрсөк тир сыҡҡан йыуан муйынын бер яҡҡа борҙо ла:

— Белмәгәнмен, Солтанмәхмүт, бигерәк ҡанһыҙ кеше икәнһең. Ниндәй генә үстәрең барҙыр инде миндә? Ошо көнгә тиклем үҙем ышанған берҙән-бер кеше хисаплап йөрөгәйнем үҙеңде, — тип шыңшыны.

— Бушҡа күҙең шәмәрмәһен. Барыһы ла элгәрге үҙең ҡылған яуызлыҡтарың ҡоно. Беҙҙе ҡан илатыуың аҙ булманы. Кеше ҡарғышы ебәрмәй ул. Ҡулың менән ҡылғанды иҫең менән күтәрмәй әмәл юҡ, — тип, табанын ахундың ботона терәп, Солтанмәхмүт дилбегәһен нығытты. Ахунды бесән тултырылған септә һымаҡ сырмап бөткәс, уны күтәреп, яңынан утар һикеһенә индереп һалдылар. Солтанмәхмүт ҡарайған һике ҡаҙнаһына ултырып тәмәке быҫҡытҡан Дәүләткирәйгә һораулы ҡараш атты.

— Аттарың ашап хәл йыйҙы. Хәҙер егеп ал да волос-

ҡа сап. Ундағы милиция йортон беләһеңдер бит, бер заман барып та йөрөгәйнең түгелме?

Дәүләткирәй күсергә ҡараны.

— Барғаным бар. Беләм. Шунан?

— Барып инәһең дә бында, утарҙа, ниндәй хәл булғанын түкмәй-сәсмәй милиция начальнигына һөйләп бирәһең. Бер кеше уны утарҙа һаҡлап ҡалды, һеҙҙе хәҙер үҙем менән алып китәм. Ашығығыҙ, килеп етмәһәгеҙ, һуң булыуы мөмкин, тип ҡаты һөйләш.

Дәүләткирәй тағы тәмәкеһен һурҙы.

— Унда беҙҙең ауылдаш та бар ҙа ул. Тик өйҙә булыуы кәрәк. Шунда, волоста, милицияла эшләй. Ахунды ла бик яҡшы белә ул кеше, — тине Солтанмәхмүт.

Күсеренең һүҙен тыңлап ятҡан ахун, һүҙ кем тураһында барғанын һиҙеп, ыңғыраште ла ҡаты көрһөнөп ҡуйҙы. «Теге Хәйрулла тураһында бара инде һүҙ. Элекгән дә беҙҙең арҡа тиреһен нисек тунарға белмәй сәбәп эҙләп йөрөгән кешегә килешә инде, ишеткәс тә сабып килеп етер».

— Ярар, алай булғас мин, аллаға тапшырып, китә башлайым. Көн кискә һарҡты. Нәмәс бына ғына ятҡан ер түгел. — Солтанмәхмүт күҙен тәгәрәтеп ятҡан хужаһына бер күҙ атты ла ҡуҙғала башланы. — Ә һин, ағай, ҡайҙа барырһың? Мин һине ҡайҙан табам? — тип һораны.

— Мин ни ҡайҙа булайым? Ошонда инде. Бөгөн төн буйы үлек көтөп сығам инде. Әгәр инде аҡырып йонсота башлаһа, ауыҙына сепрәк тығып ҡуям, ярауының кесеһе лә, олоһо ла аҫтында булыр. Мин уны сисеп мәшәҡәтләнмәм инде. Бына шул. Бар, юлында бул.

Тиҙҙән тышта утар ихатаһынан сығып киткән тәгәрмәс һәм аттар бышҡырған тауыш ишетелде.

Дәүләткирәй башын баҫып бер аҙ һике йөҙлөгөндә ултырҙы ла сей тиренән тегелгән сарығын сисә башланы. Уның күптән йыуылмаған аяғынан, ҡарайып ҡатҡан сылғауҙарынан утарға әсе тир, серегән ит еҫе бөркөлдө. Еуеш аяҡтарының иҙәндә эҙҙәрен ҡалдырып, ул соланға сыҡты. Асылған ишектең буҫағаһында ултырып, ах-ух итеп башта аяҡтарын, шунан ҡан һылашҡан битен йыуҙы. Аяғының осо менән генә баҫып, өйгә инде лә һикегә ултырҙы. Ян-яғына ҡаранып, битен-ҡулын һөртөргә сепрәк эҙләне. Ҡолаялан өйҙә бер ни ҙә тапмағас, уның күҙенә ҡаҡ таҡтаға ябылған ашъяулыҡ салынды. Ул, һике өҫтөнә менеп, сүкәйеп ултырҙы ла ашъяулыҡтың мөйөшө менән башта битен, унан ҡулын һөрттө.

Күҙенең ҡойроғо менән генә күҙәтеп ятҡан ахун: «Ҡара, берәҙәк булып нисәмә йылдар мәмерйәлә ятһа ла, тәһә-

рәттең рәт-сиратын да әҙерәк белә, мәлғүн. Ярай, ярай, бына хәҙер эргәндә ултырған быжыр сиреклеңән берәй сеүәтә тәхел шарабы һалып тондорһаң, тағы шул мәмерйә бүреһенә әйләнмәй ҡайҙа барһын», — тип уйлап алды.

Ләкин эш ул көткәнсә булманы. Дәүләткирәй, ашъяулыҡ ҡырына йөгөнөкләп ултырҙы ла, кеҫәһенән салғы бәке сығарып, ҡалған итте ваҡ ҡына киҫәктәргә тураны. Икмәк киҫәген һындырмай, тотош көйө ҡулына алып, ауыҙ эсенән генә бисмиллаһын әйтте лә әҙәпле генә көйшәнергә тотондо. Күҙ ҡыҙҙырып эргәһендә ятҡан быжыр шешәгә оронманы ла, киреһенсә, уны ситкә этәреп, ахундың ҡамсат бүрке менән ҡаплап ҡуйҙы.

Бер-ике киҫәк ит ҡапты ла, Дәүләткирәй тәпәш тәҙрәгә эйелеп, тышҡа ҡараны. Ҡояш Ирәндек ашаһына йәшенде. Өй эсен эңер ҡараңғылығы сорнай башлағас, сыуал тәңгәлендәге түшәм тишегенә тығылған сепрәкте алып, ут яғырға уйланы. Ләкин, икеләнгән шикелле, иҙән уртаһында байтаҡ ҡына баҫып торҙо. Аҫтан күҙен тәгәрәтеп ятҡан ахунға боролдо.

— Бөгөн ауылдан һинең пүнәтәйҙәр килеп сыҡмаҫмы? Көтөрҙәр-көтөрҙәр ҙә, һин ҡайтмағас, саптырып килеп етеүҙәре лә бар.

Ахун ебегән танауын мырш-мырш тартып алды.

— Этем йөрөһөнмө минең арттан? Балалар өйҙә юҡ, әрәмтамаҡ абыстайҙарға минең өйҙә булмаған көн — ҡорбан ғәйетенән дә ҙурыраҡ байрам. Үпкәләрен йөҙҙөргәнсе ләпелдәшеп, көн буйы сәй эсәләр. Ҡалай ҙа рәхәт. Оҙағыраҡ ҡайтмаһа ярар ине, тип ҡапҡаны бикләп ҡуйғандыр инде улар, бәдбәхеттәр.

Дәүләткирәй йөгөнөкләп ултырып сыуалға ут тоҡандырҙы. Сытырлап ҡыҙып яңа башлаған ҡайын утын ялҡыны уның ҡара янған битенә эҫе бөрктө. Ул, быуындарынан кәкрәйә башлаған бармаҡтарын йәйеп, ут өҫтөнә тотоп алды. Бөтә тәненә йомшаҡ йылы йүгерҙе. Шулай үҙ мәмерйәһендә лә ут яғып, уға оҙаҡ ҡына текләп, уйланып ултырырға ярата шул. Ут яҡтыһы, бөтә тәнде иркәләгән усаҡ йылыһы уның күңелендә әллә ни төрлө нескә хистәр уята, фәҡирлектә үткән ҡуңалтаҡ тормошо күҙ алдына килеп баҫа, сейәлгән еп һымаҡ сырмалсыҡ уйҙар уның мейеһен ҡайната башлай. Ошондай саҡтарҙа, түмәр өҫтөндә ултырып ут яҡтыһында ашыҡмай ғына ләззәт менән тәмәке тартыуҙан кинәнес таба. «Ҡарышҡан шикелле, бөгөн мынау үлән тәмәкеһе лә бөттө бит, хәйерһеҙ».

Дәүләткирәй керләнгән кисетен әйләндереп, уның саңын янып ятҡан ут өҫтөнә һелкте. Шул тәмәке саңы менән ҡуша башын сорнай башлаған бошонҡо уйҙар ҙа янған

кеүек тойолдо. Урынынан тормай ғына башын артҡа борҙо ла:

— Ҡара уны, ахун, әгәр һинең ҡойроҡтарың килеп сығып, бында бола һала башлаһалар, мин һине барыбер улар ҡулына тоттороп ебәрмәйем. Иң башта һине атып үлтерәм. Уны мейеңә һалып ҡуй, ә тағы ни эшләргә икәнен мин үҙем белермен, — тине.

— Ҡолаҡҡа яҙмаған хәбәр һөйләп ултырғансы, ахун ағанды әҙерәк ашатып-эсереп алыр инең. Ҡорһаҡ та асты, тәҡәт бирмәй тамаҡ ҡатты.

— Ярар, ашамайыраҡ тор әле. Ошоға тиклем бөтә мирҙе ашап йөрөгәнең дә етер. Ас ятһаң, аҫтың таҙараҡ булыр, тәһәрәтең һынмаҫ, — тине Дәүләткирәй, ауыҙынан һәлпәйеп төшкән мыйыҡтары аҫтынан йылмайып.

— Эт, дуңғыҙ, игелекһеҙ кафыр! Ошо бәйелең аҙыуы ҡара башыңа ғына булһа ярар ине, — тип, төкөрөнә-төкөрөнә ярһып алды ла ахун тынып ҡалды.

Дәүләткирәй обрезын алып тышҡа сыҡты. Һайғау өҫтөнә башын ҡуйып, тирә-йүнде тыңланы. Яҡында ғына ахундың көтөүҙә йөрөгән йылҡы өйөрөндә бышҡырған, ат кешнәгән тауыш ишетелде. Ситтәрәк бейә муйынына тағып ҡуйған ҡыңғырау сыңлап тауыш бирҙе. Ни эшләптер көтөүсенең бер ниндәй шипкерте лә һиҙелмәне. «Йә утар түбәһенән сыҡҡан төтөндө күреп, төнгә көтөүсе сабып килеп етер». Дәүләткирәй мөрйәгә ҡараны, ләкин сыуалдағы ҡайын утын төтөнһөҙ генә янды. Уның башының осонан ғына ҡаптырлап ике һуйыр осто. Ҡиске һунарға сыҡҡан өкө тауышы ишетелде. Утар алдында тирәктәргә ҡунған һандуғастар ҙа кем уҙарҙан сутылдашып төрлө көйгә һайраштылар ҙа уларҙы тыңлап торған кеше менән хушлашҡан һымаҡ, тубы менән ҡайҙалыр Ирәндек башына остолар.

Ул өйгә йүнәлде. Утар соланы ишегенә арҡыры ағас һалды, өй ишеген йым ябып, келәһен элде лә һүнеп барған ут яҡтыһында обрезының магазины һауытынан алған патрондарҙы салғыйын ҡайтарып һөрттө. Ҡеҫәһенән бер төргәк сығарып сискәс, бер-береһенә шыҡылдап бәрелеп ятҡан осло әйберҙәрҙе хисаплап яңынан төрөп, кеҫәһенә һалды. «Патрондарын һанап ултыра, хәсис», — тип уйланы ахун. Эйе, ул яңылышманы. Дәүләткирәй төнгә ҡаршы патрондарын барлап сыҡты. Шунан, баҫып, бөтә һөйәктәрен шығырлатҡансы керелде лә:

— Атышырға була. Егерме биш патрон бар әле, — тип һикегә менде.

Башта сисенергә лә уйлағайны, ләкин шул көйө генә ятырға булды, ахыры, ҡулын баш аҫтына һалып, һикегә

һуҙылды. Обрезын, үҙ балаһын күкрәгенә ҡыҫҡан әсә шикелле, тиртуны эсенә тыҡты.

...Таң һарыһы беленә башлағанда сырымға ғына киткәйне, ишек шаҡыныла. Дәүләткирәй, обрезын тотоп, соланға сыҡты. Ҡалтыранған тауыш менән:

— Кем бар унда? — тип һораны.

Тышта бер нисә кешенең аяҡ тауыштары, әкрен генә һөйләшкәндәре ишетелде.

— Волостан! — Ҡалын тауышлы кеше шулай яуап бирҙе.

Дәүләткирәй, затворын шылтыратып, көбәктәге патронын сығарҙы ла яңынан кертеп ҡуйҙы. Килгән кешеләр төрләһе төрлө яҡҡа таралышты.

Баяғы кеше ситтәнерәк тағы өндәште·

— Әгәр ут асырға уйлаһаң, ҡара уны, Дәүләткирәй, икегеҙҙе лә юҡ итәм. Утарығыҙҙың көлөн күккә осорорбоҙ. Ҡоралыңды һерәндәтмә.

Дәүләткирәй, күҙ яҙлыҡтырырға теләп, соландың икенсе урынынан:

— Солтанмәхмүт ҡысҡырһын, мин һеҙгә ышанмайым,— тине.

— Ағай, ас. Буш менән булма. Волостан милиция алып килдем, ғауға сығарып маташма, — тине Солтанмәхмүт.

«Күмәк булһалар ҙа, шөрләйҙәр, ахырыһы», тип уйланы Дәүләткирәй. Соландың типкеһен шым ғына ысҡындырҙы ла өйөлөшөп торған кешеләрҙең аяҡ аҫтына үҙенең обрезын ырғытты. Был хәлде көтмәгән волость кешеләре бер аҙ ҡаушап ҡалды, араларынан мыҡтыраҡ кәүҙәлеһе Дәүләткирәйгә ташланды, ләкин ул бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ күрһәтмәй, улар ҡулына үҙ ихтыяры менән бирелде.

— Нимә шул тиклем ҡулды шаҡараһығыҙ? Мин һеҙҙең ҡайышығыҙға ҡулдарҙы үҙем һоноп торам да инде, — тигән булды ул.

Яңы ғына сырымға киткән ахун, һуңғы доғаһын уҡып, теләһә нәмәгә әҙер ята ине инде. Уны күтәреп көймәгә һуҙып һалдылар ҙа төн йөрөп сыҡҡан үҙ аттары менән Нәмәскә оҙаттылар. Эргәһенә ҡулдары бәйләнгән Дәүләткирәйҙе ултырттылар.

— Ахундың тройкаһында, үҙе менән ҡушарлап, бер ҡататса итеп ҡалайыҡ әле, — тип мәрәкәләне уныһы.

Волостан килгән кешеләр ситкәрәк китеп ниҙер кәңәшләштеләр ҙә, ҡулдарын сисеп, Дәүләткирәйҙе ҡузлаға ултырттылар.

— Бына һиңә дилбегә, ахун аттарын йәлләмә. Улар өсөн алтмыш саҡрым ара түгел, әле улар яңы ғына яҙыл-

дылар, әйҙә, Нәмәскә ҡарай юл тарт, — тип бойорҙо әлеге мыҡты кеше.

Дәүләткирәй был һүҙгә ышанмайыраҡ ян-яғына ҡаранды.

— Ҡаранма. Әйҙә, ҡуҙғал. Ҡурҡма, артыңдан һыбайлы һаҡсы барасаҡ. Ҙур хөрмәт менән Нәмәскә барып инәсәкһең, — тип атына менеп маташҡан икенсе милиционерға ымланы.

Был әмерҙе биреп тороусы кеше ахундың ауылдашы ғына түгел, ут күршеһе, хәҙер волоста милицияла хеҙмәт иткән Хәйрулла ине.

— Йә, ярай, хәйерле сәғәттә. На-а, хайуандар!

Ахун көймәһе Нәмәс юлына төшөп китте.

Иртәнге сәйгә дүрт һыбайлы Ялан ауылына килеп төштө. Был ауылдан бер нисә көн элек Ғәлимйән хажи өйөндә ошо яуызлыҡ хаҡында кәңәш ҡороуҙа ҡатнашҡан Маннап хәҙрәтте, Ғәйнулла байҙы, Фәйзулла хажиҙы, Мөхәмәтрәхим мулланы, Ғәлимйән хажиҙы ҡулға алдылар.

Мулла өйөндә ғауға ҡупты. «Ҡамсамулдарҙың йәнен ҡыям», тип кистән кырандас тәгәрмәстәрен майлап, ҡамыт-ыңғырсағын юлға йәтешләп ҡуйған муллаға ғүмерендә беренсе тапҡыр үҙ арбаһына ат егергә ҡуштылар. Уға ярҙамлашырға унда-бында һуғыла башлаған Ғәбделбарыйҙы ат эргәһенә яҡын да ебәрмәнеләр. Парлап ат еккәнсе, мулла манма тиргә төштө. Ул, ситекле аяҡтарын күтәреп, тамаҡ бауын тарта алмай этләнде, ләкин уның ат еккәнен тамаша итеп ҡарап торорға ваҡыт тар булып сыҡты.

Мулланың ҡапҡаһы төбөндә халыҡ йыйыла башланы. Аттарҙы Солтанмәхмүткә егеп бөтөрөргә тура килде. Ошо ығы-зығынан файҙаланып, мулла һиҙҙермәҫтән генә алдарында йөрөгән бер ҡыҙҙы Ғәлимйән хажиға йүгертте. «Бар, һәләт кенә хажиға барып әйт, мулла ағайымды ҡулға алдылар, хәҙер һиңә киләләр, тиген. Әгәр форсаты булһа, тайыу яғын ҡараһын».

Ләкин көн дә тиерлек үҙенең ҡулға алыныуын көтөп ятҡан Ғәлимйән хажи волостан килгән кешеләрҙе үҙенсәрәк ҡабул итте. Килгән милиционерҙар ҙа хажиҙың кем, ниндәйерәк кеше икәнен алдан белгәнгә күрә, һаҡлыҡ сараһын күрергә тырышҡайны. Ҡапҡа төбөнә бер ҡораллы милиционер, ишек төбеңә Хәйрулланы ҡуйып, милиция начальнигы Ғәлимйәнде ҡулға үҙе алырға уйланы. Ҡабырғаһындағы ҡылысын төҙәтеп, наганының һабы менән тырпайған мыйыҡтарын һыпырып алды ла ишек шаҡыны. Өй эсенән ҡалын, тонок ҡына тауыш ишетелде.

— Рөхсәт, рөхсәт, рәхим итегеҙ!

Алғы бүлмәне үтеп, милиция начальнигы күрнәсәгә атланы. Ишектән башын тығыу менән яҡтауға тайпылды. «Ни эшләргә?» Ул ишекте асыуға, өҫтәле артында ярым хәрби кейем кейгән Ғәлимйән хажи, бер ҡулына хаждан алып ҡайтҡан алтатарын тотоп, икенсеһе менән көмөш рюмканан араҡы эсеп ултыра ине. Былдай хәлде көтмәгән милиция начальнигы ҡойолоп төштө. Өй эсендә атышыуҙы кәрәкһеҙ һанап, ул ишек аша һөйләшергә булды.

— Һин, хажи, алйотланма, анауы нәмәңде иҙәнгә ырғыт, аҙағы насар бөтөр! — тип ҡысҡырҙы.

Ғәлимйән эстән тыныс ҡына яуап бирҙе:

— Эй, һармаҡ, нимәгә шул тиклем ҡотоң осто? Атмам, атмам, ҡурҡма. Батырға батыр кәрәк, миңә һинең эше ҡурҡаҡ ҡуяндың йәне хәжәт түгел. Әйҙә, ин!

Милиция начальнигы, наганын алға һоноп, ике яҡҡа асмалы ишеккә аяғы менән типте лә эскә атланы.

— Ҡулыңды күтәр, хәҙер юҡ итәм!

Ул ауыҙынан, танау тишектәренән сыҡҡан күгелйем тәмәке төтөнөн алтатарлы ҡулы менән ҡыуып маташҡан Ғәлимйәнгә екерҙе.

Ә уныһы бер ҙә иҫе китмәй генә:

— Ниңә ҡурҡышыңдан шул тиклем көсәнеп һөрәнләйһең? Бында һаңғырауҙар юҡ, — тине лә рюмка төбөндәге араҡыһын эсеп бөттө. — Һин башта мосолманса сәләм бир, йомошоңдо һөйлә.

Милиция начальнигы ялындырып торманы, яңынан ер ярырҙай булып аҡырҙы:

— Әссәләмәғәләйкүм, хажи.

— Вәғәләйкүмәссәләм. Бына быныһы, по крайней мере, мосолманса. Йә, маңҡа, ни йомош?

Милиция начальнигы эсендә ҡайнаған асыуын белдермәҫкә, нисек тә эште ҡатмарлаштырмай, тыныслыҡ һаҡларға тырышты, йәшел френч кеҫәһенән дүрткә бөкләнгән ҡағыҙ сығарып, уны хажиға һуҙҙы.

— Хажи ағай, кантон пыркарурынан һине ҡулға алыу хаҡында ордер бар.

Ҡобаралары осоп, танау тишектәре киңәйеп ағара башлаған хажи, ҡапыл урынынан һикереп торҙо ла:

— Пш-шол мынан, эт ҡойҡаһы! — тип аҡырҙы.

Милиция начальнигы уның екеренеүенән генә ҡурҡып тора торғандарҙан булмай сыҡты. Наганын кабураһына тығып, ул етди аҙымдар менән өҫтәл эргәһенә атланы.

Былдай ҡыйыулыҡты көтмәгән хажи бер генә секундҡа ҡаушап ҡалды. Начальниктың туп-тура уға ҡарап ат-

лауы үҙенең уҫаллығы, яһиллығы тураһында легендалар таралған хажиҙы ғәжәпкә ҡалдырҙы.

— Ниңә, әллә аяҡ-ҡулды бәйләргә самаң бармы? Уныһы инде, бигәйбә, ҡустым. Ошо йәшкә етеп минең аяҡ-ҡулды бәйләргә берәүҙең дә хәленән килгәне юҡ ине, әллә һин самалап ҡарарға булдыңмы?

— Ниңә, бик тә баш бирмәй ҡаршылаша башлаһаң, бәйләп тә ҡуйырбыҙ. Аяғың тышалмай бик оҙаҡ йөрөнөң, аяҡтарыңа бығау һалырға ла була.

Хажи, йөҙөнә бер аҙ тыныслыҡ билдәләре йүгертеп, ултырғысының һыртына һөйәлде.

— Тик, ҡустым, һин түгел. Мә, папирос тарт, кәрәк икән, әҙерәк төшөрөп тә ал.

Начальник уның өҫтәле эргәһенә килеп папирос ҡабыҙҙы ла уға ҡаршы урынға ултырҙы. Һуғышырға әҙерләнгән ике әтәс шикелле, был икәү керпектәрен дә ҡаҡмай текләшеп ултырҙылар.

Хажи ҡапыл урынынан торҙо ла:

— Бар, үҙ йомошоңда бул! Мин ике сәғәттән Нәмәстә булырмын! — тине бойорған төҫлө.

Бындай яуапты көтмәгән начальник икеләнеберәк ҡараны.

— Әгәр берәй яҡҡа һыҙһаң?

— Һыҙмам, һыҙмам. Былай ҙа эшегеҙ күп, мин һиңә мәшәҡәт яһамам.

Хажи яңынан рюмка тултырҙы.

Дүрт һыбайлы ҡарауылы аҫтында ылау Ялан ауылынан Нәмәскә юл тотто. Яғалса тауына етерҙән алда саңтуҙан туҙҙырып килгән бишенсе көймә күренде. Был Нәмәскә ашыҡҡан Ғәлимйән хажи ине. Ул ылауҙарҙы тапап тигәндәй уҙып китте лә волостың милиция идаралығына килеп туҡтаны. Арттағы арбала Солтанмәхмүт менән бергә Ғәбделбарый ҙа, Абдрахман да бар ине.

*(Беренсе китап бөттө.)*

## *МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫ!*

Бына романымдың аҙаҡҡы һөйләменә, һуңғы нөктә төртөп, һинең хөкөмөңдө көтәм... Әҫәрҙе башта «Ҡыҙыл буйҙарында», тип нарыҡлағайным, ләкин әҙәбиәтебеҙҙә йылға «буйҙары» төрлө «үрҙәр» кеүек баштарҙың йыш ҡабатланыуын иҫкә алып, «Ысыҡтан әйелә ҡылған» тип атарға булдым.

Роман тип аталырға хаҡлы әҙәби әҫәрҙең бик еңел генә донъяға сыҡмауы күп әҙиптәр өсөн мәғлүм. Эш шунда: мин был күләмле генә тәүге әҫәремә ҡәләм тибрәтә башлағас та тотонғайным. Әҙәбиәттә бындай етди аҙым, тәүәккәллек аҡ ҡағыҙға яңы ғына хәреф төшөрә башлаған кешенең уны алда ниҙәр көткәнен, берәһенән-берәһе ауырыраҡ күпме баҫҡыстарҙы самалай алмауынан килеп сығалыр, тип уйлайым. Мәгәр бындай башлап яҙыусы ғүмерендә беренсе күрең, киңлеген, тәрәнлеген һәм төбөндә ниҙәр ятҡанын белмәйерәк ярҙан йылғаға ташланған кеше менән бәрәбәр. Ә һыуға сумғас, тәбиғи, йөҙөп сығыу сараһын табыу мотлаҡ, үҙеңдә көс, ихтыяр таба алаһың икән, ары китәһең, ә инде хәлең булмаһа, ырғыған ярыңа кире әйләнәһең.

Минең менән дә шундайыраҡ хәл булды.

Әҫәр беренсе тапҡыр 1985 йылда Яҙыусылар союзының проза секцияһында тикшерелде. Ләкин уның роман дәрәжәһенә дәғүә итерлек яҙма булмауы миңә ул замандарҙа бик томанлы ине шул. Күкрәк тыны тик алға атлағанда ғына асыла. Күп иптәштәрҙең, танылған яҙыусыларҙың кәңәштәрен иҫәпкә алып, романды камиллаштырыу йәһәтенән ныҡ ҡына эшләргә тура килде. Әйткәндәй, тормошта бер ниндәй нәмәне лә аҙағына тиклем, урын-еренә еткереп башҡарып

булмай. Теләһә ниндәй эштең дә камиллашыу офоғо сикһеҙ, шулай булмағанда, алға ынтылыш та, тормош та булмаҫ ине.

Йәнә килеп, китапты ҡулына тәүге алған уҡыусы башында: «Ошондай ҡатмарлы, йәмғиәтебеҙҙең үткәнен тыҡрыҡ һайын тәнҡит уты аҫтына алып ятҡан заманда, ниндәй һуң әле мул ғына тормош тәжрибәһе туплаған автор үткән ҡәһәрле юлға байҡау яһамаҡсы булған?» — тигән һорау тыуыуы мөмкин. Аҙ ғына сабыр ит, ҡәҙерле уҡыусым, хәҙер аңлатып үтәм.

Нисек кенә үткәнебеҙгә төкөрөп ҡарамайыҡ — ул беҙҙең тарих, оло ҡыйынлыҡтар, ҙур ҡорбандар аша беҙ артылған үрҙәр. Уны һис кенә лә тарихтан юйып ташлап булмай. Октябрь революцияһынан башлап беҙҙең йәмғиәтебеҙ, шул иҫәптән, әҫәрҙә һүҙ барған төбәктә лә халыҡ тәүге аҙымдарын ошо ауыр һуҡмаҡтар аша атлаған. Бында бер ниндәй ҙә бармаҡ осонан һурып сығарылған хәл-ваҡиға юҡ, барыһын да беҙ үҙ елкәбеҙҙә, үҙ яҙмышыбыҙҙа кисергәнбеҙ. Әҫәрҙә һүрәтләнгән шәхестәр, күренештәр барыһы ла күреп-белгән, ишетелгән факттарҙан ғибәрәт. Әлбиттә, быға авторҙың художестволы төҫмөрләүен, тасуирлауын, ә ҡайһы бер осраҡтарҙа үҙ фантазияһын өҫтәүен дә иҫәпкә алырға кәрәктер. Шунһыҙ художестволы әҫәр тыумай.

Бөгөнгө сәйәси тәнҡит үткән тарихыбыҙ тураһында, йәнәһе лә, беҙҙең йәмғиәттә бер ниндәй ҙә синфи көрәш булмаған, был концепция йәнәһе лә большевиктар партияһы ғына уйлап сығарған сәйәси тәғлимәт, ул тик йәмғиәтте етәкләгән интеллигенцияның алдынғы вәкилдәрен, йәмғиәт ҡоролошоноң умыртҡа һөйәген тәшкил иткән кулак-байҙар, алпауыт-капиталистар синыфын юҡ итеү өсөн генә барлыҡҡа килгән яһалма сара, тип иҫбат итергә тырыша. Ләкин иҙеүселәр менән иҙелеүселәр араһындағы ҡаты синфи көрәш быуаттар буйына дауам иткән сәйәси күренеш бит. Ул Октябрь революцияһы йәки большевиктар ғына уйлап сығарған теория түгел. Сөнки бай менән фәҡир, капиталист менән эшсе сәйәси яҡтан ғына түгел, бигерәк тә иҡтисади йәһәттән бер ҡасан да тигеҙ булмаған һәм булмаясаҡ та. Был ҡапма-ҡаршылыҡты айырата капитализм ижтимаги-сәйәси ҡоролошо ҡырҡыулаштыра. Рәсәй батшалығының ситтәрендә ятҡан, капитализм үҫеше әле етерлек тиклем ҡолас алмаған милли төбәктәрҙә, атап әйткәндә, Башҡортостандың Урал аръяғында, Октябрь революцияһынан һуңыраҡ та синфи дифференциация башҡа тарафтарҙағы кеүек етди төҫ алмай. Урындағы халыҡтың көнкүреше ҡәбилә, ырыу ҡоршауҙарынан тиҙ генә ысҡына алмай, элекке ғөрөф-ғәҙәттәр, шәриғәт ҡанундары ҡуласаһы гирәһендә әйләнә. Ауылдың рухи йөҙөн хәлфә, имам-хатиптар, хажиҙарҙың Ҡөрьән-Кәримгә нигеҙләнгән быуаттар буйына тылҡылған өгөт-нәсихәте, вәғәздәре тәшкил итә. Романға ҡағылышлы ҡайһы бер иптәштәр, әҫәрҙә һүҙ барған ул саҡтағы башҡорт ауылдарында руханиҙарҙың, мулла-монтағайҙарҙың күплегенә иғтибар иттеләр. Автор фекерләүенсә, ул замандарҙа башҡаса булыуы ла мөмкин түгел ине. Капиталистик менә-

сәбәттәр тик морон төртөп килгән саҡтарҙа башҡорт ауылдарында башҡа төр интеллигенция вәкилдәре, әйтәйек, инженерҙар, врачтар, белемле юристар, агрономдар һ. б. коммерция белгестәре юҡҡа хисап ине һәм уларға ул тиклем етди зарурлыҡ та булмаған. Шулай булғас, романдағы рухани вәкилдәренең йышыраҡ күренеүе тәбиғиҙер ҙә, тип хисаплайым.

Яңы иҡтисади сәйәсәт бигерәк тә беҙҙең Урал аръяғында үҙенсәлерәк шарттарҙа үткән. Тағы ла шуны әйтеп китеү артыҡ булмаç — ғөмүмән, ул осор сәйәси матбуғат тарафынан ғына түгел, художестволы әҙәбиәт тарафынан да бик йомшаҡ өйрәнелгән. Ул осор үҙенең ниндәйҙер яҡтары менән бөгөн беҙ кисергән ҡатмарлы иҡтисади реформаларға ауаздаш. Айырма тик шунда ғына: әгәр ҙә 1922—1929 йылғы хөкүмәт контроле аҫтында үткәрелгән иҡтисади сәйәсәт ауылдың етештереү көстәрен генә түгел, бөтә халыҡ хужалығын һанаулы ғына йылдар эсендә аяҡҡа баҫтырыуға, халыҡтың күпселек өлөшөнөң тормош кимәлен яҡшыртыуға килтерһә, бигерәк тә ауыл халҡын бөлгөнлөккә төшөрмәү маҡсатында тейешле кәртәләр ҡуйһа, бөгөнгө реформа үҙенең бойондороҡһоҙлоғо, аяуһыҙлығы менән ҡырҡа айырылып тора. Тимәк, был капитализмға табан йүнәлеш, хеҙмәт кешеһенә төрлө яҡтан баҫым яһау, талау йәмғиәтте ҡыҫҡа ғына мөҙҙәт эсендә етди поляризацияға килтереүе мөмкин. Уның бер нисә процент тәшкил иткән әҙселеге үҙ ҡулдарында бихисап байлыҡ туплар, рәхәт ғүмер һөрөр, ә халыҡтың ҡалған күпселек өлөшө фәҡирлеккә, бөлгөнлөккә дусар булыр. Был — капитализмдың ҡотолғоһоҙ юлдашы, уның үҫеш законы. Уның башҡа төр юлы юҡ. Берәүҙәр алтын ямғырында ҡойонор, ә күпселек халыҡ уларға бил бөгөп эшләр, уларҙың байлығын, мөлкәтен арттырыр.

Социалистик йәмғиәттең бөтә төҫө тик дегеткә генә буялмаған икәнен, уның да күп саралары эшсән массалар файҙаһына йүнәлтелгән булыуын беҙ тик йәмғиәттең бөтә тармағында ла һөжүм итеп килгән капитализмдың иртәгәһенән күрербеҙ.

Тәү башлап капитал туплаған йәмғиәттең аяуһыҙлығы, ҡомһоҙлоғо тураһында яҙылған тәғлимәттәр беҙҙең барыбыҙға ла яҡшы мәғлүм. Бына беҙ ошо ҡатмарлы, ауыр осорҙо кисерәбеҙ. Мин ораҡул да түгел, күрәҙәсе лә түгел, ләкин капитализм ҡоролошоноң тышҡы ялтыр фасадына ҡарап, уның тик эксплуатацияға, «бүлеп ал да хакимлыҡ ит» тигән принциптарға нигеҙләнеүен, уның төбөндә ятҡан синфи ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы инҡар итеү — бөгөнгө ошо сәйәсәтте яҡлаусыларҙың иң ҙур хатаһы. Әллә ни күп ваҡыт та үтмәç, киләһе быуын бөгөн «ҡушҡуллап» ҡаршы алып торған капитализмдың «матурлыҡтарын», уның төп асылын үҙ елкәләрендә татыр.

Үҙемдең һеҙгә тәҡдим иткән әҫәрҙә шул осорҙа үткәрелгән яңы иҡтисади сәйәсәттең механизмдарын, башҡорт ауылдарында киң ҡолас ала барған синфи көрәштең үҙенсәлектәрен хәл ҡәҙәре асып бирергә тырыштым. Был — ата-бабаларыбыҙҙың башынан үткән тарихы. Үткәнде инҡар итеп, уға уҡ атыу — киләсәкте үлтереү тигән һүҙ.

Быңдай романдың донъяға сығыуына уҡыусылар тарафынан мөнәсәбәт бер яҡлы ғына булмаясағын да автор аныҡ күҙ алдына килтерә. Ҡайһы бер иптәштәрҙә Октябрь революцияһының барлыҡ һөҙөмтәләре селпәрәмә килеп ятҡан осорҙа «быңдай большевистик романдың кемгә хәжәте булды икән?» тигән фекер ҙә тыуыуы мөмкин. Был бөгөнгө күҙлектән, бөгөнгө манара бейеклегенән ҡарағанда, ысынлап та, шундай фекер йөрөтөргә нигеҙ бирә. Ләкин үҙебеҙҙең үткән тарихты бөкилле инҡар иткән хәҙерге концепцияға таянып, автор үткән быуындар үҙ башынан кисергән ысын тарихты яңынан үҙгәртеп, күсереп яҙа алмай. Нисек кенә ҡатмарлы, ҡәһәрле булмаһын, ул — беҙҙең быуын кисергән тормош һабағы. Романдың һуңғы битенә күҙ һалһағыҙ, унда йәйә эсендә «Беренсе китап бөттө» тигән һүҙ теркәлгән. Әгәр ғүмер булып, насип иткән булһа, большевизмдың ил өҫтөнә килтергән һәләкәттәре һәм йәмғиәткә һалған яралары тураһында ла яҙылыр. Ләкин был осраҡта ла яҙыусы үткән тарихты бөтөнләйе менән ҡара һөрөмгә буяу яғында түгел. Уның быуындар хәтерендә уйылып ҡалған сыуаҡлы саҡтары ла булды. Быңың барыһын да йәмғиәтебеҙ капитализм ҡоршауы менән тамам тоҙаҡланғас, беҙ бәйнә-бәйнә үҙ иҫебеҙгә төшөрәсәкбеҙ. Беҙҙе упҡынға алып барған капитализм йәмғиәте әҙәм ожмахы булһа, уға ҡаршы быуаттар буйына меңдәрсә ҡорбандар биреп, кешелектең иң алдынғы вәкилдәре аяуһыҙ көрәш майҙанына сыҡмаған булыр ине. Етмеш йылдан артыҡ илдә хакимлыҡ иткән тоталитар режимдың был ауыр юлдағы ебәргән ҙур-ҙур сәйәси һәм иҡтисади хаталары, шуның арҡаһында килтерелгән миллионлаған ҡорбандар, билдәле, һис тә оноторлоҡ түгел, ләкин нисек кенә булмаһын, ғәҙеллекте алға һөргән социалистик идея — ул ҡеүәтле һүнмәҫ тәғлимәт.

Бына шуларҙы иҫәпкә алып, ауырлыҡтар, икеләнеүҙәр аша тыуған романды һеҙгә тәҡдим итергә баҙнатсылыҡ иттем.

*Рамазан Өмөтбаев*

Литературно-художественное издание

*Уметбаев Рамазан Гимранович*

**ГНЕТСЯ КОВЫЛЬ ПОД РОСОЙ**

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире *С. Шәрипов*
Редакторы *Р. Дәүләтҡолов*
Художество редакторы *И. Файрушин*
Техник редакторы *Ф. Ғәйфуллин*
Корректорҙары *Ә. Хажиева, Р. Хафизова*

